Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 1

# АҒИҘЕЛ

Өфө,
ғинуар
2009

1 (1030)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республика ы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

Agidel 1:Agidel 1.qxd  13.04.2009  23:10  Page 2

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Роберт БАЙЫМОВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаçары),*
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ,
Фәнил ҠОҘАҠАЕВ,
Ноғман МУСИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире),*
Әмир ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Харис Сәғитов *(хужалыҡ эштәре буйынса баш мөхәррир урынбаçары)*,
Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип),*
Тамара Ғәниева, Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррирҙәре),*
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир),*
Зилә Йәнбәкова, Рүзилә Саптарова *(корректорҙар),*
Рәйсә Камалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар),*
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе),*
Рима Нәзифуллина*,* Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар).*

Журнал Башҡортостан Республика ының Матбуғат  әм киң мәғлүмәт министрлығында
1992 йылдың 10 декабрендә теркәлде.
Таныҡлыҡ № 646.

---

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды  әм биттәргә  алынды.
Баçырға ҡул ҡуйылды 11 .01. 2009. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитура ы.  Офсет ысулы менән баçылды.
Шартлы баçма табаҡ 15,6. Иçәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 5 200 экз.  атыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0001.09.

---

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республика ы,
Өфө ҡала ы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакция ы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http:// www. jurnal-agidel. narod.ru.

---

Баçма Матбуғат  әм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль
агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

---

Башҡортостан Республика ының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятие ында баçылды.
(450001, Башҡортостан Республика ы,
Өфө ҡала ы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в ГУП РБ «Уфимский полиграфкомбинат»
(450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, пр.Октября, 2).

---

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р /с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

©«Ағиҙел», 2008 (1, 1030)

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 3

# БЫЛ АНДА:


СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Роберт Байымов.** Каруан килә Бағдадтан.
Тарихи-документаль роман. Башы. ..................................5

ШИҒРИӘТ

**Кәтибә Кинйәбулатова.** Ғүмер түгел, бер көн үткәндәй...
Шиғырҙар. ........................................................................65
**Мөхәммәт Закиров.** Таныуҙары ҡиммәт. Шиғырҙар. ...............68
**Зө рә Алтынбаева.** Ҡайҙа минең Та ирым?! Шиғырҙар. ..........73

САТИРА ӘМ ЮМОР

**Мар. СӘЛИМ.** Сатирик пенсия-ха сы-ха-ха!
*(Автопародия, йәғни үҙеңдән үҙең көлөү).* ........................................77

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Әнғәм Хәбиров.** Үҙенә тоғро шағир *(Марат Кәримовтың яңы быуат башындағы ижадына бер ҡараш).* ..................................88
**Тамара Ғәниева.** Шағир ыҙ милләт буламы? ...............................104

ҠӘЛӘМДӘШТӘР ТӨҪӨ

**Фәрзәнә Аҡбулатова.** Яҡтылыҡ. ...................................................117

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Миңлеғәли Нәҙерғолов.** Мәғрифәт саҡсылары
*(атаҡлы ғалим әм әҙип Ризаитдин Фәхретдиновтың тыуыуына 150 йыл тулыу уңайынан).* ...........................................132
**Гөлфирә Гәрәева.** Саңҡыны бөркөт булып...
*(Әмир Чаныштың тыуыуына 100 йыл).* .........................................138
**Рәмзиә Мостафина.** Әҫәрҙәре – тере шишмәләр
*(Баязит Бикбайҙың тыуыуына 100 йыл).* ......................................141

ТЕЛ ХИКМӘТТӘРЕ

**Рәшиҙә Ғиззәтуллина.** Башҡорт, ҡурай әм йога. ........................147

ПУБЛИЦИСТИКА

**Ризван Хажиев.** Көрәшкә ҡоролған тормош
*(Күренекле педагог Ильяс Вәлиевҡа 60 йәш).* ................................156
**Хәмит Нәбиев.** Йылдар аша тапты рухы тынғылыҡ . ....................169
**Тәнзилә Дәүләтбирҙина.** Тарих биргән абаҡ
*(Башҡортостан Китап палата ы ойошторолоуға 80 йыл).* ..........179

“АҒИҘЕЛ”ГӘ ХАТТАР КИЛӘ

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

2009 ЙЫЛҒЫ ЮБИЛЯРҘАР

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 4

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПРОЗА

**Р. Баимов.** Шел караван из Багдада *(документально-исторический роман).* Начало.

ПОЭЗИЯ

**К. Киньябулатова, М. Закиров, З.Алтынбаева** *(стихи).*

САТИРА И ЮМОР

**Мар. Салим.** Ай-да сатирик-пенсионер! *(автопародия).*

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**А. Хабиров.** Поэт, верный своему кредо *(о творчестве М. Каримова).*
**Т. Ганиева.** Разве есть нация без поэта?

ЖИВАЯ ПАМЯТЬ

**Ф. Акбулатова.** Устремление к свету.

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**М. Надергулов.** Плоды просвещения *(150 лет со дня рождения известному ученому и писателю Р. Фахретдинову).*
**Г. Гареева.** Возвысился клекотом орла *(100 лет со дня рождения Амира Чаныша).*
**Р. Мустафина.** Живые родники *(100 лет со дня рождения Баязита Бикбая).*

ПРЕМУДРОСТИ ЯЗЫКА

**Р. Гиззатуллина.** Башкир, курай и йога.

ПУБЛИЦИСТИКА

**Р. Хажиев.** Жизнь в борьбе *(60 лет известному педагогу И. Валиеву).*
**Х. Набиев.** Душа его нашла успокоение.
**Т. Давлетбердина.** Уроки истории *(80 лет со дня образования Книжной палаты Башкортостана).*

ПИСЬМА В “АГИДЕЛЬ”

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА

ЮБИЛЯРЫ 2009 ГОДА

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир – 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары әм яуаплы сәркәтип – 274-89-65
Шиғриәт әм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре –277-87-73
Проза бүлеге – 277-87-50
Бухгалтер – 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай әм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күр әтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етеш еҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 5

# Сәсмә әҫәрҙәр



## Авторҙан

Беҙҙең эраның унынсы быуаты — Урал-Волга регионы төрки телле халыҡтары өсөн хәл иткес осор. Сөнки нәҡ ошо йөҙ йыллыҡтың тәүге сирегендә ислам төйәге изге Бағдадтан ҡоро ер буйлап, ҙур хәүеф менән, күп кенә төрки кешеләре йәшәгән биләмәләр аша Иҙел (Волга) болғарҙарына ғәрәптәр ислам динен алып килә. Үҙ юлында осраған халыҡтарҙы, шул иҫәптән башҡорттарҙы ла, Фаҙлан улы айырым билдәләп күр әтә, башҡорттарҙы «төркиҙәрҙең иң уҫалы» тип тә ебәрә. Ләкин эш унда ғына ла түгел, әлеге мәлдә беҙҙең өсөн иң мө име — ибн Фаҙландың ошо миссия ы, ислам динен таратып йөрөүенең башҡорттарға нисек тәьҫир итеү мәсьәлә е.

Сал тарих күпте күргән: бөйөк империялар тыуа торған, тарҡала барған; ҡөҙрәтле тоҡомло ҡай ы бер батшалар оҙаҡ быуаттарға дан алған, әммә ахыр килеп барыбер мәңгелектең төп өҙ упҡынында эҙ еҙ юғалған. Ләкин шул емереклектәр эсендә бер нәмә сағыштырмаса даими, ул — халыҡ рухы, кеше күңеле, милләт асылы. Рухиәт замана елдәренә тиҙ генә бирешеп бармай, уны көс, ҡорал менән дә яулап булмай, бигерәк тә был рухиәт ила иәткә таян а. Рухиәт, йән — мәңгелек, тип раҫлағандар шәректең исламғаса булған мәш үр Зароастризм диненә табыныусы халыҡтар, шул иҫәптән боронғо башҡорттар ҙа. Ошо дин пәйғәмбәре изге Заратуштра үҙенең Раббы ынан: "Яуыз Ахримандың кешеләргә килтерер иң ҙур зыяны нимәлә?"— тип орағас, быны ы: "Ахриман кешеләрҙең ғүмерен ҡыйырға, ҡатынын, балаларын урлап китергә йә барлыҡ донъя байлығын юҡ итергә мөмкин. Тик быларҙы ул ис тә ҙур зыянға анамай,— тип яуаплай.— Ә бына ул берәй енең йәнен, күңелен урлап юҡ ит ә, уның өсөн был ҙур байрам, оло тантана! Йән урлау, йән аҙаштырыу — яуызлыҡ раббы ының төп шөғөлө". Был аңлашыла ла: сөнки, рухиәт үҙгәреү менән кеше асылы ла үҙгәрә, йәне аҙашыу менән шәхес тә тарҡала, тип иҫәпләгәндәр боронғолар. Дин менән дә шулай. Дин — ул әҙәм тотҡа ы, дин үҙгәреү менән айырым шәхес кенә түгел, ошо инаныуҙарға нигеҙләнгән барса йәмғиәт ҡоролошо ла юҡҡа сыға. Шуға ла рухиәтте, динеңде, рухи инаныуҙарҙы алыштырыу, бер яҡтан, тетрәндергес зил-зилә бул а (тарихта дин өсөн ҡанлы бәрелештәр аҙ түгел), икенсе яҡтан, киләсәк тарихыңды яңынан башлау, булмышыңды үҙгәртеү, яҙмышыңды әләкәт алдына ҡуйыу. Беҙҙең эраның унынсы быуаты — Фаҙлан улы Әхмәт әм уның тоғро юлдаштары килтергән ислам тәғлимәте лә башҡорттар өсөн тағы бер хәтәр тарихи ынау, халыҡтың киләсәк яҙмышын билдәләү осоро була. "Каруан килә Бағдадтан" әҫәрендә башҡорт халҡының нәҡ бына ошондай хәл иткес мәле үрәтләнә. Тарих төпкөлөндә ятып ҡалған тип иҫәпләнгән ваҡиғалар, ҡырҡыу бәхәстәрҙә ата-бабаларыбыҙ ул саҡта айлаған юл, ис шик еҙ, беҙҙең бөгөнгө булмышыбыҙға ла ныҡ тәьҫир итә. Шуға ла тарихты белеү, уны теүәл әм айыҡ ба алау әр тарафтан да бик ҡиммәтле.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 6



**Роберт**
**БАЙЫМОВ**

# ҠАРУАН КИЛӘ БАҒДАДТАН

**Тарихи-документаль роман**

## Беренсе киҫәк

## Изге юл сәхифәләре

Күҙ күреме етмәй йәйрәп ятҡан ыу дарья ы буйлап ҡабарынҡы тулҡындар аша бер түбәнгә, бер юғарыға ҡалҡа- икерә кескәй карап-ҡайыҡтар ныҡыша-ныҡыша алға үрмәләй. Дарья ярҙарының ике яғында ике донъя: караптарҙың уң яғындағы күк йөҙөндә бер-бере ен баҫтырышып ҡыуып, офоҡто биләп алған дә шәтле ҡара-зәңгәр болоттар ҡуйыра. Әленән-әле был болоттарҙы ялт та йолт килтереп йәшен уттары телгеләй, унын артынса уҡ дөбөр-шатыр килеп күк күкрәй.

Ә дарья ярҙарының ул яғында әлегә икенсе донъя, асыҡ зәңгәр күк ҡабағында балҡып торған нурлы ҡояш: билдә еҙ хәүеф уятҡан, утлы ептәр менән сорналған ҡара-зәңгәр болоттар ул тарафҡа әлегә барып етмәгән. Хәйер, ентекләберәк ҡараң, хәҙер унда ла үҙгәрештәр иҙелә бара, түңәрәк көләс ҡояштың да сит-ситтәре, сибәр күҙҙәргә өрмә тартҡандай, ҡарағусҡыл дүңгәләктәр менән ҡаплана...

Алғы ҡайыҡ-карап моронтонда тәбиғәттең ошо мөғжизәүи күренешен ғәжәпләнеп тә, оҡланып та урта буйлы, теремек тығыҙ кәүҙәле, ҡара күҙле йәш кеше күҙәтеп тора. Әхмәт ибн Фаҙлан, йәғни Фаҙлан улы Әхмәт тиҙәр уны. Хәйер, Ғәрәп хәлифәтенең йөрәге, Йы ан ҡала ы тип йөрөтөлгән изге Бағдадта уны ололоҡлап Әхмәт ибн Фаҙлан ибн Алаяз ибн Рашид ибн Хамаз, йәғни Хамаз улы Рәшид, унын улы Алаяз, унын улы Фаҙлан, унын улы Әхмәт тип ата-бабаларын да иҫкә төшөрөп өндәшерҙәр.

Фаҙлан улы Әхмәттең хәлифәт арайындағы тормошо ла дарья ярының ул яҡ күгендәгеләй ҡояшлы, яҡты, тағы ла нурлана ғына бара ымаҡ ине. Көтмәгәндә әлеге кеүек йәшенле ҡара-зәңгәр ҡот оҙ болоттары ҡайҙан килеп сыҡты?! Ни сәбәптән уны, илдән өрөп ебәргәндәй, ҡапыл ғына ылтау табып, сығарып ебәрҙеләр? Ә шуғаса нисәмә йылдар Сүриәлә ислам дошмандары ҡарматтарҙы ҡыйратҡан, хәлифәткә бөйөк Мысырҙы яулап, бихисап байлыҡ тейәп ҡайтҡан мәш үр сардар Сөләймән улы Мөхәммәт ҡулы аҫтында эшләне, унын яҡлауында йәшәне. Фаҙлан улы Әхмәткә хәлиф арайы ишектәре асылыуы ла ошо ҡурҡыу белмәҫ, аяу ыҙ сардар арҡа ында ғына булманымы икән? Хәлиф Джафар Әл Мөҡтәдир ҡашында ла ярай ы уҡ юғары күтәрелгәйне бит Фаҙлан улы Әхмәттең абруйы. Сәйед Әхмәт, йәғни Әхмәт әфәнде тип кенә йөрөтә башлағайнылар. Әлбиттә, унын шағирлыҡ әләте, йор, теремек холҡо ла сәбәп булғандыр быға. Сөнки мөьминдәр хакимы әл Мөҡтәдир үҙе лә, йәш кеше булараҡ, сетерекле

---

*Роберт Нурмөхәммәт улы Байымов — БДУ-ның башҡорт әҙәбиәте әм фольклоры кафедра ы мөдире, Башҡортостан Фәндәр академия ының ағза-корреспонденты, БР-ҙың әм РФ-нын Яҙыусылар союзы ағза ы, С. Юлаев исемендәге республика дәүләт премия ы лауреаты.*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 7



дәүләт мәшәҡәттәренә ҡарағанда күберәк хәрәмендәге бейеүсе ҡол ҡыҙҙары, кәнизәктәр уратма ында күңел асыу мәжлестәрен, шау-шыулы уйындарҙы, шиғыр, шарап байрамдарын яратыр булды. Ара-тирә ундай мәжлестәргә башҡалар менән бергә сәйед Әхмәтте лә саҡырырҙар ине. Тиҙ күнекте Фаҙлан улы быңдай күңел асыу уйындарына, кешеләр менән тиҙ аралашыусан, музыка ҡоралдарында оҫта уйнаусы, үткер телле шиғырҙар әйтеүсе был омғол йәш кешегә тирә-яҡтағылар ҙа иғтибар итә башлағайны. Фаҙлан улы быны үҙе лә иҙә, бик тә яҡын, ҡул уҙымында ғына тора дан, шө рәт, юғары даирә өҫтөнлөктәре. Ун өс йәшендә хәлифәт тәхетенә ултырып алған әлеге хәлиф Джафар тигән малайҙан ни яғы менән кәм ул? Ошондай хәүефле уйҙар ҙа килеп ҡуя торғайны уға ҡайсаҡ. Ҡулыңды уҙ ҙа бәхет ҡошо – хакимлыҡты тот та ал! Әллә ошо кәрәкмәгән нәфсе, хәүефле хыял харап иттеме уны?

Бәлки, сәйед Әхмәт эштәренең кирегә китеүендә уның мәш үр үҙ оҫта ы Әбү Абдаллах Рудаки менән осрашыу касафаты булғандыр? Хәлиф уны әм тағы ла бер нисә кешене үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе яйға алыу өсөн хәлифәттән айырылып, үҙаллы дәүләт төҙөгән, көндән-көн көсәйә барған Парсаларҙың саманый хакимдарына ебәргәйне. Шағир булараҡ, Әхмәт быға шатланды ғына: быңа ҡайҙа күрәсәк ул телдәрҙән төшмәгән, риүәйәттәргә ингән мәш үр шағир Рудакиҙы! Исеме ҡыҫҡа әйтел ә лә, даны йыраҡтарға киткән уның. Малай саҡта уҡ асыла Рудакиҙың ижад әләте. Үҙе шиғыр яҙған, үҙе йырға алған, үҙе шуны тамбур ҡылдарын сиртеп, ҙур оҫталыҡ менән уйнап, йырлап башҡарған да. Йәш сағында берәҙәк шағир булып та йөрөгән, тиҙәр. Бул а ла булыр, шағирҙы ҡала урамдарында ла, сауҙа-баҙар майҙандарында ла, батша арайҙарында ла берҙәй таныйҙар, яраталар. Уның әр яңы шиғыры көтөп алына, телдән-телгә, ҡулдан-ҡулға йөрөй... Бохара, Мерв, Балх, Сәмәрҡәнд әмирлектәрендә хәҙер уның тиҫтәләрсә шәкерттәре лә бар... Шәреҡтәге мәш үр хакимдарҙың ҡай ы ы ғына уны үҙенең арай йырсы-шағиры итергә теләмәй икән? Араларында ҙур бүләктәр тәҡдим итеүсе, йәшәү өсөн ожмах шарттары тыуҙырырға әҙерҙәре лә етерлек. Әбү Абдаллах Рудаки уларҙың бере ен дә ҡабул итмәй, тик Иран дәүләтен яңынан тергеҙергә тырышыусы саманый батшаларына ғына баш эйә. "Саман батшаларынан башҡа берәүгә лә хеҙмәт итмәнем,– тиер ул уңыраҡ ғорурланып. – Шө рәтте лә, матди ярҙамды ла, донъя ҡыуаныстарын да тик уларҙа таптым".

Хәлифәттә генә яратып бөтөрмәйҙәр ошо Әбү Абдаллах Рудаки тигән дәүеренең ысын талантын. Сөнки шағир хәлифәткә түгел, ә баш бирмәҫ Иран саманыйҙарына хеҙмәт итә. Хәлифәт үткәргән сәйәсәткә ҡаршы килеп, быға са ике йөҙ йыл сама ы Иран мәҙәниәтенә лә хеҙмәт иткән изге ҡөрьән теле – ғәрәп теленән йөҙ сөйөрөп, әҫәрҙәрен үҙҙәренең урам өйләшендә, фарсыса яҙып маташа. Мосолман ҡа армандарын, ислам тип йәнен фиҙа ҡылғандарҙы данлай ы урында, үҙҙәренең әллә ҡасанғы мәжүси маздасыларын маҡтай, шәриғәткә ҡаршы килеп, ҡатын-ҡыҙ нәфислектәрен, улар менән мөнәсәбәттәге тотанаҡ ыҙлыҡҡа яҡын хис-тойғоларҙы йырлай...

...Иран саманыйҙарына килгәндән бирле Фаҙлан улы Әхмәттең быңа ошо кешене күрге е килеп йөрөнө. Тик быға са ис тә форсат тейгәне генә булманы. Ни - айәт, кисә уларға Хөрәсән әмиренең йәйге арайында "Уңыш байрамы" үткәреләсәге, унда хәлифәт илселәренең дә саҡырылыуы хаҡында әйттеләр. Тантанала Әбү Абдаллах Рудаки ҡатнашасағын, әмиргә арналған яңы әҫәрен уҡыясағын да белдерҙеләр. Шундай форсатты нисек ҡулдан ысҡындырмаҡ кәрәк! Хәлифәттә быны хупламаясаҡтарын белеп тор а ла, Әхмәт Фаҙлан улы ис икеләнмәй риза булды.

"Уңыш байрамы" тигәне шунан ғибәрәт икән: ер эше менән шөғөлләнеүселәр

йыл айын кемдең иң ҙур уңыш алыуы хаҡында ынау тота, үҙ-ара ярыш үткәрә. Юғары сифатлы әм иң күп уңыш алыусы еңеүсе тип табыла, ҙур бүләктәр ала, хөрмәт әм дан ҡаҙана. Сикләүҙәр юҡ, унда эре ер биләүселәр ҙә, ер эшкәртеүсе ябай дихҡандар ҙа ҡатнаша ала. Илде бөтәйтеүгә йүнәлтелгән был ярыштарға ҙур ә әмиәт бирелгән, улар ҙур тантана менән үткән. Еңеүсе шәрәфенә үткәрелгән а-рай мәжлесен әмирҙәрҙең әмире, Хөрәсәндәге саман батша ы үҙе алып барған.

...Бына әле лә байтаҡ ваҡыт дауам итә инде был тантана. Арҙаҡлы халыҡтар йыйылған, Иран иле бөйөктәре ултыра бында: Саманый батшаларына ҡараған әмирҙәр, азаттар (затлы нәҫелдән булғандар), данлы дихҡандар...

Тантана барған арай ҡыҫымы, моғайын, махсус әҙерләнгәндер, артыҡ йы аз-дар юҡ, бик иркен. Сағыу төҫлө keләмдәр, парса әм алтын, көмөш әйберҙәр менән бик ҡупшы биҙәлгән. Шунда уҡ билдәле бер тәртип менән ҙур-ҙур гүзәл а-уыттарҙа ярышта ҡатнашҡан емеш-еләк, ашлыҡ төрҙәре, быйылғы уңыштың башҡа үрнәктәре. Ян-яҡта, мәжлес тирәләй, йәнә күҙ яуын алып торған ләлә, рау-за, йәсмин сәскә бәйләмдәре, кәсәләрҙә ҡыҙыл яҡут төҫлө шарап... Муллыҡ әм гүзәллек бында...

Ә бары ынан өҫтәрәк, алтын ялатылған тәхеттә әмирҙәрҙең әмире, Хөрәсән бат-ша ы үҙе ултыра. Уның эргә ендә – Сеистан әмире, быйылғы ярышта нәҡ ул еңеүсе булып танылған. Иран ялпаҡ тауҙарының төньяғына урынлашҡан был әмирлектә бик тә эш өйәр ҡәүемдәр көн итә. Бик боронғо халыҡ, әйтеүҙәренсә, улар скиф тоҡомдары, был ерҙәргә төньяҡтан килеп ултырғандар. Уңыш байра-мында уларҙың еңеп сығыуы шуға ис тә ғәжәп түгел.

Әле ике әмир, бер туған ымаҡ, йәнәшә ултыра, улар тирә ендә хакимдарының әр ишара ын үтәргә әҙер ал ыу йөҙлө, ҡупшы кейемле йәш егеттәр баҫҡан.

Тантана дауам итә. Иранда ниндәй генә ҡәбиләләр юҡ : фарсылар, төркиҙәр, тағы әллә кемдәр. Шуға бындағы уйын ҡоралдары ла төрлө: тамбур, чанг, барбат кеүек шәреҡ халыҡтарының күбе енә уртаҡ ҡыллы уйнау ҡоралдары, төркиҙәрҙең най тигән ҡамыш ыбыҙғылары, ҡарнай, орнайҙар ҙа бар. Ахырзаман етеүен фәрештәләр нәҡ ошо ҡарнайҙы ҡысҡыртып хәбәр итерҙәр, ти бит. Ана, хатта күсмә тормошта йәшәүсе бәҙәүиҙәрҙең дә өс ҡыллы ғуттарының думбраға оҡшаш ҡалын тауышы ишетелә! Үҙҙәре ер эше менән шөғөлләнмә ә лә, байрамдары ур-таҡтыр, күрә ең. Айырым булғанда уйын ҡоралдарының әр бере е үҙенсә тауыш сығар а ла, бергә ҡуш аң, ғәжәп моң арҡыла килеп сыға икән дә ба а! Бына тағы... арай эсенә ҡояш нурҙары бәреп керҙеме ни, талғын моң уңайына тулҡынланып бейеп торған, еңел өйәкле, ығылмалы, омғол ынлы, ғашиҡ күҙҙәрҙе ым ынды-рыр, тилерткес гүзәл ҡыҙҙар ағымы килеп инде. Бере енән-бере е матурыраҡ ҡол ҡыҙҙар! Аяҡтары, ҡараштары, кәүҙәләре менән нимә генә ҡыланмай улар, иң то-танаҡлыларҙы ла уштан яҙҙырыр, тоғролоҡтарына хыянат иттерер ым-хәрәкәттәр... Бейеүсе ҡыҙҙар арай эсен иҫерткес хуш еҫ – мускус, амбра, йәсмин тулҡындары менән тултырҙы... "Ҡол ҡыҙҙарҙың үҙ өҫтөнлөктәре,– тип ҡапыл уй-лап ҡуйҙы ниңәлер Әхмәт Фаҙлан улы.–Улары, исма ам, үҙ гүзәллектәрен сәнғәт юғарылығында асыҡтан-асыҡ күр әтә ала, ләззәтләнә. Ә азат ҡатындар быны эшләй алмай, тәндәрен генә түгел, йөҙҙәрен дә ҡаплап ҡына йөрөргә тейеш..."

...Бейеүсе ҡыҙҙар сығып китеүе булды, тына башлаған оҡланыу ауаздарын ҡа-пыл ғына яңғырап киткән тамбур моңо бүлдерҙе.

– Рудаки!

– Әбү Абдаллах Рудаки! – тиеште байрамда ҡатнашыусылар.

Рудаки тигәндәре ярай ы уҡ олпат, ҡылыс танаулы, аҡыл эйәләренә хас тыныс йөҙлө ир урта ы. "Әбү Абдаллах Рудаки, йәғни Абдаллахтың ата ы Рудаки. Тик "Рудаки" тигәне – шағир тыуған ауыл,– тип уйлап алды Әхмәт ибн Фаҙлан. – Үҙе-

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 9



нең төп исеме нисек икән?" Рудаки тубығында ятҡан тамбур ҡылдарын усы менән ыпырып алғандай иткәйне, унан мең төрлө гүзәл ауаздар ишетелеп ҡалды. Шул уҡ мәлдә йырсы-шағирҙың тантаналы үҙҙәре лә зыңлап китте:

*ин беҙҙең бәхеткә Раббы ебәргән ша ,*
*Бөлгән Иран илен иттең ожмах.*
*ин гәҙел ша , ин беҙҙең ҡояш,*
*Мәңге йәшә, Иран иле хәҙер күптәргә баш...*

— Ҡасыда әйтә шағир, бөйөк ша ыбыҙға ҡасыда сығара, мәҙхиә йырлай,— тиеште баяғылар.— Ҡалай оҫта, үҙҙәрен уйлап та тормай, теҙә лә теҙә...

*Беҙ ауа әм ыу, ут әм туҙан,*
*иңә буй онорға ҡуша беҙгә изге ҡөрьән...*

Ә шағир-йырсы, быларҙың бере енә лә иғтибар итмәҫтән, мәжлестәгеләргә үҙенең бер ниндәй ҡағылышы булмаған кеүек йә ҡапыл тамбурын көслө сиртеп, йә үҙҙәренә баҫым я ап, ҡайсаҡ хатта шыбырлауҙарға ла күсеп, шиғри әҫәрен үҙ йәйына тағата бирә:

*Әгәр ин үҙгә оҫта бул аң,*
*Уны шиғырҙарың менән данла,*
*Әгәр ин аҡыл эйә е икән,*
*Тормоштан өйрәнәм ти әң,*
*ис тайшанма, ша ыбыҙ эҙенән атла!*

Оҫта быларҙы ниндәйҙер эске моң менән амаҡлай, ҡылдар сыңлауы күңел ҡылдарын да ҡуҙғыта. Уға ҡушылған дайра моңо, уның туғыны эсендәге ваҡ шөңгөрҙәр, йоморо ҡыңғырауҙар селтерәүе тойғоларҙы ненскәртә. Бары ы ла үҙ көсөнә, моң көсөнә мөкиббән, әйтер ең дә, быларҙы Рудаки түгел, ә әр кем үҙе уйлай, үҙе әйтә. Илгә ирек, шө рәт килтергән үҙ хакимдарын данлайҙар бит улар, уның хеҙмәтен ба алайҙар, үҙҙәренең тормошон, яттар ҡыҫымына ҡарамай, үҙҙәре ҡора алыуҙарына ҡыуаналар. Күптәре, ана, донъяларын онотоп, сихырланғандай әкрен генә моң ыңғайына бәүелеп ултыра, ҡай ылары осорға әҙерләнгәндәй талпынып-талпынып ҡуя... Шиғыр көсө был, шағир ҡеүәте...

Рудаки үҙҙәренең мөғжизәүи көсө, кешеләргә тәьҫире хаҡында Фаҙлан улы Әхмәттең элегерәк тә ишеткәне бар ине. Бер мәл ул, ана, Бохара әмирен Гератҡа оҙата барған икән. Әмәлгә ҡалғандай, ил хакимына Герат бик оҡшай, кәйеф-сафа ҡороп унда бик оҙаҡ йәшәй, әйтер ең, Бохараға кире ҡайтыу хаҡында бөтөнләй онотҡан. Тик уны оҙатып йөрөүселәр, ят ерҙә толҡа тапмай, тыуған яҡтарын, ғаиләләрен ныҡ ағына. Әммә олуғ хакимға был турала баҙнат итеп нисек әйтмәк кәрәк?!

— Әмиребеҙ алдында абруйың ҙур,— тиҙәр шул саҡ Рудакиға башҡалар.— Ҡайтыу хаҡында үҙ ҡуҙғатып ҡарамаҫ ыңмы, бик ағындырҙы тыуған яҡ. Тыңла а ине генә тыңлар ул...

Рудаки оҙаҡ уйлап тормай, Бохараны данлап әлегеләй ҡасыда — мәҙхиә яҙа. Шул көндәрҙә әмир торған Гератта ҡоролоҡ, күрмәгәндәй эҫе көндәр башлана. Рудаки и ә Бохаранан иҫкән талғын елдәр, ундағы йәшелгә күмелеп ултырған еләҫ урамдар, ыу фонтандары, сәскә наҙына сумған гөл-баҡсалары тура ында, үҙҙәренең өйөклө әмирҙәрен көтөп ағынып, арғайыу сигенә еткән Бохара сибәркәйҙәре хаҡында йырлай. Шаянланып, йәнә: “Шатлан, Бохара, ҡыуан, Бохара,— тип тә өҫтәй.— инең тажың менән никахланған, зәңгәр күктәге тулы ай ымаҡ яҡты, тирәктәй ныҡ, шанлы хакимығыҙ иҫән- ау. Оҙаҡламаҫ ул бында, өйөклөләре янына ҡайтыр, ағынып ҡайтыр... Аҡбуҙ аттарыбыҙҙы ла күптән инде ҡайтыр яҡҡа эйәрләп ҡуйғанбыҙ..."

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 10



...Көндөҙгө томра эҫелә әр яҡлап аяу ыҙ ҡояш ҡыҙҙырған арай бүлмәләренең бере ендә әл ерәп ятҡанда ишетә ҡөҙрәтле әмир Бохаралағы талғын елдәр, еләҫ баҡсалар, урғып торған ыу фонтандары хаҡындағы әлеге мәҙхиә-ҡасыданы. Шул саҡлы ныҡ тәьҫир итә уға был әҫәр: әмир әфәнде башта үҙенең нишләп аман бында ятыуына ғәжәпләнә, унан тамам йөрәк еп икереп тора ла, ярым яланғас көйө атына атланып, Бохарға табан сығып саба. Хеҙмәтселәре, оҙатып йөрөүселәре быны иҙмәй ҙә ҡала. Әмирҙәрен, имеш, тик ярты юлда ғына ҡыуып етәләр...

Ә бында мәжлес ҡыҙғандан-ҡыҙа бара. Рудаки ҙа “Уңыш байрамы”ндағы еңеүсене маҡтап уңғы үҙҙәрен әйтә ине шикелле:

*О, Сеистан ша ы! Мәртәбәң ҙур,*
*Халыҡ маҡтай ине, күтәрә.*
*Саманый батша үҙе фатиха бирә*
*Иран илен ожмах итәргә.*

Шағирҙың ошо үҙҙәренән уң Хөрәсән хакимының йөҙҙәре асылып, ихлас йылмайып, тәхетенән күтәрелде. Шунда уҡ көрәгәселәрҙең омғол берәү е әмирҙәр әмиренә ҡыҙыл яҡут төҫөндәге шарап тулы, сит-ситтәренә алтын йүгерткән сеүәтә килтереп тотторҙо.

— Арҙаҡлы олуғ шағирыбыҙ раҫ әйтте,— тине тантаналы итеп саманый батша. — ин хаҡлы быға, о, Сеистан әмире! Иран иленә артабан да шулай фиҙакәр хеҙмәт ит! Ошо нур тулы шарап ымаҡ, тормошоң яҡты бул ын, ҡайнап тор он. Әйҙә, шулай мең йәшә, Иран менән Сеистан!

Олуғ хакимдың үҙҙәрен мәжлестәгеләр элеп алды, оҙаҡ ҡына ауала ҡотлауҙар, алҡыштар, дәртләндергес ауаздар эленеп торҙо. Берәү ҙә тыйманы башланып киткән ошо шау-шыуҙы: әйҙә, теләгәнсә күңел ас ындар йылына бер тура килгән ошо байрамда. Улар хаҡлы быға.

Дөрләп янған усаҡҡа яғыулыҡ өҫтәгәндәй, шунда йырсы-шағир Рудаки ҙа йәнә үҙенең тамбур ҡылдарын сирткеләй- ыпырғалап ниндәйҙер күңелле ауаздар сығарып алды ла ҡапыл шаян, дәртле көй уйнап ебәрҙе:

*Дәртең таш ын, өйөклөңдө ярат,*
*Донъя хәле бигерәк борғандаҡ.*
*Үткәндәрҙе онот, алдағы ын уйла:*
*Йәшә шулай, гүйә, шаулап ағыр йырғанаҡ...*

Тына ғына башлаған шау-шыу тағы бермә-бер ҡыҙып китте.

— Афарин, бозор* Рудаки! Хуб! — тигән шатлыҡлы ауаздар яңғыраны. — Биназир остад*!

Ә Рудаки, тағы ла рухлана төшөп, яңынан-яңы "көфөр" йырҙарын теҙә генә бирә:

*өйгәнең менән үбешеү*
*Тоҙло ыу кеүек ғиллә:*
*ин эсә ең, ыу ын ҡанмай,*
*Эскәндән-эске килә...*

Уйын-көлкө, йыр, бейеүҙәр... Дутар, дайра моңдары... орнай әм най ыҙғырыуҙары... Хатта Бағдад арайында ла былай булмай...

"Көнләшерлек бит шағир яҙмышы,— шулай уйлай сәйед Әхмәт, Рудаки өсөн шатланып. — Хакимдар менән килешеп ижад итеү ис тә насар түгел, хаким да ҡәнәғәт, шағир ҙа".

Ләкин шағирҙар менән батшалар дуҫлығының даимилыгында, күрә ең, ул да яңылыша. Тигеҙ хоҡуҡ, мөлкәттәр уртаҡлығын талап иткән ҡарматтар хәрәкәтенә теләктәшлек күр әткәне өсөн генә лә мәш үр шағир уңыраҡ саманый батшалары-

---

*Бозор (фарс) — бөйөк.
*Биназир остад (фарс) — тиңе булмаған оҫта.

ның ҡә әренә юлыға, күҙҙәре уҡырайтылып, арайҙан ҡыуыла...

Ләкин быларҙы Фаҙлан улы Әхмәт белмәй әле, ваҡыты етмәгән. Шуға Рудакиға оҡланып, уның өсөн шатланып ултыра бирә. Бик оҙаҡ дауам итте ул көн был байрам...

Фаҙлан улы Әхмәт тантананан күңелдәре күтәрелеп, хыялында йөрөткән олуғ шағир менән осрашыуына ҡыуанып ҡайтҡаны. Тик уны Бағдадта ғына бөтөнләй икенсе кәйеф көткән икән. Ғәҙәттә, илселәр үҙҙәренең эш өҙөмтәләре буйынса иҫәп-хисапты хәлифәттәге яуаплы кешеләргә —вәзирҙәргә тапшыралар. Ә Фаҙлан улы Әхмәтте, нишләптер, хәлиф ғәли йәнәптәренең ҡаршы ына саҡырҙылар. Күрә ең, сәбәбе лә шулай ҙурҙандыр... Шулай булып сыҡты ла.

— Ислам тәғлимәтен тарата ы, хәлифәт мәнфәғәттәрен ҡайғырта ы урында, еҙ ғәли йәнәптәре,— быны ын хәлиф мыҫҡыллап әйтте шикелле,— мәжүсилекте, мәжүсиҙәр пәйғәмбәрен данлап йөрөй өгеҙ икән дә ба а барған ерҙәрегеҙҙә! Алла илсе е Мөхәммәт ғәлиәссәләмде әллә онотҡандармы ул тарафтарҙа? еҙҙе унда ни өсөн ебәргәйнек?

Фаҙлан улы Әхмәт бер мәлгә аптырабыраҡ ҡалды: әллә ни көфөр эштәр булмағайны бит, ғәйепләүҙәрендә нимәне күҙҙә тота икән хәлиф ғәли йәнәптәре?

Джафар Әл Мөктәдир өн өҙ орауҙы аңланы, шикелле — тотлоҡмайса ҡапыл шиғыр юлдары әйтте:

*Заратуштра уты яндырамы сикә-яңаҡтарың,*
*Иркәләйме елкәй бөҙрә сәсең тулҡындарын,*
*Ҡараштарың, мускус тының йөрәгемде өтөп алды.*
*Тыйып булмай яр ыу ағыш ялҡындарын...*

— Шундай шиғырын уҡынымы саманый арайында фетнәсе Рудаки тигәндәре? Әллә ин ул шағир йораты телгә алған Заратуштраның кем икәнен белмәй ең? Бәлки, үҙегеҙҙең мәжүси маздасылар пәйғәмбәре икәнен дә онотоп ташлаған ындыр? — Хәлиф зә әрен сәсә бирҙе. — Уның бар белгәне — ғәрәптәргә ҡаршы уғышҡан Саманый батшалары ла Заратуштра уйлап сығарған мәжүси Апастак китабы. Маздасы ул Рудаки тигәнегеҙ, әллә ҡасанғы өр өп бөткән Исфандияр, Хисрау кеүек мәжүси батшаларын маҡтауҙан бушамай...

Шунан ул йәнә үҙ-үҙен ҡыҙҙырғандай:

— Ҡара ин уны, быға са изге ҡөрьән яҙылған ғәрәп теле хәҙер оҡшамай уларға,— тип ҡуҙғый бирҙе. — Шиғырҙарын үҙҙәренең парса телендә яҙып маташалар. Шуның менән халыҡты ҡужғыта, боласы дошмандарға хеҙмәт итәләр.

Фаҙлан улы Әхмәтте хәлифтең Заратуштраны "үҙегеҙҙең мәжүси маздасылар пәйғәмбәре" тигән үҙҙәре лә ағайта ҡуйҙы. Тиктәҫкә генә әйтмәй быны хәлиф ғәли йәнәптәре, күрә ең, Фаҙлан улы Әхмәттең иран сығышлы булыуы хаҡындағы имеш-мимешкә ишара я ай. Әхмәттең ата-бабалары үҙҙәрен ғәрәп анай. Тик, кем белә, ғәрәптәрҙең Иранға ислам динен алып килеүҙәренә өс йөҙ йылдан ашыу. Был арауыҡта тоҡом да, быуындар ҙа үҙгәрмәҫ тип кем әйтә ала? Шулай булған хәлдә лә хәлифәт өсөн инең ниндәй ҡәүемдән булыуың түгел, ә иң тәүҙә мосолман булыуың, мосолман исемдәрен йөрөтөүең ҡиммәт.

Нисек бул а ла, аҡлана алманы шул, үҙгәрҙе ҡапыл Әхмәт Фаҙлан улы өсөн донъя, ҡараңғыланды күк. Хәҙер, ғасабиланып, бының сәбәптәрен эҙләй Фаҙлан улы. Ана, арайҙағы бөтмәҫ мәжлестәрҙең бере ендә шағир Әхмәт аҡлыҡ кәрәклеген дә онотоп, бәйге мәлендә мауығып китеп, шиғырҙарын йәш хәлиф эргә ендә өйөрөлөүсе хур ҡыҙҙарының бере енә арнап, хатта исемен дә атап маҡтап уҡығайны. Хәлифтең уға ҡарата мөнәсәбәте үҙгәреүгә, бәлки, ошо ла сәбәптер? Хәйер, бындай хәлдәрҙең элек тә булғылағаны бар: улай ғына түгел, хәлиф хәрәменең дә алып булмаҫтай ҡәлғә түгеллеген бындағы күптәр белә. Сәбәп, моғайын, икенселә, тәрәндәрәк ята бул а кәрәк. Шәриғәткә ыймаҫ артыҡ иреклелекте, шиғ-

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 12



риәттәге сик еҙ хөрлөктө яратып бөтөрмәйҙәр Бағдадта, бигерәк тә шағирҙары ла фарсы сығышлы бул а. Сөнки улары, үҙҙәренең саманый батшалары ымаҡ, ислам мәҙәниәтен, ғәрәп тәртиптәрен ан ынмай ҡылана, үҙҙәренең меңәр йыллыҡ рухи мираҫтары булыуы менән шапырына, шәриғәт ҡанундарын боҙоп, аҙғынлыҡҡа, йүгән еҙлеккә саҡырған шиғырҙарын яҙа. Хәлифәттең көс өҙләнә барыуын күреп, улары хәҙер, аяу ыҙ язалауҙарға ла ҡарамай, көндән-көн арта ғына бара. Әсе теле, хәлиф даирә енә төбәлгән сәнескеле шиғырҙары өсөн данлы шағир Бәшәр Бурд улын, уҡыр тип тә тормайса, йәне сыҡҡанса уҡтыралар. Ибн ар-Руми тигәнен хәлифәт арайы әмере менән ағыулап үлтерәләр. Ләкин фарсы шағирҙары, аҙғынлыҡ менән сиктәш йүгән еҙлеккә өндәп, ислам нигеҙле ғәрәп мәҙәниәтен тарҡатыуҙан туҡтамайҙар. Бигерәк тә Абу Нувас тигәндәрен ис тә тыйыр хәл юҡ. Хәҙер уны исламға ис тә ыймаған бәй еҙ көфөрлөктә, эскеселектә, шиғырҙарында Алла ыны хурлауҙа ғәйепләйҙәр. Хәйер, ысынлап та, барса ҡайғыларыңды онотторған, тәнеңә көс-ҡеүәт биргән, ғишыҡ уттарын ҡабыҙған яҡут төҫөндәге ҡыҙыл шарапты данлаған, хыялый иҫереү ләззәтен маҡтаған хәмриәтте – хәмер шиғриәтен башлап ебәреүсе лә шул Абу Нувас түгелме ни? Фарсылар менән бер ҡатарҙан, уларға дәрт биреп, хәмер, аҙғынлыҡ, ирек даулап, "суфый" тип йөрөтөлгән ғәрәп шағирҙары ла ҡоторона.

Абу Абдаллах Рудаки ҙа, әлбиттә, ошо уҡ заттан. Тик ул мәш үр талант эйә е. Шағирҙың даны шул тиклем юғары, хатта уға Бағдадтың да теше үтмәй.

Фаҙлан улы Әхмәттең Хөрәсәндә саҡта Рудаки менән осрашыуы, Бағдадҡа ҡайтҡас та уны ололоҡлап телгә алыуы хәлифәт хакимдарының ҡолаҡтарына барып етмәй ҡалмаҫ. Сәйед Әхмәт яҙмышын да, бәлки, нәҡ ошо нәмә хәл иткәндер. әр хәлдә ошонан уң Фаҙлан улы Әхмәтте башҡаса хәлиф арайындағы шиғриәт мәжлестәренә саҡырманылар.

Фаҙлан улы Әхмәт, уйлана-уйлана, уйҙарының осона сыға алмай. Әллә ни күп тә түгел ғүмеренде тағата башла аң, унда үҙеңә оҡшағаны ла, оҡшамағаны ла тулып ята икән дә ба а! Ибн Фаҙландың ҡапыл ғына илдән өрөлөп тиерлек ниндәйҙер, «етенсе климат» тип йөрөтөлгән шыҡ ыҙ төньяҡ тарафтарына ебәрелеүендә, бәлки, уның Джафар тәхетенә ым ынған ике туған аға ы, донъяға «Бер көнлөк хәлиф» ләҡәбе менән инеп ҡалған Ибн Әл Мутаҙҙа менән танышлыҡтары ла сәбәп булдымы? Ибн Әл Мутаҙҙа – Джафарҙың ата ы Әл Мөктәдиргә саҡлы хәлиф булған Әл Мутаҙҙаның улы. Ғүмере арайҙа үткән, юғары мәҙәниәтле була, бына тигән белем ала. Етмә ә, тирә-яҡҡа данлыҡлы шағир булып таныла. Тик шул шө рәте менән ҡәнәғәтләнмәйсә, ҡапыл арайға баҫып инеп, ун өс йәшлек ҡусты ы Джафарҙың тәхетенә, алдын-артын уйламай, ашығыбыраҡ ултырып та ала. Шағир данына әүрәп, шағир бәхетен батша тәхетенә тиңләп, ауаланып киткәндер инде ул байғош. Тик шиғриәттә үҙен ыуҙағы балыҡ ымаҡ той а ла, аҫтыртын өсләтеүселәре алып биргән хәлифәт тәхетендә ул тулы бер көн дә ултыра алмай. Шул көндөң кисенә үк хакимиәт арайынан йә әт кенә сығып шылырға мәжбүр була. Хәҙер, ана, Джафар Әл Мөктәдир нәфрәтенән ҡасып, бай йы азлы өйөнә ҡайтырға ла ҡурҡып, ҡайҙалыр йәшеренеп йөрөй...

Йәшерәк саҡта Фаҙлан улы Әхмәт шиғриәттә Ибн Әл Мутаҙҙанан да күп нәмәгә өйрәнде. Сөнки Ибн Әл Мутаҙҙа ла, Рудаки ымаҡ уҡ, ҡанундарға ыймай, ирекле ижад итә. Хәлифәт арайындағы юғары вазифа ы бының өсөн хәүефләнергә урын ҡалдырмай. Шуғалырмы уның ижадындағы ирекле мөхәббәт, нәзәкәтле тойғолар, хатта хәмриәт шиғырҙары ла яза балта ынан ситтә ҡала бирҙе. уңынан да остазының йәшеренеп ятҡан даирә е менән дә хәбәрҙар булманы түгел. Джафар хәлифкә ҡуштандары әллә ошоларын да еткереп торҙолармы? әр хәлдә ибн Фаҙлан хәлифәт мәртәбәлеләре тарафынан үҙенә ҡарата иғтибарҙың кәмегәндән-кәмей, хали* хәленә ҡала барыуын тойоп, йөрәге өшөп йөрөнө. Әммә

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 13



өмөт өҙлөктөң дә сиге була.

...Бер көндө көтмәгәндә уны хәлиф арайына саҡырҙылар. Әллә ни аңлатып та тормаҫтан, уға әллә ҡайҙағы, "етенсе климат" тип йөрөтөлгән төньяҡтағы Болғарға илселек барасағын, Фаҙлан улы Әхмәттең ошо илселеккә сәркәтип итеп тәғәйеләнеүен әйттеләр. Хәҙерҙән үк әҙерлек эштәрен башларға кәрәклеген дә белдерҙеләр. "Әҙерлек эштәре"нең исемлеге лә ҙур булып сыҡты: аҡса юллау, илселекте кемдәрҙән ойоштороу, ислам тәғлимәтен Болғарҙа өйрәтер тәжрибәле мөғәлимдәр йыйыу, шәриғәттең хоҡуҡи ҡанундарын күҙәтер факи тар әҙләү әм яллау... Бындай эштәр Фаҙлан улының быға са төшөнә лә ингәне юҡ ине лә ба а! Сәфәргә йәнә хәлиф арайында абруйҙары юғарыраҡ булған Төрк Тәкин, Сусан Әр-Расси кеүек мәртәбәле шәхестәр ҙә бара икән. Сусан Әр-Расси хатта илселектең етәксе е итеп тәғәйенләнгән. Тик ни өсөн барса яуаплылыҡ уларға түгел, ә нәҡ бына уға, арайҙағы әлеге шиғыр кисәләрен иҫәпкә алмағанда, бер вазифа ы ла булмаған тиерлек йәш кешегә йөкмәтелгән? Унан, ҡайҙа уң ул Болғар тигәндәре? Ниңә унда мотлаҡ бына ул, Фаҙлан улы Әхмәт, барырға тейеш?!

Шуға ла алыҫ тарафтарға сәфәр хаҡындағы ҡапыл ябырылған был хәбәр Әхмәт Фаҙлан улын шаңҡыта биреп ҡуйҙы, ҡаршылыҡлы уйҙарға батырҙы. Бер ҡара аң, хәлифәттән донъяның башҡа тарафтарына илселек ебәреү, хәрби төркөмдәрҙе яуға оҙатыу, Мөхәммәт ғәлиәссәләм дәүерҙәренән алып, әр саҡ бөйөк тантана, данлы яҙмыш булған. Мөхәммәт пәйғәмбәр үҙе, уның яҡындары Али батыр, Әбү Бәкер Сиддыҡ, Омар, Абу-Суфъян, "Алла ҡылысы" Хәлид бен Әл-Вәлид, уңғы замандарҙағы ошондай бөйөктәрҙән Мысырҙы яулаған Сөләймән улы Мөхәммәт...

Күпме дан әм мал килтергән улар ғәрәптәргә? Хәлифәттең хакимиәте хәҙер ярты донъяға таралыуына ла ошо шө рәтле шәхестәр сәбәп түгелме ни?! Икенсе яҡтан уйла аң, бындағы инде көйләнгән ләззәтле тормошто ташлап, өҫтөнә таҙа кейем кейә алмай, тирә-яҡтағы нурлы күҙҙәр иркәләүенән мәхрүм булып, айҙар, хатта йылдар буйы ат йә дөйә өҫтөндә елкенеп ҡырағай дала буйлап йөрөү нимә бирер?

Әхмәт Фаҙлан улын аптыратҡаны тағы шул: Болғарға сәфәр хаҡындағы өйләшеүҙән уң уға ҡарата тирә-яҡтағыларҙың мөнәсәбәте ҡапыл ғына үҙгәрҙе лә ҡуйҙы. Әүәл уның арайҙағы абруйына ыйынып, уның нурында ҡойоноп, күңел асып, туйып икергән сәүектәй юрғалап йөрөгән, дуҫтары аналған бәғзе бер ҡуштандар хәҙер Әхмәтте күрмәмешкә алыша, осрағанда ла урап үтә башланы. Фаҙлан улы башта быны көнсөллөк сире тип уйланы. Ләкин оҙаҡламай элекке әшнәләренең бере е менән осорашыу уның был фекерен дә ҡаҡшата биреп ҡуйҙы.

— Йәджудж менән мәджудж тарафтарына сәфәр ҡылырға йыйына ығыҙ икән,— тине ул, Әхмәтте әллә йәлләп, әллә аҫтыртын көлөп. — Зөлҡәрнәйен булдыра алмағанды ла, шәт, башҡарып ҡайтыр ығыҙ әле бер мәл, иншалла...

Әхмәт Фаҙлан улы башта аңламай торҙо:

— Ниндәй "йәджудж, мәджудж" ул тағы? Нимә өйләй ең?

— Бәй-й, "Искәндәр диуары", Зөлҡәрнәйен ҡа арманлыҡтары хаҡында ишеткәнең юҡмы ни? — тине ғәжәпләнеп быны ы үҙ сиратында — Изге ҡөрьәндә лә әйтелгән дә ба а!

Бына ошо әңгәмәнән уң ҡойолоп төштө лә ҡуйҙы Әхмәт Фаҙлан улы. Белә ул, ишеткәне лә бар ҡөрьәндәге Зөлҡәрнәйен атлы бөйөк сардарҙы. Йәджудж менән мәджудж тигән ҡырағай халыҡтар менән яу яланында осрашҡан. Шәреҡтә

---

**Хали — ырыуынан ҡыуылған хоҡуҡ ыҙ кеше.*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 14



"Искәндәр" тип йөрөтөлгән боронғо юнан батша ы, бөйөк сардар Александр Македонский.

Ҡөрьәнгә Александр ана шулай "Зөлҡәрнәйен", йәғни "Ҡуш мөгөҙлө" ләҡәбе менән инеп ҡалған. "Ҡуш мөгөҙлө" ҡушаматына килгәндә, уны, әлбиттә, ғәрәптәр үҙҙәре генә уйлап сығармаған. Бөйөк сардар Мәңгелек ҡапҡа ына инеп киткәс, унын ватандаштары үҙҙәренең аҡсаларына Александрҙы, Мысыр раббы ы Аммон ымаҡ итеп, башына ике мөгөҙлө тимер торҡа кейҙереп, сүкеп ынландырғандар. Был аҡсалар, әлбиттә, Ғәрәп ярымутрауында ла күпләп таралған. Изге ҡөрьәнгә лә бөйөк сардар "Ҡуш мөгөҙлө", йәғни "Зөлҡәрнәйен" булып, ошо сүкеп уғылған үрәттәрҙән килеп ингәндер, моғайын. Тик мосолмандар унын Искәндәрҙе, йәғни Александр Македонскийҙы аңлатыуына ис тә шикләнмәй. Мөгөҙлө батшалар, әлбиттә, боронғо иран, ғәрәп ҡисса-дастандарында ла тулып ята. Әммә нәҡ ошо Зөлҡәрнәйен, Искәндәр ымаҡ уҡ, йәджудж менән мәджудж тигән имәнес, ҡырағай ҡәбиләләрҙән башҡаларҙы ҡурсалау маҡсатында, ике араға ҡош та осоп үтә алмаҫлыҡ бейек ҡорос диуар ҡойоп ҡуя.

Ишеткәне бар ине бит былар хаҡында Әхмәт ибн Фаҙландың, йәджудж менән мәджудж халыҡтарының да "етенсе климат" тип йөрөтөлгән, илселек йүнәлә е төбәктәрҙә көн итеүен тойомлай ине. Нишләп был фекер уның башына элегерәк килмәгән?

Ошонан уң Фаҙлан улы йәджудж әм мәджудж халыҡтары хаҡында китапханаларҙа ныҡлап төпсөнә башланы. Боронғо Мысыр, Табари, пәхләүи, юнан, ҡытай яҙмаларын аҡтарҙы, уларҙың күбе е ғәрәпсәгә тәржемә ителгәйне; ғалимғөләмәләр, сәйәхәтселәр, йондоҙнамә оҫталары менән әңгәмә тотто. Бағдадта уны, арай шағирын, яҡшы беләләр, китапханалар, ҡульяҙма хазиналар аҡлаусы биналарҙың ишектәре сәйед Әхмәт өсөн әр ерҙә асыҡ. Төпсөнә торғас, Фаҙлан улы Әхмәт шуны асыҡланы: йәджудж, мәджудж тигәндәре тик Зөлҡәрнәйен, йәғни Искәндәр-Александр Македонский исеме менән генә бәйле, имеш, " уғыш суҡмары", "уҫал яугир" төшөнсә ен аңлата. Ә Александрҙың үҙ халҡы – юнандар уларҙы "гог", "магог" тип тә атаған. Миләди туғыҙынсы йөҙ йыллыҡта йәшәгән атаҡлы фарсы географы Худуд ал-Алам үҙенең "Донъя сиктәре" тигән ҙур хеҙмәтендә Көньяҡ Уралдың көньяҡ-көнсығыш тарафында "Кимак-Ҡыпсаҡ" тигән халыҡтарҙы күр әткән. Ә уларҙың төньяғында осо-ҡырыйы күренмәгән, әҙәм үтмәҫлек таулы ҡалын урмандар башлана. Быны ҡытай яҙмалары ла раҫлай. Ҡай ы бер сығанаҡтарҙан күренеүенсә, әлеге йәджудж менән мәджудж, йәки юнанса әйт әң, гог әм магог тигән серле ҡәүемдәр нәҡ бына ошо ҡалын урманлы, ҡаялы ҡараңғы тауҙар ара ында йәшәйҙәр, имеш.

Бындай мәғлүмәттәрҙән уң Фаҙлан улының ҡыҙыҡ ыныуы арта ғына төштө, Зөлҡәрнәйен-Александр-Искәндәр хаҡындағы бихисап яҙмаларҙы аҡтарҙы, үҙе өсөн күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән бик күп ғәжәп нәмәләр асты. Иҫ китерлек эштәр ҡырған икән ул Искәндәр тигән сардар, аҡыл, хәйлә, көс ярҙамы менән. Бәләкәй генә Румдан сығып, үҙе буй онған Иран империя ын ҡыйратыу, унан индостан, Ҡытай, башҡа мәш үр дәүләттәрҙе тубыҡландырыу... Бына шул Искәндәр бер саҡ Төньяҡ илдәренә, Кимак-Ҡыпсаҡ, йәнә "төрки" тип йөрөтөлгән халыҡтар иленә, йырып сыҡҡы ыҙ ҡара урман, тауҙарҙа йәшәгән башҡа ҡырағай ҡәүемдәргә килеп сыға. Алтын-көмөштән генә торған тауҙар хаҡында ишетә, ғәскәренә аяу ыҙ ҡаршы торған бә ләүән ҡырмыҫҡалар менән уғыша. Уны бигерәк тә бер үҙе тотош ғәскәрҙе ҡырып алған, йыртылып бөткән арыҡ тире енән тегелгән тунлы, ғифрит ҡиәфәтле алпамыша аптырата. Уның ҡоралы юҡ, ырғаҡлы тимер таяҡ ҡына тотоп алған. Әммә үҙе тимергә төрөнгән ба адирҙарҙы себен урынына ла күрмәй, ырғағы менән эләктереп ала ла бармаҡ араларына ҡыҫып ыта ла ҡуя. Ә үҙенең тире е ағас ымаҡ ҡаты, ҡылыс үтмәле түгел. Аптырағас, уға

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 15



ҡаршы уғыш өнәренә өйрәтелгән ажғыр фил дә сығарып ҡарай. Ә был ғифрит аптырап ҡалмай, ҡотороноп китеп, үҙенә ташланған тауҙай йыртҡыстың оҙон томшоғонан тотоп ала ла тамыры-ние менән ура ла сығара...

Ошо хаҡта уҡығас, Фаҙлан улы шатланып та ҡуйҙы: “Йәджудж, мәджудж тигән затмы әллә был?” Ләкин яҙмалар менән артабан танышыу уның өмөтөн аҡламаны: ҡайҙандыр килеп сыҡҡан яңғыҙ алпамыша икән ул. Урындағы халыҡ уны урманда йоҡлап ятҡан саҡта бәйләп алып әсир иткән. Хәҙер уғыш яланына ла, ҡасып китмә ен тип, аяғына йыуан, оҙон сылбыр тағып ҡына сығаралар икән ...

Шулай ҙа тапты Фаҙлан улы Әхмәт йәджудж, мәджудж хаҡындағы яҙмаларҙы ла. Искәндәр уларҙы тағы ла төньяҡтараҡ, ҡояшты ҡаплар ҡырыҫ ҡаялар ара ында осрата. Дөрөҫөрәге, ошо ҡаялар артында йәшәгән йәджудж, мәджудждарҙан яҡлауын орап Искәндәргә Кирван тигән ил халҡы мөрәжәғәт итә.

Яу ҡырында еңә алмай уларҙы Искәндәр. Шуға ҡаялар ара ындағы үҙҙәренең тар тарлауыҡтарына тимер ҡойма ҡойоп бикләп китә...

Бына нимә дәртләндерҙе, ҡанат ҡуйҙы Фаҙлан улы Әхмәткә. Яҙмалар йәджудж, мәджудждар йәшәгән тарафтарҙы ап-асыҡ күр әтеп тора ла ба а! Быға са уны тапмағандар икән, тимәк, яҙмаларҙы ентекле өйрәнмәгәндәр. Нисек шуны күрмәҫкә мөмкин? Ҡытайҙан ҡайтышлай Искәндәр-Александр Сәмәрҡәнд ҡала ына нигеҙ ала... Рей, Нишапур, Мерв, Балх ҡалаларын талай, ҙур байлыҡ йыя. Унан Ҡыпсаҡ – Кимак далаларына йүнәлә, хазарҙар, буртастар, исуйлылар, берберҙәр, аландар, тағы бик күп ғәййәр ҡәүемдәр менән айҡашып алыша, Төньяҡ илдәренә үтеп китә. Ҡай ы бер яҙмаларҙа, Искәндәр Болғарға ла нигеҙ алған, тигән мәғлүмәттәр бар. Фаҙлан улы Әхмәт әле ойоштороп йөрөгән хәлиф илселеге лә нәҡ ошо ил әм ҡалалар аша барасаҡ бит. Ниңә тәүәккәләп ҡарамаҫҡа? Әгәр шул йәджудж, мәджудж тигәндәрен таба ҡуй а?! Донъяны шаулатасаҡ бит ул, бөйөктәр хәл итә алмағанды юл ыңғайы ғына башҡарып сығасаҡ! Ни тиерҙәр икән ул саҡта әле уны күрмәмешкә алышып, йөҙ сөйөрөп йөрөгән ҡай ы берәүҙәр? әр хәлдә башҡаса уны “парса”, “мәүлә” тип кәм етә алма алар, йәджудж, мәджудждарҙы таба алмағанда ла, Әхмәт өсөн әллә ни хәүеф юҡ, илселек Болғар батша ына барып, Бағдад хәлифе ҡушҡанды үтәй ҙә ҡайта. Ә был сәфәрҙән әллә ни ҡурҡмай Фаҙлан улы, юлдың ярты ы тиерлек Бағдадҡа буй онған, исламды ҡабул иткән теләктәш илдәр аша үтә. Ҡалғаны – ик еҙ-сик еҙ далала тырым-тыраҡай күсенеп йөрөүсе мәжүсә ҡәүемдәр ... Бөйөк дәүләттәр баш алғанда, исламға ҡаршы торор рух булыр ти еңме шуларҙа? Бигерәк тә илселекте ғәскәр оҙатып барғанда? Унан үҙҙәре уҡ саҡырып торған Болғар ҙа алыҫ ҡалмай. Бәлки, Болғарҙа ярҙам да табыр: иҙемләүенсә, йәджудж, мәджудждар йәшәгән ҡалын-ҡалын урмандар, мәғрур ҡаялар, серле мәмерйәләр ҙә шул тарафтарҙа ята, буғай ... Шикләнә е түгел, бөйөк эштәр көтә уны, бары ы ла Алла ы ҡулында, яҙмыш бүләк иткән берҙән-бер осраҡтыр ҙа, бәлки, уның өсөн был сәфәр...

Шунда ибн Фаҙлан, үҙе лә көтмәгәндә, теге саҡта Рудаки әйткән шиғырға оҡшатыбыраҡ, ҡырыҫ ҡына амаҡлай ҡуйҙы:

*Дәртең таш а, сыҡ майҙанға,*
*Донъя хәле бигерәк борғандаҡ.*
*Үткәндәрҙе онот, алдағы ын уйла,*
*Йөрөмә аман, гүйә, ырғандаҡ...*

Нимә көтә Фаҙлан улы Әхмәтте был юлда: шө рәтме, әллә, кире енсә, хурлыҡмы?

***

Джафар Әл Мөҡтәдир билла тың хәлифәт тәхетенә ултырыуына инде тиҫтә

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 16



йылдан ашыу ваҡыт үтеп кит ә лә, уға әле аман ни бары егерме алты ғына йәш. Тәхеткә лә ул уйламағанда тиерлек, ата ы хәлиф Әл Мөҡтәдир ҡапыл вафат булыуы сәбәпле, унын урынына килтереп ултыртыла. Оҙон ҡолаҡтар өйләүенсә, кескәй Джафарҙың хәлиф булып китеүендә төп уйынды мәрхүм ата ының ҡарт хеҙмәтсе е Сафи Әл Хәрәми уйнаған, имеш. Сафи Әл Хәрәми арай эсендәге тәртиптәрҙең үтәлеүен тикшергән әм хәлифтең ҙур хәрәменә баш-күҙ булып йөрөгән ул саҡта. Шуға ла, вазифа ынан файҙаланып, үлеп барған хәлиф янына берәүҙе лә индермәгән, берәү менән дә аралаштырмаған, үҙ мәлен көткән. Ғәли йәнәптәре Әл Мөҡтәдир күҙҙәрен мәңгелеккә йомоуы була, Сафи Әл Хәрәми унын ҡулындағы хәлифәт мисәтен йә әт кенә эләктерә ала ла, сер ыйырҙай вәзир Хәсән улы Аббас менән көндәш күҙҙәрҙән ҡасып, ошо тәхет вариҫы кескәй Джафар йәшәгән йортҡа йүгерә. Шунда ун өс йәшлек малайҙың ҡулына хакимиәт билдә е – хәлифәт мисәтен тотторон, хәлиф я ап, уны әлеге вәзир ярҙамында бик ҙур аҡлыҡ менән илдең төп арайына килтерәләр. Башҡалар ни булғанын да белмәйсә аңшайып торғанда, йола ына тура килтереп, Джафар тигән ун өс йәшлек малайҙы Бөйөк хәлифәт тәхетенә ултыртып та ҡуялар... Аҙаҡ, уштарына килгәс, төрлө юлдар менән был урынға башҡалар ҙа ынтылып ҡарай. Улар араында әлеге "Бер көнлөк..." йәки "бер сәғәтлек хәлиф" ҡушаматы менән тәүәрихтарға инеп ҡалған әлеге Джафарҙың ике туған аға ы, шағир Ибн Әл Мутаҙҙа ла була.

Тик быуындан-быуынға килгән тәхет тамырын яҡлаусылар ҙа ишле булып сыға: Джафар Әл Мөҡтәдир хәҙер инде, ана, күпме йылдар йы ан ҡала ы, мөғжизәүи Бағдад тәхетендә ултыра, төрлө илдәрҙә йәшәгән, ярты донъяны ҡаплап алған мосолмандар менән идара итә. "Мөьминдәр әмире" тип таныйҙар үҙен.

Ләкин тыныс түгел әле унын мәшриҡтән мәғрипкәсә уҙылған дәү мәмләкәтендә. Мөхәммәт пәйғәмбәр заманынан башлап ислам байрағы аҫтында ярты донъяны яулап алған Ғәрәп хәлифәте, шартлау хәленә етеп, эстән ҡалтырай. Бигрәк тә Мысыр менән Ирандың хәлифәттән торған айын бойондороҡ оҙ була барыуы хәүефләндерә. Хәйер, дәүерҙәр уҙымында өҙлөк өҙ барған ҡанлы уғыштарҙа тыуған ғәләмәт ҙур дәүләттең башҡа тарафтары ла, Бағдад хәлифен тыштан ғына ҡабул ит әләр ҙә, ғәмәлдә, бигерәк тә хәл иткес мәлдәрҙә, унын менән бик үк иҫәпләшеп тә бармайҙар. Ғәрәптәрҙең үҙ эсендә лә, мосолман донъя ында ла берҙәмлектәре самалы. Хәлифәт тәхетенә ым ыныусылар ғына түгел, әле теге, әле был тарафта исламды боҙоп, яңы дин уйлап сығарыусылар, ҡайҙандыр килеп сыҡҡан яңы пәйғәмбәрҙәр, хатта үҙҙәрен Раббы тип иғлан иткән, хаҡ диндән айырып, үҙҙәре артынан барырға саҡырған бәндәләр йышайғандан-йышая бара... Табаристандағы алидтар, Сүриәләге ҡарматтар, хурамиттар, Алла ы шө рәтен шиккә алыусы суфыйҙар... Хәлифәт ҡанундарына ҡаршы сыҡҡан ҡара тәнле ҡолдар фетнә е, әленән-әле булып торған төрки сығышлы ғәскәрҙәр ҡуҙғалышы ла ил берҙәмлеген нығытмай. Ә яу килемдәре, ғәнимәт иҫәбенә йыйылған ҡаҙна йоҡарғандан-йоҡара бара. Сөнки хәлиф ярҙамында ҙур-ҙур биләмәләрҙе, хатта тотош илдәрҙе ҡулдарына эләктергән эре ер хужалары хәҙер дәүләттекен түгел, иң тәүҙә үҙ кеҫәләрен ҡайғырта.

Әлбиттә, Джафарҙың ата ы хәлиф Әл Мөҡтәдир менән унын оло аға ы Әл Мөҡтәфи, йәнә уларҙың сардарҙары дәүләтте ҡайтанан нығытыуҙа ҙур тырышлыҡтар күр әтте. Иран яңынан яулап алынды, баш бирмәҫ Рей халҡы хакимы итеп Әл Мөҡтәфи үҙе тәғәйенләнде. Ике йылдан уң Мөхәммәт Ибн Сөләймән ҙур ғәскәре менән барып, баш бирмәҫ Мысырҙы йәнә хәлифәткә ҡайтарҙы. Джафарҙың ата ы хәлиф Әл Мөҡтәдир сардары Мөхәммәт Ибн Сөләймәндән дә күберәк ғәрәптәр өсөн тырышҡан башҡа берәүҙе күр әтеп буламы икән?! Сүриәлә ҡармат-

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 17



тарҙың ҙур болғаныштары башланғас, Хама янында боласыларҙы ҡанға батырып, тураҡлап ташлаусы, башлыҡтарын Бағдадҡа килтереп башын киҫеүсе лә шул сардар ине лә ба а! Ҡарматтарҙы ҡайтанан күтәрелмәҫлек итеп, күпләп ҡырҙылар ул мәл. Башҡаса мөмкин дә түгел ине, барса халыҡты эйәртә башланылар бит арттарынан. Бигерәк тә тигеҙ хоҡуҡ талап итеп, фетнә башлап йөрөүселәренә ис тә шәфҡәт күр әтелмәне. Нәсими атлы ҡарматсы шағирҙарының, абаҡ өсөн, терeләй тире е тунап алынды. Уның урынына, ошоларҙы күреп, Бохара, Хәрәзм хакимдары аҡылға килгәндәй булды, Бағдад хәлифен улар ҙа Баш хаким итеп таный башланы.

Шулай ҙа ярты донъяны теҙгенләп ятҡан хәлифәттә тынысланырға ис тә урын юҡ. Хәлифәтте тәшкил иткән дәүләттәр, халыҡтар, ырыу-ҡәбиләләр ҡай ы саҡ дауыл алдынан ик еҙ-сик еҙ сүллектә ерәйешкән ҡом тауҙарын — бархандарҙы ла хәтерләтеп ҡуя: бына-бына дә шәтле ҡойон-өйөрмә килеп сығыр ҙа әлеге тау-бархандарҙы күккә күтәрер, бар донъяны ары ҡараңғылыҡ баҫыр, эшләгән эштәрең, бөйөк дәүләтең күҙ асып күҙ йомғанс‍ы борхолдап осоп та китер...

Хәйер, йәш хәлиф Джафар Әл Мөктәдирҙе илдәге ошо хәүефле хәлдәр әллә ни борсоманы ла шикелле. Малай ғына көйө тәхеткә ултырып, уның өсөн башҡалар, бигерәк тә үҙенә яҡын вәзирҙәр хәл итеүенә артыҡ күнегеп киттеме, мөслимдәр* әмире дәүләт эштәренә бик үк ҡыҫылып та барманы. Уның урынына байрамдары күп ине, шарап яратты, күңел асыу мәжлестәренә баш-аяғы менән сумды; кәнизәктәре, ҡол ҡыҙҙары, шәхсән хәрәме артты; мөғжизәләр, ғәжәп хәлдәр, ғибрәтле йәнлектәр менән мауыҡты, башҡа илдәрҙән килгән ниндәйҙер кешеләр, үткенсе шағирҙар, кәмитселәр, күрәҙәселәр, шымсылар, тағы әллә күпме шикле кешеләр ҙә урын таба ине хәлиф арайында. Ҡай ыларын ул үҙе лә саҡыртып алғыланы, ҡай ылары үҙ-үҙҙәрен тәҡдим итеп әр еҙләнде.

Йәш хәлиф үҙенсә йәшәй бирҙе, оҡшағандарын йомарт иркәләне, ҡаҙна иҫәбенән башҡа ыймаҫ ҙур бүләктәр бирҙе, ҡуштандарын яулап алынған ҡалаилдәргә хаким итеп ебәрҙе, алтын-көмөш, ер биләмәләре, мөлкәт өләште. Ил хәстәрен шулай үҙенсә үтәп, ләззәтле шау-шыу эсендә көн итте. Шул уҡ ваҡытта үҙенә тоғро хеҙмәт итеүсе, тура ын әйтеүсе ҡырыҫтарҙы үҙ енмәне. Тик шул арҡала, үҙе лә иҙмәҫтән, күп кенә тәхет терәктәрен юғалта ҡуйҙы. Заманында хәлиф Әл Мөктәдиргә лә тоғро хеҙмәт итеп, Мысырҙы яңынан хәлифәткә ҡайтарып биргән бөйөк сардар Мөхәммәт Ибн Сөләймәндең башы зинданда серене...

Ата ының тоғро хеҙмәтсе е, үҙен хәлифәт тәхетенә үрләткән Сафи Әл Хәрәмиҙең ҡапыл ғына вафаты ла Джафар өсөн ҙур ынау ине. Ярай әле, уның урынына Нәзир исемле икенсе бер тоғро Хәрәми килде. Уны ы ла хәҙер Джафарҙың әр теләгеген алдан күреп, уның ауыҙына ғына ҡарап тора. Тик бына башҡалары...

Хәйер, Джафар Әл Мөктәдиргә яҡынлашыу өсөн ғәрәп булыу ҙа мотлаҡ түгел. Төркиҙәр, фарсылар, хатта ҡара тәнле зинджалар* арайҙа иркен йөрөй. Нәзир Әл Хәрәмиҙең яҡын әшнәләре рәүешендә, ана, Төрк Тәкин тигән берәү, тағы әллә кемдәр бында үҙҙәрен хужаларса иркен тота. Хәлиф шулай уй ыҙ-ни еҙ күңел асҡанда, иҙҙермәй генә хәлифәт нигеҙҙәре емерелә.

Хәлифәт өсөн ошондай хәүефле мәлдәрҙең бере ендә изге Бағдадҡа әллә ҡайҙағы Төньяҡ илдәренең бере е Болғарҙан Башту улы Абдаллах Хазарин атлы бер илсе килеп төштө. Абдаллах Хазарин әллә үҙе лә донъя күргән кеше булдымы, әллә уны ебәргән саҡалибтар батша ы Шилкә улы Алмыш хәлифәттәге эске эштәрҙе, унда кемдәрҙең хакимлыҡ итеүен яҡшы белгәнме — Болғар илселегенең Бағдад-

**Мөслим (ғәрәп) — мосолман.*
**Зинджа (ғәрәп) — ҡара тәнлеләр (негр).*

тағы эшмәкәрлеге әр тарафтан нык̇лы уйланылған булып сык̇ты. Болғар батша-ы үҙенең илсе е аша бер юлы өс хат-мәктүб биреп ебәргән: мөьминдәр әмире Джафарҙың үҙенә, уның хәрәм әм арай эсе тәртиптәре өсөн яуаплы кеше, әлеге Нәзир Әл Хәрәмигә әм хәлиф вәзире Аббас улы Хәмиткә. Хаттарҙың бере енең тап ошо вәзиргә тәғәйенләнеүе лә осрак̇лы түгел. Сөнки хәҙерге вәзир Хәмит теге сак̇та Сафи Әл Хәрәми менән бергә ун өс йәшлек Джафарҙы хәлифәт тәхетенә күтәргән мәрхүм вәзирҙең улы ине. Тимәк, Болғарҙык̇ылар хәлифәт тарихын, уның сетерекле сәйәсәтен тәрәнтен белә, шуларҙы иҫәпкә алып эш итә. Әммә донъяла илдәр, халык̇тар күп, ә Хәлифәт әм уның хәлифе берәү генә: әр килгән илсене к̇абул итергә Бағдад хәлифе Джафарҙың вак̇ыты ла, теләге лә юк̇, донъя мәшәкәттәре, сәйәсәт менән шөғөлләнергә, ана, уның яуаплы кешеләре, бихисап вәзирҙәре бар. Шуға Болғар илсе е Башту улы Абдаллах оҙак̇ тапана хәлифәт а-райының буй етмәҫ бейек к̇апк̇алары алдында. Аптырағас, ул башк̇асарак̇ юл ай-ларға була. Хәлиф арайында әүәл Болғарҙа булып киткән Төрк Тәкин тигән берәүҙе белә ул. Әлбиттә, Төрк Тәкин арай хеҙмәтсе е иҫәплән ә лә, уны хәлиф к̇а-шына ебәрмәҫтәр. Ләкин Джафарға йоғонтоло кешеләр ара ында йөрөй ҙә ба а, берәй әмәлен табыр, моғайын. Болғар батша ы Абдаллахк̇а Бағдадк̇а еткәс иң тәүҙә ошо кешегә мөрәжәғәт итергә к̇уш̇кайны, ышаныслы, эште башк̇арып сы-ғарырға ярҙам итер, тигәйне...

***

...Төрк Тәкинде хәлиф арайында, ни сәбәптәндер, башк̇аларҙан айырым өҫтөнлөктәр менән файҙаланыуысы, хәлифкә як̇ын ғөләм-хеҙмәткәр итеп таный-ҙар ине. "Төрк" исемен йөрөт ә лә, уның төрк халык̇тарының к̇ай ы ынан икәнен бындағыларҙан берәү ҙә белмәй. Хәрәзмдә йәшәүе, тимерсе өнәрен үҙләштереүе, дала төркиҙәренән уғыҙҙар, йәнә Уралдағы башк̇орттар ара ында тимер сығарыу, атыу эштәре менән шөғөлләнеүе хак̇ында ғына имеш-мимеш хәбәрҙәр йөрөй. Нәк̇ ошо өнәре, моғайын, мәлендә уны Болғарға ла илткәндер. әр хәлдә Бағдад арайына барып юлык̇к̇ансы, Төрк Тәкиндең Болғар батша ында ла хеҙмәт итеүе бәғзе берәүҙәр өсөн әллә ни сер түгел. Болғар менән бәйләнешен ул, күрә ең, уң-ынан да юғалтмаған, Бағдадк̇а илселәр килеүен дә алдан белеп торған! Шуға ла Болғар илселеге башлығы Абдаллах ибн Башту ярҙам орап иң тәүҙә уға мөрәжәғәт иткәс, ул ис тә ғәжәпләнмәне, кире енсә, был эште нисек башк̇арып сығыу хак̇-ында баш ватты. Әлбиттә, хәлифәт арайындағы үҙенең бәйләнештәре арк̇а ында Болғар батша ы Алмыштан килгән өс хаттың өсө ө лә тәғәйенләнгән кешеләренә, шул иҫәптән әлеге вәзир Аббас улы Хәмит ярҙамында мөьмин мосолмандар әми-ренең үҙенә лә үҙ вак̇ытында тапшырылғайны инде. Тик хаттар, ыуға ташлаған таштар ымак̇, к̇айҙалыр төпкә китте лә батты, байтак̇ вак̇ыт үтеүгә к̇арамаҫтан, улар хак̇ында хәҙер ләм-мим. Мәсьәләне хәлифтең үҙе генә хәл итә аласағын Төрк Тәкин аңлай ине. Тик уның үҙенең генә ундай мәсьәләне хәл итеү к̇улынан килмәйәсәк, ниндәйҙер мөғжизә менән хәлиф к̇ашына үтә ал аң да, файҙа ы бул-маясак̇. Мосолмандар әмире к̇упыр Джафар ине, ябай бер ялсы ын, тыңлап то-рор ти еңме? Башк̇алар ҙа тиҙ генә күңдерә алмаҫ уны. Ил эсендә ғәрәсәт к̇убыр-ға торғанда нимәгә кәрәк Бағдад хәлифенә әллә к̇айҙағы ер сигендә ятк̇ан ниндәйҙер “сак̇алиб“ тигән халык̇тар яҙмышы? Төрк Тәкин самалауынса, арай-ҙа Джафар хәлифкә йоғонто я арлык̇ тик бер генә кеше бар. Ул хәлиф арайында эске тәртиптәр үтәлешен етәкләүсе, шул иҫәптән хәрәм ағында тороусы Нәзир Әл Хәрәми. Ул белмәгән сер арайҙа юк̇. Вазифа ы менән дә ул әр сак̇ Джафар янын-да, уның теләктәрен тойоп, ойошторop йөрөргә тейеш. Шуға ла Нәзир Әл Хәрәми үҙенең хужа ының нимәгә әләтле икәнен дә, уның йомшак̇ яктарын да белмәй

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 19



булмаҫ. Мосолмандар әмире тыңла а ла тик уны ғына тыңлар...

...Төрк Тәкин менән Нәзир улы Хәрәми электән үк яҡшы мөнәсәбәттә ине. Тик башта был да ярҙам итмәне, “Башты балта аҫтына ҡуйырға итә еңме? – тип хәүефләнде Әл Хәрәми. – Сәйәси эштәргә минең ни ҡыҫылышым бар?!“

Ләкин тама-тама тамсы ташты тишә. Оҙаҡ өйләшеү-кәңәшләшеүҙәрҙән уң, бер ҡарарға килеп, Нәзир Әл Хәрәми ҙә Болғар батша ы аманатын мосолмандар әмире ҡашына еткерергә ризалыҡ бирҙе...

...Шулай ҙа Нәзир Әл Хәрәми Төрк Тәкин тәҡдименә оҙаҡ ҡаршылашыуы менән, күрә ең, хаҡлы булған: күпме генә ынтылып ҡарама ын, хәлиф уның үҙҙәрен едтигә алманы, тыңлап та торманы. Күңел асыу эштәрендә, балҡышлы кисәләр ойоштороуҙа, хатта ғишыҡ серҙәрендә Джафар Әл Мөҡтәдир үҙенең ышаныслы арай тәртиптәре етәксе енә таян а ла, сәйәсәт эштәрендә әллә уны анламаны, әллә үҙенең дәүләт мәшәҡәттәре менән артыҡ шөғөлләнә е килмәне әм Нәзир Әл Хәрәми үтенесен аман илтифат ыҙ ҡалдыра торҙо.

Шулай ҙа түҙемлелек үҙенекен итте. Джафар ғәли йәнәптәренең кәйефлерәк сағында тағы бер ҡат Болғар батша ына килгән мәктүб хаҡында иҫенә төшөргәс:

– Нимә орай уң ул саҡалиб батша ы беҙҙән, – ти ҡуйҙы, әллә ни ҡыҙыҡ ыныу белдермәгәндәй. – Нимә көтә, нимә кәрәк уға? – “Үҙенә тапшырылған хатты уҡыманымы икән ни? – тип икеләнеп ҡуйҙы Әл Хәрәми. – Юҡ, хәбәрҙарҙыр, юрамал белмәмешкә алышалыр. Вәзир Аббас улы Хәмит уның менән кәңәшләшмәй буламы!”

– Әллә ни орамайҙар, шикелле,– тине Әл Хәрәми йыуашланып, ҡарашын, ниңәлер, мөьминдәр әмиренән йәшерә төштө. – Дин белемдәрен, ислам ҡанундарын өйрәтеүсе мөғәллимдәр ебәреүҙе, мәсет төҙөп биреүҙе... Тағы дарыуҙар ебәреүҙе...

Ләкин торған айын кәйефе ҡырыла барған хәлиф Джафар хеҙмәтсе ен тағы тыңлап бөтмәне, тупаҫ ҡына бүлдерә ҡуйҙы:

– Ер башы ерҙән саҡалиб батша ы дарыу орар өсөн генә ҙур илселек ебәрмәгәндер бит? – Уның ҡуҙғыуы йөҙөнә сыҡты.

Әл Хәрәми үҙҙе артабан уҙыуҙың үҙе өсөн хәүефле икәнен аңлап алды, шикелле, йә әт кенә әйтә алды:

– Тағымы? Тағы дошмандарынан аҡланыу өсөн хәлиф ғәли йәнәптәренән Болғарҙа ҡәлғә-хәрби нығытма төҙөп биреүҙе үтенә...

Джафар Әл Мөҡтәдирҙең йөҙө бер аҙ асыла төшкәндәй булды.

– Шунан башларға кәрәк ине иңә, – тине тынысыраҡ. – Ислам ғилеме, ҡөрьән үҙе кәрәк ти еңме уларға? Кем килмә ен, теләнселәүҙән башлайҙар. Әйтер ең, хәлифәттә бөтмәҫ хазина ята...

Бағдад хакимы бер аҙға уйланып, тынып ҡалды. Нимә тип әллә ҡайҙа ятҡан бәләкәй генә иленән Болғар батша ы яҡын-тирә хакимдарына түгел (унда ла бит көслөләр бар), ә туранан-тура бөйөк ислам хәлифәтенә мөрәжәғәт итергә йөрьәт итә? Әр еҙ бер ҡатлылыҡмы, әллә мәкерле сәйәсәтме? Бәлки, ғәрәптәргә аяу ыҙ ҡаршылыҡ күр әткән Хазар ҡағанаты менән уртаҡ тел тапҡандарҙыр? Джафар улай уҡ мәғлүмәт еҙ түгел. Болғар тигән илдә шул тарафтағы бик күп халыҡтарҙың мәнфәғәттәре сырмалған, был хаҡта күптән түгел вәзир Хәмит Аббас улы менән дә фекерләшкәйне. Ул әм башҡа кәңәшселәре әйтеүенсә, йәйҙәрен ҡуйы йәшеллеккә батҡан үҙенсәлекле тәбиғәтле был тарафтар ифрат бай ҙа икән: дала тултырып йөрөгән иҫәп еҙ- ан ыҙ мал көтөүҙәре, кәрәгенсә бөртөклө ашлыҡ баҫыуҙары, тауҙарында бөтмәҫ-төкәнмәҫ ҡиммәтле таштар, төрлө мәғдән ятҡылыҡтары; урмандары тулы ҡиммәтле тире йөрөткән йәнлек өйөрҙәре. Ә үҙҙәре ыжламай ҙа аман мәжүсилек ҡараңғылығында йәшәп ятыуҙары... Саҡалиб батша ы үҙе орап

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 20



торғанда ислам нурын, бәлки, шул тарафта ла тоҡандырып булыр? "Батып барған кеше аламға йәбешә" тиҙәр түгелме әле ул тарафтарҙа?

Мосолмандар әмиренең тынып ҡалыуын ризалыҡ тип уйланымы, ҡыйыулана төшөп, Әл Хәрәми тағы баяғы үҙҙе ялғаны:

— Болғарҙы улай уҡ ер сигендәге, донъя сәйәсәтенән ситтә ятҡан халыҡ тип әйтмәҫ инем, хәлиф ғәли йәнәптәре,— тине ул түбәнселек менән.— Шәреҡ донъя-ы әүәл-әүәлдән Хазар диңгеҙе, Итил буйы ил халыҡтары менән алыш-биреш, сауҙа эштәре алып бара. Болғар иле лә хәҙер — бик мө им сауҙа үҙәге. Мосолманлыҡҡа ла битараф түгел икән улар. Күп йылдар әүәл донъяны өйрәнеүсе үҙебеҙҙең ғәрәп ғалимыбыҙ Ибн Дастә яҙғанса, Болғарҙа исламды тотоусылар ғына түгел, хатта мәҙрәсәләр, уҡымышлы мәзиндәр ҙә бар... Был ғәжәп тә түгел, Хазар диңгеҙе, унын Итил дарья ы буйлап Болғар йәнә Ибн Дастә иҫкә алған Башҡорт тауҙары тарафтарына Хәрәзм, хатта инд яҡтарынан да сауҙагәрҙәр, сәйәхәтсе ғалимғөләмдәр, руханиҙар ағымы ис тә өҙөлмәй. Ә төньяҡтан уларға Скандинав илдәренән дә килеүселәр күп икән...

Ғәҙәттә, шым ғына үҙ вазифа ын йыйнаҡ үтәп йөрөгән хеҙмәтсе енең ауыҙынан был үҙҙәрҙе ишетеп, хәлиф ғәли йәнәптәре ғәжәпләнә лә ҡуйҙы, шикелле, йөҙөндә ҡыҙыҡ ыныу ҙа уянғандай булды.

— Ә ул ыу юлы кем ҡулында, хазарҙарҙа түгелме ни? — тине ул.— Ә улары бәләкәй генә Болғарға түгел, беҙгә лә күҫәк күтәреп маташа.

— Ҡоро ерҙән дә каруан юлы бар, — мосолмандар әмиренең ыңғай үҙенән Әл Хәрәми ҙә йәнләнә төштө. Бындай ораy тыуыуын алдан уҡ иҙенгәйнеме, тотлоҡмайса тәфсилле аңлата ҡуйҙы — Уны ы Хәрәзм аша... Хәрәзм дарья ын* көньяҡлап урап үткәс, Өс йорт таҡырлығы аша уғыҙ еренә килеп сыға ың. Унан дала үтеп, Яйыҡ йылға ын кисә ең... Артабан Болғарға ла йыраҡ ҡалмай. Ҡоро ер әм ыу юлдары буйлап Болғарға, бая әйткәнсә, Скандинав әм башҡа төньяҡ илдәренән дә күп төрлө өнәр кешеләре килә...

“Ғәли йәнәптәре ни әйтер?”— тигәндәй, Әл Хәрәми хужа ына күтәрелеп ҡараны. Ләкин уны ы быларҙы белә инеме, башҡаса ҡыҙыҡ ыныу белдермәне. Кире - енсә, үҙ бөтөүен аңлатҡан ишара я аны. Нәзир Әл Хәрәмигә түбәнселек менән баш эйеп, сығып китеүҙән башҡа сара ҡалманы...

***

Көтөлмәгән фармандан шаңҡып төшкән Әхмәт Фаҙлан улы башына килгән ҡаршылыҡлы уйҙарынан оҙаҡ ҡына арына алмай йонсоно. Әлбиттә, арайҙа абруйы күтәрелә барған, дыуамалыраҡ йәш кешене — шағирҙы ер аяғы ер башы ергә ебәреүҙәрен унан ҡотолорға теләү, илдән өрөү тип тә аңларға мөмкин. Ләкин төптәнерәк уйла аң, Әхмәттең үҙе өсөн был тәкдим сетерекле хәлдән сығыу юлы ла түгелме? Ҡайҙа ғына юлланмай хәҙер ғәрәп ғалим-ғөләмәләре, йәнә сәйәхәтселәре? Төркиҙәр дала ы, Византия, Ҡара тәнлеләр биләмәләре, ҡояш байышындағы тарафтар? Уларҙы донъяла белмәгән кеше юҡ. Нәҡ ана шул сәйәхәтсе ғалим-ғөләмәләр яңы ерҙәр, яңы илдәр аса, шө рәт ҡаҙана, хәлифәткә дан килтерә. Ә ғәрәптәр барып етмәгән "етенсе климат" тигән тарафтарҙа ниндәй генә серҙәр аҡланмай ти ең? Ана, бик боронғо дәүерҙәрҙә Искәндәр-Зөлҡәрнәйен тигән ярты донъяны яулап алған мәш үр сардарҙың ғәскәрҙәре лә ниндәйҙер йәджудж әм мәджудж тигән ҡырағай ҡәүемдәр менән уғышып йөрөгән! Уларҙы хатта мәш үр сардар ҙа еңә алмаған. Шуға улар йәшәгән тау араларын кеше үтә алмаҫлыҡ бейек диуар менән ҡаплаған. Әхмәт Фаҙлан улы хәтерләүенсә, хәлифәт хакимдарының ҡай ы ылыр ана шул диуарҙы табыу маҡсатында заманында хәрби

*Арал диңгеҙе.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 21



төркөм дә ебәргән. Ғәрәп сәйәхәтселәре яҙыуынса, ҡайҙалыр шул тарафта "башжардт" тигән, төркиҙәрҙең иң уҫал башкиҫәрҙәре лә йәшәй, имеш. Уларҙың бере е, әзмәүерҙәй кәүҙәле е, хатта Болғарға барасаҡ илселек сафына ла теркәлгән. Исеме лә сәйер: Артыр бей... Нисек әйт әң дә, серле яҡтар, ана, үҙҙәре менән бергә барасаҡ Төрк Тәкин дә бер мәл үҙенең Болғарҙа хеҙмәт итеүе, унда ғәҙәттән тыш дәү бер алпамыша йәшәүе хаҡында өйләгәйне. Бәлки, ысынлап та Әхмәт Фаҙлан улын да ошо юлда ниндәйҙер ғәҙәти булмаған хәлдәр, яңы асыштар, шө рәт әм дан көтә торғандыр, кем белә? Тик быға ныҡлап әҙерләнергә, әлеге хәлдәр хаҡында ла иҫке китаптарҙан, төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәт эҙләүҙе дауам итергә – кәрәге теймәй ҡалмаҫ ...

***

... Нисек бул а ла, ижриҙең 309 йылы сәфәр айының ун беренсе көнөндә кесе йомала күп мәшәкәттәр менән төҙөлгән илселек Бағдадтан сығып китте. Ләкин уның юлы артабан әллә ни ырамаңы. Сөнки әлегә "илселек" тигәндең исеме генә бар, ә хәүефле әм оҙон юлды үтер өсөн кәрәк булған аҡса, аҙыҡ-түлек, кейем- алым, оҙатып барыусы ғәскәрҙәрҙе ибн Фаҙландар әр ҡала-ҡасабала туҡтап, ваҡыт әрәм итеп, хәйер ораҕандай йыйып алырға тейеш булып сыҡты. Болғар батша ы Алмыш хәрби ныҕытма-ҡәлғә төҙөү өсөн ораған аҡсаны ла улар Хәрәзмдә хәлифәткә хыянат иткән Ибн Әл Фурат тигән кешенең мөлкәтен атыуҙан табырға тейеш. Дүрт мең муссаяб динарына ба алай был мөлкәтте хәлиф, ошо аҡса табылма а, әллә ҡайҙағы Болғарға барыуҙың бер мәғәнә е булмаясаҡ. Ә ваҡыт үтә. Каруан юлындағы тәүге ҡала Нахраванда ла тәүлек үткәрергә тура килде. Алдағы Дасҡарҙа ла өс көн үтеп китте. Артабан Хулван менән Кирмасан ҡалаларында ла икешәр көн, ә Хамаданда өс тәүлек ваҡыт үтте.

Шунан уң ғына илселек үҙҙәренә ярҙам итергә тейеш Рей ҡала ына килеп етә алды. “Кешеләр кеүек, әллә илдәрҙең, ҡалаларҙың да үҙҙәренә генә хас холоҡтары, яҙмыштары буламы, – тип уйлап алды Фаҙлан улы Әхмәт, бындағы хәлдәр менән танышҡас, – Искәндәр-Зөлҡәрнәйен дә нәҡ бына ошо Рей ҡала ында ҡан ҡойошло ҡаты уғыштар алып бара, халҡын ҡыра, утҡа табыныусыларҙың мәңгелек тип аналған мө абәт ғибәҙәт каналарын ер менән тигеҙләй”. Ысынлап та, бында тағы бола-сыуалыш, шуға ғәрәптәр каруанының юлы тағы билдә еҙ ваҡытҡа тоткарланып ҡалды.

Эш шунда: Рей ҡала ы – хәлифәт менән Иран саманыйҙары ара ындағы бәхәсталаш үҙәге. Миләдиҙең 651 йылында хәлифәт ғәскәрҙәре исламдың йәшел байрағы аҫтында Иранға көслө өжүм башлай. Ләкин ҡанлы уғыш бик оҙаҡҡа уҙыла. Рей ҡала ы ла ҡулдан ҡулға күсеп йөрөй. Тик бынан биш-алты йыл элек кенә, миләди 916-ла, Рей, ни айәт, йәнә хәлиф Әл Мөктәдир ғәскәрҙәре тарафынан уғышып алына. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, сик буйы мәсьәләләре буйынса ығызығы әле лә дауам итә.

Әлбиттә, ғәрәптәрҙең тәүге өжүме үк иранлылар яҙмышына ҡырҡа үҙгәреш индерә. Шуның менән сәсән Ардашир Папакан нигеҙ алған, дүрт йөҙ йыллыҡ шө рәтле тарихы булған сәсәний дәүләте ҡыйратыла. Ә уның уңғы батша ы Йездегерд Өсөнсө уғышта үлтерелә. Батшаның үҫмер ҡыҙы ғәрәптәргә әсирәлеккә эләгә. Шәреҡ тарихына Шә ребануу исеме менән инеп ҡалған был ҡыйыу ҡыҙыҡай хаҡында шундай ҡары үҙ ҙә тороп ҡалған. Имештер, Шә ребануыҙың ылыулығына оҡланған хәлифәт башлыҡтарының әр ҡай ы ы уны үҙенә кәләшлеккә алырға тырыша икән.

– Күпме ора ағыҙ, шул саҡлы түләргә ризамын,– тигән хәлифәттең тәүге хәлифе Әбү Бәкер.

– Юҡ инде,– тип уға ҡаршы төшкән Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең ҡыҙы Фатимаға өйләнгән Али батыр, нимәгәлер өмөтләнеп.– Батша ҡыҙҙары атылырға тейеш

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 22



түгел. Кейәүҙе ул үҙе айла ын.

Хаҡ үҙ менән бәхәсләшеү ҡыйын. Мәртәбәле ғәрәптәр берәм-берәм Шә ребаныу алдынан үтә башлайҙар. Бына ҡыҙ ҡашына яуҙарҙа арыҫландай алышҡан, исламға йәне-тәне менән бирелгән Әбү Бәкер килеп баҫа.

— Әбү Бәкер хәҙрәттәре оло хөрмәткә лайыҡ, затлы ла,— тип яуаплай ҡыйыу ҡыҙыҡай, — тик миңә кейәү булыр өсөн ул үтә ҡарт.

Быны ишетеп шатланған пәйғәмбәр кейәүе Али батыр хәҙер ысынлап үҙ бәхетен ынап ҡарамаҡ була:

— Али — ғәрәптәрҙең беренсе батыры, даны тирә-яҡҡа таралған,— ти хәйләкәр Шә ребаныу.— Әммә уға кейәүгә сыҡ ам, теге донъяла уның ҡатыны изге Фатима күҙенә нисек күренермен?

Ҡыҙҙың зирәклегенә хайран ҡалған Али йә әт кенә ситкә китә. Сират хәҙер Али батырҙың улдарына килеп етә. Башта өлкән улы Хәсән ибн Али килә. Әммә ҡыҙыҡайҙың яуабы уға ла ҡәтғи:

— Хәсән миңә йәше, заты менән дә ярарлыҡ кейәү,— ти ул.— Тик уның минән башҡа ла бисәләре күп. Ҡөрьән талап иткәнсә, уларҙың әр ҡай ы ына ҡалай итеп берҙәй иғтибар бүлә алыр икән ул?!

Затлылар сафы бөтөп бара, ә ҡыҙыҡай аман хужа ыҙ. Аптырағас, уның алдына елтерәтеп Хәсәндең бер туған энекәше Хөсәйенде килтереп баҫтыралар. Хөсәйен әле өйләнмәгән, йәш, оялсан, йәнә, Али батырҙың улы булараҡ, затлы ла. Шә ребаныу уны йылмайып ҡаршылай:

— Бына ул миңә, исма ам, әр тарафтан тура килә,— тип ризалаша, ул ни айәт. — әр кем үҙ тиңен табырға әм ҡәҙерләргә тейеш,— тип өҫтәй.— Шун ыҙ ер йөҙөндә бәхет юҡ...

Бына шулай башлана ғәрәптәрҙең Византия, Рум менән типә-тиң алышҡан бөйөк фарсылар илен буй ындороу эштәре. Ошонан уң ике быуат сама ы Иран биләмәләрендә ғәрәп теле, ғәрәп ғөрөф-ғәҙәттәре, ғәрәп мәҙәниәте хөкөм өрә, меңәр йыл халыҡҡа хеҙмәт иткән Заратуштра тәғлимәте ислам тарафынан ҡыҫырыҡлап сығарыла.

Әммә исламды ҡабул ит әләр ҙә, иранлылар ят телде, көсләп тағылған ғөрөф-ғәҙәттәрҙе үҙ енмәйҙәр, тарих төпкөлдәренән килгән үҙҙәренең бөйөк мәҙәниәтенә тоғро ҡалалар. Иран ша тары тоҡомо яңынан тергеҙелә, хакимиәткә саманый нәҫелле хакимдар менеп ултыра. Яңынан фарсы телендә яңы әҙәбиәт, мәҙәниәт барлыҡҡа килә. Әҫәрҙәрен халыҡтың өйләш телендә яҙған Әбү Абдаллах Рудакиҙы хәҙер кемдәр генә белмәй! Шулай әр тарафта саманыйҙар үҙаллылыҡ даулай, ҡәҙимге көслө дәүләттәрен аяҡҡа баҫтырырға тырыша. Шуға ла хәлифәт менән саманыйҙар ара ындағы тартышты ис тә тамамланған тип булмай.

Бына Рей ҡала ы ла — хәлифәт менән саманыйҙар ара ындағы күптәнге бәхәс йомғағы. Дүрт-биш йыл сама ы элек кенә ул яңынан хәлифәт ғәскәрҙәре тарафынан яулап алынғайны. Бағдадтан әйтеп ебәреүҙәренсә, Рей ҡала ы хакимдары илселек сәфәре өсөн аҙыҡ-түлек, башҡа кәрәк-яраҡ йыйып әҙерләп торорға тейеш.

Ләкин ғәрәптәрҙең өмөттәре бында ла аҡланманы. Рей ҡала ы башлығы итеп тәғәйенләнгән Әхмәт ибн Али урынында булмай сыҡты. "Ашығыс эш менән Хува ҡала ына китте",— тинеләр. Белмәҫ ең, әллә ысынлап та ашығыс йомошо булған, әллә илселек менән осрашмаҫ өсөн шулай ҡасып киткән. Тик бер ни эшләр хәл юҡ, аҙыҡ-түлек еҙ нисек йыраҡ юлға сыға ың? Ҡасҡалаҡ Али улы Әхмәтте көтөп каруан Рей ҡала ында, эш еҙлектән яфаланып, йәнә ун бер көн ятты. Унда ла ҡайтмағас, ике көнлөк урау юл үтеп, үҙҙәре Хуваға уғылып китергә мәжбүр булды...

Бынан уң ғәрәп илселеге ҙур ауырлыҡтар менән Симнанға, унан Дамғанға

килде. Тик бында ла уларҙы көтөп тормағандар, илселекте аҙыҡ-түлек, кейем- алым кеүек кәрәк-яраҡ менән тәьмин итергә ашығып бармайҙар. Кире енсә, Бағдадтан алыҫлаша барған айын хәлифәткә буй онмаҫка тырышыусылар, хатта дошманлыҡ хисе менән ҡараусылар артҡандан-арта барҙы. Табаристанда хәлифәт дошмандары әләүиҙәр, исламды анламаусы ҡарматтар оялаған булып сыҡты. Хәйер, хәлифәт Иранды яулап ал а ла, ундағы исламғаса көслө булған, әлеге Заратуштра тәғлимәтен тамам ҡыҫырыҡлап сығара алғаны юҡ әле. Мәжүси маздасылар хөкөм йөрөтә был тирәлә. Ярай әле, илселек ис көтмәгәндә Дамғанда ошо маздасылар ғәскәре башлығы, хәлифәттең ҡан дошманы Ибн Ҡаранды күреп ҡалды. Шуға бында туҡталыу илселек өсөн үтә хәүефле ине. Арыған-талсыҡҡан каруан йә әт кенә ҡабаттан ҡуҙғалып, күп михнәттәр менән Ирандың иң ҙур ҡалаларының бере е Нишапурға килеп йығылды.

Ләкин илселеккә бында ла әллә ни ярҙам итә алманылар. Сөнки уларҙы ҡаршы алырға тейеш хәлифәткә тоғро Нишапур сардары Лейла Ибн Ноғман улар килгәнсе үк үлтергән булып сыҡты.

Өмөттәре киҫелә барған илселәр артабан осраған вағыраҡ ҡаласыҡтарҙы урап үтеп, тура Мерв ҡала ына килде. Бында туҡталмай булмай, сөнки алда – йәйрәп ятҡан сүллек. Шуға ла Ҡушмаха тигән ҡышлаҡта дөйәләргә әм кешеләргә өс көнлөк ял биреү бик тә файҙалы булды. Юҡ а, тамаҡтарҙы ҡырып ҡан ыратыр ҡоро ел, ҡом бурандары аша шундай киң сүллекте юғалтыуҙар ыҙ ғына үтә алырҙар инеме? Йәнә шуны ы ла бар: сүллектә ҡораллы өжүм хәүефе әҙерәк. Өйрәнелгән уҡмаҡтарҙан ташбаҡа аҙымы менән бара бирә ең...

Сүллектән сыҡҡас, тәүге күргән ҡалалары Амул* булды. Унан йә әтләп Джейхун* йылға ын кистеләр ҙә Та ир Али рибатына, йәғни нығытылған сик буйы Афирабр ҡала-кәлгә енә килделәр. Әлбиттә, бында тағы ял итеп китергә булыр ине, иркен каруан арай ҙа бар. Ләкин илселеккә ис тә тотҡарланырға ярамай, юлда ваҡыт бушҡа күп сарыф ителде. Шуға юл буйы ҡалаларында башҡаса туҡтамайса, түтә Бохараға килеп төштөләр. Каруанды аҙыҡ-түлек, башҡа кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеү йә әтендә бында күп эштәр ҡаралған. Тура кил ә килә бит, илселекте Бохарала көтмәгәндә шәреҡтең билдәле ғалим-географы, әмир арайы вәзире Әбү Абдаллах Мөхәммәт Ибн Әхмәт Әл Джейхани үҙе ҡаршы алды. Джейхани саманыйҙар Ираны кеше е бул а ла, ғәрәптәргә яҡшы ҡарай. Ул, күрә ең, Рудаки ҡатнашҡан "Уңыш байрамы" тантана ын да онотмаған, илселекте ул яҡты йөҙ менән ҡаршы алды. Шунда уҡ ярандарына юлсыларҙың барлыҡ үтенестәрен ҡәнәғәтләндерергә, ял итеү өсөн әйбәт йорттарға урынлаштырырға ҡушты.

Ләкин вәзир Джейхани нисек кенә ҡунаҡсыл, булдыҡлы булма ын, илселек мохтажлыҡтарын бер үҙе генә хәл итә алмай. Унан... Әхмәт хәҙрәттәрендә Бохара әмиренә тапшыра ы хат та бар...

Шуға илселек етәкселәре вәзир Джейханиҙан ныҡыша-ныҡыша Бохара әмире Наср Ибн Әхмәттең үҙе менән осраштырыуҙы талап итә башланылар. "Әмир менән генә хәл итер мө им мәсьәләләр бар", – тинеләр. Тик вәзир был ныҡышыуҙарға ниңәлер йылмая биреп кенә ҡуя ине, ни айәт, риза булды.

"Бохара әмире менән едти мәсьәләләр хәл итеү" хаҡында үҙ сыҡҡанда вәзир Джейханиҙың йылмая биреп ҡуйыуын Әхмәт Фаҙлан улы хаким арайына килеп ингәс кенә аңлағандай булды. Сөнки "Бохара әмире" тип түбәнселек менән ололап әйтелгән дәрәжәнең хужа ы 15-16 йәштәр генә тирә е, битендәге бала йөнө лә нығынып етмәгән йәш үҫмер икән дә ба а!

---

**Чарджоу.*

**Аму-Дарья.*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 24



Әммә илселәр башта ҡаушап ҡалғандай бул алар ҙа, үҙҙәрен йә әт ҡулға алып, әмиргә торошло ихтирам менән баш эйҙеләр.

— еҙ минең әфәндемде, Мөҡтәдир хәҙрәттәрен, Алла унын үҙенә, яҡындарына оҙон ғүмер бир ен,— тине Бохара әмире Наср, доға ҡылғандай уҙып, — ни хәлдә ҡалдырып киттегеҙ?

— Хәйерле сәғәттә. Алла уға хәйерен арттыр ын,— тине Әхмәт Фаҙлан улы.— Дәүләте нығ, ғәскәре көслө...

— еҙҙең ғәли йәнәптәре шәрәфенә унын мәктүбе лә бар ине,— тине бер аҙҙан илселек етәксе е Сусан Әр-Расси кеселеклелек менән.

— Уҡығыҙ!

Сусан Әр-Расси илселек сәркәтибе Фаҙлан улы Әхмәткә ишара я аны. Уны ы хәлиф исеменән яҙылған хатты, шартына килтереп, ҡысҡырып уҡып сыҡты. Унда бойороҡ рәүешендә Ибн Әл Фураттың мөлкәтен тартып алып, хәрәзмле Әхмәт Ибн Мусаға тапшырырға, теге йәки был ҡамасаулыҡ ҡылма ындар өсөн, Бохара әмиренә үҙенең ҡул аҫтындағы Хәрәзм вәлиенә ҡәтғи күр әтмә ебәрергә ҡушылғайны. Хәлиф йәнәптәре әмир Насрға шундай уҡ күр әтмәне Болғарға барасаҡ илселектең именлеген аҡлау өсөн ғәскәри төркөм бүлеүҙе талап итеп "Төрк ҡапҡа ына", йәғни Джурджаниялағы Өс йорт хәрби нығытма команда ына ла ебәрергә ҡуша.

Бохара әмире хатты иғтибар менән тынлап, бер аҙ үҙ еҙ ултырҙы.

— Ибн Фураттың мөлкәтен ҡабул итеп алыр Әхмәт Ибн Муса үҙе ҡайҙа ун?— тип ораны аҙаҡ.

— Беҙ уны ҡай ы бер эштәр менән Бағдадта ҡалдырып киттек. — Сусан Әр-Расси шулай яуапланы. — Ул беҙҙе оҙаҡламай ҡыуып етергә тейеш.

Әмир Наср йәнә бер аҙ уйланып торғандай булды ла:

— Баш өҫтө, минең хакимым, мөьминдәр әмире Джафар Әл Мөҡтәдир әмерен тынлайым әм буй онам, Алла уға оҙон ғүмер бир ен,— тине.— Хәрәзмгә лә, Өс йорт сардарына ла тейешле күр әтмәләр ебәрелер...

Әмир Наср шулай тине әм үҙендә торҙо. Әлеге ҡалаларға сапҡындарын ебәрҙе. Ләкин илселек ағзалары бында ла иртәрәк шатланған булып сыҡты. Хәрәзм Иран саманыйҙары пайтәхете Бохараға әм бер үк ваҡытта хәлифәт үҙәге Бағдадҡа бойондороҡло булыуына ҡарамаҫтан, ундағы тәртиптәр аман да исламғаса булған мәжүсилек ҡалыбында. Хакимдары ла, үҙҙәрен исламғаса булған боронғо сасаный осоро арйән аҡ өйәктәре анап, ғәрәптәрҙе түбән мәҙәниәтле баҫҡынсылар тип кенә ҡарамаҡсылар; мәжүси Раббыларына йә асыҡтан-асыҡ, йә йәшерен табыныуҙарын дауам итәләр. Шуға ла Ибн Әл Фурат мөлкәте хаҡында Бохара әмире күр әтмә ен ал алар ҙа, уны үтәргә бик үк ашығып барманылар. Кире енсә, Ибн Әл Фураттың тоғро кеше е тартып алынған мөлкәткә хужа булырға тейеш Әхмәт улы Мусаға ҡаршы мәкерле эш башланы. Хәлифәт кеше е Муса илгә ҡурҡыныс енәйәтсе тип иғлан ителә әм, тиҙҙән тотолоп, зинданға ябыла. Әммә был хаҡта илселек бер ни ҙә белмәй, уны көтөп ятыуын дауам итә. Тик, билдәле, Әхмәт Ибн Муса килмәй. Ул булмағас, Болғарға хәрби нығытма төҙөү өсөн алып китә е дүрт мең муссайаб динары ла юҡ. Аҡса ыҙ ғәрәп илселеге ҡайҙа ҡуҙғала ал ын?! Бер ни эшләр хәл юҡ, илселек яҙмышы йәнә әләкәт алдында ҡала. Тағы ай сама ы ваҡыт ошондай билдә еҙлек шарттарында әрәмгә үтә. Риза ыҙлыҡтар, өмөт өҙлөк ауаздары хәҙер илселек кешеләре ара ында ла көндән-көн йышыраҡ ишетелә башланы. Күрә ең, мөлкәтен аҡлап ҡалырға теләгән Ибн Әл Фурат кешеләре бында ла хәйләле мәкерҙәрен таратырға өлгөрҙө. Хатта Болғар кеше е Абдулла Башту улы ла, үҙ иленә дүрт мең динар алып ҡайтыуҙы нығыраҡ ҡайғырта ы урында: "Бында ятыуҙан ни фәтеүә, Муса улы Әхмәт килә ҡал а, беҙҙе ҡыуып етер әле,—

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 25



тип юлға сығыуҙы ныҡыша башланы.— Был яҡтарға ҡыш ҡапыл килә, хәҙер үк төркиҙәр яғына ҡуҙғалма аҡ, Болғар иленә юл бөтөнләй киҫеләсәк".

Әйтә е түгел, былары ла хаҡ үҙҙәр. Ай буйы Бохарала ятып, барлы-юҡлы мөлкәттәре, аҙыҡ-түлектәре лә юҡҡа сығып бара. Ә иң ҡурҡынысы — илселек кешеләренең рухы төшә, ҡасып китеүселәр ҙә бар. Сусан Әр-Расси менән Әхмәт ибн Фаҙлан ҡыҫҡаса ғына кәңәшләшеп алғас, Хәрәзмгә үҙҙәренә барырға, хәлде шунда, урында, асыҡларға килештеләр. Бының өсөн улар ҡайтанан Джейхун йылғаына барып, Хәрәзмгә саҡлы карап ялларға мәжбүр булдылар. Хәрәзм бынан яҡын түгел, ике йөҙҙән ашыу фарсах*. Шуға шәп ағымлы, тулы ыулы Джейхун буйлап бер нисә тәүлек ғазаплы йөҙөргә тура килде. Етмә ә ҡаты ыуыҡтар ҙа башланғайны.

Ләкин Хәрәзмдә илселәр өсөн тағы сәйер хәлдәр башланды.

Әйтә е юҡ, Бохаралағы ымаҡ, хәрәзмша Мөхәммәт Ибн Ираҡ та илселәрҙе яҡты йөҙ менән ҡаршыланы. Йәшәр өсөн уңайлы урындар табырға ҡушты, хатта бүләктәр таратты, "Ҡәҙерле ғәрәп ҡунаҡтары әр төрлө хәстәрлеккә лайыҡ. Мохтажлыҡ кисермә ендәр",— тине. Ләкин тыштан өтәләнеп тор а ла, эстән Мөхәммәт Ибн Ираҡ, күрә ең, бөтөнләй икенсе төрлө уй йөрөттө. Тәүҙә ул илселек етәкселәрен ҡабул итмәй йонсотто, уларҙың рәсми ораүҙарына ла асыҡ ҡына яуап бирмәне. Аптырағас, ғәрәптәр үҙ белдектәренә Хәрәзмдә булырға тейеш Әхмәт Ибн Мусаны эҙләп тә, орашып та ҡараны. Әммә уның да эҙенә төшә алманылар. Әхмәт ибн Фаҙлан, ни айәт, уңғы сараны ҡулланмаҡсы булды. "Хәлиф ғәли йәнәптәре Джафар Әл Мөҡтәдирҙең Болғар батша ына тәғәйенләнгән мәктүбендә уға дүрт мең муссайаб динары ебәреүе хаҡында әйтелгән,— тип яҙҙы ул.— Уны еҙҙән, Хәрәзмдән, алырға кәрәклеге хаҡында ла күр әтмәләр бар. Аҡса табылмай икән, беҙ сәфәрҙе лә дауам итә алмайбыҙ. Хәлиф ғәли йәнәптәренә ни тип яуап бирербеҙ?"

Был яҙманы Фаҙлан улы хәрәзмша ҡа тапшырта алды. Ләкин уның ораyы тағы яуап ыҙ ҡалды, хәрәзмша аҡсаға әйләндерелергә тейеш Ибн Фурат мөлкәте хаҡында ла бер ни белмәмешкә алышты.

Ни айәт, бер нисә көндән уң хәрәзмша илселектән тик Сусан Әр-Расси менән Фаҙлан улы Әхмәтте генә ҡабул итәсәген белдерҙе. Ләкин быларының ишектән күренеүҙәре булды, хөрмәтләп ҡаршылай ы, үтенестәрен тыңлай ы урында, асыулы ҡуҙғып, көтөлмәгән тупаҫ үҙҙәр әйтеп ташланы:

— Мин еҙҙең берегеҙҙе лә ул төрки далаларына үткәреп ебәрә алмайым. Йыртҡыс хайуандар ымаҡ йәшәгән, дин еҙ, ҡырағай ҡәүем биләмәләре аша барырға тура киләсәген белә әгеҙме? — тине ул яр ып. — Улар унда бихисап, ниңә күрәләтә үлемгә барырға? Шул Төрк Тәкин мәкеренә ышанып башығыҙҙы балта аҫтына ҡуя ығыҙмы?!

Хәрәзмша тың үҙ-үҙен тотошона башта ғәжәпләнә әләр, Төрк Тәкингә ҡағылышлы үҙҙәре уларҙы бөтөнләй аптыраштa ҡалдырҙы:

— Төрк Тәкингә ни булған? — ти алдылар илселәр ике е бер юлы.

— Шуны ла белмәй егеҙме? — Хәрәзмша үҙ үҙҙәренең быларға барып етеүенә ҡәнәғәт ине, шикелле, күҙҙәре хәйләле йылтырап китте. — еҙҙең бар тырышлыҡтарығыҙ — ана шул Тәкин этлеге, уның хәйлә е. Бында уны яҡшы беләләр, элегерәк йәшәп тә киткәйне. Болғар тарафтарында ла күп сыуалды. Мәжүсиҙәр ара - ында тимер сауҙа ы менән шөғөлләнде. Күрә ең, Болғарҙың байлығы хаҡындағы беҙгә өйләгән әкиәтен Бағдадҡа ла еткергән. Йә, кем яҡшы белә Болғарҙы, беҙме, әллә Бағдадмы? Бағдад ҡайҙа ята ла, Болғар ҡайҙа? Ана, шул-шул... Ниндәй баш ыҙлыҡҡа барыуығыҙҙы аңланығыҙмы инде? Ташлағыҙ буш хыялығыҙҙы, уң

---

**Фарсах — ыбайлының бер сәғәт эсендә үтер юлы, 7 саҡрым сама ында.*

булмаҫ борон...

– Беҙ үҙ иркебеҙҙә түгел, илселекте Хәлифәт ебәрҙе,– тине ибн Фаҙлан, ҡаушауын еңеп.– Хәлиф ғәли йәнәптәре күр әтмәләре еҙҙең өсөн дә мотлаҡ түгелме ни?

Был тәүәккәл үҙҙәргә хәрәзмша бер аҙ ҡаушағандай була ла, күренеп тора: башҡа саманыйҙар ымаҡ уҡ, ғәрәптәрҙе яратып бөтмәй.

– Мин бит сәфәрегеҙҙең хәүефле булыуына хафаланам,– тине ул, ҡуҙғыуын баҫа төшөп.- Бағдад хәлифе, Алла уға бәрәкәттәр өҫтә ен, Итил, Урал тарафтары менән бәйләнешен беҙҙең әмир Әхмәт Ибн Наср аша эшләй алмаймы ни? Итил, Урал тирә е дәүләттәре менән беҙ борон-борондан тығыҙ аралашып йәшәйбеҙ. Ә еҙгә бына бында килеп етеү өсөн генә лә әллә күпме киң даръялар, сүллектәр гиҙергә тура килгән. Тағы күпме шундай хәүефтәр көтөүен тойомлай ығыҙмы? Бағдад өсөн быны беҙ уңышлыраҡ үтәй алыр инек. Сөнки Болғарҙа хәҙер беҙҙең руханиҙар ҙа бик күп. Мөьмин мосолмандар исеменән Итил, Урал ҡәүемдәре менән өйләшергә беҙҙең әмиребеҙ күберәк хоҡуҡлы түгелме ни? Уның башы аша туранан-тура Бағдадтан тороп өйләшеү Әхмәт Ибн Насрға ҡарата ғәҙел еҙлек, анға уҡмау булмаҫмы?

Ғәрәп илселеге етәкселәре, ни әйтергә белмәй, бер-бере енә ҡарашып, ҡапылда тынып ҡалдылар. Хәрәзмша быны килешеү тип аңланы, шикелле, урынынан ҡалҡынып, уңайлыраҡ ултырҙы ла киҫәк кенә үҙ ҡарарын әйтте:

– Мин кисекмәҫтән әмир Әхмәт Ибн Насрға мәсьәләне аңлатып хат яҙасаҡмын. Әйҙә, еҙҙе төркиҙәр тарафына үткәреп ебәрергәме, юҡмы – Бағдад хәлифе менән үҙ-ара килешеп өйләш ендәр. Ә шуға тиклем бынан берегеҙ ҙә бер ҡайҙа ҡуҙғалмаясаҡ...

Быны ы илселәрҙе бөтөнләп аяҡтан йыҡты.

– Был ни тигән үҙ ул тағы?! – Әхмәт Фаҙлан улы түҙмәне. – Болғарға барыу, уның өсөн тәьминәт мәсьәләләрен еҙҙә хәл итеү, башҡа әр төрлө ярҙам күр әтеү тура ында Бағдад хәлифе ебәргән хатта бер мәртәбә яҙылған бит инде. Ниңә уны икенсегә борсорға? Унан ни мәғәнә?!

Ләкин хәрәзмша сигенмәне:

– Әйттем бит, кәрәкмәгән эш был, Төрк Тәкин этлеге генә, тип. Хәлиф ғәли йәнәптәренә ныҡлап төшөндөрөргә кәрәк был мәкерле хәйләне, аңлар ул, әр эштең үҙ яйы бар...

Аптырағас, илселәр хәрәзмша асыулы телгә алған Төрк Тәкиндең үҙенән орарға булдылар.

– Бәлки, аңлатыр ың,– тине Фаҙлан улы ҡырыҫ ҡына, хәрәзмша әйткәндәрҙе ҡыҫҡаса ҡабатлағандан уң. – Нимә тип ҡаршы төшә ул сәфәр барышына? Ниңә быларҙы инең этлегең анай?

Хәрәзмша тың ҡайҙа ҡайырыуын, уның нимәгә хәүефләнеүен Төрк Тәкин, әлбиттә, Фаҙлан улының теүге үҙҙәренән үк аңлап алды. Ләкин ҡапыл ғына асылманы, уйланғандай торҙо. Хәрәзмша Мөхәммәт Ибн Ираҡтың Төрк Тәкин тура ындағы үҙҙәрендә хаҡлыҡ та юҡ түгел. Ысынлап та, ул Болғарҙа, шәреҡ илдәрендә, шул иҫәптән Хәрәзмдә лә, Урал мәғдәне, тимер сауҙа ы менән шө рәт ҡаҙанған кеше. Урал тарафтары бай быңдай хазинаға. Яңы эраға тиклем икенсе мең урталарынан башлап Урал мәғдәне әм унан эшләнгән ҡорал, көнкүреш, хужалыҡ кәрәк-яраҡтары Төньяҡ Айропанан Ҡытайғаса киң биләмәләрҙә таралыу таба. Көньяҡ Урал мәғдән сығарыусылары менән бигерәк тә борондан уҡ бына ошо Хәрәзмдең бәйләнештәре тығыҙ. Сөнки Хәрәзмдең үҙенең мәғдән ятҡылыҡтары юҡ, шул арҡала Урал буйы тимер эшкәртеү эштәренә туранан-тура бәйле. Урал мәғдәненә алмашҡа Хәрәзм тимер эшкәртеү, хужалыҡ мәнфәғәттәре өсөн кәрәкле ҡорамалдар бирә... Бына нимә борсоуға алған хәрәзмша ты, ғәрәптәр ул

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 27



тарафтар менән бәйләнешкә ин ә, Урал мәғдәненең Хәрәзм башы аша тура хәлифәткә китеүенән ҡурҡа. Ләкин, хәлифәткә буй оноулы ил булыу арҡа ында, ул быны туранан-тура ярып әйтә лә алмай.

Төрк Тәкин ошолар хаҡында, йомшарта биреберәк, илселек етәкселәренә үҙ фекерен еткерҙе. Ләкин былдай хәлдә илселектең артабанғы яҙмышы тағы ла ҡатмарлаша төшә түгелме?

Артыр бейҙән кәңәшораусы булманы, күрә ең, уға хеҙмәтсе итеп кенә ҡаранылар. Әммә ул, Төрк Тәкин менән килешкән хәлдә лә, хәрәзмша Мөхәммәт Ибн Ираҡ ҡылыҡтарын тәрәнерәк аңлай ине, шикелле.

***

...Йыл әйләнә енә тиерлек болот күрмәгән Хәрәзм үҙе лә "Ҡояшлы ер", "Ҡояш батшалығы" тигәнерәк мәғәнә аңлатҡан. Был төбәк халыҡтарының ғүмер баҡый утҡа табыныуҙары ла, бәлки, юҡтан түгелдер. "Кешелек бишеге" тип тә әйтәләр ошо тарафтарҙы. Бул а ла булыр, кешелек рухиәте, донъя яралыуы хаҡындағы барса бөйөк дини тәғлимәттәр әм уларҙы тыуҙырыусы барса пәйғәмбәрҙәр ҙә тик ошо тирәлә яралған: Будда – индостанда, Конфуций – Чинда, Моисей – Мысырҙа, Иисус – Ирусалимда, Мөхәммәт – Мәккәлә. Ләкин был тәғлимәттәрҙең бары ынан да боронғораҡ, исламғаса мең йылдар сама ы элек тыуған, изге китабы Апастак* тип аталған, тағы бер бөйөк дин бар. Уның пәйғәмбәре Заратуштра нәҡ бына ошо Хәрәзмдә тыуған, уңыраҡ уның исемен дин үҙе лә алған, Зароастризм тип аталып киткән.

Боронғо Хәрәзм, ис шик еҙ, ныҡ алға киткән, яҙма мәҙәниәтле ил булған. Артыр бей был хаҡтағы мәғлүмәттәрҙе Рум, Чин, Әрмән яҙмаларында ла күргәне бар. Ағиҙел буйҙарынан сауҙа каруанына хеҙмәтсе булып ялланып, тәү ҡат Хәрәзмгә килгәс тә, ул бындағы сыбар кейемле шау-шыулы баҙарҙарға, бейек-бейек мөабәт мәрмәр арайҙарға, еләҫ, йәшел баҡсаларға иҫе китеп ҡарап йөрөгәйне. Бай йәшәйҙәр, ер эше менән шөғөлләнәләр, мал үрсетәләр, ҡалалар төҙөйҙәр...

Ә тағы ла боронғораҡ сығанаҡтарҙан күренеүенсә, хәрәзмлеләр, ысынлап та, – бик ҡәҙимге халыҡ, уларҙың тамырҙары тарих барып етер төпкөлдәрҙә үк ята, арйән* ҡәбиләләренең бер ярсығы анала. Улар – Иҫке Ғә еттә* үк телгә алынған Нух пәйғәмбәрҙең улы Йәфәт әм уның балаларынан таралған тоҡом.

Арйәндәр, йәғни аҫыл йәндәр – тоғролоҡло, намыҫлы ҡәбиләләр, башта Урта Азия Яҫы таулыҡтарында күсеп йөрөй. Аҙаҡ уларҙың бер өлөшө ҙур-ҙур төркөмдәр менән йәйрәп ятҡан дала аша Көньяҡ Уралға күсә, ә ҡай ылары Көнсығыш Айропаға уҡ үтеп китә.

Ә Азияла ҡалған арйән ҡәбиләләренең бер өлөшө, ғалимдар әйтеүенсә, индостанда төпләнә, индо-айропа тоҡомона нигеҙ ала. Икенсе өлөшө көньяҡ-көнбайышҡа китә әм ошо Хәрәзм биләмәләренә килеп урынлаша. Бына шунан уң Хәрәзм тиҙ арала нығынып, байып китә, сәскә атҡан көслө дәүләттәрҙең бере енә әүерелә. Хәйер, быны ы –Хәрәзмдең бәхете лә, бәхет еҙлеге лә: байлыҡ йыш ҡына юлбаҫарҙарҙы ылыҡтыра, Хәрәзм байлығы ла Ассирия уғыш суҡмарҙарын ым ындыра. Ҡорал менән яулай алмағас, улары үҙҙәренең ҡан көҫәүсе, күпләп ҡорбан килтереүҙе талап иткән уғыш Раббылары Молох тәғлимәтен Вавилон, Иран, шул иҫәптән Хәрәзм халыҡтарына ла көсләп тағалар. Заратуштра пәйғәмбәр нәҡ ошо мәлдә йыртҡыс холоҡло, ҡан ыҙ Молох тәғлимәтенә ҡаршы

---

**Авеста (белем, тәғлимәт).*
**Арий.*
**Тәүрат, Ветхий Завет.*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 28



сыға, кешеләргә ғәҙеллекте, әҙәмиәтте*, аҡыл менән эш итеүҙе талап иткән Заро-астризм тип аталасаҡ кешелекле динде, Апастакты тәҡдим итә. Был ваҡиғалар миләдигә саҡлы VI-V йөҙ йыллыҡтарға тура килә.

Оҡшай Заратуштра дине халыҡтарға, инде мең йылдан ашыу хеҙмәт итә. Хатта ислам да тулы ынса хужа була алмай әле был тарафтарға. Тыштан буй оноу белде-р әләр ҙә, эстән аман үҙҙәренекен ҡайыралар. Бына хәрәзмша та Болғарҙың үҙе-нең башы аша туранан-тура ғәрәптәргә мөрәжәғәт итеүен дә, шулай уҡ хәлифәттең дә ғүмер баҡый дала менән тығыҙ эш иткән Хәрәзм, Бохара мәнфәғәттәрен анға уҡмай эш йөрөтөүҙәрен кисерә алмай. Көньяҡ Урал менән Хазар диңгеҙе* аралығындағы ик еҙ-сик еҙ далаларҙа унын арйән ҡан-ҡәрҙәштәре лә бихисап. Хәҙер килеп уларҙы үҙ еҙ-ни еҙ ғәрәптәргә тотторопеп ебәр енме?! "Бағ-дадтан тороп өйләшеүгә ҡарағанда, беҙҙең әмиребеҙ быға күберәк хоҡуҡлы түгел-ме?" – тип юҡҡа ғына яу күтәрмәй бит инде ул. Шуға хәрәзмша тан нимәлер көтөү файҙа ыҙ. Ләкин башына килгән был уйҙарын Артыр бей берәүгә лә белдермәне. Хәйер, кемгәлер әйтеп ҡара а ла, унан ғына ни фәтеүә?

Ошонан уң илселек ни эшләргә белмәй, бөтөнләй аптырашта ҡалды. Көндәр буйы тегендә уғылып, бында ни эшләргә белмәй ваҡытын бушҡа уҙғарҙы. Хәрәзм ша ы Мөхәмәт Ибн Ираҡ ҡашына инеп, ҡайтанан өйләшеп, аңлашып ҡарарға ла уйҙары юҡ түгел ине. Тик уны ы башҡаса ҡабул итмәне, күрә ең, был саманый аҡ өйәге Бағдадтан да бик үк ҡурҡып бармай ине...

Шулай тағы күпмелер ваҡыт үтте. Юлда йыйыла килгән әҙ-мәҙ аҙыҡ-түлек тә юҡҡа сыға бара, ыуыҡтар башланды, кейем- алым да бындағы шарттар өсөн бик наҡыҫ. Вәғәҙә ителгән дүрт мең муссайаб динары яҙмышы ла асыҡ түгел, илселек орауҙарына хәрәзмша тың яуабы ла, ярҙамы ла юҡ.

Кире боролоу тура ында уй булырға ла тейеш түгел, ундайҙарға хәлифәттә урын юҡ... Уйлаштылар-уйлаштылар ҙа: "Хәрәзмша тың мәкерҙәрен белеп булмай, имен саҡта китеп ҡотолайыҡ",– тип илле фарсах алыҫлыҡта ятҡан Джурджания-ға юлға сыҡтылар. Унда, төркиҙәр ҡапҡа ы Баб-Әт Төрк рибатында, хәрби нығы-тылған ҡәлғәлә, илселекте артабан ҡурсалап барыр ғәскәри төркөм бирергә тей-ештәр. Хәрәзмдә үтәй алмаған башҡа эштәрҙе лә унда башҡарып булыр, бәлки.

...Джурджанияла, ысынлап та, илселектең юлы унды, ни айәт, төрки далала-рын хәүеф еҙ үтер өсөн бейеп торған аттарға атланған бына тигән ғәскәри төркөм бирҙеләр. Өс айға етерлек икмәк, тары ярма ы, кипкән ит, башҡа аҙыҡ-түлек та-бырға, йылы кейемдәр атып алырға ярҙам иттеләр. Хәлифәт менән ик еҙ-сик еҙ төрки далалары ара ында ятҡан был ил Бағдад илселегенә, Иран саманыйҙарына ҡарағанда, тоғрораҡ булып сыҡты.

Әммә илселектең артабанғы юлы бында ла киҫелеп ҡалды. Мерв, Бохара, Хәрәзм юлында ваҡытты бушҡа сарыф итеп, илселек ныҡ уңлаған. Улар ары-би-ре иткәнсе был тарафтарға хас, осоп барған ҡоштар туңып тәгәрәрлек, ҡот осҡос ыуыҡтар башланып китте. Бындай шарттарҙа аттарҙың ғына түгел, хатта дөйәләрҙең дә ҡор ағына етер ҡалын ҡар кисеп, таныш булмаған ҡырағай далаға барып инеү аҡыл ыҙлыҡтың сиге булыр ине, моғайын. Аяу ыҙ ҡаты ҡыш тырна-ғына эләгеп, илселек хәҙер инде бик оҙаҡҡа торған ерендә туҡталып ҡалды. Рәжәп айы тамамланды, унан шағбан, рамаҙан, йәнә шәүүәл... Ниндәй ҙә оҙон булды был айҙар ғәрәптәр өсөн, ниҙәр генә күрмәне лә ниҙәр генә ишетмәне улар ошо ваҡыт. Йыл әйләнә енә эҫе ауа улап, ҡоролоҡто ғына күреп өйрәнгәндәр өсөн бындағы тәбиғәт бик ауыр, ҡар ҡатыш әсе ел үҙәктәргә үтә. Йылынайым тип

*Гуманизмды.
*Каспий диңгеҙе.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 29



мунсаға барған Фаҙлан улы Әхмәттең, ана, ҡайтып еткәнсе, еүеш аҡалы ап-аҡ булып уҡмашып, туңып ҡатҡан. Улар йәшәгән бүлмәләрҙә ыу боҙға әүерелеп, ҡуржыҡтар ярыла... Джейхун йылға ы ла ҡалын боҙ менән ҡапланған, уның өҫтөнән тыныс ҡына аттар, кешеләр, дөйәләр, ишәктәр әм мулдар йөрөп ята... Бер көндө ике әҙәмдең урманға утынға китеп, шунда дөйәләре менән бергә туңып үлеүҙәрен дә өйләгәйнеләр...

Шулай ҙа бушҡа үткәрмәне илселек ағзалары был ваҡытты. Шәүүәл айы урталарында сәфәрҙәрен дауам итеү әҙерлектәрен яңынан башлап ебәрҙе, күпләп төрки дөйәләре, аттар атып алды, аҙыҡ-түлек ҡаҙна ын тулыландырҙы... Шулай эш менән мауығып йөрөгән арала Джейхун дарья ында боҙҙар ирей башлағайны инде. Йылғаны аша сығыу өсөн дөйә тире енән ҙур юл тоҡтары тегергә ҡушылды. Урындағыларҙан Фалис исемле бер фарсы юл күр әтеүсе булып ялланды. Ни айәт, илселек тағы юлға сығырға әҙер ымаҡ ине. Тик каруанды кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеүсе Джурджания кешеләре, йылы кейемдәрҙе барлап сыҡҡас, уларҙы мотлаҡ күберәк алырға кәрәк (“ еҙҙе ул тарафтарҙа ыуыҡтарҙың тағы ла яманырағы көтә”), тип иҫкәртә ҡуйҙы.

Өҫтәп тағы йылы кейемдәр алырға тура килде. Тик бының ҡапыл кире яғы ла сығып ҡуйҙы. Оҙон өс ай буйы ыуыҡтарҙан интеккән халыҡ, алда уларҙың тағы ла ҡатыраҡ буласағын ишетеп, тамам киреләнде, тамуҡтың тағы ла әшәкерәгенә инергә теләмәне. Бағдадтан уҡ бергә юлға сыҡҡан бер нисә ханзада, йәнә Болғарҙа ислам диненә өйрәтергә тейеш мөғәллимдәр, хоҡуҡ белемдәрен таратыр факи тар юлды артабан дауам итеүҙән ҡырҡа баш тартып, тәртәләрен кирегә борҙо.

Нишләй ең, алда ятҡан хәүефле юлды хәҙер илсе Сусан Әр-Расси, әлеге Төрк Тәкин менән Болғар кеше е Барыс, исламды ҡабул иткән башҡорт Артыр бей, Джурджанияла юл күр әтеүсе булып ялланған фарсы Фалис, йәнә тағы бер нисә кеше менән генә дауам итергә тура килә. Әлбиттә, тағы ғәскәриҙәр, хеҙмәтсе ҡолдар, каруанды ҡарап барыусы бихисап башҡа кешеләр...

***

Ни айәт, ижри 309 йылдың Зу-ль-ҡада айының өсөнсө көнөндә* күп михнәттәр күргән илселек, яҙмыштарын Алла ы ихтыярына тапшырып, сәфәрҙәренең иң яуаплы арауығына – Болғарҙы айырып торған ик еҙ-сик еҙ төрки дала ына инеп китте. Билдә еҙлек баштан уҡ үҙен нык иҙҙерҙе, тәүге көндәрҙән үк Джурджания кешеләре иҫкәрткән ауырлыҡтар башланды. Ҡаты ыуыҡтар аралаш, тоташ ап-аҡ диуар булып яуған ҡар шаршауҙарын аяҡтан йығыр көслө бурандар алыштырҙы. Дөйәләр бата, ана, әле генә тағы берәү е йығылып та ҡалды, икенсе е... Аттар түҙемлерәк, барған ыңғай ҡар йоҡараҡ урындарҙа өҫкә сығып торған ҡоро үлән остарын дерелдәүек ирендәре менән әләктерергә тырышалар. Улары ла хәҙер йыш ҡына (беҙгә хәҙер барыбер тигәндәй) ҡарға бата- икерә бара, ҡыу аң – атлай, ҡыума аң – урынында ҡатып, бөршәйеп тик тора. Ә кешеләр уң? Дөйә йә ат өҫтөндә ҡуҙғала алмаҫтай ҡат-ҡат кейенеп, күҙҙәрен генә ҡалдырып, йөҙҙәрен сепрәк-сапраҡ менән бәйләп, әҙәм ынына ҡарағанда йыуан балаҫ төргәгенә оҡшаған кешеләрҙе асыҡ дала буйлап иҫкән әсе ел ыҙалай, әйтер ең, иңә бихисап энәләр ҡаҙала. Бындағы шарттарҙан уң Хәрәзм, хатта Джурджанияла кисергән ыуыҡтар йәйге көн алҡынлыҡтары ымаҡ ҡына тойола башлай. Дөйә үркәстәренә, ат ырттарына ҡуша туңғандай хәрәкәт еҙ ҡалған ҡараҫҡылар теҙмә енең осо-ҡырыйы юҡ, арттағылар килеп сыҡҡансы, алдағылары буранлы аҡ монарға инеп юғала. Бындай хәлдә каруанда тәртип аҡлау ҙа – ауыр эш. Кисә лә, ана, төнгөлөккә туҡталғас, ғәскәри төркөмдән бер нисә атлының ғәйеп булы-

---

**922 йылдың 4 марты.*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 30



уы асыҡланды. Ҡасып кирегә киткәндәрме? Хәйер, уларҙың был ҡылыҡтары ла – үлем менән шаярыу: күмәк булғанда әле кемгәлер ярҙам итеп була, ә төкөргән төкөрөгөң ауала туңыр, үтәнән-үтәгә киҫер әсе елле, осо-ҡырыйы күренмәгән ҡарлы далала япа-яңғыҙ нишләр ең?!

Фаҙлан улы Әхмәт үҙе лә, инде нисәнсе ҡат, сәфәренең ни менән тамамланырын күҙ алдына килтерә алмай ыҙаланып-ғазапланып килә. Белә ул, илселек әләкәткә осра а йә ҡуйылған бурысын үтәмә ә, иң тәүҙә уға, Фаҙлан улы Әхмәткә, яуап бирергә тура киләсәк. Хәрәм аҡсы ы Сусан Әр-Расси – өлкән кеше, илселеккә лә ул Фаҙлан улы Әхмәт кеүектәргә күҙ-ҡолаҡ булыу өсөн генә тәғәйенләнгән. Унан ярҙам көтөү файҙа ыҙ. Каруандағылар ҙа быны иҙә, барса күҙҙәр, өмөттәр үҙенә төбәлгәнен тойоп йөрөй Фаҙлан улы. Әммә нимә эшләй ала уң ул? Сәфәренең ярты ын да үтеп өлгөрмәгән, әммә Бағдадтан килгән юлдаштарының күбе е юҡҡа сыҡҡан. Ҡалғандарын да ошо шыҡ ыҙ далала туңдырып бөтөрмәҫме? Кисекмәҫтән берәй әмәлен тапма аң, башҡалар уның үҙен дә яҙмыш ҡосағына ташлап китмәҫ тимә.

Башҡалар ымаҡ сепрәк-сапраҡҡа төрөнөп, ыуыҡтан ыҙа сигеп, ауыр кисерештәр эсендә барған Әхмәт ибн Фаҙланды ҡапыл эргәлә генә әлеге Төрк Тәкиндең ҡысҡырып көлөп ебәреүе иҫкәндерҙе. Хәрәзмша хурлаған Төрк Тәкин сәфәр барышында иң бошонмаҫ, теремек кеше булды. “Әүәл Болғарҙа ла, Хәрәзм тарафтарында күп йөрөнө, тимер сауҙа ы менән шөғөлләнде”, – тип раҫлауында хаҡлы булғандыр хәрәзмша . Төрк Тәкин юл йөрөүҙә үҙен иркен тоя, ҡай ы саҡ юл күр әтеүсе Фалис та хатта уның кәңәштәренә ҡолаҡ ала. Өҫтөнә лә ул, башҡалар ымаҡ, ҡат-ҡат итеп нимә әләк ә шуны түгел, ә ел үтмәҫтәй йылы кейем кейеп алған. Шуға уның атына ла еңел, үҙе лә хәрәкәтсән. Тәкин-тимерсе эргә ендә әр саҡ башҡа төркиҙәр, бигерәк тә Бағдадтан уҡ илселек менән бергә сыҡҡан Артыр бей атлы мөслим башҡорт та урала. Уларҙы төркөмдәргә йыйып, үҙәренсә нимәлер бытылдауҙарына Әхмәт хәҙрәттәренең элек тә шиктәре ҡуйырып, асыуы килгеләй ине. Әле килеп, ошондай мәлдә Төрк Тәкиндең ҡапыл хахылдап көлөп ебәреүе уның үҙенән, илселек сәркәтибенең килбәт еҙ кәүҙә енән көләләр ымаҡ тойолдо.

– Нимә тип күҙ асҡы ыҙ ыуыҡта ауыҙ йырып бары ың? – тине ул иҙелерлек тупаҫлыҡ менән.

Төрк Тәкин асыуланманы:

– Баянан бирле бына был хеҙмәткәр,– Тәкин илселекте хеҙмәтләндергән берәүгә күр әтте,– ныҡыша-ныҡыша инән, Әхмәт хәҙрәттәре, орарға ҡуша: “Нимә теләй беҙҙең хужа-әфәнде, нимә тип беҙҙе ошондай ыуыҡта яфалай? Нимә кәрәген әйт ә, беҙ уны күптән үтәгән булыр инек. Хәҙер бул а ла әйт ен,” – ти.

Быны ына Фаҙлан улы Әхмәт үҙе лә йылмайып ҡуйҙы:

– Әйт уға,– тине ул, тыныслана, асыла төшөп. – Уларҙан миңә бер ни кәрәкмәй, тик: “Алла ы әкбәр! Алла ынан башҡа Раббы ҡөҙрәте юҡ”,– тип кенә әйтә ен.

орау биреүсе ғәрәп телен белә инеме, әллә шаярыуҙы аңланы, Төрк Тәкиндең тәржемә ен аҙаҡҡаса көтөп тә тормайса:

– Улай еңел генә булғас, ниңә башта уҡ әйтмәгән шуны,– ти алды.– Хәҙер үтәйбеҙ уны: “Алла ы әкбәр!”

Быны ына тирә-яҡтағылар бары ы ла ирек еҙҙән көлөп ебәрҙе.

Ошо кескәй генә шаярыу илселек ағзаларына йоҡонан уятҡандай, йән өрөп ебәргәндәй тәьҫир итте, ауыр уйҙарҙы ситкә ҡыуҙы. Буран да баҫылғандай тойолдо. Алда арҡырыға уҙылған ҡара ыҙат төҫмөрләнде. Яҡыныраҡ килгәс, уның ярай ы үк ҡуйы урман икәне асыҡланды. Ошонда туктап, ышыҡта ял итеп китмәк булдылар. Урманда ҡоро- оро күп ине. Кешеләр төркөмдәргә бүленеп, ҡай ы ы усаҡтар яҡты, ҡай ылары сатырҙар ҡорҙо, мөлкәттәрен барлап, хайуандарын ҡай-

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 31



ғыртты. Усаҡ йылы ы күңелдәрҙе лә яҡтыртты, көс бирҙе. Бары ын әҙерләп, ҡайнар сәй эсеп, тамаҡ туйҙырып алғас, донъя бермә-бер йәмләнде, унан, үҙ ҡуйышҡандай, ҡапыл әммә ен йоҡо басты...

***

Улар уянғанда буран баҫылғайны инде. Йә әт-йә әт кистән ҡалғанын ҡапҡылап алып, урмандан сығыуға, алда йәнә офоҡтарға барып тотошҡан ап-аҡ дала пәйҙә булды. Был көндө каруан туҡтамайса тиерлек көнө буйы барҙы. Яҡтыла хәрәкәт итеү уңайлы, аттар, дөйәләр ҡайҙа баҫырын белеп атлайҙар, төндәрҙәге ымаҡ соҡорға йә берәй упҡынға ҡолап барып төшөү хәүефе әҙерәк. Ләкин илселек етәксе е Сусан Әр-Расси менән Фаҙлан улы Әхмәткә сәфәрҙе көндөҙҙәрен генә дауам итеү уйынан кире ҡайтырға тура килде. Был тарафты яҡшы белгән әлеге Тәкин менән Артыр бей килделәр ҙә:

— Тирә-яҡта бушлыҡ тип алдана күрмәгеҙ,— тинеләр.— Был тарафтарҙа кейеҙ тирмәләрҙә көн күреүсе, малдары менән бер урындан икенсе урынға күсеп йөрөүсе ҡәбиләләр мыжғып тора. Ҡойроғо әллә ҡайҙа тороп ҡалған каруандың көнө буйы асыҡтан-асыҡ барыуы үтә хәүефле. Уларға күренмәүең, көн элгәре фашланмауың хәйерлерәк булмаҫмы?

Аҡыллы кәңәште кире ҡаҡманы илселек етәкселәре. Урманда ял итеп китер алдынан әлеге бер ҡатлы юлсыларының: “Нимәгә ыҙалай ул беҙҙе? Алла ы әкбәр! тип әйттереү өсөн генәме?"— тигән шаярыуынан уң был икәүгә Әхмәт ибн Фаҙландың да ышанысы арта төшкәйне. Юҡ а, хәрәзмша та Төрк Тәкингә ниндәйҙер мәкер тағып маташҡайны бит. Насар уйлыларға оҡшамағандар, әле лә белеп үҙ йөрөтә торғандарҙыр. Хәҙер каруан күберәк төндәрен хәрәкәт итә. Ҡояш сыҡҡандан уң башлыса йә соҡорло үҙән буйлап, йә йыш осраған ҡурғы-ҡыуаҡтарға ышыҡланыбыраҡ барыр булдылар. Көндөң икенсе ярты ы — ышыҡтағы тағы бер ял. Көндәр ҙә йылытыуға табан бара. Ә Фаҙлан улы Әхмәткә әлеге бер ҡатлы орау тынғы бирмәй: “Нимә тип ыҙалата икән ул беҙҙе? Алла ы әкбәр! Алла берәү!” — тип әйттереү өсөн генәме? Ысынлап та, ни өсөн? Нимә тип үҙенекен генә түгел, меңләгән йән эйә енең яҙмышын хәүефкә ҡуйып, әллә ҡайҙағы илде юллап сығып китте уң әле Фаҙлан улы? Нимә кәрәк уға? Болғарҙың мосолман булыуымы? Уның ҡыҫылышынан башҡа ла Болғар мосолманлаша бара бит инде. Джафар Әл Мөҡтәдир әмерен хөрмәт итепме? Хәйер, хәлифтең ни өсөн Әхмәтте ошо боҙло тамуҡ эсенә индереп ебәреү сәбәптәрен дә төшөнгәндәй ул. Сөнки Джафар Әл Мөҡтәдиргә илселек Болғарға барып, бурысын үтәп ҡайт а ла — шө рәт, шунда мәңгегә ятып ҡал а ла — дан. Бөйөктәрҙең яҙмыштары шулай. Әле лә, ана, Әхмәт кеүектәр баштан-аяҡ ҡар йә әннәмендә батып йөрөгәндә, хәлиф хәҙрәттәре йомшаҡ келәмдәр өҫтөндә шарап әм шәрбәт менән, сыр-сыу килтереп, кәнизәктәрен иркәләй торғандыр әле...

Әйҙә, шулай ҙа бул ын. Тик Әхмәт Фаҙлан улы үҙенең яҙмышына ла ис тә үкенмәй. Көнләшеү ҙә файҙа ыҙ. Әлбиттә, хәүефле сәфәр, телә ә, бармай ҡалыу юлын да табыр ине. Теләмәне, был тәңгәлдә үҙ уйҙары, үҙ ниәттәре бар уның. Күр әтергә тейеш донъяға Әхмәт ибн Фаҙлан үҙен. Джафар Әл Мөҡтәдир алдына ла, бәлки, сәфәр уңында Фаҙлан улы бөтөнләй башҡа сифатта килеп баҫыр...

Үҙенең илселек сәркәтибе итеп тәғәйенләнеүен ишеткәндән уң ул күп уйланды. Ғүмер сәфәрҙән уң да дауам итер, тик нимә менән, ниндәй ҡиәфәттә ҡайтыр Әхмәт Фаҙлан улы Болғарҙан?

Үҙенә йөкмәтелгән бурыстан тыш, Әхмәттең бик төптә, күңеленә йәшерелгән бер ниәт-хыялы, сәйәхәт барышында асыҡлай ы эштәре бар. Әгәр, ҡушылғанда-

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 32



рынан тыш, шуларын да аҡҡарып сыға ал а, Фаҙлан улы Әхмәттең исеме юғалмаç, хәлифәткә хеҙмәт иткән, ғәрәптәр өсөн башҡалар булдыра алмаған эштәрҙе эшләгән шәхестәр сафында торор. ис юғы күргәндәре хаҡында китап яҙыр; кем белә, бәлки, уға яңы ерҙәр, ҡәүемдәр асырға яҙғандыр, бәлки, анау йәджудж менән мәджудждарҙы бикләп тотҡан (Искәндәр диуары) тигән серле нәмәне лә нәҡ бына ул, Әхмәт, ни айәт, барып табыр...

... инд, Иран, Чинды яулағандан уң Искәндәр мәғрипте лә буй ондора. Унан ҡом оҙ ҡараштарын төньяҡ-көнбайышҡа бора. Бейек тауҙар, ҡар ҡаплаған ҡая ырттарын үтә. Ни айәт, күге ытыҡ йөҙ ымаҡ ҡараңғы бер илгә килеп сыға. Йыл әйләнә е тиерлек рәхим еҙ еүеш ыуыҡ көндәр, имәнес ҡыштар тора икән бында. Урындағы халыҡтар ҙа, бер-бере енән ҡото осоп ҡурҡҡандай, ҡайҙалыр тырым-тыраҡай ҡасып бөткән, әҙ анлы ырыу ҡалдыҡтары ғына ҡалған. Чин, индостан, Иран кеүек сәскәле йәшеллеккә күмелгән, алтын-көмөштән, аçыл таштар күплегенән күктәре, йөҙҙәре балҡып торған бәхетле тарафтарҙан уң таланған, ҡәберлеккә әүрелдерелгән ҡот оҙ бындай илдең ер йөҙөндә булыуына хатта донъяны әйләнеп сыҡҡан бөйөк сардар Искәндәрҙең дә иçе китә.

Ул шулай ни эшләргә белмәй аптырап ҡарап торған арала, көслө ғәскәр килеүен ишетеп, Искәндәр-Зөлҡәрнәйенде урындағы аҡ аҡалдар ырып ала.

— ин бар донъяла ғәҙел тәртип урынлаштырҙың, — тиҙәр улар бөйөк сардарға. — Халыҡтарҙың яҙмыштарын юлға алдың. Ә беҙ әлегәсә инең яҡлауындан мәхрүмбеҙ. Бигерәк тә йәджудж менән мәджудждар тынғы бирмәй. Зин ар, хәйерле сәғәттә ҡылысыңды ал да беҙҙе уларҙан ҡотҡар!

— Ҡайҙан киләләр улар? — тип орай сардар.

— Донъя сиге булған тау артынан. Кирван тигән ил аша ябырыла беҙгә был ҡотосҡос бәлә. Ул тау ырттары шундай бейек, хатта ҡояш яҡты ын томалап тора.

— Үҙегеҙҙең ул яҡта, мәджудж, йәджудж илендә, булғанығыҙ бармы уң?

— Юҡ, ул тарафҡа үтермен тимә, әр кемде үлем ағалай. Тик ишеткәнебеҙ бар, унда ике ғәжәп тау бар, уларҙың бере е — алтын, икенсе е — көмөш. Башҡа тауҙары ла тик зиннәтле таштарҙан, бик кәрәкле матдәләрҙән тора, ти. Ана шул алтын менән көмөш тауҙарын аҡлайҙар икән мәджудж менән йәджудждар. Ә үҙҙәре яуға киткәндә быларҙы аҡларға ниндәйҙер ғифриттәй дәү, йөнтәç йән эйәләре менән бергә айыу-бүре ымаҡ эре кәүҙәле ҡырмыçҡалар баçа, ти, ҡарауылға. Унда үтә алған кеше кире ҡайтмай.

— Ә үҙҙәре бейек тауҙарҙы нисек артылып килеп сығалар икән уң был яҡҡа?

—Тау ауыҙында ҡараңғы йырыҡ — текә ярлы тар аралыҡ бар. Ошо ҡыçынҡы тарлауыҡ буйлап килә йыртҡыс йөҙлө, ҡан ыҙ йәджудждар. Уларҙың ябырылыуы ҡиәмәт ҡубыуға тиң. Юлдарында осраған бар нәмәне ҡыйрата, үлтерә, ҡыра, ер менән тигеҙләй. Йәджудж менән мәджудждар үткән ерҙә иген баçыуҙары ғына түгел, ябай үлән бөртөгө лә ҡалмай. Был ҡырағай йыртҡыстар бер ни ҡалдырмай, ат, ыйыр, арыҡ... — барса малдарҙы ҡыуып, аҡтыҡ аҙыҡ-түлектәрҙе ҡырып- епереп ала ла китә. Уларҙан ҡотолоу юлы юҡ...

— Ниндәйерәк кешеләр уң улар? Ҡиәфәттәре нисек? — тип орай йәнә Искәндәр ғәжәпләнеп. Сөнки донъяны гиҙеп сыҡҡан сардар бындай халыҡ тура-ында ишеткәне лә, күргәне лә юҡ. — Нимә е менән ҡотоғоҙҙо алды икән улар?

Аҡ аҡалдар ярыша-ярыша мәджудж, йәджудждар тура ында, бере е әйткәнде икенсе е юҡҡа сығарып, кемуҙарҙан ҡысҡырыша башланы:

— Ҡот осҡос йәм еҙҙәр, тутыҡ-ҡыҙыл йөҙләләр...

— Юҡ, юҡ, ҡара, ҡара тәнлеләре лә бар..

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 33



— Унда ағыулы ыуҙар аға, ауалары ла ағыулы...

— Улар бер ниндәй кейем кеймәйҙәр, яланғас тәндәрен ашыҡтарынаса алынып төшкән оҙон ҡолаҡтары менән ҡаплап йөрөйҙәр...

— Йөнтәҫ тәнлеләре лә бар. Әшеүәт еҙ дәү кәүҙәлеләр...

— Яу менән килгәндә йөҙҙәренә төрлө йыртҡыс ҡиәфәтле битлектәр кейеп алалар..

— Күҙҙәре ҡоторған дейеүҙеке кеүек, танау тишектәре — мейес торба ы...

— ыбай йөрөйҙәр. Үҙҙәре ымаҡ, аттары ла тимергә төрөнгән. Йәджудж, мәджудждар аттарына ҡуша тегелгәндәй ҡымшанмай ныҡ ултыралар...

— Ҡараңғыла ғына киләләр, төндәрен йыраҡҡа уҙылған утлы ажда а булып ағылалар...

Искәндәр уларҙың буталсыҡ үҙҙәрен башҡаса тыңлап торманы — ҡурҡытылған халыҡ ни өйләмәҫ тә күҙҙәренә нимә күренмәҫ. Шулай ҙа “тимер кейем”, “утлы ажда а” тигәндәренән йәджудж менән мәджудж тигәндәренең бик тә таҫыллы, яҡшы ҡоралланған әм уҫал уғышсылар икәнен аңланы. Аттарына ҡойоп ултыртылған ымаҡ төптәй ныҡ оҫта ыбайлыларҙың, майлы сепрәк яндырып, өҙлөк өҙ утлы ағым булып, төндәрен өжүм итеүҙәрен үҙе алып барған уғыштарҙа күп күргәйне инде ул...

Шулай ҙа бөйөк сардар бер ҡарарға килмәгәйне әле. Төптән уйламайса, ул дошманы менән маңлайға-маңлай килеп уғышырға ашыҡмай, аҡыл, хәйлә менән алдыра. Мәджудж, йәджудж илендәге алтын, көмөш тауҙар, ҡиммәтле таштар хаҡындағы баяғы үҙҙәр ҙә Искәндәрҙе битараф ҡалдырманы, халыҡ үҙе нигеҙ еҙ булмай. Тик алабарман ҡыланып, күптәр бәддоға уҡыған ошо ҡот оҙ төпкөлдә күп яуҙарҙа ыналған, үҙенә тоғро ғәскәрен түшәп ала алмай бит инде ул...

Әммә бәрелеш ҡотолғо оҙ күренә. Тик юлда ғәскәр ныҡ арыған, бөгөнгә ял ит - ен. Тейешле күр әтмәләрен биргәс, бөйөк сардар, ял итмәк булып, үҙенә ҡоролған сатырға йүнәлде. Ләкин баш төртөргә лә өлгөрмәне, тышта ҡапыл ҡот осҡос шау-шыу ҡупты:

— Тау яғында мәджудж, йәджудждар яралды, ҡасығыҙ!

Тирә-яҡта илаш- ыҡташ, ҡысҡырыш, сыр-сыу ауаздары көсәйҙе, үгенеү, ҡайҙалыр йүгергән күмәк аяҡ тауыштары, сабып үткән ат тояҡтары тыпылдағаны ишетелде.

Йүгерешеп килеп еткән яҡындары уратма ында Искәндәр йә әт кенә атына атланып, ҡалҡыуыраҡ урынға менеп баҫты. Ә унда... Бейек тау урта ындағы әлеге тау ҡыҫымынан йыуан ут йылға ы булып өҙлөк өҙ ағым сыға... Уралып-уралып, урғылып килә. Был дә шәтле ағымдың ҡойороғо аман тау эсендә, ә башы, утлы ажда а телендәй, икегә айырылған. Мөғжизәүи ҡот осҡос күренеш! Ут яҡты ында күктәргә олғашҡан ҡуйы туҙан болоттары төҫмөрләнә... Тимәк, бәрелеш ысынлап та ҡотолғо оҙ, күрә ең, уларға Искәндәр ғәскәре килеүе хаҡында хәбәр еткерелгән, ҡапыл ғына шулай ҡыбырламаҫтар ине.

Искәндәр ғәскәре лә, сардарҙың ишара ын күреп, йә әт кенә был хәүефле сәйер ағымды ҡаршы алырға әҙерләнде. Ут ағымының өңгө остарына май ендерелгән сепрәк урап, шуны яндырып килеүсе баштан-аяҡ ҡоралланған рәхим еҙ башкиҫәрҙәр икәнен ҡорал тотоуҙарынан, аттарында ышаныслы сабып килеүҙәренән дә күреп була ине. Тимер кейемдәләр. Йөҙҙәрен күрер хәл юҡ, баштарына төрлө йыртҡыс хайуан, ажда а ҡиәфәтле битлектәр кейеп алғандар. Икегә айырылған ут ағымы бик йә әт яҡынлаша. Ике арала хәҙер урындағы халыҡ ҡаҙыған оҙон ғына ур-соҡорҙар ята. Ул ғына кәртә булырмы был ут йөрөтөүселәргә?

Ысынлап та, ыбайлыларҙың алдағылары, ана, сабып килгән ыңғай ур-соҡорҙарҙы ҙур таҫыллыҡ менән икереп тә сыҡты... Ә, юҡ, ара-тирә соҡор төбөнә

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 34



мәтәлләп барып төшкәндәре лә бар икән, улары өçкә сығырға тип сәбәләнә. Ләкин соҡор аша үтеүселәре сағыштырғы ыҙ күп. Ә утлы ташҡын шул тирәлә уҡмаша бара, уҡмаша бара... Ҡараңғыла хәҙер уларҙың ҡайҙалығын ут тармаҡтары аша ғына тоçмаллап була. Уттар әле бында, әле тегендә Искәндәр ғәскәре менән айҡаша, аҡырыш, йәнтәслимгә үлемесле ҡысҡырып ебәреүҙәр, бер-береенә бәрелеп ҡорос сыңлауы, сай-сойлап йән биреүсе аттар кешнәүе... — бары ы бергә үрелә. Был төн күптәр өсөн ерҙәге ҡот осҡос тамуҡҡа әүерелде, ике яҡтан да бихисап ғәскәр ҡырылды. Тик яҡтыра башлағас ҡына әлеге өжүм итеүселәр, дауыл күтәреп алып киткәндәй, ҡапыл ғына юҡҡа сыҡты...

Ләкин үлемесле алыш бының менән генә тамамланманы. Искәндәр ғәскәре үҙ яраларын барлап та өлгөрмәне, икенсе төндө лә саҡырылмаған ҡунаҡтар тәүгеенән дә көслөрәк ут йылға ы булып тағы ябырылды, өңгөгә- өңгө, ҡылысҡа-ҡылыс ҡуйып, ҡан ҡойош китте, уҡтар осоуынан тирә-яҡ дөйөм ыҙғырыуға әүерелде... Был мәхшәр өсөнсө төндө лә ҡабатланды... Искәндәр күпме тырышма ын, төнгө асыҡ уғышта уларҙы ҡыйрата алманы, барлы-юҡлы ҡалдыҡ ғәскәрен йыйып, уңайлы урында боçҡонға ҡуйҙы, йәшеренеп серле ғәскәр килеүен көттө. Ләкин улары, нишләптер, башҡаса күренмәне, Искәндәр үҙенең алданыуын тойҙо. Мәджудж, йәджудждар иленә үтеп инеп, уларҙы эҙәрлекләргә лә батырсылыҡ итмәне — ғәскәрен бөтөнләй юғалтыуы бар. Ни эшләргә? Урындағы халыҡ унан ярҙам орағайны ла ба а!

Шунда Искәндәр-Зөлҡәрнәйенгә бер ҡыҙыҡлы фекер килде: йәджудж, мәджудждарҙы, башҡаларҙы яфалама ын өсөн, үҙҙәренең тауҙары эсенә мәңгегә бикләп ҡуйып булмаймы? Уйлаған эш — бөткән эш. Бөйөк сардар донъяның үҙе яулап алған барса тарафтарынан: Рум, инд, Чин, Иран, Сүриәнән тимер иретеүсе, ҡорос ҡойоусы атаҡлы оçталар саҡырта. Йәджудж, мәджудждар инеп-сығып йөрөгән ҡыçынҡы, текә тарлауыҡҡа табан төрлө яҡтан меңәрләгән дөйәләр баҡыр, ҡурғаш, тимер ташый башлайҙар. Шунда уҡ көнө-төнө бихисап ҡорос иретеү мейестәре лә эшләй башлай. Уларҙан әлеге ҡараңғы, текә тарлауыҡҡа ут йылғалары ағыла. Улар өçтөнә юғарынан андыҡтай эре таштар ишеп төшөрөлә. Тирә-яҡҡа, күкте ялап, ҡуйы ҡара аçыҡ төтөн тарала, йәшен атҡандай, ажда а ыçылдағандай, күк күкрәгәндәй ҡурҡыныс тауыштар бар донъяны ҡаплай. Ун меңләгән ташсы көнөн дә, төнөн дә айырмай эшләп, ярты йыл тигәндә йәджудж, мәджуждарҙы башҡа халыҡтарҙан айырып торған, бейеклеге күктәргә китеп юғалған ҡорос диуар-ҡапҡа күтәрә. Искәндәр диуары.

Бынан уң Искәндәргә лә эш ҡалмай. Ҡалдыҡ ғәскәрҙәре менән кире Румға ҡайтып китергә мәжбүр була.

...Шәреҡ тарихнамәләренән уҡып белә был мәлүмәттәрҙе Фаҙлан улы Әхмәт. Ғәрәп, Рум, Иран, Чин сәйәхәтселәре, ғилем эйәләре дала халыҡтары хаҡында бик күп ҡыҙыҡлы хәтирәләр яҙып ҡалдырған, уларҙың йәшәгән ерҙәрен самалап, карталар төҙөгән. Ғәрәптәрҙең үҙҙәренең шундай бер ғалим-географы Хордарбех миләди туғыҙынсы йөҙйыллыҡтың икенсе ярты ында уҡ әле улар үтеп барған биләмәләргә күсмә тормош менән йәшәгән кимак-ҡыпсаҡтарҙы, уғыҙҙарҙы урынлаштырған. Ә ҡыпсаҡ-кимактарҙың төньяҡ-көнбайыштағы күршеләре — ниндәйҙер "башжард" тигән халыҡ. “Йәджудж, мәджуждж, башжард, — тип ҡуйҙы ибн Фаҙлан. — Ниндәйҙер оҡшашлыҡ та бар ымаҡ. Яҙмалар раçлауынса, шул уҡ биләмәләрҙә ик еҙ-сик еҙ урманлыҡтар йәйрәп ята. Урмандар шундай ҙур, ҡуйы. Әлеге шәреҡ ҡомартҡыларында иçкә алынған ҡырағай холоҡло йәджудж, мәджудж ҡәүемдәре нәҡ ошо серле, сихырлы урындарҙа йәшәй, имеш. Аяу белмәç, бик тә сая, ыбай йөрөүгә ғәжәп тоçолло булыуҙары менән дә шө рәт ҡаҙанғандар улар. Ҡәблә милădигәсә* йәшәгән юнан тарихсы ы Геродот та ошо

тирәләге ҡәүемдәрҙе, ыбай йөрөүгә оҫта, уғышсан "етеҙ атлылар" тип ба алаған, тиҙәр. Юҡҡа ғына шө рәтле сардар Зөлҡәрнәйен, уларҙы ҡорал менән еңә алмаған, тимер ҡапҡа менән тау ара ына бикләп ҡуймағандыр бит. Ғәрәптәрҙән Ибн Саид әм ҡай ы бер башҡа сәйәхәтселәр донъяның "етенсе климаты" тип йөрөтөлгән төньяҡ тарафтарҙа "Башгарт" – "Башҡорт" атамалы тауҙар теҙмә е барлығы хаҡында яҙалар. Башҡорт тауҙары эргә ендә башҡорттар йәшәмәй башҡа кем йәшә ен?! Ана, Хазарҙар биләмә ендәге даръя "Хазар диңгеҙе", римлеләрҙеке "Рум диңгеҙе" тип аталмаймы ни?

Шәреҡтә йәджудж, мәджудж, йәнә "Искәндәр диуары" хаҡындағы үҙҙәр күп. Был хаҡта ҡары үҙҙәр ҙә, дини китаптар ҙа, сәйәхәтселәр ҙә иҫкә алмай ҡалмай. Әммә был мәғлүмәттәрҙең дөрөҫмө, түгелме икәнен тикшереп, төрлө бәхәстәргә нөктә ҡуйыу ынтылыштары әле лә тамамланмаған. Уҙған йөҙ йыллыҡтың 40-сы йылдарында, йәғни Ғәрәп илселегенең ошо тарафтарға йүнәлеүенән ни бары 80 йыл сама ы ғына әүәл хәлифәттең ул саҡтағы хәлифе Әл Вәсих та дәүерҙәр аша килгән ошо хәбәрҙе тикшереп ҡарарға була. Йәджудж әм мәджудждар илендәге "Искәндәр диуары"н табып тикшереү өсөн үҙенең Саллам исемле сардары ҡул аҫтында ошо тарафҡа ҡоралды махсус ғәскәри төркөм ебәрә.

Ләкин сардар Саллам төркөмө хәлиф Әл Вәсих әмерен тулы ынса үтәй алмай. Сардар Саллам хазарҙарҙың баш ҡала ы Итилгә килеп етә лә "Искәндәр диуары"н ҡай ы тарафтан эҙләргә кәрәклеген урындағы халыҡтан ораша башлай. Ләкин әллә Саллам донъя тарихын, уның карта ын насар белгән, әллә уны урындағылар аңламаған – бынан уң диуарҙы эҙләү барышы ныҡ буталған. "Искәндәр диуары"-на юл күр әтеүселәр Салламды ул юлланған төньяҡҡа түгел, ә, ҡырҡа бороп, ҡояш сығыр тарафҡа ебәргән; "Диуар-стена" тигәндә улар, әлбиттә, донъялағы ҡәҙимдән билдәле Бөйөк Чин* диуарын күҙҙә тотҡан. Шул арҡала хәлиф Әл Васих сардары йәджудж әм мәджудждарға барып етә алмаған. Ҙур өмөт бағлап, байтаҡ аҡса түгеп, ҙур ғына хәрби төркөм ҡушып ебәрелгән кешеләр хурлыҡлы рәүештә мәьсәләне донъяға киң билдәле Чин диуарына килтереп терәгән... Ә йәджудж, мәджуджд мәьсәлә е тарих өсөн йәнә асылмаған сер булып ҡалған.

Ләкин кемдер, ни айәт, асыҡларға тейештер бит инде уны, бөйөк сардар Искәндәр-Александр Македонский менән бәйле тарих буш үҙ булырмы? Хәҡиҡәтте донъяға кем иғлан итер?

Башҡорттар йәшәгән урындарҙы, Уралдың ике яғын шулай уҡ үтеп булмаҫлыҡ ҡара урмандар, кеше аяғы баҫмаған серле төпкөлдәр баҫҡан, тиҙәр. Бағдадта саҡта уҡ илселек сәфәргә әҙерләнгәндә иҫкә алдылар ошо тарафтағы йәджудж, мәджудждарҙы әм, ниңәлер, далаға сыҡҡас бигерәк тә "башҡорт" тигән төркиҙәрҙән аҡланырға кәрәклекте ҡат-ҡат иҫкәрткәйнеләр. Шул саҡта ибн Фаҙлан үҙе лә көтмәгәндә ҡапыл: "Йәджудж – мәджудж" тигәндәре шул башҡорттар түгелме икән? – тип уйлап ҡуйғайны. – Улар ҙа "етенсе климат" тигәндең иң төпкөлөндә, донъя сигендә йәшәйҙәр бит. – Ләкин был хәл, нишләптер, уны ҡурҡытманы, дәртләндереп тә ҡуйҙы хатта: – Быға са берәүҙең дә ҡулы етмәгән, Искәндәр Зөлҡәрнәйен үҙе хайран ҡалған серле ҡәүемдәр менән осрашыу ихтималы асылырға тора түгелме?" Был халыҡтарға исламды таратыу мөмкинлеге хаҡында хыялланмай ибн Фаҙлан. Әммә улар тура ында мәғлүмәт алып ҡайта ҡал а, Бағдадтағыларҙың күҙе маңлайына менер ине мәгәр...

Бына ни өсөн ағайып та, ҡыҙыҡ ынып та көтә Фаҙлан улы Әхмәт башҡорттар менән осрашыуҙы.

---

*Беҙҙең эраға ҡәҙәр.
*Ҡытай.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 36



# Башҡорт хан

Тыныслыҡ юҡ төрки донъя ында. Уғыҙҙар, бәшнәктәр, болғарҙар, башҡорттар үҙ-ара низағлаша. Был ҡәүемдәрҙең бары ын да, үҙ сиратында, йә аманаты, йә я - ағы, хатта ғәскәрҙәрен ебәреп Хазар ҡағанаты яфалай. Иҙел, Урал төркиҙәренә хәҙер тағы бер көтөлмәгән яңы афәт асылырға тора. Торған айын бығаса мәжүсилек өрөмөндә, төньяҡ-көнбайыш урман, аҙлыҡтарында көн иткән урыҫ ҡәүемдәре теремекләнгәндән-теремекләнә бара. Башта күрше ҡәүем биләмәләренә барымтаға барыу менән сикләнә әләр, хәҙер кескәй карап-ҡайыҡтарға ултырып хатта Иҙел буйлап Хазар диңгеҙенәсә талап, туҙҙырып йөрөр булып киттеләр. Ҙур Иҙелдең ике яҡ ярҙарына ла тынғылыҡ бирмәйҙәр, ул тарафтарҙа ла йыраҡҡа үтеп инә башланылар. Бәшнәктәргә уларҙың тәүге өжүмдәре бынан утыҙ-ҡырҡ йылдар әүәл үк башланғайны. Хәҙер башҡорт биләмәләренә лә ынтылмаҡсылар. Бигерәк тә йылдың бына ошо мәле хәүефле. Иртә яҙҙан башҡорттар йәйләүгә сыға, мал көтөүҙәре артынан тирмәләре, ғаиләләре менән бергә күсенеп йөрөйҙәр. Ҡыш буйы тибенлектәрҙә генә туҡланған мал, бигерәк тә менге аттар, был осорҙа бик ябыға, әл ерәй, ҡорал тотор ир-аттар ҙа хужалыҡ эштәренә сума. Шуға ҡапыл килеп баҫҡан яу ҡайтарыр әмәл дә әҙәйә.

Был юлы урыҫтар башҡорттарға Ағиҙелдең ул яры буйлап килде. Ҡуйы урмандарға йәшеренеп, ҡамыш баҫҡан аҙлыҡтар, батҡаҡлыҡтар аша баҫҡынсылар байыраҡ башҡорт йәйләүҙәренә ябырылалар. Йәй көндәре бында йәшеренергә лә, өжүмде кире ҡағырға ла уңай: ҡамыштар бейек, алпамышалай ҙур кешеләр, хатта ыбайлылар ҙа унда юғала ла ҡуя. Тик бына көндөҙҙәрен ҡамыш ара ында усаҡ яғырға ғына ярамай: унда ят кешеләр барлығын күккә олғашыр төтөн бағаналары фашлаясаҡ. Шуға ҡайнар аҙыҡты төндәрен генә әҙерләйҙәр. Ҡуйы, тотош диуар булып күтәрелгән ҡамыштан усаҡ уты күренмәй.

Шуға ла был юлы башҡорттар баҫҡынсыларҙы башта иҙмәйерәк ҡалды. Өс йөҙләгән урыҫ, икегә бүленеп, аңғарамаҫтан ғына башҡорт йәйләүҙәренә өжүм итте лә ир-атты ҡырып, йәшерәк ҡатын-ҡыҙҙы әсир итеп, көтөү-көтөү малдарын ҡыуып алды ла китте.

Баҫҡынсыларҙың юлын бүлеү әм зыян күргән урындағы ырыу-ҡәбиләләргә ярҙам итеү маҡсатында хан арайынан кисекмәҫтән Байғөбәк бей ҡул аҫтында уғыш өнәрҙәренә өйрәтелгән йөҙ илле ыбайлы ебәрелде. Илгә ҙур хәүеф килгәндә башҡорт ғәскәре урындағы ырыу-ҡәбиләләр иҫәбенә туплана. Ә Байғөбәк бейҙеке ымаҡ баштан-аяҡ ҡоралланған, махсус өйрәтелгән кескәй ғәскәри берәмектәр үҙәктә, Башҡорт хан ҡарамағында, тора. Уларҙы ырыу-ара ҡаршылыҡтарҙы юлға алыуҙа, йә булма а әлегеләй илгә баҫып ингән айырым дошман төркөмдәрен ҡыуып ебәреү өсөн файҙаланалар. Сабый саҡтарынан уҡ ат ялына йәбешеп үҫкән, уҡ- аҙаҡ, суҡмар, өңгө, ҡылыс менән ҡоралланған егерме-утыҙ йәшлек был төптән мыҡты, еләү ендәй йылғыр егеттәр яу ҡырында ла йәшенле ҡойон кеүектәр: дошман сафтарын май телгән үткер бысаҡ ымаҡ уртаға ярып үтеү улар өсөн бер ни тормай. Бына ошо егеттәр көнө буйы тиерлек сабып килеп, ни айәт, баҫҡынсыларҙы ҡыуып етте лә ышыҡтан тороп аҡ ҡына күҙәтә башланы.

Алдан урыҫтарҙың йөҙгә яҡын ыбайлылары уғыш тәртиптәре ҡушҡанса төркөм-төркөм ойошоп бара. Арттараҡ, үр яҡ асыҡлығынан, мал көтөүҙәре, таланған байлыҡ тейәлгән йөк арбалары бара, уларға йәнәшләп әсирҙәр төркөмө атлай. Мал көтөүҙәре лә, әсирҙәр ҙә — барса каруан — атлы ғәскәрҙәр уратма ына алынған. Иң артта тағы бер ғәскәри төркөм күренә. Ҡан еҫен иҙгән бүреләр ымаҡ, эйәләштеләр баҫҡынсылар Ағиҙел буйҙарына. Йылдың-йылы барыр йүнәлештәрен үҙгәртә-үҙгәртә, кеше йөрөмәгән төпкөлдәрҙән башҡорт иленә

тәрәнерәк инә баралар, инә баралар. Байғөбәк батыр яугирҙары аҡлыҡ аҡлап хәрәкәт иткән баҫҡынсыларҙы ышыҡтан тороп күҙәтеүен дауам итте. ан яғынан бермә-бер күберәк икән былар. Алдағы төркөмдәре, күрә ең, – юл ярыусы, көтөлмәгән хәлгә әҙер бара. Үҙенең аҙ анлы яугирҙары менән Байғөбәк уларға ҡаршы асыҡ яланға сыҡ а, аҫыл егеттәрен әрәм генә итәсәк.

Шуға Байғөбәк сардар ашыҡмаҫҡа булды. Хәйлә кәрәк бында, хәйлә... Ваҡыт бар әле, урыҫтар бара ы тарафта, алда, йәйрәп ятҡан бейек ҡамышлы аҙлыҡтар ята. Баҫҡынсылар уны, әлбиттә, урап үтергә тырышасаҡтар. Бына нимәгә юл ҡуймаҫҡа, юлды быуырға кәрәк уларға...

Байғөбәк батыр ғәскәри төркөмөн йә әт кенә күтәрҙе лә үҙе генә белгән уҡмаҡтарҙан, аҙлыҡ, соҡор-саҡырлы үҙәндәрҙән ярты сәғәт сама ы сабып барғайны, баҫҡынсылар каруанын байтаҡ артта ҡалдырып, ирәк ағаслы ялпаҡ ҡалҡыулыҡ итәгенә килеп тә сыҡты. Ҡараңғы төшә башлағайны инде. Байғөбәк яугирҙарына ҡалҡыулыҡҡа менеп, төнгөлөккә шунда урынлашырға ҡушты. "Төнгә ҡарай күрәләтә үҙҙәре белмәгән аҙға инеп батырға теләмәҫтәр, туҡтарҙар”,– тип аңлатты ярҙамсыларына. Тирә-яҡҡа иҙгер күҙәтеүселәр ҡуйырға кәрәклеген дә иҫкәртте.

Шунан арттараҡ торған башҡа яугирҙарына боролдо:

– Усаҡтар яғырға рөхсәт итәм,– тине, быларҙы ғәжәпкә ҡалдырып.– Уттарығыҙ йыраҡҡа күренеп торорлоҡ бул ын! Ни тиклем күберәк бул а, шул тиклем әйбәт...

Тирә-яҡ күренеп торған асыҡ түбәгә сығарып усаҡ яғырға ҡушыуын аңлап етмә әләр ҙә, яугирҙар сардарҙарына үҙ еҙ буй оноп, дәррәү эшкә кереште. Ҡараңғы төшөүгә ялпаҡ ҡалҡыулыҡ өҫтөн, күк көмбәҙендәге йондоҙҙар ымаҡ, бихисап усаҡ ялҡындары ялпылдауы ҡаплағайны инде...

Байғөбәк үҙе ҡалҡыулыҡ түбә ендәге ялҡындары айырыуса юғары күтәрелгән усаҡ янына килеп ултырҙы. Усаҡ хужалары бүрәнәләй йыуан ағастарҙы өйрәп килтереп өйгәндәр ҙә, аҫтына ҡоро- ары алып, ут төрткәндәр...

...Был тарафты яҡшы белә Байғөбәк батыр. Башҡорттарҙың яҡынлығын иҙеп ҡал алар, урыҫтар, уңға ҡайырылып, хәүефле урынды урап үтергә тырышасаҡтар. Көн элгәре өркөтөргә ярамай, үҙҙәренсә бара бир ендәр. Алда тағы күп саҡрымдарға уҙылған, ыбайлы юғалырлыҡ ҡуйы ҡамышлы, ара-тирә ҡыуаҡлыҡтар тырпайған, түмгәкле-түмгәкле, тар үҙәнле аҙлыҡ. Арыраҡ, текә ярҙарға табан, мәңге кипмәҫ батҡаҡлыҡтар башлана. Нисек тә шунда ҡыҫырыҡларға ине баҫҡынсыларҙы. Әле егеттәренә асыҡ түбәгә сығып, ҡыҙыу усаҡтар яҡтырыуы ла шуға бәйле. Был тарафта ғәскәр барын белгән баҫҡынсы, йыраҡҡа уҙылған каруанын хәүефкә ҡуйып, туп-тура ут эсенә барырға баҙнат итмәҫ. Телә ә-теләмә ә лә, аҙлыҡҡа табан боролор. Ә башҡорттар өсөн был бик уңай, ундай тарлыҡта баҫҡынсылар ан яғынан өҫтөнлөктәрен файҙалана алмаҫтар, төпкәрәк үт әләр, аттары ла батҡаҡлыҡта батып бөтөр...

Әммә әлегә был хаҡта баш ватырға иртә, алда башланмаған төн ята. Ялпылдап янған утҡа ҡарап, Байғөбәк ирек еҙҙән уйҙарына бирелә. Утты хөрмәт итә инде башҡорттар, уны изге анай. Борон ут табыуҙар ауыр саҡта хатта уларҙың махсус ут аҡлаусылары ла булған, тиҙәр. уғыштарҙа, башҡа ауыр эштәрҙә улар ҡатнашмаған, әммә иң зиннәтле хазина, затлы аҙыҡ-түлек, иң әйбәт уғыш ғәниmәттәре башта уларға бүлеп бирелгән. Ут – ул ҡот. Бер изге ҡары үҙҙә әйтелгәнсә, Тәңре кешеләргә ташты ташҡа уғып нисек ут тоҡандырыу ысулын күр әтә лә: "Был ут атабыҙҙың ҡөҙрәтенән сыҡҡан ялҡындыр,– тигән әм тағы шулай өҫтәгән: – Ҡояш менән айҙан ығып сығарылған ыу".

Уттың дауа ы ла, файҙа ы ла, көсө лә ҙур. Төркиҙәр борон-борондан ут менән

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 38



кешеләрҙең насар ниәттәрен, насар рухтарын ҡыуғандар, яман сирҙәренән дауалағандар. Миләди VI йөҙйыллыҡта башҡорттар ҙа ингән Көнбайыш Төрки ҡағанаты хакимына килгән Византия илселәрен мотлаҡ ике ут ара ынан үткәрер булғандар. Ут ихтимал булған насар уйҙарҙы, яман рухтарҙы, хыянат итеү теләген ҡыуа, тип иҫәпләгәндәр. Шуға утҡа төкөрөү, ыу ибеп үндереү, утты ихтирам итмәү оло яҙыҡ аналған. Утҡа арнап ҡорбан килтерелер, доға уҡылыр булған. Утҡа ҡарап алдан юрауҙар ҙа – төркиҙәрҙең борондан килгән шөғөлө. Байғөбәк ирек еҙҙән алдындағы, торған айын көслөрәк дөрләй барған усаҡ ялҡынына иғтибарлыраҡ ҡарап алды. Бына, әйтәйек, юғары күтәрелгән ялҡын телдәре йәшкелтерәк бул а, бәрәкәтле ямғыр әм изгелек булырын көтәләр. Әгәр ялҡын ҡыҙыл төҫ ал а, тот та уғышҡа әҙерлән. ары төҫ тә насар, ул, ата-баба уйынса, төрлө сирҙәр, алҡын ҡыш килтерә.

Ә усаҡ ялҡыны ҡара төтөнгә тонсоға башла а, уңыш ыҙ сәфәр йә хатта ил хакимының үлемен фараз иткәндәр...

Байғөбәк шунда йәнә алдындағы усаҡҡа ентекләберәк күҙ атты әм ғәжәп итте: был уттың холҡо бөтөнләй башҡаса икән дә ба а! Йыуан-йыуан ағастар ыҙғырышып, тауышланып яна, әллә улары еүешерәк булды, әллә башҡа сәбәп... Хәйер, ырым буйынса усаҡтың шулай шаулап-шыйылдап янырын шайтандар уйынына йә йыраҡтан килер яман хәбәр, йә башҡаса хәүеф булырына ла юрайҙар. әр хәлдә изгелеккә түгел инде был. Ярай ҙа, был фараздар ошо баҫҡынсы урыҫтар менән генә сикләнеп ҡал а...

ис тә тыныслыҡ күргәне юҡ әле Байғөбәктең, үткән йыл әйле тарафтарынан кәләш әйттереп, уны ырыуына алып та ҡайтҡайны. Хәйер, үҙе түгел инде, бер кеше шөғөлө түгел был. Туй эштәре менән ата ының туғандары, ырыу кешеләре шөғөлләнде. Килендең алыҫтан килгәнен маҡтай бит башҡорт. Шуға бер йыл алдан уҡ кәләш алырға ниәтләүҙәре, тиң күреп ҡоҙа булырға теләүҙәре хаҡында ошо тарафҡа үҙ алғайнылар. Бәхеткә ҡаршы, ул яҡтан да әллә ни ҡаршылыҡ булмаҫын белдерҙеләр. Ырыу ныҡ тырышты инде Байғөбәк өсөн, күрә ең, быуынға ултыра башлаған етди ҡарашлы был егетте башлы-күҙле итеп, ергә еректерергә, алдағы көндәрҙә ырыу башлығы бей итеп үрләтергә лә булғандыр иҫәптәре. Сөнки хәҙер уның ырыуы ла ултыраҡ тормошҡа күсеп бөтөп бара. Ҡышлаҡтар төҙөй, мал үрсетә, унарға йөрөй, урыны менән иген дә игә, хакимдар йәшәгән ҡала тормошо ла тарта. Тарҡала шулай башҡорт көсө, дала тормошонан айырыла бара. Бохара, Хәрәзм йә и ә Скандинав илдәренән килгән сауҙагәрҙәр ҙә боҙа халыҡты, ғүмер баҡый иләнгән етен, киндер, кесерткән ептәренән тегелгән кейемдәрҙе, тире, күн әйберҙәрен торған айын ситтән килгән ебәк йә башҡа затлы туҡымалар алыштыра бара. Донъя, замана ы үҙгәрә, шуға ырыуҙаштарының зирәк аҡыллы, уйлап эш итеүсән Байғөбәккә ниндәйҙер өмөт менән ҡарауҙары ла тиктәҫкә генә булмаҫ.

Тик, нишләй ең, Байғөбәк үҙе риза түгел бындай тормошҡа: нисек инде, күкәй баҫҡан тауыҡ ымаҡ, йылдар буйы ҡуҙғалмай бер урында йәшәмәк кәрәк? Тар зиндандағы әсир ымаҡ, үҙ иркең менән түшәме түбәнә тейеп торған, дүрт яғы ла диуар менән ҡоршаулы "йорт" тигән ситлектә ҡалай түҙеп йәшәр ең?! Үҙенде күрәләтә ҡол йәки тоҙаҡҡа килеп йә айыу ямына эләккән йәнлек я ау түгелме ни был?!

уңғы ваҡыт малсылыҡ менән көн итеүсе, иркен дала менән йәшәүсе башҡорттар ҙа ҡалаларға, төрлө кәсеп эштәренә тартыла, ҡышлаҡтарҙа бүрәнәнән йәлпәк түшәмле торлаҡтар төҙөй башланылар.

Ҡаты ыуыҡтарҙа йылы тота бындай ҡоролмалар, тик ошондай ҡыҫынҡы ояла кеше нисек йәшәргә тейеш? Донъяның барса мәҙәни халыҡтары торлаҡ түшәмен

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 39



борон-борондан улай түбән, йәлпәк эшләмәгән, хан арайымы ул, ғибәҙәтхана йә кәшәнә, тирмә йә ҡыуышмы, йә башҡа ҡоролмамы, уларҙың көмбәҙле түбәләре ослайып күккә төбәлгән. Уранхайҙарҙың, ана, ураса, йәрәнгә аталмыш торлаҡтарының осло түбәләре хатта, ниндәй генә ҡаты ыуыҡтар булма ын, Тәңрегә асыҡ ҡала, усаҡ төтөндәре лә шунан күтәрелә. Бындай торлаҡ түшәме кешене, аяҡ аҫтында ҡалған бөжәк ымаҡ, баҫып-иҙеп тормай, үҙең дә, ауыр йөк күтәргәндәй, эйелеп-бөгөлөп йөрөмәй ең, түбәң далалағы ымаҡ күккә асыҡ, Тәңрендән йәшерер нәмәң юҡ инең... Уйла аң, әҙәм бала ы үҙен бер ваҡытта ла ғаләм юғарылығынан айырмаған, Раббылар йә күктә, йә бейек тау баштарында йәшәй, шунан тороп кешеләргә ямғырын да, ҡорологон да, шәфҡәтен дә, ҡә әрен дә ебәрә, тип фараз иткән; Тәңренекенә оҡшатып, уға ыйынып, үҙе йәшәгән ҡоролманы ла кескәй генә көмбәҙле донъяға әүрелдергән. Ошонан тороп өмөт тулы ҡараштарын ми ырбанлы, серле күккә төбәгән, көндөҙҙәрен ҡояш нурҙарында ҡойонған, төндәрендә төп өҙ күк көмбәҙендә аҫыл таштарҙай емелдәгән иҫәп еҙ- ан ыҙ йондоҙҙар ҡылығын күҙәткән, шуларға ҡарап үҙ яҙмышын да билдәләргә тырышҡан...

Тик, ни эшләй ең, хәҙер донъя ҡыҫылыуға, ә кеше кесерәйеүгә табан бара ымаҡ Байғөбәккә. Әүәл үҙен йәйрәп ятҡан сик еҙ дала, хатта ғаләм хужа ылай тойған башҡорт бала ы торған айын, оя ына боҫҡан йомран кеүек, үҙен күрәләтә бүрәнә йә таш ситлеккә яба, шуның менән ирек өйәр ғәййәр рухын да юғалта...

...Байғөбәк аҙым айын тиерлек дөрләп янған усаҡтары менән тотош ялҡынға әүерелгән, әлеге үҙҙәре ҡунаҡлаған ҡалҡыу түбәләскә күҙ алды, сәбәбе иҫенә төштө, фекер ебе лә үҙгәргәндәй булды: “Хәйер, йомран да ер тишегенә әр саҡ үҙ ихтыяры менән йүгермәй инде, – тип уйланы. – Хәүеф йә ҡаты ыуыҡтар ябырылғанда ғына. Ҡара яу баҫҡанда беҙҙең халыҡ та ел үтмәҫ тау араларына йә ҡуйы урман эсенә боҫмаймы ни? Ҡала-ҡәлғәләр, ғәскәрле хан арайы тирә ендә бына бөгөнгө баҫҡынсылар үҙ өйөндәге ымаҡ иркен йөрөп ятырға йөрьәт итерҙәр инеме икән?” Тик Байғөбәк тағы шуны аңлап етмәй: ошондай тормошто бәғзе берәүҙәр йәшәйештең юғары баҫҡысы, мәҙәниәтлелек тимәксе. Улар фекеренсә, күсмә тормош менән йәшәүселәр артта ҡалған, тәүтормош кешеләре кеүек ҡырағай ҡәүемдәр, Байғөбәк ис тә килешә алмай бының менән. Тәүтормош кеше енең йәйәүләп, арҡа ына бар мөлкәтен йөкмәп, донъяның бер сигенән икенсе сигенә күсенеп йөрөүен күҙ алдына килтереп ҡара әле ин! Кире енсә, ултыраҡ тормош сикләүҙәре, бигерәк тә атты ҡулға эйәләштереү, тәгәрмәс уйлап табыу кеүек мәҙәниәттең юғарыраҡ баҫҡысына күтәрелеү сәбәп булғандыр,– тип уйлай Байғөбәк, – ҡәүемдәрҙең йәшәгән урындарынан дәррәү ҡубарылып, донъя буйлап айҡышып йөрөүҙәрендә. Арба өҫтөнә өйөн ултыртып, шунда ғаилә ен, бар байлығын тейәп, ҡайҙа туҡта а шунда үҙен хужа тойоп, ил гиҙеп йөрөгән әҙәм, әлбиттә, ғәжәп аҡылға эйә булған. Шул арҡала ул хыялға ыймаҫ ирек, ила и рух, яңы йәшәү рәүеше алған, үҙен бәҫле хужа итеп тойған. Башҡорттарҙың, шулай уҡ барса төркиҙең ата-бабалары ундар, скифтар ошо сифаттары менән бар донъяны шаулатҡан, батырлыҡтары, яугирлыҡтары менән үҙҙәрен данға күмгән...

Шуға ла ҡала кешеләренә ис тә ҡыҙыҡмай Байғөбәк, хан пайтәхетенә ҡайтыпкитеп йөрөгән арала ғына ла бындағы урам-тыҡрыҡтарҙан, күк йөҙөн ҡаплар бейек-бейек йорттарҙан унын тыны ҡыҫылғандай, үҙен таш мәмерйәгә бикләп ҡуйғандай тоя. Ошондай ҡыҫынҡылыҡта ҡырмыҫҡалай ығы-зығы килеп йөрөүсе түшәмдәре түбән кешеләрҙе йәлләп тә ҡуя хатта. Хан пәйтәхетенә килгәне бирле Байғөбәк күҙәтеп йөрөй: ҡала кешеләре уға, нисектер, шиксел, бар нәмәгә ағайып ҡарар, ҡурҡағыраҡ халыҡ ымаҡ тойола. Тирә - яҡ хаҡында хәбәрҙар булмағас, күрә ең, ҡайҙан килеп баҫырҙар тигәндәй, хатта күршеләренән дә шикләнеп, мәңге ҡояш төшмәҫ таш бүлмә ендә бикләнеп ята бирә. Ә дала кин,

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 40



унда әр ҡарасҡы йыраҡтан күренә. Ҡаршы тора алмаҫ хәүеф килеп тыуа ҡал а, баш тартҡан яҡҡа ҡастың киттең. Дала буйлап ине берәү ҙә эҙләп йөрөмәй. Дала кеше е үҙ көнөн үҙе күрә, кемгәлер алышып бармай, кейектәй иркен йөрөй.

Байғөбәк үҙе – дала улы. Йәшерәк саҡта ат көткәне лә, эҫе йәй төндәрендә тын, аулаҡ далала бер үҙе төп өҙ йондоҙло күккә ҡарап ятҡаны ла күп булды. Ундай саҡта, әйтер ең, иңә ҡанаттар үҫә, ила и көстәр уяна: донъяла инән башҡа берәү ҙә юҡ, тик ин генә хужа ошо төп өҙ йы анға!

Ә ҡалала йә өйөнә бикләнеп йәшәүселәр күрәме, тоямы ошо ила и бөйөклөктәрҙе? әр ҡыштырлауҙан өңөнә йүгерә торған йомрандай йәшәге е килмәй Байғөбәктең, тынсыу дүрт диуарға бәйле түгел ул, ҡайҙа төн ҡыуып етә – шунда уның өйө, шунда йоҡлап китер яҫтығы. Ҡала кеше е ымаҡ, юлда туҡланыу өсөн йөк-йөк аҙыҡ йөрөтә е лә юҡ. Тирә-яҡтағы күл, йылғалар тулы балыҡ, дала, урмандарында иҫәп еҙ- ан ыҙ унар ҡоштары, йәнлектәр... Теләгәнеңде тот та тамаҡ ялға... Ә көндәр буйы ат өҫтөндә елкенеп талсыҡҡан тәнеңә ял кәрәк икән, баш аҫтыңа – эйәр, түшәк урынына – хуш еҫле ҡалын үлән... Диуарҙар тынсыуы юҡ бында, иҫерткес саф ауа, әйҙә, рәхәтләнеп йоҡла. Көндәр ыуыҒыраҡ тор а ла, әллә ни зарар юҡ, тамағыңа әҙерләгән усаҡ көл-күмерен ситкә этәр ҙә ул йылытҡан урынға ят, таңға тиклем үҙеңде йылы әсә ҡосағындағылай тойор оң... Байғөбәк – дала кеше е, уға ерҙә ҡаҙыныу түгел, ил гиҙеү ҡәҙерлерәк.

Шуғалырмы, бына әле лә ул ырыуҙаштары бары ы йыйылып, йәйләүгә сығып ләззәт кисергәндә, үҙе лә мал ҡарап, иген үҫтереп, тәбиғәт ҡосағында йәш кәләшен иркәләп йәшәр бер мәлдә, ҡорал күтәреп, хан хеҙмәтендә йөрөй. Бында ла үҙе теләп килде ул, әр ырыу-ҡәбиләә, ғәҙәттә, сиратлап башҡара был эште, таҫыллы, көслө ир-егеттәрен билдәле бер ваҡытҡа хан хеҙмәтенә ебәреп ала. Байғөбәк аңлай бының кәрәклеген, шулай күмәкләп, берҙәм эшләмә әң, йәйрәп ятҡан башҡорт илен әр еҙ баҫҡынсыларҙан кем ҡурсалар?

Бына шул саҡта үҙе теләгән яҙмышҡа юлыҡты ла инде Байғөбәк. Уның таҫыллығы, батырлығы арай хакимдарының да күҙенә салынып ҡала. Уға хан ғәскәрендә төркөм етәксе е вазифа ын тәҡдим итәләр, кесе сардар итеп үрләтәләр, ышаныс белдерәләр. Хәйер, Байғөбәк үҙе лә ырыуына кире ҡайтырға ашҡынып барманы, шикелле, әлеге ултыраҡ тормош тартманы уны. Тик унда ҡалған йәш кәләшен генә ныҡ ағына ине. Тора-бара уны ы ла хәл ителде – арай ризалығы менән Байғөбәк уны үҙ янына алдырҙы. Баштараҡ, ҡайҙалыр йыйына башла а, кәләше: "Мине лә ал, ярҙамым тейер, яу сабыр таҫылым юҡмы ни минең?" – тип бәйләнеп тә маташҡайны. Тик Байғөбәк ҡаты торҙо, уны юғалтыуҙан ҡурҡты, юрамал тупаҫыраҡ үҙҙәр менән кәләшенең ихтыярын ындыра килде. Ә бына Байғөбәктең был китеүендә ҡатыны, нишләптер, ис тә ныҡышманы, тик айырылыр мәлдә генә, уға мөлдөрәп ҡарап, үҙенең йөклө булыуын әйтте... "Йыраҡ йондоҙҙарҙы күргән, уларға ҡараштары менән генә бул а ла ынтылған кеше был донъяла юҡҡа ғына йәшәмәй", – тигәнде ишеткәне бар Байғөбәктең. Бәлки, шулайҙыр ҙа, ана, йондоҙҙар ҙа ҡалҡты... Ҡатыны әйткәне хаҡ бул а, ваҡыты еткәс, уның үҙенең дә яҡты йондоҙо тыуыр... Ә иртәгә бик тә яуаплы көн, башҡорт иленең, тыуасаҡ йондоҙҙарҙың, уларҙың киләсәген ҡурсалау бурысы тора...

Байғөбәк, киҫәк кенә ҡалҡынып, тирә-яҡҡа күҙ алды. Далала ҡараңғылыҡ көсәйә, быны иҙеп ара-тирә аттар бышҡыра, ниндәйҙер төнгө ҡоштар сырҡылдап ҡуя...

***

...Иртәге ен Байғөбәк батыр үҙҙәренең бындай саҡта йыш файҙалана торған хәрби хәйлә ен ҡулланырға булды. Ғәскәри төркөмөнән иң йылғыр, таҫыллы, күп

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 41



тапҡырҙар ыналған утыҙ яугирын айырып алып, уларға урау юлдарҙан барып, баҫҡынсыларҙың алдына сығырға ҡушты. Унан, алышҡа инмәйсә, уларға уҡ яуҙырырға. Аҙаҡ, еңелгән булып, үҙҙәренә йә әт кенә аҙлыҡлы төпкөлгә ҡасырға.

...Байғөбәк сардарҙың иҫәбе дөрөҫ булып сыҡты. Баҫҡынсылар артынан эҙмә-эҙ тиерлек оҙатып килгән башҡорттарға урыҫтарҙың әр аҙымы ап-асыҡ күренеп торҙо. Ана, уларҙың алдан барған кесерәк ғәскәри төркөмөнә ниҙер булды, аттар кешнәп үрә баҫты, ҡай ылары кирегә боролдо, күгәүен тубы өжүм иткәндәй буталды. Күрә ең, шул тарафҡа киткән башҡорт егеттәре ышыҡтан тороп уҡтар яуҙыра башланы.

Әммә бер мәлгә генә буталып ҡалған баҫҡынсылар төркөмө юғалып ҡалманы, йә әт кенә тағы бер тупҡа ойошоп, әлеге уҡтар килгән ҡамышлы аҙлыҡҡа ҡарай тороп сапты. Алдағыларына артҡы төркөмдәр ҙә ҡушылды. "Хәйлә барып сығырға оҡшаймы әллә? – тип шатланды Байғөбәк. – Башҡорт егеттәрен ҡыуалармы? Әҙерәк көтөргә лә, былары күҙҙән юғал а, беҙгә лә уңларға ярамай”. Тағы бер аҙ шау-шыу баҫылыуын көтөп торҙо ла үҙе менән ҡалған яугирҙарын йә этләп әлеге аҙлыҡ ауыҙына алып китте.

...Ҡамыш ара ына инеп киткән бер нисә тиҫтә генә ыбайлыны ҡыуып барып, еңел еңеүгә иҫәп тотҡан урыҫтар, хәрби тәртип тә аҡлап тормайса, киң йәйелеп, айт- айтлап әле тегенән, әле бынан баштары ғына күренеп ҡалған йылғыр ыбайлыларҙы оҙаҡ ҡына эҙәрләп йөрөнө. Үҙҙәренең алданыуҙарын улар батҡаҡлы аҙлыҡҡа килеп тулғас ҡына аңлап алды. Ләкин уң ине инде, еңел аяҡлы, тоттормаҫ ыбайлылар ниндәйҙер үҙҙәре генә белгән уҡмаҡтарҙан ирәк-мирәк ялбыр ҡыуаҡтары тырпайып торған ҡамышлыҡ ара ына инеп тә юғалғайны. Күмәк ат тояҡтары күтәргән ҡуйы бысраҡҡа буялып бөткән баҫҡынсы ғәскәргә үгенә- үгенә кирегә боролорға тура килде. Ләкин аҙлыҡ ауыҙына килеп етеүгә уларҙы яңы афәт көтөп торған икән: алдағы ыбайлылар асыҡлыҡта күренеү менән, ауала көсәйә барған, күмәк ыҙғырыуға оҡшаш ниндәйҙер сәйер тауыш ишетелде. Ул да булмай, ҡаушап ҡалған баҫҡынсылар өҫтөнә болоттай булып шыйылдап үткер осло, ауыр уҡтар яуа башланы. Уҡтар шул тиклем күп, тайшанып ҡотолормон тимә. Ҡайҙан килеп сыҡты икән был башҡорттар? Уларға тоҫҡап тора ы ла түгел, уҡмашып килеп сыҡҡан төркөмдән уҡтар ситкә китә алмай, аттар йығыла, ыбайлылар ҡолай... Буталып, сығынсылап, үрәпсеп тапанған ат тояҡтары аҫтында, сытыр-сатыр ымаҡ шытырҙап, келәм булып түшәлгән уҡтар ына, улар менән бергә аттарынан йығылған кәүҙәләр түшәлә...

...Бындай көтөлмәгән мәхшәрҙә лә урыҫтар барыбер аҡыллы эш итте, бөтөнләй ҡыйралыуға барманы, бер тирәгә йыйылып, аҙлыҡтан сығыу өсөн башҡа юлдар эҙләп кирегә китте. Башҡорттар ҙа уларҙы эҙәрләп торманы, баҫҡынсы ғәскәр аны менән дә күп, яҡшы уғышсылар ҙа, йөҙгә-йөҙ айҡашҡанда ни булмаҫ. Ҡыуып ебәрә алдылар, шул еткән, абаҡ булыр, хәҙер был тарафтарға тиҙ генә юлыҡмаҫтар, моғайын.

...Байғөбәк батыр атынан төшөп, үҙе өсөн ҡоролған сатырына табан атланы. Яугирҙарынан бер төркөм егеттәре әсирлектән ҡотҡарылған кешеләрҙе, баҫҡынсыларҙан тартып алынған малдары менән, кире йәйләүҙәренә оҙата китте. Ә Байғөбәк үҙе төп көстәре менән оҙата киткәндәр әйләнеп килгәнсе ошонда көтөп торорға булды: аҙлыҡҡа инеп киткән баҫҡынсылар, боролоп килеп, ҡыуа сығыуҙары ла ихтимал. Уларҙың башҡа төркөмдәре лә булмаҫ тимә...

Ләкин Байғөбәк батырға бөгөн сатырында ял итергә яҙмаған икән. Күп тә үтмәне, ағауылда торған егеттәре уға хан арайынан ашығыс сапҡын килеүе хаҡында әйтте.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 42



Сапҡындар өсәү, уларҙың урталағы ы, олпатырағы алғараҡ сыҡты:

– Бик йә әт ҡайтып етергә ҡуштылар,– тине ул, ихтирам билдә е итеп ҡулдарын күкрәгенә терәне.– Ырыу әм ғәскәр башлыҡтарын барса башҡорт иленән йыялар...

Байғөбәк батыр аңланы, йә әт ҡуҙғалды, тимәк, тағы ниҙер ҡупҡан, ғәҙәти хәл генә бул а, арттан сапҡын ебәрмәҫтәр ине. Тынъыслыҡ юҡ шул башҡорт илендә лә. Яттар менән генә түгел, ырыуҙаштар ара ында ла ыҙғыштар ҡуба тора. Байғөбәк бындағы ғәскәр төркөмөнә киткәндәрҙе көтөп алып, ҡайтыр юлға бергә сығырға кәрәклеген бойорҙо ла, үҙе сапҡындар менән бергә юлға сыҡты...

***

Байғөбәк сардар хан арайына ҡайтып еткәндә ырыу бейҙәре әм ғәскәр башлыҡтары йыйылып бөткәйне инде. Хан арайы Аҡташ тауынан йыраҡ түгел, Ҡариҙелдең Ағиҙелгә ҡойған бер бөгөлөндә урынлашҡан. Хәрби ҡәлғә-нығытма рәүешендә төҙөлгән олуғ мө абәт бина. Ә уны тирәләп ҙур ғына кәрйә-ҡаласыҡ йорттары ибелгән. Бындағылар үҙҙәрен ошо тарафтарҙа хакимлыҡ иткән боронғо мәш үр Аҡташ хандың тура вариҫтары итеп анай. Көтмәгәндә дошман килеп баҫа ҡал а, хан арайынан Ҡариҙелгә сығыр йәшерен ер аҫты юлы ла бар, тиҙәр. Ләкин яуаплы йыйын үткәрерлек иркенлектәр ҙә, шарттар ҙа юҡ бында. Шуғалырмы, йыйын арайҙа түгел, ә байтаҡ ситтәрәк, киң йәшел яланда үтәсәк икән. Көндәр йылыға китте, унда хандың ун бер ҡанатлы иркен ебәк сатыры ҡоролған. Уны тирәләп, ярай ы уҡ алыҫлыҡта, килгән ырыу вәкилдәренең еңел тирмәләре ҡунаҡлаған. Хужалыҡ әйберҙәрен ҡуйыу, менге аттарҙы тотоу өсөн махсус урындар бүленгән. Шуға ла был тирә тип ене тапалып, ҡуйы йәш үлән иҙелеп, ҡыуарып бөткән. Тирмәләр ҡашығына ырыу, ҡәбилә тамғалары ҡуйылған. Ана, уларҙың бере ендә, талғын елдә тере ымаҡ, бүре башы елкенә – түңгәүерҙәр булыр. Күп кенә төркиҙәр ымаҡ, бүрене хөрмәтләйҙәр инде түңгәүерҙәр, үҙҙәренең яҙмышы, ҡурсалаусы итеп күрәләр. Бүре тешен хатта бетеү итеп тә йөрөтәләр... Түңгәүерҙәр менән йәнәш табындар урынлашҡан. Туғыҙ ырыулы табындар – башҡорт ҡәбиләләре ара ында иң ҙуры. Шуғалырмы, тамғаларына ҡарағанда, уларҙан бер нисә ырыу вәкиле килгән. Тирмәләрҙәге сүмес, туҫтаҡ, дүңгәләк, ҡабырға кеүек тамғалар ҙа ошоно раҫлай булыр. Арыраҡ сатраш ҡуйылған ике таяҡҡа оҡшаш тамғалы мендәр, тағы ла арыраҡ тараҡ, ҡаҙ тәпәйе тасуирланған юрматылар тирмә е теҙелгән. Унан – даға, сыбыҡ тамғалы тамъяндар... Ырыуҙар ымаҡ, тирмәләр ҙә бик күп. Шулай ҙа Башҡорт хан тирә ендә берләшкән ҡәбиләләрҙән барса ырыу вәкилдәренең бары ы ла килә алмаған. Уларынын, күрә ең, үҙ төйәктәрендә едтиерәк эштәре булыр. Әммә әр ҡай ы ынан ышанысл ы кешеләр ебәрелгән. Әле улар бер-бере е менән таныша, хәл-әхүәл ораша, ни сәбәптән саҡырылыуҙары хаҡында баш вата. Үҙҙәре лә, кейемдәре лә төрлө уларҙың.

Тамъяндар менән үҫәргәндәр бер тирәгә урынлашҡандар. Күптәре йәйге баш кейемендә, уғылған аҡ буҫтауҙан эслек еҙ генә тегелгән ҡупшы көләпәрә кейеп алғандар. Унын ҡырҙары түңәрәкләп, йәнә түбә тирә е ҡыҙыл, йәшел таҫмалар менән арҡыс-торҡос биҙәлгән. Өлкәнерәктәре, күрә ең, алҡындар менән әлегә хушлашып өлгөрмәгән, сит-ситтәре өҫкә күтәрелә биреп ҡуйылған, ҡара туҡыма- ы бәрәс тире е менән ҡаймаланған йоҡа кәпәсен дә ташламаған. Уларынын салбарҙары ла йәштәрҙеке ымаҡ йәйге киндерҙән түгел, ә алҡынға сыҙам йоҡа буҫтауҙан... Юл йөрөү үҙ шарттарын ҡуя, күптәр тула ойоҡтары йә йомшаҡ ситектәре өҫтөнән әр осраҡта ҡулай күн ҡата кейеп алғандар.

Хәйер, вәкилдәрҙең бары ы ла тиерлек ыбай йөрөгәндә уңай, хәрбиҙәрҙекенә

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 43



яҡын кейемдә. Ҡайыш-билбау ҡаптырғаға уң яҡлап тышы ырлап эшләнгән күн ҡалта аҫылған. Унда ғәҙәттә саҡматаш, шулай уҡ юлда кәрәк булған башҡа ваҡ-төйәк нәмәләрҙе йөрөтәләр. Ә ул ҡаптырғаға күн йә тире менән тышланған ағас ҡында унар бысағы, унын янындағы ҡайыш ауытта ҡайраҡ ташы була.

Әлбиттә, ҡындарҙың ат тире енән, ҡайын туҙынан я алғандары ла, йүкәнән үрелгәндәре лә осрай. Тик уларын ярлы, ябай халыҡ йөрөтә. Ә бөгөн бында башҡорттарҙың затлы вәкилдәре йыйылған. Шуға ырыу йә ғәскәр башлыҡтары, бигерәк тә табын, түңгәүер кеүек көслө ҡәүем вәкилдәре билдәренә ҡупшы ҡушаҡтар, ҡиммәтле ҡәмәрҙәр быуып алған. Улары ырлап биҙәлгән, ҡаптырмаларына хәтле дүрткел еҙ, хатта көмөш киҫәктәре менән ҡапланған. Ә ҡәмәр ҡаштары ҡыҙыл аҡыҡ, күк, йәшел фәйрүзә таштары менән биҙәлгән.

Башҡорт иле – хәҙер ҙур ил, халыҡтары ла төрлө. Унын биләмәләрен көнсығыштан – Тубыл, көньяғынан – Яйыҡ, көнбайыштан Ҙур Иҙел, төньяғынан Сулман йылғалары ыулай. Бөйөк йылғалар! Улар башҡорттарҙы барса ҡалған донъя менән бәйләй. Хан саҡырыуы буйынса килеүселәрҙең әр бере е ошо ҙур ил өсөн яуаплы.

...Оҙаҡламай ырыу вәкилдәрен хандың иркен сатырына саҡырҙылар. Сатыр эсен тәү ҡат күреүселәрҙең бындағы йы аздарҙың байлығына әм күркәмлегенә иҫ-аҡылы китерлек. Иғтибарҙы тартҡаны, әлбиттә, аяҡ аҫтына түшәлгән затлы иран, әрмән келәмдәре, терәлеп ултырыр өсөн өйөлөп ҡуйылған ебәк йә атлас тышлы мендәр-яҫтыҡтар, Бузантара барса ы менән көпләнгән хан тәхете йә был яҡта күренмәгән йылтыр ауыт- аба ла түгел. Улары әр хәлле башҡортта ла бар.

Күптәрҙең, бигерәк тә ғәскәриҙәрҙең, күҙен ҡыҙҙырғаны башҡа: сатыр-тирмәнең бар тағараҡтарына ла затлы ҡоралдар эленгән. Уҡ-йәйәләр, ҡылыс-хәнйәрҙәр, тағы әллә ниндәй ят ҡоралдар аҫыл таштар, алтын йә көмөш менән биҙәлгән ҡалъян- аҙаҡтарҙа, ауыт-ҡындарында тора. Ят телдәге яҙыу, нағыштарына ҡарап ҡына ла уларҙың төрлө илдәрҙән, донъяның төрлө тарафтарынан икәнен тойомлап була. Үҙҙәре ҡатнашҡан яуҙарҙа әсир төшкән ғәнимәт мал булыр былар, бүләк итеп бирелгәндәре, аманат итеп алынғандары ла барҙыр...

Байғөбәк батыр бындағы тәртиптәрҙе яҡшы белә, тәү ҡат ҡына ҡатнашмай хан йыйындарында. Вәкилдәрҙең ингән бере хан сатырының үҙенә тейеш билдәле бер еренән урын ала. Ана, хандың уң яғында – күп яуҙарҙа ҡатнашҡан баш сардар. Күрә ең, йыйында ҡараласаҡ мәсьәлә бик мө им, яу менән бәйле, ғәҙәти йылдарҙа ғәскәр башлығының урыны унда булмай. Был икәү алдында, сатыр тултырып, затлы иран келәмдәре өҫтөндә юрматы, табын, үҫәргән, түңгәүер, тамъян, бөрйән, мең ҡәүемдәре вәкилдәре айрым-айырым урынлашҡан. Төрлө башҡа башҡорт ҡәүемдәре лә бар бында. Тик улары бергәрәк ойошоп, ситкәрәк ултырған.

Башҡорт хан үҙ ҡашындағы уҙамандарға уйсан ғына ҡарап алды: таянып буламы уларға, ҡаршы тора алырмы Башҡорт иле көтмәгәндә ҡалҡып сыҡҡан үтә лә хәүефле ынауға? Ана, мәртәбәле урында бер нисә ярандары менән бөрйән батыры ултыра. Баштан-аяҡ ҡоралды, күндән генә кейенгән омғол, ҡара сәсле теремек бә леүәндәр. Күн кейемдәре лә ябай ғына түгел, матурлап ырлап эшләнгән. Ағасҡа, күнгә уйып, семәрләп төрлө үрәттәр эшләргә әүәҫ инде был ҡарағусҡыл ҡупшы бөрйәндәр. Ҡупшылыҡ уларға ҡыйыу яугир булырға ҡамасауламай. Яугирлыҡта уларға еткән башҡа ырыу-ҡәбиләне атап буламы икән әле? Бөрйәндәр ҡояш сыҡҡан тарафтан алып ул байыған ерҙәргә саҡлы ик еҙ-сик еҙ биләмәләрҙе эсенә алған беренсе Бөйөк Төрки Ҡағанатының көнбайыш ҡанатында бик күренекле урын алып торған, Ҡағанат алып барған барса уғыштарҙа бик теремек ҡатнашҡандар. Миләди алтынсы йөҙйыллыҡта уҡ бөрйәндәр, башҡа төркиҙәр менән бергәләп, ҡеүәтле Эфталит империя ын пыран-заран килтерәләр, харабаларға

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 44



әүрелдерәләр. Шул уҡ йөҙйыллыҡтың аҙаҡтарында төрки ғәскәрҙәре менән бергә Сасанийҙар Иранына баҫып инәләр. Унан, Бузантара-Византия, Ғәрәп биләмәләре, Урта Азия... Хәйер, донъяла бөрйәндәр булмаған йә бара алмаған ерҙәрҙе күр өтеү еңелерәктер ҙә әле. Ҡайҙа ғына булма ындар, әр тарафта уларҙан тәрән эҙҙәр ҡала килгән. Иран маздасыларының Өс изге утының бере е — Бөрйән уты, ә Памир бейеклектәренең бәғзе е Башҡорт тауы тип аталыуы осраҡлы хәл булырмы? Яугир халыҡ бөрйәндәр, бары ы ла үҙҙәре менән йөрөй, бары ын да үҙҙәренә үҙҙәре эшләп ала. Өйөр-өйөр малдары бирә уларға барса кәрәк-ярақты: тире иләү, кейеҙ баҫыу өнәрҙәре, күндән көнкүреш әйберҙәре, кейем- алым, аяҡ кейемдәре тегеү... әр ерҙә тулып ятҡан кесерткән йә киндерҙән бөрйәндәр бына тигән үҫ алып, туҡыма уғалар, иләнгән ептән таҫтамал, балаҫ туҡыйҙар йә йомшаҡ кейем әтмәләйҙәр. Булдыҡлы бөрйәндәр әр яҡлап, моғайын, хәҙер ҙә ынатмаҫтар... Башҡорт иленең Яйыҡ үҙәндәренең тыныслығы башлыса ошо бөрйәндәргә бәйле.

Үҫәргәндәр, әр саҡтағыса, бөрйәндәр йәнәшә ендә урынлашҡан. Башҡорт хан ҡарашын икенсе төркөмгә күсерҙе. Был ике халыҡтың яҙмыштары ла күп йә эттән уртаҡ, яуҙарҙа ла урындары йәнәш. Үҫәргәндең бә леүән Көтөр батырҙары тура ында күпме йырҙар яҙылған, даны донъяға таралған. Улар ҙа ынатмаҫ, төплө, мул, иркен йәшәй үҫәргәндәр, күпләп мал тоталар. Ҡыштарын балсыҡ йә бүрәнәнән алынған ыҙмаларҙа йәшәйҙәр. Башҡорт иленең көньяҡ-көнбайыш өлөшөндә ныҡлы терәк инде был үҫәргәндәр. Болғарға ла бик яҡындар... Үҫәргәндәр эргә енән башҡорттарҙың тағы бер иң ҡеүәтле ырыу-ҡәбиләләренең бере е — тамъяндар урын алған. Башҡорт хан, йыйылған зыялыларҙың түҙемлеген ынағандай, ашыҡмайса ғына ҡараштарын әле бер, әле икенсе төркөмгә күсерҙе. Бик боронғо ҡәүем, ырыу тамғалары — даға, үҙҙәре лә бына тигән ыбайлы яугирҙар. Яйыҡ менән Эмба ара ын төйәк иткәндәр, уғыҙҙар менән ныҡ аралашып йәшәйҙәр. Килеп тыуған әлеге хәлдә иң тәүҙә уларҙың ярҙамы кәрәк булыуы бик ихтимал...

Башҡорт хандың ынамаҡ ҡарашы урта тирәлә урын алған тағы бер төркөмгә туҡталды. Бик боронғо табын ҡәүемдәре вәкилдәре улар. Тарихтағы эҙҙәре ис тә бөрйәндәрҙекенән ҡайтыш түгел. Юҡҡа ғына улар үҙҙәренең ата-бабалары тамырын Бөйөк Төрки Ҡағанатын төҙөгән мәш үр Төмән ҡаған исеме менән бәйләмәйҙәрҙер бит. Ҙур ҡәүем, мәртәбәле ҡәүем. Улар ыулаған Ыҡ, Сәрмәсән, Туҡ, Кесе Уран, Ырғыҙ-Кәмәлек, Тубыл йылғалары үҙәндәрендә табындар йөҙөндә ысын хужа бар. Табындар Урал аръяғында ла, уғыҙҙар илендә лә етерлек. Ҙур ҡәүем, сәйәсәттә мәртәбәле, көслө, ойошҡан ҡәүем. Бөйөк Биар илендә хөкөм йөрөткән биар-биләрҙәрҙе бәреп төшөрөп, тәхеткә болғарҙарҙың үрләүенә булышлыҡ итеүселәр ҙә ошо табындар түгелме ни?

Табындарҙан уң Башҡорт хан башҡа ҡәүем вәкилдәренә ҡарашын ирпеп кенә үтте. Ана юрматылар, шулай уҡ башҡорттарҙың иң эре, иң боронғо ҡәбиләләренең бере е. Күп ынауҙар үткән, бер өлөшө көнбайышҡа, Панонияға, киткән, тиҙәр. әр хәлдә ышаныслы ҡәүем, улар булғанда Сулман, Иҙел тарафтары ла яҡлаусы ыҙ ҡалмаҫ... Юрматыларға йәнәш мендәр, Миңзәлә, Ыҡ, Сөн, Зәй йылғаларын ыулаған башҡорт ҡәүемдәре: байҙар, биләрҙәр, юрмыйҙар, ирәктеләр, бүләрҙәр...

...Хандың ни әйтерен көтөп, йыйын тынып ҡалған. Ырыу-ҡәбилә вәкилдәре, бигерәк тә бейҙәр, хан эргә енә йыш йыйылмай. Ғәҙәти шарттарҙа быға мохтажлыҡ та юҡ, әр ырыу, ҡәбилә үҙ хәлен үҙе хәл итергә тырыша, башҡаларға алышып бармай. Әлеге осраҡта, күрә ең, күмәкләп уйланыр ниндәйҙер ғәҙәттән тыш берәй нәмә килеп сыҡҡандыр, юҡҡа-барға хан ер аяғы ер башы ерҙән ил ағаларын

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 45



йыйып ултырмаç.

Ысынлап та, Башҡорт хандың тәүге үҙҙәре үк ырыу башлыҡтарын ағайырға мәжбүр итте.

— Сапҡын килде, хәүефле хәбәр килтерҙе,— тип туранан-тура башланы Башҡорт хан, уратып-суратып тормайса.— Быға са ишетелмәгән ниндәйҙер ҡара яу килә. Алыç Бағдад тарафынан... Хазар биләмәләрен урап үтеп, хәҙер төрки далаларына килеп сыҡҡандар, бәшнәктәргә яҡынлашҡандар. Күп меңләгән ат әм дөйәләрҙән торған каруанды бихисап ғәскәриҙәр оҙата килә, ти...

Көтөлмәгән был хәбәргә йыйын башта ни әйтергә белмәй торҙо. Нимә кәрәк икән уларға? Беренсе булып тамъян ырыуы бейе тауыш бирҙе:

— Маҡсаттары нимәлә?

Башҡорт хан йыйындарҙа сығыш я аусыларҙы әллә ни тыйып бармай. Үҙен бүлдереүсегә ул әле лә асыуланманы, етдиләнә генә төштө.

—Төркиҙәрҙе ата-баба рухынан, Тәңреләренән яҙҙырырға, үҙ диндәрен көсләп таҡмаҡсы икән ғәрәптәр. — Башҡорт хан үҙенең алдында иран келәмдәрендә ултырған бейҙәргә ынамыҡ ҡарап алды. — Шикле йомартлыҡ та күр әтәләр, ти. Юлдарында осрағандарға был тарафта тан ыҡ булған тәм-том, емеш-еләк, йөҙөм, хәлүә өләшәләр, түрәләргә хатта затлы халат, алтын, көмөш тәңкәләр ҙә эләгә, имеш. Төрлөсә әүрәтергә тырышаларҙыр инде халыҡты...

—Төбәп кенә ҡайҙа баралар икән улар? — Быны ын ҡатай ырыуы бейе ораны, шикелле.— Яу менән киләләрме, әллә...

Башҡорт хан уны тыңлап бөтөрмәне, нимә орағанын белеп тора.

— Сапҡын килтергән хәбәр дөрөç бул а, ғәрәптәр үҙҙәре башлап өжүм итеп бармайҙар, ти. Кире енсә, ҙурыраҡ ырыу тупланмаларын урап үтергә тырышалар. Уларҙың мәкерен белер хәл юҡ, бәлки, уңай мәл көтәләрҙер. Ә былай алдан да, арттан да — әр яҡлап уларҙы ғәскәр ҡурсалап бара. Уйҙары изге бул а, нимә тип ғәскәр эйәртеп йөрөрҙәр икән?

— Ә ҡайҙа баралар улар? — тип ҡабатланы орауын ҡатай вәкиле.— Ҡай ы илгә?

— Быға са үткән юлдарына ҡарағанда, ғәрәптәр бәшнәк, уғыҙ аша беҙҙең тарафтарға йүнәләләр...

— Үҙҙәре әйтмешләй, ҡырағай йәджудж, мәджудж тарафтарында нимә эҙләй улар? — тип үҙ алдына өйләнгәндәй әйтте берәү.— Хәлифәт әле яңы ғына Айрупа яҡтарында Андалузия өсөн уғыша ине түгелме?

Быны ына Башҡорт хан яуап биреп торманы, ырыу бейҙәре килеп тыуған хәүефкә тейешле иғтибар бирмәй кеүек тойолдо уға. Әлбиттә, башҡорт бейҙәренең донъя хәлдәре менән хәбәрҙар булыуы менән ул ҡәнәғәт. Ысынлап та, ислам байрағы аçтында хәлифәт хәҙер ярты донъяны яулап алды, Иран, Мысыр, Туран... Көнбайышта ул Андалузияға барып етте. Хәлифәттең хәҙер төньяҡ илдәренә, борон-борондан ҡурҡып та, кәм етеп тә "йәджудж әм мәджудж" тип йөрөткән ҡырағай халыҡтар ғына йәшәр ерҙәргә лә күҙ ала башлауын иҙмәйҙәрме уның бейҙәре?! Шуға, тауышына ҡырыçлыҡ сығарып, ҡырҡа ғына әйтә ҡуйҙы:

— Ғәрәптәр килгән тарафтағы беҙҙең ырыу башлыҡтары үҙҙәренең сапҡындары артынан орау ебәргән: "Ни эшләргә? Ғәскәр йыйырғамы?" Беҙҙән улар кәңәш әм ҡеүәт көтә. Шуға саҡырҙым еҙҙе. Ни әйтер егеҙ?

Йәнләнә генә башлаған әңгәмә, күрә ең, хәлдең яуаплылығын тойоп, ҡапыл тынып ҡалды. Башҡорт хан бер аҙ түҙемле генә көтөп торҙо ла, өндәшеүсе булмағас, асыуы килгәндәй киçәк кенә әйтә ҡуйҙы:

— Хәбәрҙең айышына төшөндөгөҙ микән? Илгә быға са булмаған аçтыртын хәүеф килә: беҙҙе ата-баба рухынан биҙҙерергә уйлайҙар. Көсләп үҙҙәренең динен

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 46



таҡмаҡсылар. Шулай булма а, нимә тип бихисап ғәскәр менән килер улар? Динебеҙҙән яҙ аҡ, илебеҙҙән дә, рухыбыҙҙан да яҙмабыҙмы?

— Хәбәр ни кимәлдә хаҡ, — тине шунда, хандың ҡуҙғыуына иғтибар итмәгәндәй, әр нәмәне үлсәп өйләргә өйрәнгән ҡыпсаҡ вәкиле.— Көн элгәре бола күтәрмәйбеҙме? — Ҡыпсаҡтар — ҙур халыҡ. Иртыштан Көнбайыш Айрупағаса йәйрәп ятҡан Кимак-Ҡыпсаҡ ҡағанатына ыйына. Шуға уларҙың вәкиле хан алдында ла үҙен иркен тота. — Бәлки, әллә ни хафа ла юҡтыр, кемдәр генә, ниндәй генә халыҡтар йөрөмәй хәҙер иркен дала буйлап?

— Хәбәр хаҡ! — тип киҫте йәнә Башҡорт хан, ҡыпсаҡтың артыҡ ирәүәнләнеүен оҡшатмайса. — Улар ара ында беҙҙең тараф Уралды яҡшы белгән Хазар әм Болғар кешеләре лә, хатта исламды ҡабул иткән башҡорттар ҙа бар, ти.

Хан шикләндеме, уларҙың исемдәрен әйтеп торманы:

— Ҡай ылары хатта Бағдадтан уҡ киләләр икән, — тиеү менән сикләнде.— Урал буйҙары хәҙер ишектәре шар асыҡ әрпеш ҡатын өйөнә оҡшай башланы түгелме? Тәртип юҡ, кем теләй шул килә, хужа булып үтәнән-үтәгә йөрөй...

— Инде динебеҙҙән дә яҙҙырырҙар микән ни? — тип ҡуйҙы аранан тағы берәү. — Тыныс йәшәргә ис ирек бирмәйҙәр бит, әй... Үҙ-ара ыҙғыш тын а, әллә ниндәй ғәрәптәре килеп сыға.

— Афәт килә, афәт!

Үҫәргән батыры олораҡтарҙың өмөт өҙ мыжыуҙарына түҙмәне:

— Иҙел күрмәй, нимә итек сисәбеҙ әле, йәмәғәт? — тине.— Кил әләр ни, диндәрен ҡабул итмәйбеҙ ҙә ҡуябыҙ!

Ләкин башҡалар шунда уҡ уға ҡаршы сыҡты:

— Улай еңел ҡарамайыҡ әле,— тинеләр йыйында ҡатнашыусы олораҡтар.— Ғәрәптәр хәҙер ислам байрағы аҫтында ярты донъяны яуланы. " еҙ беҙҙең динебеҙҙе ҡабул итә егеҙме, юҡмы?" — тип орап ҡына тор алар, быны эшләй алырҙар инеме ни? Дошман мәкерен төшөнөп бөтә е түгел...

— үҙҙәрегеҙ хаҡ, ҡа армандар, — тип йөпләне быны Башҡорт хан.— Юлдарында тура килгән бәшнәк, уғыҙ ырыуҙарын исламға күс ендәр өсөн төрлөсә бик өгөтләйҙәр, ти. Түрәләргә ҡимммәтле бүләктәр, ебәк, атлас халаттар, алтын аҡсалар бирәләр, — тип ҡабатланы ул баяғы үҙен,— ябайыраҡтарҙы тәм-том, емеш-еләк, биҙәү әйберҙәре менән алдайҙар: ғәскәри башлыҡтарына хәлифәттең ниндәйҙер йәшерен хаттарын да тараталар икән. Исламды ҡабул иткәндәргә алтын тауҙары ла вәғәҙә итәләр, ти.

— Башта ғына шулай улар, — тип йөпләне хәрби кейемдәге хан сардары. — Беләбеҙ бит инде ғәрәптәрҙең башҡа халыҡтарҙы нисек буй ондороуын. Башта өндәй, вәғәҙә бирә, унан ҡорал менән килеп баҫа. Үҙҙәрендә лә бит улар ярандарына күпләп байлыҡ — ер, мал биргән. Ә буй онмағандарға күтәрә алмаҫлыҡ алым алған. Я аҡ түләй алмағандарҙың мөлкәтен, уны ы булма а, ҡатынын, балаларын атҡандар. Улары ла булма а, үҙен ҡол итеп алып киткәндәр... Йоҡлап, битараф ҡалып, беҙ ҙә мәкер тоҙағына эләкмәйек.

— Бының өсөн нимә эшләргә кәрәк уң беҙгә? — тип асыулы ҡысҡырҙы шунда уҡ ғәскәри кейемдәге бер нисә уҙаман бер юлы. — Тәңребеҙҙән яҙҙырыуҙарын көтөп ятайыҡмы ни?

— ис улай түгел. — Хан сардары, ниңәлер, йылмайғандай итте.— Бындағыларҙың әр бере енә үҙ ырыуына ҡайтып, яу сабыр ир-егеттәребеҙҙе барлай тороу кәрәк булыр. Әгәр теге йәки был хәл килеп тыу а, еҙгә сапҡын ебәрербеҙ. Ырыу биләмәләрегеҙ ҙә яҡлаусы ыҙ ҡалма ын. Ҡатын-ҡыҙ, бала-сағаны ваҡытлыса ҡайҙа йәшереү, мал-тыуарҙы ҡайҙа ҡыуыу хаҡында ла уйлашығыҙ...

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 47



Сардарының үҙҙәрен Башҡорт хан эләктереп алды:

— әр хәлдә дошман алдында бөлтерәп ҡалмайыҡ, ҡорал тотмаған моң оу сабый түгелбеҙ,— уның тауышы ҡапыл ҡатҡылланып китте. — Илбаҫарҙар беҙгә килеп мантығаны юҡ. Ҡайҙан кил әләр, шунда китерҙәр ҙә. Ярты донъяны яулаған Искәндәр тигән сардар ҙа башҡорттарҙы теҙ сүктерергә маташҡан, әммә барып сыҡмаған, мәсхәрәле ҡыуып ебәрелгән. Киләятҡан был яу ҙа шул тарафтан. Аҡташ хан тура ындағы ҡары үҙҙе онотмаған ығыҙҙыр бит?! — тип тауышын күтәрә биреп ораны Башҡорт хан көтмәгәндә. Яуап дәррәү яңғыраны:

— Юҡ, юҡ!.. — Йәшерәктәр икереп торҙо.— Нишләп онотайыҡ ти?!

Башҡорт хан яуаптан ҡәнәғәт ҡалыуын белдереп баш ҡаҡты ла үткер ҡарашын ситтәрәк ултырған Байғөбәк батырға төбәне:

— Ә бына күп кенә яуҙарҙа үҙен күр әтеп өлгөргән йәш батырҙы егеттәре менән бәшнәктәр тарафына ебәрергә кәрәктер, тип уйлайым. Тәжрибә е бар, әле кисә генә урыҫтарҙың баҫып ингән ғәскәри төркөмөн бик оҫта ҡыуып ебәрҙе...

— Улары ла маҙа бирмәй уңғы ваҡыт...

— Байғөбәк батырҙы әйтәм, — тип йәнә үҙен ялғаны Башҡорт хан.— Ғәрәптәрҙең үҙҙәренә иҙҙермәй генә ҡаршы барып, артабан уларҙың тын алышын, ҡылыҡтарын күҙәтер. әр аҙымдары хаҡында хәбәр итер. Ә беҙ бында, бер-бер хәл була ҡал а, әҙер торорбоҙ...

...Бейҙәр таралышҡас та, Башҡорт хан оҙаҡ ҡына уйланып ултырҙы.

Ни булды уң был төркиҙәргә? Үҙ-ара ыҙғыштары етмәгән, әле был, әле теге тарафтан яу килеп сығырын көт тә тор. Парсамы, Ҡытаймы, Руммы, башҡамы — әр ҡай ы ы, үҙ биләмә ендәге кеүек, төрки дала ына бүҫеп килә лә инә. Хәҙер бына ғәрәптәре. Ҡайҙа булды мәш үр империяларҙы ҡалтыратып торған, ярты донъяны теҙ сүктергән бөйөк төрки ҡағандары? Тарихта тәүгеләрҙән булып нәҡ төркиҙәр Ҡытайҙан Айрупаға саҡлы биләмәләрҙә ик еҙ-сик еҙ дәүләттәрен төҙөгәйне түгелме? Ҡағанат иҫәбендә башҡорттар ҙа әле Иран, әле Юнанға барған йә шул тарафтарҙан килгән яуҙарҙы ҡаршыларға мәжбүр булған. Ә хәҙер бына хазарҙар, ғәрәптәр... Тынғылыҡ юҡ башҡорт иленә, элек тә булмаған, алдағы көндәре лә саф аяҙ күренмәй. Бәшнәктәр, болғарҙар, аландар, барсилдар, тағы бик күп халыҡтар ымаҡ уҡ, башҡорттар ҙа Хазар ҡағанатынан азат түгелдәр. Эш хираж түләү ауырлығында ғына бул а икән, әр үҙаллы аҙымына, ҡайҙа баҫырына ҡаған ризалығын алырға кәрәк. Ә ризалыҡ еңел бирелмәй, Болғар илтабары Алмыш, ана, шуның бәрәбәренә ҡағанға аманатҡа улын, яҫтығына ҡыҙҙарын илтеп алырға мәжбүр. Башҡорт иленең хәле Болғар менән бәшнәктәргә ҡарағанда отошлораҡтыр ҙа әле: ул Хазар пайтәхете Итил ҡала ынан ситтәрәк ята. Ҡай ы бер үҙаллы эштәрҙе ҡағанат күрмәй ҙә ҡала. Ләкин башҡорттарҙың ҡулы барыбер бәйле, аяҡтары тышаулы. Ҡаған үҙенә ғәскәр кәрәк булғанда ғына был бығаубәйҙәрҙе ысҡындырырға рөхсәт итә. Унда ла хираж-я аҡ йыйыусылары башҡорт биләмәләренән сыға белмәй. Мал, байлыҡ көҫәү, башҡалар өҫтөнән хакимлыҡ итеү теләге көслө ҡағанда. Ҡаршы тороp әмәл дә күренмәй.

Бынан тиҫтә йылдар элек башҡорттар, бәшнәктәр менән бергәләп, Хазарға яу менән дә барып ҡарағайнылар. Тик көстәр тигеҙ түгел, ҡырылып, ҡойроҡ ҡыҫып, кире ҡайттылар. Берҙәмлек юҡ ҡағанға ҡаршы тороуҙа, төркиҙәрҙең әр ҡай ы ы, көслөнән туҡмалған көсөктәй, үҙ яра ын, шым ғына сыйнап, үҙ оя ында илай. Ә ырыуҙар ара ына таяҡ тығып, халыҡты ҡорт күселәй ҡужғытырға, илгә хужа булып алырға ым ыныусылар ис тә кәмемәй. уңғы йылдарҙа ғына башҡорт биләмәләренә урыҫ кенәзлектәренән барымтаға килеүселәр йышайҙы. Мал-тыуарҙы ғына түгел, ир-атты ҡырып алып, ҡатын-ҡыҙҙы ҡыуып алып китәләр. Улары, ярай, ят ҡәбилә.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 48



Ә бына ҡан ҡәрҙәш уғыҙҙарҙың оло яу менән килеп, бар мөлкәтте утҡа тотоп, ҡатын-ҡыҙҙы көсләп, яуыз дошмандарса ил талауҙарын нисек аңлатырға?! Ә башҡорт ырыуҙарының үҙҙәренең, юҡ ҡына сәбәп табып, үҙ-ара ыҙғышыуҙары, ҡоралға тотонорға тороуҙары?!

Әлбиттә, хәҙер килеп, сапҡын килтергән ғәрәп афәте ҡайҙан килеп сыҡты, тип белмәмешкә лә алыша алмай Башҡорт хан. Ғәрәптәр йөҙөндә донъяла быға са күрелмәгән дини көс барлыҡҡа килеүен, Төрки Ҡағанатының көнбайыш ҡанатындағы башҡорттар ҙа башта уҡ күреп-белеп торҙо. Башта улар Саманый Иранын буй ондорҙы. Унан өжүмдәре Урта Азия төркиҙәренә йышайҙы. Тик ғәрәптәр төркиҙәр тарафына ҡуҙғалыуы булды, башҡорт ырыуҙары ла, бигерәк тә бөрйәндәр, Хәрәзм ғәскәрҙәре менән бергә, уларға ҡаршы сыҡты. Ләкин ғәрәптәр ҙә тынысланманы. Миләди 673 – 675 йылдарҙа ғәрәптәрҙең Хөрәсәндәге хакимы Зияда улы Ғөбәйҙулла ҙур ғына ғәскәр менән Джейхунды кисеп сыға ла, болоттай ябырылып, көтөлмәгәндә Пайкент әм Бохара тарафтарын баҫып та ала. Ундағы халыҡты аяу ыҙ талай. Бохараны яҡлап барса төркиҙәр күтәрелә...

Шулай ҙа ғәрәптәр, көстәренең самалы икәнен күреп, ул саҡта Бохаранан ары китергә баҙнат итмәй. Тик бер йылдан уң ғына Осман улы Сәйет етәкселегендәге ғәрәп ғәскәрҙәре Сәмәрҡәндкә килеп сыға. Әммә фарсы телле Согдиана әм тирә-яҡ төрки ҡәүемдәренең, шул иҫәптән бөрйәндәрҙең дә, ҡаты ҡаршылығына осрай. Тик миләди 713 йылда ғына ғәрәп сардары Кутейба Сәмәрҡәндте аяу ыҙ ҡыйрата, талай. Аҙағыраҡ ҡытайҙарҙыҡы аналған Ташкент ҡәлғә е лә ғәрәптәргә баш ала. Унан... Хазар диңгеҙе тирә ендә лә ҡаты уғыштар башланып китә...

Төркиҙәр ғәрәп тоҙағына ана шулай килеп эләгә. Миләди игеҙенсе йөҙйыллыҡ ахырында ҡарлуҡ ханы исламды ҡабул итә. Ошонан уң төркиҙәр ара ында ла ислам бик йә әт тарала башлай, хәҙер ғәрәптәр дала төркиҙәренә ҡаршы уғыштарында нәҡ ошо ислам диненә ауҙарылған ҡарлуҡ кеүек төркиҙәрҙе файҙалана... Ғәрәптәрҙең бәшнәк, башҡорт тарафтарына үрмәләгән әлеге ғәскәри төркөмдәрендә лә етерлек улар, мәүлә* ҡәүем вәкилдәре, хатта, әйтеүҙәренсә, мосолман башҡорттар ҙа бар. Шулай булыр ҙа, Көнбайыш Төрки Ҡағанатын ҡыйратыуҙа ла ғәрәптәр заманында шул уҡ төркиҙәрҙең үҙҙәрен, хазарҙарҙы, файҙаланғандар бит. Был юлы, күрә ең, ниәттәре тағы ла ҙурыраҡ: Урта Азия төркиҙәрен файҙаланып, тағы ла алыҫҡараҡ, төньяҡ-көнсығыш илдәренә үтеп инеү... Ундай ниәттәрендә ғәрәптәр тәүгеләрҙән түгел, юҡҡа ғына Башҡорт хан үҙ зыялыларына Аҡташ ханға яу менән килгән Искәндәр сардарҙы иҫкә алманы бит...

Үҙ бейҙәренә лә бары ын әйтеп бөтөрмәне әле Башҡорт хан. Төрки дала ы аша ғәрәптәр Болғарға үтмәксе, тип еткергәйнеләр уға. Тик Болғар ҙа ер сиге түгел, унда ла байтаҡ башҡорт ырыуҙары йәшәй. Нимә көтә уларҙы?

Йыйындағыларҙың ораuҙары Башҡорт ханда ошондай хәтирәләр уятты. Был ваҡиғаларҙа ниндәйҙер уртаҡлыҡтарҙы тойоп ултыр а ла, башҡорт бейҙәренә бер ни өйләп торманы. Ваҡыты ла, шарты ла, урыны ла был түгел...

***

Далаға сығыу менән тирә-яҡ хозурлығына ғәрәп илселәренең иҫтәре китте. Ик еҙ-сик еҙ офоҡтарға барып тоташҡан иркенлектәр. Ҡарлы-буранлы көндәр артта ҡалды. Инде мөхәррәм айы башланырға тора. Иртәләрен, тындарҙы иркенәйтеп, ерҙән быу күтәрелә, йәш үлән баш төртә, сағыу ҡояш нурҙарында ысыҡ бөртөктәре бихисап ынйы булып емелдәй, донъяға яҙғы сафлыҡ бөркөлә.

Илселек сәркәтибе ибн Фаҙландан әҙ генә арттараҡ барған Артыр бей ҙә тәрән уйҙарға талған. Ошо тыуған яҡтарынан айырылғандан уң ҡайҙарҙа ғына булманы

**Ғәрәп булмаған мосолман.*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 49



ул! Ҡом бурандары уйнап торған сүллектәрҙә лә, ташлы Алтай, Тибет тарафтарында ла, Мысыр яҡтарында ла...

Тик быңдай ҙа иркен хәтфә яландарҙы, саф ыулы, балыҡтары уйнап торған көмөштәй йылға, күлдәрҙе, дауаға тиң шифалы ауаны ул башҡа бер генә ерҙә лә осратманы. Ваҡыт-ваҡыт Артыр бей Фаҙлан улы Әхмәткә лә ынамаҡ ҡарап ала, унын йөҙө лә етдиләнеп, тәьҫирләнеп китеүен күрә. Нимә уйлай икән ул? Бик юғары фекерҙә түгел инде Әхмәт хәҙрәттәре был яҡ халыҡтары хаҡында, уларға мосолман күҙлегенән мәҙәниәттәре түбән, бысраҡ мәжүсиҙәр итеп, тәкәббер ҡарай. Ләкин Артыр бей иҙенә: унда ла ниндәйҙер үҙгәрештәр тойола, уйсанлана бара. Шулай булмай, далаларҙа бит мәңгелек а әң иҙелә, быуаттар тауышы ишетелә, йәшәү сығанағы, донъя тотҡа ы иллек, тынıслыҡ та ята был киңлектәрҙә. Тәьҫир итмәй ти еңме ни ҡала баҡсаларынан башҡа йәшеллек күрмәгән, тын ҡыуырыр ыу ыҙ сүллектәрҙә сарсап үҫкән Әхмәт Фаҙлан улына?

...Ләкин Фаҙлан улын был гүзәллектәр әллә ни шатландырмай ҙа, шикелле, бөтөнләй башҡа кисерештәр биләп алған әле уны.

...Далаға сыҡҡас, урындағы төркиҙәр менән бер ике-өс мәртәбә осрашып, әңгәмәләшкәйнеләр инде улар. Сусан Әр-Расси, етәксе булараҡ, күп меңлек каруан яҙмышы өсөн яуап бирә. Шуға дин хаҡындағы был өйләшеүҙәрҙә йыш ҡына ҡатнаша алмай, хужалыҡ йә башҡа мәшәкәттәр артынан йөрөп ҡала. Был бурыс тулы ынса Фаҙлан улы Әхмәткә йөкмәтелгән. Унын эргә ендә әр саҡ тиерлек Төрк Тәкин, Болғарҙан хәлифәткә хат килтергән хазар Башту улы Абдаллах, болғар Барыҫ, башҡорт Артыр бей була. Был әңгәмәләрҙә, исламды ҡабул итеү мәсьәлә ендә бер ниндәй өҙөмтә булма а ла, урындағылар сәпсеп ҡаршы ла сыҡмайҙар, шым ғына тыңлайҙар, килешкәндәй, хатта баш ҡағып ултыралар. Был Әхмәт хәҙрәттәренә урындағы халыҡ менән уртаҡ тел табырына, ислам орлоҡтарын ҡалдырып китеренә өмөт тә уята ине әле.

Тик уғыҙ биләмәләрендәге бер осрашыу илселек сәркәтибенең был хыялдарын да юҡҡа сығара ҡуйҙы.

...Ғәрәптәр туҡтаған ерҙе урындағылар тиҙ шәйләне. Үҙҙәренекенә оҡшамаған ниндәйҙер сыбар кейемле, баштарына сәллә ураған, ат, дөйәләргә атланған ят кешеләр килеүен ишетеп, яҡын-тирәләге халыҡ тиҙ йыйылды. Әхмәт ибн Фаҙлан, унын тоғро юлдаштары ҡәҙимгәсә ислам, Мөхәммәт пәйғәмбәр, Алла ы ҡөҙрәте хаҡында үҙ башланы. Халыҡ бында ла тыныс ҡабул итә уларҙы, ара-тирә хатта о-рау ҙа бирә. Шулай әүетемсә генә өйләшеп ултырғанда араларынан берәү е тылмас аша:

— Әфәндегеҙ үҙе маҡтаған әлеге дин, пәйғәмбәр, Раббы хаҡында, — тине,— берәй нәмә йырлап күр әт ен әле!

" өйлә ен", "уҡы ын" түгел, ә "йырла ын" тине. Далала аралар алыҫ бул а ла, хәбәрҙәр тиҙ йөрөй, күрә ең, унын ҡөрьәнде көйләп уҡыуын "йырлау" тип килтереп еткергәндәр. Ләкин Фаҙлан улы быға иғтибар итеп торманы, унын өсөн изге ҡөрьәнде тыңларға теләүҙәре ҡиммәт, булдыра алғанса моңло итеп ул Әл Ихлас (Ихласлыҡ) сүрә ен көйләп ебәрҙе.

Бисмил-лә и-Ррәхмәни-ррәхим!

Әйт: "Ул — Алла — бер,

Алла мәңге,

Ул тыуҙырманы әм тыуҙырылманы, әм бер кем дә уға тиңдәш булманы!"

Тыңлайҙар бит ысынлап та, ихлас тыңлайҙар, йөҙҙәре уйсанланып, ҡараштары асылып киткән...

"Алланың ярҙамы әм еңеү килгәс, әм ин кешеләрҙең Алла диненә төркөмләп инеүҙәрен күргәс, шул саҡта Раббыңды данлап тәсбих әйт әм Унан ярлыҡау ора.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 50



Ул, ысынлап та, тәүбәләрҙе ҡабул итеүсе!"*

Уйланып тороп Фаҙлан улы уҡыуын әкренәйттеме, йыйылыусылар ара ынан тағы бере е, ҡәнәғәт еҙлеген белдереп:

– Әйтегеҙ уға, туҡтама ын, – тине, – дауам ит ен... Тағы... Көйләй бир ен...

Фаҙлан улының ошонан уң кәйефе тағы ла күтәрелеп китте: тимәк, оҡшай уларға ҡөрьән, ана бит, уның артынан күбе е "Алла ы әкбәр!", "Алла ы әкбәр!" тип ҡабатлап ултыралар, уҡыу көйөнә тура килтереп ниндәйҙер башҡа хәрәкәттәр ҙә я айҙар...

"...Арабыҙҙа Аллаға бирелгәндәр ҙә, юлдан яҙғандар ҙа бар, ә кем бирелгән – ул тура юлдан бара. Ә юлдан яҙғандар – улар тамуҡ киҫәүе*".

Шулай күпмелер үтте. Фаҙлан улы сүрәне уҡып бөттө лә, тейешле йола ын үтәгәс, тыңлаусыларының ни әйтерен көттө. Ана, ысынлап та, бая уҡыуҙан туҡтамаҫҡа ҡушҡан әҙәм, тылмасҡа табан үрелеп, тағы ниҙер әйтте. Ә быны ы, уның үҙҙәрен Әхмәт хәҙрәттәренә тәржемә итә е урында, ҡапыл ҡаушап, ҡыҙарып китте.

– Нимә ти ул? – Сәйед Әхмәт хәүефләнә ҡуйҙы. Тылмас ыҡ-мыҡ итте, тағы ла нығыраҡ ҡыҙарынды, нимә әйтергә белмәй аҙап торҙо.

– Тура ын әйт! – тине быны күргән Фаҙлан улы, ҡәтғи итеп. – Вазифаңды оноттоңмо ни?

Быны ы ирек еҙҙән асылырға мәжбүр булды:

– ора әле үҙеңдең әфәндеңдән, – ти, – әле ул өйләгән ҡөҙрәтле, тиңдәше булмаған Алла ының бисә е бармы икән?

Быны ишетеп, Фаҙлан улы үҙе лә ҡаушаны, ни әйтергә белмәне, үҙенең алданыуынан ныҡ ғәрләнде: бына нимә уйлап ултыралар икән был вәхшиҙәр изге ҡөрьән уҡығанда! Ә ул, бер ҡатлы әҙәм, ҡөрьән шулай тәьҫир итә, тип уйлай. Хәйер, ғәрәпсә белмәгәс, ҡөрьән үҙҙәрен нисек аңла ындар, ти, улар? Тимәк, изге үҙҙәрҙән бигерәк, кәмит ҡороп, ғәрәп суфыйҙары ымаҡ, былар Фаҙлан улы Әхмәттең моңло тауышына бәүелеп- елкенеп ултырғандар...

Ошонан уң Фаҙлан улында был томана мәжүсиҙәрҙе ислам тәғлимәтенә өйрәтеү теләге бермә-бер үрелә төштө.

Шулай ҙа илселек етәкселәренең уғыҙ атамалы был ҡәүемдәргә ышаныстары юғалмағайны әле. Бағдадта саҡта уҡ Нәзир Әл Хәрәми үҙенең ышаныслы ы, илселек башлығы Сусан Әр-Рассиға хат тоттороп, уны ошо уғыҙҙарҙың ғәскәр башлығы Әтрәк Ҡатаған улына тапшырырға ҡушҡайны. Күрә ең, үҙ-ара электән бәйләнештәре булған. Хаттың йөкмәтке е лә сер түгел: хәлифәт хакимдарының бере е Ҡатаған улы Әтрәкте әм уның ҡул аҫтындағы ҡәүемдәрҙе исламды ҡабул итергә өндәй. "Нәзир Әл Хәрәми, кәм енеп, юҡ-бар шәхескә хат яҙып тормаҫ, нигеҙе барҙыр,"– тип уйланылар илселек етәкселәре. Шуға ла уғыҙҙар сардары менән осрашыуға ҙур ышаныс әм өмөт бағлап барҙылар.

Башта осрашыу, ысынлап та, көткәндән дә әйбәтерәк барҙы. Ҡатаған улы Әтрәк ғәрәп илселәре өсөн бик күп тирмәләр ҡорҙорҙо, ый өсөн бихисап ҡуй ҡыуып килтертте. унарға ла алып сыҡты, сабып барған ат өҫтөнән уҡ менән атып, бейектә осҡан ҡыр ҡаҙын атып төшөрөп, үҙенең мәргәнлеген дә күр әтте. Унан Әтрәк сардарға хәлифәт бүләктәрен тапшырыу тантана ы булды. Ә бүләктәр затлы ине бит: бер мыҫҡал мускус, илле динар аҡса, ҡыҙыл күн, аяҡ әм өҫ кейемдәре, Әтрәк ҡатынына ҡимммәтле биҙәнеү әйберҙәре...

Ләкин аңлашыу тантана ы шуның менән тамамланып та ҡуйҙы. Нәзир Әл Хәрәми ебәргән хәлифәт хаты менән танышып сыҡҡас, Ҡатаған улы Әтрәк башта

*Әл-Наср (ярҙам сүрә е).
*Әл-Джинн (Ендәр) сүрә е.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 51



төҫө боҙолоп, байтаҡ ҡына өндәшмәй торҙо.

— Ҡапыл ғына еҙгә бер ни әйтә алмайым, — тине бер аҙҙан, ниңәлер ҡараштарын йәшереп.— Үҙемдең ҡарарымды еҙгә илселек Болғарҙан кире ҡайтҡанда белдерермен, хәлифәт өсөн яҙма рәүештә еткерермен...

Былары аҡ ҡына хәлифәт мәнфәғәте, исламды ҡабул иткән ҡәүемдәргә уның йомарт ярҙамы, бөйөк вәзир Назир Әл Хәрәми ышанысы хаҡында үҙ башлағайны, Ҡатаған улы Әтрәк ҡапыл ғына ҡуҙғыны ла китте:

— еҙ был эште аҫтындағы атынды алыштырыу ымаҡ та күрмәй егеҙ, шикелле, — тине ул ҡырыҫ ҡына.— Ана, беҙҙә Йынал тигән бер башлыҡ ислам ҡабул итергә йыйынғайны, халҡы уға: "Ят дин ҡабул ит әң, беҙгә башлыҡ була алмай ың", — тигәс, тиҙ ыуынды. Миңә лә шул яҙмышты теләй егеҙме? Әллә ҡайҙағы хәлифәттән кәңәш биреп ятыуы еңел ул...

Шунан тағы ла ҡырыҫыраҡ өҫтәп ҡуйҙы:

— Әйттем бит, аҙаҡҡы үҙемде еҙ әйләнеп ҡайтҡанда әйтермен, тип.

Нишләйең, юҡҡа хөкөм дә юҡ. Ләкин эш бының менән генә тамамланманы. Күңелдәре бөтөнләй өрөмләнгән илселәр сардар Әтрәктән юлдарын дауам итеүгә рөхсәт орағас, быны ы көтмәгәндә тағы киреләнде.

— Юҡ, мин еҙҙе, беҙҙекеләр менән кәңәшләшмәй тороп, ары үткәреп ебәрә алмайым, — тип ҡырт киҫте, үҙмә- үҙ тиерлек теге саҡта хәрәзмша әйткәндәрҙе ҡабатланы. — Уға беҙҙең зыялыларҙың рөхсәте кәрәк...

Уларҙы шунда уҡ каруандағы башҡаларҙан айырып, әлеге зыялылары янына алып киттеләр. Унда тиҫтә сама ы кеше, — күрәең, ырыу башлыҡтары, ғәскәриҙәр, затлы аҡ аҡалдар йыйылған. Араларында берәү е, олораҡ йәштәге е, донъя күргән, яуҙар кисергән кешегә оҡшаған: тома уҡыр, етмә ә бер аяғы зәғиф, сатанлап йөрөй, бер ҡулы ла хәрәкәт еҙ аҫылынған. "Тархан" тиҙәр уға, дәрәжә еме, исемеме шулай. Бары ы ла уға иғтибарлы, моғайын, затлы тоҡомдандыр. Илселек етәкселәрен уларҙан әҙ генә ситкәрәк баҫтырып ҡуйҙылар. Тылмасты ла саҡырғандар, күрә ең, ғәрәптәр бары ын күреп, ишетеп тор он тигәндәрҙер.

Бары ы йыйылып бөткәс, Ҡатаған улы Әтрәк сардар үҙ башланы:

— Бына былар, Ғәрәп батша ы илселәре, Болғарға минең кейәү менән Алмышҡа китеп баралар, — тине Әтрәк сардар. — юлдарын дауам итергә рөхсәт орайҙар. Ләкин мин, еҙҙең менән кәңәшләшмәй тороп, уларҙы ебәрмәнем. еҙ нисек уйлай ығыҙ?

Тынлыҡ оҙаҡҡа барманы, уҡыр күпте күрә, сатан күп йүгерә, тигәндәй, үҙҙе әлеге Тархан эләктерҙе:

— Беҙ былдай хәлде, илебеҙ аша ниндәйҙер дәүләттең илселәре үтеү кеүек күренеште, ғүмерҙә күргәнебеҙ юҡ, — тине ул, тик торғандан ҡыҙа башлап. — Атабабаларыбыҙ ҙа күрмәгән. Мин уларға ышанмайым, ғәрәптәрҙең берәй яман этлеге булмағайы. Хазарҙарға барып, уларҙы беҙгә ҡаршы уғышҡа күтәрергә уйламайҙармы икән?

Бары ы ла тынып ҡалды. Тик әңгәмәне алып барған Әтрәк кенә ҡабатлап ораны:

— Былар менән нишләйбеҙ уң? Үткәреп ебәрәйекме?

— Нишләтәбеҙме? — тине быны ы тыныс ҡына. — Бары ын ҡылыс менән сапҡылап турайбыҙ ҙа мөлкәттәрен үҙебеҙгә алабыҙ.

— Юҡ, юҡ, ниңә уларҙы үлтереп ҡул бысратырға? — тине шунда уҡ аранан тағы берәү. — Мөлкәттәрен тартып алабыҙ ҙа үҙҙәрен ҡайҙан килгәндәр, әсәнән тыума ҡалдырып, шунда ҡыуабыҙ... Шәрә көйө, аҙыҡ ыҙ сик еҙ далала үҙҙәре лә оҙаҡ бара алмаҫ.

— Ниңә тоҙаҡҡа үҙе килеп кергән бәхет ҡошон кире ебәрергә, ти? — Урталараҡ

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 52



ултырған ғәскәриҙең тауышы ярай ы уҡ эшлекле яңғыраны. — Беҙҙең батыр егеттәребеҙҙең хазарҙарҙа әсирлектә яфаланып ятыуҙарын оноттоғоҙмо әллә? Быларҙы үлтермәйек тә, ҡыумайыҡ та, ә шул әсир егеттәребеҙгә алыштырайыҡ!

Ләкин былар бер-бере ен тыңлауҙан уҙғайны, шикелле, — шау-шыу китте. Тәҡдимдәр күп әм төрлө ине. Тик күбе е "шикле кешеләр", "тере ҡал алар, әллә ниндәй этлектәр эшләрҙәр" тип илселәргә үлем талап итте.

Ошондай бәхәс-тартыш ете көн буйы дауам итте. Ете көн буйы илселек етәкселәре ни үле, ни тере хәлдә, ҡоттары осоп, ҡалтыранып, үҙҙәренең яҙмышы нисек булырын көттө...

Тик үҙҙәренең тотҡонлоҡта ятыуҙарының етенсе көнөндә генә ҡай ы ынындыр башына быларға бүләк биреп ҡарау уйы килде. Шунда уҡ Сусан Әр-Расси сардар Әтрәккә кеше ебәрҙе: бындағы хөрмәтле ил ағаларын бүләкләргә теләүҙәрен белдерҙе...

Бына шулай, уйламаған ҙур ғына сығымдар, аҙыҡ-түлек, затлы кейем- алым иҫәбенә саҡ ҡотолоп ҡалды улар кеше үлтереү бер ни тормаған аяу ыҙ, ярым ҡырағай ошо дала юлбаҫар-башкиҫәрҙәренән.

Аҡыл менән аңларлыҡ түгел был халыҡтарҙы. Әле лә, ана, "бүләктәр"ҙе ҡулға төшөрөүҙәре булды, бары ын бер юлы ел алдымы ни: аттарына икерешеп менеп алдылар ҙа, ғәрәптәрҙе бөтөнләй оноҡтандай, уларҙы яҙмыш ҡосағына ҡалдырып, ҡайҙалыр сабып сығып та киттеләр.

— Бына кемдәр менән эш итергә тура килә беҙгә, — тип әсе зарлана ҡуйҙы Сусан Әр-Рассиға Әхмәт Фаҙлан улы. — Беҙ уларға иман нуры килтерәбеҙ тип тырышабыҙ. Ә улар? Темеҫкенеп, шул бүләктәрҙе алыу өсөн генә беҙҙе аҙна буйы ут эсендә тоттолар...

Илселек сәркәтибенең асыуы ныҡ ҡабарғайны, шикелле, оҙаҡ тыныслана алманы. "Ғәскәр башлығы, сардар, имеш,— тип мыҫҡылланы ул йәнә Ҡатаған улы Әтрәкте. — Ә үҙенең күн кейеме аҫтындағы күлдәге теткеләнеп, йыртылып бөткән...”

Уларҙан йыраҡ түгел атын атлатып барған Артыр бей был үҙҙәргә аҫтыртын ғына йылмайып ҡуйҙы. Бая әсирлектән ҡотолмаҡ булып, бүләктәр алғас, Әтрәк сардар, шунда уҡ эске күлдәген алыштырмаҡ булып, хәрби кейемен алғайны, унын үҙенеке йыртыҡ булып сыҡты. Көнөнә нисәмә йыуынып- ыланып, нәзәкәтле арай мәжлестәренә йөрөп өйрәнгән аҡ өйәк Әхмәт сәйедкә төркиҙәр сардарының был ҡиәфәте, әлбиттә,— башҡа ыймаҫ шаҡшылыҡ. Аҙналар, хатта айҙар буйы ат өҫтөндә йөрөп, ҡайҙа тура килә шунда ятып йоҡлап йөрөгән кеше тормошон аңлаймы ни ул? Тир тоҙона кейем тиҙ теткеләнә, уны көн дә йыуып, алыштырып тороуҙы дала шарттарында ҡайҙан таба ың?

Фаҙлан улы Әхмәт йәнә шуны аңлай алмай: наҙанлыҡта, томаналыҡта, айҙар буйы кейем алыштырмай бысраҡ тормошта көн иткән ошо кешеләр ни өсөн тәртип, сафлыҡ, әҙәп талап иткән әҙәмсә тәғлимәтте үҙ енмәй маташа? Ҡараңғылыҡтан яҡтыға атлай ылары килмәйме? Быны аңлай алмай әле ул, аңла а, бәлки, еңелерәк тә булыр ине...

***

...Тигеҙ дала буйлап кил әләр ҙә, ыбайлылар был юлы ашыҡмай ғына, тирә-яҡ гүзәллеген туйғансы күреп ҡалырға теләгәндәй, аттарҙы үҙ яйына ҡуйып, теҙгенде ул ҡулға услап, атлатып ҡына килә. Артыр бей белә: ыртында ултырған кешене ат тойоп торорға тейеш. Шуға ла, үҙ иркенә ҡуй а ла, Артыр бей, өйрәнелгәнсә, сираҡтарын ваҡыт-ваҡыт еңелсә генә ат ҡабырға ына терәп ала, үҙенең барлығын, иҙгер икәнен иҙҙерә тора. Өҙәнгегә кейҙерелгән аяҡ остары бер аҙ күтәрелеп тор а ла, унын урынына үксәләре ҡабырға тирә ендә генә. Кәрәк саҡта балтырҙар

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 53



үҙҙәренән-үҙҙәре ҡыҫылып, үксәне йә әт кенә эшкә егергә әҙер. Шуға ла ыртында ултырған ыбайлыны тойоп килгән ат артыҡ иркенләй алмай, йәйәүлене еткермәҫ әлмәк аҙымдар менән тигеҙ генә, ырамлы атлай бирә...

Илселек етәкселәре Сусан Әр-Расси, Фаҙлан улы Әхмәт дөйәләрҙә бара. Унда урын ат ыртына ҡарағанда иркенерәк тә, уңайлыраҡ та: үркәстәр ара ына йомшаҡ япмалар түшәлгән, сәйәхәт өсөн сатырға оҡшаш махсус ҡоролма ҡоролған. Уның эсендә ятып, йоҡом орап барырға ла мөмкин. Унда теҙгенде ҡулдан ысҡындырмау тура ында ла уйлана ы түгел, дөйәләрҙе йөрөтөр махсус хеҙмәтселәр бар. Артыр бей ҡараштарын уларҙан алып, үҙе менән ҡатар ыбай килгән Төрк Тәкин, Фалис задегә ҡарап ала. Улары оҫта, ғүмерҙәре ат өҫтөндә үткән. Эйәрҙә йөрөп өйрәнгән тәжрибәле ыбайлы ат өҫтөндә үҙ тирмә ендәге кеүек иркен ултыра, ял итә-итә бара. Сөнки уға шулай кәрәк, эйәр уға — тыуған йорт, сәғәттәр генә түгел, көндәр, аҙналар, айҙар, йылдар — барса ғүмере эйәр өҫтөндә үтә. Шунда йәшәй, шунда ашай, серем итеп тә ала. Башҡаса ултыра алмаҫлыҡ итеп бәреп төшөрмә әләр, күсмә тормош менән йәшәгән дала кеше е эйәрҙән ирәк ҡубарыла. Барған саҡта йоҡо баҫа башлай икән, борсолма, көнө буйы ат өҫтөндә еңкелдәп талсыҡҡан ағзаларынды ял иттер; ҡурҡма, йығылмаҫ ың, күнеккән тән үҙенекен эшләр; атың көтмәгәндә аҙымдарын шәбәйт ә, юрта башла а йә абынып кит ә лә, ҡоламаҫ ың, уянып өлгөрөр өң...

Йоҡоң килмәй икән, бүкәндәй ҡатып тик ултырма, тирә-яҡты күҙәт, башҡаса форсат әллә була, әллә юҡ. Уйлан, башҡаларҙан фә ем ал, әлегә донъяң улай уҡ теүәл түгел дә ба а, хәл итә е нәмәләрең бихисап...

...Башҡалар ат өҫтөндә ярым йоҡом орап барған бер мәлдә, Артыр бей аман да уяу, дала тәьҫирендә тыуған уйҙарына сумып килә. Ысынлап та, кемдәрҙе генә күрмәгән был ерҙәр! Яңы эра баштарында юғары мәҙәниәтле сарматтар көн иткән. Уларҙы ундар ҡыҫырыҡлаған. Ат өҫтөндәге халыҡ йылдам, әле көнбайышҡа ынтылған, унан кире көнсығышҡа йә башҡа тарафтарға... Тулҡынтулҡын булып тоташ халыҡтар, ыбайлы төркөмдәр туҡтау ыҙ йөрөп ятҡан, ик - еҙ-сик еҙ дала, ҡырмаҫҡа оя ылай, мыжғып торған. Ул да булмай, ундарҙың вариҫтары — төркиҙәр күтәрелгән. Алтай, Ҡытай тарафтары, Бөйөк дала, Урта әм Үҙәк Азия, Көнсығыш Айропа...

Тик нисек кенә көсәйеп китмә ендәр, ниндәй генә ик еҙ-сик еҙ биләмәләрҙә хакимлыҡ ҡылма ындар, аҙаҡ килеп, империяларҙың бары ы ла пыран-заран килгән, ҡыйратылған. Күрә ең, әр халыҡ үҙ тамырҙарына тоғро булып, үҙенсә йәшәргә тырыша. Иртәме, уңмы халыҡтар быгауҙарын өҙөп, барыбер үҙ асылдарына ҡайта, башҡалар эсендә йотолоп ҡалма а әгәр. Ҡан йөрөтә кеше әм ҡәүемдәрҙе, тамыр көсө йәшәтә. Ата-баба рухына тоғро ҡәүемдәр генә көслө әм бәхетле. Ҡан әм йән билдәләй кеше асылын. Был хаҡта Артыр бей иранлыларҙың исламғаса булған маздасылыҡ тәғлимәте яҙылған изге Апастак китабын уҡып та бер мәл хайран ҡалғайны. Ундағы тәү кеше Йима үҙенең Раббы ынан: "Яуыз Ахримандың* кешеләргә килтергән иң ҙур зыян-ҡаза ы нимәнән ғибәрәт?" — тип орағас, быны ы: "Ахриман кешеләрҙең бар байлығын тартып алыр, ғаилә ен, яҡындарын үлтереп бөтөр. Ләкин ул быны кешеләргә килтергән зыянының ҙуры тип анамай, — тигән. — Ә бына Ахриман кешенең йәнен урлап алып кит ә йә уны үҙенә буй ондор а, яуызлыҡ тантана ының сиге булмай, быны ул үҙенең иң ҙур еңеүе анай ".

Ҡалай дөрөҫ әйткән иранлыларҙың Аҡыл әм Ғәҙеллек раббы ы. Сөнки кешене, ҡәүемдәрҙе ила и бар иткән шул "йән" түгелме ни? Йән генә мәңгелек, рух ҡына йәшәтә кешеләрҙе, илдәрҙе. Әҙәм бала ының, барса халыҡтың үҙҙәренә генә хас

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 54



йәндәрен урлайҙар йә рухтарын икенсегә боҙалар икән, тимәк, шуның менән уларҙы юкҡа сығарырға, нәҫел тамырҙарын, ата-бабаларын онотторорға, үҙенең кемлеген белмәгән мәхлүк я арға тырышалар. Борон-борондан килгән был мәкер, шуның нигеҙендә халыҡтарҙы бер-бере енә ҡаршы ҡуйып, уғыштырып, бөйөк империялар ҡорғандар.

Юнандар батша ы Искәндәр-Зөлҡәрнәйен – Александр Македонский ярты донъяны ҡорал менән аяу ыҙ яулап алып, бер милләтле дәүләт төҙөргә ынтылмаймы ни? Йәки бына ҡәрҙәш халыҡтарҙы – иранлыларҙы ғына ал. Юнандар менән бер үк ваҡытта тиерлек уларҙың Кир Икенсе тигән хакимы Азияның барса илдәрен эсенә алған бер генә асыллы ик еҙ-сик еҙ бөйөк дәүләт төҙөмәк була. Бактрияны, Лидияны яулай, Вавиланды теҙ сүктерә. Унан саҡ ҡәбиләләрен, Мысырҙы... Урта Азия халыҡтарын ҡан эсендә йөҙҙөрә...

Тик үҙҙәрен Раббыға тиңләр быndaй хакимдар ҙа мандымай, халыҡтар өсөн ҡорған тоҙаҡҡа, улар өсөн ҡаҙылған баҙға үҙҙәре лә барып эләгә. Кир Икенсенең бөйөк империя төҙөү хыялын Урта Азия, дала халыҡтары: скифтар, массагеттар, төркиҙәрҙең боронғо ата-бабалары боҙа. Еңелеү белмәҫ Кирҙың тәкәбберлеге лә сәбәп булғандар, бәлки. Сөнки ул скифтарҙың башында торған батшабикә Тамаристы, бисә кеше тип ҡарап, еңел еңеүгә иҫәп тота. Ләкин Тамарис ҡурҡып, юғалып ҡалмай, аҡыл менән эш итә, баҫҡынсылар ғәскәренең Араҡс йылға ын кисеүен ҡаршылыҡ ыҙ, тыныс ҡына күҙәтеп тора. Йылғаның был яғындағы үҙ ереңде аҡлап уғышыу яугирҙарга көс, рух бирер, тип уйлай.

Ләкин Кир үҙе лә яуҙарҙа сыныҡҡан, хәйләкәр сардар була. Скифтар иленә бүҫеп инеп китә лә, бер аҙ барғас, шикләнгәндәй, туҡтап ҡала. Ә иртәгә ен йә өт кенә сигенергә ҡуша. Ә ҡунып киткән урында, ашығыслыҡтан, йәнә е, онотҡан булып, бик күп шарап әм зиннәтле аҙыҡ-түлек ҡалдыра.

Батшабикә Тамарисҡа дошман ғәскәрҙәренең ҡапыл ҡасып китеүе хаҡындағы хәбәр килгәс, башта ул аптырай, унан ғәскәренең өстән бер өлөшөн үҙ улы етәкселегендә фарсыларҙы эҙәрлекләргә ебәрә. Сардар булараҡ, батшабикәнең оло хата ы була был. Яуҙарҙа бик үк ҡатнашмаған йәп-йәш егет, Тамаристың улы, Кир хәйлә енә алдана. Дошманды эҙәрлекләй е урында, үҙен еңеүсе анап, Кир ҡалдырған ниғмәт иҫәбенә оло байрам ҡора, башын юғалта. Хәйләкәр Кир төндә кире әйләнеп килә лә башта Тамаристың улын, унан иҫереп йоҡлап ятҡан барса ғәскәрҙе уйып сыға...

Шулай ҙа әҙәм күтәрә алмаҫлыҡ аянысла ҡайғынан бөгөлөп төшмәй Тамарис, мәкергә мәкер менән яуап бирмәк була. Тау ара ындағы тар ғына тарлауыҡҡа боҫҡон ҡуя ла ғәскәре менән үҙе, Кир ҡеүәтенән ҡото осҡандай, йән-фарман ҡаса башлай. Кир шунда үҙе лә Тамарис ҡорған ҡапҡанға эләгә: уны эҙәрләп, тауҙар ара ындағы тар тарлауыҡҡа сабып килеп инә. Шуны ғына көткән скифтар тарлауыҡты ике яҡлап бикләп ҡуялар ҙа, ҡуҙғалыр әмәле лә ҡалмаған фарсы ғәскәренә өҫтән уҡ ямғыры яуҙырып, таштар бәреп, ҡаяларҙы ишеп төшөрөп, маҡтансыҡ Кир Икенсенең ике йөҙ мең ғәскәрен түшәп алалар. Берәү ҙә ҡотола алмай, хатта ҡайтып фарсыларға ошо ҡот осҡос хәл тура ында хәбәр еткереүсе лә ҡалмай. Батшабикәгә Кирҙың кәүҙә енән ҡырҡып алынған башын килтерәләр. Ә быны ы, сәстәренән тотоп, уҫал Кирҙың башын кеше ҡаны тулы ҙур ҡуржыҡҡа батыра ла былай ти: "Әйҙә, кинән, тере саҡта әр саҡ ҡанға сарсап йөрөнөң, туйманың, хәҙер эс бүккәнсе эс әҙәм ҡанын..."

Әлбиттә, Кир Икенсенән айырмалы, Александр Македонский – Искәндәрҙең

---

**Яуызлыҡ раббы ы.*

яҙмышы аяулыраҡ булған, үҙ үлеме менән үлгән. Тик, күрә ең, ул да ғүмеренең аҙағында донъялағы барса байлыҡҡа, барса халыҡтарға хужа булырға, уларҙан бер үк ҡамырҙы әүәләп ҡурсаҡ я арға тырышыуҙың файҙа ыҙ икәнен тәрән аңлаған. Шуға ла тәхеткә, байлыҡҡа ынтылыусыларға абаҡ итеп, вариҫтарына шулай тип әйтеп ҡалдырған: "Мин үлгәс, – тигән, – ике буш усымды табуттан тышҡа сығарып ҡуйығыҙ. Халыҡтар күр ен: бар донъяны яулап, алтын, көмөш тауҙарына эйә бул ам да, әхирәткә, бына, буш ҡулдарым менән китеп барам". Бөйөк сардар ғына түгел, аҡыл эйә е лә булғандыр инде Искәндәр – Александр...

Тик тарих, күрә ең, күптәрҙе бер нәмәгә лә өйрәтмәй. Ғәрәп хәлифәте лә бөгөн әлеге Кир Икенсе менән Александр батша эҙенән бармаймы ни? Тыйнаҡ ҡына үҙ ярымутрауҙарында ҡоролоҡтан сарсап, йәшәү өсөн тырмашып ятҡан, быға са бер кемгә лә тиерлек билдәле булмаған ғәрәптәр ҡапыл ғына ислам байраҡтарын елберҙәтеп, "Алла ы әкбәр!" орандарын яңғыратып килеп сыҡтылар ҙа " ә" тигәнсе тирә-йүнде, шул иҫәптән Кир Икенсе вариҫтары иранлыларҙы, Мысырҙы, йәнә Урта Азия төркиҙәрен буй ондороп та ҡуйҙылар. Хәҙер улар донъя хакимлығына ынтыла, Көнсығыш Айропанан уң, ана, Урал, Иҙел тарафтарына йүнәлә...

...Уйланып барып, Артыр бей күпме ваҡыт үтеүен дә иҙмәй ҡалған. Унның юлдаштары ла, ана, ат өҫтөндә йоҡом орап килгәндән уң тамам уянып, тәндәрендә яңынан еңеллек әм көс тойоп, тирә-яҡты ҡыҙыҡ ынып күҙәтә киләләр. Ә килгән юл ик еҙ-сик еҙ тигеҙ дала ти әң дә, ис тә бер төрлө генә түгел. Болғар илселәре, йәнә Төрк Тәкин, юл күр әтеүсе Фалис заде, Артыр бейгә, әлбиттә, таныш йәйрәп ятҡан ошо дала күренештәре. Тик быға са эҫе сүллекте, ҡом тауҙарын, тау-таш, таҡырҙарҙы ғына белгән ғәрәптәр өсөн бындағы тәбиғәт – үҙе бер мөғжизә, үҙе бер сихырлы донъя.

Күҙ күреме тирә-йүндә, иран балаҫылай йәшелләнеп, ҡабарып, йәшәреп ятҡан ерҙә ат тояҡтары тауышы ла күмелеп, үнеп ҡала. Зәңгәр күктән ибелгән ҡояш нурҙары ла бында тын юлдарын киптереп, ҡыуырып бармай, кире енсә, киңәйтә, сафландыра, талғын ғына дала еле әллә ниндәй хуш еҫтәр килтерә...

Далаға сыҡҡаны бирле Әхмәт ибн Фаҙланды йәнә ғәжәпләндереп килгәне – тип-тигеҙ дала урта ында ара-тирә осраған йәлпәк убалар әм улар өҫтөндәге эре-эре ниндәйҙер таштар. Баштараҡ әллә ни иғтибар итмәгәйне уларға Фаҙлан улы, " ерәйеп торған ҙур таштар бында ҡайҙан килер икән?" – тип кенә уйлап ҡуйғайны. Тик барған айын таштар йышыраҡ осрай, каруан атлаған юлға яҡыныраҡтары ап-асыҡ күренә башлағас, уларҙың ябай ғына таш түгеллеге лә асыҡланды: ниндәйҙер ындар, кеше ҡулы ырлап эшләгән таш ындар, балбалдар... Ҡай ыларында улар күп, урталағы бейек яңғыҙ тораташтың түңәрәк я ап теҙелгәндәр, әйтер ең, ғаилә башлығы яҡындары менән әңгәмә ҡороп ултыра. Ҡай ыларында таш балбалдар берәм- әрәм генә, хатта яңғыҙ ғына ерәйеп торғандары ла бар. Күпмеләр барҙыңмы – уба, уны тирәләп йәнә таш ындар... Ана, тағы бере е күренде алда. Уны ы каруан юлына яҡын ғына, уба өҫтөндә ап-асыҡ төҫмөрләнә. Ярай ы уҡ бейек, таш ын...

– Нимә ул? – тип ораны ибн Фаҙлан йәнәшә ендә үҙ еҙ килгән Төрк Тәкиндән.– Артта ла улар байтаҡ ҡына булғайны.

– Был тарафтарҙа күп меңләгән бындай ындар, барса дала буйлап ибелгән, – тип яуапланы Төрк Тәкин, әллә ни иҫе китмәгәндәй. – Төркиҙәрҙең ата-баба йола ы...

– Ә ниңә ҡай ыларында ҙуры янында бәләкәй ындар ҙа бар, ә быны ы яңғыҙ ғына?

Төрк Тәкин быны белмәй инеме, нисек уңайлыраҡ яуап биреү хаҡында уйландымы – бер мәлгә тынып ҡалды.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 56



— Былар — ҡәбер убалары, ә улар өҫтөндәге таш ындар, аңлаған кешегә, гүр эйә е хаҡында бик күп мәғлүмәт бирә ала, — тине әңгәмә менән ҡыҙыҡ ынып, ни аралалыр улар янына килеп еткән Артыр бей. — Затлы аҡ өйәкме унда ерләнгән, батыр яугирмы, әллә ябай кешеме ... Ниндәйҙер боронғо изге ғибәҙәтхана йә берәй шанлы скиф батша ы кәшәнә е булып сығыуы ла бар ... Ә бындай таш ындар, — Артыр бей әлеге убаға ымланы, — ғәҙәттә, хан йә ғәскәр башлыҡтары хөрмәтенә ҡуйыла.

— Ҡай ы бер төркиҙәрҙә улар еңгән йә үлтерелгән батырҙар анынса була. Былар теге донъяла ошо атаҡлы шәхесте аҡлап, ҡурсалап тороусылар тип иҫәпләнә.

— Ҡыҙыҡ икән, тере саҡтағы дошмандары аҡлаймы уны теге донъяла?

— Ә яҡындары унның үҙе янында: яуға йөрөр аты, ҡолдары, ҡай ы саҡта хатта ҡатыны ла бергә ерләнә. Дәрәжә енә ҡарап, хужа ы менән бергә уның тиҫтәләгән, хатта йөҙләгән аттары ла ерләнгән, мәрхүм янына, яугирлыҡ рухы ҡомартҡы ы булараҡ, тере саҡтағы хәрби ҡоралдары ла алынған. Шунда уҡ уға аҙыҡ-түлек, зиннәтле хазиналарын да ҡуйғандар. Ундай әйкәл-ҡомартҡыларҙың иң күренеклеләре, моғайын, Үҙәк Азияла Көнсығыш Төрки Ҡағанатын төҙөүсе Ҡөлтәғин, Билге ҡаған, Төнйәкүк шәрәфтәренә ҡуйылғаны булыр. Ҡолтәғин менән Билге ҡаған әйкәлдәре Орхон йылға ы ҡушылдығы Кокшин-Орхон ярында, күркәм ыҙатланған тауҙар уратма ындағы дала үҙәгендә урынлашҡан. Бөйөк төрки сардары Ҡөлтәғин шәрәфенә ҡоролғанын мин фәҡирегеҙгә лә күрергә насип булды. Яндырылған әм яндырылмаған кирбестәрҙән, мәрмәр таштарҙан торған ҡатмарлы ҡоролма-ғибәҙәтхана, ҡорбан килтереү урыны, мәрмәр таштар, кеше ындары... Ғәжәп дәү мәрмәр ташбаҡа өҫтөндә таҡталай шымартылған бейек дүрткел таш бағана, уны тирәләп бик күп башҡа бәләкәйерәк таш ын — балбалдар теҙелгән. Ә бағана йөҙөнә төрки ҡағанаттарының ҡа арман тарихы соҡоп уйылған...

Ләкин Төрки Ҡағанаты хаҡында Фаҙлан улы хәбәрҙар түгел инеме, әллә "бөйөк төрки сардары", "ҡа арман тарих” тигән үҙҙәр оҡшаманы, Артыр бейҙы тыңлап та бөтмәй, тағы Төрк Тәкингә боролдо, ниңәлер ҡуҙғый төшөп, орай ҡуйҙы:

— Төркиҙәр ошо таш бүкәнгә табынамы?

— Юҡ, төркиҙәр бер Тәңрегә, Күк Тәңре енә генә табына, — Был юлы Төрк Тәкин тауышы ышаныслы яңғыраны. — Ә балбалдарҙың мәғәнә е төрлө. Ундай ындарҙы ла таштан ғына түгел, төрлө ҡиәфәттә әм ҙурлыҡта ағастан да, хайуан тире енән, ҡайын туҙынан, кейеҙҙән дә я ағандар. Тәғәйенләнештәре лә бер төрлө генә түгел. Берәй енең бик яҡыны — улы, ҡатыны, ата ы... үлеп кит ә, уға оҡшатып ҙурмы, кескәйме ын-ҡиәфәт эшләгәндәр ҙә шуны берәй изге урынға ҡуйғандар йә үҙҙәрендә аҡлағандар. Мәрхүмдәрҙең иҫтәлеге булып аналған улар...

Төрк Тәкиндең кәйефе ҡырылғандай теләр-теләмәҫ яуаптары ағайттымы, Фаҙлан улы башҡаса төпсөнмәне. Тораташ ерәйгән әлеге уба тапҡырына килеп еткәйнеләр инде.

— Яҡыныраҡ барып ҡарарға ярайҙыр бит? — тине, тынyслана төшкәс, ибн Фаҙлан.

— Хуп, мәйелең...

Улар, өс-дүрт ыбайлы, башҡаларҙан айырылып, тигеҙ ергә өйөлгән түбә эргә енә килеп еттеләр.

— Аттарҙан төшөргә кәрәк булыр, — тине Төрк Тәкин йәнә. — Был изге таш...

Ибн Фаҙлан атынан төшөп, әлеге ынды әйләнеп, ентекләберәк ҡарап сыҡты. Ике аршындан артығыраҡ булыр, кеше ҡиәфәтенә оҡшатып эшләнгән таш ын. Йөҙө менән көнсығышҡа ҡаратып ҡуйылған. Кендеге тапҡырында ҡаушырылған ҡулдарында йәлпәк ауыт.

— Яҡын килгәс, былай ғына китергә ярамай, — тине тағы Төрк Тәкин. — әр кем

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 57



ҡулынан килгәнсә ҡорбан килтерергә тейеш. Көтөүсе үт ә, берәй арығын, ыбайлы яугир юлыҡ а, берәй ҡоралын, ис юғы бер уғын ҡалдырып китеүе фарыз. Былар мәрхүмгә теге донъяла ла, ерҙәге ымаҡ, мохтажлыҡ күрмәй, иркен йәшәргә мөмкинселек бирә. – Шунан Төрк Тәкин башҡаларға ҡарап алды ла, “Минең кеүек эшләгеҙ!” тигәндәй, әлеге таш ын алдында теҙләнде. Унан ҡайҙандыр төпкө кеçә енән көмөш аҡса килтереп сығарҙы ла, ихтирамлы эйелеп, балбал ҡулындағы әлеге ауытҡа килтереп алды. Башҡалар ҙа шуны ҡабатланы. Күпмелер икеләнеп торған Фаҙлан улы Әхмәт тә, теҙләнеп тормайса ғына, ҡорбан ауытына үҙ өлөшөн индерҙе. “Табыныу түгел бит был, – тип йыуатты ул үҙ-үҙен. – Башҡаларҙың йола ын хөрмәт итеү генә”.

Ә Артыр бейгә билдә еҙ яугирҙарға ҡуйылған был тораташ икенсе бер ҡомартҡыны – Кокшин-Орхон йылға ы ярындағы бөйөк сардар Ҡөлтәгин әйкәлен хәтерләтте. Ҙурлығы әм мө абәтлеге яғынан был ҡомартҡыларҙы сағыштырып булма а ла, асылдары уларҙың бер булыр. Ситтән бик үк күренеп бармаған икән, был тораташ уратма ында ла, ана, эреле-ваҡлы төрлө ҡиәфәтле тиçтәләгән таштар ята. Тимәк, был да үҙ кимәлендә ҡа арман яугир, ырыу башлығы йә сардар булған. уғыштарҙағы ғәйрәте, шәхси ҡыйыулығы менән шө рәт ҡаҙанған Ҡөлтәгин дә аға ы Билге ҡаған заманында ғәскәр башлығы булып йөрөй, үҙ илендә генә түгел, барса көнсығыш халыҡтарында тәүге мәш үр төрки ҡа арманы булып танылa. Шуға уның әйкәлен уратып теҙелгән " аҡсы" балбалдар ҙа яуҙарҙа ул үлтергән дошмандар анынса – 169 таш. Әммә иң мө име был түгел. Боронғоно өйрәнеүселәр әйтеүенсә, шымартылған был әйкәл-таштар битендәге яҙмаларҙа Төрки ҡағанаттарының барса тарихы, Бумын, Билге ҡаған, Төнйәкүк, Ҡөлтәгин кеүек ошо ҡағанаттарҙы ойоштороусы бөйөк шәхестәрҙең фиҙакәр ҡа арманлыҡтары тасуирланған, тиҙәр. Төркиҙәрҙең иң боронғо дәүләттәренең бере е, төрлө ырыу-ҡәбиләләрҙең хәрби-сәйәси берләшмә е Ҡағанат рәүешендә VI быуат урталарында уҡ барлыҡҡа килә. Үҙҙәре әйтмешләй, улар бында "юғарыла зәңгәр күк, ә түбәндә ҡөрән-ҡуңыр ер яралыу менән үк йәшәй башлаған”.

Төркиҙәрҙе тәүләп ҡағанатҡа ойоштороусы – Бумын ҡаған, ә уның эшен артабан дауам итеүсе – Истәми ҡаған. "Күк төркиҙәре" тип йөрөтөлгән был халыҡты Бумын менән Истәми ҡағандар дүрт яҡлап ҡамап алған дошмандарға ҡаршы яуға алып китәләр, уларҙы теҙ сүктерәләр. Көнсығышта – Ҡандырҡан, Оло Хинган тауҙарына, көнбайышта Ғиссар тау ырттары эсендәге Буҙғала тигән тарлауыҡтағы Тимер ҡапҡаға барып етәләр әм был ерҙәрҙе лә Төрки Ҡағанаты биләмәләре итәләр. Бейҙәр, ҡеүәтле ғәскәр, бар халыҡ ҡағандарға тоғро була, ата-баба үҙен тота, илен нығыта, төрки дәрәжә ен юғары күтәрә. Бумын ҡағандың эне е, тарихтарға инеп ҡалған Ҡөлтәгин ун алты йәшендә талантлы ғәскәр башлығы булып танылған, уғыштарҙа еңелеү белмәгән. Төрки Ҡағанаты ана шул арҡала мәш үр империяға әүерелә, Ҡытай, Иран, Византия кеүек мәш үр илдәр менән хәрби-сәйәси бәйләнешкә инә.

Ҡөлтәгин шәрәфенә ҡуйылған ында уйылған сыбар яҙманы ул үҙе лә күрҙе. Яҙмалар төркиҙәр ара ындағы үҙ-ара ыҙғыштарҙы бөтөрөргә, ата-баба рухына тоғро ҡалырға, төрки дәүләтен нығытырға саҡыра. Ундай әйкәлдәр әм яҙыуҙар Көнбайыш Төрки Ҡағанаты биләмәләрендә лә бихисап. Был ғәжәп тә түгел, әле күптәнме ни Көнсығыш әм Көнбайыш Төрки Ҡағанаттары бер үк яҙмалы бер дәүләт, бер халыҡ булған бит. Ундай әйкәлдәр илселек килгән юлда ғына ла әҙме осраны. Юҡҡа ғына башҡорт ырыуҙарынан түңгәүерҙәр – "Төңгө аҡсылар" – үҙҙәренең башланғыстарын ошо мәш үр Ҡөлтәгингә, ә табындар хатта унан да элегерәк, алтынсы йөҙйыллыҡта уҡ тәүге Төрки Ҡағанатын төҙөүсе Төмәнгә (Бу-

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 58



мынға) илтеп терәй? Бына әле үҙҙәре эргә ендә баҫып торған торataш йөҙө лә юйыла төшкән ниндәйҙер ырлы яҙыуҙар менән сыбарланған. Ундай торataштарға тарих та, бағышлау әм бәхилләшеүҙәр ҙә, ҡары үҙ әм шиғри әҫәрҙәр ҙә уйыла. Тик уларҙы йыйыусы әм өйрәнеүсе, тарих итеп яҙыусы шәхестәр генә юҡ. Ә дәүерҙәр уларҙы ҡыҙғанмай, әкренләп юҡҡа сығара бара. Ана, үҙҙәрен "Күк төркиҙәре" тип йөрөткән ҡағанат халыҡтары ла Ҡөлтәғин шәрәфенә ҡуйылған әйкәл әм ындарҙы ла башта, күрә ең, күк төҫөндәге сая зәңгәр төҫкә, ә тыш яҡтағы ыр-биҙәктәрен ҡыҙылға буяғандар. Артыр бей күргәндә лә яҙмалы торataштарҙың ян-яҡтары ап-асыҡ зәңгәр төҫтә ине. Ә башҡа ындарҙа буяуҙар төҫмөрләнмәне. Булмағандармы, әллә далалағы ел-дауыл, ҡар бурандары, ҡойма ямғырҙар йыуып киткәнме? Аяу ыҙ дала ҡояшы был мәңгелек таштарҙы лә сәрпәкләгәнме? Артыр бей күреп йөрөнө: күп кенә ошондай тарихи ҡомартҡылар емерелеп, таштары ярылып ята, яҙыуҙары төҫ өҙләнә. Ҡасандыр төркиҙәр ҙә ошо ындарҙы изгеләштереп, хәҙер мосолмандар Мәккәгә йөрөгән кеүек, мәңге таштарға килеп баш эйгәндәр, яҡты яҙмыш орап доға ҡылғандар, тиҙәр. Артыр бей барған саҡта әйкәлдәр янында ундай күмәк халыҡты күрмәне. Әммә ҙур майҙанды биләп торған ҡоролмаларҙың төрлө тарафтарында доға ҡылыпмы, ял итепме, үҙ уйҙарына бирелепме ултырған берәм- әрәм мосафирҙарҙы шәйләргә була ине әле. Борсоғаны шул: халыҡтар аман уғышыуҙан бушамай, бере е ҡорғанды икенсе е емерә. Былай бар а, төркиҙәргә бөйөк тарих биргән был таш ындар ҙа, уларҙағы яҙмалар ҙа әлеге уңалып барған буяуҙар яҙмышын ҡабатламаҫ тимә. Атабаба рухын оноткан, үҙенең тамырын юғалтҡан халыҡтың киләсәге булырмы?...

***

Хан фарманын алыу менән Байғөбәк батыр кисекмәҫтән юлға сыҡты. Яугирҙәры күп түгел уның — урыҫ барымтасыларын аҙға батырып ҡыуып сығарған әлеге ыналған ғәскәри төркөм. Был юлы улар, уғыш хәүәфе сыға ҡал а, үҙҙәренән бигерәк урындағы ырыу халҡына ярҙам итергә,хан даирә е менән үҙ-ара бәйләнеш булдырырға бара. Башҡорттарҙың бындай бәйләнештәре ил эсендә генә түгел, Тәңрегә шөкөр, донъяның әр тарафтарында тиерлек: Хәрәзм, Дәрбент, Мысыр, Фарсы, Ғәрәп илдәрендә лә бар.

Башҡорт иле Урта Азиянан Болғар, унан Скандинав илдәренә үткән йәнле сауҙа каруандары юлында ята. Урал әм Шәреҡ илдәре, бигерәк тә Хәрәзм менән тығыҙ бәйләнештәр бик тә боронғо замандарҙа барлыҡҡа килгән. Ағиҙел, Ҡариҙел, Сулман-Иҙел дарьялары, ә унан Ҙур Иҙел аша Уралдан тимер, баҡыр мәғдәндәре, ҡиммәтле йәнлек тиреләре, күн әйберҙәре сығарылған. Ә кирегә Иран, Византия, Румдан ауыт- аба, алтын-көмөш биҙәү әйберҙәре, башҡа ҡиммәттәр килгән. Урал тарафын Рум диңгеҙе*, Ҡу стан*, Урта Азия менән тоташтырған ҡоро ер юлы ла бар. Шуға ла Көньяҡ Урал ҡәүемдәре менән Шәреҡ илдәре ара ында көнкүреш, хужалыҡ әйберҙәре генә түгел, рухи ҡиммәттәр ҙә ике арала йөрөп ята. Шулай булма а, боронғо Иранда яңы эраға тиклем уҡ барлыҡҡа килгән Заратуштра диненең изге китабы Апастак тәғлимәтен ҡай ы бер башҡорт ҡәбиләләренең дә үҙ итеүен нисек аңлата ың? Хәйер, ундай үҙ-ара уртаҡлыҡтар өсөн ис тә сиктәр ҙә, ҡаршылыҡтар ҙа юҡ: Урал менән Шәреҡ илдәре ара ындағы ик еҙ-сик еҙ киңлектәрҙә телдәре лә, мәҙәниәттәре лә ҡәрҙәш ҡәүемдәр көн итә. Ә башҡорт боронборондан үҙенең тоҡомон, яҡын әм алыҫ ҡәрҙәштәрен ололоҡларға ғәҙәтләнгән, уларға тоғро ҡалған, берҙәмлекте данлап ҡобайырҙар ижад иткән... Бындай тоғролоҡҡа башҡа ҡәүемдәр ҙә битараф түгел.

Байғөбәк батыр аман да кисәге йыйын хаҡында уйланып бара: хан үҙен ысын ирҙәрсә тотто: Аҡташ ханды ла бик урынлы иҫкә төшөрҙө, ошонан уң йыйында-

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 59



ғыларҙың күңелдәре бермә-бер күтәрелеп китте. Эйе, Байғөбәк батырҙың да ишеткәне бар Аҡташ хандың Искәндәр-Александр атлы мәш үр сардарҙы мәсхәрәле ҡыуып ебәреүе хаҡындағы риүәйәтте.

Бик затлы була Искәндәр. Ҙур булмаған ғәскәре менән Румдан күтәрелеп, башта күршеләрен – Фарсыны яулай, унан Гималай ырттары аша үтеп индостанды, артабан Ҡара тәнле халыҡтар йәшәгән илдәрҙе, йәнә Ҡытайҙы, Уйғырҙы, Хөрәсәнде, Мысырҙы, Төркөстанды, Ҡу станды, Сәмәрҡәндте, тағы әллә күпме илдәрҙе баҫып ала.

Әлеге Аҡташ ханға бәйле ваҡиғалар ҙа бик боронғо дәүерҙәрҙә, меңәр йылдар әүәл булған бит инде. Искәндәр-Александр, имештер, көнбайыш әм көнсығыштағы ярты донъяны яулап алғас, ҡом оҙ ҡарашын ик еҙ-сик еҙ төрки далаларына йүнәлтә. Шунда был донъяның төньяғындараҡ, Аҡ ыу – Ағиҙел йылға ы буйында бер кемгә лә баш бирмәҫ ҙур ил әм уның башлығы Аҡташ хан тура ында ишетә. Әлбиттә, шө рәте менән быға са бөйөк илдәрҙе үҙ еҙ теҙләндерә килгән мәш үр сардар юғары мәҙәниәттән ситтә ятҡан ҡырағай төпкөлдә үҙе ымаҡ еңелмәҫ тағы берәүҙең булыуы хаҡында ишетергә лә теләмәй. Кәм енеп, ул ерҙәргә үҙе барып тормай, сапҡын ебәрә: “Аҡташ хан миңә килеп баш ал ын йә кисекмәҫтән тәхетенән баш тарт ын. Шулай булма а, оҙаҡламай ғәскәр менән үҙем барып етәм. Ул саҡта – яза ы ҡаты булыр”.

Әлбиттә, былдай дорфалыҡҡа Аҡташ хандың да ныҡ асыуы килә. Ләкин быны иҙҙермәй, илселәрҙе яҡшы ҡаршы ала. Ә быларының Аҡташ хан иленең хозурлығына иҫтәре китә: ғәжәйеп йәшел сәхрә урта ындағы йәлпәк тау башында алыҫтарҙан уҡ күренеп торған гүзәл хан арайы. Уның тирә-яғы – офоҡтарға олғашҡан ик еҙ-сик еҙ иркенлек... Йәйрәп ятҡан ҡуйы урмандар, арыраҡ сәскәле болондар, туғай киңлектәре... Көмөштәй ялтырап ятҡан тулы, саф ыулы йылға, күлдәре... Ә улар ауа ы уң? Унан сәскәле болон еҫе лә, ылыҫлы ағастар, бал тәме лә, тау йылғаларының дәртләндергес алҡынса сафлығы ла тойолғандай... Күңелдәрҙе елкендерерлек сафлыҡ, затлы шараптарың ары тор он...

Ә Аҡташ хан, Искәндәр талап иткәнсә, уның ҡаршы ына баш алып барасағын әйтеп илселәрҙе оҙата ла, үҙе хәйлә ҡора. Төрлө тарафтарҙа ханлыҡ әм бейлек ҡылған ҡырҡ улына, ун ике кейәүенә Искәндәр афәте янауын әйтеп сапҡын ебәрә. Улары шунда уҡ, ике йөҙ туҡ ан мең ғәскәр эйәртеп, йә әтләп Аҡташ хан ҡашына килеп тә етә. Уғаса Аҡташ хан үҙе лә ете йөҙ мең ғәскәр йыйған була. Улдары әм кейәүҙәре килеп етеү менән, Аҡташ хан үҙе көтөү-көтөү мал, затлы бүләктәр тейәлгән ҙур каруан эйәртеп, оло тантана ҡороп, Искәндәр ҡаршы ына китә. Шуның менән уға үҙ еҙ буй оноуын белдерә.

Сардар Искәндәр - Александрға Аҡташ хандың шулай үҙен бөйөктәргә генә хас баҫалҡы, тыйнаҡ тотоуы оҡшай төшә. Ҙур ми ырбанлыҡ анап, уға үҙ илендә батшалыҡ итеүгә ризалыҡ бирә.

Ошонан уң, тағы ла кеселеклерәк ҡыланып, Аҡташ хан Искәндәр сардарҙы, күреп китер ең тип, үҙенең Аҡ ыу* ярындағы арайына ҡунаҡҡа саҡыра. Илселәре ҡайтып, ул тарафтарҙың гүзәллеге хаҡында өйләп өлгөргән, күрә ең, – Искәндәр саҡырыуҙы ихлас ҡабул итә.

“Кеше ҡунаҡҡа әллә ни ҙур ғәскәр эйәртеп йөрөмәҫ”, – тип уйлағайны Аҡташ хан башта, хәйлә енең сере лә шунда ине. Ләкин Ағиҙел буйына Искәндәр-Александр көтмәгәндә йөҙ егерме мең яугир оҙатыуында килеп төшә. Ҡаушабыраҡ ҡал а ла, Аҡташ хан Ағиҙел аша сығып, ярандары менән Искәндәрҙе үҙе ҡаршы-

---

*Ҡара диңгеҙ.
*Кавказ.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 60



лай, оло хөрмәт күр әтә, ат уйнатыр ергә шө рәтле ҡунаҡтар шәрәфенә мискә-мискә затлы шараптар килтертә. Оло, бай мәжлес ҡороп ебәрә. Шул уҡ ваҡытта кейәүҙәрен әм улдарын ете йөҙ мең ғәскәрҙәре менән тирә-яҡ урман, тау аралары, соҡорло үҙәндәргә йәшерә, мәжлес ҡыҙып киткәс кенә, ҡапыл өжүмгә күсеп, Искәндәр ғәскәрен ҡырып алырға ҡуша.

Ләкин ярты донъяны яулап, хәйлә-этлектә шулай уҡ ҙур тәжрибә туплаған Искәндәр сардар ҙа бик иҙгер, аҡ эш итә. Ғәскәренең күбе ен ул да иҙҙермәй генә төрлө тарафҡа аҡка ҡуйған, ҡай ыларын Аҡташ ханға белгертмәгән дә, шымсыларына уяу торорға әмер биргән икән. Ана шуға ла мәжлес ҡыҙып ҡына киткән бер мәлдә төрлө яҡтағы урман ауыҙҙарынан Аҡташ хан яугирҙары пәйҙә була башлағас, хәлде аңлап, шунда уҡ Искәндәр ғәскәре лә өжүмгә күсә... Ошолай башланып киткән ҡан ҡойош Ағиҙел буйында өс көн, өс төн өҙлөк өҙ дауам итә: әле искәндәриҙәр ҡыҫырыҡлай башҡорттарҙы, унан Аҡташ хан яугирҙары өҫтөнлөк ала. Был уғышта ирҙәр генә түгел, Аҡташ хандың ҡатындары ла, өлкән улдары менән йәнәш ун бер йәшлек малайы ла уҡ- аҙаҡ менән ҡыйыу эш итә. Искәндәрҙең тән аҡсы ы Аҡташ ханды яурынан яралағас, хандың йәш ҡатыны оҙон күлдәге эсенә йәшерелгән ҡылысын урып ала ла дошманы өҫтөнә ҡарсығалай ташлана...

Аяу ыҙ була уғыш, күҙ күрер киңлектәрҙә ер өҫтө меңләгән мәйет менән ҡаплана, ғәзиз илдәрен баҫҡынсыларҙан аҡлап, дошман менән аралаш аҫыл башҡорт ир-егеттәре лә ҡат-ҡат булып түшәлә.

Таң ары ынан ҡара төнгәсә туҡтау ыҙ айҡашыуҙан ике яҡ та үлемесле арый, "яралан ам, исма ам, әҙ генә ерҙә ятып ял итермен" тигәндәй, яугирҙар уҡ, өңгөләрҙән дә аҡланмай башлай. Әммә тиң еҙ алыш туҡтамай, ике ғәскәр, әле бер-бере енә ҡушылып, әле ҡан ҡоҫоп, яңынан ҡушылыр өсөн айырылып китеп, дүртенсе көнөн дә яу яланын ташламай. Тик баҫҡынсылар бына-бына еңелә, ҡасып китә тигәндә генә, искәндәриҙәргә ярҙамға йәнә алтмыш меңлек ғәскәр килеп етә. Аҡташ хан яугирҙары ҡалын урман эстәренә, тау араларына сигенергә мәжбүр була. Бына шулай башлана башҡорттарҙың бөйөк сардар Александр Македонский, ә шәреҡсә әйткәндә, Искәндәр менән тәүге танышыуҙары. Әммә Аҡташ хан был осраҡта сигенергә мәжбүр бул а ла, Искәндәр менән алышыуҙан туҡтамай. Бер үҙенең көсө етмәгәнен белгән саҡтарында Саҡсин, Хәрәзм, Көнсығыш халыҡтары, хан ҡағандарынан ярҙам алып, ғәскәрен тулыландырып, искәндәриҙәргә өҙлөк өҙ өжүм итеп торған. Искәндәргә Аҡташ хан ымаҡ бер кем бер ҡасан ундай яуыз ҡаршылыҡ күр әткәне булмаған. Шуға, имеш, аҙаҡ Искәндәрҙең дә түҙемлеге бөткән: "Илдәре гүзәл, тик халыҡтары уҫал, тыныс йәшәргә барыбер ирек бирмәҫ улар, иҫән саҡта китеп ҡотолайыҡ", — тип Ағиҙел буйы ерҙәренән ваз кисеп, ғәскәрҙәрен кире алып киткән. Шул тиклем йәндәренә тейҙеме икән был халыҡтар — киткән саҡта Искәндәр үҙе артынан быларҙы бикләп, таш ҡойма, әҙәм үтә алмаҫлыҡ бейек диуарҙар ҡойоп ҡалдырған, тип тә өйләйҙәр...

Бөйөк булған Аҡташ хан. Ағиҙелдең уң яғындағы Аҡташ исемле бейек тау башында урынлашҡан унын баш ҡала ы. Ҙур ҡала, гүзәл ҡала була ул, хан арайы ла шунда күктәргә ашып, ғорур ерәйеп торған. Ошонан тороп Аҡташ хандары оҙаҡ дәүерҙәр мәшриҡ тарафына, хатта Ҡытай, индостан, Ҡу стан яҡтарына хөкөм йөрөткән... уңыраҡ Аҡташ тарафтарында көслө Табын дәүләте барлыҡҡа килгән. Унан шул уҡ табындар тағы ла уңыраҡ ҡайҙандыр килгән болғар ҡәбиләләренә әле Ғәрәп илселеге йүнәлгән үҙ исемдәрендәге яңы Болғар дәүләтен төҙөргә ярҙам иткән.

---

**Ағиҙел.*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 61



...Уйҙарынан арынып, Байғөбәк батыр алға күҙ атты: аман да ик еҙ-сик еҙ ҡылғанлы дала. Был уны борсомай, даланы яҡшы белә ул, тәғәйенләнгән ергә барып етергә лә күп ҡалманы хәҙер.

***

...Хан сардары килеп етеп, урындағы ырыу башлыҡтары менән кәңәшләшеп тә алды. Эйе, “Илселек” тип аталған был оло яу ил аша үтер өсөн рөхсәт тә орап тормай, йылдам хәрәкәт итә. Үҙҙәрен әләк дорфа тоталар, күрәең, арттарында торған ярты донъяны тиерлек теҙ сүктергән дә шәтле Ғәрәп хәлифәте көсөн тоялар, шуға арҡалананалар. Тирә-яҡтағы халыҡ, ҡоралды ғәскәр оҙатыуындағы күбе е дөйәгә атланған сәйер кейемле, өндәшмәҫ был каруанды әлегә ҡыҫылмайса ғына, хәүефләнеп оҙата. Әммә бындағы ырыу башлыҡтары илселек хаҡында хәбәрҙар булыу сара ын күреп тә өлгөргән: тирә-яҡҡа ағауылдар, күҙәтселәр ҡуйған. Хәҙер уларҙан каруандың ҡайҙа булыуы, ниҙәр ҡылыуы хаҡында мәғлүмәт килеп тора. Ошоларҙы ишеткәндән уң Байғөбәк тыныслана төштө, бер төркөм ғәскәрҙәре менән алдан уҡ илселек үтергә тейеш урындағы ағаслыҡҡа инеп йәшеренде.

***

...Төрки далаларына тәрәнерәк үтеп ингән айын ғәрәп сәйәхәтселәре лә ағыраҡ эш итә башланы. Әлбиттә, был тарафтар әлегә үҙҙәре хәүефләнгән башҡорт биләмәләре түгел. Илселек килеп еткән Мөхәджир тауҙарының көньяҡ итәгенән ағып сыҡҡан Яғанды йылға ы ярҙарында уғыҙ ҡәбиләләре көн итә. Бынан ике тиҫтә йыл сама ы ғына әүәл башҡорттар, бәшнәктәр менән берләшеп, Хазар диңгеҙе ярҙары буйында уғыҙ, ҡарлуҡ, кимак ҡәүемдәре менән ҡаты уғыша. Тик ул бер ҡалыптан уғылған төркиҙәрҙе нисек аңлап бөтәең: бөгөн уғыша, иртәгә килешә, тигәндәй, бөгөн генә ғәрәптәр барыр тарафтарҙа ниндәйҙер хәрби төркөмдәр йөрөүен хәбәр иттеләр, төркиҙәрҙең уҫалдарынан башҡорттар булмағайы. Шуға ла ғәрәптәр был төркөмдәр ҡапыл килеп сығып, өжүм итмә ендәр өсөн, шунда уҡ аҡлыҡ сараларын да күрә башланы. Иң хәүефле е — илселек йылға кискән мәл. Тирә-яҡтағы тарафтарҙа әр ҡыуаҡты үҙ тирмә е ымаҡ яҡшы белгән был йылғыр ыбайлыларға хәлдән тайып йылғанан сыҡҡан ғәскәрҙәрҙе лә, илселек ағзаларын да аяу ыҙ ҡырып алыу бер ни тормаясаҡ. Башҡорт ҡапҡанына аңғарамаҫтан килеп эләкмәҫ өсөн, ғәрәптәр алдарынан көслө хәрби төркөм йөрөтөр булып китте. Улары, алға үтеп, барыр юлды тикшерәләр, нимә барын төп көстәргә хәбәр итеп торалар. Йылға йә башҡа берәй тәбиғи тотҡарлыҡты үткәнсе каруанды әр яҡлап күҙәтеп, ҡурсаларға әҙер торалар.

***

Байғөбәк егеттәре көтөп, күҙәтеп ятҡан хәрби төркөм дә ғәрәптәрҙең әлеге алсабар яугирҙары ине. Ләкин ҡасып ятҡан ерендә үҙенде алдан иҙҙермәҫ өсөн быларын тотҡарлаҡ ыҙ үткәреп ебәрергә кәрәк. Төп көстәрен көтөргә, унан күҙ күрер.

Башҡорттарҙың иҙемләүе дөрөҫ булып сыҡты. Ысынлап та, оҙаҡламай көнсығыш тарафында ауала, дала ҡаплап, аҡ ыл болот күтәрелгәндәй тойолдо. Ҙур каруан килә былай булғас. Ул да булмай, ошо болот эсенән тағы бер төркөм ҡораллы ыбайлылар килеп сыҡты. Алдағы ыбайлының эйәренә ғәрәп хәрефтәре менән ниҙер яҙылған тар ғына йәшел әләм беркетелгән. Улар артынан үркәстәренә ҡабарынҡы итеп йөк тейәлгән, ҡойроҡҡа ҡойроҡ килеп атлаған дөйәләр каруаны күренде. Ҡай ыларының өҫтөндә сатырға оҡшаған, төҫлө ебәк менән ҡапланған ниндәйҙер ҡоролмалар ҡуйылған. Күрә ең, тирә-яҡты күҙәтеп барыр өсөн был ҡоролмаларҙың дүрт тарафынан тар ғына уйымдар уйылған. Урталағы сатыр-ҡоролмаға йәнә аҡ әләм эленгән. Быны ы әйбәт, был — килешеү билдә е, тимәк, у-

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 62



ғыш теләмәйҙәр. Ысынлап та, каруандың был өлөшө бер ҡайҙа ашыҡмағандай тыныс бара. Ана, урталағы бер сатыр-япма асыҡ, уның эсендә ултырған кешеләре лә күренеп тора. Уларының кейемдәре лә башҡорттар күреп өйрәнгәнсә түгел, ҡарамаҡҡа сәйер генә икән дә ба а, сағыу сыбар кейемдәләр. Бары ында ла төрлө төҫтәге буйлы оҙон халат, баштарындағы төрбәләре (уларҙың ҡай ылары ҡара төҫтә), ярай ы уҡ йылы булыуға ҡарамаҫтан, йөҙҙәрен ҡолаҡтары менән ҡуша уратып бәйләнгән. Бында ҡом бурандары юҡ та а, шул көйө нисек тын алмаҡ кәрәк? Башҡорттарҙың да күбе е баштарына ыуыҡ саҡта биттәрен дә ҡапларлыҡ көләпәрә кейеп алған. Ләкин йылы саҡта ҡолаҡтарын артҡа бәйләп ҡуйып, йөҙҙө дала еленә шар асырға була. Ә күптәрендә осло түбәле ҡырма бүрек. Хәйер, ғәрәптәр ара ында ла баштарына аҡ төрбә, сәллә урағандары бар икән...

Бер нисә саҡрымға уҙылған каруанды алдан, ике яҡтан әм арттан ғәрәптәрҙең ҡоралы сиреүҙәре ҡурсалап бара. Затлы кейемдәренә, үҙ-үҙҙәрен тотоштарына, хатта ат, дөйә өҫтөнә алынған япмаларына, сатыр йы аздарына ҡарағанда, каруандың был өлөшөндә илселектең аҡ өйәктәре әм уларҙы хеҙмәтләндереүселәр урынлашҡан булырға тейеш.

Күҙәтеп ятыусылар өсөн ҡыҙыҡ та был күренеш. Бигерәк тә бына дөйә сафтары. Төрки дала ы өсөн тан ығыраҡ сүл хужа ы улар. Оҙон муйындарын алға оноп, арттағы ы алдағы ының ҡойроғона йәбешкән ымаҡ эҙмә-эҙ тоташ сылбыр я ап баралар. Ашыҡмайҙар, етди хайуанға оҡшағандар, ырттарында — йә ҙур төргәкле йөк, йә — әҙәм бала ы. Хайуандар уларға иғтибар ҙа итмәҫтән, әүетмсә әлмәк кенә атлай бирә. Ситтән күҙәткәндәргә ғәжәп тасури күренеш. Ғәрәп ярымутрауындағы халыҡтар, йәнә ҡом сүллектәрендә ултырған илдәр нәҡ ошо дөйә тигән хайуан арҡа ында ғына тере ҡалғандар, тигән фекер йөрөй шәреҡтә. Сөнки дөйә — бик тә сыҙам хайуан, ашамай-эсмәй ҡом сүллегенән аҙналар буйы туҡтау ыҙ бара ала. Кире енсә, талсыҡҡан, ыу ыҙлыҡтан сарсап йығылған юлсыларҙы өтө менән ыу ындарын ҡандырған, ите менән аслыҡтан ҡотҡарған, үркәс майы хәл еҙҙәргә көс биргән.

Ә бына аттары!.. Араларында, бигерәк тә затлы кейемлеләрендә, оҙон сираҡлы, баштарын юғары тотҡан бик тә омғолдары бар. Кәүҙәләрен еңел уйнатып, бейеп кенә баралар. “Ғәрәп аты” тигәндәрелер былары. Әммә күпселеге — кәүҙәгә кесерәк, йөнтәҫ төрки аттары. Уларын, күрә ең, ғәрәптәр далаға сыҡҡас йүнәткән. Былары ғәрәптәрҙеке ымаҡ дорфа уйнаҡлап бармай, тәртип аҡлай, сафтарын боҙмай, күренеп тора — хәрби өнәргә өйрәтелгәндәр...

Ҡойороғо офоҡҡа барып терәлгән, әкиәттәге ажда а-йыланға оҡшаш шыуышҡан был хәрәкәтте ярандары менән Байғөбәк сардар бик оҙаҡ күҙәтеп торҙо.

Каруандың сыбар сатырҙарында ултырған затлылары үтеп киткәс, туҙан эсенән тағы бер ағымдың башы күренде. Быны ында кешеләр аҙ, ат, дөйә өҫтөндә төргәк-төргәк йөктәр, араларында ниҙер тейәлгән ике тәгәрмәсле тау арбалары ла бар. Уларында, күрә ең, аҙыҡ-түлек, хужалыҡ кәрәк-яраҡтары... Илселектең хужалыҡ бүлегелер был, моғайын. Шулайҙыр, ана, улар артынан әллә күпме арыҡ, ыйыр ҡыуып килеүҙәре күренде. Башҡаса буш далала был тиклем халыҡҡа нисек аҙыҡ тапмаҡ кәрәк?

...Меңәрләгән ат, дөйә, кеше, тәгәрмәс аҫтында ҡалған, яңы баш төрткән йәшеллек — ҡаты дала сиҙәме лә сыҙамай, тапалып ыуала, туҙанға әүерелә, тоташ диуар булып күккә күтәрелә. Каруан күтәргән туҙан болото башҡорттар йәшеренгән ағаслыҡ ара ына ла үтеп инә, саф дала ауа ына өйрәнгән тын юлдарын әсетеп ыҙалай. Эргәндән генә маҡсаттары билдә еҙ ят ғәскәрҙең хужаларса ил тапап, туҙан осороп барыуы асыуға тейә, иҙелер- иҙелмәҫ шом да ала.

Шулай ҙа Байғөбәк батыр был юлы үҙҙәрен иҙҙермәҫкә булды. Каруандың үтеп

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 63



бөтөүен дә көтмәҫтән, арттараҡ ышыҡҡа ҡуйылған аттарына йә әт кенә атланып, килгән яҡтарына сабып сығып та киттеләр...

Ошонан уң Байғөбәк егеттәре был “саҡырылмаған ҡунаҡтар”ҙы күҙҙән ысҡындырманы. Күҙәтеүселәре, төрлө тарафҡа махсус ҡуйылған яугирҙары каруандың әр аҙымын хәбәр итеп торҙо. Илселекте иҙҙермәй генә күҙәтә барып, кәрәк саҡта ябай үткенсе йә унарсы рәүешендә “осраҡлы ғына” каруансыларға тап булалар. "Сер итеп" уларҙың хәүефле юлдан барыуын әйтәләр әм үҙҙәре теләгән “уңайлы ы”на бороп ебәрәләр.

...Бына әле лә сапҡын килеп еткән: каруан Яғанды йылға ына яҡынлаша, кисеү эҙләйҙәр икән. Тау йылға ы көслө аға, тәрән дә, киң дә. Ҡаяларҙан ағып төшкән был дарья йәйге селләләрҙә лә теш ҡамаштырырлыҡ ыуыҡ. Ә хәҙерге иртә яҙҙа ул тәрән ҡар баҙы төбөнә тиң. Эҫегә өйрәнгән көньяҡ кешеләренә еңел булмаҫ йылғаны кисеү. Байғөбәк батыр егеттәре менән, иртә таңда уҡ саптырып килеп, йылғаның ғәрәптәргә ҡаршы яҡтағы ярына туҡтаны, яр буйы урмандарына ыйынды. Был тараф, – әлбиттә, уғыҙҙар биләмә е. Әммә башҡорттар ҙа күптән үҙ иткән ошо ерҙәрҙе, килешеп йәшәйҙәр, йәйләүҙәре лә бар.

Алғараҡ үтеп, Байғөбәк батыр ҡаршы яҡҡа күҙ алды. Яҙғы ташҡын әлегә ҡайтып та бөтмәгән, йылға болғана-болғана, күбекләнеп аға. Йылғаның был тәңгәле тәрән, төбө соҡор-саҡырлы, ғәрәптәр уны нисек аша сығырға уйлайҙар икән? Хәйер, быны ы башҡорттар өсөн бик тә ҡулай, ят ғәскәр менән алышырға телә әң, ошонан да уңайлы урынды табыу ҡыйын булыр. Илбаҫар ғәрәптәргә ҡарата Башҡорт хан, Башҡорт иле ҡуйған бурысты нәҡ ошонда хәл итергә кәрәк. Байғөбәктең аҙ анлы егеттәренә йылға үҙе ярҙам итер, алҡын ыуҙа күшеккән, ҡаршылыҡ күр әтә алмаған ғәскәрҙе уҡ менән анау бер ни тормаҫ. Ә теге яҡ ярҙа ҡалғандары, быны күреп, үҙҙәре лә ҡасып бөтөр...

Башҡорттар яр буйы ағаслыҡтары ара ына йәшеренеп, ҡаршы ярға килеп өйөлә барған ят каруанды өн өҙ генә, көсөргәнешле күҙәтә торҙо.

Ә теге яҡта кисеүгә әҙерләнгәндә була торған тәбиғи мәхшәр ҡупты. Ят телдә бойроҡҡа оҡшаш өҙөк-өҙөк ҡырҡа ауаздар яңғыраны, буталыш китте. Яр буйы ығы-зығы менән тулды. Быны күреп, Байғөбәк егеттәре лә фарман көтөп тыныс-ыҙлана башланы. Ул арала ғәрәптәр алты-ете кешенән торған төркөмдәргә бүленеп, нимәлер тултырылған ҙур-ҙур тире тоҡтарҙы өйрәп килтереп ыуға төшөрә башланылар. Байғөбәк батырҙың ишеткәне бар: ғәрәптәр дөйә тире енә сепрәк-сапраҡ, кейемдәрен тултырып алалар ҙа юлдарында осраған ыу дарьяларын шуларға атланып йөҙөп сығалар икән. Тик быны күргәне генә юҡ ине. Ғәрәптәр хәҙер йылғала байтаҡ инде, йәлпәк ҙур тупҡа оҡшаш ошо нәмәгә ҡорал аҫҡан биш-алты кеше атланып ала ла, ҡулдарына нимә эләгә шуның менән ишә-ишә, ҡаршы яҡҡа ынтыла. Ә аттары, дөйәләре, нишләптер, аман күренмәй. Артта ҡалдылармы икән ни? Хәйер, юҡ, ана, уларын да ҡуйы ағаслыҡ артынан йылғаға табан ҡыуалар.

Байғөбәк эргә ендәге ярҙамсы ына үҙҙәренең арттараҡ торған ғәскәри төркөмөнә барырға, уларға ғәрәптәрҙе ҡаршы алырға, уғышҡа әҙер булырға кәрәклеген әйтергә ҡушты. Яугирҙың ағаслыҡҡа инеп юғалыуы булды, Байғөбәк тағы йылға өҫтөнә күҙ алды. Бигерәк тәржибә еҙ икән дә ба а был ғәрәп тигәндәре. Үҙҙәре айырым, малдарын айырым йөҙҙөрөп алып сыҡмаҡсылар микән ни йылғаны? әләкәт эҙләйҙәрме?

Эсенә тыңҡыслап ыуыҡ саҡта кейгән кейемдәрен, башҡа сепрәк-сапраҡтарын тултырған йоморо дөйә тиреләре, башҡорттарҙың соҡоп эшләнгән бүрәнә көймәләре ымаҡ, бигерәк уйнаҡ. Көслө ағым уларҙы әйләндереп-тулғандыра, уйнаҡлай-уйнаҡлай килгән шыма шар өҫтөндәгеләр ыпырылып ыуға ҡолай, күптәрен шунда уҡ тулҡындар йота... Ә башҡорттар улай эшләмәй, йылға

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 64



кискәндә аттарынан да төшөп тормай. Эйәрҙәренә ике яҡлап эленгән тире ҡуржыҡтарына ауа өрөп тултыралар ҙа телә ә ниндәй даръяны аты менән еңел генә йөҙөп сығалар ҙа китәләр...

...Ә йылғала ҡот осҡос хәл дауам итте, йоморо көймәләрҙән боҙҙай ыуыҡҡа ҡолаған ғәрәптәрҙең ирек еҙҙән ҡысҡырып ебәреүҙәре, бәхилләшкәндәй "Алла ы әкбәр!" тигән аяныслы ауаздары ишетелә. Йылға өҫтөн ҡаплап йөҙгән аттар әсе итеп үлемесле кешнәй, дөйәләр аҡыра, уларҙың әле бере е, әле икенсе е көслө ағымға ҡаршы тора алмай, айырылып ағып китә... Улар урынына ҡаршы ярҙан яңы төркөмдәр килә...

Нисәмә сәғәт барҙы икән был мәхшәр?

Алдан сыҡҡан хәрбиҙәр асыҡ аҡланда бер аҙ туплана бирә лә, арттағыларын көтөп тә тормайынса, ары китә. Йыйылыу урындары, күрә ең, алдараҡ. Йылғаны кисеү бик оҙаҡ әм яфалы барҙы, аттар, дөйәләр, йөктәр, кешеләр ара-тирә ыу төбөнә йә артабан ағып кит әләр ҙә, кисеү туҡталманы. Теге яҡ ярҙа хәҙер ғәрәптәрҙең бик аҙы ғына тороп ҡалғайны...

Байғөбәк уҙаман уларға иҫкәрмәҫтән өжүм итеү уйынан кире ҡайтҡайны инде. Был хаҡта ул фарман көтөп ятҡан егеттәренә лә йә әтләп еткерҙе.

Әлбиттә, саҡырылмаған ҡунаҡтарҙың юлын тамам киҫеү өсөн ошонан да уңайлы шарттарҙың булыуы мөмкин түгел. Яр ыу дарья эсендә үлем менән йәнтәслим алышҡан дошманды берәм-берәм уҡка алыуҙы Байғөбәктең аҙ анлы яугирҙары ла булдыра ала. Ярға сығып өлгөргәндәрен дә шул уҡ яҙмыш көтә. Тик был күшеккән, оҙон юлдан әм боҙҙай алҡын ыуҙан хәл еҙләнгән меҫкен кешеләрҙе ҡырып алыу егетлекме ни? Башҡорттар – ил аҡсы ы, көс өҙгә, ярҙамға мохтаждарға өжүм итеү – улар йола ы түгел. Былар үҙҙәре лә уғышырға әҙерләнгәнгә оҡшамай. Тыныс ҡына үҙ эштәре менән мәшғүлдәр, юлдарын дауам итәләр. Башҡорт ере лә түгел бит әле был, уғыҙҙарҙыҡы. Хәйер, уғыҙ менән башҡорт ике араға тимер кәртә ҡуймаған, бер-бере енә иркен йөрөшәләр, йәйләүҙәргә мал да ҡыуышалар. Тик шулай ҙа уғыҙ ерендә тиктәҫтән генә ғауға ҡуптарыу ярап етмәҫ. Күҙәтергә кәрәк уларҙы тағы ла, маҡсаттарын асыҡларға. Алда хәҙер Башҡорт иле йәйрәп ята, унда ғәрәптәр үҙҙәрен нисек тотор? Бына Яйыҡҡа ла күп ҡалмай, шунда, бәлки, бары ы хәл ителер...

*(Аҙағы бар.)*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 65





Кәтибә
КИНЙӘБУЛАТОВА

## Ғүмер түгел, бер көн үткәндәй...

Барам әле, барам!
Байрамдарҙа
Күңелдәрем үҫеп киткәндәй.
Йылдар, айҙар йүгерешә, гүйә,
Ғүмер түгел, бер көн үткәндәй.

Шулай хис итәм мин ысын-ихлас,
Асып ҡуйып әлеге йөрәкте,
Ғүмерҙәрем, гүйә, рәхәт үткән,
Өҙмәгән дә тормош үҙәкте,
Ә бирҙе бит, бирҙе кәрәкте!..

## Мин мин түгел...

Өйҙә бөттө тәкәт,
Тышта фәкәт
Аҡ ҡар ғына
Мине йыуата.
Баҫҡанда ла ҡарға,
Баҡҡанда ла нурға
Уй-хистәрем йәнде
Уята.
Сатнап ярыла аңым,
Тирә-яғым
Утлы өйөрмәләр яуҙыра.

*Кәтибә Кинйәбулатова Силәбе өлкә енең Арғаяш районында тыуған. Башҡорт дәүләт педагогия институтын, Мәскәүҙә Юғары әҙәби курстарҙы тамамлай. “Әҙәби Башҡортостан” (хәҙерге “Ағиҙел”) журналы редакция ында эшләй. “Башҡортостан ҡыҙы” журналының тәүге баш мөхәррире була. Башҡорт әм рус телдәрендә нәшер ителгән бик күп китаптар авторы.*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 66



*Күпме ғүмер йәшәп,*
*Йәшәлмәгән төҫлө,*
*Юҡ иткәндәй барлыҡ*
*Барҙы ла.*
*Моңдарым илаймы,*
*Бер ыныҡ ҡураймы,–*
*Ҡайғы-хәсрәт алды*
*Ҡосаҡҡа.*
*Унан атты-бәрҙе,*
*Әрнетеп бәғерҙе,*
*Мәңге үнмәҫ*
*Янар усаҡҡа.*
*Атылдым мин уҡтай,*
*ап- ау сыҡҡас уттан,*
*Өтөлмәне тәнем,*
*Тере ҡалды йәнем.*
*Хатта көймәне лә*
*Бер бөртөк сәстәрем.*
*Түгелмәне ниңә*
*Түгелер йәштәрем?*
*Мин мин түгел хәҙер*
*(Ниндәй көс үҙемдә),*
*Түгелеп йырлайым –*
*Тыуған яҡ телемдә...*
*Тәгәрләп аунауым*
*Тыуған яҡ еремдә.*
*Шул саҡ инде ғәжәп,*
*Булды ниндәй сәбәп...*
*Ҡотҡарған икән дә*
*Тыуған яҡ моңдарым,*
*Туған тел моңдарым!*

## ***Кил ин миңә!***

Тамара Ғәниеваға

*Кил ин, әйҙә, кил дә серҙәреңде*
*Ауҙар миңә, юҡ, юҡ, тартынма.*
*Тура ын яр, йәшермәйсә генә,*
*Шик-шөб әң ҡуй пәрҙә артына.*
*Кил ин миңә – төнмө, айлы кисме,*
*Айлы кистә серҙәр килешер,*
*Беҙҙең яҡта ап-аҡ ҡайындар ҙа*
*Инде ихлас серҙәр бүлешер.*
*Кемгә лә бит хәҙер ышаныс юҡ,*
*Тип әйтмә ин, сыҙа бар ына,*
*Хәйер, мин дә өҙгөләнәм бик йыш*
*индәй тоғро дуҫтар аҙына.*

## ***Уҙған ғүмер***

*Ҡай ы ваҡыт ни ҡылманың*
*Миңә, яҙмыш?*
*Нисә тапҡыр ҡанатымдан*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 67



*Ҡайырҙың ин…*
*Йәшлек юлын йүгереп елеп*
*Үткән саҡта,*
*Йәндәй күргән дуҫтарымдан*
*Айырҙың ин..*
*Ҡайҙа хәҙер йән дуҫтарым –*
*Хәйәт, Йы ан?*
*Үкенестәр тауҙай инде,*
*Әгәр йый аң…*
*Фани ғына был донъяны*
*Аңлап ҡара…*
*Уҙған ғүмер – күҙ асып күҙ*
*Йомған ара.*

## *Мөхәббәт*

*Май ямғыры ибелә генә түгел,*
*Утлы йәшен телә донъяны.*
*Тәбиғәттең үҙ шөғөлө шөғөл:*
*Әллә көлдө, әллә иланы…*
*Нимә булды, тимә, был күктәргә,*
*Болот-болот сәсен тағат а,*
*Гүйә, мин ул, берсә көлә, илай,*
*Мөхәббәтте сарсап ярат а.*

## *Тормошта мин ябай кеше*

*Тормошта мин ябай уҡытыусы,*
*Ябай әсәй, ябай бер кеше.*
*Йөрәгемдә барлыҡ изгелекте*
*Бүлешеүем булыр бар эшем.*

*Нисә тапҡыр, нисә ҡабат инде*
*Әсәй, өләсәй мин – өйөнөс!*
*Тик ғүмерҙәр ыуҙай аҡты китте,*
*Ғүмер үтеүҙәре – көйөнөс..*

*Юҡ, юҡ!*
*Зин ар, зарлана, тимәгеҙ,*
*Бик күптәргә терәк инем бит,*
*Атай ыҙға – атай, әсәй еҙгә – әсәй,*
*ыу- ауалай кәрәк инем бит.*

*Ҡайғы-шатлыҡтары балаларҙың*
*Йөрәгемә еңгән-тулышҡан.*
*Әҙәм генә белмәй, үҙем беләм*
*Күпме түҙем, сабырлыктар кәрәк,*
*Инәй өлөшө төш ә яҙмышҡа.*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 68





**Мөхәммәт**
**ЗАКИРОВ**

## *Таныуҙары ҡиммәт*

*Баймаҡта бит ат башындай алтын*
*Тырма ына килеп тығылғас:*
*Ҡатлы-ҡатлы үгенеп, ағай уны*
*Йыраҡҡараҡ алып томорған.*

*Шул ук алтын икенсегә тырма*
*Тешен ҡырған, ҡә әр уҡҡыры.*
*Ағай үҙен үккән: ҡарабыраҡ*
*Йөрөү кәрәк, күҙең сыҡҡыры!..*

*Ҡайҙан бел ен алдарында донъя*
*Алтын төҫтәр менән балҡырҙы.*
*… Табыуҙары ан ат булма а ла,*
*Таныуҙары ҡиммәт алтынды.*

## *уңғы яңылыҡтар*

*Өфөләрҙә аҙып-туҙып йөрөгән*
*Бик күптәр, ти, башын юйғандар.*
*Хөппөниса әтәсен дә кисә*
*Күршеләре тотоп уйғандар.*

***

*Бер ҡара аң, бәхетле лә кеүек*
*инең менән бергә саҡта беҙ.*
*Тик икебеҙ ике хәкикәт беҙ,*
*Тик икебеҙ ике хата беҙ.*

*Мөхәммәт Закиров Ҡариҙел районында тыуып үҫкән. БДУ-ны тамамлай. Ғүмере буйы журналистикаға хеҙмәт итә. Әле “Ҡыҙыл таң” гәзите редакция ында эшләй.*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 69



*Ни айәт, мин азат “Был донъяла
Ник йәшәйем?” тигән ҡанундан.
Матурлыҡҡа  орау менән түгел,
 ораузар ыҙ ғына табынам.*

*Тоям ҡайтмаç өсөн үткәнлеген
Ҡабатланмаç  әр бер миҙгелдең.
Атын тоталмаған малай кеүек,
Тоталманым ваҡыт теҙгенен.*

*Алышына йылдың дүрт миҙгеле,
Ә офоҡта шул уҡ болоттар…
Ҡәҙерлерәк була бара  аман
 инең менән бергә минуттар.*

*Бер ҡара аң, бәхетле лә кеүек
 инең менән бергә саҡта беҙ.
Айырылмаç ике хәҡиҡәт беҙ,
Ҡушылалмаç ике хата беҙ.*

***

*Яндыра ым килә мөхәббәтте –
 аман  ыҙлап торған ярамды.
Ул  ыҙлау ҙа юҡҡа сыға икән,
Унан  уң мин иçән ҡаламмы?!*

*Ул  ыҙлау ҙа юҡҡа  сыға икән,–
Ҡан – йөрөштә, күкрәк тын ала,–
Мөхәббәт еҙ ҡалған  йөрәк нишләр,
Унан кем мин яҡты донъяла?*

*Онотор оң. Эйе, был донъяла
Мине онотоу ғына — ерунда.
Ҡатын-ҡыҙ ул хатта үҙен юя
Крутойыраҡ ирҙең ҡулында.*

*Майҙай иреп сыға   ымаҡ юҡҡа
Матурлығы  ыҡҡан наҙҙарҙан.
… Ә бәхеттең тик яҙғаны яҙған,
Яҙмағаны мәңге яҙмаған.*

## ***еҙҙән башҡа…***

*Назар ҡарттар, Хәким ҡарттар, Муса ҡарттар*,–
 еҙҙән башҡа оса  еҙҙең аттар.
 ағыналыр  еҙҙе тыуған яҡтар,
 еҙҙең эйәрҙәрҙә юҡ алмаштар.*

* еҙҙән башҡа оса  еҙҙең аттар,
Улар кискән ауыр  уғыштарҙы.
А , елдәре йөҙҙәремә ҡағыла,
 улышыма бәрелә  улыштары.*

---

**Шағирҙар Назар Нәжми, Хәким Ғиләжев, Муса Ғәли.*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 70



*еҙҙең ҡулдан, гүйә, ысҡынмаған*
*Көмөш теҙген, алтын йүгәндәр.*
*оҡланырлыҡ булған еҙҙең ғүмер,*
*Их, күрерлек булған күргәндәр.*

*Күңелдәрҙең яҙғы күкрәүҙәре,*
*Бөйөк еңеүҙәрҙең даны бар.*
*Шиңә белмәҫ “Ҡыҙыл үләндәр” бар**,*
*әм “Мәңгелек уттар” йәне бар***.*

*Мәңгелеккә ашты еҙҙең ғүмер*
*Үҙе менән алып үткәндәрҙе.*
*еҙҙең хаҡта япраҡ ҡоя-ҡоя*
*өйләй тағы Өфө йүкәләре.****

## Ҡариҙелдең уйсан нараттары

*Ҡариҙелдең ташлы ярҙары –*
*Йәшлегемдең алтын таңдары.*
*Иҙел буйҙарының зәңгәрлеге*
*Күҙҙәремдә, ахыры, ҡалманы.*

*Матурлығы ҡырыҫ,*
*Ҡырыҫлығы*
*Менән гүзәл ошо тарафтар.*
*Ҡанаттарын, ана, эңерҙәргә*
*Элеккесә йәйгән нараттар.*

*Ул нараттар мине онотмаҫтар,*
*Улар аҡлай йәшлек ҡарашымды.*
*еҙгә ҡайттым тағы, нараттар, тип*
*Яндарына әллә бара ымы?..*

*Уйсан нараттары Ҡариҙелдең,*
*Зәңгәр Иҙелле еҙ, ерле, күкле.*
*Мине лә бер юҡ ыныр ығыҙ ҙа…*
*Мин йырлайым еҙҙең мәңгелекте.*

## Аҡ күбәләк

*Мәңге үтмәҫ кеүек был төн:*
*Еп табал аң – аҫылын.*
*Таянысмы тапмай, ниңә*
*Бәргеләнә аҡылым.*

*Мине бер кем ҡотҡаралмай,–*
*әм, әлбиттә, үҙем дә.*
*Күңелдәрем тулғанғалыр,*
*Кипмәй йәштәр күҙемдә.*

---

*** Муса Ғәли поэма ы.*
**** Назар Нәжми шиғырҙары.*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 71



*Аҡ күбәләк – ҡара төндә,*
*Аҡ күбәләк, әй, йәнем.*
*Талпына утҡа, утында*
*Аҙ янғандай донъяның.*

*Уттарға инмәксе ҡабат*
*Ила и сәғәттәрҙә.*
*Ҡабат уттарға инергә*
*Юҡ кеүек сәбәптәр ҙә.*

*Офоҡтарҙа болоттарға*
*үрән таң алы ҡаба.*
*Ямғыр яуа. Тәмәке юҡ:*
*Был – йәшәү тип атала.*

## *Еҫле кәзә тәкә е*

*Үҫмер саҡта киҫкен торҙо*
*Мөхәббәт мәсьәлә е.*
*Күҙ сибәргә төшә... Үҙең –*
*Еҫле кәзә тәкә е.*

*Тәмәке ен дә ҡаба ың,*
*Теге ен дә уртлай ың.*
*Шулай иткәс, үҙ-үҙеңде*
*Егет итеп сутлай ың.*

*Оҙата ың. үҙ ҡата ың*
*Үҙеңсә етди генә.*
*Аптырай ың: матур ҡыҙҙың*
*Иҫе лә китмәй иңә.*

*Кистәрен ҡыҙҙар ҡыуала,*
*Көндөҙөн – йөҙләп быҙау.*
*Нисәмә эләгә яҙҙы*
*Табағас, уклау, ижау.*

*Үҙең белмәй ең нишләргә*
*Ҡыҙ менән икәү ҡалғас.*
*Ай нурлы ауыл төнөндә*
*Йөрәктәр яна янғас...*

*Ҡайҙа ҡалды ул ваҡыттар,*
*Ҡайҙа ҡалды ул кистәр?*
*Ярай, аман иҫән әле,*
*Әл дә иҫән ул хистәр.*

*Ғүмер буйы быҙау булдым,*
*Быҙау көткәнгә микән?*
*Бары ы ла ағындыра –*
*Ғүмер үткәнгә микән?*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 72



## *А ,  ыҙылған ҡаштар…*

*Килмә яҡын!..*
*А ,  ин гона лы ың.*
*Хоҙай ярлыҡамаҫ гона ты.*
*Беҙҙе яҙмыш үҙе осраштырҙы –*
*Мөхәббәткә беҙҙән йыраҡмы?*

*Килә күрмә, инмә, ҡалмай   инән*
*Эйәрерҙәр имеш-мимештәр.*
*Мөхәббәттең  сафлығынмы  ағынып*
*Сылтырайҙар көмөш инештәр.*

*Әйҙә, йүгерәйек  етәкләшеп,*
*Ысыҡ кисеп, ағым  ыуҙарға.*
*Хоҙай ярлыҡамаҫ гона  булмаҫ –*
*Бәхеткә тик кәрәк юрарға.*

*Ниндәй гона ? Мин  аташам, ахыры,*
*Әле нишләгән беҙ ысында?*
*Минең ҡулдар  инең ҡулда икән,*
*инекеләр – минең ҡулымда.*

*Мине дөрөҫ аңла  ин нисек тә:*
*Шартлылыҡтар менән кәм етмә.*
*Әйтелмәгән беҙҙең  өйөү  үҙен*
*Күктең ете ҡаты ишетә.*

*Матурлығың…*
*Ниндәй ул матурлыҡ,*
*Уны ниңә булмай аңлатып?*
*Татлы төндәр бүләк  итә кеүек*
*Күпме ир-егетте ҡаратып.*

*А ,  ыҙылған ҡаштар!*
*Нескә сәнғәт.*
*А , бер төнлөк уҙғын мөхәббәт.*
*иңә ниңә кәрәк булды икән*
*Мең ғазапҡа дусар был рәхәт?*

*Күҙҙәреңдән түгеп  ҡайнар йәштәр,*
*Йөрәгеңде асма бер кемгә:*
*Янғас, бары ы бергә дөрләп ян ын*
*Гона  исеме алған бер төндә…*

*Быңдай түгел инең. Нишләттеләр?*
*Сайкала ың барған ереңдән.*
*Ағым  ыуы алып китмәк була*
*ыуҙа шулай талды биленән.*

*А ,  ыуҙарҙан утҡа ташлана ың,*
*А , уттарҙа ут ыҙ яна ың…*
*Нисек кенә итеп дауалай ы*
*Күңелеңдең эҙ еҙ яра ын.*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 73





**Зө рә**
**АЛТЫНБАЕВА**

## *Ҡайҙа минең Та ирым?!*

*Ҡартайғансы берәй күрмәмме, тип*
*Йәшәнем мин ерҙә ҡаңғырып.*
*Яҙмышҡайым, яҙғаныңды уҡы:*
*Ҡайҙа миңә тигән Та ирың?*

*Та ир – Зө рә.*
*Ике ғашиҡ йәндең*
*Мөхәббәте – тарих битендә.*
*Бер-бере е өсөн тыу алар ҙа,*
*Яҙмыштары яңылыш кителгән.*

*Мин дә Та ирымды таба алманым.*
*Яңғыҙ яндым йондоҙ шикелле.*
*Үр әләнгән яҙмыш аҙаштырғас,*
*Табыуҙарым инде икеле.*

## *Хәҡиҡәт*

*Алданылар.*
*Тағы алданылар.*
*Көткән күңел кинәт кителде.*
*Дөрөҫлөк уң ҡасан өҫтөн булыр?*
*Шуны көтөп ғүмер ителде.*

*Уңға баҫ ам, уңда алданылар.*
*ул яҡта ла ялған ялманы.*
*Төрөн ә лә ялған матур төҫкә,*
*Күңел ҡабул итә алманы.*

*Зө рә Алтынбаева Мәсетле районының Ләмәҙтамаҡ ауылында тыуған. Мәсәғүт педучилище ын, БДУ-ны тамамлай. “Ватандаш” журналы редакция ында бүлек мөхәррире булып эшләй.*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 74



*Хәкикәтте андыҡ төптәренә*
*Йәшерҙеләр –*
*Бер кем күрмә ен.*
*Ә ул имән булып ҡалҡып сыҡты,*
*Ай-ҡояшҡа табан үрләне.*

*Бер алдан аң, ышаныуы ҡыйын,*
*Ялған төҫлө яҙған яҙмыш та.*
*Күңел генә хәкиҡәтте эҙләй*
*Ялғанлыкты еңер уҙмышта.*

## Өләсәйҙе ағынам

*Ҡоймаҡ бешкән,*
*ары майға төшкән.*
*Шыжлап тора, ана, самауыр.*
*Мәтрүшкәле сәйҙән хуш еҫ аңҡый,*
*Тик өләсәй генә юҡ, ауыр.*

*Өләсәйҙең иркә ҡосағында*
*Татып үҫтек күңел наҙҙарын.*
*Тейҙермәне беҙгә ҡыш алҡынын,*
*Күркәм итте килер яҙҙарҙы.*

*Уятканы иртән иркә бағып,*
*Арҡаларҙан өйөп ҡалыуы,*
*Өҫтәлдәргә тәмле-татлы ҡуйып,*
*Беҙҙе сәйгә көтөп алыуы…*

*Тороп ҡалды изге доға укып*
*Сығып киткән саҡта юлдарға.*
*әр бер үҙе, изге доға төҫлө,*
*Оҙатып бара оҙон юлдарға.*

*Хәҙер инде үҙем өләсәй мин,*
*Әммә ине аман ағынам.*
*Күңелдәге изге орлоктарың*
*Емеш бирә, ана, тағы ла.*
*Доғаларың күсте телдәремә…*
*Ейәндәрҙең ҡунды иңдәренә.*
*Бәхет юллап ҡанат ҡағына.*

## Хушлашмайым

*Хушлашмайым әле йәшлек менән,*
*Ниҙәр генә, нимә булма ын.*
*Айырылыш аҡ, иҙәм хистәремдең*
*Уйылып-уйылып ҡына туҙа ын.*

*Әллә ҡайҙа саҡыра етеҙ юлдар,*
*Араларға итә миҙгелдәр.*
*Ә мин боролам да кире ҡайтам,*
*Устарымда әлегә теҙгендәр.*

*Барса юлдар йәшлегемә илтә,*
*Уртаҡ таңыбыҙҙы ағынам.*
*Минең әле кәрем үрелмәгән*
*Бары ын башлар өсөн яңынан.*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 75



## Тыуған йортҡа

*Тыуған йортом – йәтим бала төҫлө,*
*Баға миңә ҡапҡа төбөнән.*
*Таушал а ла, ҡөҙрәткәйе көслө,*
*Тарта мине аман үҙенә.*

*Тәҙрә биҙәктәре төҫөн юйған –*
*үрәнләнгән микән ағыштан?*
*Ҡартлығымда яңғыҙ итте, тиеп*
*Үпкәләүе микән яҙмышҡа?!*

*Атай йорто аман көтә беҙҙе.*
*Көтә көҙөн, көтә ҡыштарын.*
*Тел осонда тора ҡәртнәйемдең*
*Тел йоторлоҡ тәмле аштары.*

*Тыуған йорттоң туңған тәҙрә енән*
*Бала сағым ҡарай үрелеп.*
*Ике ятып бер төшөмә ин ә*
*Ошондай ҙа көндәр килере...*

## Яралы өйөү

*Йоҙроҡ саҡлы ғына йөрәгемә*
*ыйған күпме өйөү-ғазаптар,*
*Мөхәббәттең унда наҙ, ләззәте*
*әм хәсрәте өткән аҙаҡтан.*

*Уртаҡ ине бит уң өйөүебеҙ,*
*Ижадсы ы инек икебеҙ.*
*Нисек тырыш аң да, ҡоршап булмай,*
*Ялғап булмай уның китеген.*

*Арып албырғаған юлсы төҫлө,*
*Ғүмер инде кискә ауышҡан.*
*Яҙмышымдың шундай бер мәле был:*
*өйөү менән нәфрәт ҡауышҡан.*

## Яралы ярҙар

*Артыҡ текә булғанғамы икән,*
*Ташлап киткән йылға ярҙарын.*
*алҡын ҡыштар йылға урынына*
*Түшәгәндәр ап-аҡ ҡарҙарын.*

*Ваҡыт – табип,*
*Яраларҙы ялай.*
*Аҡ ҡарҙар ҙа бер саҡ ҡаралыр.*
*Йылға инде яңы ярҙар тапҡан,*
*Иҫке ярҙар ғына яралы.*
*Иҫке ярҙар аман яралы...*

## Көҙ килгәндә

*Алмалары – алда,*
*Хөрмәләре – телдә,*
*Килә ергә көҙҙәр иҙерәп.*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 76



*Тик ниңәлер күңел болоҡ оуҙа –*
*Яҙ килгәнен көтә тиҙерәк.*

*Йыраҡ әле аҡ томанлы яҙҙар,*
*алҡын ҡыштар ята арала.*
*Ә күңелдә, тере ҡуҙын өрөп,*
*Ғазаплы бер өмөт ярала…*

## Хыялыйҙар итте хыялдар

*Бер көн килеп япа-яңғыҙ ҡалдым:*
*Ташлап китте барса хыялдар.*
*Зәңгәр күгем ҡара болот төҫлө,*
*Донъя оро төҫкә буялған.*

*Ҡояш та юҡ күктә,*
*йондоҙҙар ҙа.*
*Таянырға ҡайҙа хыялым?*
*Тирә-яҡҡа ҡарарға ла ҡурҡам,*
*Үҙ-үҙемдән хатта оялып.*

*Ҡайҙа булған ал ыу, ҡыҙыл төҫтәр?*
*Бары ы ла ҡапыл уңғанмы?*
*Йөрәктәге аҡ ҡанатлы хыял*
*ыуыҡтарҙа өшөп туңғанмы?*

*Эй, хыялдар, ниңә ярты юлда*
*Яңғыҙымды ташлап киттегеҙ!*
*Мин бит еҙ еҙ ҡанат ыҙ ҡош төҫлө,*
*Ниңә хыялыйҙар иттегеҙ?!*

## Бала

*Балам, тиеп йәшәй әсә ерҙә,*
*Бала бағыу – уның асылы.*
*Ҡатын-ҡыҙҙың барса гүзәллеге*
*Әсә булғас китә асылып.*

*Бала көтөп туғыҙ ай буйына*
*Тулҡынлана әр бер улышы.*
*Ә бала ы тыуғас, бар донъяны*
*Солғап ала уның булмышы.*

*Аҡ яландай бала күңеленә*
*Яға әсә матур биҙәктәр.*
*Иң матурын айлай, иң сағыуын,*
*Уңма ын, тип ҡурсый аҙаҡтан.*

*Үҫеп еткән бала – барыбер бала,*
*әр аҙымы өсөн ҡыуана.*
*Бала күңеле далаларға күс ә,*
*Бәлиғ булды, тиеп йыуана.*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 77





## Мар. СӘЛИМ

# САТИРИК ПЕНСИЯ-ХА СЫ-ХА-ХА!

*(Автопародия, йәғни үҙеңдән үҙең көлөү)*

**Юбилей табынында ҡатнашыусылар:**

*Юбилярҙың Важная персона, Эшем эйә∞е, Аҡыллы баш, Ялағаев, Бюрократов, Самогонсы Сәмиғә, Ығышбай, Хәмершин, Ғәйбәтбикә, Тиҫкәребай ∞.б. сатирик геройҙары.*

**Юбилей табынында ҡатнашмаусы:**

*Юбиляр үҙе.*

**Юбилярҙың сатирик геройҙары шау-гөр килеп байрамға әҙерләнә. Кемдер гармун тарта, кемдер боғаҙ йырта. Бере е ҡурайҙа уйнай, икенсе е бейей-бейей таҡмаҡлай.**

**Самогонсы Сәмиғә.** Бөгөн байрам, бөгөн туй!

**Хәмершин.** алып ебәр – эсеп ҡуй!

**Эшем эйә е.** Уйнайыҡ та көләйек...

**Ялағаев**. Файҙа ы күп – беләйек.

**Аҡыллы баш.** Йырлап ал да бейеп ҡуй.

**Ғәйбәтбикә.** Бөгөн байрам, бөгөн туй!

**Бюрократов.** Ни айәт, беҙҙең урамға ла байрам килде!

**Тиҫкәребай.** Бындай бәхетте күрер көн дә бар икән!

**Ығышбай.** Ура, азатлыҡ! Хөрриәт!

**Хәмершин.** Ҡотолабыҙ! Сатирик пенсия-ха сы-ха-ха!

**Сәмиғә** *(таҡмаҡлап).*

*Таянабыҙ бөйөргә лә*
*Тотонабыҙ бейергә.*
*Беҙгә лә, ай, яҙған икән*
*Был көндәрҙе күрергә!*

**Сатирик геройҙар** (*уға ҡушылып йырлай-йырлай бейейҙәр).*

*Вәт, маладис ин, сатирик,*
*Пенсияға китә ең.*
*Пенсияларға китә ең,*
*Бигерәк шәп итә ең!*

**Важная персона инеп, уларҙы туҡтата.**

**Важная персона.** Туҡтағыҙ! Сто-оп!

**Эшем эйә е.** ин кем? Беҙҙе туҡтатырға ни хаҡың бар?!

**Важная персона.** Белмә әң бел, ҡустым: мин – Важная персона. Сатирик Мар. Сәлимдең особо важный геройы. ”Важная персона” исемле китабынан килеп сыҡтым.

---

*Мар. Сәлим (Марсель Сәлимов) 1949 йылдың 3 ғинуарында Борай районы Сәйет-Көрйә ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлап, армияла хеҙмәт иткәс, “ әнәк” журналы редакция ында эшләй башлай. Әлеге көндә шул баҫмала баш мөхәррир. Егерменән ашыу китап әм сатирик ике томлыҡ (“Аҡыллы баш, тиле сәс”, “Көлкө тоҡсайы”) авторы. Юмористарҙың Халыҡ-ара “Алеко” премия ы (Болгария) лауреаты. Ҡәләмдәшебеҙҙе юбилейы менән ҡотлайбыҙ!*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 78



**Эшем эйә е.** Маҡтансыҡ! Между прочим, ул минең хаҡта ла китап яҙған: ”Эшем эйә е”.

**Важная персона.** Ҡолағыңа киртеп ҡуй, ҡустым: ин Эшем эйә е бул аң, мин — Важная персона! Аңланыңмы?

**Эшем эйә е шымып ҡала.**

**Ялағаев** *(Важная персона алдында тәрилкә тотоп).* Мин аңланым, иптәш Важная персона әфәнде. Бик яҡшы аңланым еҙҙе.

**Важная персона.** Мине яҡшы аңлауың менән ҡотлайым, иптәш кем...

**Ялағаев.** Ял... Ял... ағаев булам мин.

**Важная персона.** Ял-ял-ағаев... Ҡыҙыҡ фамилия. Шулай ҙа күңелгә ятышлы. Ошо минуттан ин минең өсөн просто Ялағаев булыр ың. Аңланыңмы?

**Ялағаев.** Аңламаған ҡайҙа ул, иптәш Важная персона әфәнде! Ялағаев — сатирик Мар. Сәлимдең үлеп яратҡан геройы.

**Ығышбай.** ине генә түгел, бөтәбеҙҙе лә ярата ул. Шуға күрә беҙгә тынғылыҡ бирмәй. Әле беребеҙҙе осло ҡәләме осона элеп ала, әле икенсебеҙҙе « әнәк» менән елкеп ала.

**Хәмершин.** Ә минең турала игеҙ йәштән үк шиғыр яҙа башлағайны, аман яҙып туйғаны юҡ.

**Ғәйбәтбикә.** Туя белмәй — тимәк, убыр! Бисә е аҙыҡ еткерә алмай аҙапланалыр инде, хи-хи-хи.

**Хәмершин.** Дөрөҫ өйләй ең, Ғәйбәтбикә. Хәҙерге заманда ашауға ҡарағанда эсеү ос оҙға төшә. Шуға мин аҙыҡтүлеккә аҡса әрәм итмәйем, эсәм генә!

**Сәмиғә.** Эйе, Хәмершин, минең арҡала типтереп йәшәй ең. Ә бит мине белмәгән кеше юҡ: Самогонсы Сәмиғә. *(Таҡмаҡлап.)*

*Бөтә е лә таныр тора,*
*Хәмершиндар табып тора,*
*Самогоным тамып тора,*
*Первый сорты яныр тора...*

**Эшем эйә е.** Туҡта әле, Сәмиғә, улай бик ирәйеп китмә. Был сатирик — бөтәбеҙҙең дә уртаҡ ата ы. Ул яҙған хикәйә әм юморескаларҙағы, шиғыр әм мәҫәлдәрҙәге, скетч әм интермедияларҙағы, повесть әм поэмаларҙағы, комедия әм драмаларҙағы геройҙарҙы бергә йый аң, сәхнәгә генә түгел, сәхнә артына ла, тамаша залына ла, иҙән аҫтына ла, түшәм өҫтөнә лә ыйҙырып бөтөрөп булмаҫ.

**Бюрократов.** Сәпсим наҙайыл инде ул беҙгә. Иркенләп йәшәргә ирек бирмәй.

**Хәмершин.** Нисә йыл буйына мине мыҫҡыллап яҙа. Сыҙар әмәл ҡалманы.

**Ялағаев.** Ә мине, тәрилкә тоттороп, кемдәр алдында ғына теҙләндермәне!

**Ығышбай**. Минең хаҡта нимә генә яҙманы! Ығышбай — эт ялҡауы, имеш: бер аяғын күтәргәнсе, икенсе ен эт ашай... Әйтер ең, мин эт аҫрайым. Эт түгел, үҙемде ҡарарға ла иренәм әле!

**Ғәйбәтбикә.** Рәхәтләнеп, ауыҙ тултырып ғәйбәт өйләр хәл юҡ, ҡәләме осона эләктерә лә ҡуя.

**Хәмершин.** Ауыҙын Бәләбәй араҡы ынан бушаған шешә шикелле йәйеп, беҙҙән көлөргә генә тора.

**Важная персона.** Бына хәҙер үҙенән көләйек. Ха-ха-ха!

**Ялағаев.** Көлөр өсөн сәбәп булды — сатирикка алтмыш тулды!

**Эшем эйә е.** Ура! Сатирик пенсия-ха сы-ха-ха!

**Бөтә е лә шарҡылдап көлә.**
**Ығышбай ғына көлмәй.**

**Бюрократов.** Ә ин, Ығышбай, ниңә көлмәй ең?

**Ығышбай.** Көлөү — етди эш. Ә мин эш өймәйем. *(Ситкә китеп, бәләкәй мендәренә уҙылып ята.)*

**Аҡыллы баш.** Йоҡла ын әйҙә. Ялҡауға ла ял кәрәк.

**Эшем эйә е.** Ә беҙ рәхәтләнеп байрам итәйек!

**Сатирик геройҙар** *(таҡмаҡлап).*

*Күп йәшәнек дер ҡалтырап,*
*Ҡурҡа-ҡурҡа " әнәк"тән.*
*" әнәк" башын күптән ялға*
*Оҙатырға кәрәккән!*

**Көлә-көлә бейейҙәр.**

**Важная персона** *(уларҙы тыйып).* Сто-оп! еҙ нимә ”ихахай” ҙа

”михахай”?! Беҙҙең алда особо важный эш тора.

**Ялаҕаев.** Мин әҙер, иптәш Важная персона әфәнде. Ни бойора ыҕыҙ?

**Ғәйбәтбикә.** Ниндәй эш хаҡында өйләй егеҙ? Хәҙер бөтә донъяға таратып сығам.

**Хәмершин.** Важный эште... *(Боғаҙына сиртеп.)* Бынан башлау хәйерле.

**Сәмиғә.** Бер сирек етерме, Хәмершин?

**Ығышбай.** Ашыҡмағыҙ. Эш айыу түгел, урманға ҡасмаҫ. *(Боролоп ята.)*

**Эшем эйә е.** Ә шулай ҙа нимә эшләйбеҙ?

**Важная персона.** Сатирикты пенсияха сы-ха-хайлау шатлығын тантаналы рәүештә билдәләп үтеү мотлаҡ. Тик юбилейҙы юбилейҙарса юбилейлаштырыу алдынан особо важный мәсьәләне асыҡларға кәрәк: кем ул юбиляр?

**Бюрократов.** Юбиляр, кем бул а ла, шәп кеше инде ул.

**Тиҫкәребай.** Юҡ шул. Был юбиляр "Шәп кеше"нең авторы ғына. Ә шәп кеше е — мин!

**Эшем эйә е.** Шулай ҙа ул — әйбәт ағай.

**Аҡыллы баш.** Путёвый бабай!

**Хәмершин.** Крутой ҡоҙа!

**Бюрократов.** Башлы бажа!

**Ялағаев.** Зәмичәтельнәй еҙнә!

**Сәмиғә.** Игелекле ир!

**Ғәйбәтбикә.** Нисауа ғына любовник...

**Эшем эйә е.** Любовник?

**Ғәйбәтбикә.** Эйе, любовник. Йәғни үҙебеҙсә, саф башҡортса итеп әйткәндә... э-э... *(Тотлоғоп ҡала.)*

**Эшем эйә е.** Йә, йә, әйт башҡортса!

**Бюрократов.** Ысынлап та, башҡортса нисек була ул?

**Ғәйбәтбикә.** Бер нисек тә булмай! Сөнки башҡорттарҙа любовниктар юҡ, любовницалар ғына бар — өйәркәләр то есть...

**Сәмиғә.** Ул бит элек шулай ине. Ә хәҙер яңы башҡорттар барлыҡҡа килгәс, любовниктар ҙа бар.

**Бюрократов.** Үҙҙәре булғас, тимәк, уларҙың башҡортса атамалары ла булырға тейеш.

**Эшем эйә е.** Әйҙә, Рәшит Шәкүрҙән орайыҡ. Яңы терминдар комиссия ы рәйесе бит ул, белә торғандыр.

**Аҡыллы баш.** Бер кемдән дә орарға кәрәкмәй. Үҙем әйтәм. "Любовник" башҡортса " өйәрмән" була.

**Бюрократов.** Ысынлап та, "көйәрмән" үҙе булғас, нишләп әле " өйәрмән" үҙе булмаҫҡа тейеш?!

**Эшем эйә е.** Афарин, Аҡыллы баш! Сатирик "тиле сәс" тип көл ә лә, сәстәрең дә аҡыллы инең.

**Важная персона.** Ярай, етте. "Аҡыллы баш, тиле сәс"те үҙ юбилейында маҡтарбыҙ. Әле алдыбыҙҙа торған важный мәсьәләне хәл итәйек.

**Эшем эйә е.** әм дә ошо важный мәсьәләне хәл итеүҙе дауам итеп, йәнә шуны әйтәйек: юбилярыбыҙ — настоящий өйәрмән. Сөнки ул юмор өйә, көлкө ярата.

**Бюрократов.** Көләсмән, тимәк.

**Эшем эйә е.** Эйе, был көләсмәнде хәҙер республикала ғына түгел, бөтә Рәсәйҙә, хатта сит илдә лә беләләр. Сөнки ул билдәле, күренекле, данлыҡлы...

**Важная персона.** Сто-оп! Беренсенән, әлегә бында билдәле, күренекле, данлыҡлы кеше берәү генә — мин генә.

**Сәмиғә.** е, Алланың ҡашҡа тәкә е!

**Ялағаев.** Иптәш Важная персона әфәнде хаҡлы. Сөнки сатирик үҙе уны шундай важный итеп тыуҙырған.

**Хәмершин.** Үҙ башына, ха-ха!

**Важная персона.** Икенсенән, иптәштәр-әфәнделәр, хәҙер донъя ”билдәле, күренекле, данлыҡлы”лар менән тулған.

**Ялағаев.** Шулай булғас, нечего уны ”билдәле, күренекле, данлыҡлы” тип әйтергә!

**Важная персона.** Эйе, бик билдә еҙ, бик күренек еҙ, дан ыҙ, мал ыҙ...

**Эшем эйә е.** Ни өсөн ”мал ыҙ”?

**Важная персона.** Өйөндә эсе эскә йәбешкән бер баш тараҡандан башҡа малы юҡ сөнки. Ха-ха-ха!

**Ғәйбәтбикә.** Ә мин, уның өс ҡатлы кәттиже бар, тип ишеткәйнем.

**Важная персона.** Күрше енеке бит ул.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 80



**Сәмиғә.** Машина ы ла күршенекеме?

**Важная персона.** Уйынсыҡ машинамы? Ейәненеке!

**Ығышбай.** Вәт ялҡау! Алтмыш йәшкә еткәнсе, пенсияға киткәнсе бер машиналыҡ та аҡса йыймаған.

**Хәмершин** *(боғаҙына сиртеп).* Бында ала барғандыр.

**Эшем эйә е.** Юҡ, унда түгел, аҡлыҡ касса ына алған. Машиналыҡ аҡса йыйып бөткәс кенә, хаҡтар ысҡынып киткән. Дефолт... Фьют! Кризис... Фьют! Аҡса ы елгә осҡан.

**Ялағаев.** Әҙәм көлкө ө! Кешенән көлгән була бит әле, үҙен белмәй.

**Сәмиғә.** Шулай инде, көлгән кеше – бөлгән кеше.

**Важная персона.** Әле өйләшкәндәрҙән сығып, бер тауыштан шундай ҡарарға киләм: ата авторыбыҙҙың юбилейын юбилейҙарса юбилейлаштырыу эшен әллә ни тантаналап торма аҡ та, юғары юмористик кимәлдә атҡарырға кәрәк. Ошо айҡанлы ойошторoccасаҡ тантана ыҙ көлкө табынын тантаналы рәүештә үткәрергә әҙерләнеү мәсьәләләрен ентекле ҡарау буйынса Үтә лә мө им комиссияның особо важный рәйесе итеп... *(Ҡулын күтәреп.)* Бер тауыштан үҙемде айлайым.

**Ялағаев.** Бик дөрөҫ, иптәш Важная персона әфәнде! Беҙ ҙә нәҡ шул фекерҙә.

**Хәмершин.** Бындай йылы урынды йыуып алыу фарыздыр.

**Ғәйбәтбикә.** Был хәбәрҙе бөтә донъяға таратырға кәрәк.

**Ығышбай** *(йоҡо аралаш).* Ашыҡма, Ғәйбәтбикә. Ашығып, ашҡа бешеүең бар. *(Әйләнеп ята.)*

**Ғәйбәтбикә.** Ғүмер буйы йыбанып йәшәнең, Ығышбай.

**Важная персона.** Ғәйбәтбикә дөрөҫ әйтә. Был хәбәрҙе бөтә донъяға таратырға кәрәк. Ни ти әң дә, алтмыш йылға бер генә була торған шатлыҡ бит.

**Ялағаев.** Тәрән мәғәнәле фекер әйттегеҙ, иптәш Важная персона әфәнде.

**Важная персона.** Әлбиттә. Шулай итеп, иптәштәр-әфәнделәр, мин – Үтә лә мө им комиссияның особо важный рәйесе. Комиссия ағзалары итеп беренсе сиратта...

**Ялағаев.** Мин әҙер, иптәш әфәндем!

**Важная персона.** Сабыр ит, Ялағаев. Беренсе сиратта Эшем эйә ен, унан уң...

**Ялағаев.** Мин әр ваҡыт әҙер, иптәш әфәндем!

**Важная персона.** Ашыҡмай тор, Ялағаев. Комиссия ағзалары итеп йәнә Ғәйбәтбикәне, унан ҡала Самогонсы Сәмиғәне, унан ҡала Хәмершинды, тағы ла унан ҡала Ығышбайҙы билдәләйем. Ә ине, Яла-ағаев ҡусты, гел дөрөҫ фекер йөрөтөүендә иҫәпкә алып, урынбаҫарым итеп ҡуям.

**Ялағаев.** Бик дөрөҫ ҡарар, иптәш Важная персона әфәнде.

**Важная персона.** Хәҙер конкрет эшкә тотонайыҡ. Иң элек иң шәп шабашниктан юбилярҙың портретын я атып алырға кәрәк.

**Хәмершин.** Ә ә, бер “яртылыҡ” эш булды! Остом! *(Сығып китә.)*

**Важная персона.** Ҡотлау телмәрҙәрен әҙерләүҙе, Ялағаев, иңә йөкмәтәм.

**Ялағаев.** Мин әр ваҡыт әҙер! *(Баш эйеп, сығып китә.)*

**Важная персона.** Ә ин, Ғәйбәтбикә, юбиляр тура ында бик шәп мәҡәлә яҙыр өсөн мөхәррир Мөртәевҡа бик шәп заказ биреп ҡуй.

**Ғәйбәтбикә.** Бир әм бирәм инде ул мин, хи-хи-хи!.. *(Сыға.)*

**Сәмиғә.** Банкет мәшәҡәттәрен үҙ өҫтөмә алам. *(Сыға.)*

**Важная персона.** Банкеттан алда концерт кәрәк. Бар, Эшем эйә е, артистарға әйт: репетиция я ай башла ындар.

**Эшем эйә е.** Мин ул әрәмтамаҡтарҙы хәҙер үк эшкә егәм! *(Эшлекле атлап сығып китә.)*

**Важная персона.** Ә мин особо важный эштәрҙе ойоштороу эштәре артынан сабам. *(Сығып китә.)*

**Бөтә е лә сыҡҡас, Ығышбай сәхнә ситендә ғырылдап йоҡлай. Юбилярҙың шаржын тотоп, Хәмершин инә. Ул Ығышбайға абынып йығыла.**

**Хәмершин** *(тороп).* Нимә аяҡ аҫтында йәйелеп ята ың?

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 81



**Ығышбай.** Йәйелеп ятмайым, байрам итеп ятам.

**Хәмершин.** Шулайҙыр. Ялҡауға көн дә байрам. Әйҙә әле, бынау нәмәне элеп ҡуяйыҡ.

**Ығышбай** *(кирелеп- уҙылып)*. Нимә уң ул?

**Хәмершин.** Юбилярҙың портреты. Бер шабашникка ”ярты” төрткәйнем, ярты минутта әтмәләп бирҙе.

**Ығышбай.** Иренмәйенсә... *(Башын мендәренә терәп, йоҡларға самалай.)*

**Хәмершин** *(ҡысҡырып)*. Тот, давай!

**Ығышбай** *(ауыр ғына ҡуҙғалып, Хәмершинға ярҙамлаша)*. Между прочим, быңдай эш өсөн сәхнә эшсе е бар.

**Хәмершин.** Юҡ.

**Ығышбай.** Нисек ”юҡ”? Бая ғына, ауыҙын уҙып, банкет ҡайҙа була, тип орашып торғайны.

**Хәмершин.** Банкетҡа кейеп килер өсөн туфлийын ремонтлатырға киткән.

**Ығышбай.** Ниңә аман урап килмәй?

**Хәмершин.** Мастерской бикле икән. Туфли ремонтлаусы оҫта телевизорын ремонтлатырға киткән.

**Ығышбай.** Ә ул оҫта ниңә аман килмәй?

**Хәмершин.** Килер ине, телемастер сәғәтен төҙәтергә киткән.

**Ығышбай.** Ә телемастер ниңә аман килмәй?

**Хәмершин.** Килер ине, сәғәт төҙәтеү мастеры юбилей кисә енә киткән.

**Ығышбай.** Хас Мар. Сәлим хикәйәендәгесә. Ярай әле, мин бар донъяла! Мин булма ам, бер эштең дә рәте булмаҫ ине.

**Сәхнә урта ындағы 14+36+10=60 андары өҫтөнә юбилярҙың шаржын атҡырып элеп ҡуялар. Арҡа ына әнәк аҫкан сатирик был рәүештә әнәк өҫтөнә ятып торған кеүек күренә.**

**Хәмершин** *(хата ын аңлап)*. Яңылыш элгәнбеҙ ҙә ә.

**Ығышбай.** Нимә е оҡшамай?

**Хәмершин.** Ул бит ятып түгел, баҫып торорға тейеш.

**Ығышбай.** Алтмышҡа еткәс, ятып тора ал аң да әле...

**Хәмершин.** Эйе шул. Бер аҙ ҡыйыҡ тейәп тә ебәр әң... Әйҙә, киттек!

**Ығышбай.** Ҡайҙа?

**Хәмершин.** Юбилярҙың портретын йыуырға!

**Хәмершин менән Ығышбай сыға. Эшем эйә е менән Ғәйбәтбикә инә.**

**Эшем эйә е.** Ғәйбәтбикә, был донъяла ин белмәгән нәмә юҡ. *(Портрет аҫтындағы 14+36+10=60 андарына күр әтеп.)* Бынау андар нимәне аңлата ул?

**Ғәйбәтбикә.** 14 аны Марсель Сәлимов әҫәрҙәренең 14 йәшенән "әнәк" журналында баҫыла башлағанын күр әтә. 36 йыл буйына ул ошо журнал редакция ында ултырған.

**Эшем эйә е.** Ә ун йыл ҡайҙа ултырған?

**Ғәйбәтбикә.** Бер ҡайҙа ла ултырмаған. Журналистар союзы рәйесе вазифа ында бөтә Башҡортостан буйлап сабып йөрөгән.

**Эшем эйә е.** Ә 60 аны нимәне аңлата?

**Ғәйбәтбикә.** Юбилярҙың алтмыш ум аҡса ы бар, буғай.

**Эшем эйә е.** Бәлки, уның алтмыш кешегә бурысы барҙыр?

**Китап тотоп, Важная персона инә әм уларҙы тыңлап тора.**

**Ғәйбәтбикә.** Ә-ә, белдем! Алтмыш бисәнең башын әйләндергән!

**Важная персона.** Сто-оп! Ғәйбәт атыуыңды туҡтат, Ғәйбәтбикә! Алтмыш йәшлек юбилярҙың алтмыш түгел, ә теп-теүәл тук ан туғыҙ мөхәббәте бар. Бына, үҙе яҙған: ”Тук ан туғыҙ мөхәббәт”. *(Китапты биреп.)* Мә, Ғәйбәтбикә, ошо китапты уҡы ла тук ан туғыҙ мөхәббәтен эҙләп табып, юбилярҙы ҡотларға саҡыр!

**Ғәйбәтбикә, китапты аҡтарып, анай-анай сығып китә. Сатирик геройҙар сәхнә ситенә кресло менән өҫтәл индереп ҡуя.**

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 82



**Эшем эйә е.** Юбилярҙы ултыртырға урын әҙер!

**Важная персона.** Ҡайҙан алдың был креслоны?

**Эшем эйә е.** Президенттың артҡы бүлмә енән.

**Важная персона** *(креслоны бармаҡтары менән ыйпап).* Шәп!

**Ялағаев.** Ә еҙ уға ултырып ҡарағыҙ.

**Важная персона** *(ултыра).* Тә-әк, иптәштәр-әфәнделәр... Күренек еҙ, дан ыҙ әм мал ыҙ... э-э... Кем әле, исемен оноттом...

**Ялағаев.** Билдә еҙ...

**Важная персона.** Эйе, билдә еҙ, исеме лә онотолған сатирикты пенсия-ха сы-ха-ха-рыу айҡанлы ойошторолаcаҡ тантана ыҙ көлкө табынын тантаналы рәүештә үткәрергә әҙерләнеү мәсьәләләрен ентекле ҡарау буйынса Үтә лә мө им комиссияның особо важный рәйесе булараҡ, мин еҙҙән шуны талап итәм...

**Ялағаев.** Бик урынлы талап, иптәш Важная персона әфәнде. еҙҙең ошо гәҙел талабығыҙҙы тойоп, мин үҙем юбилярҙы юбилейлаштырғылаштырғылау эштәрен киң йәйелдереп ебәрҙем.

**Важная персона.** Маладис, Ялағаев! Ә башҡаларҙың эштәре нисек? Йәле, Ғәйбәтбикә, өйләп ебәр!

**Ғәйбәтбикә.** Гәзиттә юбиляр тураында иҫ киткес шәп мәҡәлә баҫылып сыҡты. Мөхәррир Мөртәев юбилярҙың исемен бөтөнләй ыҙып ташлаған. Ә юбиляр үрәте урынына үҙенең фотоын ҡуйған.

**Эшем эйә е.** Ха-ха-ха! Ну, ҡыҙыҡ иткән! Бигерәк юморлы кеше икән мөхәррир Мөртәев!

**Важная персона.** Ләкин беҙҙә юмор ҡайғы ы юҡ. Беҙ — етди кешеләр, әм етди эштәр менән шөғөлләнәбеҙ. Ғәйбәтбикә, ин юбилярҙың туҡ ан туғыҙ мөхәббәтен эҙләп таптыңмы?

**Ғәйбәтбикә.** Туҡ ан игеҙен таптым. Бере ен генә таба ы ҡалды.

**Важная персона.** Ҡара уны, Ғәйбәтбикә, юбилейҙа юбилярҙың туҡ ан туғыҙ мөхәббәте лә бул ын!

**Ғәйбәтбикә.** Булыр, булыр.

**Важная персона.** Самогонсы Сәмиғә, банкетҡа әҙерлек нисек?

**Сәмиғә.** Юғары кимәлдә. Ҡырмыҫҡалы, Шишмә әм юбилярҙың тыуған яғы Борай райондары баҫыуҙарында үҫкән шәкәр сөгөлдөрө утын Ҡорғаҙаҡ әм Танып менән Шүлейә йылғалары ҡушылған ерҙән алған хуш еҫле ыуҙарға ҡушып бутай-бутай, юбилейно-юморной зернонан махсус шифалы эсемлек я ап ҡуйҙым. Табында, күгәрсен өтөнән башҡа, бөтә нәмә лә булаcаҡ.

**Важная персона.** Ә ни өсөн күгәрсен өтө юҡ?

**Сәмиғә.** Сөнки мин — ауынсы Сәмиғә түгел, Самогонсы Сәмиғә!

**Важная персона.** Хәмершин! Көл әң — көл, үл әң — үл, әммә юбилейға күгәрсен өтө тап!

**Хәмершин.** Табырмын! Донъяла юҡ нәмәне лә табам мин. *(Ҡуйынынан шешә сығарып.)* Шыйыҡ валюта ғына булын!

**Важная персона.** Тә-әк, иптәштәр-әфәнделәр... Юбилярға юбилей миҙалы тапшырырға кәрәк икән.

**Ығышбай.** За что?

**Важная персона.** Мин дә шулай тим шул. На что уға награда! Кәрәк бул а, артынан үҙе йүгереп йөрөр ине. Башҡалар шулай итә бит. Ә ул, бер нәмә лә кәрәкмәгәндәй, көлөп ята, ана! *(Портретҡа күр әтә.)*

**Хәмершин.** Исма ам, килеп хәлебеҙҙе лә белмәй. Берәй "ярты" ҡыҫтырып...

**Эшем эйә е.** Ә беҙ бында унын өсөн тир түгәбеҙ.

**Важная персона.** Минең аҡыллы етәкселегем аҫтында. Шуға күрә был миҙал...

**Ялағаев.** Бик дөрөҫ, иптәш Важная персона әфәнде, ҡарарығыҙ алтын.

**Важная персона.** Мин бер ниндәй ҙә ҡарар сығарманым бит әле. Сығарырға ғына торам.

**Ялағаев.** Ана шул сығарырға торған ҡарарығыҙҙы әйтәм дә инде. Алтын, тим.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 83



**Важная персона.** Шулай тип уйлайыңмы?

**Ялағаев.** Башҡаса уйлау мөмкин түгел.

**Важная персона** *(ҡәнәғәт)*. Э ем... Алдан күрә белеү әләтендә иҫәпкә алып, мин иңә, Ялағаев, иҫтәлекле бүләк тапшырам. *(Күкрәгендәге значокты алып, Ялағаевтың түшенә ҡаҙай.)* Пионер значогы. Ә юбилейный миҙал менең үҙемә самай! *(Значок урынына миҙал ҡаҙап ҡуя.)*

**Ялағаев.** Килешеп тора ҡалай!

**Важная персона.** Хаҡ әйтә ең, ялағай! *(Башҡаларға.)* Ә еҙ ҡарағыҙ уны, юбилярға ялағайлана күрмәгеҙ! Шешәләрегеҙҙе, бүләктәрегеҙҙе, ришәүәттәрегеҙҙе яҡын да килтермәгеҙ. Беҙ уны икенсе төрлө юл менән әүрәтәбеҙ.

**Бөтә е лә.** Нисек?

**Важная персона.** Алдап! Сатириктың ҡәләме ҡаты бул а ла, күңеле йомшаҡ. Йыр-моң менән алдап арбайбыҙ уны.

**Эшем эйә е.** Көлә-көлә беҙгә килә икән, көлә-көлә уны ҡаршы алырға кәрәк!

**Важная персона.** Ҡәләменең осо кәкрәйеп, « әнәк» тигәненең йәбе әлперәйеп төшөрлөк бул ын. Донъя ярып йырлағыҙ, ер елкетеп бейегеҙ!

**Важная персонанан башҡалар бейей-бейей сығып китә. Важная персона креслоға йәйелеп ултыра. Ишек шаҡыйҙар.**

Кем?

**Тиҫкәребай.** Мин.

**Важная персона.** Ин! *( әләмә кейемле Тиҫкәребайҙы күргәс, ҡурҡып.)* Абау, был ниндәй ҡот осҡос нәмәкәй?! Ҡайҙан килеп сыҡтың?

**Тиҫкәребай.** Мар. Сәлимдең ”Шәп кеше” исемле китабынан.

**Важная персона.** Кем ин?

**Тиҫкәребай.** Исемем Тиҫкәребай, ә үҙем бына шундай!

**Важная персона.** Исемең хөрт икән. Эшкә алып булмай инде.

**Тиҫкәребай.** Исемемә ҡарама, характеристикам шәп минең! *(Важная персонаға ҡағыҙ сығарып тоттора.)*

**Важная персона** *(уҡый)*. ”Эсмәй... Тартмай... Уңған... Булдыҡлы... Ҡулынан килмәгән эше юҡ... Тыңлаусан... Аҡыллы... Мораль яҡтан тотанаҡлы. Сит бисәләргә ҡарамай, үҙ бисәләрен генә ҡарай. Туғыҙ ҡатынын да туйындыра, кейендерә. Утыҙ туғыҙ өйәркә енең әммә ен дә тигеҙ өйә...” Шә-әп!!!

**Тиҫкәребай.** Шәп булмай, үҙем яҙҙым бит!

**Важная персона.** Ысынбарлыҡта ин ниндәй кеше уң?

**Тиҫкәребай.** Шәп кеше! Шулай тип йөрөтәләр мине.

**Важная персона.** Ярай, ынап ҡарайыҡ. Эшкә алам. Минең дачаны аҡлар ың. Килеш-килбәтең бик шәп. Баҡсаға ҡарасҡы ҡуйып тора ы ла юҡ. Ха-ха-ха!

**Тиҫкәребай.** Комплиментығыҙ өсөн рәхмәт. *(Сыға.)*

**Ялағаев инә.**

**Ялағаев.** Иптәш Важная персона әфәнде...

**Важная персона.** Нимә бар, Ялағаев?

**Ялағаев.** “Янғантау” санаторийына бер путёвка бар. Әллә шуны юбилярға бирәбеҙме? Өс йыл отпускыла булғаны юҡ бит.

**Важная персона.** Янғантауға барып, арт яғын ҡыҙҙырып, ал яғын яндырып ҡайт ын әйҙә, ха-ха-ха! *(Бер аҙ уйланып торғас.)* Ә ул унда әҙәмсә ял итә белерме уң? Өс йыл отпускыла булмағас, нисек ял итергә лә онотҡандыр инде.

**Ялағаев.** Шулай шул. Путёвканы әрәм генә итер.

**Важная персона.** Әллә, мин әйтәм...

**Ялағаев.** Бик дөрөҫ әйтә егеҙ, иптәш Важная персона әфәнде. Лутсы үҙегеҙ барығыҙ курортҡа.

**Важная персона.** ин ысынлап та шулай уйлай ыңмы?

**Ялағаев.** Ысын-ысынлап! Бынау юбилей мәшәҡәттәре менән йонсоп та бөттөгөҙ.

**Важная персона.** А , ул юбилей! Тамам хәлдән тайҙырҙы. Янғантауға барып, бер аҙ ял итеп ҡайтмай мөмкин

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 84



түгел. Тик ялға ҡәҙәр юбилей докладын ҡарап китергә кәрәк. Доклад әҙерме?

**Ялағаев.** Әҙер, әҙер! Ана үҙе!

**Ҙур портфель тотоп, Аҡыллы баш инә.**

**Аҡыллы баш.** Юбиляр тура ында доклад өйләргә килдем.

**Важная персона.** Ә-ә... Доклад өйләр өсөн нимә кәрәк?

**Аҡыллы баш.** Беренсенән, трибуна.

**Важная персона** *(ҡысҡырып)*. Трибуна!

**Ялағаев Аҡыллы баш алдына трибуна килтерә.**

Тағы нимә етмәй?

**Аҡыллы баш.** ыу.

**Важная персона** *(ҡысҡырып)*. ыу! Докладҡа ыу кәрәк.

**Ялағаев графин менән ыу ҡуя. Аҡыллы баш, трибуна артына баҫып, күҙлеген кейә.**

**Ялағаев.** Юбиляр тура ында трибуналы, ыулы, тәрән йөкмәткеле доклад өйләү өсөн үҙ фән туп алары академигы Аҡыллы баш, тиле сәс әфәндегә бирелә. *(Ҡул саба-саба сығып китә.)*

**Аҡыллы баш портфеленән ҡағыҙ алып уҡый башлағас, Важная персона, ҡолағын ҡаплап, сәхнәнән сыға.**

**Аҡыллы баш.** Ҡәҙерле коллегалар! Андотекринлы юбилеустың бөгөнгө актуаль турбулентлы потенциаль проблемалары нигеҙендә фекер йөрөтөп, тринитросцелограф диафрагмалары менән монетаристик реформалар яҫылығында ҡара аҡ, юмор сатириусҡа яҡын да килмәй.

Юбилейҙар теория ының сағыштырмалылығы структур-гипермоник юл менән иҫбат ителә әм көлөү хе-хе синусы, сатир-ра котангенсы гипотеза ы тарафынан инҡар ителә.

Азимуналь концепция интродукция ы аморфлы флюидтарға әйләнгәс әм ыңғай модулдәр еҙ клопометрик сфераларҙа таралып бөткәс, юмор менән сатириус толерантлы консенсусҡа инә.

Юғарыла әйтелгәндәргә йомғаҡ я ап, ”а” квадрат” плюс ”б” квадрат минус алмыш синус плюс ун дүрт косинус плюс утыҙ алты тангенс әм йәнә плюс ун тампакс тигеҙ була алтмыш юбилеус икәнлеген иҫбат итеүе ауыр түгел. Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт, коллегалар. *(Күҙлеген алып.)* Мине икенсе урында көтәләр. Банкетҡа урап килермен. Пока!

**Аҡыллы баш сыға. Ялағаев инә.**

**Ялағаев** *(ҡул сабып)*. Иҫ киткес шәп сығыш! Юбилей кисәләрендә өйләнелә торған докладтарҙан ис тә кәм түгел. Афарин, Аҡыллы баш әфәнде! Ә хәҙер, юбилярҙы ҡотлау өсөн, уның ятраҡан геройы Бюрократов иптәште саҡырабыҙ.

**Бюрократов инә. Ялағаев сыға.**

**Бюрократов.** Эйе, иптәштәр әм әфәнделәр, ысынлап та, мин — сатириктың ятраҡан геройы. Уның, ни а-йәт, пенсия йәшенә етеүе, ҡартайып ҡалтайып-ялпайып, кәкрәйеп-бөкрәйеп бөтөүе айҡанлы үткәреләсәк тантана ыҙ юбилей табынында сығыш я ау хаҡындағы тәҡдимгә килгәндә, әлегә өҙөп кенә бер ни ҙә вәғәҙә итә алмайым. Бындай мәсьәләләр еңел хәл ителмәй. Уйлашырға, кәрәкле кешеләр менән кәңәшләшергә, тейешле инстанциялрҙан ризалыҡ алырға әм компетентлы органдарҙа раҫларға кәрәк. Үҙегеҙ аңлап тора ығыҙ, бындай яуаплы ҡарарҙы ҡабул итеү өсөн апаруҡ ваҡыт талап ителә. Уны ҡайҙан табырға? Бөгөнгө ҡытлыҡ заманда. Донъяла кризис, инфляция ҡоторғанда... Ярай, бер нисә айҙан уң яңынан хәтергә төшөрөр өгөҙ әле. Бәлки, реформалар уңышлы бөтөп ҡуй а, ҡабатлап әйтәм, бәлки, бөтөп ҡуй а, берәй әмәлен уйлап табырбыҙ. Нимәлә туҡтағайныҡ әле? Ах, да-а, юбилей!.. Юбилей мәсьәләенә килгәндә, иптәштәр әм әфәнделәр, мин еҙгә конкрет шуны әйтә алам: әлегә был мәсьәләне хәл итеү өсөн конкрет булмаған инстанцияларҙан конкрет күр әтмәләр юҡ. Шуға күрә 1913 йылғы 999—01 анлы инструкцияның 33-сө параграфын аҫтан өҫкә әйләндереп ҡарарға кәрәк. Ғәфү итегеҙ, бының

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 85



өсөн әлегә ваҡытым юҡ. Кәңәшмәгә, ултырышҡа, йыйылышҡа, семинарға, съезға, симпозиумға, коллоквиумға, конгресҡа ашығам. Гуд бай! *(Сығып китә.)*

**Ҡул саба-саба Ялағаев инә.**

**Ялағаев.** Иҫ киткес шәп телмәр! Ярай әле, Важная персона ишетмәне, курортта ҡалды. Ишет ә, уштан яҙып үлер ине. Сеү, ана, үҙе килә! Ҡайтып та еткән. *(Ҡаршы алып.)* Иҫән- ау ҡайтыуығыҙ менән, хөрмәтле Важная персона әфәнде! әйбәт ял иттегеҙме?

**Важная персона** *(көр өнөп)*. Какуй ял! Санаторий пенсионерҙар менән тулған. Әбей- әбейҙән башҡа ҡатын-ҡыҙ заты юҡ.

**Ялағаев.** Янған икән ялығыҙ. Ә беҙ бында янып эшләнек.

**Важная персона.** Йый, давай, әрәмтамаҡтарҙы!

**Ялағаев** *( ыҙғырып)*. Йыйылышҡа килегеҙ!

**Шаулашып сатирик геройҙар инә.**

**Важная персона.** Иптәштәр-әфәнделәр, Үтә лә мө им комиссияның особо важный рәйесе булараҡ, мин еҙгә шуны әйтергә тейешмен...

**Ялағаев.** Ҡыйыу фекер, иптәш Важная персона әфәнде, үтә лә ҡыйыу фекер менән ҡайтҡан ығыҙ курорттан.

**Важная персона.** Ҡыҫылма, Ялағаев! Бер фекер ҙә әйтмәнем әле.

**Ялағаев.** Ана шул әйтергә теләгән фекерегеҙ хаҡында әйтәм дә инде, иптәш Важная персона әфәнде. Бик ҡыйыу фекер!

**Важная персона.** Ә-ә-ә, шулаймы? Уны ы хаҡ, әлбиттә. Шулай итеп, иптәштәр-әфәнделәр, юбилярҙы юбилейҙарса юбилейлаштырыу эштәрен ойоштороу мәсьәләләре тейешле юғарылыҡҡа менеп етеп килә. Ялағаев, юбилей кисә ендә тост әйтергә теләүселәр исемлеге әҙерме?

**Ялағаев.** Әҙер! Бына, илле туғыҙ кеше.

**Важная персона.** Ул ҡәҙәр болтун ҡасан өйләп бөтә инде?

**Ялағаев.** Йыл аҙағына...

**Важная персона.** Ғәйбәтбикә, ҡунаҡтарға хәбәр алдыңмы?

**Ғәйбәтбикә.** Бөтә донъяға сәстем. Саҡырмаған алкаш ҡалманы.

**Важная персона.** Юбилярҙың туҡ ан туғыҙынсы мөхәббәтен саҡырҙыңмы?

**Ғәйбәтбикә.** Вәт, уға ҡыуаныслы хәбәрҙе еткерә алманым. Сөнки тапманым. Ә, бәлки, ул донъяла юҡтыр. Автор фантазия ы ғына түгелме икән?

**Важная персона.** Булмаҫ. Автор – серьёзный кеше. Юҡты яҙмаҫ. Эҙлә, Ғәйбәтбикә, тап! Концерт нисек, Эшем эйә е? Артистар әҙерме?

**Эшем эйә е.** Мин уларҙы ҡыуып ебәрҙем. Аҡса орайҙар. Концерт ҡуйырға сиғандарҙы саҡырҙым.

**Важная персона.** Улар менән нисек иҫәпләшергә итә ең?

**Эшем эйә е.** Көмөшкә менән ыйлайым.

**Важная персона.** ин әҙерме, Самогонсы Сәмиғә?

**Сәмиғә.** Күптән әҙер. Ата авторымдың юбилейына тип әллә ҡасан ун биш мискә, егерме биш силәк, ун өс ялғаш, утыҙ туғыҙ тас көмөш төҫлө көмөшкә ҡайнатып ҡуйҙым. Сифаты ”во!” Первач! Эсеп ебәр әң, эсәктәренде яндырыр. Йәл, запивать итергә күгәрсен өтө генә юҡ.

**Важная персона.** Хәмершин! *(Унан яуап булмағас.)* Хәмершин ҡайҙа?

**Ғәйбәтбикә.** Ул юбилейҙы йыуа, хихи... Ауылда, пенсионер әбейҙәргә эйәреп, хәмер емереп йөрөй.

**Важная персона.** Тапҡан ваҡыт! Ығышбай, бар, тиҙ генә алып ҡайт үҙен!

**Ығышбай.** Иртәрәк булмаҫмы? Банкет башланмаған бит әле.

**Ғәйбәтбикә.** Йыбанма, Ығышбай. Иренеп торорға түгел, донъя ын емереп ororға кәрәк бөгөн.

**Важная персона.** Ә ин, Ғәйбәтбикә, телеңә алынма. Эшеңдә бул!

**Ғәйбәтбикә сыға.**

**Ауа-түнә Хәмершин инә.**

**Ығышбай** *(ҡыуанып)*. Бик ваҡытлы ҡайттың, Хәмершин дуҫ.

**Важная персона.** Фу-у, алкаш! аман

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 86



айнымаған.

**Хәмершин** *(Важная персонаны ҡосаҡларға итеп)*. Ә, Важняга! аумы, Важнюк дуҫ?

**Важная персона** *(ҡырыҫ)*. Яҡын килмә! Ниңә эстең, Хәмершин?

**Хәмершин.** Шатлыҡтан. Күгәрсен өтө...

**Сәмиғә.** Боже мой, күгәрсен өтөн эскән!

**Хәмершин.** Эйе, ”Күгәрсен өтө”н ыу кеүек эстем... то есть, уҡыным.

**Важная персона.** Нимә өйләй был алкаш? Әллә аташа инде?

**Ялағаев**. Шулайҙыр. Күгәрсен өтөн уҡып буламы ни?!

**Хәмершин.** Их, еҙ, наҙандар! *(Кеҫә енән китап сығара.)* Бына бит ул ниндәй ”Күгәрсен өтө” – сатириктың китабы.

**Бөтә е лә китапты ҡарай.**

**Важная персона.** Ҡайҙан таптың ин уны?

**Хәмершин** *(эре генә)*. Ете ҡат ер аҫтынан.

**Эшем эйә е.** Маладис, Хәмершин, алкаш бул аң да, ҡулыңдан эш килә.

**Сәмиғә.** Бына хәҙер табын ҡор аң да ярай. Давай, ҡыймылда, Ығышбай!

**Ығышбай** *(иренеп)*. Иртәрәк булмаҫмы?

**Важная персона.** Иртә түгел, сап-самай. Көлкө табынын башларға ваҡыт. Стакан килтер, Хәмершин! Юбилярҙы күтәренке кәйеф менән ҡаршылайыҡ.

**Ғәйбәтбикә йүгереп инә. Тулҡынланыуҙан үҙен дә әйтә алмай.**

**Ғәйбәтбикә** *(тотлоғоп)*. Тә-тә-тә-тә...

**Важная персона.** Ниңә тәтелдәй ең? Телеңде йоттоңмо әллә?

**Ғәйбәтбикә.** Унан да яманыраҡ.

**Ялағаев.** Башҡортостанда ер тетрәгәнме әллә?

**Ғәйбәтбикә.** Унан да хәтәрерәк.

**Эшем эйә е.** Әллә Өфөлә берәй яңы банк бина ы ишелеп төшкәнме?

**Ғәйбәтбикә.** Юҡ. Унан да шаҡ ҡатҡысыраҡ.

**Тиҫкәребай.** Ҡала урамдарын сүпсарҙан таҙартҡандармы?

**Ғәйбәтбикә.** Юҡ.

**Сәмиғә.** Әйбер хаҡтары төшкәнме әллә?

**Ғәйбәтбикә.** Төштө, ти, көт!

**Аҡыллы баш.** Нимә булды, улай а, әйт!

**Ғәйбәтбикә.** Юбиляр юбилейға килмә-ә-әй... *(Илап ебәрә.)*

**Важная персона.** Нисек ”килмәй”? Кем ҡушҡан уға килмәҫкә?! Не позволю!!!

**Бюрократов.** Бәлки, унын эше күптер.

**Ығышбай.** Пенсионер кешенең ниндәй эше бул ын! Йоҡлайҙыр.

**Хәмершин.** Юрған аҫтында хәмер емереп, юбилейын билдәләп яталыр.

**Ғәйбәтбикә.** Ә-ә, белдем! Белдем ысын сәбәбен.

**Ялағаев.** Әйт, Ғәйбәтбикә, беҙ ҙә беләйек.

**Ғәйбәтбикә.** еҙ уйлағанса, ул йоҡлап та, юрған аҫтында хәмер емереп тә ятмай. Минеңсә, ул теге туҡ ан туғыҙынсы мөхәббәте менән... ни... хи-хи-хи... эшләп ята!

**Важная персона.** Што такуй? Был ни хәл?! Не позволю! Барығыҙ, хәҙер үк алып килегеҙ! Мөхәббәте-ние менән!

**Ирҙәр сығып китә.**

Ҡара ин уны! Алтмышҡа еткән, үҙе аман йәштәрсә шаярыуын ташламаған. Вәт юморист!

**Сатирик геройҙар юбилярҙы карауатта ятҡан килеш алып инә.**

**Эшем эйә е.** Юбиляр юбилейға килде. Ура-а-а!

**Ялағаев.** Дан юбилярға!

**Сәмиғә.** Йәшә ен юбиляр! Тағы ла алтмыш йыл... Күберәк тә инде, ну, чурт с ним!

**Юбиляр уларға иғтибар итмәй, йоҡлай. Ул пижама кейгән, аяғында – аҡ ойоҡбаш. Эргә ендә – кәкре таяҡ.**

**Аҡыллы баш** *(юбилярҙы уятыпуятып, торғоҙа алмағас)*. Вәт йоҡлай! Ыжламай ҙа...

**Эшем эйә е.** Әҙәм көлкө ө! Күпме юбилейҙарға йөрөп, бындай хәлде

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 87



күргән юҡ ине.

**Важная персона.** Оят ыҙ!

**Ығышбай.** Үҙ юбилейында йоҡлап ята. Ата ялҡау!

**Бюрократов.** Ә бит бәғзе бер юбилярҙар, аяҡтарына баҫа алма а, микрофон таяғына тотоноп бул а ла торорға тырыша. Тотоноп та тура баҫа алмағандары креслоға ултырып тора. Ә был сәпсим слабак!

**Ғәйбәтбикә.** "Мөхәббәтле ҡәләм", "Мәңгелек мөхәббәт", ”Туҡ ан туғыҙ мөхәббәт” исемле китаптар яҙған бит әле, хәстрүш. Бер мөхәббәте ҡуйынына ла ыймаған үҙе, хи-хи-хи!

**Ялағаев** *(карауат аяғына тибеп)*. Тор, йоҡо сүлмәге!

**Важная персона.** Нисек уятырға был йүн еҙҙе?

**Сәмиғә.** Алдатырға кәрәк уны.

**Ғәйбәтбикә.** Нимә менән?

**Эшем эйә е.** Юбилейы менән ҡотлап, төшөндә лә күрмәгән кәттиж төҙөп бирәйек.

**Ялағаев.** Пенсия-ха сы-ха-ха-хы кешегә ни бысағыма кәттиж! Мунса алып бирәйек.

**Хәмершин** *(шешә сығарып)*. Бына быны эс әң, бер ниндәй мунса ла кәрәкмәй! *(Эсеп ҡуя.)*

**Сәмиғә.** Был сүп кенә, Хәмершин. Сәмиғә еңгәнден сәмәйенә етмәй!

**Тиҫкәребай.** Юҡ, файҙа ыҙ... Бар тип тә белмәй.

**Важная персона.** Дә-ә, был юбилярҙың тормошҡа интересы бөткән икән. Бер нәмә менән дә ҡуҙғатып булмай.

**Сәмиғә.** Нишләп булма ын, була! Бер нәмә менән генә ҡыҙыҡтырып, алдатып, аҙҙырып була уны.

**Бөтә е лә.** Нимә менән?

**Сәмиғә.** Юбилярҙың иң ныҡ яратҡан берҙән-бер туҡ ан туғыҙынсы мөхәббәте менән.

**Бөтә е лә.** Кем ул?

**Сәмиғә.** Сатира ылыу! Ана, үҙе килә!

**Сатира инә.**

**Сатира.** Эйе, был яҙыусыны мин генә алдай алам, мин генә арбай алам. Сөнки уның бөтә яҙмышы миңә бәйләнгән. Минең өсөн күпме туҡмалды, күпме маҡталды. Минең арҡала шелтә лә, орден да эләкте үҙенә. Мин уны ат кеүек ектем, мин уны күренекле кеше иттем. Шуға күрә төшөрә лә, күтәрә лә алам уны. Тор, күтәрел, йәнем!

**Юбиляр ҡапыл йәнләнеп китә. икереп тора ла: ”Сатира, йәнем!” – тип, кәкре таяғын тотоп, уның артынан саба. Сатира, борғоланып- ырғаланып, юбилярҙы үҙенә ылыҡтыра. Юрый унан тоттормаған була. Ҡыуышалар. Ахырҙа юбиляр таяғы менән Сатираның итәгенән эләктереп ала. Ҡосаҡлашып карауатҡа ауалар. Унда шаярып көрмәкләшәләр. Башта юбиляр Сатира өҫтөндә ят а, аҙаҡ Сатира уның өҫтөнә менеп атлана. Юбиляр йәшәреп китә әм, дәртләнеп, карауатты тирбәтә... Сатирик геройҙар, уларҙы уратып алып, бейей-бейей йырлайҙар:**

*Көлә-көлә килә-килә,*
*Алтмыш йәшкә еткәнең.*
*Алтмыш йәшкә еткәндә лә*
*Егет кеүек икән ең!*

**Важная персона** *(авансценаға килеп)*. Ижад эше – интим эш. Ҡалғанын ҡарап тормайыҡ, тәнәфес я ап алайыҡ. Алдағы юбилейға саҡлы!

**Күңелле йыр дауам итә:**

*Сатириктар ҡартаймайҙар –*
*Быны яҡшы беләбеҙ.*
*Пенсияға сыҡҡанда ла*
*Рәхәтләнеп көләбеҙ.*

# ҮҘЕНӘ ТОҒРО ШАҒИР

*(Марат Кәримовтың яңы быуат башындағы ижадына бер ҡараш)*

“Быуаттан быуатҡа күскәндә” (“Ағиҙел”, 2003 йыл, 1-2-се андар) тигән мәҡәләмдә Марат Кәримов тура ында үҙ сыҡҡас, халыҡ телендә ул күптән инде – халыҡ шағиры, халыҡ телендәгене рәсмиләштерергә лә ваҡыт етмәне микән, тигәнерәк уйҙарым менән уртаҡлашҡайным. Уйҙарым фәрештәнең “Амин” тигән сағына тура килде инде әллә, оҙаҡ та үтмәне, хатта шул уҡ йылда, Марат Кәримовҡа “Башҡортостандың халыҡ шағиры” тигән маҡтаулы исем бирелде. Бының менән, шағирҙың яҙмышын хәл итешеүҙә мин дә ҡатнаштым, тип тыйнаҡ ыҙлыҡ күр әтергә йыйынмайым. үҙ бары тик мәҡәлә авторы белдергән фекерҙең рәсми ойошмаларҙа ултырған түрәләрҙең ҡарашына тап килеүе хаҡында ғына барырға мөмкин.

Әҙәбиәткә илле йылдан ашыу тоғро хеҙмәт итеү осоронда Марат Кәримов, күп кенә ҡәләмдәштәренән айырмалы булараҡ, үҙе тура ында яҙылған гәзит-журнал мәҡәләләренә ҡытлыҡ кисермәне. Уның ижадына, аллы-артлы сығып торған шиғри йыйынтыҡтарына тейешле ба а ваҡытында бирелә барҙы.

үҙ сәнғәте тип аталған серле арайҙың туп а ын ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына атлап ингән йәш шағирҙы иң башта Мостай Кәрим күреп шатланды. Шатланды, ләкин башынан ыйпаманы: аҙашының “Бөрөләр” тигән тәүге китабы айҡанлы Балтик буйынан – Рига ярҙары тип йөрөтөлгән ерҙән яҙып алған хатында ул “Башҡорт поэзия ына иҙгер йөрәкле, күтәренке күңелле, үткер күҙле яңы бер шағир килә”,– тип белдер ә лә, йыйынтыҡтағы ҡай ы бер етеш еҙлектәргә ис тә күҙ йомманы. (Йәйәләр эсендә генә бул а ла шуны хәтергә төшөрөп китеү урынлы булыр: Марат Кәримовтың 56 битлек был китабы 1956 йылда баҫылып сыҡҡайны, ә Мостай Кәримдең хаты 1956 йылдың декабрь – 1957 йылдың ғинуар айҙары менән даталанған.)

Артабан Марат Кәримовтың ижад яҙмышы профессиональ тәнҡитселәр әм әҙәбиәт белгестәре ҡарамағына күсте. Улар ара ында йәш шағир тура ындағы тәүге үҙҙе билдәле тәнҡитсе М. Ғәйнуллин ҡатты. Уның үҙен танылған тәнҡитселәр әм әҙәбиәт белгестәре Н.Зарипов, Ә.Хәкимов, С.Сафуанов, Ғ.Хөсәйенов, Р.Бикбаев, Р.Әмировтар ҡеүәтләне. Атаҡлы Назар Нәжми ҙә үҙенең ҡәләмдәш туғанына битараф ҡалманы. Тәнҡитселәр әм ғалимдар ара ында М. Кәримов шәхесенә хатта ҡат-ҡат әйләнеп ҡайтыусылар ҙа булды. Шулай ҙа шағир тура ындағы төп үҙҙе башҡорт әҙәбиәтенең алты томлығында Ғайса Хөсәйенов әйтте, ти әк, ис тә хата булмаҫ.

Бында исемдәре аталған әм аталмаған авторҙарҙың төрлө йылдарҙа яҙылған әм төрлө баҫмаларҙа донъя күргән мәҡәләләрен күҙ уңынан үткәреп, уларҙы яңы факттар, яңы фекерҙәр менән байыт аң, халыҡ шағиры Марат Кәримов тура ында бынамын тигән китап барлыҡҡа килер ине. Ләкин...

...Бынан ун-ун биш йылдар сама ы элек мин Марат Кәримовтың замандашы әм ҡәләмдәше, күренекле шағир Абдулхаҡ Игебаевтың ижады менән етди генә

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 89



шөғөлләнеп алдым. Байтаҡ ҡына материал тупланғайны. Күләмле генә мәҡәлә лә яҙылды. Ул “Йәнле шишмәләр” тигән йыйынтығыма инеп китте. “Ағиҙел” журналында ла донъя күрҙе. Шул мәлдә башҡа ҡыҙыҡлы ғына бер уй килде. Әҙәбиәт, мәҙәниәт, сәнғәт өлкә ендә ирешкән уңыштарҙы билдәләү өсөн республикала төрлө маҡтаулы исемдәр булдырылған. Шулар ара ында, халыҡ шағиры әм халыҡ яҙыусы ынан ҡала, Салауат Юлаев исемендәге премия ҙур урын алып тора. Ул исемде яулаған лауреаттар байтаҡ ҡына булып киткән. Ниңә ошо премия хөрмәтенә “Китап” нәшриәтендә махсус бер серия асып ебәрмәҫкә әм лауреаттарҙың әр ҡай ы ы тура ында дүрт-биш табаҡлыҡ ҡына бул а ла очерк китаптары яҙып баҫтырмаҫҡа?

Уйым менән нәшриәттә уртаҡлаштым. Абдулхаҡ Игебаевҡа бағышланғанын үҙем яҙырға әҙерлегемде лә белдерҙем. Рәссам булма ам да, уйланылған серияның хатта эскиз-макетын да эшләп бирҙем. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, был тәкдим хуплау тапманы. Эскиз да шунда юғалды, буғай. Әгәр ошо хыял тормошҡа ашҡан бул а, бөгөн Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаттарының тормош әм ижад юлын яҡтыртҡан бәләкәй форматлы китап донъяға килгән булыр ине. Ә бындай китаптарға тәү сиратта мәктәп уҡытыусылары мохтажлыҡ кисерә.

Әле бына Рауил Бикбаевтың “Йөрәктә ҡалған эҙҙәр” (“Ағиҙел”, 2000 йыл, 1-се ан), Гөлләрә Назарованың “Тауҙарға талпыныусы шағир” (“Ағиҙел”, 2003 йыл, 6-сы ан), Рәшит Сабиттың “Шиғыр күрке – үҙҙәр балҡышында”(“Ағиҙел”, 2005 йыл, 1-се ан) тип аталған әм Марат Кәримов ижадына арналған мәҡәләләрҙе ҡайтанан уҡып ултырам да, башҡа тағы уй килә. Беҙҙең бит халыҡ шағирҙарыбыҙҙың да аны ундан ашҡан. Ләкин уларҙың тик дүрте е – М.Ғафури, С.Ҡудаш, Р.Нигмәти, М.Кәрим – хаҡында ғына монографиялар бар. Был монографияларҙың да хәҙер мәктәп китапханаларында аҡланыуы- аҡланмауы шик аҫтында. Тимәк, уларҙы яңынан нәшер итеү сара ын күрергә кәрәк. Ҡалған халыҡ шағирҙарының (Н.Нәжми, Ә.Атнабаев, М.Кәримов, Р.Ғарипов, А.Филиппов, Ә.Хәкимов, Н.Мусин) ижадтарын тикшереүгә арналған китаптар яҙырға ла ваҡыттыр инде.

Әгәр ошо хыялдарҙың бере е тормошҡа ашып, Марат Кәримов тура ында очерк китабы яҙыл а, унда, моғайын, шағирҙың XXI быуат башындағы ижадын яҡтыртҡан бүлек тә булыр ине. Сөнки ул яңы быуатта ла әүәлгесә әүҙем әм егәрле эшләй: республикала нәшер ителгән башҡа баҫмаларҙы иҫәпкә алмайынса, тик “Ағиҙел” биттәрендә генә лә ете йыл эсендә биш тапҡыр сығыш я аны әм етмешләп шиғыр баҫтырҙы.

Әүҙем әм егәрле эшләй, тинем дә тағы уйға ҡалдым. Әҙәби ижад, бигерәк тә шиғриәт хаҡында үҙ барғанда был төшөнсәләр урын ыҙыраҡ яңғырамаймы икән? Әүҙемдең яҡынса антонимы – үлпәнлек; егәрленеке – ялҡаулыҡ (быны ы ла – яҡынса, әлбиттә!). Быйыл мин 2001 – 2007 йылдарҙа “Ағиҙел”биттәрендә донъя күргән шиғырҙарҙың әм уларҙың авторҙарының картотека ын төҙөнөм. Бәләкәй генә бул а ла, үҙенә күрә бер антология барлыҡҡа килде. Шул антология-картотекаға күҙ ташла аң, быуат башындағы шиғриәтебеҙ ус төбөндәге кеүек ялтырап ята. Буш үҙ булып яңғырама ын өсөн, бер нисә факт та килтерергә мөмкин.

Әйтәйек, “Ағиҙел”дең ете йыл дауамында нәшер ителгән ик ән дүрт китабында шиғри әҫәрҙәр менән сығыш я аған авторҙарҙың аны йөҙҙән артып китте. Уларҙың ҡырҡ ике е – берәр тапҡыр, ун алты ы – икешәр, ун ете е өсәр тапҡыр баҫылды. Күренеүенсә, ошо дәүерҙә журналда дүртәр, бишәр, алтышар тапҡыр “ҡунаҡта” булыусыларҙың аны әллә ни күп түгел – утыҙлап ҡына. Ә ете йылдың бер генә йылында ла журнал менән араны өҙмәүселәр икәү генә: улар – Тимер Йосопов менән Нәжибә Әминева.

Әҙәби тәнҡит мәҡәлә е өсөн мәҙәгерәк тойолған был “статистика”нан сығып, ирәк яҙышыусыларҙы ис кенә лә әүҙемлектә, егәр еҙлектә, үлпәнлектә, булдыҡ- ыҙлыҡта ғәйепләргә йыйынмайым. Ҡай ы берәүҙәрҙең матбуғат биттәрендә

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 90



онотҡанда бер күренеп ҡалыуҙары, бәлки, файҙаға ғыналыр. Шиғыр ирәк-мирәк тыуа икән, тимәк, тәбиғәттең үҙ менән генә аңлатып бирә алмай торған “ила и мәле” лә ундайҙарҙа ирәгерәк ҡунаҡ булалыр. Ә ил ам ыҙ, көсәнеп яҙған шиғырҙан кемгә әм ниндәй файҙа? Ижад шишмәң урғылып тор а ғына шиғыр тыуа бит. әм ул хужа ынан: “Минең өсөн иңә күпме түләрҙәр икән?” — тип орап тормай — ағыла ла ағыла. Бәхәс еҙ, ундай шиғырҙы ирәк тейә торған ял сәғәттәрендә ләззәтләнеп уҡып ултырыу — үҙе бер ғүмер.

үҙемде туранан-тура Марат Кәримов ижадына күсерер алдынан, лирик сигенеүгә тартым тағы бер иҫкәрмә я амай булмаҫтыр. Үрҙә, андарға таянып, ҡай ы бер факттар килтергән өсөн, был мәҡәләнең авторы шағирҙар ара ында социалистик ярыш ойоштororға йыйынмай микән, тигәнерәк уй тыуып ҡуйма ын. Юҡ, әлбиттә. Ундай фекерҙең башыма ла инеп сыҡҡаны юҡ. Хәйер, ярыш сәме ижадсылар өсөн дә бөтөнләй үк ят нәмә түгелдер инде. Бер-берендән уҙҙырырға, яңы образдар тыуҙырырға, уларҙы тормошҡа ашырыр өсөн таушалмаған үрәтләү саралары ҡулланырға, хәтергә еңеп ҡалырҙай деталдәр табырға тырышыу ғәрлекме ни?

Дөрөҫөн генә әйткәндә, был сифаттар шағирҙарға ғына түгел, әҙәбиәт әм сәнғәт өлкә ендә эшләүсе бөтә ижадсыларға ла (шул иҫәптән — тәнҡитселәргә лә) хас тейештер ул. Марат Кәримов та уларҙан азат түгелдер, моғайын. Юғи ә, башҡорт шиғриәтендә тупланған бай тәжрибәне уғата үҫтереү әм байыҡтырыу өҫтөндә арымай-талмай эшләү дәүерендә ул тәү ҡарамаҡҡа иҫкергәндәй, тапалғандай тойолған темаға ла яңыса ҡараш ташлап, уға йән өрөп, күҙҙең яуын алырлыҡ итеп balҡытып ебәрә алыр инеме ни? Быны мин, М.Кәримовтың шиғриәттә сәмләнеп эшләү өҙөмтә елер, тип уйлайым.

Марат Кәримов элек-электән йор үҙле, юморға әм сатираға әүәҫ шағир булараҡ билдәле. Ҡай ы берҙә: “Был сифаттар уға тыумыштан килгән микән, әллә “ әнәк” журналында оҙайлы эшләгән йылдарҙың бер шауҡымымы?” — тип тә уйлап ҡуйыр ың. Булыр, ике е лә булыр: сатирик журналға юлды тыумыштан тапҡыр үҙлелеге ярыуы ла ихтимал; журналдың да уға ыңғай йоғонто я ауы, тәбиғәттән бирелгән талантын артабан да үҫтерергә әм тормошҡа ашырырға булышлыҡ итеүе мөмкин.

Ҡулына ҡорал тотоп яу яланында ҡанын ҡойған быуын вәкиле булма а ла, Марат Кәримов — ярай ы ғына ҡатмарлы тормош әм ижад юлы үткән әҙип. Шуға күрә уғыш осоронда әм унан уңғы йылдарҙа ил иңенә төшкән ауырлыҡтарҙы башынан кисереп, йөрәге аша үткәргән, заманында ғәҙелдәрҙән-ғәҙел, изгеләрҙән-изге аналған сәйәси әм әҙәби мәктәп ынауҙары аша үткән шағирҙың лирика ы форма йә әтенән дә, йөкмәтке е менән дә ифрат бай әм күп яҡлы икән, ис тә ғәжәпләнә е юҡ.

Шиғриәт хаҡында үҙ сыҡҡанда, иң тәүҙә уның тема әм жанр төрлөлөгөнә иғтибар итергә күнеккәнбеҙ. Мөхәббәт лирика ымы? Фәлсәфәүи лирикамы, әллә граждандлыҡ лирика ымы? Ҡасандыр, бигерәк тә Пушкин менән Лермонтовты өйрәнгәндә, сәйәси лирика, патриотик лирика тигән төшөнсәләр ҙә йыш ҡына ҡолаҡҡа салына торғайны. Сәйәси лирика Европа илдәренең шиғриәтен дә урап уҙмаған. Ул айырыуса ундағы дәүләттәрҙең нигеҙен дер елкеткән ихтилалдар заманында сәскә атҡан, тиҙәр. Әммә, шиғриәттә тема әм жанрҙар төрлөлөгө йәшәргә хаҡлы бул а ла, ул бик шартлы рәүештәлер. Сөнки алтын — саф түгел бит. Шуның ымаҡ, шиғриәттәге төрлөлөктә лә саф килеш кенә күҙаллауы ҡыйын. Быға Марат Кәримов шиғриәте миҫалында ла ышанырға мөмкин.

Быуаттар ҡауышҡанда донъя күргән “Кителгән әйкәл” әм “Ни булды беҙгә, ни булды?” тигән шиғырҙарҙы, мәҫәлән, ҡай ы жанр төрөнә индерер инегеҙ? Формалары йә әтенән улар үтә ғәҙәти: ике е лә дүртәр юллы строфа менән яҙылған. Хатта строфаларҙың аны ла тап килгән: әр ҡай ы ында — етешәр. Юлдарҙағы ижектәр ҙә бер төрлө аралашҡан: 8—7—8—7. Рифмаларҙың теүәллеге хаҡында өйләп тә тора ы юҡ — Марат Кәримов ғүмер баҡый шиғыр техника ына бик иғти-

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 91



барлы булды. “Кителгән әйкәл”дә, әйтәйек, икенсе әм дүртенсе юлдар рифмалашҡан. Был юлдарҙағы уңғы үҙҙәр эске яңғыраштары менән генә түгел, күп осраҡта ундағы уңғы ижектәрҙең йә ауаздашлығы, йә бөтөнләй тап килеүе менән дә айырылып тора: “ үҙҙәре—элгәре”, “арбаған – арбанан”, “алдарға—аңларға”, “ аҡлай ың – яҡлай ың”, “сайҡала – ни ҡала” .б. “Ни булды беҙгә, ни булды?”ла ла шундай уҡ теүәллек: “алҡыштарҙан – балҡыштарҙан”, “ташыу – яҡынлашыу”, “хәҙер – әҙер”, “танымаҫлыҡ – ҡабынмаҫлыҡ”.

Хәҙер был шиғырҙарҙың йөкмәтке енә иғтибар итәйек. “Кителгән әйкәл”дең лирик геройы беҙҙең бөгөнгө ысынбарлығыбыҙ хаҡында уйлағанда “хәҙрәти” Пушкиндың “Кавказ тотҡоно” тигән поэма ы әм “ әйкәл” тигән шиғыры ара - ында нисәмә йылдар буйы йәшәп килгән, ләкин бығаса ябай уҡыусы күҙенә бигүк бәрелеп тормаған идея ҡаршылығын иҙеп ҡала. Баҡ аң, “ әйкәл” шиғыры тунгустарға, ҡалмыҡтарға, Рәсәйҙә йәшәгән башҡа халыҡтарға ихтирам тойғо о менән уғарылған бул а, “Кавказ тотҡоно” поэма ында и ә бөйөк Пушкин Кавказ халыҡтарын ҡоллоҡҡа төшөрөүҙе яҡлаған икән дә ба а. Атаҡлы шағир ижадындағы был ҡаршылыҡҡа күҙе асылған лирик геройҙың ғәйрәте ҡайта, әм мәктәп йылдарынан бирле унаң күңелендә яралған әйкәлдең бер ташы кителеп төшкәндәй була. Ләкин М. Кәримовтың “Кителгән әйкәл”дә әйтергә теләгәне, минеңсә, Пушкин әҫәрҙәрендәге “ҡаршылыҡ”ты (“Кавказ тотҡоно”н яҙғанда уға ни бары 21 йәш тирә е булғанлығын, өҫтәүенә, был поэманы ул күньяҡта өргөндә ятҡан саҡта ижад иткәнлеген, тағы килеп “Смирись, Кавказ: идет Ермолов!” тигән юлдың поэма эсендә түгел, ә бары тик уға уңынан өҫтәгән эпилогта ғына урынлашыуын иҫкә алғанда, әле үҙ барған ҡаршылыҡ, бәлки, Пушкин ғәйебе менән дә барлыҡҡа килмәгәндер әм шуға күрә бөтөнләй үк ғәфү ителмәҫлек тә түгелдер?) фашлауҙан да бигерәк, шул замандағы ҡай ы бер күренештәр, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, беҙҙең көндәрҙә лә үҙҙәрен иҙҙереп ҡуйғылай, тигән фекерҙер. Юл ыңғайында хәтерегеҙгә төшөрөп үтәйем: үҙ ваҡытында ошоға тартым мотив Назар Нәжмиҙең “Мискә”(1994) тигән шиғырында ла яңғырап киткәйне. М.Кәримовтың “Кителгән әйкәл”енә килгәндә и ә йөкмәтке е йә әтенән ул – бик үткер, художество эшләнеше яғынан теүәл, ыҡсым әҫәр. “Түбән бейеклек” тигән оксиморон, юмор әм ирония аңҡып торған “Шул арбауҙар инде төшөп ҡалды минең арбанан” кеүек юлдар шиғырҙың төбөндә ятҡан кинәйәле фекерҙе уғата ла көсәйтеп ебәрә. Был әҫәрҙә М. Кәримовтың эстетик ҡараштары ла сағылып китә. “Ирек әм азатлыҡ – шағир өсөн үҙ башы” тигән девизды алға өрә ул Пушкиндың “Кавказ тотҡоно” исемле поэма ы хаҡында уйлағанда.

“Кителгән әйкәл”де Марат Кәримовтың быуат башындағы ижадында Кавказ тема ын асып ебәреүсе әҫәр тип тә атарға мөмкин. Сөнки был әҫәрҙең төбөндә ятҡан кинәйәле фекер унаң артабанғы “Блокпоста”, “Оҙатыу”, “Госпиталдә”, “Хәрби сводка” тигән шиғырҙарында бер ниндәй ым-ишара ыҙ, туранан-тура ярып алынған. “Блокпоста” исемле шиғырҙа, мәҫәлән, икегә бүленгән ябай кешеләр бер-бере ен атып үлтерәләр, “ер ҡанға бата”, ә шул ваҡытта “кемдәрҙер аҡыл ата”. Яңғырашы буйынса шиғырҙа бер аҙ ирония саткылары иҙелеп ҡал а ла, йөкмәтке е йә әтенән ул шаян-көлкөнән бик алыҫ тора. “Гильза сәсрәй, пуля бейей” кеүек метафораларҙы, тауышҡа оҡшаған өндәрҙе ҡабатлау аша автор блокпостағы драматик хәлдәрҙе йәнле итеп күҙ алдына килтереп баҫтыра.

“Хәрби сводка” тигән шиғырҙа и ә ирония саткылары иҙелеп кенә ҡалмай, ә күҙгә бәрелеп тора. Бәрелештәр ваҡытында ике яҡта ла ҡорбан булыусылар аның бик примитив ысул менән иҫәпләнеүенә ишара я ала унда. “Туҡ сырайлы генералдар”ға ла “өлөш” сыҡкан бында. Ошондай сетерекле теманы яҡтыртҡанда авторҙың ифрат оҫта дипломат икәнлеге лә иҙелә.

Ә бына “Оҙатыу”, “Госпиталдә” тигән шиғырҙарҙа юморға ла, иронияға ла урын ҡалмаған – уларҙы үпкә тойғо о әм әсе күҙ йәше алмаштырған. “Оҙа-

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 92



тыу"ҙың исеменә үк тәрән мәғәнә төрөлгән: оҙатыу, хушлашыу күренеше кешелә әр саҡ шом уята, йөрәкте ыҙлата. Әлеге конкрет осраҡта и ә үҙ йәш алдатты башта Кавказға оҙатыу, унан уң "ҡурғашлы табутта" әйләнеп ҡайтҡан өлөктәй егетте, "зар илап", ҡәбергә оҙатыу хаҡында бара.

"Госпиталдә" тигән шиғырҙа ла шундай уҡ аяныслы хәл үрәтләнгән. Ҙур начальник яраланып госпиталгә эләккән уғышсыларға орден, миҙал таратып йөрөй; рухландырып, алдаттарҙың арҡаларынан да ҡағып ала. Арала берәү е миҙалды ҡабул итә алмай, сөнки уның ҡулдары юҡ – яу яланында өҙөлөп ҡалған. Бөтә фажиғә әм әрнеш тә бына ошонда. Үҙенән-үҙе "Ул орден, миҙалдың ни хәжәте?" тигән орау тыуа; кемдәрҙендер иҡтисади-сәйәси мәнфәғәттәрен ҡурсалау ниәтенән, кемдәрҙендер саманан тыш көсәйеп киткән нәфселәрен ҡәнәғәтләндереү өсөн башлап ебәрелгән уғыш әм оҙаҡҡа уҙылған ҡан ҡойош уҡыусыны уйға алмай ҡалмай, әлбиттә.

Йөкмәткеләре буйынса Марат Кәримовтың Кавказ шәлкеменә ингән шиғырҙары бигүк ҡыуанyслы булма а ла, эшләнештәре яғынан юғары кимәлдә. Был юғарылыҡтың бер сере шағирҙың тел байлығында бул а, икенсе е – шул байлыҡтан оҫта файҙаланыуҙа. Дүртәр юллы дүрт строфанан торған "Оҙатыу" шиғырында, әйтәйек, 1-се, 2-се, 4-се юлдарҙағы уңғы үҙҙәрҙең ауаздаш булыуҙары, уларҙа хатта ижектәр анының да тап килеүе, тартынҡы әм уҙынҡы өндәрҙең билдәле бер тәртиптә аралашыуы – быға асыҡ миҫал. "Госпиталдә" тигән шиғыр ҙа "Оҙатыу"ҙан ҡайтыш түгел: күләме менән дә, рифмаларҙың теүәллеге йә әтенән дә. Кәрәкмәгән бер генә үҙ ҙә тапмаҫ ың был шиғырҙа. "Хәрби сводка"ла строфалар аны күберәк, әммә әр строфаның 2-се, 4-се юлдарындағы уңғы ижектәр шул тиклем теүәл рифмалашҡан – улар бер-бере енән айырып алғы ыҙ.

М. Кәримовтың егерменсе быуат аҙағындағы ижадын күҙ уңында тотоп, Ғ. Хөсәйенов былай тип яҙғайны: "Шағир кешене замандың баҙар мөнәсәбәттәре, кирегә боролоу күренештәре, дәүерҙең төрлө алып атарҙары, йәнҡыярҙары, ҡырағайлыҡтар аптырата, күңеленә оло шом, хәүеф ала" (Башҡорт әҙәбиәте тарихы, 6-сы том, 1996, 407-се бит).

Шағир күңелендә хәүеф-хафа, шик-шом уята торған сәбәптәр, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, яңы быуатҡа аяҡ баҫҡас та үҙҙәрен иҙҙереп кенә тора. уңғы йылдарҙа ижад ителгән "Ни булды беҙгә, ни булды?", "Ҡазанда абантуй", "Эх, донъя ы!..", "Эмигрант", "Туҡай кәрәк", "Күңелдәрем тыныс түгел", "Кемдең урыны ҡайҙа?", "Милләтебеҙ", "Алдан әле", "Бар ине" тигән шиғырҙар – тап ана шул сәбәптәрҙең асыҡ бер кәүҙәләнеше.

"Ҡазанда абантуй" исемле шиғырҙың нигеҙендә реаль факт ята. Ул фактты радионан ишетеп йә и ә телевизорҙан күреп белмәгән уҡыусы аҫәрҙе бигүк аңлап та бөтмәҫкә мөмкин. Ә бына шағир ошо факттан бик оҫта файҙаланған . Ҡатыҡ алған ауыттан биш тинлек бер баҡырҙы " ә" тигәнсе эләктергән ил хужа ын хуплап, аяҡ тибеп ҡул сапҡан тамашасыны күҙәтеп ултырғанда, ул бына ниндәй уйҙар кисерә:

*– Баҡыр тинде, ай, тиҙ тапты!*
*– Шулай ҙа ул шулайын,*
*Белә микән уң ул ситкә*
*Күпме алтын шыуғанын?*

Шулай итеп, бәләкәй генә бер деталь ярҙамында ис көтмәгән ерҙән тәрән йөкмәткеле ҙур өҙөмтә я ап ҡуйылған.

"Эх, донъя ы!.." тигән шиғырҙа бөгөнгө донъябыҙ әм беҙҙе сорнап алған ысынбарлыҡ ҡоҙғон оя ына тиңләнгән.

*Йәнебеҙҙе суҡый ул,*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 93



*Беҙгә ясин уҡый ул.*
*еҙ бит беҙҙең өсөн генә,*
*Тип туҡтау ыҙ туҡый ул, —*

тигән юлдар әм уларға төрөлгән фекер менән килешмәй сара юҡ. Стиле буйынса шиғыр юморға тартым тойол а ла, уның төбөндә әсе хәҡиҡәт ята. Әҫәрҙең йәйәләр эсендәге “Күңел еҙ минуттарҙа” тигән өҫтәмә атама ы ла юҡтан ғына хасил булмағандыр.

М. Кәримов стиленә хас юмор алымы уның “Эмигрант” исемле шиғырында ла иҙелеп тора. Әйтергә кәрәк, юмор аша әҫәрҙә ярай ы ғына етди мәсьәлә күтәрелгән әм ул мәсьәлә әлеге лә баяғы шул “үҙгәртеп ҡороу” сиренең өҙөмтә е булараҡ алға килеп баҫҡан. Ил тарҡалғас, лирик герой әм уға тиндәр — эмигрантҡа, ә олигархтар ерле халыҡҡа әйләнгән, йәнә е:

*Илдән илгә күстем дә ул,*
*Ерем ҡалды шул килеш.*
*Баҡ аң, ошо үҙ еремдә*
*Мин дә эмигрант, имеш.*
*Ерле халыҡ тигәндәре*
*Олигархтар икән,*
*Улар и ә ергә ыймай,*
*Киң донъялар тар икән.*

“Туҡай кәрәк” тигән шиғыр ҙа бик фә емле. Унда беҙҙең көндәр Туҡайҙы атҡан Бесән баҙары менән сағыштырылған: “Күр, илебеҙ оҡшап ҡалған ҙур бер бесән баҙарына”. Әҫәр быndай юлдар менән тамамлана:

*Етемлекте үҙе еңгән*
*Туҡай рухлы ирҙәр ирәк.*
*Беҙҙе үргә әйҙәр өсөн*
*Туҡай кәрәк! Туҡай кәрәк!*

Алтышар юллы өс строфанан торған “Күңелдәрем тыныс түгел” тигән шиғырҙың лирик геройы и ә үҙенең эске халәте менән уртаҡлаша. Буш вәғәҙәләр, илде баҫҡан ас дейеүҙәр уның күңелен тыныс ыҙландыра. Төҙөлөшө йә этенән дә әҫәр бик үҙенсәлекле. Строфаларҙың өсө ө лә “А , күңелем тыныс түгел” тигән юл менән башлана, ике е — “Шун ыҙ күңелем тыныс түгел”, өсөнсө ө “Шуға күңелем тыныс түгел” тигән юл менән тамамлана.

“Кемдең урыны ҡайҙа?” тигән шиғырҙа ла беҙҙең заманға хас көнүҙәк мәсьәлә яҡтыртылған: төрмәлә ултыра ы урынға, ҡараҡтар ҙа, бандиттар ҙа — үрҙә, түрҙә, “улар өҫтөн закондан”. Шиғырҙың төп мәғәнә е уның уңғы юлында асыҡланған:

*Тормошобоҙ “бар” әм “юҡ”тың*
*Ара ында тирбәлә.*
*Уйлап ҡуям: улар түгел,*
*Беҙ икән дә төрмәлә.*

Заман еле, заман тема ы “Милләтебеҙ” тигән шиғырҙы ла урап уҙмаған. Бында улар, бәлки, көслөрәк иҫеп, көслөрәк яңғырай торғандыр әле:

*Ил арба ы тәгәрмәс еҙ,*
*Күсерме эскән атып?*
*Әй, өйрәйбеҙ шул арбаны*
*Ҡара тирҙәргә батып.*

“Милләтебеҙ”шиғырына ойотҡоно Туҡайҙың “Беҙ уғышта арыҫландан көслөбөҙ. Беҙ тыныста аттан артыҡ эшләйбеҙ” тигән юлдары алған: татар классигының ошо үҙҙәрен башҡорт халыҡ шағиры үҙ әҫәрендә эпиграф итеп алған.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 94



Хәйер, эш эпиграфта ғына ла түгел. Эске а әңе менән “Милләтебеҙ” үрҙә тикшерелгән “Туҡай кәрәк”тең дауамы шикеллерәк ҡабул ителә: ике шиғыр ара ындағы фекер уртаҡлығын иҙмәү мөмкин түгел. Туҡай мираҫынан оҫта файҙаланып, “Милләтебеҙ”ҙең авторы ике халыҡтың да зыялыларын уйға ҡалдырырлыҡ өҙөмтәгә килгән:

*Арыҫланлыҡ онотолған,*
*Ат эше — беҙҙең ғәмәл.*
*Йөк тартырға егелгәнбеҙ,*
*Ҡотолорға юҡ әмәл.*
*Ҡайҙа тимер тәртәләрҙе*
*Емерерлек йылғыр саҡ?*
*Боролорға ла ирек бирмәй*
*Тәртә, ҡамыт, ыңғырсаҡ.*

“Алдан әле” тигән шиғырға ыйған фекер бәләкәйерәк бер поэманы тәшкил итерлек. Лирик герой донъяға килгәнсе үк әле уны әм уның замандаштарын ҡара алабута ашы, киндер күлдәк-ыштан көтөп торған. Улар быуыны ыйыр егеп, баҫыуҙа абан өргән, ҡара тирҙәр түгеп, ҙурҙар менән бер ҡатарҙан эшләгән; тыштан властарҙы маҡтап, эстән үккән. Ләкин бары ына түҙгәндәр. Хәҙер килеп, оҙон ҡулдар ил байлығын кеҫә енә алғандар, ә теге түҙем быуын йәнә ярыҡ ялғаш янында ҡалған. әм ошонда лирик герой, ни айәт, үҙенең характерын күр әтә:

*Етте, етте, артып китте*
*Беҙ күрергә яҙғандары.*
*Килер быуындарғалыр ул*
*ынауҙарҙың ҡалғандары.*

Шиғырҙың исеменә йәшерелгән мәғәнә уның уңғы строфа ында асыҡлана:

*Мин ышанам: беҙгә тигән*
*Матур көндәр алда әле.*
*...И, бер ҡатлы, гел алдандың,*
*Тағы бер ҡат алдан әле.*

Ҡарап тороуға М. Кәримовтың лирик геройы ярай ы ғына тура үҙле бул а ла, ул юҡҡа-барға лаф ороп ғауға күтәреүсе лә, буш үҙ өйләп ваҡыт әрәм итеүсе лә түгел. уңғы ваҡытта атлаған айын тиерлек үҙгәреп торған донъя хәлдәрен йөрәгә аша үткәргәндә, башта ул мотлаҡ был хәл-ваҡиғаларҙың асылына төшөнөргә әм шунан уң ғына уларға тәғәйен ба а ын бирергә тырыша. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, өмөтө ҡаҡшап, күңеле ҡайтҡан саҡтары ла, аптырау арба ына ултырған мәлдәре лә булғылай уның. Ошо йә әттән “Бар ине” тигән шиғыр бик ғибрәтле тойола. Уны илебеҙ тарихынан алынған айырым биттәргә тиңләргә мөмкин. Үҙ халҡы йүнле-башлы икмәккә лә туймаған саҡта, мәҫәлән, ул ил әллә ҡайҙағы илдәрҙең тамағын туйҙырған. Ара-тирә ул ил “тыңламаған күршеләрен ҡыйнаған” икән. Шул уҡ илдең ҡай ы бер “етәкселәре нәфсе ен тыймаған”. “Шул хәлдә лә” ул ил “тормош йөгөн тарталған”. Ләкин ошо илде тарҡатҡандан уң бағланған яҡты өмөттәр ис кенә лә аҡланмаған:

*Өр-яңы ил төҙөйбөҙ, тип*
*Ҡабынған саҡ бар ине,*
*Эш сыҡмағас, элекке ен*
*ағынған саҡ бар ине,—*

тиергә мәжбүр лирик герой. Шиғырҙың елеге уңғы строфалалыр:

*Бар ине, тип яҙған саҡта*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 95



*Эсем тулы зар ине.*
*Зар ыҙ “бар”ҙың була ына*
*Өмөттәрем бар ине...*

Шиғырҙың атама ына тәрән фекер төрөлгәнлеге әм унын күп мәғәнә аңлатҡанлығы тура ында үҙ ҡуйыртып тороуҙың хәжәте юҡтыр бында. Ысынлап та, бер ғүмер арауығында ғына ла беҙ тормоштоң ыңғай ҙа, тиҫкәре лә яҡтарына әҙ ша ит булманыҡ. Шул ыңғай әм тиҫкәре күренештәр хаҡында шағирҙың, үрҙә әйтелгәнсә, уҡыусыға дөрөҫтө өйләргә тырышыуы унын үҙ намыҫына тоғролоҡ аҡлауынан киләлер. Я алма рәүештә түгел, ә фәҡәт йөрәге ҡушҡанса ғына.

Өҫтәрәк М. Кәримов шиғриәтендә жанрҙар төрлөлөгө, темалар байлығы хаҡында үҙ сыҡҡанда “Ни булды беҙгә, ни булды?” тигән әҫәр телгә алынғайны инде. Дүртәр юллы ете строфанан торған был традицион шиғыр заманалар үҙгәреү менән рухи донъябыҙҙың иҙелеп ярлылана барыуы, үҙҙең, хатта шиғырҙың да ҡәҙере китә башлауы тура ында.

*Ғәжәпме ни! Шиғыр бит ул —*
*Ярҙарға ыймай ташыу,*
*Күктәргә ашыу, Алланың*
*Үҙенә яҡынлашыу,—*

тигән юлдарҙа йәнә шағирҙың эстетик ҡараштары сағылып киткәндәй була. Элек халыҡ шиғри үҙҙәргә алҡышла а, хәҙер и ә бәндә тиндәр, умдар өсөн йәнен бирергә әҙер, ти ул. Шиғриәт Аллаға тиңләнә икән, тимәк, унын кешегә я аған йоғонто о әм көсө тиндәр- умдар менән генә ба алана алмай.

Тик ошонда бигүк аңлашылып бөтмәгән, бер аҙ ҡаршылыҡлы фекер уята торған хәл килеп тыуғандай була. Совет хөкүмәте ҡыйратылғанға шатланып, мәсеттәр, сиркәүҙәр төҙөлгәнгә ҡыуанып, иманыбыҙға кире ҡайтабыҙ, тип өрән алдыҡ- алдыҡ та хәҙер и ә:

*Алланан кире китәбеҙ,*
*Көн шуға ҡалып бара.*
*Алланан кире киткән юл*
*Иблискә алып бара...—*

тип күр өнөп ҡуябыҙ түгелме уң? Тимәк, мәсеттәр, сиркәүҙәр төҙөп кенә күңелдәрҙе таҙартып, рухыбыҙҙы байытып булмай? Иблислектән ҡотолоу өсөн, бәлки, башҡа саралар эҙләргә әм табырға кәрәктер?

үҙ бында “Ни булды беҙгә, ни булды?”ла үткәрелгән идеяны инҡар итеү хаҡында бармай, әлбиттә. Кире енсә, шиғриәттең бәҫен әм ә әмиәтен күтәреүгә, уны әр төрлө нахаҡтан, тупаҫлыҡтан, бысраҡлыҡтан ҡурсалауға, яҡлауға йүнәлтелгән был идея бары тик хуплауға ғына лайыҡлы. Шиғырҙы, шиғриәтте Аллаға тиңләүҙең дә әллә ни зыяны юҡтыр. Был сағыштырыуҙы, автор тарафынан уңышлы әм урынлы файҙаланылған бер әҙәби алым, тип кенә ба аларға мөмкин.

Үҙенең Октябрь революция ына тиклем үк яҙылған поэмаларында рустың билдәле шағиры Владимир Маяковский Алланың әҙәми зат ҡиәфәтендә индерелгән ынын да кәүҙәләндергән, юғи ә. Ләкин бик тәрәндә ятҡан, төрлө ҡараштар тыуҙырған, төрлө уй-фекерҙәр уятҡан, бынан күп быуаттар элегерәк төрлө илдәрҙә йәшәгән төрлө халыҡтарҙы, хатта үҙ-ара ҡан ҡойоуға тиклем илтеп еткергән ила и йолаларҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе ашҡына-ашҡына тергеҙгән саҡта, уларға, ис шик еҙ, ихтирам күр әтеү менән бер ҡатарҙан, ҙур аҡлыҡ менән дә ҡарау хәйерлерәк түгелме икән? Артыҡ мауығып китеп, бер-беребеҙҙе “бәҙрәфтә еүешләтеү”гә барып етмәйек, тиеүем.

уңғы ваҡытта шағирҙар, тәнҡитселәр, публицистар лексиконында “Заман башҡа — заң башҡа” тигән үҙбәйләнеш күҙгә йышыраҡ салына башланы. Афоризмдырмы ул, фразеологик берәмектерме, әллә бер юлы ике ролде лә үтәй тор-

ғандырмы — уны ын тел белгестәренә ҡалдырайыҡ. Әлеге осраҡта и ә ошо өйләм М. Кәримовтың “Шағир әм палач” тигән шиғырын төптәнерәк аңларға ярҙам итә ымаҡ. Шәйехзада Бабичтың фажиғәле үлеменә ҡағылышлы конкрет материалға таянып яҙылған был шиғыр бик тәрән әм көслө дөйөмләштереүгә эйә: палач — ҡыҙылмы ул, аҡмы — барыбер палач. Автор бында ла үҙ стиленә тоғро ҡалған. Мысҡыл ҡатыш көләм өрәп, бына нимә ти ул:

*Хәҙер атта өйрәтеү юҡ,*
*Ысулдары бар алмашҡа.*
*Ни ти әң дә, прогресс бит,*
*Заман башҡа — яза башҡа.*

Бер аҙ уңыраҡ ижад ителгән “Татыуҙар ҡәберлеге” тигән шиғыр нимә е менәндер “Шағир менән палач”ка ауаздаш ымаҡ. Йөкмәтке е менән — уйландырырлыҡ. Туранан-тура әйтелмә ә лә, ил күләмендә XX быуат башына хас булған хәл-ваҡиғалар хәҙерге көн менән сағыштырыла унда:

*Яуҙар беҙҙең ауылды ла*
*Ҡанға батырып үткән,*
*Ҡыҙылдар ҙа шә ит киткән,*
*Аҡтар ҙа шә ит киткән.*
*Ҡорбандарҙы бер үк ергә —*
*Бер ләхеткә күмгәндәр.*
*Дошманлыҡтың ни икәнен*
*Беләме ни үлгәндәр!*
*Әгәр уйла аң үткәнде,*
*Уйла аң хәҙергене,*
*Тотош Ер шары үҙе лә —*
*Татыулыҡ ҡәберлеге.*

Шиғырҙың тема ы ла, идея ы ла унын уңғы дүрт юлына төрөлгән:

*орауым бар, яуабым юҡ:*
*Йәшәү терәге ҡайҙа?*
*Аҫты өҫкә әйләндерер*
*Заман төрәне ҡайҙа?..*

Әйтергә кәрәк, М. Кәримов “үҙгәртеп ҡороу” осорона хас киҫкен факттарҙы, көсөргәнешле хәл-ваҡиғаларҙы шиғри юлдарға алыу менән генә сикләнмәй, бәлки, уларға ҡарата үҙенең шәхси мөнәсәбәтен белдерә, шуны уҡыусы менән дә уртаҡлаша. “Дуэлянт” тигән шиғырҙа, мәҫәлән, ул, батша Рәсәйе заманында армияла хөкөм өргән тәртипте оҫта файҙаланып, иҫ киткес тәрән фекер әйткән. Шиғырҙың урта ындағы:

*Маяҡ ыҙ ил, аяҡ ыҙ ил,*
*Иман ыҙ ил ҡайҙа бара?*
*Ирек еҙҙән иҫкә төшә,*
*Офицерҙар, еҙҙең сара,—*

тигән юлдарҙан түгел, бөтә шиғырҙан гражданлыҡ пафосы аңҡып тора. уңғы дүрт юлда лирик геройҙың, офицерҙар шәйенә инеп, беҙҙең замандың намыҫ ыҙҙары менән дуэлгә сығырға әҙер булыуы хайран ҡалырлыҡ:

*Честь имею! Намыҫлымын!*
*Килмәй башҡа зарлана ы.*
*Мин —дуэлянт! Барьерға баҫ,*
*Намыҫ ыҙҙар замана ы!*

Гражданлыҡ пафосы быуат башында яҙылған “Беҙ — бер бөтөн” тигән шиғырҙа ла көслө яңғырай. Шиғырҙың нигеҙендә “ Айырылғанды — айыу,

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 97



бүленгәнде бүре ашар” тигән халыҡ мәҡәле ята. Әҫәр, илде “үҙгәртеп ҡора башлағас”, “билдәлелек” тигән уйҙырманың өҙөмтә е булараҡ, төрлө милләт халыҡтары ара ында килеп сыҡҡан ығы-зығыларҙың асыҡ бер сағылышы булып ҡабул ителергә хаҡлы. Ҡарап тороуға ябай ғына күрен ә лә, йөкмәтке е менән уйға алырлыҡ. Әйтәйек, “Төрлө милләт – тигеҙ хөрмәт, тигеҙлектә булмай өҫтөн” тигән фекер үҙе генә лә ни тора! Шиғырҙың авторы берҙәмлекте, бергәлекте яҡлап сыға, халыҡтарҙы айырылмаҫҡа, бүленмәҫкә саҡыра.

М. Кәримов шиғриәтендә беҙҙең заманға хас глобаль проблемаларға ла урын юҡ түгел. Шағирҙы бигерәк тә кешенең тәбиғәткә ҡарата бәғер еҙлеге, йыш ҡына унаң менән аҡ ыҙ, хатта тупаҫ мөғәләмә итеүе борсой. Тәү ҡарамаҡҡа шиғриәттән алыҫ торған тема ымаҡ тойол а ла, шағир уны поэтиклаштырыу өсөн тейешле сара ын таба. “Нисек ҡала ы” тигән шиғырҙа, мәҫәлән, ул, күрер күҙгә бигүк бәрелеп тормаған йәнәшәлек аша, ғәйәт төптәрәк ятҡан мәсьәләне күтәрә – кеше әм уны уратып алған мөхит тема ы иҙмәҫтән кеше әм власть тема ына күсә. Тәбиғәт бала ы булғанлығын онотоп, үҙен унаң батша ы итеп тоя башлаған кешегә көтөлмәгән бәлә-ҡазалар ябырыла башлай:

*Йә, әйтегеҙ, батшаларҙан*
*Кем уң күргән игелек?*
*Күпме йәшәп була шулай*
*Иҙелеп тә тибелеп?*
*Хатта сабыр тәбиғәттең*
*Түҙемлеге ҡаҡшаны,*
*Тәхетенән төшөрмәксе*
*Самозванец батшаны.*

Цунами, торнадо, ер тетрәүҙәр, вулкандарҙың йәнләнеүе, ағыулы ямғыр кеүек катаклизмдарҙы анап үтә лә уңғы строфала шағир төп үҙен әйтә:

*Тәбиғәттең бына шулай*
*Үҙен аҡлау сара ы.*
*Беҙгә нисек батша түгел,*
*Бала булып ҡала ы?*

Үрҙә Марат Кәримовтың эстетик ҡараштарына бәйле үҙ сығып ҡуйғайны. Шуға бер аҙ туҡталып китеүҙе урынлы анайым. Әлбиттә, әҙәбиәт әм сәнғәт ә елдәренең (шағирмы ул, прозаикмы, драматургмы, рәссаммы, режиссермы) эстетик зауыҡтары тура ында төплө әм тәрән фекер йөрөтөү өсөн уларҙы бөтә ижады менән яҡшы таныш булыу мотлаҡ. Был талаптан М.Кәримов та ситтә ҡала алмай. Илле йылдан ашыу шиғриәт өлкә ендә ярай ы уҡ әүҙем әм уңышлы эшләп килгән шәхестең эстетик ҡараштары бай әм фә емлелер, тип уйлайым. әм ул махсус тикшереүҙе көтә. Бында и ә, артыҡ төпкә төшмәйенсә, унаң яңы быуатҡа аяҡ баҫҡас ижад ителгән “Шағир аэродромы”, “Шиғырсылар”, “Минең үҙҙәр”, “ уңғы нөктә”, “Ил ам ҡошо менән өйләшеү” тигән шиғырҙары хаҡында бер нисә үҙ әйтеп үтергә иҫәп.

“Шағир аэродромы” – ифрат оригиналь шиғыр: Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжмиҙең күркәм ижады унаң тыуған ауылы Миңештенең символик образын мәңгеләштереүгә килтергән. Ләкин эш тышҡы биҙәктә генә – Миңештене аэродромға тиңләүҙә генә түгел. Фекер төптәрәк ята:

*Назар Нәжми киң донъяға*
*Осмағанмы ошонан?*
*Унаң үлмәҫ йырҙарына*
*еҙҙең моңдар ҡушылған.*
*Ул бит осҡан ошонан.*
*Шағир шағир буламы ни*
*Йыры ерҙә тыума а?*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 98



*Рухы кире ҡайтмаҫ ине,*
*Ҡуныр урын булма а.*
*Йыры бында тыума а,–*

тип раҫлап, автор “тыуған ере талантлы шағирға ил ам биреп, ҡанат ҡуй а, исеме бөтә илгә таралған шағир и ә, үҙ сиратында, тыуған еренә дан өҫтәй” тигән идеяны алға өрә әм унын менән еңешкән берәүҙе ошо идеяға күндерә.

М. Кәримовтың эстетик талаптары унын “Шиғырсылар” тигән әҫәрендә бик асыҡ сағылған:

*Йыйын юҡ-бар яҙыусыға*
*Рифма табылып тора.*
*Шиғырсыға шағир тигән*
*Исем тағылып тора.*

Автор шағир менән шиғырсы ара ында ҙур айырма ятҡанлығына ишара я ап ҡына ҡалмай, уға хатта төртөп күр әтә. әм, рифмалар табылып тор а ла, шиғри юлдар әтмәләгән әр кем шағир була алмай, тигән фекерҙе ҡеүәтләй. Юл ыңғайында шуны ыҙыҡ өҫтөнә алып әйтергә мөмкин: әҙәбиәткә әм сәнғәткә булған юғары талапсанлыҡ М.Кәримовтың элегерәк яҙылған шиғырҙарында ла иҙелеп торҙо. Был талапсанлыҡ йыш ҡына юмор ҡалыбына алып бирелеүсән булды.

Марат Кәримов эстетика ында үҙҙең көс-ҡеүәтен ба алауға, унын бәҫен аҡлауға,ҡәҙерен белеүгә ҙур ә әмиәт бирелә. Ошо йә әттән унын строфаларға бүленмәгән “Минең үҙҙәр” тигән ун алты юллыҡ шиғыры бик үҙенсәлекле. Автор ҡарашынса, әгәр күрә әм тоя бел әң, үҙҙең ҡеүәте беҙҙе уратып алған бөтә мөхиткә таралған. Уны дауылдарҙа ла, бурандарҙа ла, урмандарҙа ла, Иҙел тауышында ла, ғашиҡтар күңелендә лә, андуғаслы таңдарҙа ла иҙемләргә мөмкин:

*Шул ибелгән үҙҙе йыйып ала ы бар,*
*Йыйып алып,шиғри көйгә ала ы бар.*
*Берәй енә кәрәге лә тейеүе бар,*
*Был шағирға рәхмәт инде, тиеүе бар...*

Йөкмәтке е менән “ уңғы нөктә” тигән шиғыр ҙа бик тормошсан яңғырай. Унын лирик геройы дуҫтар әм дошмандар хаҡында фекер йөрөтә. Дошман ин үлгәс тә дошман булып ҡала – йылан шикелле, инең исемеңде сағыуын дауам итә. Лирик герой и ә, ерҙән киткәс, унын өсөн уңғы үҙҙе барыбер дуҫтары әйтеренә, уңғы нөктәне лә улар ҡуйырына өмөтләнә.

Башҡортса ла, татарса ла бер төрлө яҙыла торған бик матур бер үҙ бар. Ул – ил ам. Рус телендә лә йәм еҙ түгел был үҙ. Ни өсөн шулай? Сөнки унын йөкмәтке е матур. Өс телдә лә ул башлыса шиғри әҫәрҙәрҙә йышыраҡ ҡулланыла. Шул уҡ ваҡытта ул үҙе лә шиғри әҫәрҙәр ижад иткәндә алыштырғы ыҙ ярҙамсы булып тора. Бына ошо үҙгә тағы берәүҙе өҫтәп, М. Кәримов “ил ам ҡошо” тигән үҙенсәлекле генә символик образ тыуҙырған. Хәтерләмәйем, быға тиклем шиғриәттә был образ булғандырмы, юҡмы, әр хәлдә “ил ам шишмә е”, “ил ам сығанағы”, шунын кеүек башҡа үҙбәйләнештәренә иш янына ҡуш ул. “Ил ам ҡошо менән өйләшеү” тигән шиғырҙа и ә был образ йәнле кешегә әйләнгән, әм шағир хәтеренә төрөлгән бына был үҙҙәрендә шаянлыҡ та, етдилек тә бергә ҡушылған:

*– Календарҙа ҡыҙыл көндәр*
*“Ял ит” тиеп тора ҡотлап.*
*Уларҙы ла отпускыға*
*Плюслатып ҡуйыу мотлаҡ.*

Шағир “Ил ам ҡошо”ноң отпускыла булыуы менән килешә килешеүен, әммә “бөтөнләй юҡ була күрмә ен” тигәнерәк хәүефен дә йәшермәй. М. Кәримовтың күп кенә шиғырҙарына хас булғанса, быны ы ла юмор саҡыларынан мәхрүм түгел:

*–Ил ам ҡошом, берүк мине*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 99



*Ике ҡул ыҙ итә күрмә.*
*Күпме кәрәк — ял ит, әммә*
*Пенсияға китә күрмә!..*

Әҙәбиәт әм сәнғәт ә елдәренең эстетик ҡараштары уларҙың ҡәләмдәштәренә, сәхнәләштәренә булған мөнәсәбәттәрендә лә сағылыш табыусан. Ә ул мөнәсәбәттәр и ә төрлөсә белдерелергә мөмкин: теге йәки был айҡанлы яҙылған мәҡәләләрҙә, берәй ваҡиға уңайы менән әйтелгән сығыштарҙа, шиғри йәки башҡа төр әҫәрҙәрҙә .б., .б. Ошо йә әттән М. Кәримовтың “Әнғәм Атнабаев үлгәс...”, “Мостай Кәримгә ик ән йәш тулғас яҙылған шиғыр”, “Төш” исемле әҫәрҙәре иғтибарға лайыҡлы.

“Әнғәм Атнабаев үлгәс...” — күләме яғынан бәләкәй генә шиғыр: дүртәр юллы өс строфа әм биш юллы бер строфанан тора. Йәмғе е ун ете юл. Ә шул ун ете юлға тәрән фекер төрөлгән, хатта фәлсәфәүи фекер, тип әйтер инем. үҙ унда бер Атнабаев хаҡында ғына түгел, йәшәү менән үлем арауығының асылы тура ында бара. Ҡарап тороуға ябай ғына күренгән үҙҙәр ярҙамында шиғырҙа Әнғәм Атнабаевтың үлем еҙ образы тыуҙырылған.

Өҫтә исемдәре аталған өс шиғырҙың ике е Мостай Кәримгә арналған. Тәүге е — шағир иҫән сағында, ик ән йәшлек ҙур юбилейын билдәләгәндә, икенсе е, ҡыҙғанысҡа күрә, уның вафатынан уң яҙылған. Тәүге ендә авторҙың тыйнаҡлығы, итәғәтлелеге, инсафлығы күҙгә бәрелеп тора:

*Риза бул а, мин әҙермен*
*Шуға үҙ бирешергә:*
*Уның ик ән йәшен генә*
*Урталай бүлешергә.*

Әлбиттә, шаяртып әйтелгән был үҙҙәрҙә кесе Кәримовтың оло она ҡарата булған ихтирамын шәйләмәй мөмкин түгел. Шуны ы мө им: бында бер ниндәй ҙә ярам аҡланыу ҙа, юҡты бушҡа, бушты юҡҡа ауҙарырға тырышыу ҙа юҡ, бары тик бер фамилияны йөрөткән атаҡлы ике шағир ара ындағы мөнәсәбәт кенә бар. “Төш” тигән шиғырҙа был мөнәсәбәт уғата ла асығыраҡ итеп күр әтелгән: гүр эйә енә әйләнгән Мостай Кәримдең ыны гел аҡ буяуҙар менән генә үрәтләнгән. Әгәр Марат Кәримов, әҙәбиәтебеҙҙең юғары баҫҡысында урын алған М.Кәрим, Н.Нәжми, Ә.Атнабаев кеүек ҡәләм оҫталарына мөрәжәғәт итеп, уларҙың ижадында ауаздашлыҡ таба икән, был уның эстетик зауығын аныҡлап әм эстетик кимәлен күр әтеп тороусы фактор түгелме ни?

Шик еҙ, эстетика – бик ҡатмарлы күренеш. Ул беҙҙең бөтә булмышыбыҙҙа. Уға философияның бер тармағы тип ҡараусылар ҙа булманы түгел; үҙ аллы ғилем тип раҫлаусылар ҙа табылып торҙо. Философиялағы кеүек, уның әр өлкәлә лә осрай торған әм ҡапма-ҡаршылыҡҡа нигеҙләнгән үҙ билдәләнештәре лә атап күр әтелгеләне. Әйтәйек, гүзәллек әм шыҡ ыҙлыҡ; юғарылыҡ әм түбәнлек; трагиклыҡ әм комиклыҡ; бөтөнлөк әм бүлгеләнгәнлек .б. Ҡай ы берҙә уға әхлаҡ ҡағиҙәләре лә ялғанып киткеләне. Шуға күрә, донъяла абсолют нәмә юҡлығын әм бөтә нәмәнең дә тик сағыштырмаса ғына икәнлеген иҫтә тотоп, эстетика әм философия категориялары тура ында ла өҙөп кенә, ҡырт киҫеп кенә фекер йөрөтөү мөмкин түгелдер. Быға М.Кәримов шиғриәте миҫалында ла ышанырға була.

“Ваҡланыу әм аҡланыу” тигән шиғырҙың лирик геройы әҙәми затты ваҡланыуҙан, маҡтаныуҙан, кеше ҡайғы ына шатланыуҙан, башҡаларҙан бары тик мутлыҡ эҙләүҙән, аш менән атҡанға таш менән атыуҙан, ваҡ дан артынан ҡыуыуҙан аҡ булырға саҡыра. Ҡарағыҙ инде: егерме юллыҡ шиғырға күпме аҡыл ыйған! “Математик йыры” тип аталған шаян шиғырҙың да төбөндә тормош хәҡиҡәте ята:

*Минус ир... Минус ҡатын...*
*орама тормош шартын.*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 100



*Әле алдын күр әтә ул,*
*Әле күр әтә артын.*

Йә булма а “Ғүмерҙе мин өйләм итеп күрәм...” әм “Ҡаҙҙарым” тигән шиғырҙарҙы алып ҡарайыҡ. Улар ҙа бит рифмаларға алынған ҡоро үҙҙәр теҙмә е түгел: әр ҡай ы ы формалары менән әллә ни ҙур ҡыҙыҡ ыныу уятырҙай түгелдәр ымаҡ. Ләкин ҡат-ҡат уҡып, уйланып ултыр аң, уларҙың былай ғына ябай булып күренгәнлегенә төшөнә башлай ың.

“Ғүмерҙе мин өйләм итеп күрәм...”дең лирик геройы уйынса, мәсәлән, әр кемдең ғүмере ( әм уның менән килешмәй мөмкин түгел) – бер өйләм. Шуға күрә, әр кемдең йәшәү рәүешенә ҡарап, уның аҙағына ла төрлө тыныш билдә е ҡуйыла. Әйтәйек, тыныс ҡына, артыҡ бошонмай, армай-талмай, янмай-көймәй генә йәшәгәндәрҙең ғүмер аҙағына ябай ғына нөктә ҡуйыла. “ ин кешеме?” тигән ынауҙы ғүмер ахырына орау билдә е ярашлылыр, тип вәғәз итә лирик герой. Ә бына ул үҙе донъя шаулатып йәшәгән. Яҙмыш уны йәлләп тормаған, хатта ергә аунатып типкеләгән. Ләкин ул бирешмәгән, шашҡан, ергә ыймай, күктәргә ашҡан. Уның ошо йәшәү рәүеше күптәргә хуп килмәгән. Әммә, күптәргә хуп килмә ә лә, лирик герой, ахыр сиктә, ғүмеренең аҙағына имеҙ өндәү билдә е ҡуйылырына шиген белдермәй.

“Ҡаҙҙарым” да “Ғүмерҙе мин өйләм итеп күрәм...”гә бирешерлек түгел. Йөкмәтке е буйынса ла, төҙөлөшө йә әтенән дә, фекер тәрәнлеге яғынан да. Уларҙың хатта күләмдәре лә бер үк. Был әҫәрендә шағир ҡыр ҡаҙҙарын – шатлыҡтарым, йорт ҡаҙҙарына ағыштарым тип атаған. Уларҙың ике е лә шағир күңеленә инеп урынлашҡан. Тик, “ҡыр ҡаҙҙары бейеклектәр ҡоса-ҡоса ҡанаттарын ҡаҡҡан айын, йы андарҙа йырҙар” ос а, йорт ҡаҙҙары и ә “ергә бәйләп ҡуйған яҙмыштарға күнгән...” Ошо сағыштырыуҙан кешенең Ерҙә йәшәү фәлсәфә е тыуған. Лирик герой уны былай тип белдергән:

*Әле ағыш, әле шатлыҡ,*
*Әле иҙән, әле түшәм.*
*Әле күккә күтәреләм,*
*Әле кире ергә төшәм.*

Ә “Маймыл йылын ҡаршылағанда” тигән шиғыр “Ҡаҙҙарым”дан нимә е менән кәм? Дүртәр юллы ете строфанан торған был шиғырҙа шаяртып ҡына, майлап-йәйлап, тоҙлап-борослап ҡына ифрат тәрән фекер әйтелгән дә ба а: хайуан исемдәре менән аталған йылдар бар, ә кеше йылы ҡайҙа уң?

*Беҙгә тигән шул йыл кил ә,*
*Иркенләп тын алыр инек,*
*Исма ам, бер кешеләрсә*
*Рәхәт йәшәп ҡалыр инек,–*

тигән уфтаныу ҡатыш өмөттәре менән уртаҡлаша лирик герой.

Ижад практика ында билдәле булыуынса, шағир хыялында яралған образды үрәтләүгә ҡарағанда аныҡ шәхестең әҙәби ынын кәүҙәләндереү күпкә ауырыраҡ та, ҡатмарлыраҡ та, яуаплыраҡ та. Сөнки ундай шәхестең художестволы образын тыуҙырғанда ижадсының мөмкинлектәре иҙелерлек сикләнгән: ул уңға ла, улға ла тайпыла алмай. Ләкин, шул уҡ ваҡытта, был образ уҡыусының иғтибарын йәлеп итерлек, уның эстетик талаптарына яуап бирерлек булырға тейеш. М.Кәримов ошо ярай ы ҡатмарлы бурысты уңышлы хәл итә, минеңсә. Юғарыла уның Н.Нәжми, Ә. Атнабаев, М.Кәрим тура ындағы шиғырҙарына бер аҙ туҡталғайныҡ инде. Уларға “Брест батыры” әм “Батырҙар ҡайтырҙар” тигәндәрен дә өҫтәргә мөмкин.

“Брест батыры”ның үҙәгендә Бөйөк Ватан уғышы ҡа арманы Ришат Сәлих

улы Исмәғилевтың юйылмаҫ ыны. Шиғырҙың нигеҙ ташы “Яҙмыштан уҙмыш юҡ” тигән әйтем менән бәхәс. Автор раҫлауынса, уның геройы яҙмыш ҡолона әйләнмәгән, кире енсә, яҙмышына үҙе хужа булған. Шиғырҙа хәтерҙә ҡалырлыҡ ыҙаттар ярҙамында Брест батырының йәнле портреты тасуирланған. Минең быуын был шәхесте яугир ғына түгел, бәлки, бөтә ғүмерен халыҡ мәғарифына арнаған атаҡлы педагог итеп тә белә. Ә бөгөнгө быуын нисек икән? Хәҙер уларға ҡайы бер әҫәрҙәрҙе, Пушкиндың “Евгений Онегин”ын уҡығандағы шикелле, белешмәләргә таянып өйрәнергә ҡалмаҫмы?

Йөҙ ҙә ун ике юлдан торған “Батырҙар ҡайтырҙар”ҙың жанры тәғәйен генә билдәләнмәгән. Ғәҙәти лирик шиғыр тиер инең, күләме бик ҙур. Лирик поэмаға ла етеңкерәмәй. Бәлки, балладаға яҡыныраҡтыр? Әҫәрҙә үҙ тарихи өс шәхес хаҡында бара. Рогервикта йәнен биргән Юлайҙың күҙен уның улы Салауат яптырған, доға ҡылған. Салауаттың күҙҙәрен уның яуҙашы Ҡәнзәфәр йомдорған. Ошонда беҙ Марат Кәримовтағы бер асышҡа тап булабыҙ. “Ни булды беҙгә, ни булды?” тигән шиғырҙа Аллаға ылтаныл а ла, был юлы и ә Әжәл тере кеше шәйенә индерелгән.

Әжәлде телгә килтереп, автор унан былай тип әйттерә:

*— инме ни әле был*
*Иң уңғы бунтовщик?*

Сираттағы строфала ул түбәндәгесә фараз ҡыла:

*Иң уңғы бунтовщик*
*Кинәттән тынғандар.*
*Ә уның күҙҙәрен*
*Кем генә йомғандыр?*

Өс батырҙың уңғы улыштарын йәнле итеп үрәтләү өсөн дүртәр юлдан торған ун алты строфа кәрәк булған. Ҡалған ун ике строфала уларҙың бөгөнгө көндәге яҙмышы хаҡында уй-фекер йөрөтөлә, Ҡәнзәфәрҙең әле бул а беҙгә әйләнеп ҡайтмауына борсолоу белдерә:

*Ә инең исемең*
*Ҡайҙа уң, Ҡәнзәфәр?*

*Хәтерҙән сыҡҡан ың,*
*ин шулай уҡмы ни?*
*Хәҙерге быуынға*
*Кәрәгең юҡмы ни?*

Шағирҙың әйтергә теләгәне уңғы строфала бер төйөнгә төйнәлгән:

*Үҙ халҡын ҡурсалап*
*Гел бергә, гел йәшәр*
*Юлаев Салауат,*
*Усаев Ҡәнзәфәр!*

Уның менән килешмәй булмай. Бөйөк рус халҡы үҙенең Минин әм Пожарский, Разин әм Болотников, Ермак әм Сусанин кеүек данлыҡлы улдарын онотмай бит, ниңә әле беҙ үҙебеҙҙең арҙаҡлыларыбыҙҙы белмәмешкә-күрмәмешкә алышырға тейешбеҙ? үҙ ыңғайында шуны ла әйтке килә: Мостай Кәримдең “Салауат” тигән трагедия ында, Факи а Туғыҙбаеваның “Сәләмемде еткер, Аҡсарлаҡ!” тигән ағышнамә ендә яҡтыртылған тема Марат Кәримовтың “Батырҙар ҡайтырҙар”ында көтмәгәнсә яңы боролош әм яңы улыш алған да ҡуйған.

Марат Кәримовтың быуат башындағы ижады хаҡында үҙ барғанда, уның мөхәббәт лирика ына ла ҡағылып китеү яҙыҡ булмаҫ. Сөнки шағир был темаға ҡат-ҡат әйләнеп ҡайта ғына түгел, унан бөтөнләй айырылмай. Шуны билдәләп үтеү ҙә етә: “Ағиҙел”дең биш анында донъя күргән алтмыштан артыҡ шиғырҙың

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 102



ун бишләбе мөхәббәт тема ына арналған. Шиғыр яратыусыларҙың хәлен әҙ генә бул а ла еңеләйтеү өсөн, бында уларҙы анап та китергә була: “Белә еңме?”, “ ағынам”, “Белмәгәнмен...”, “Оҙата барам әле”, “Үтә, тиҙәр”, “Ҡояш яҙға ҡараны”, “Ғашиҡтар яҙмышы!”, “Ниагара!”, “Ҡарама ин миңә, ҡарама...”, “Шул етә”, “Иҫәрлек”, “Яңыҙлыҡ”, “Ихтимал”, “Ни хәлдәр итәм инде!..”

өйөү тура ында шул тиклем күп яҙғас, был шиғырҙарҙың авторы донжуанлыҡты яҡлаусы түгел микән, тигәнерәк шик тыуып ҡуя күрмә ен. Юҡ, әлбиттә. Ул ис тә ундай затҡа оҡшамаған. Кире енсә, уның өсөн өйөү әм өйөлөү – хайуандар донъя ында аҙашып йөрөгән елғыуарҙар морале түгел (әгәр уны мораль тип атап бул а әле!), ә уларҙан ғәйәт өҫтөн тороусы (хатта сағыштыра алмаҫлыҡ) хистәр нескәлеге, күңел сафлығы, ҡараштар берлеге, аҡылдар ярашлығы, зауыҡтар таплығы.

“Белмәгәнмен” тигән бәләкәй генә шиғырҙың лирик геройы, мәҫәлән, ни өсөн өйгәне бар ерҙә донъяның башҡасараҡ булыуын, ҡояштың да яҡтыраҡ яныуын, эскән ыуҙарҙың да татлыраҡ тойолоуын, ул йылмайғанда тормоштоң уғата ла йәмләнеп китеүен, ҡара төндөң хатта сыуаҡ көнгә әйләнгәндәй тойолоуын аңларға, өйгәне атлап уҙған ерҙә гөлдәр шытыуының серенә төшөнөргә тырыша. Ул серҙе лирик геройҙың ҡолағына елдәр бышылдай. Сихри көс булып тойолған был серҙең сәбәбе ябай ғына икән: лирик герой өйгәнен бик ныҡ яратҡан өсөн ул шулай сихри көскә эйә булып күренгән.

М.Кәримовтың бәғзе шиғырҙарында ҡылдан да нескә өйөү хисе әкренләп кенә тәрән фекергә әйләнеп ҡуйыусан. Интим тойғоларҙы сағылдырған “Белә еңме?” тигән шиғырҙың лирик геройы, мәҫәлән, башта:

*Яңы йылды ҡаршыларға*
*Саҡырам, килә еңме? –*

Тип өндәшә лә уңынан:

*Аҡ бәхеттәр ҡаршыларға*
*Саҡырам, килә еңме, –*

тип тамамлай. “Белә еңме?” кеүек, “ ағынам” да – үтә лирик шиғыр. Унның геройы, тәьҫирләнеп китеп, үҙенең тәүге мөхәббәтенә бәйле хистәре менән уртаҡлаша, хәтерендә аҡланған осҡон усаҡ ымаҡ тоҡанып китерҙәй тойола уға.

өйөү әм өйөлөүгә шағир кеше психология ындағы әм унның бөтә булмышындағы иң көслө, иң үҙенсәлекле сифат итеп ҡарай, уны юғары кимәлдә, таҙа килеш күрге е килә. Ошо йә әттән “Үтә, тиҙәр” әм “Ниагара!” тигән шиғырҙар характерлы. “Үтә, тиҙәр”ҙең төп идея ы – бары ы ла үтә, ти әләр ҙә, өйөү тойғо онон, мөхәббәт шауҡымының мәңгелек күренеш икәнлеген яҡлау, был уй-тойғоларҙан әм хистәрҙән хатта пәйғәмбәрҙәрҙең дә азат булмағанлығын кире ҡаҡҡы ыҙ итеп раҫлау. ”Ниагара!”ла и ә хистәрҙең үҙенсәлекле бер хәрәкәте үрәтләнгән. Йәшлектә ул Ниагара шарлауығына тиң булған. Тора-бара айыҡҡан, артабан и ә бөтөнләй тынып ҡалған. Хәҙер инде Ниагара лирик геройҙың ҡолағында ғына шаулағандай. Ваҡыт үткән айын, ул шаулау ҙа тына бара.

Тәү ҡарамаҡҡа был ике шиғыр ара ында ниндәйҙер ҡаршылыҡ та бар ымаҡ. Шул уҡ ваҡытта бында бөтә е лә тәбиғи, тормошсан. Был фекерҙе “Шул етә” тигән шиғыр ҙа ҡеүәтләгәндәй. Унда үҙ йылдар менән ике аралағы өйөү хистәренең бер аҙ үҙгәреүе хаҡында бара. Башта лирик герой, “Хәҙер инде күңелем штатында ундай вазифа юҡ – ҡыҫҡарҙы” ти ҙә уңынан былай тип төҙәтеп ҡуя:

*Юҡ, был түгел инән ыуыныу ҙа,*
*Беребеҙҙән беребеҙ туйыу ҙа.*
*Миндә – ин бар хәҙер, индә – мин бар,*

*Миңә етә шуны тойоу ҙа.*

Әлбиттә, юғары хистәрҙе юғары зауыҡ менән тасуирлау өсөн юғары оҫталыҡ кәрәк. “Халыҡ шағиры” тигән дәрәжәле исемде йөрөткән әҙиптә был ма ирлыҡ етерлек. Уны өҫтә тикшерелгән бөтә шиғырҙарҙа ла күрергә була. Ә бына “Ҡарама ин миңә, ҡарама...” тигәнен, мөхәббәт лирика ының өлгө ө, тиер инем. Күләме яғынан ул ҙур түгел — ни бары ун игеҙ юл. Ләкин лирик геройҙың уйхистәре, эске халәте шул тиклем нескә итеп күр әтелгән — урын ыҙға ҡулланылған бер генә үҙ ҙә тапмаҫ ың унда. Бәләкәй генә шиғырҙа лирик геройҙың бөтә тормош юлы, уның мөхәббәт күгендә кисергән уй-тойғолары ышандырырлыҡ асып бирелгән.

Марат Кәримовтың тәбиғәтенә хас сифат — шаянлыҡ уның мөхәббәт тема ына арнап яҙылған шиғырҙарында ла үҙен иҙҙермәй ҡалмай. Ләкин ул тупаҫ шаярыу түгел, ә үҙ-үҙенән еңелсә көлөү, йылмайыу. Әйтәйек, “Ихтимал” тигән шиғырҙың лирик геройы, төймә еҙ зәңгәр күлдәк кейгән йәш ҡыҙҙы осратҡас, “Ирендәрем иренеңә тейеүе бик ихтимал” тип хыялланып ала икән, уның ни ғәйебе бар?

Йә и ә “Иҫәрлек” тигән шиғырға иғтибар итәйек. Тәүге йәренең иҫәнме-юҡмы икәнлеген белергә теләгән лирик герой таң алдынан иҫкән елдәргә мөрәжәғәт иткәс, уларҙан шундай яуап ала:

*— Нисек хәтерләй е иттең,*
*Ҡайҙа булдың элгәре?*
*Биш намаҙын ҡалдырмаған*
*Ул ҡарсыҡ иҫән, тиҙәр, —*
*иңә и ә ул — аман ҡыҙ,*
*Әй иҫәр, иҫәр! — тиҙәр.*

Ни айәт, тағы бер шиғыр — был мәҡәләлә файҙаланыласаҡ уңғы шиғыр. Ул “Ни хәлдәр итәм инде!..” тип атала. Төҙөлөшө, йөкмәтке е йә әтенән “Шул етә” менән “Иҫәрлек”кә яҡын тора. Ғүмере үтеп барған лирик герой, йәш саҡтарын иҫкә төшөрөп, аптырауға ҡалғанын белдерә:

*Аҫыл заттар эргә енән*
*Тып-тыныс үтәм инде.*
*Әллә ҡыҙҙар үҙгәргәндәр,*
*Әллә мин бүтән инде?*
*Ни хәлдәр итәм инде...*

Барҙыр инде, барҙыр, ике е лә барҙыр: ҡыҙҙар ҙа үҙгәргәндер, лирик герой ҙа шул килеш кенә ҡалмағандыр. Ә бына шағир Марат Кәримов үҙе булып, “поэзия короле” булып ҡалыуын дауам итә. Әгәр алтмышынсы-етмешенсе йылдарҙа ул шиғырҙарын уҡып клуб түшәмдәрен күтәрерҙәй алҡыштар яулаған бул а, хәҙер и ә “Ағиҙел” ярҙамында (ярай әле, “Ағиҙел”ебеҙ бар) үҙ уҡыусы ын табып, уны тирә-йүнебеҙҙә барған хәл-ваҡиғалар тура ында тәрәндәнерәк уйландырырға тырыша. Ошо йүнәлештә уға яңы уңыштар, яңы асыштар юлдаш бул ын.

**Әнғәм ХӘБИРОВ,**
**филология фәндәре докторы.**
**Бөрө ҡала ы.**

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 104



# ШАҒИР ЫҘ МИЛЛӘТ БУЛАМЫ?

*XX быуат шиғриәте үҙенең шиғриәтлек бурысын үтәне, тип әйтергә баҙнат итер инем. Милләттең үҙ юҫығы алдындағы бурысын, тимәксемен. Ул Аҡмулланың вариҫы Шәйехзада Бабич ижады менән башланып киткәйне. Шәйехзада Бабичты Баязит Бикбай, ниндәйҙер кимәлдә Рәшит Ниғмәти, Әбүс әм, әлбиттә, Мостай Кәрим, ә унан уң... Унан уңғы юғары бейеклектәр иңләгән башҡорт шиғриәте әм уның талым ыҙ әм талантлы шағирҙары хаҡында мин бынан алдараҡ башҡорт шиғриәте хаҡында яҙған мәҡәләләрем, Башҡортостан Яҙыусылар союзының йыйындарында (шиғриәт секция ы рәйесе сифатында) өйләгән докладтарымда билдәләп киткәйнем инде. Был мәҡәләлә үҙем йәш шиғриәт, XXI быуат башындағы шиғриәт майҙанын тотоусы ижадсыларҙың үҙ сәнғәте хаҡында барасаҡ. Дөрөҫөрәге, бөтә юҫыҡ хаҡында түгел, минең — өлкән йәштәге шағирҙың күҙенә салынған әм күңел хаятына эленгән бер нисә шәхес хаҡында. Шулай итеп...*

## «Миҙгелдәр йондоҙлоғо»

...Ваҡыт...Үткән әм бөгөнгө Ваҡыт... Кешенең ерҙәге бурысы әм булмышы. Иман-хаят. Мәңгелек әм мәл. Баҡыйлыҡ менән фанилыҡ.

Шиғриәттең даирә е ошондай юғары төшөнсәләргә, донъяуи мөнәсәбәттәргә нигеҙләнә, тип әйт әң дә була. Дөрөҫ, әҙәби тәнҡит, әҙәбиәт ғилеме шиғриәт хаҡында өйләгәндә жанрҙы тематика күҙлеге менән ба алай. Уны шул тематика юҫығы менән квалификациялай, уның ниндәйҙер оран, саҡырыу, догматика кеүегерәктәренә ыңғай ба а бирә әм шағир оҫталығын да нәҡ ошо телгә алынған өҫтөнлөктәр аша ба алай. Көнкүрешкә ҡағылышлы социаль өлкә әм милләт яҙмышы кеүек сәйәси темалар миллилек күренеше әм талант күр әткесе тип ба алана. Тик бит... Шиғриәттең «төп тема ы» — донъяуи хәлдәр, мәшәҡәтле ығызығы түгел, йәшәйеш, рухиәт, үлем әм йәшәү, әхлаҡ әм әхлаҡ ыҙлыҡ, изгелек-яуызлыҡ кеүек мәңгелек төшөнсәләргә шағир күңеле аша мөнәсәбәт белдереү, күңел гармония ына өлгәшеү хыялынан сығып ижад итеү ул. Шиғриәттә донъялыҡ, йәшәйеш ҡанундарының сифатын образлы тел менән тасуир итеү, фәлсәфәле, хиссиәтле фекер әйтә белеү — талант әм әләт тип ба алана.

**Лилиә Сәғиҙуллинаның «Миҙгелдәр йондоҙлоғо»** тигән шиғырҙар йыйынтығы, мәҫәлән, «Шиғриәт» тигән шиғыр менән асылып китә әм үҙенең шағирлыҡ кредо ын автор ошолай ба алай: «Мәңгелектең миҙгелдәрен тойоу өсөн // Хоҙай мине был донъяға яралтҡандыр//Мәңгелектең миҙгелдәрен йыйыу өсөн// ятҡа бирмәй, тик үҙенә ҡаратҡандыр».

Хуш... Тимәк, автор шиғриәтте Алла менән бәндә ара ындағы мөнәсәбәт даирә е тип ба алай. Дөрөҫ, төрки мәҙәниәттә, шул иҫәптән шиғриәттә фекер яңылыҡ түгел. Суфыйсылыҡ шиғриәте был мөнәсәбәтте ярай ы тәрән әм күп яҡлы итеп

асыҡлағайны инде. Шағирә Гүзәл Ситдиҡова «Башҡортостан» гәзитендә донъя күргән Ғүмәр Хәйамды тәржемәләгән шиғырҙарға баш үҙендә бөйөк шәреҡ шағирының шиғырҙарындағы төп-инаныс образдың да нәҡ Аллаҡа мөнәсәбәт, мөрәжәғәт, мөхәббәт булыуын иҫбатлағайны. әм был, минеңсә,– Ғүмәр Хәйам шиғриәтенә торғаны бер яңы ҡараш. Был мине бик нык уйландырғайны. Билдәле булыуынса, шағир-импровизатор, яугир әм батыр Салауат Юлаевтың шиғырҙарының да, Игнатьев яҙып алған үҙмә- үҙ тәржемә енән күренеүенсә, ана шул суфыйсылыҡ йоғонто о аҫтында булыуы ап-асыҡ күренеп тора.

Дөрөҫ, Ваҡыт, үткән әм бөгөнгө Ваҡыт бер-бере е менән ни саҡлы ғына бәйләнештә булма ын, ниндәйҙер, йыш ҡына дәүмәлле үҙгәрештәргә бирелмәй ҡалмай. Гәрсә кисәге, бөгөнгө, киләсәктең бәйләнеш айырмалыҡтары ла, фәлсәфәле ҡараштан, үтә шартлы:

*Сиктәр — шартлы. Сик — виртуаль диуар.*
*Ә беҙ и ә — мәңгелек тотоҡ (тотҡон, күрә ең).*
*Бәндә ҡорған диуарҙарға ҡарап*
*Мут йылмайып тора шуҡ Ваҡыт.*

Ғөмүмән, баҡыйлыҡ менән фанилыҡ айырма ы шағирә Лилиә Сәғиҙуллинаны нык ҡыҙыҡтыра. Кеше, Йы ан, матди есем әм форма-йөкмәтке төшөнсәләрен ул ошолай күҙаллай:

*Тау итәге:*
*Ваҡ-ваҡ таштар —*
*Ваҡыт таштар...*
*Уларҙы ла ваҡыт ашар,*
*Мәңгелеккә*
*Илтеп ташлар...*

Был юлдарҙа Ваҡыттың да, Мәңгелектең дә ниндәйҙер ағышлы субстанция икәнлеге иҙелеп ҡал а ла, булыу, юғалыу, икенсе сифатта бул а ла мәңгелек әйләнешендә ҡалыу әм, тимәк, йәшәү менән үлемдең тәбиғилеге, бәндәнең киләсәктәге урыны ла төҫмөрләнә. әм ошо ағышлы өмөттөң төп фекерен ябай ғына рифмалаштырылған нотоҡҡа ла әйләндереүселәр бар ул. Әйтәйек, «Ҡурҡмайыҡ! Йәшәйек! Йы ан да, беҙ ҙә мәңгелек!» әм — вәссәләм!

Үкенескә ҡаршы, хәҡиҡәтте, күҙгә төртөлөп торған төшөнсәләрҙе рифмалаштырып, шуны шиғыр тип аңлаған авторҙар ҙа бар шул әле. Улар «Ағиҙел» журналының туп а ына туҙан ҡундырмай. Әр еҙлектәрен, өм өҙлөктәрен егеп, үҙҙәре ис кенә лә төшөнөрлөк булмаған шиғриәт иленән урын даулай улар. Ярар, ти, «Ағиҙел» журналы уларға ҡапҡа ын асты ла, ти. (Сөнки улар хатта Яҙыусылар союзы ағзалығына ла үтеп инеүгә өлгәшкән.) Ә артабан? Технология ын белмәй тороп, иң ябай йорт техника ы — үтекте лә йыйып, ҡороп ҡуйып булмағандай, ҡанундарын да төшөнөр, үҙләштерер әләтең булмаған көйө нисек бейек үҙ сәнғәте ижад итергә мөмкин уң? Ә бит шиғриәт — бөтә сәнғәттәрҙең дә батша ы! Шиғыр — ҡомдан арҡан ишеү ул. Нисек итепме? Уны ын таланттар үҙҙәре генә белә. Әммә аңлата алмауҙары ла ихтимал, сөнки шағирлыҡтың асылын төшөнә алғандары юҡ әле. Шиғырҙарҙың серенә төшөнөп була, ә бына шағирлыҡ...

Хәйер, таланттар ҙа ҡайсаҡ бер ҡатлылыҡҡа төшөп китә ул. Лилиә ханым, мәҫәлән, ошондай фекер әйтеп ҡуя: «Ауыл урамдарын үлән баҫа — кешеләрен баҫа ғәм еҙлек». Мин, мәҫәлән, ауылдың йәп-йәшел сирәмле, үләне күпереп торған сағында үҫтем. Беҙ, ҡыҙҙар, ана шул бәрхәттәй урамдарҙа ҡурсаҡ уйнап ултыра торғайныҡ. Ауыл фажиғә е «йәнгә тутыҡ инеп ғәм еҙләнеү», урамдарға үлән үҫеп ки-

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 106



теү генә түгел шул, әм быларын да кисерә белеү ҙә бер хәл әле, уға шағирәнә мөнәсәбәт белдереү – икенсе. Ә бит замандың аяу ыҙ шарттарының (тирмән таштарының) алтындан ҡәҙерле орлоҡтарҙың (баштарҙың) кеше яҙмыштарын ни хәлгә төшөрөүен шағирә ошо рәүешле лә ба алай белә:

*Алтындан ҡәҙерле орлоҡтар ваҡланды.*
*Алтындан ҡәҙерле булмыштар тарҡалды,*
*Он итеп тартылды*
*әм ҡамыр баҫылды.*

Ә ҡамырҙы, билдәле инде, нисек әүәлә әң дә була. Илдең, милләттең социаль, сәйәси хәлен, халыҡ фажиғә ен шағир ошондай кинәйәләр менән тасуир итергә тейеш тә ул. Туранан бәреп, аныҡ факттарҙан миҫал килтереп яҙыу – публицистарҙың, аналитиктарҙың эше. Улар, мәҫәлән, яҙмыштың нимә икәнен дә таяныстар, дәлилдәр, иҫбатлауҙар, эҙлекле анализдар аша аңлатыр ине. Талант ыҙ шағир яҙмышына төшкән ынауҙарҙы йәлләткес итеп рифмалауҙы шиғыр тип тартҡылашыр ине. Ә Лилиә и ә ана шул яҙмыш тигәнде шиғриәтле итеп тасуир итә:

*Ер әм Күк:*
*Бергә булыу ҙа,*
*Айырылыу ҙа – юҡ.*
*Ике арала тирбәлә офоҡ.*

«Офоҡ» нимәне аңлаталыр (бәлки, балалыр йәки бурыстыр, йә булма а өмөттөр), уны ы мө им түгел, әммә ябай ғына юлдарҙағы сер уҡыусыны битараф ҡалдыра алмай, сөнки ниндәйҙер драма, ниндәйҙер фатализм иҙелеп ҡалыу – уйландыра.

«Миҙгелдәр йондоҙлоғо» йыйынтығының авторы, – ғөмүмән, сер асыу, сер юллау менән мауығыусы шағирә. Эзотерика менән дә ул, күрә ең, хәбәрҙар. Китаптағы байтаҡ шиғырҙар ниндәйҙер дәрәжәләге мистикаға тартым уй-фекер, инаныстар даирә ендә лә эҙләнә. Әйтәйек, индостанда үҙ йәмғиәтенең кампусын булдырыусы медитация оҫта ы Раджниш Ошо тәғлимәтенә ярашлы, шағирә «Ағас»ҡа ошондай йөкмәтке ала: «Ер – терәк, ә Күк – теләк. Тамырланам, ҡалҡынам...»

Эйе шул, Ер – әр тереклектең терәге. Күккә лә беҙ теләк, өмөт менән ҡараусанбыҙ. Күк – юғарылыҡ символы ла. Ағас та бында – ила иәткә ынтылыусы тере организм, ул офоҡтарҙан, ҡалып-кәртәләрҙән ашырға ынтыла, шунан шағирә бөтөнләй көтөлмәгән әм мәғәнәле орау ҡуя: «...Әгәр ау ам?» орауға автор хәүеф алғандай. Ә асылда бит, мистик Ошоноң инаныстарына күрә лә, кешелектең тәжрибә енә ярашлы ла, Лилиә Сәғиҙуллинаның үҙенең Ер-Күккә, Ваҡытҡа, ғөмүмән, хаятҡа мөнәсәбәтенә күрә лә, мәңгелек бит, шулай ҙа, миҙгелдәрҙән дәүмәлләнә, баҡыйлыҡ әйләнеше, алдараҡ телгә алынған орлоҡ образындағы кеүек, – түңәрәк юл. Шағирә быны яҡшы белә, ағышлы ығымталар я ай:

*Төргән әсәй, ураған ул наҙлап*
*Был донъяға – ап-аҡ күлдәккә.*
*Иҫке-яңы ошо биләүемдә*
*Мин ҡайтырмын ҡабат Ер-Күккә.*

Шулай... Лирик героиняның эҙләнеү даирә е булған Миҙгел әм Мәңгелек төшөнсә ен бынан да ябай, бынан да тәрән әйтеп биреү ҡыйындыр...

Лилиә Сәғиҙуллина – Шаран районының Тамъян ауылынан икән. Урта мәктәптән уң юғары белем ала, Мәскәүҙә аспирантурала уҡый. Тыуған районында мәктәптә, Стәрлетамаҡ педагогия академия ында уҡыта. Әле Башҡорт дәүләт уни-

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 107



верситетының филология факультеты доценты, педагогия фәндәре кандидаты.

Уйсан, фекерле әм хисле шағирә Лилиә ханым. Унан күпте көтөргә хаҡыбыҙ бар.

## «Йөрәктәге ташыу-ҡайтыуҙар»

Художестволы ижадтың, бәхеткә күрә, офоҡтары киң. Унда, әлбиттә, әр бер өнәри даирәләге кеүек, талаптар, теге йәки был сәнғәт төрө, жанр талап иткән ҡанундар, ҡағиҙәләр ҙә юҡ түгел. Математик, мәҫәлән, мәсьәләне формулалар ыҙ, теоремалар ыҙ сисә алмай. Шиғриәттең үҙҙәрҙе рифмалаштырып ритмға алыу ғына түгеллеге күптән билдәле. Шиғриәттең төп ҡануны – образлы фекер. Ул фантазия менән ерлеклелек, метафоралар, форма, уй-фекер, йөкмәтке, хиссиәттән туҡылған сәнғәт. Шағирҙың төп ҡиммәте и ә уға ғына хас стиль, уға ғына хас донъяға ҡараш ерлегендә әҙәби әҫәр ижад итә белеүендә. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, кешелектең бер-ике проценты тирә е генә үҙ сәнғәтенең асылын аңлауға әләтле. Математика, физика, музыка, биология .б. төр өлкәләр менән дә кешеләрҙең шул саҡлымы ғына ҡыҙыҡ ына. Эйе, зауҡына күрә ятлап алған шиғыры бар ул әр кемдең дә. Халыҡтың күбе е йыр текстарын шиғыр тип ҡабул итә. Музыкаға алынған юлдар, әлбиттә, кисерештең эмоционаллеген тәрәнәйтә. Әммә йыр менән шиғыр – ике е ике төрлө сәнғәт ул. Күп кенә хисле кешеләр ана шул йыр текстарындағы, бигерәк тә бөгөнгө эстрадалағы йыш осраҡта көнкүреш хәлваҡиғаларын, туған-тыумасалыҡты маҡтаған, ностальгия кеүегерәк йырҙар өсөн яҙылған шиғырҙар шиғыр була икән тип алдана. «Ағиҙел» журналының шиғриәт бүлеге мөхәррире булып эшләүсе минең өсөн ошондай яңылышыуҙар – торғаны бер хәсрәт. «Ә минең фәләнсә йырым бар!» – тип бәхәсләшә лә китә бәғзе йыр текстары яҙыу юлында дан яулаған авторҙар. Ярай әле, беҙҙә шәп шағирҙар етерлек. Шәптәре янында уртасалары ла күп. әм был тәбиғи. Сөнки кешеләрҙең төҫҡиәфәте, холоҡ-фиғеле, аҡыл шәрифтәре төрлө булған кеүек, талант кимәле лә төрлө була шул. Аксиома.

Был приамбуланың оҙонға уҙылыуының да «әтнәкә е» бар ул. Артабан үҙ шағир Дамир Шәрәфетдинов хаҡында барасаҡ. Әммә уның «**Йөрәктәге ташыу- ҡайтыуҙар**» тигән шиғырҙар йыйынтығын уҡып сыҡҡас, минең, шулай ҙа, дөрөҫөн әйтәйем, асыу ҡабарҙы: «А , тиҫкәре! ин шундаймы ни! Ә нишләп бүтән кеше булып ҡылана ың?..» Хәйер, билдәле ки, шағирҙарҙы көндәлек тормоштағы хәсиәте аша түгел, яҙғандары буйынса фекер йөрөтә е, уларҙың ҡылыҡтарына күнә е, шағирҙы бүтән үлсәүҙәр менән үлсәргә әм ба аларға өйрәнә е бар әле ул беҙгә. Быны шул уҡ Дамир Шәрәфетдиновтың шәхсән холҡоноң бер аҙ арҡырыраҡ булыуынан сығып әйтәм. Нисә йыл инде беҙ уның менән, журнал эшенә егелеүле булыуыбыҙ сәбәпле, бер коридорҙа йөҙгә-йөҙ осрашып ғүмер итәбеҙ. «Ағиҙел» журналында шиғыр дефициты юҡ, хатта профицит әле ул. Минең халҡыбыҙға яҡшы шиғырҙар уҡытҡым килә. Яҡшы шағирҙарҙың әҫәрҙәрен үҙем орап алам. Дамирға ла әйткеләйем: «Мырҙам, берәр шәлкем шиғыр килтер әле». «Ярар»,–ти ул. әм... килтермәй. Мин уға үсегәм. Бер йыл буйы өндәшмәйем, әм, бармаҡты кәнфит менән бутамай торған сифатыма күрә, йәнә үтенесемде ҡабатлайым әм йәнә «ярар» үҙен ишетәм.

Тиҫкәре....

Ә шиғриәтендәге яҡлау ыҙлыҡ, кешелекле тойғолар, оҡланыулы, яҡты хистәр, нескәлек ҡайҙан уң улай а?.. утлы телле, аныҡ ритмлы, теүәл әм оҡланғыс рифмалы картиналар оҫта ы Дамир Шәрәфетдинов, шулай ҙа, таланттар йондоҙлоғонан ул. Дөрөҫ, йондоҙлоҡтағы планеталарҙың үлсәү категория ы бер үк булмай,

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 108



əммə улар барыбер физик əм магнит көстəре бер йүнəлешле булғаны, бер-бере - енəн айырылғы ыҙлығы, энергетик халəте арҡа ында бер бөтөндө, башҡорт шиғриəте тигəн яҡтылыҡ əм яҡшылыҡты тəьмин итə бит инде.

Дамир Шəрəфетдинов-рəссамдың картина полотнолары пейзажға ла, портретҡа ла, натюрмортҡа ла, абстракт экспрессионизмға ла тартым. Əммə рəссамлыҡтың төп талабы булған төҫтəр, күлəгə əм яҡтылыҡ гармония ы əм шул контрастлыҡ тəбиғилеге – уның хəсиəтенең тəбиғи ысынбарлығы рəүешендə тасуирға алына:

*Күңелеңдең моң оулығын,*
*Йөрəгеңдең яр ыуҙарын,*
*Ай- ай... нисек таныры ғалыр:*
*Улар əле*
*Ғəмəлдəге*
*Асылмаған йондоҙ ымаҡ, –*
*Серле йомғаҡ.*
*əр сер – рəссам итə хыялдарҙы.*

əм шул Дамир Шəрəфетдинов төйнəгəн, тəбиғəттең маңлай күҙебеҙ күрмəгəн серен төҫмөрлəү əлəтенə эйə шағир сəскəгə төшкəн ысыҡтағы айҙы ла шəйлəй, əммə парадокстарҙан торған был донъяла шағирҙан башҡалар ҙа етерлек, сөнки:

*Ысыҡтағы айҙы күргəне юҡ.*
*Ғалəмдəге бер таш ярсығынан*
*Гəлсəр я ап гөлгə таҡҡанлығын*
*Ҡояш та күптəн онотҡан.*
*Ул ысыҡта үҙе телəй нурланырға*
*əм (ысыҡты)... юҡ итə.*

Ошондағы образдарҙың тəрəнлеген нисек тетрəнмəй ҡабул итергə була!? Эйе шул... «Туғай йөҙөн сихрилеккə» буяған Ҡояш – Ай – Тəбиғəт мөнəсəбəттəренең аҫыл асылы бəндəлəрҙең үҙ-ара мөнəсəбəтенəн айыраламы ни? Матурлыҡ бар ерҙə – ғəм еҙлек, яҡтылыҡ бар ерҙə көйҙөргөс аяу ыҙлыҡ тулып ята шул ул. Ҡояш хəтлем дəүмəлдең ысыҡ ҡына хəтлем, əммə донъяны, ғалəмде ыйҙырышлы бөтөнлөктө юҡ итеүҙəн ләззəт кисергəнен беҙ, бəлəкəй, əммə уйсан кешелəр, аҙ кисерҙектер шул.

Шиғриəттең эҙлəнеү майҙаны – рухиəтлек, күңел донъя ы, эске кисерештəр, милли ҡиммəттəр даирə е. Милли булмаған, космополитик сəнғəттəн фəтеүə аҙ. Бигерəк тə үҙ сəнғəтендə. Шиғырҙы тик халҡындың тел мөмкинлектəренə, рухи ҡиммəттəренə таянып ҡына ижад итеп була. Йəнə милли менталитет, халҡынды миллəт итеп танытыусы йола-ғəҙəт кеүек ҡиммəттəр, дөйөм кешелек аңы тыуҙырған рухи мəҙəниəткə тоғролоҡ – шиғриəткə ҡуйылған талаптарҙың иң тайпылыш ыҙҙары ошоларҙыр, моғайын.

Башҡорттоң асыл инаныстарының бере е – тəбиғилек. Ана шуларҙы Дамир Шəрəфетдинов образлы, символик ыҙаттар аша оҫта тасуир итə белə. «Өфө гербына ҡараш» шиғырында ул шул тəбиғилек хаҡында былай ти:

*Тəбиғəттең аҫыл йəне –*
*ыу ар, ана,*
*Ут эсенəн күк тауҙарға*
*Ҡасып бара.*
*Ҡойроғона аман ҡала*
*Баҫып бара.*

Тəбиғилек ағышы Дамирҙың бөтə шиғырҙарында ла бар тиерлек. Унын, мəҫəлəн, «Таңғы сəфəр» шиғырындағы лирик мөхит тə – ила и ил ам менəн уға-

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 109



рылған манзара, ағышлы әм яҡты моң менән уғарылған элегия ул. Шағир күңеле болоҡ оуҙарына дауаны таң хозурынан эҙләүен йәшерен серҙәш менән осрашҡандағы кеүек тасуир итә:

*...Эстән генә боронғо йыр уҙып*
*Саҡ беленгән таңға ашығам...*

йәки:

*...Ми ырбанлыҡ алып сабый таңдан,*
*Эскер еҙлек алам йы андан...*

– ти ул. әм таң, әлбиттә (шағирҙың таң тигәне, бәлки, ил ам йәки мөхәббәт образылыр ҙа әле), унын өмөттәрен аҡлай, ми ырбанлыҡ күр әтмәй ҡалмай:

*...Көнө буйы миндә даръя булып*
*Ик еҙ-сик еҙ йы ан сайҡала.*

Дамир Шәрәфетдиновтың лирика ындағы йәнә бер үҙенсәлек – унын шиғырҙарындағы лирик геройҙың үҙенең дә мәрхәмәтле, ми ырбанлы, нескә әм уйсан шәхес булыуында. Ижадында шағир йыш ҡына халыҡ ырымдарына мөрәжәғәт итә. «Икеләнеү» тигән бер шиғырында, имештер, ялағай-ҡамсы ғашиҡ кешенең күңелен яралай; йондоҙ атылыу кемдеңдер ғүмерен өҙә; кәкүк кешеләргә ғүмер вәғәҙәләй ул, тип үҙ уйнатып тора ла автор, уҡыусыны ҡапма-ҡаршылыҡлы, хатта пародокслы, шул уҡ ваҡытта шиғырға, шағирға ғына хас ығымта- орауға килтереп төкәтә;

*Йондоҙҙоңмо тыйып уҡталыуын*
*Саҡыра ла кәкүк саҡыра?..*

Ни әйтер ең былдай оҫталыҡ хаҡында?.. Ни өсөн бөгөн, XXI быуаттың башында, шиғриәткә килеүселәрҙең күбе е шиғыр туҡыма ы, шиғыр техника ы, шиғриәттәге образлылыҡ тигән яп-ябай ҡағиҙәләргә битараф? Тәбиғи төҫтәрҙең үҙара ыйышып йәшәүе, төҫ колоритының темпоритмик а әңен үҙләштермәй тороп рәссам булып булмай ҙа ба а! Йәки математиканы, архитектураны өйрәнмәй тороп мәҙәниәт, сәнғәт арайын ҡороп ултыртырға кем йөрьәт ит ен? Ә шиғриәттә, нишләптер, бер сама рифма, ритм әтмәләй белеү – шағирлыҡ, тип инаныусылар бар. Етмә ә, уларға дәғүә белдермә, үҙ әйтмә! Китәләр туҙынып, оло-ғара тауыш күтәреп. Ун ике йыл Башҡортостан Яҙыусылар союзының шиғриәт секция ы рәйесе булыуым дәүерендә әм «Ағиҙел» журналынын бүлек мөхәррире сифатында күп, бик күп шиғыр авторҙары менән осрашыуым мине күп таланттар әм шул саҡлы уҡ әр еҙ талант ыҙҙар менән осраштырҙы. Талант ыҙҙарҙың иң йәнде көйҙөргән сифаты – белем еҙлек әм шул арҡала шағирлыҡ даны юлындағы уңыш ыҙлыҡтарын кешенән күреү. Дөрөҫ, шиғриәт – фантазерҙар донъя ы, әм унда ҡай ы саҡ аҡты ҡара тип тызырайыусылар ҙа була. Былары – көнсөл нишаналыҡ. Хәйер... Был икенсе тема, шикелле...

Ә Дамир Шәрәфетдинов тәбиғи әләткә лә, шиғыр оҫталығына ла эйә. Ул рифма, ритмды ла ҡоя ла ҡуя. Шиғыр эсенә эске рифмалар ҙа туҡый: «Ин**йәр**, Ин**йәр**, ин, гүйә, өйгән **йәр**...» Йәки: « аҡау **кәкүк**, ҡайҙа **йәшлек**?» Йә булма а: «күк төн **булып**, аҡ тәҙрәгә **ҡунып**...»

Ҡай ы саҡта шағир алты юллыҡтар менән яҙа әм «а-а,б-б,а-а» кеүек үҙенсәлекле рифмалар менән эш итә.

Эйе, шиғыр ижад итә әм уларҙы еренә еткереп эш итә белә Дамир Шәрәфетдинов. Шиғыр русса «стихи» тип аталып, асылда хис-тойғолар, уй-фекер стихия ын сағылдырған кеүек бул а ла, уны барыбер шағирҙар үҙҙәре генә белгән сәнғәти ҡа-

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 110



ғиҙәләргә буй ондормау мөмкин түгел. Шағирлыҡ аҡынлыҡ та, сәсәнлек тә түгел. Шағирлыҡ —донъя мәҙәниәтенә күп шедевrҙар биреп ҡалдырған оҫталар тыуҙырған критерийҙарға хөрмәт әм үҙ үҙенде әйтә алыу оҫталығына эйәлегенде иҫбатлау даирә е.

Ә Дамир Шәрәфетдиновтың шиғриәт иле нескә әм зауыҡлы. Унда:

*Сәсәй-сәсәй шиғри ағыш йөрөй,*
*Аса-йома йәшле күҙҙәрен,*
*Эҙләп йөрөй, килә лә уң күрге,*
*Бар тигәстен, көҙҙөң үҙ йәмен.*
*Ана, күкте ҡоштар ҡыйып үтте,—*
*әр саҡ улар шулай эшлекле;*
*Шуҡ сиңерткә бер үк көйөн сиртә,*
*Сәхнә итеп япраҡ-бишекте.*

Дамир Шәрәфетдинов — уникаль шәхес. Республикала уҙғарылған күп кенә мәҙәни сараларҙың сценарийҙары авторы ул. Башҡортса ла, русса ла берҙәй грамоталы яҙа белә. Рус телен беҙҙең күбебеҙ белә. Мин дә ирәкләп русса мәҡәләләр яҙып маташам ул. Ә Дамир Шәрәфетдинов — башҡорт шағиры — шиғырҙарҙы русса ла яҙа белә. Заманыбыҙҙың айырылғы ыҙ атрибутика ы компьютерҙы биш бармағы кеүек үҙләштереүгә өлгәшкән. Ҡулы балта, ер эштәренә ма ир... Тик... ул ошо йәшендә лә ғаилә е менән дөйөм ятаҡта көн күрә. Эшләй-эшләй, тик фатир атып алыу өсөн аҡса еткерә алмай. Унық тиҫтерҙәре, шиғыр яҙа бел әләр ҙә, Дамир кеүек эшкә егелергә елкәләре әм әләттәре самалы булыуға ҡарамаҫтан, ҙурҙур өйҙәрҙә көн күрә. Ә Дамир... Бая, алдараҡ әйткәнемсә, таланттарға хас үжәтлеге әм баш эйә белмәҫ ғорурлығы арҡа ында ятаҡта йәшәй бирә. Ә үҙе башын баҫып алған да «Аманат» журналын формалаштыра ла формалаштыра.

Их, Дамир мырҙам... ин өргән юлды үткән, а -мәзәлдәр менән ғүмер иткән рухташ апайыңдың ине күргән айын нимә кисереүен белмәй ең ин. Үҙем дә белдермәйем.

«Ағиҙел» журналына бер шәлкем шиғыр индереп бирсәле шулай ҙа...

## «Күңел томбойоғо»

Был китапта, тимәк, бойоҡлоҡ хаҡында үҙ барасаҡ. Сөнки халыҡ хәтере матурлыҡ символы булған, әммә аҙ ғүмерле томбойоҡ сәскә енә шундай сифатты таҡҡан инде.

Бойоҡлоҡ, ағыш... Шиғриәтте ундай кисерештәрҙән башҡа күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. Дөрөҫ, ярай ы талантлы кешеләр, башҡорт шиғриәтенең арҡа өйәгән әм данын тәшкил итеүсе шәхестәрҙең күбе е, 80 — 90-сы йылдарға тиклем урра-оптимизм юҫығында ҡәләм тирбәтте. Әммә араларында намыҫсан Рәми Ғарипов бар ине. Ул, баҡ аң, 1964 йылда уҡ “Табыныу” (“1937”) поэма ын яҙған булған, ә Рауил Бикбаев и ә 1968 йылда «Ностальгия» поэма ын ижад иткән икән. Белмәйем, башҡорт шиғриәтенең намыҫына әүерелгән был ике инсан бер-бере - енең әҫәрҙәре менән таныш булғандырмы, беҙгә — китап өйөүсе, шиғыр яратыусы, халҡына ҡарата мөҡәддәс өйөү менән яныусы кешеләргә шуны ы ғына мәғлүм: әҫәрҙәрҙең ике е лә киң аудиторияға яҙылыуҙарына байтаҡ ваҡыттар уҙғас ҡына килеп етте.

Ә мәктәп дәреслектәре... Улар шиғриәттәге иң бөйөк образ сөгөлдөрсө Нуретдиндың бисә енең «мыйығынды турап аш бешер» тигән метафоранан тәрәнерәге булыу мөмкин түгел, тигән ажиотаж, күҙ быуыу менән мәшғүл ине.

Ә элитар ысын шиғриәтте бөгөн, XXI быуат башында, кем ба алай, кем уға мө-

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 111



өр, билдәләмә ҡуйырға баҙнат итә уң? Юҡ, быға берәүҙең дә теләге юҡ кеүек. Ғайса Хөсәйеновты, Рауил Бикбаевты, Рафаэль Аҙнағоловты, Фәнил Күзбәковты, башҡорт шиғриәте хаҡында тотош китап яҙып та, уны уҡыусыларына еткерә алмай бына ике тиҫтә йыл инде зар илаған ошо юлдар авторын иҫәпләмәгәндә...

Дөрөҫ, мәҡәләләр, рецензиялар сығып тора ул матбуғатта, әммә... уларҙың буҫтауы ысын шиғриәтебеҙ шинеленән ос оҙ түгелме ни?

Ә бит беҙҙә, шөкөр, марканы тотор ижадсылар етерлек. Уларҙың бере е, мәҫәлән, ошолай тип яҙа:

*Ике нурҙың* (тейенден) *бергә ҡушылғанын,*
*Баҙлағанын, янып алтындай;*
*Йота яҙып оҙаҡ ҡарап торҙом,*
*Сабыйҙарын уйнатырға сыҡҡан*
*Донъялары бөтөн ҡатындай...*

Гөлназ Ҡотоева Дамир Шәрәфетдиновҡа ла, Йы ан,Мәңгелек, Ваҡыт төшөнсәләрен айҡаған Лилиә Сәғиҙуллинаға ла оҡшамаған. Гөлназ Ҡотоеваның шиғриәт даирә е –уның үҙенең күңеле әм шул донъялағы шатлыҡ, ҡыйралыштар, а-ғыш, бәхеттәр. Әле генә телгә алынған шиғыр «Ым ыныу» тип атала. әм, әлбиттә, ҡатын-ҡыҙлыҡ ҡорона ингән шағирҙың ике тейенден уйнауына оҡланыуында моң оулыҡ та шәйләнмәй түгел. Бында төпкә йәшерелгән, эске аң кимәлендәге әсәлек тойғо он да танымау мөмкин түгел. үҙ ябай күҙгә әм ҡолаҡҡа тәбиғәт манзара ы хаҡында ғына кеүек.

Тик шиғырҙың лирик героиня ы, шулай ҙа, серен дә аса биреп ҡуя түгелме?

*Ялт-йолт ҡына итте күҙ алдым, –*
*Бер-бере ен уҙып уйнағанда*
*Ике сабый, ике ҡыян тейен,*
*Мин өндәшмәй генә түҙә алдым...*

Әйтерең бармы, ҡатын-ҡыҙҙың ишле, кәм тигәндә ярышып уйнарлыҡ ике бала әсә е булғы ы килә шул ул. Был ир-ат (бәлки) бүтәнсәрәк аңлаған Мәңгелек төшөнсә енең ҡатын-ҡыҙ хәсиәтендәге Образы. Лозунг та, ялбарыу ҙа юҡ бында. алҡынса ғына, ябай ғына, тын ғына ағышланыу бар.

Гөлназ Ҡотоеваның республика йәштәренең Шәйехзада Бабич исемендәге премия ын яулаған китабы ла сабыр ғына тауышлы **«Күңел томбойоғо»** тип атала. Китаптың аннотация ында ошондай юлдар ҙа бар: «Тормош мәғәнә ен аңларға тырышып уйланыу-эҙләнеүҙәре, ябайлыҡта – бөйөклөк, тип туҡтап ҡалып, тағы ла шул юлда, үҙ-үҙен ҡабатлап асып, тетрәнеүҙәренән, өйөүҙән, ағыштан туҡылған шағирәнең шиғриәтендә күңел бөтөнлөгөнә, камиллыҡҡа ынтылыш бар. Хистән тулышҡан томбойоғо тулҡыныр тынғылыҡты ул донъяла үҙ урынын табыуҙа, асылын юғалтмауҙа күрә».

Аннотацияла Гөлназға ҡарата «әҙибә» үҙен дә ҡулланғандар, әммә, Иҙел кисмәй, ил гиҙҙем, тип әйтеү ашығыс булған кеүек, мин шулай ҙа уны әлегә шағирә тип атау яғындамын. Әҙибәлек... Ул әле уға киләсәк. Бөгөнгөләй әҙәбиәткә тоғро ҡал а, тимәксемен... Быларҙы юҡҡа әйтмәйем. Тәүге осор ихлас әм ҡанатлы шиғриәтенә оҡланыулы мәҡәләләр яҙған байтаҡ ҡыҙҙар уңынан, тормош ығы-зығы ына алданыуҙанмы, маҡтауҙы күтәрә алмау ғәләмәтенәнме, әҙибә дәрәжә енә етерлек ижад менән күңелемде күтәрмәне.

Башҡорт шиғриәтендәге шағирәләр ижады – феноменаль күренеш ул. Ысынлап әйтәм әм ир-егеттәр ижадын кәм етергә теләүҙән түгел. Ир-егеттәрҙең күңел әм зи ен даирә е ҡатын-ҡыҙҙыҡы кеүек түгеллеге бәхәс еҙ. Ә беҙҙең илебеҙҙә, үке-

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 112



нескә ҡаршы, әм ир-ат етәкселеге, ул сығарған ҡанун, ҡағиҙәләр шарттарында йәшәүебеҙгә ҡарамаҫтан, ҡатын-ҡыҙ ан яғынан ирҙәргә ҡарағанда күберәк. Уларҙың рухи талабын ир-ат ижад иткән бейеклектәр генә ҡәнәғәтләндермәй ҙә ба а. Ҡатын-ҡыҙ шиғыр уҡыусыға унынса уйлаған, унынса ағышланған шиғриәт кәрәк. Ә Гөлназ Ҡотоева ана шул талаптар юҫығынан тороп ижад итә. Ысынлап та, ҡатын-ҡыҙҙың эске донъя ы — үҙенә бер хәсиәт ул. Шағирә китабын баҫалҡалы ғына исемлә ә лә, уның биттәрендә яр ыуҙар, эҙләнеүҙәр, хатта ки, хаос та, эске сабыр ыҙ тәҡәт тә бар.

«Күңел томбойоғо» китабын шағирә монологы тип атарға ла мөмкин. Унда ҡатын-ҡыҙ яҙмышы, уның яр ыуҙары, хәсрәттәре хаҡындағы шиғырҙар бик күп. Дөрөҫ, улар, айырым шиғырҙар рәүешендә яҙыл а ла, бер үк тоналлек алынған көйҙө лә хәтерләтеп ҡуя. әр хәлдә монолог ғаилә бөтөнлөгө, яратылыуға, аңлауға сарсау хаҡында.

*Яттар,*
*Яттар...*
*Минме иңә ятмын?*
*инме минән алыҫая барған?*
*Алыҫайған айын ин яҡын ың,*
*Бәхет ҡошом минең, йөрәк ярам.*
*Елдәр аша сәләм ебәрмәнем,*
*Ялбарманым орап осрашыуҙар.*
*Ғазабымды йондоҙло күк йотор,*
*Алып китер шауҙырлаған ыуҙар...*

Шағирәнең яратҡан темалары булған кеүек, яратҡан стиле, яратҡан алымдары ла етерлек. Ул, берсә, үҙенең кисерештәрен аңлатыр, яҡлар терәк эҙләгәндәй, күктәргә баға, ерҙең таныш та, ғәзиз дә мөхитенә барып ыйына, ҡай ы саҡта төшөнкөлөккә бирелеп тә ҡуя, әммә Гөлназ Ҡотоева шиғриәтенең төп идеалы — әхлаҡилыҡ әм әҙәп, тоғролоҡ әм инанғанлыҡ. Ҡатын-ҡыҙ психология ының нескәлектәрен шағирә шағирәнә үрәтләү әләтенә эйә. Мостай Кәримдең орауҙарына биргән яуаптарымдың бере ендә халыҡ шағирының ҡатын-ҡыҙ шиғриәтенә мөнәсәбәтем хаҡында орауына ошолай тип яуап биргәйнем: «Ҡатын-ҡыҙ шиғриәте аша ижтимағи тормош үҙ сәнғәте тип аталған Алтын Тәңкәнең икенсе яғы менән дә танышыу мөмкинлегенә эйә булды. Ике ярымшар бер бөтөндө тәшкил иткәндәге кеүек, шиғриәттә лә бөтөнлөк, тимәк, камиллыҡ хасил булды. Ирҙәр шиғриәте әм ҡатын-ҡыҙ шиғриәтенән хасил әҙәбиәт төрлө-төрлө үҙенсәлеккә эйә ике енестең бер-бере е алдына ҡуйған мәңгелек орауҙарына яуап биргән кеүек. Ҡатын-ҡыҙ менән ир-ат ҡапма-ҡаршылыҡлы сифатлы ике полюс әм уларҙың ғәмәли йөкмәтке е, мөнәсәбәттәр даирә е сәнғәттең тема ы булды, шулай дауам итә».

Ә енестәрҙең бер-бере енә орауҙары күп әм улар, әлбиттә, мәңгелек. Шул уҡ ваҡытта әр бәндәнең донъяға, беҙҙе бар иткән Алла ҡа ла мөрәжәғәт итеүҙәре аҙ түгел. Гөлназ Ҡотоева ла быларҙан азат түгел. Ул — әсә кеше. Әсәләр бала хаҡына әллә нимәләр эшләргә лә әҙер шул ул. Бындай шиғырҙарҙы шағирә доға кеүегерәк шыбырлай.

*Йә Хоҙайым,*
*иңә ығыныуҙан*
*Үҙемә бит рәхәт.*
*Ҡөҙрәтеңә буй онорға кәрәк.*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 113



*Төшөндөрҙөң, рәхмәт...*
*Ҡөҙрәтеңә ышанырға кәрәк,*
*Айырылып Ерҙән.*
*Кешелек тә яралған бит шулай*
*Хоҙай белгән серҙән.*

Йәки:

*Ҡулдары ҡулыма ҡағылып,*
*Күҙҙәре иркәләп үткәндәй.*
*Баламдың үрәте!*
*Күңелем*
*Шул нурҙан яҙылып киткәндәй.*

Сабыр күренгән был ижадта эске ялҡынды тойомламау ҙа мөмкин түгел. Уның әйтелә е фекере йыш ҡына кисерештәрен ҡыҫтап, әйҙәп алып килә. Был тынғы-ыҙлыҡ динамика барлыҡҡа килтерә, әммә ҡай ы саҡта күп үҙлелеккә лә килтереп ҡуйғылай.

*Буш ауыт, буш мискә шикелле*
*Ҡалғанда аҙашып диңгеҙҙә,*
*Туламы таш кеүек уйҙарың,*
*өйрәйме тағы ла иң еҙгә.*
*Иң еҙгә, хыялға, тиң еҙгә,*
*Ташлаймы ҡармағын ялмауыҙ,*
*Елкәндәр, тик ал ыу елкәндәр*
*Ҡабара, ҡалма, тип, ҡалмағыҙ!*

«Иң еҙгә» үҙен иң еҙлек тип аңларғамы икән бында? Бул ын да,ти. Ә “ялмауыҙ” тигәне? Миненсә, шиғыр үҙе түгел, шикелле, быны ы... «Шик»те шулай тасуир итә шағирә әм төшөнсәнең ҡатмарлы, ҡапма-ҡаршылыҡлы тәбиғәтен асыуҙы, үрәтләүме теләгенән, үтә абстракт буяуҙар ҡуллана. Дөрөҫ, шиғырҙың хәбәр өйләп сығыу түгеллеге хаҡында алдараҡ та әйтеп кителгәйне инде. Әммә бәләкәй әм камил әҙәби әҫәр булыуы менән дан тотҡан шиғыр туҡыма ын улай уҡ биҙәкләп ебәреү ҙә әҫәр файҙа ына түгел, миненсә. Ә бына хәрәкәт, хистәр динамика ы өсөн ундай форманың отошло булыуы ла ихтимал.

*Дәрт,*
*Мин уны ялмармын да шулай,*
*Ялбарыуға алынмаҫмынмы уң ул?*
*Ҡанаттарым талым ыҙ ҙа минең...*
*Артта ҡал а, ярылмаҫмы уң ул*
*Минең йөрәк?*

Гөлназ Ҡотоева – егәрле кеше: «Ағиҙел» журналының яуаплы сәркәтибе, БДУ-ла уҡытып та йөрөй. Ынтылышлы йәшәй. XXI быуаттың башҡорт шиғриәте унық тиҫтерҙәренең йөрәк көсөнә, аҡылы әм намыҫына бәйле буласаҡ.

Тәү осор ижады менән шиғриәт майҙанына атылып килеп ингән ҡай ы берәүҙәр, нишләптер, уңғараҡ үрелеп тә ҡуя ул. Әллә маҡтау, премия-фәләндәр, вазифалары ҡамасау итәме, әллә, былай ҙа маҡтайҙар әле, тип тынысланып ҡуяларды... Ижадтағы үрҙәр, уғышта алынған ҡалҡыулыҡтар кеүек, мәңгелек данға күммәй. Бында әр аҙым – яңы үр. Гөлназ да туҡталып ҡалмаҫ ул.

## «Еләк тәме»

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 114



Шиғриәтте мин ата-инәйем кеүек ғәзиз күрәм, яратам, хатта ки, әйтергә яра а, – табынам. Был үҙҙәрҙән ҡойолған мөғжизә минең күңелемде тотошлайы менән биләгән әм, кемдең генә яҡшы шиғырын уҡы ам да, үҙем яҙғандағылай булып, шатлыҡ кисерәм. Дөрөҫ, үҙемде профессиональ шағирә генәмен тип атай алмайым. Минең өнәрҙәрем етерлек. Журналистлыҡ, редакторлыҡ эштәремде лә яратып башҡарам, ә бына шиғриәт... Ул – аңлап, аңлатып бөтөп булмай торған, әммә әләтлеләрҙең генә ҡулынан килә торған серле өлкә ул. Хәйер, шиғырҙы теләгән бер кеше яҙа ала. Рифма, ритмды үҙләштерҙең и ә, теҙә генә бир. Әммә был оҫталыҡ ҡына шиғыр өсөн аҙ шул.

Шағирҙарҙың иң яратҡан жанры, әлбиттә, – лирика. Нәҡ лирика аша ижадсы үҙенең эске донъя ын, кисерештәр динамика ын тасуир итеү мөмкинлегенә эйә. Әммә шуны ы ла хаҡ: бер кешенең, ул хатта үҙен әҙәбиәт өйөүселәр алдында шағир тип танытып өлгөр ә лә, эске донъя ындағы уға ғына ҡәҙерле тойғолар аңлайышлы булмауы йәки ҡыҙыҡ булмауы ла ихтимал. Шуға ла шағир, ниндәй генә субъектив төшөнсәләр хаҡында бәйән итмә ен, әҙәбиәттең талаптарының бере е – объективлыҡтан ҡаса алмай. Сөнки әр бер әҫәр әҙәбиәтсенең үҙе өсөн түгел, уҡыусылар күңеленә еткерелеү өсөн яҙыла.

Лариса Абдуллинаның Башҡортостан «Китап» нәшриәте тарафынан «Йәштәр тауышы» рубрика ында донъя күргән китабы **«Еләк тәме»** тип атала.

Еләк тәме... Кемегеҙҙең тел осонда йә хәтер андығында аҡланмай икән ошо ныҡ ғәзиз әм татлы тәмдең иҫтәлеге? Лариса ла уны, үҙенең инаныстарына күрә, иң ғәзиз ҡиммәттәрҙең бере е тип ба алай.

*Телдәремдән йәндәремә күс ен*
*Йәй бүләге –тәме еләктең.*
*Үрелеп кенә еләк өҙөп ҡаптым...*
*Кинәнестәр өҙҙө үҙәкте.*

Шиғыр асылда ила и тәбиғилек әм ихласлыҡтың ҡәҙере хаҡында. Кеше ғүмерен кескәй сағынан алып оҙатып йөрөй, йәнде ыҙлатып йә кинәнестәр иҫтәлеге булып күңел түренә ыйына быңдай яҡты тәбиғилек. Бейеклектәр – ябайлыҡтан, үрҙәр түбәндән башланған кеүек, шиғриәттең камил образдары ла ана шул йәнде йылытҡан, ҡай саҡта тетрәндергән иҫтәлектәрҙән барлыҡҡа килә лә инде. Лариса Абдуллина ғүмер тәжрибә е туплаған аҡыл эйә е йәшенә етмәгән әле. Шуға ла унын шиғырҙарында аҡыл атыу, нотоҡ уҡыу кеүек нәмәләрҙең әҫәре лә юҡ. Ул, интуиция ы көслө булыуҙанмы, тәбиғи әләте арҡа ындамы, ябай ғына әйләнәтирә, ундағы кешелек мөнәсәбәттәренән шиғырҙар ижад итә:

*Ишетә еңме күңелемдең сыңын?*
*Эйе, ишетә, тине ал шәфәҡ.*
*Ахыры ы ла, оҡшаш иңә...*
*Йәшәй*
*Сабырлыҡтан йылы, наҙ көҫәп.*

Лариса Абдуллина – хиссиәт әм моң оу элегиялар шағирә е. Әйткәнемсә, шиғриәттең быңдай лирика ында рәссамдарса картиналар яҙып та, психологтарса күңел хәрәкәтен тасуир итеп тә, сабыйҙарса асыштар я ап маташырға ла мөмкин, сөнки жанрҙың мөмкинлектәре киң. Әммә нәҡ ошо форма ижадсының камиллыҡҡа әм үҙ сәнғәтендәге оҫталыҡҡа өлгәшеү юлындағы ма ирлығын сарлай ҙа ул. Мин үҙем публицистик шиғриәтте лә, хикәйәләү шиғриәтен дә өнәмәйем. Сөнки былар өсөн икенсе жанрҙар бар. Беҙҙә йыш ҡына «Халҡым! Халҡым!» (сурытыбыраҡ әйткәндә, тим) тигәнерәк шиғырҙар яҙыусыларҙы ғына халыҡсан ша-

ғир, халҡыбыҙ исеменән яҙыусы шағир тип ба алау осраҡтары бар. Ә бит халыҡ шағирға үҙ исеменән өйләү, уға дифирамб йырлау бурысын йөкләтмәй. Шағирҙың бурысы ябай әм бөйөк: ул туған халҡының теле, уйы, аңы әм күңеле бейеклеген майҙанға сығара.

Бында теманың бик үк ҡыҫылышы юҡ. Бында туған тел мөмкинлектәренән үҙ сәнғәте ҡороу талантың булыуы фарыз. Ана, Лариса Абдуллина ла быларҙы яҡшы аңлай:

*Арала бар сихри яҡынлыҡ та,*
*Арала бар серле ҡаршылыҡ,*
*Әйтелмәгән, тик көтөлгән хистән*
*Етенсе ҡат күккә ашырлыҡ.*

Дөрөҫ, шиғриәттәге примитивлыҡты ябайлыҡ тип аңғартырға маташыусылар ҙа юҡ түгел ул. Имештер, әр уҡыусы аңларлыҡ бул ын ул яҙғаның. “Аңларлыҡ” тигәне менән килешеп бул а ла, примитивлыҡ шиғриәткә хас төшөнсә түгел барыбер. Шиғриәтте юҡҡа ғына элитар сәнғәт тип әйтмәйҙәрҙер бит. Әлегә өйрәнсек кенә шиғырҙар яҙыусы бер егет миңә: «Тамара Ғәниева кеүек шағирҙарҙан элитар шиғыр таптырып ултырған редакторҙар булғанда, «Ағиҙел» журналын уҡыусы артмаясаҡ», — тигәйне. Мин бының менән килешмәйем. «Ағиҙел» журналы, камиллыҡ бейеклектәрен яулап алған әм әҙәбиәттәге мөмкинлектәребеҙҙең офоҡтарын киңәйткән шағирҙарыбыҙ барында, талаптарын талап ыҙҙар теләгән юҫыҡҡа бормаясаҡ, ә, кире енсә, халҡыбыҙҙың менталитетын тәшкил иткән зауыҡлылыҡ критерийҙары ағында торасаҡ әле. Шиғриәттә, дөрөҫ, аҡыл атыу — туҙға яҙмаған нәмә, шарадалар менән мауығыу ҙа килешкән эш түгел. Ниндәйҙер алтын урталыҡ (уртасалыҡ түгел) — нәҡ алтын! урталыҡ эҙләй шағирҙар, әм тап ошо юл башҡорт шиғриәтен ба алы тип таныта ла инде. Ошондай талаптарҙан сығып ба алағанда, шағирә Лариса Абдуллинаны, яңы быуат шиғриәтендәге төп көстәрҙең бере е буласаҡ, тип ҡыйыу әйтергә мөмкин, сөнки уның ҡарашы яҡтылыҡты ла, ыҙландырғыс ҡаршылыҡты ла, матурлыҡты ла күрә белә.

*Был донъялар кемдән генә ҡалмай?*
*Монарҙары балҡыр моңланып.*
*« әр яҙ яңы!» тигән үлән йырын,*
*Бөрөләрҙең моңон тыңланым.*

Йыанда туҡталыш юҡ. Ундағы хәрәкәт, бер ҡара аң, кеше өсөн фажиғәле.Сөнки уның әле был донъянан китә е бар. Әммә,ҡанундар шулай булғас, ни ҡыла ың, тыуым бар ерҙә — үлем бар, әммә, шағирә әйтмешләй, ерҙә бәндәне күңелен өйкәгән ағыштарынан алып сығыр мөғжизәләр ҙә етерлек.

*Уландарым өйләй.*
*Эскер еҙлек*
*Албырғата, әммә терелтә.*
*Мөғжизә еҙ мәлме?*
*Мин уларҙы*
*Мөғжизәләр тиеп йөрөтәм.*
*Саф күңелле бала ышанғанда*
*Булмаҫ, тимә, берәр мөғжизә.*
*Тәртиптәр ул календарҙа ғына,*
*Хыялдарҙа булмай ҡағиҙә.*

Шағирәнең былай тиергә хаҡы бар, сөнки ул Алла тарафынан мәңгелеккә көйләнгән беҙҙең Еребеҙҙең әм беҙҙең аңыбыҙҙа шулай ҙа фанилыҡ тип

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 116



йөрөтөлгән кеше ғүмерҙәренең үтмеш-китмешлеге трагедия ын барыбер ҡотолғо оҙ фажиғә итеп үк ба аламай, сөнки ер өҫтөндә унының дауамы ҡала. Шағирҙар и ә быны бигерәк тә ныҡ аңлаусы заттар ул.

*Буранда бер маяҡ төҫлө,*
*Юл сатында*
*Янған йөрәк кеүек,*
*Бер ҡатынды*
*Шәйләп ҡал аң, алыҫтарҙан...*
*Уҡы уйын:*
*Уға рәхәт — бала ы бар!*
*Уға —ҡыйын...*

Йәшлек шиғриәте — мөхәббәтле шиғриәт ул. Лариса Абдуллинаның да күп шиғырҙары нәҡ шул хаҡта. Ғалимдар, философтар, мөхәббәт тигән термин әм төшөнсәне ҡатын-ҡыҙ уйлап тапҡан фантазия, тип бара. Бәлки, шулайҙыр ҙа. Шул тойғонан башҡа әсә булыу мөмкин түгел бит. Ә әсәлек — ҡатын-ҡыҙҙың иң мөҡәддәс бурысы. «Поэтом можешь не быть...», ә Алла тың баҡыйлыҡ идея ына хыянат итеү — яҙыҡлыҡ. Тик йәш шағирәләрҙең күбе енең ижады ошо теманы культ хәленә еткереү менән мәшғүл. Лариса ла шулай итә. Бер үк тема әм мотивтарҙы йырлай ҙа йырлай. Күбе е үтә шәхсән. Быларҙан ҡотолорға кәрәк ул, дөйөмләштереберәк поэтиклаштырырға өйрәнергә ваҡыт Ларисаға. Әҙәбиәт — үтә етди институт. Шуға ла үтә субъективлыҡ менән мауығыу бында урын ыҙ. Йәнә бер кәңәшем: рифмаларға аҡсыл булыу зарур шағирға. Уйың, фекерең, хистәрең ни саҡлым ғына шағирәнә булма ын, рифмаларға, ритмға битараф булдыңмы, «тауарың» ебәк күлдәккә ҡушып бер аяғыңа туфли, икенсе енә сабата кейгән кеүек сатан була ла ҡуя.

«Еләк тәме» китабынан, ысынлап та, ер еҫтәре, еләк еҫтәре килә. Лариса Абдуллинаның уңғы йылдарҙа «Ағиҙел» журналында донъя күргән шәлкемдәре лә шағирәнең быуыны нығына, буяуҙары әм образдары баҙыҡлана барыуын танытты.

Ҙур шағирыбыҙ, үҙ, фекер, хистәрҙән оҡланғыс мираҫ ҡалдырған Шәйехзада Бабич исемендәге республикабыҙ йәштәре премия ы ла уға килешеп торасаҡ.

Яңы быуаттың йәш шағирҙары мин мәҡәләлә телгә алған исемдәр менән генә сикләнмәй. Ай ылыу Ғарифуллина, Римма Ғәлимова, Азамат Юлдашбаев, Рита Фәтҡуллина, Гөлнара Хәлфетдинова әм йәнә бик күптәргә төбәлгән беҙҙең — өлкән яҙыусыларҙың да, шиғриәт өйөүселәрҙең дә ҡарашы. Шиғриәт еҙ милләт мәҙәниәт еҙ милләт тип ба алана. Ә беҙ үҙебеҙҙе «Урал батыр» эпосын ижад иткән халыҡ тип танытҡанбыҙ.

Салауат батыры, Салауат Юлаев исемендәге хоккей команда ы, балы, гүзәл ерыуы, нефте, алтыны бар Башҡортостандың әм, әлбиттә, шиғриәте бар, ти ендәр беҙҙең хаҡта.

**Тамара ҒӘНИЕВА.**

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 117

# Ҡәләмдәштәр төҫө

**Фәрзәнә**
**АҠБУЛАТОВА**

*Үткән йыл йәмәғәтселек Башҡортостандың халыҡ яҙыусы ы Зәйнәб Биишеваның тыуыуына 100 йыл тулыуҙы киң билдәләне. Әҙибәнең 1981 йылда донъя күргән дүрт томлыҡ “ айланма әҫәрҙәр”е бай ижадын тулы килеш күҙ алдына килтерергә ярҙам итә. Уны ҡулға алған әр беребеҙ ҡәләм оҫта ының Алып батырҙай эшмәкәрлегенә хайран ҡаласаҡ. Шиғыр-поэмалар, хикәйә-повестар, трилогия — бары ы ла беҙҙе башҡорт халҡының ик еҙ-сик еҙ донъя ына алып инеп китә, ниндәй генә яҙмыштар менән осрашмайбыҙ ҙа ниндәй генә кисерештәр эсенә үтеп инмәйбеҙ. Әҙибә йәшәгән дәүер, уның идеалдары, көрәше генә тасуирланмай был аҡ китапта, беҙ тарих төпкөлөнә юл алабыҙ, үҙебеҙ белгән әм белмәгән шәхестәр менән осрашабыҙ. Ниндәй әлмәк, ниндәй ауыр бәләкәй генә ҡатын артмаҡлаған был хаҙиналар йөгө!*

*Үҙ заманында Зәйнәб Биишеваның күп әҫәрҙәренә етди байҡау-анализ я алған. Бигерәк тә “Яҡтыға” трилогия ы хаҡында ентекле тикшереүҙәр булыуы өйөнөслө. Ҡатын-ҡыҙ ижадын ғалимдарыбыҙҙың, башҡасараҡ итеп әйткәндә, ир-егеттәребеҙҙең тикшереүе, ба а биреүе — ҙур мәртәбә, ләкин ҡатын-ҡыҙҙарҙың ошо оло донъяның ир-егеттәр күреп етмәгән яғын тотоп алыуы, бөтөнләй икенсе күренештәргә иғтибар биреүе ихтимал.*

*Нимә өсөн ҡулыма ҡәләм алдым үң? Быны тәғәйен генә әйтеүе лә ауыр. Зәйнәб Биишеваның әҫәрҙәрен уҡыған кешенең күңелендә әр саҡ ниндәй ҙә бул а фекер тыуасаҡ, сөнки улар — битарафлыҡтан сығара торған күңел емештәре. Тик әр беребеҙ эстә урғылған уйҙарҙы теркәү өсөн ҡулға ҡәләм алабыҙмы үң? Юҡтыр, моғайын. Мин и ә үҙемдең кисерештәремде теркәп ҡуйырға булдым. “Был әҫәрҙәр ни өсөн заманса яңғыраш алырға тейеш, бының өсөн нимәгә иғтибар итеү мө им, хәҙерге уҡыусыға улар нимә е менән ҡиммәт?” тигән орауҙарға бер ни ҡәҙәр яуап та булыр. Хәйер, әр быуын Зәйнәб Биишева ижадына мөрәжәғәт итәсәк әм уны үҙ заманына ярашлы асып, үҙ заманы күрергә тейешле темаларына иғтибар бирәсәк. Сөнки ул — мәңге бүҫкәрмәҫ рухи хаҙинабыҙ.*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 118



Я К Т Ы Л Ы К

*Мин рухымдың аҫыл хазина ын,*
*Илем, иңә биреп ҡалдырҙым...*

# Тәүге баҫҡыстар

Йөҙйәшәр имәндәр быуаттар тарихына ша ит. Тәбиғәттең аҫтын өҫкә килтерерҙәй дә шәтле ел-дауылға, ғәрәсәткә бирешмәй улар, сөнки тамырҙары менән тыуған еренә береккән булырҙар. Тыуған еренән моң, ил ам алып йәшәгән ижадсы яҙмышы ла шундай мәғрур имәнде хәтерләтә. “Башҡортостандың халыҡ яҙыусы ы Зәйнәб Биишева” тигән саҡта ла ил-йортобоҙға, тәбиғәткә бар булмышы менән ныҡлыҡ, ҡеүәт өҫтәүсе имән күҙ алдына килеп баҫа. “Имән” тигән шиғырында әҙибә йәшәү көсөнөң, рух бөйөклөгөнөң нимәгә барып тоташҡанын асыҡ күр әтә. Яҙмыш елдәре аямай талант эйә ен, ләкин тәпәй баҫҡан ғәзиз ере уға әр саҡ көс бирә. Эйе, яҙыусы тыуған ерененең фатиха ын алып йәшәне. Ижадының бөйөклөгө атайсалы менән бәйле. Бына нимә тип яҙҙы Зәйнәб Биишева үҙе был турала. “Ғашиҡ кеше мин үҙ яғыма. Бәлки, шуғалыр, берәй әҫәр яҙырға йыйынам икән, күңелем менән шунда уҡ тыуған яғыма ҡайтып киләм әм, әҫәремдәге ваҡиғалар тик шул ерҙә генә барған ваҡиға ымаҡ итеп, минең геройҙарым шул ерҙә йәшәп китәләр”.

Күгәрсен районы мул ыулы йылғалары, емеш-еләккә бай урмандары, гөлсәскәле яландары менән дан тота. Уларҙың күптәре, ауыҙ-тел ижады ҡомартҡылары булараҡ, күпме дәүер инде халҡыбыҙ күңеленә шифа бирә, йәш быуынды ижадҡа, ил амға этәрә. Матурлыҡты данлау ғына түгел, ә тыуҙыра белеүселәр ҙә йәшәй Күгәрсен яҡтарында. Илебеҙ был төбәктең данлы ул-ҡыҙҙары менән хаҡлы ғорурлана. Улар ара ынан мәҙәниәтебеҙҙең, әҙәбиәтебеҙҙең бер сағыу йондоҙо булып балҡыған Зәйнәб Биишева айырым урын биләп тора. Зәйнәб Биишева — башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарынан беренсе булып шиғыр китаптары сығарған, драма әҫәрҙәре яҙған, башҡорт трилогия ын ижад иткән ҡәләм оҫта ы. анап китеүе еңел, ә уға тиклем — күпме күрә е, кисерә е тәҡдирендә. Тап шулай, яҙмыш оло донъяға — ижад киңлегенә сығарыр алдынан буласаҡ халыҡ яҙыусы ын күп ынауҙарға дусар итә.

Өс йәштә әсә енән тороп ҡалыуы, ун бер йәштә инде бөтөнләй үк еҙлеге — биография ының иң аянысл ы биттәре.

Ғәҙел, әр нәмәгә үҙ мөнәсәбәте булған Зәйнәб Биишева тормошҡа “бай насар, ярлы яҡшы” тигән ябайлаштырылған төшөнсә аша ҡарамай. Үҙенең ата ын Ырымбурға ”Хөсәйениә“ мәҙрәсә енә уҡырға ебәргән Ғәни байҙы йылылыҡ менән хәтерләй. Элекке замандарҙа алдынғы ҡарашлы байҙарҙың булыуын, етемдәрҙе йыйып уҡырға ебәреүҙәрен ыҙыҡ өҫтөнә ала. Хәтирәләрҙә әсә енең аға ы Ғәлләм хәҙрәт тә бар. “Беҙҙең башҡорт шулай була торғайны бит. Яҙ ет ә, бөтә е бер булып урам таҙартырға сыға. Ғәйет байрамына атайым алып бара. Унда миңә хәҙрәт бабайым йәшәгән өйҙө күр әтә. Йәп-йәшел үлән, сәскәләр тулып ултырған урам буйлап мин хәҙрәт өйөнә китәм...“

Зирәк ҡыҙ бала, ағай-апайҙарына эйәреп, бик иртә хәреф таный. Башланғыс белемде Ибрай мәктәбендә алғандан уң, Аҡман ауылында дауам итеп, әҙерлек курстарын үткәндән уң, Ырымбурҙа Каруан арайҙа асылған башҡорт педагогия техникумына уҡырға инә. Тетрәндергес бала саҡ биттәрен ҡарап сыҡҡандан уң әҙибәнең Бөйөк Октябрь революция ына мөнәсәбәте аңлашыла. Тап ярлы халыҡты, етемдәрҙе белем, мәғариф юлына сығарыуҙы маҡсат итеп ҡуя бит совет влас ы. Зәйнәб тигән ҡыҙ — ана шунын тәүге емештәренең бере е.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 119



“Эйе, ул, Бөйөк Октябрь революция ы ғына, беҙҙе тормоштоң тынсыу төпкөлөнән тартып алып, яҙғы ҡояш нуры аҫтында гөрләп сәскә атҡан гөл-баҡса шикелле көләс, яҡты әм иҫ киткес иркен яңы донъяға, бәхет донъя ына сығарып ҡуйҙы... Бөтә булған көсөмдө, әләтемде, йөрәк йылымды уға, тик уға ғына ибө итергә тырыштым. Ил өсөн, халыҡ өсөн намыҫлы хеҙмәт — минең иң ҙур бәхетем булды”. Яҙыусы үҙенең хәтирәләрендә ата ы нәҫеленән булған Мирсаяф Биишев тигән революционерҙы ла телгә ала. Ул Ленин менән бергә уҡыған, уңынан сәйәси ҡарашы арҡа ында уҡыуҙан ҡыуыла, ләкин эшмәкәрлеген дауам итә әм 27 йәшендә ағыулап үлтерелә.

Ырымбурҙа уҡый башлағас, тормош маҡсаты асыҡлана бара. Ул саҡта йәшәү мәғәнә е илде аяҡҡа баҫтырыуысы, яңы тормошто раҫлаусы булып үҫеүҙә күрә. “Азатлыҡҡа сығарған илгә саф йөрәктән хеҙмәт итеү иң ҙур бәхет булды”. Шуға ла бәхет төшөнсә енә әҙибә әр саҡ урын бүлгән. “Ижадымдың төп нигеҙ ташы — кешелеклелек, азатлыҡ, дөрөҫлөк, ғәҙеллек, дуҫлыҡ, туғанлыҡ мәсьәләләре. Шуларҙы яҡлау, аҡлауҙы ысын бәхет итеп ҡабул иттем. “Яҡтыға” — ана шул маҡсаттың иң асыҡ миҫалы”. Ысынлап та, үҙең ысын күңелдән нурлап балҡып янмай, унның нескә ҡылдарын тибрәндермәй тороп, уҡыусы күңелен тулҡынландырып булмайҙыр ул. “Был тема — иң изге, мөҡәддәс тема. Мин был трилогияны яҙырға ҡайта-ҡайта тотоноп, 40 йылға яҡын ваҡытымды бирҙем, үҙ йөрәгем ҡушҡан өсөн.

Эйе, ғүмеремдең төп маҡсаты булған был революцион темаға үҙебеҙҙең башҡорт әҙәбиәтендә башлап үҙ әйтеүселәрҙең бере е булыуым менән дә, әҫәрҙәремдең уҡыусы күңелен коммунистик рухта тәрбиәләүҙәге оло хеҙмәтен күреү, Коммунистар партия ы, Ленин идеялары яҡтылығын үҙ йөрәгем ҡушҡанса уҡыусыға еткерә алыуым менән дә бик бәхетлемен...” Зәйнәб Биишеваны үҫтергән дәүер, унын тиңдәштәре ҡайнаған заман, уларҙы тәрбиәләгән мөхит тура ында ошонан да тулыраҡ итеп әйтеү мөмкин дә түгелдер. Идеология үҙгәреүе, ҡиммәттәр алмашыныуы был әҫәрҙең ба а ын ис кенә лә кәметмәй. Трилогия — халҡыбыҙҙың ҡанлы әм шанлы тарихы. Үткәндәрҙән абаҡ алыр өсөн шул заман эсенә инеү мө им. Ә был бары тик китаптың ғына ҡөҙрәтенән килә, геройҙар менән берлектә ҡайнап ҡына үҙебеҙ эҙләгән орауҙарға яуап таба алабыҙ.

Бына шуға ла З. Биишева үҙен яҙыусы ғына түгел, ә “төҙөүсе әм көрәшсе” тип тә атай. Был үҙҙәрҙең ныҡлы нигеҙе Ырымбурҙа алына. Йәшлек рухын, яҡты хыялдар менән ҡанатланған йәштәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтен артабан ул үҙенең китаптарында сағылдырҙы.

Октябрь байрамы уңайынан я аған сығышында ул былай ти: “Әйткәндәй, кеше яҙмышы, бәхет әм бәхет еҙлек мәсьәлә е, моғайын, халыҡтың иң тәрән төпкөлөнән сыҡҡан бала булараҡтыр, мине лә әр саҡ ныҡ ҡыҙыҡ ындырҙы. Кескәй генә етем ҡыҙ саҡта уҡ мин кеше хаҡында, бәхет әм бәхет еҙлек хаҡында бик йыш уйлай, нисек итеп бәхеткә ирешеү хаҡында төндәр йоҡламай баш вата торғайным. Әммә бөтә әйләнәң ҡыҫыу-иҙеү, кәм етеүгә ҡоролған, аслыҡ-яланғаслыҡ, кешелек еҙлек ҡымтыған, бар тормошоң тотош бер аҙаптан торған ул заманда был буш хыял, өмөт итергә лә мөмкин булмаған тылсымлы әкиәт йәки сүллектә сарсап үлергә дусар ителгән юлсының күҙенә йылға-диңгеҙ булып сағылған мираж кеүек кенә ине...”

Тотош бер дәүер кисергәндән уң оло яҙыусы үҙенең үткәндәрен киңерәк планда асты. Был инде бер кешенең яҙмышын ғына түгел, ә халҡының тарихын бәйән итеүе ине, әм унын бәхет әм бәхет еҙлеген дә календарҙағы бер дата менән генә билдәләмәне. Йылдар үтеү, оло тәжрибә туплау яңы бейеклеккә күтәрҙе, яҙыусы әм философ Зәйнәб Абдулла ҡыҙы халыҡҡа йәшәү көсө бирәсәк ҙур ҡиммәттәр тура ында уйланырға саҡырҙы.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 120



Каруан арай бер Зәйнәб өсөн генә ил ам сығанағы булмай, әлбиттә. Унын менән бергә уҡыған Әбүстең тәүге шиғри юлдары Ырымбурҙа тыуа. Әбүс “Ҡараҡай” тигән шиғырында Зәйнәб Биишеваның образын оҡланғыс юлдар аша тыуҙырыуға өлгәшә. “Түңәрәк ай ана нисек сихри була!..”

Техникумда Фәтих Кәрим, Ибра им Ҡыпсаҡ, Ғәлим Айҙаров, Ибра им Бикчәнтәев кеүек уҡымышлы ғали заттар белем бирә. Зәйнәб апай, мөғәллимдәрен тәрән хөрмәт менән иҫкә алыу менән бер рәттән, уларҙың әр дәресен үҙе өсөн асылған яңы бер донъяға тиңләштерә. Әлбиттә, иң яратҡан дәресе әҙәбиәт була. Техникумда “Йәш быуын” тигән айлыҡ ҡулъяҙма әҙәби журнал әм “Уҡыусы” тигән стена гәзите сығарыла, әҙибә хәтирәләрендә үҙен әүҙем яҙғандар иҫәбенә индермәй. Шулай ҙа тәүге ижад емештәрен башҡаларҙыҡы менән сағыштырып ҡарарға, тимәк, ниндәйҙер ығымта я арға мөмкинлек булған. Тимәк, яҙғы бөрөләр — беренсе хикәйәләре әм шиғырҙары — тулҡынландырғыс, бәхетле мәлдәре Ырымбур менән бәйле. Бәләкәй саҡтан ҡырыҫыраҡ, кеше менән бик аралашып бармаған ҡыҙҙың иң яҡын серҙәше ул саҡта ҡәләм-дәфтәр булыуы ла ғәжәп түгел. Зәйнәб апай үҙенең яҙмышындағы ана шул боролошло йылдарҙы эске бер йылылыҡ менән иҫкә ала. Алты йыллыҡ институтты биш йылда уҡып сығыуы үҙе мөғжизә түгелме ни?

Зәйнәб апай и ә сынығыу йылдарын шундай уҡ ғәҙеллек өсөн көрәшеүселәр исеме менән бәйләне. Тәүге революционерҙарға ҡарата унын фекере үҙгәреш еҙ ҡалды. “Беренсе большевиктар халыҡ өсөн көрәштеләр, унын өсөн ҡан түкте, йәндәрен бирҙе. Улар ил, халыҡ тип, тигеҙлек урынлаштырырға тип килде. Шул тәрбиә инеп ҡалды беҙгә. Бына шуға ла торғонлоҡ замандарында ла үҙ үҙемде әйтергә ҡурҡманым”. Был — традицияға тоғролоҡ. Ерҙә йәшәү шулай дауам итергә, шулай булырға тейеш быуындар бәйләнеше. Сәйәсәт үҙгәрә, ләкин юғары идея, рух, гуманизм, әҙәп, намыҫлылыҡ кешелектең үҙе кеүек үк боронғо. әр быуын уны яңынан аса, үҙ ҡаҙаныштары менән байыта бара.

З. Биишеваның юғарыла әйткән тормош принцибын нығыраҡ аңлар өсөн үҙ аллы башлаған тормош юлына күҙ алырға кәрәктер. Зәйнәб Абдулла ҡыҙы үҙ теләге менән Баймаҡ районы Билал ауылына эшкә китә, әммә унын иңендә мөғәллимлек вазифа ы ғына ятмай — йәш уҡытыусы колхоз ойошторыуҙа ла ҙур ярҙам күр әтә. Ул замандарҙа аталғанса, ағартыу эше лә алып бара, йәғни сәйәси тормош менән ҡайнап йәшәй. Күп мәсьәләләрҙе үҙ аллы хәл итергә тура кил ә лә, ул бер ҡасан да яуаплылыҡтан ҡурҡмай. Кәрәк саҡта тәүәккәл әм сая ла була белә. “Беренсе мәртәбә тау кешеләрен Билал ауылында күрҙем. Эй, ҙур кәүҙәле кешеләр икән. Мөғәллимә килгән, тип күрергә киләләр, ишектән бөгөлөп саҡ килеп инәләр, баштары түшәмгә тейеп тора. Мин бәләкәс кенә, тегеләргә ҡурҡып ҡарап ултырам. Яҙ еткәс, Темәскә эшкә саҡырҙылар. Тәнәйҙе ебәрмәйбеҙ, тип йыйылыш йыйып, протокол төҙөп йөрөгән булдылар. Яраттылар...” Буласаҡ яҙыусы — халыҡ күңелен тәрән аңлаусы, уға ышаныс, өмөт уты алыусы. Бына ошо ижадсынын төп асылы.

Журналистика менән айырылғы ыҙ бәйләнешен и ә “Пионер” журналы редакция ына эшкә килгәс — 1931 йылдан иҫәпләргә кәрәк. Тәүге хикәйә е 30-сы йылда баҫылғандан уң, байтаҡ ына өҙөклөк тә булып тора. Ил өҫтөнә төшкән ауыр ынау — Бөйөк Ватан уғышы яҙмыш китабына үҙ төҙәтмәләрен индерә. “Мин үҙемдең ошо йылда, йәғни 1941 йылдың ноябрендә, Коммунистар партия ы сафына инеүемде әм бөтә көс менән йәмәғәт эшенә сумып китеүемде ошо ҙур ышаныстың өҙөмтә е тип ҡарайым”.

Ижадҡа килеү юлында иҙелерлек роль уйнаған әҙиптәрҙең исемдәрен Зәйнәб Биишева үҙенең хәтирәләрендә ихтирам тойғо о менән телгә ала. Ырымбурға уҡырға килгәнсе, әле Ташлы ауылында әҙерлек курстарында уҡып йөрөгән сағында, Зәйнәб

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 121



тәү башлап ҡыҙыл галстук таҡҡан бер кешене күрә. Ул шағир Батыр Вәлид булып сыға. Әҙәбиәттә үҙ үҙен әйтергә ярҙам итеүсе икенсе кеше е – Низам Ҡәрипов.

“Минең матбуғатҡа сығырға ҡыйыулыҡ итеүемә иң тәү башлап мәрхүм Низам Ҡәрипов ағай сәбәпсе булды. Бер ваҡыт, 1941 йылдың яҙында, мин радиокомитетта әҙәби тапшырыуҙар редакторы булып эшләгән саҡта, ул мине Яҙыусылар союзына саҡырып алды. Ҡәрипов ағай ул саҡта Яҙыусылар союзының председателе булып эшләй ине”. Н.Ҡәриповтың фатиха ы менән “Октябрь” журналының май анында буласаҡ яҙыусының тәүге хикәйә е баҫылып сыға.

Июндә Бөйөк Ватан уғышы башлана. Низам Ҡәрипов, ҡулына ҡорал алып, Тыуған илде аҡларға китә әм Сталинград янында батырҙарса әләк була. Ватан, киләсәк яҙмыш әм әҙәбиәт тип янған бына ошондай оло йөрәкле кешеләр фатиха ын тотоу, уларҙың ышанысын аҡлау, башлаған изге эшен дауам итеү теләге лә Зәйнәб Биишеваны ижад юлына этәргәндер.

“Бөтә е лә фронт өсөн, бөтә е лә еңеү өсөн!” – был лозунг әр совет кеше енән фиҙакәрлек талап итә. “Мин еңеүҙе нимә менән яҡынайта алам?” Фронтовик ҡатыны, өс ир бала тәрбиәләгән әсә был орауҙы үҙенә күп мәртәбәләр биргәндер. Ҡәләм ҡылыстан да көслөрәк булған был дә шәтле осорҙа Зәйнәб Абдулла ҡыҙы үҙенең артабанғы яҙмышын хәл итерҙәй тәүәккәл үҙен әйтә. 1942 йылда донъя күргән “Партизан малайы” тигән китабы ил саҡырыуына яуап булып тора.

Иленең ялҡынлы патриоты Зәйнәб апай был хикәйә ендә уҡыусы балаларҙың ололар менән бер рәттән немец илбаҫарҙарына ҡаршы алып барған көрәшен тасуирлай. Дә шәтле йылдарҙа ул тәүгеләрҙән булып балаларҙың героик көрәшен үрәтләгән сәсмә әҫәр тыуҙырыуға өлгәшә. Беҙ “Партизан малайы” хикәйә ен шул дәүер балаларына ҡуйылған әйкәл тип ҡабул итергә хаҡлыбыҙ. Ул ваҡытта Зәйнәб Абдулла ҡыҙының киләсәк быуынға мөрәжәғәт итеүе ис тә осраҡлы түгел, уларға ышаныс белдереүе, күңелдәренә ҡанат ҡуйырға теләүе әҫәрҙә бөтә тулылығында сағылыш таба. Ошо инаныуына яҙыусы бер ҡасан да хыянат итмәне. Артабан уҡыусылар күңелендә мәңгегә тороп ҡалырлыҡ әҫәрҙәрен ижад итте, әм улар әле лә йәш быуынды тәрбиәләй. Әсә кешенең, талант эйә енең бер ҡөҙрәте был. Йөрәгендә ижад уты йөрөтөүсе ҡыҙ оло юлға сығарыусы мөғәллимдәренең дә өмөтөн аҡланы, башҡорт әҙәбиәтен яңы баҫҡысҡа күтәреү өсөн бар тормошон фиҙа итте. Ырымбурҙа бергә уҡыған тиҫтерҙәре лә ҡулдарына ҡорал алды. Уларҙың ҡай ы берҙәре уғыштан иҫән- ау әйләнеп ҡайтып, ҡулдарына ҡәләм аласаҡ, танылған яҙыусылар, шағирҙар булып китәсәк. Фронтҡа киткән ир-егеттәрҙе алмаштырған, 1941 йылда уҡ Коммунистар партия ы сафына ингән тыл ҡа арманы Зәйнәб Биишева был ваҡытта инде матбуғат аша халҡына үҙенең үҙен еткерә килә ине әм артабан инде ҡулынан тылсымлы ҡәләмен төшөрмәне.

## Нур ибеүсе хәрефтәр

Беҙ бала саҡта уҡыған китаптарҙың йөкмәтке ен әлегә тиклем хәтерләйбеҙ. Хикәйә, әкиәт, шиғыр биргән кинәнес бер ҡайҙа ла китмәгән, ул әле лә беҙҙең менән, кисерештәр-тойғолар бүҫкәрмәйенсә күңелебеҙҙә аҡлана. Дөрөҫ, бәләкәй саҡта беҙ ошо шатлыҡты тыуҙырыусыларҙың исем-шәрифтәрен белмәй инек, сөнки ҡулға килеп ингән китаптар үҙ тормошо менән йәшәй ымаҡ. Шуға ла, кескәйҙәр өсөн уны кемдер ижад итә, тигән уй башҡа ла инеп сыҡмай. уңынан, йылдар үткәс кенә, уҡылған әҫәрҙәребеҙҙең авторҙары барлығын, исем-шәрифтәрен белдек. Хатта күптәребеҙ өсөн был асыш ине. Шулай уҡ был үҙенә күрә донъяны, йәмғиәтте, шәхестәрҙе танып белеүҙең бер сара ы ла ине.

Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев “Талант балҡышы” тигән мәҡәлә ендә ошолай тип яҙҙы: “Бала саҡтағы бер ҡышҡы кис аман да хәтеремдә. Ул кистә баҙлаҡ шәм яҡты ында мин “Йәнле хәрефтәр” тигән кескәй генә китапты бер тынала уҡып сыҡҡайным. Уның әр битендә ике генә юллыҡ шиғыр ине, әр шиғыр үҙенән-үҙе ятланып тора ине. Шул ауыр замандарҙа әллә кемдәрҙең

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 122



хәстәре менән Ырымбур далаларына барып еткән был кескәй генә китап Зәйнәб апайҙың “Йәнле хәрефтәр”е булған икән. Бөгөн Зәйнәб Биишеваның ижад юлын байҡайым да, уның барлыҡ әҫәрҙәре йәнле хәрефтәрҙән, ҡайнар кисерештәрҙән, үткер фекерҙән тыуылған тылсымлы бер донъя булып күҙ алдына баҫа”. Был үҙҙәргә әҙибәнең меңәрләгән уҡыусысы ы ла ҡушыласаҡ. Хәрефтәрҙең тамға ғына түгел, үҙенсәлекле йән эйәләре икәнен яҙыусы бала саҡта уҡ белгән. Тап кескәйҙәргә ошо тереклекте бүләк итеүе осраҡлы күренеш түгел. Буласаҡ яҙыусы хатта үҙенең ҡасан уҡый башлағанын да хәтерләмәй бит. Ул – иҫ белгәндән ике донъя кеше е: тәүге е – ысынбарлыҡ, икенсе е – әкиәт, тылсымлы китап юлдары. “Беҙҙең күҙ таный, күңел ҡабул иткәндән уң хәрефтәр мәңге терегә әйләнә. Улар беҙҙең менән ғүмер буйы ҡаласаҡ. Хәрефтәр генә түгел, үҙ ҙә мәңгелек”,– ти яҙыусы.

“Минең остаздарым, нигеҙҙә, башҡорт халҡының ик еҙ-сик еҙ бай ауыҙ-тел әҙәбиәте (мин уларҙы, образлы итеп әйткәндә, әсә өтө менән күңелемә еңдергән әм уның иң классик төрҙәрен яттан белгән кеше) әм рус классик әҙәбиәте булды. Мин рус классика ын уҡып ҡына ҡалманым, уларҙың бик күптәрен тәржемә иттем. әм, шуларға эйәреп, үҙ халҡым телендә, уның рухи байлығы нигеҙендә, төптө үҙемсә әҫәр тыуҙырыу – төп хыялым булды”. Хыял ауырлыҡтарҙы еңергә ярҙам итә. Хыял әм әкиәт – күңел дауа ы ла. Бына нимә тип яҙа үҙенең хәтирәләрендә Зәйнәб Биишева. “Үҙен күреп белмә әм дә, әсәйемде табыныу дәрәжә енә етеп ярата, уны ваҡыт ыҙ ҡорбан булған изге йән тип тә, ҡар-буран эсендә аҙашып-илап йөрөгән, үгәй етелгән йәш килен итеп тә, минең өсөн өҙөлгән, берҙән-бер саф йөрәкле кеше итеп тә хөрмәтләй инем. Яңғыҙым ғына булғанда, бышылдап ҡына уға үҙ ҡайғыларымды өйләп йыуанам, уны тере кеүек, әр саҡ янымда, минең менән бергә интегеп йөрөгән кеүек тоям, шуға, ахыры, атайымды үгәй әсәйҙән уның өсөн көнләй ҙә инем шикелле мин...”

Тунған, өшөгән йән йылыныу урыны эҙләйәсәк. Эҙләгәс, мотлаҡ табасаҡ. Уны хатта хыялдан да эҙләй е түгел. Был йылылыҡ беҙҙе ураҡкан кешеләрҙә булыр. Аулаҡ өй бала саҡтың шундай яҡты ил ам биреүсе усағы булған. Ҡыҙ балалар бергә йыйылышып үҙ өнәрҙәрен күр әткән. Йыр-бейеү, йомаҡ ҡойоу, уйын – бере е лә ҡалмаған. Иң ҡыҙыҡ, яраҡкан уйындары – әпәләк. Ҡыҙ балалар янында мотлаҡ оло кеше булырға тейеш. Унда гел генә Сафура тигән инәйҙе алғандар, был инәй бөтөн әкиәттәрҙе әм эпостарҙы белгән, күпме өйлә ә лә, тылсым муҡсайы кәмемәгән. Зирәк Зәйнәб әкиәттәр өйләү буйынса әбейҙән ҡала икенсе булған.

Бала ниндәй китаптарҙы үҙ итә? Нимә уның рухи ихтыяжына, эҙләгән орауҙарына яуап бирә ала? Был урында яҙыусының эске иҙемләүе көслө икәнен дә әйтергә кәрәк. Зәйнәб апай үҙе лә китаптар эсендә үҫкән, тибеҙ икән, был – хәҡиҡәт. Эйе, бала сағы еңел булмай уның. Үткәндәренә “күҙ ташла аҡ“, бала сағының болотло- өрөмлө көндәрен аяҙыҡкан мәлдәрҙең китап, йәғни үҙ сәнғәте менән генә бәйле икәнен күрербеҙ.

“Буҙъегет”, “Ләйлә менән Мәжнүн”, “Та ир менән Зө рә”, “Йософ менән Зөләйха”, “Мең дә бер кисә” әм башҡа шундай китаптарҙы мин үҙебеҙҙең өйҙә бик кескәйҙән уҡып үҫтем. Бөйөк татар шағиры Ғабдулла Туҡай шиғырҙарын, бигерәк тә уның “Иҫемдә ҡалғандар” тигән әҫәрен илай-илай уҡый торғайным. Был китаптар өҫтәүенә ағайым ҡырҡ тартмасынан төрлө ваҡ-төйәк китаптар ҙа атып ала ине. Беҙҙә Ҡөрьән әм әфтиәк тәфсирҙәре лә була торғайны. Миңә ундағы пәйғәмбәр, әүлиә, батша әм башҡа шундай изге йәндәрҙе алдап, аҙҙырып йөрөүсе шаян шайтандар, ҡылйыуар ендәр тура ындағы әкиәттәр айырыуса оҡшай. Был дини әкиәттәр миндә Алланың изге йәндәрҙе лә аҙмай, боҙоҡлоҡ эшләмәй торған итеп яратмауына аптырау уята ине”.

Эйе, нисәмә быуын оло талант эйә е Зәйнәб Биишеваның балалар өсөн яҙылған әҫәрҙәрендә тәрбиәләнеп үҫте. Йәш быуындың алдына “Кем булырға?” тигән орау килеп баҫкан саҡта тормош юлын айлауҙа ана шул китап геройҙары

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 123



ла ярҙам итте. Бөгөн яҙыусы булып танылған кешеләр үҙҙәрен бала саҡтарында әсир иткән әҫәрҙәр ара ында мотлаҡ Зәйнәб Абдулла ҡыҙы яҙғандарҙы атаясаҡ.

Зәйнәб Биишева Бөйөк Ватан уғышы йылдарында үҙен тәржемәсе итеп таныта. Әҙәбиәт белгестәре әле лә был әҫәрҙәрҙең башҡортса яңғырауын, текстағы лексик, стилистик әм мәғәнәүи үҙенсәлектәрҙе теүәл еткерә алыуын билдәләй. Башҡорт теленең бөтә нескәлеген белеүе тәржемәгә яңы улыш бирҙе. Лев Толстой, Максим Горький, Антон Чехов хикәйәләрен башҡорт уҡыусы ы үҙенеке тип ҡабул итте. Николай Гоголь, Иван Тургенев повестарын кем генә хәтерләмәй икән? Балалар донъя ы Аркадий Гайдарҙың “Тимур әм уның команда ы”, Лев Кассилдең “Минең ҡәҙерле малайҙарым” тигән китаптары аша байытылды.

Зәйнәб Абдулла ҡыҙы донъяға аптырау әм оҡланыу менән баға. Уның күңелендә әр саҡ мең-мең орау ҡайнай. Бер туҡтау ыҙ тормош хикмәттәрен, әҙәбиәт серен асырға ынтыла. Үҙаллылыҡ, тәрән ҡыҙыҡ ыныусанлыҡ уға тыумыштан уҡ бирелгәндер, күрә ең.

Үҙенең “Кәңәш” тигән шиғырында ҡәләм оҫта ы шулай тип яҙҙы:

*Оло йөрәкле бул. Батырҙарҙы*
*Шө рәт үҙе таба донъяла.*
*Осҡон үнгән урынды көл ала.*
*Ҡояш уҙған юлда нур ҡала.*

Ил инә е, мәш үр яҙыусы Зәйнәб Абдулла ҡыҙы мәңгелек бала саҡ иленә үҙенең ҡояшлы күңелен ҡалдырып китте. Таң нурына ҡулын оноп сабый нисек талпына, уның ижады ла ошондай тормошто раҫлаусы көскә эйә. Әҙәбиәт донъя ына илткән яҡты юлдың әр саҡ йәнле, нурлы хәрефтәрҙән башланғанын беҙ күптән беләбеҙ.

## Аҫыл сәскәләр

Каруан арайҙа уҡыған саҡтарын иҫкә алып, әҙибә шулай тип яҙа: “Беҙҙең әҙәбиәт уҡытыусы ы Ғәлим Айҙаров ысын мәғәнә е менән үҙ эшенең оҫта ы әм патриоты ине.... Башҡорт халыҡ ижадын өйрәнеү, уны йыйыу эшенә мөхәббәт тәрбиәләүҙә күп хеҙмәт алды. Бер йылды ул беҙҙән – әҙәбиәт өйөүселәрҙән – бер нисә фольклор китабы әҙерләү төркөмө ойошторҙо. Мин әкиәттәр йыйынтығын әҙерләүсе төркөмдөң етәксе е итеп билдәләнгәйнем...”

Хөрмәтле мөғәллимдәре билдә еҙ сәбәп менән икенсе эшкә күсерелгәс, был изге эш туҡтап ҡала. Ләкин уҡыусы ының күңелендә ошо ынтылыш үнмәй. Зәйнәб Биишева эшкәртеүендә 50-се йылдарҙа донъя күргән “Башҡорт халыҡ әкиәттәре” кескәй дуҫтары өсөн бына шундай бүләк була. Бала хыялланырға тейеш, сөнки ул ғына әкиәт эсендә йәшәй ала, ә быны хыял ыҙ тормошҡа ашырып булмай. Сабый әр саҡ ыңғай персонаж янында, уға бер ҡасан да хыянат итмәй, бергәләп яуызлыҡ менән көрәшергә өйрәнә. Бында улар тиңдәштәре менән иркенләп донъя гиҙә, ә әкиәт донъя ы бер генә төҫтә түгел: ысынбарлыҡтан күпкә сағыуыраҡ. Хыял эсендә бала бәхет төшөнсә ен дә аңларға өйрәнә. Бер китабы ла “Бәхет ҡыҙы хаҡында әкиәт” тип юҡҡа ғына аталмай. Йәнә лә бала оҡланырға тейеш, ә был бөтә тулылығында ауыҙ-тел ижадында сағылыш алған. Тереклеккә йәшәү бүләк итеүсе ил батырҙары, ҡа армандар... Улар менән күҙгә-күҙ тағы ла ҡайҙа осрашырға мөмкин? Нәфис үҙ аша батырлыҡ, матурлыҡ тигән изге төшөнсәләр бала күңеленә тоткарлыҡ ыҙ барып етә. Бала өмөт аша донъяға баҡ ын. Уның күңелендә яҡшылыҡ еңәсәгенә, бөгөн инә ауыр икән, иртәгә е көндә уның үтәсәгенә ышаныс йәшәргә тейеш. Бер әкиәтенең “Ел, ел, арбам!” тигән баш аҫтында баҫылып сығыуы ла балаға ниндәй хәлдә лә баҙап, туҡтап ҡалмаҫҡа ҡушыуҙы аңлата, буғай. Хәрәкәттә, эҙләнеүҙә булғанда маҡсатыңа өлгәшергә мөмкин.

Зәйнәб Биишева үҙенең тормошон өс дәүергә бүлә. “Ғөмүмән, мин өс дәүер йәшәнем. Уларҙың тәүге е – етемлек, бала әм үҫмер саҡ дәүере. Ә ғүмеремдең иң ауыр мәлдәре – 37-се йылдарҙан башланды... әм өсөнсө дәүер – илленсе йылдарҙан уң”.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 124



1937 йылдар – әр кем күңеленә шом алған осор. Иртәгә е көн өсөн билдәеҙлек. Был йылдарҙа төрлө кеше төрлөсә асыла. Яҙмыш отош уйынын хәтерләтә. Кем иртәгә ҡулға алына, кем аҡлана. Инаныуың да, хеҙмәтең дә, гражданлыҡ позицияң да ҙур роль уйнамай, күп нәмәне осраҡлылыҡ хәл итә. 41-се йылда инде тотош илде генә түгел, донъяны хәүеф өрөмө ҡаплай. Бик ауыр ынау. Ләкин тап ошо аяу ыҙ, киҫкен дәүерҙә әҙәм бала ының шәхси яуаплылығы, асыҡ гражданлыҡ позиция ы беренсе урынға сыға. Ул кешенең йәшеренеп ятҡан, хатта үҙе лә белмәгән эске көсөн тоҡандырырға мәжбүр итә. Беҙ быны рухи ҡа арманлыҡ тип кенә атай алабыҙ. Башҡорт ҡыҙы Зәйнәб Биишева – ана шундай ҡа армандарҙың бере е. Ауыр уғыш йылдары Зәйнәб Биишеваны шәхес булып формалаштыра. Хәҙер уның иңендә – өс бала ынан тыш, уғыштан ғәрипләнеп ҡайтҡан ире. Тормош ил өйәр, эш өйәр ҡатынға ҙурыраҡ бурыстар йөкмәтә, ләкин ул инде ығылып-бөгөлөп барғандарҙан түгел. Бынан ары Зәйнәб Биишева ғаилә енең генә түгел, ә халҡының, иленең терәге буласаҡ. Яҙыусының башҡорт әҙәбиәтен байытасаҡ, биҙәйәсәк күңел нурының тәүге шәлкеме баҙлап ҡабына. Эйе, тап 50-се йылдарҙан уң ул башкөллө ижад донъя ына сума, сөнки аҡ ҡағыҙҙа сағылыш алған рухи балҡышты халҡы яратып ҡабул итә. Зәйнәб Биишева тәржемә иткән әҫәрҙәр әле лә үҙ ҡиммәтен аҡлай. Мәктәп, матбуғат менән тығыҙ бәйлелек, балалар әсә е булыуы, ижадсыға хас көслө эске иҙемләү уңышлы тәржемә әҫәрҙәрен айларға ярҙам иткәндер. Тәүге урында дуҫлыҡ идея ы тора. Был балаларҙың үҙара мөнәсәбендә, маҡсат ҡуя белеүҙәрендә сағыла. Үҙенең дә балалар өсөн яҙған хикәйә-повестарына байҡау я ағанда дуҫлыҡ идея ы төп ыҙыҡ булып үтә. Был юғары тойғоға, ысын дуҫлыҡҡа килеүе еңел түгел. Балаларҙың күңел кисерештәре, хаталары, асыштары ихлас үрәтләнә. “Дуҫ булайыҡ” повесында йәш быуындың тормоштағы урынын, йәшәү асылын эҙләү юлдары төрлөсә. Мәктәп үҙ шарттарын ҡуя, бала-саға, шул шарттарға ярашлы, үҙен бер йә эттән күр әтә. Мәктәптән тыш та тормош бар, уның талабы инде икенсерәк, шуға ярашлы, баланың да үҙ-үҙен тотошо, тәртибе башҡасараҡ була башлай. Бала ғына түгел, оло кеше лә бер төрлө генә булып ҡала алмай. Көткән-көтөлмәгән ваҡиғалар алдында кеше үҙен нисек тоторға тейеш? Нимәгә таянырға, кемде терәк итергә? Аҡ менән ҡара, яҡшылыҡ менән яуызлыҡ, ялған менән хәҡиҡәт әр саҡ йәнәшә йөрөй. Тимәк, бала ла йыш ҡына – еңел булмаған айлау алдында. Шундай мәлдәрҙәге күңел хәрәкәтен оҫта тотоп ала әҙибә. “Дуҫ булайыҡ” повесында беҙ балалар тормошона бөтә тулылығы аша бағабыҙ. Ваҡиғалар төрлө урында бар а ла, китаптың исемендә сағылған төп идея тарҡалмай, бер ыҙыҡ булып бара. Бына шуға ла повесть, үҫмерҙәр проблемаларына ярашлы, фекер алышыр, бәхәс ҡорор әҫәрҙәрҙең бере е булып ҡала.

Йәнә лә төп лейтмотивтың бере е – быуындар бәйләнешен күр әтеү. Юлдаштың оло үҙен тыңлай әм үҙ фекерен төйөнләй белеүе иғтибарға лайыҡ. “...был кис мәңге онотолмаҫлыҡ булып Юлдаштың күңелендә ҡалды. Ул ошо кистә “ ин уҡый ыңмы, эшләй еңме йәки йырлай ыңмы, көрәшә еңме, ни генә эшлә әң дә, уны бына ошо Хәсән, Сәлмән бабайҙар, Хәмит ағайҙар шикелле бөтә йәнеңйөрәгең менән бирелеп башҡар. Шул саҡта ғына ул инең үҙеңә лә, кешегә лә шатлыҡ килтерер. Күңел алмай, яратмай, тырышмай, ярты-йорто башҡарылған эштән бер кемгә лә ҡыуаныс та, файҙа ла юҡ” тигән хәҡиҡәтте аңланы әм быны әр ваҡыт иҫтә тоторға үҙ-үҙенә үҙ бирҙе”.

Зәйнәб Биишева ғүмеренең аҙағына саҡлы төрлө жанрҙа эшләне. Сәсмә әҫәрҙәрендә дәүер шаңдауы яңғыра а, шиғриәтендә үҙенең эске булмышы, тойғолар гөлләмә е сағылыш алды, гүйә, ҡәләм оҫта ының йөрәк тибеше улҡылдап ишетелгәндәй. “Кәңәш” тигән шиғырына ғына иғтибар итәйек.

*Оло йөрәк туҙалыр иртәрәк,*
*Туйҙа түгел – тауҙа, ярышта;*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 125



*Гәҙеллек әм хаҡлыҡ өсөн барған*
*Мәңгелек ҙур ауыр алыштa.*

Әҙибәне хәтерләүселәр унының оло йөрәкле булыуын мотлаҡ телгә аласаҡ. Был йөрәктең хистәр тәрәнлеге шиғриәттә сағылмай ҡайҙа сағыл ын инде! Ни ҡәҙәр моң, ағыш, ыҙланыу, туған халҡы менән ғорурлыҡ, киләсәккә ышаныс, бер үк ваҡытта унының киләсәге өсөн ағайыу, рухландырыу. Яҡты, саф хистәр менән мөлдөрәмә тулы мөхәббәт лирика ы тура ында айырым әйтмә әк, яҙыҡ булыр. Был шиғырҙар күп түгел, ләкин яр ыу йөрәкле әҙибәнең кисереш-әрнеүҙәрен уларҙан тыш тулыраҡ аңлау мөмкин түгел.

*Ниңә күрҙем, ниңә яраттым мин,*
*Ниңә күңелемде яуланың?*
*Ниңә инең моң оу күҙҙәреңдән*
*Күҙҙәремде ала алманым?..*

Нәфис әм яралы йөрәктең тау бөркөтө — бейеклектә. Лирик герой унының осоуын тотҡарламай әм үҙе лә ошо бейеклек аша ғына ба аланырға хаҡлы. Автор мөхәббәтте "Йөрәктең аҫыл сәскә е" тип атай. Ысынлап та был аҫыл сәскәләр, лирик герой раҫлауынса, янып-көйгәнме? Бәлки, тәү ҡат автор менән килешмәҫкә баҙнат итәм. өйөү сәскәләренә ҡыш ыуығы ла, йәйҙең көйҙөргөс ҡоролоғо ла тәьҫир итмәй. Аҫыл сәскәләр өйөүҙән баҙлап тоҡанған бит, шуға ла сихри кисерештәр инде нисәмә быуын уҡыусы күңелен уғара килә. Быны нисек мөғжизә тип атамаҫҡа мөмкин?

## "Мин ғүмерем буйы уҡыным..."

Зәйнәб Биишева үҙенең хәтирәләрендә бала саҡта ҡырыҫыраҡ, аралашып бармаусан булғанын иҫкә ала. Был сифаттар, икенсе яҡтан ҡарағанда, унының бик ғәҙел булыуын, теге йәки был мәсьәләне үҙ аллы хәл итергә тырышыуын, эске көсөн күр әтә. Ниндәйҙер ораy килеп тыуа икән, бәләкәй Зәйнәб уға яуап тапмайынса тынысланмай, ауырлыҡта ла, аслыҡта ла кеше тигән ғорур исемгә тап төшөрмәй. Зәйнәб Биишева үҙенең бала саҡ хәтирәләрендә шулай тип яҙа: "Етем тормоштоң бер әйбәт яғы бар. Ул — ирек. Йәшәргә лә, үлергә лә тулы ирек. Етем кеше бик кескәйҙән үҙе уйлап, үҙе хәл итергә өйрәнә. Уны ҡурсыған кеше булмаған кеүек, ирек еҙләп, ҡыҫтап, ҡайғыртып тороусы ла булмай".

Шәхес булып формалашыуҙы, әлбиттә, бала саҡтан тыш күҙ алдына килтереп булмай. Етемлек урпа ын бик иртә татығанлыҡтанмы, ул башҡаларҙың да моңзарын тәрәнерәк аңлай. Ғәҙеллек, тура үҙлелек менән ҡуша үрелгән иҫ киткес күңел нескәлеге тура ында әйтергә кәрәк. Кем генә унан ярҙам алмаған да, кем генә унан йылы үҙ ишетмәгән.

Тормош ауырлығын бәләкәйҙән күреп-кисереп үҫкән кеше өсөн хеҙмәт үҙе айырыуса тәрән мәғәнәгә эйә. Хеҙмәт уны аслыҡтан- ыуыҡтан ҡотҡарған, хеҙмәт аша донъяға ҡарашы формалашҡан. Ниндәй ҙә бул а берәй эштең серенә төшөнөү тормош асҡысын ҡулда ныҡыраҡ тотоуға бәрәбәр. Ижад тап шундай асҡыс булғандыр. Был асҡыс әҙибәнең үҙе өсөн генә кәрәкмәй ине. Эпик ҡоласлы әҫәрҙәрен Зәйнәб Биишева халҡына арнаны. Ләкин, был оло маҡсатлы юл ҡаршылыҡ ыҙ ғына булған икән, тип уйлау ҙа хата булыр ине. 1981 йылда профессор Роберт Байымовҡа яҙған хатында бына нимә ти ул:

"... мин ул трилогияны яҙырға уйлағанда әм "Бер ғүмерҙең тарихы" тигән исем менән яҙа башлағанда миңә егерме йәш тә юҡ ине. Ләкин тормоштоң аяу ыҙ ҡаршылыҡтары минең ҡулдан ҡәләмде уғып төшөрөп кенә торҙо. Шулай ҙа мин ул әҫәрҙе яҙыу хаҡында уйлауҙан бер генә минутҡа ла туҡталманым, бер генә минутҡа ла, яҙа алмам, тип өмөт өҙләнмәнем. Шулай итеп, уйланыу, әҙерләнеү барышы кәмендә 25—30 йылға уҙылды. Унының ҡарауы, улар ҡай ы бер хәҙерге күренекле романсыларға әҙер сығанаҡ, тарихи әм тормош материалы, халҡыбыҙҙың

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 126



бөтә эске донъя ы, рухи байлығы менән күр әтеп торған хазина булып хеҙмәт итте. Улай ғына ла түгел, минең яҙылған романдарымды яртышар йыл үҙҙәрендә тотоп, күсереп, эске донъя ын үҙләштереп, сығармай йылдар буйы тотолоп ятырға ла бөтә сара ын күреп, яҡшылыҡҡа яманлыҡ менән ҡайтарҙылар...

Эйе, минең оло хеҙмәтте өйрәнгән дә, яҙған да кеше юҡ шул әлегә. Киң күләмдә өйрәнеү хаҡында әйтәм. Килер бер саҡ: өйрәнерҙәр ҙә, яҙырҙар ҙа... Әммә мин күрә алмам инде. Ҡартайҙым.

Шуны ы үкенесле. Ғүмерҙең иң аҫыл сағы, яҙыуҙан бигерәк, йәшәү өсөн генә түгел, үҙеңдең ижади тормош менән йәшәргә хаҡлы әм әләтле икәнлегеңде раҫлау өсөн көрәшкә, әр китап өсөн мең ҡаршылыҡҡа яңғыҙың ҡаршы тороуға ибә ителде шул. Хәйер, үкенә е юҡ. Ниндәй көс-ҡеүәт, дәрт, дарман булған, бөтә е лә ижад өсөн, хеҙмәт өсөн түгелде. Алла ҡабул ит ен".

"Яҡтыға" трилогия ына ингән "Кәм етелгәндәр", "Оло Эйек буйында", "Емеш" романдары аша беҙгә башҡорт халҡының ғәжәйеп бер донъя ы асыла, беҙ бер нисә быуынды тоташтырған, шул уҡ ваҡытта төрлөсә хәрәкәтләнергә мәжбүр иткән хәл-ваҡиғалар эсендә ҡайнайбыҙ, үҙ заманының хәҡиҡәтен эҙләгән, яҡты маҡсат тип йән атҡан көрәшселәр әм халыҡты халыҡ итеп аҡлаған тарихи боронғолоҡ менән осрашабыҙ. Былар бөтә е лә тормош тип атала. Унда әр кемдең үҙ роле. Йәмғиәттәге ҡырҡа боролош мәлендә әҙәм бала ы артабан атлау өсөн, ирекле йәки ирек еҙ рәүештә, ниндәй ҙә бул а юлды айларға мәжбүр ителә. Ил күләмендәге йәшәү әм үлем өсөн барған көрәш, ахыр килеп, әр бер ғаиләгә йоғонто я ай. Октябрь революция ынан уң бер ғаилә ағзаларының ике яҡ ярға сығарып ташланыуы, ике генә түгел, хатта бер нисә фронтҡа бүленеүе — ана шул замандың фажиғә е, шул замандың үҙенсәлеген күр әтеүсе бер тамға ла. Таибә әбейҙең улдары — бының асыҡ кәүҙәләнеше. әр бере енең — үҙ хәҡиҡәте, үҙ инаныуы, шул ҡә әрле әм яр ыулы дәүергә хас үҙ маҡсатына ынтылыуы. Ҡаршыла яҡты маяҡ яҡтырып, саҡырып тор онмо, әллә ни бары күңелдәге ышаныс ҡына әйҙә енме — киләсәккә алып барыр юл бер ҡасан да тура булмай. Ул боролошло, икәлтәле. Яҙа баҫып упҡынға тәгәрәгәндәр ҙә, кирегә боролғандар ҙа юҡ түгел. Хәҡиҡәтте эҙләүселәр, үҙ заманының идеалдарын раҫлаусы образдар аша Зәйнәб Биишева кеше психология ын тәрән белеүен күр әтте. Йәнә лә шуны әйтергә кәрәк: эпик әҫәрҙе төрлө темалар буйынса тикшерергә була, был йә әттән ул — әҙәбиәтселәр, ғалимдар, фольклорсылар, тарихсылар, психологтар, экологтар өсөн ик еҙ-сик еҙ донъя. Шул заман улышының бирелеүе сәбәпсе быға.

Башҡорт халҡының революция алдынан, революция осорондағы көнитмешен, шулай уҡ унан уңғы ваҡиғаларҙың, ижтимағи-сәйәси мөхиттең эпик планда үрәтләнеүе, төрлө быуын, социаль ҡатлам психология ын тәрәндән асып күр әтеүе менән "Яҡтыға" трилогия ы — халыҡ тарихын, рухи донъя ын сағылдырған үҙенсәлекле энциклопедия ул. Ғали заттарҙы хайран итерлек мәғлүмәтлелек, рухи байлыҡ Зәйнәб апайҙың ижади булмышына хас. Серен әҙибә ябай ғына аңлата: "Мин ғүмер буйы уҡыным. Мин ни ҙә бул а өйрәнмәй, уҡымай торған көндәремде белмәйем. Сөнки яҙыусы, хатта ул ниндәй генә уҡыу йортон тамамлама ын, даими уҡымай, үҙенә талапсан булмай, үҙ өҫтөндә эшләмәй икән, иң мө име, өҙлөк өҙ халыҡ йөрәгенә мөрәжәғәт итмәй, унын менән бергә янмай-көймәй икән, ул барыбер заман менән тиң баҫа алмай. Заман талабына торош итерлек әҫәр ижад итә алмай. Шуға күрә яҙыусының иң мө им әм беренсе бурысы — даими уҡыу әм өйрәнеү".

Ижад әм шәхес тура ында үҙ алып барғанда бына ошо шиғри юлдарға күҙ алмау мөмкин түгел. Кем тура ында, кемгә арналған зи енде арбаусы юлдар?

*Залда йыйылыш бара. Трибунаға*
*Сығып баҫты өлкән, дәү ҡатын.*
*Унын йөҙө тыныс, күҙе яҡты,*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 127



*Әйткән  әр бер  үҙе мең алтын.*
*Йылдар бөгә алмаған туры  ынын*
*Кескәй трибунанан айырып,*
*Баҫып тора  ылыу ҡарағастай*
*Киңлегендә үҫкән Уралдың.*
*Ул йәш саҡта матурлыҡта бул а,*
*Хеҙмәт менән хәҙер дан алды.*
*Уның йыйырсыҡлы ҡарт йөҙөндә*
*Тотош ҙур бер ғүмер сағыла.*
*Ә күҙҙәре йәп-йәш. Унда тормош*
*Бөгөн көслө балҡый тағы ла.*

Ҙур булмаған ошо өҙөктө уҡығандан  уң күҙ алдына ил инә е Зәйнәб Биишеваның яҡты образы килеп баҫа.  Ә бит ижадсының ҡайнар йөрәгенән урғылып сыҡҡан был үлем еҙ юлдар поэма героиня ына арнала: тормош ауырлыҡтарын кисереп, ил-йортто афәттән  аҡлаусы башҡорт ҡатындарының бере е Гөлъямал хаҡында. Ләкин ғәжәп итә е лә түгел, ысынбарлыҡта  әр геройға Зәйнәб Биишеваның үҙ рухи ҡеүә е, үҙ йөрәгенең ялҡыны  алынған. Ҡәләм оҫта ы ғүмеренең аҙағына тиклем халҡы тура ында ҡайғыртыуҙан туҡтаманы.

Зәйнәб Биишева, шәхес булараҡ, үҙе лә ғүмер буйы кешелекле, кеселекле булып ҡалды. Күптәр уның ярҙамын, күңел йылы ын тойоп йәшәне. Ул бала күңелен үҫтерә белде, уға үҙ көсөнә ышанырға ярҙам итте. Бөйөк әҫәрҙәренең нигеҙендә тыуған еренә булған  өйөү  әм бала саҡ хәтирәләре ята.  әммәбеҙҙе лә  оҡландырған рухи ҡеүәт шунан башлана.  Яҡташтары янына ҡайтҡанда ла әҙибә тик бер теләк менән яна. Тыуған ергә, тарихҡа  өйөү  үнмәҫкә тейеш, шул саҡта ғына халыҡтың киләсәге бар. Йәштәрҙең йөрәгендә ошо осҡондо  дөрләтер өсөн үҙе лә күпме тырышлыҡ  алды. Сапыҡ ауылында булғандан  уң ул халҡы йөрәгендә дәрт уятыу маҡсатында үткәндәрҙе иҫкә алыуы ла, бөгөнгө ө менән сағыштырыуы ла осраҡлы түгел. “Был ауылда шундай ҙур мәҙрәсә булды, ситтән килеп студенттар уҡып ятты.  еҙҙән Ибра им Ҡыпсаҡ тигән яҙыусы сыҡты. Ул Муса Мортазиндың отрядында комиссар булып йөрөгәйне. Ике китап сығарҙы, тик 37-се йылда утыҙ өс йәшендә генә үлтерелде. Шул егеттәр үҙҙәре спектаклдәр ҡуялар ине. Нәҫелегеҙ менән ҡыҙыҡ ынығыҙ, йоҡламағыҙ”. Бына шулай  өйләште үҙ халҡы менән.

Зәйнәб Биишева үҙе бәләкәй саҡта ауыл халҡының тауға менеүҙәрен, ҡарға бутҡа ына сығыуҙарын йылылыҡ менән иҫкә ала. “Халыҡ шул хәтлем күңелле йәшәне. Бер әшәке  үҙ әйтеүсе булманы.  әләк юғары культуралы халыҡ ине. Уйын-тамаша ҡоралар. Беҙгә ҡумыҙ тотторалар ине, беҙ, ҡыҙ балалар, бәләкәй генә көйө ҡумыҙ уйнай торғайныҡ...”

Тура  үҙле, донъяға асыҡ ҡараш менән баҡҡан ҡыҙ бала “Яҡтыға” трилогия ында Емеш булып күҙаллана. “Борон беҙҙең башҡорт халҡында  әйбәт ғәҙәт булған: үҙен хөрмәт иткән, кешемен тигән  әр бер кеше үҙ тоҡомон ете быуынға тиклем белергә бурыслы. Йәғни ата-бабаларының кем, ниндәй кеше булыуын, уларҙың исемдәрен, кәсептәрен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, донъяға, тормошҡа ҡараштарын белергә; батырлыҡ, тоғролоҡ, намыҫлылыҡ  әм тура  үҙлелек менән тоҡомға, халыҡҡа эшләгән бөтә яҡшылыҡтарын түкмәй-сәсмәй бөтә быуынға еткерергә;  әр йәш быуын, үҙ тоҡомоноң бөтә яҡшы яҡтарын йыйып, шуға торош итерлек булып үҫергә тейеш булған”. “Яҡтыға” трилогия ының төп маҡсаттарының бере е шуға ҡайтып ҡала. Ил инәләре, ир-уҙамандар ауыҙынан әйттерә автор тарихи хәҡиҡәтте. Ҡай ылары уҡыусы күңеленә әкиәт, ҡисса рәүешендә лә  ендерелә. Халҡына  әм уның данлы-шанлы үткәненә  өйөү рухы, ғорурлыҡ тәрбиәләү серен әсәнән дә ныҒыраҡ аңлаған, быны ниндәй формала, ниндәй алым-саралар аша бирергә кәрәклеген унан да нескәрәк тойоусы берәй зат бармы икән?

Башҡорт халҡының тормошонда Ырымбур ҙур урын биләгән. Әҙибә быны ке-

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 128



шеләр яҙмышы аша ғына түгел, тарихты үҙенсәлекле тасуирлау аша ла өлгәшә. Емешкә, йәнә е лә, был ваҡиғаларҙы Ҡарасәс инәй еткерә. “... Шулай итеп, бола баҫылғас, ҡала төҙөлә. Беҙҙең ата-бабалар ҙа, ошо ҡалаға Уралдан бер ҡомартҡы ҡал ын тип, был урында Каруан арай төҙөгәндәр. Уның тирә-яғына Уралда үҫкән әр төр ағастан бер төп алып барып, бик ҙур ағас үҫтергәндәр. Хатта, баҡсаның эсенә Уралдан тупраҡ ташып, Урал еренең төҫөн биреп, тауҙар, йылғалар эшләгән улар. Тап Урал ыртына оҡшатып я алған ҡалҡыулыҡтан, хас ысындағы шикелле, Иҙел, аҡмар, Яйыҡ йылғалары ағып сығып ятыр булған. Ер аҫтынан тимер торба уҙғарып я ағандар, ти, улар йылғаларҙы...” Оло талант эйә е Зәйнәб Биишеваның башҡорттоң үткәнен үрәтләүҙе ҡарт инәйгә “тапшырыуы” осраҡлы түгел. Эйе, оло быуын кеше е ауыҙынан шул заман идеология ы тыйған бик күп нәмәне әйттерә яҙыусы. Үҙ халҡының патриоты, ил өйәре булған Зәйнәб Биишеваның күңел зирәклеге сағыла бында. Милләттәрҙе бөтөрөп, “бер совет берлеге” я ау идеология ы алып барылғанда тарихи дөрөҫлөктө ошо рәүешле үрәтләү хатта ир-егеттәрҙең дә ҡулынан килмәгәндер...

Тағы ла Зәйнәб Биишева яҙған юлдарға иғтибар итәйек. Был хатын ул 1977 йылда яҙыусы Әхиәр Хәкимовҡа яҙа: “Тыйнаҡ ыҙлыҡ булып яңғыра а яңғырар, дөрөҫөн әйткәндә, мин үҙ хеҙмәтемдең ба а ын яҡшы беләм. Бер саҡ, башҡорт яҙыусыларын әҙәмсә яҙырға ла, башҡорт әҙәби телендә өйләшергә лә иң тәүләп өйрәтеүсе Биишева әҫәре булды, тип әйтерҙәр әле. Ул шулай ҙа, ләкин мин бының менән кәперенергә йыйынмайым. Сөнки беләм, быңдай ҡылыҡ миңә лә, минең халҡыма ла хас түгел. Мин әҙәбиәттең эш аты, ә эш аты, үҙегеҙ беләгеҙ, баш баҫып эшләүен генә белә әм, тауҙай хеҙмәтендә туҙандай гона ы бул а, туҡмала. Шуға ул маҡтау ҙа, яҡлау ҙа, аҡлау ҙа өмөт итмәй эшләй бирә әм шул яҙмышынан ҡәнәғәт, выжданы саф, күңеле тыныс, үҙ бурысын намыҫ менән үтәгән. Ә ундайҙар “үлгәс яҡшы була” торған хәл дә уға яҡшы таныш”.

Ысынбарлыҡта тормош өсөн ыҙланыуҙар эстә йәшерелгән. Зәйнәб апай бар йыуанысын хеҙмәттә таба. Тоғро дуҫтары — аҡ ҡағыҙ әм ҡәләм. Уҡыусыларына тик күңеленең яҡтылығы, күңел хазиналары ғына барып етә. Трилогияның исеме лә шуны сағылдыра түгелме? “Яҡтыға” трилогия ын әҙибә: “Ул кеше рухының, уның эске донъя ының эволюция ы, яңы йәш быуындың тыуыу, күтәрелеү, формалашыу тарихы”, — тип билдәләгәйне.

Эйе, тап ошо трилогияла йәшлеккә дан йырлана, әм йәштәрҙең донъя ы, ауаҙы, рухи ынтылышы иҫ киткес бай кисерештәр аша тасуирлана. Был йә әттән “Яҡтыға” трилогия ын башҡа әҫәрҙәр менән сағыштырыу ҙа урын ыҙ булыр ине. Емеш, Байрас, Шәүрә, Сабир — әр бере е үҙ заманының тиң еҙ биҙәге булып күҙаллана. Ана шулар аша Зәйнәб Биишева халҡының киләсәгенә булған үнмәҫ ышанысын сағылдырҙы. Йәшлек ҡабатланмаҫ моңға эйә. “Яҡтыға” трилогия ының төп үҙенсәлектәренең бере е лә шунда. әр быуын унда үҙ моңон, йөрәк ауаҙын табасаҡ.

Әлбиттә, ижад ә елдәренә уның менән йыш аралашырға, кәңәш ҡорорға, тел, әҙәбиәткә ҡағылышлы күп мәсьәләләрҙе бергәләп хәл итергә тура килгәндер. Халыҡ яҙыусы ының шәкерттәре лә байтаҡ ине. Быға ғәжәп итергә ярамай. Сөнки Зәйнәб Биишева әр саҡ халыҡ яҙмышын, ил-йорттоң киләсәген ҡайғыртып, янып йәшәне. Әҙәбиәттәге яңы исемдәргә ул бер ҡасан да битараф булманы.

“Яҡтыға” романын уҡыған саҡта күҙ алдыбыҙҙа иҫ киткес тәбиғәт күренештәре килеп баҫа. Тыуған ерҙе яратыу тигәндә, ул тойғо беҙгә иң элек әҙәби китаптар аша үтеп инмәнеме икән? “... Ә бер аҙҙан уларҙың алдында Емеш бер ҡасан да күрмәгән, иҫ киткес ғәжәп бер күренеш асылды. Әле генә күҙгә төрт әң дә күренге еҙ ҡараңғы әм хәтәр ымаҡ булып киткән дала ҡапыл мең төрлө нур сәсеп йымылдай, балҡый башланы. Әйтер ең, күктең бөтә йондоҙҙары ергә яуып, далаға ибелде. Әйтер ең, сабан көрән бейә, төн етеү менән тылсымлы арғымаҡҡа әйләнеп, Емеште күк донъя ына осороп алып менеп китте.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 129



Тора-бара йондоҙҙар ябырылған был серле дала тағы ла киңәйҙе, яҡынайҙы, йондоҙҙары ҙурыраҡ, яҡтыраҡ була барҙы. Емеш менән Иштуған да, төндә “арғымаҡҡа әйләнгән” сабан көрән бейә лә ҡалдыр арба ы менән бергә аман алға, ҡотолғо оҙ рәүештә йондоҙҙар диңгеҙе эсенә йотола барҙы...”

Емештең яҙмышында хәл иткес роль уйнаясаҡ ҡала әм уға илткән юлды тағы ла нисек итеп үрәтләргә мөмкин уң? Күҙ алдына хайран ҡалдырырлыҡ әкиәти донъя килеп баҫа. Ырымбурға юлланыусы ҡыҙҙың кисереш-күргәндәрен тасуирлаған Зәйнәб Биишева, ысынлап та, үҙе тылсым эйә е. Ә бит ошо йондоҙҙар иң элек ижадсы күңелендә ҡабынды, әм ул үҙе әҙәбиәтебеҙҙең иң сағыу йондоҙҙарының бере е булып балҡыны.

Тәбиғәт ҡыҙға иң ҙур бүләкте биргән – Емеш тыумыштан уҡ ҡыҙыҡ ыныусанлыҡ сифаты менән айырылып торған. “Сыуаҡай инәйҙең уйнатыпмы, ысынлапмы өйләүенә ҡарағанда, тыуғас та, яҡты донъяны күрергә ашҡынып, аҡлыҡ менән генә башты борғолап, тирә-йүнде ҡарай башлағанмын...” Ҡыҙ баланың маҡсат ҡуя белеүе, уға ынтылыуы тормошто сик еҙ яратыуы менән бәйле. Тормош – алға барыу тигән үҙ, тимәк, уны ҡабул итергә, уны нығыраҡ, тәрәнерәк аңларға тырышырға кәрәк. Ошо ынтылыштың бер сағылышы – китапҡа булған өйөү. “Дәрестән ҡалған бөтә ваҡыттарымды китап уҡып уҙғарам. Китап – ул минең өсөн төшкә лә инмәгән өр-яңы донъя! Иҫ киткес гүзәл, тылсымлы донъя!..

Ғ. Туҡай, Ш. Бабич шиғырҙарын ҡат-ҡат уҡып, ятлап бөттөм шикелле инде. Улар минең күңелемә ниңәлер айырата яҡын”.

Зәйнәб Биишеваның иманлы кеше булыуын әйтмәйенсә мөмкин түгел. “Мин Аллаға ышана инем. Дингә мине берәү ҙә уҡытманы. Ләкин ниндәйҙер бер көс әр ваҡыт яҡланы, яҡшыға өйрәтте. Утта ла яндым, ыуҙа ла баттым – нимә генә күрмәнем мин...” Алла ы Тәғәлә яҡлауын, аҡлауын тойған ижадсы үҙ бурысын тулы ынса үтәп китергә тырышты. Бөтә ен дә туған халҡына фиҙа итте. Халҡы был күңел хазина ын ҡабул ҡылды. Әҙибәнең үҙ үҙҙәре менән әйткәндә, Алла ҡабул ит ен.

## Ҡояшҡа йылмайыусы

“– Күрә еңме, Байрас! – ти ул тағы ла яр ыбыраҡ. Үҙе, ҡуйы керпектәрен ҡыҫып, ҡояшҡа йылмайып ҡарай. – Күрә еңме?!

– Нимәне? – ти ахыр Байрас та, моң оу ғына йылмайып. – Әйт, күрермен.

– Ҡояшты... Даланы... Шыңғырҙап ятҡан ик еҙ-сик еҙ юлды...– тип ҡыуанып теҙә Емеш. – Донъяның матурлығын!”

Беҙ был яр ыу кисерештәр аша яҙыусының ысын күңел донъя ына бағабыҙ. Уның менән ҡуша бөтә барлыҡты танырға өйрәнәбеҙ. Беҙҙе әр саҡ көткән, беҙ тыуып, тәүге ауаз биреү менән үҙенә ҡабул иткән, үҙ матурлығы менән солғаған донъя менән. Беҙ киткәс тә беҙҙе хәтерләйәсәк, әр яңы быуынды ҡыуанып ҡаршы аласаҡ донъяның матурлығын, бөйөклөгөн аңларға ярҙам итә әҙибә. Тик беҙҙең донъяға мөхәббәтебеҙ уның беҙгә булған мөхәббәте менән тиңләшерлекме? а-уа, ыу, урман-тауҙар – саф өйөү сағылышы. Беҙҙе үҙ ҡосағына алған тәбиғәтебеҙ телгә килеп өйләшкәндәй. Тәбиғәт менән өйләштереүсе көс бар әҙибәлә.

“Йылға бит ҡайҙандыр бер ерҙән тағы ла өҫкә ҡалҡып сығасаҡ! Тағы-тағы үҙен саҡырып торған оло диңгеҙгә барып ҡушылырға, уның ис юғы бер кескәй генә көмөш тамсы ы булып йәшәп ҡалырға, шуның менән йәшәүҙең матурлығын, мәңгелеген тағы ла бер раҫлап ҡыуанырға тип ҡаялар ярып донъяға тыуған бит ул тау йылға ы!

Халыҡ өсөн йәшәп, халыҡ өсөн көрәшеп үлгән батырҙарҙың ғүмере лә, тап шул тау йылға ы кеүек, тормоштоң үҙе, халыҡтың рухы кеүек үлем еҙ бит ул...” Героиня ының уй-фекере итеп яҙыл а ла, ысынбарлыҡта Зәйнәб Биишева тигән талант эйә енең күңеленән урғылып сыҡан мөҡәддәс үҙҙәр. Йылдар аша ҡарап бөйөк ижад тура ында әҙибәнең ҡаҙаныштарына яңы ба а бирелер. Мин трилогиянан шиғри хистәр балҡышына солғанған юлдарҙы осраҡлы ғына айламаным.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 130



Әҙибәне, тура үҙле, хатта ниндәйҙер кимәлдә уҫал да, тип телгә алыусылар бар. Халыҡ, ил, тел, иман — былар ҙа Зәйнәб Абдулла ҡыҙының йәшәү асылы. Хатта былар — үҙ ғүмеренән ҡиммәт ба алаған төшөнсәләр. Тәүәккәллеге лә, уҫаллығы ла, йомартлығы ла, йылмайыуы ла, күҙ йәштәре лә халыҡ өсөн сарыф ителде. Бүтән халыҡ вәкилдәре, китаптарын тәржемәлә уҡығандан уң, яҙыусыға оҡланыу хаттары яҙҙы: “ еҙҙең геройҙарығыҙ ниндәй ауырлыҡтар алдында ла баш эймәй. Мин был халыҡҡа ғашиҡ булдым”. Үҙ халҡына ғашиҡ иттереүсе тылсым эйә енең саф шишмәләй күңеле геройҙарында сағылыш алды. Сабый бер ҡатлылығын, сабый сафлығын беҙ Емештә күрәбеҙ: “Уның ҡарауы, минең хәҙер түбәмдә күҙ сағылдырғыс тылсымлы яҡтылыҡ, әйләнәмдә күҙ түгел, уй байҡап бөтмәҫ киң, иркен, оло донъя балҡып ята. Күпме теләй ең, шул хәтлем ҡара. оҡлан, өйрән, бел. Рухыңды уның ба алап бөткө өҙ ҡиммәтле йәү әрҙәре менән биҙә, терелткес нурың менән йәнеңдең яра ын дауала, байыт!”

“Яҡтыға“ трилогия ы күп телдәргә тәржемә ителде, башҡорт халҡының донъя кимәлендә тотҡан урынын, төрлө дәүерҙә алып барған азатлыҡ көрәшен, уның меңәр йыллыҡ рухи тамырҙарын, идеалдарын совет осоронда ошонан да камилыраҡ итеп донъя халыҡтарына еткереү мөмкин инеме? Зәйнәб Биишеваның эшмәкәрлеге — бөгөнгө ҡәләм оҫталары өсөн генә түгел, килер быуындар өсөн дә оҡланғыс бер үрнәк. Бөйөк әсәнең, бөйөк яҙыусының халҡына булған сик еҙ мөхәббәтенең сағылышы ла. “Мин рухымдың аҫыл хазина ын, илем, иңә биреп ҡалдырҙым”. Буштан ғына тыумаған, юҡтан ғына әйтелмәгән бит был юлдар.

Уҙған йыл Башҡортостандың халыҡ яҙыусы ы, оло талант эйә е, бөйөк шәхес, ил инә е Зәйнәб Биишеваның 100 йыллығын билдәләнек. Бер быуат арауығы. Кеше ғүмере өсөн аҙ түгел, ләкин талант эйә е өсөн ваҡыт төшөнсә е юҡ. Тере үҙ мәңгелек менән үлсәнә. Зәйнәб Биишеваның ҡәләменән аҡ ҡағыҙға төшкән ил - амлы яҡты юлдарҙы беҙ мәңгелек бизмәне менән генә ба алай алабыҙ. Мәш үр ижад эйә енең китаптарын ҡулға алған әр быуынға Гөлъямал да, Зөлхизә лә, Көн ылыу ҙа, Емеш тә, Байрас та, Хаммат та, Иштуған да, Сыуаҡай, Ҡарасәс әм Таибә инәйҙәр ҙә, бәләкәс Салауат менән Азамат та, йөҙәрләгән геройҙар, персонаждар мәңгелек аша бағасаҡ. Башҡортостандың халыҡ яҙыусы ы Зәйнәб Биишеваның күңел яҡтылығы, рух нуры аша балҡыған тормошо, эшмәкәрлеге, фиҙакәр хеҙмәте халыҡ мөхәббәте менән генә ба алана.

## Ил инә е

Иманлы булыу был быуынға тыумыштан уҡ бирелгән. Халыҡты меңәр йылдар дауамында йәшәткән дин, ғөрөф-ғәҙәт, йолалар улар иҫ белгәндә, формалашҡанда әле пыран-заран килтерелмәгәйне. Телде, ауыҙ-тел ижады ҡомартҡыларын шулай уҡ саф әм бөтөн көйөнсә ҡабул итергә өлгөрҙөләр. Ғүмеренең уңғы йылдарында Зәйнәб Биишева был турала үҙ фекерен асыҡ әйтте: “Бигерәк тә дин юҡ тигәс, иблискә әйләнеп китеүселәр күбәйҙе. Улар әүәле дингә ышанған ваҡытта Алланан ҡурҡҡандар. Дин ине әхлаҡҡа, әҙәпкә, ғәҙеллеккә, ярҙамсыл булырға өйрәтә. Мин бала саҡтан Аллаға иҫ киткес ышана инем. Дин халыҡҡа иблис булмаҫҡа өйрәтә. Динде алып ташлағас, уғыш та, үлтереш тә китте. Халыҡ эсергә өйрәнде. Алла халыҡ өсөн яҡшылыҡ ине”.

“Мин Аллаға ышана инем. Дингә мине берәү ҙә уҡытманы. Утта ла яндым, ыуҙа ла баттым — нимә генә күрмәнем мин. Ниндәйҙер көс бар. Ул аҡлай, яҡшылыҡҡа өйрәтә... ”

Башҡортостан радио ы фондында Зәйнәб Биишеваның сығыштары, интервьюлары аҡлана. Был әңгәмәләр радионың алтын фондын тәшкил итә. Халыҡ, тел, әҙәп, әхлаҡ мәсьәләләренә бәйле ҡанатлы фекерҙәрен күңелгә ендерергә, яҙып элеп ҡуйырға ла була, сөнки улар — иҫкермәйәсәк ҡиммәттәр. Был яҙмалар яҙыусының, аҡыл эйә енең күңел донъя ына тәрәнерәк үтеп инеү мөмкинлеге бирә. Тормош әҙибәне философ кимәленә күтәрә, дин ҡушҡанса сабыр булырға ла өйрәтә. Бер сығышында ҡатын-ҡыҙҙарҙың хоҡуғын киңәйтеү менән бер үк ва-

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 131



ҡытта уны ҡыҫыу ҙа барлығын әйтә.

Беҙ алдараҡ “Яҡтыға”ның нәшер ителгәнгә тиклем оҙайлы, ҡатмарлы юл үтеүен яҙғайныҡ инде. Трилогия, әлбиттә, яҙыусының шундай яҙмышҡа дусар ителгән берҙән-бер әҫәре түгел. Бына нимә ти ҡәләм оҫтаы: “Тылсымлы ҡурай”ҙы тыйып ҡуйҙылар, шул саҡта миндә үҙенән-үҙе бер шиғыр тыуҙы. “Илап тыу ам да мин, йырлап йәшәйем...” Хәйер, артабанғы юлдарын дауам итеүҙең кәрәге юҡ, был шиғыр уҡыусыларға яҡшы таныш. Ул йыр булып та йәшәүен дауам итә. Ғәҙел еҙлектәргә, тетрәнеүҙәргә яуап – бары ы ла ижадта. “Кәм етелгән кешенән бер нәмә лә алып булмай, мине берәү ҙә кәм етә алманы,”– ти ул. Икенсе бер урында: “Ауырлыҡ ыҙ тормошҡа сығып булмай”, – тип ҡуя. Беҙ бының менән оло талант эйә енең яҙмышын фажиғәле итеп күр әтергә теләмәйбеҙ. Барлыҡ тормош ҡатмарлыҡтарын үткән, йәне менән дә, тәне менән дә сауҙа итмәгән, кешелек дәрәжә ен аҡлаған, рухи, әхлаҡи бейеклектә ҡалған бөйөк әҫәрҙәр ижад иткән яҙыусы – халҡының ҡалҡаны. Унын әйткәндәре кемгәлер оҡшармы-юҡмы, тигәндән түгел, ә йөрәгенән сыҡҡанды, хәҡиҡәтте әйтә ул. “Элек хәйерсе булған, ти ҙә яҙалар халыҡ тура ында. “Хәйерсе” тип хәйер орашҡан кешегә генә әйтәләр. Нисек шул хәтлем яуап ыҙ булырға мөмкин? Ул бер ҡасан да хәйерсе булманы. Иң ҡаты йотлоҡ булған 21-се йылда ла башҡорт өндәшмәй барып үлде. Ул бахыр булманы. Эшлә ә эште белә, йырла а йырлай белә, уғышҡа бул а – гел алғы сафта”.

үҙ юҡ, заманында “совет берлеге”н нығытыу халыҡтарҙың тарихын үҙгәртеп, үткән юлын кәм етеп күр әтеү аша алып барылды. Был осраҡта урындағы “ағартыусылар” ҙа тырышлыҡ алды. Уларға ҡаршы тороу, дөрөҫлөк өсөн көрәшеү яҙыусының яҙмышына кире йоғонто я амай ҡалмаған. Ләкин ул әр саҡ халҡы менән ине. Халыҡ – тарих та, бөгөнгө лә, киләсәк тә. Яҙыусының ижад, халыҡ яҙмышы тура ындағы фекерҙәре ә әмиәтле. Ул халҡына ҡурсалаусы итеп түгел, хатта ки сабый итеп тә ҡараны, сөнки халыҡ бит – бөтә е лә.

“Башҡортостандың халыҡ яҙыусы ы” тигән исем бирелгән матур кисәлә Зәйнәб Биишева ҡыҫҡа ғына үҙ әйтте. “Ҡәҙерле иптәштәр, туғандар, яҡташтар, замандаштар! Бөгөн еҙгә ҡарап ултырам да, бөтә тормош юлымды күҙ алдынан үткәреп, еҙгә йөрәгемдә ҡайнаған мең рәхмәтемдән башҡа үҙ таба алмайым. Шул хәтлем оҙаҡ итеп ҡыуанышып ҡарап ултыра ығыҙ. Яҙыусы өсөн, ғөмүмән, кеше өсөн шунан да ҙур бәхет бармы икән!..”

Оло ижадсының эшмәкәрлеге тура ында яҙғанда, үҙ заманым әм замандаштарым фекерен сағылдырам, тип әйтә алмайым, мәгәр үҙ быуынымдың, ҡорҙаштарымдың күпселеге менән ҡараштарыбыҙ уртаҡлығына шигем юҡ.

Мәш үр яҙыусы, ил инә е “үтеп китмәне“, ә алға табан атлап китте. Унын әҫәрҙәрен килер быуындар үҙ ҡулдарына аласаҡ әм бөйөк ижадсының үҙҙәре уларҙың да йөрәге аша үтәсәк. Ҡәләм оҫта ы үҙе әйткәнсә, “телгә хөрмәт, тарихҡа ғорурлыҡ” уятасаҡ. Унын тормош юлы, эшмәкәрлеге, бай ижады күптәр өсөн үрнәк буласаҡ. “Яҡтыға!” – был үҙ, унын ижады кеүек үк, киң мәғәнәне эсенә ала. Башҡортостандың халыҡ яҙыусы ы, ил инә е Зәйнәб Биишеваның йөрәге нурынан тыуған әҫәрҙәр ана шундай көскә эйә. Үткәнде яҙа ыңмы, әллә бөгөнгө тура ындамы – бөтә е лә күңелдәге ила и бер осҡондан тоҡана, ялҡынға, усаҡҡа әйләнә. Кем өсөндөр – ул йондоҙ, кем өсөндөр ҡояшҡа бәрәбәр. Хәйер, быларҙың бере ен дә башҡорт халҡының рухи донъя ынан, тормоштан башҡа күҙ алдына килтереп булмай. Зәйнәб Биишеваның бейеклеге лә, бөйөклөгө лә халҡы менән.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 132



# МӘҒРИФӘТ САТҠЫЛАРЫ

*(Атаҡлы ғалим әм әҙип Ризаитдин Фәхретдиновтың тыуыуына 150 йыл тулыу уңайынан)*

XIX быуат аҙағы – XX быуат башы башҡорт милли үҙ сәнғәте тарихына ҙур күтәрелеш, алға китеш осоро булып ингән. Быға тиклем күп быуаттар буйына ҡатнаш-синкретик формала йәшәп килгән яҙма әҙәбиәт был осорҙа дифференциация кисерә әм айырым, үҙ аллы төрҙәр булараҡ художестволы проза менән драматургия майҙанға сыға, яңы жанр әм жанр формалары ярала әм үҫешә башлай. Идея-тематика өлкә ендә лә иҙелерлек үҙгәрештәр була: реалистик үрәтләү көсәйә, йәмғиәт әм халыҡ тормошондағы көнүҙәк проблемаларға иғтибар арта, кешенең шәхсиәте, хәстәрҙәре әм ынтылыштары алғы планға сығарыла, әҫәрҙәрҙең милли ерлеге нығый әм баҙыҡлана төшә. Быларҙан тыш, әҫәрҙәрҙә урта быуаттар әҙәбиәтенән ҡалған традицион ҡалып әм ҡанундарҙың емерелә барыуы, дөйөмлөктән индивидуаллеккә ынтылыш көсәйеүе, стилдең төрләнеүе, әр авторҙың үҙенә хас ижад манера ы хасил була башлауы асыҡ күҙәтелә.

Әҙәбиәттең яңырыуы, яңы улыш алып үҫеп китеүе, әлбиттә, бик күп яҙыусыларҙың эшмәкәрлегенә бәйле. Ике быуат киҫешкән дәүерҙә йәшәгән әм ижад иткән әр ҡәләм эйә е был процестарға үҙенсә йоғонто я аған, үҙенсә өлөш индергән. Күренекле ғалим, йәмәғәт әм дин эшмәкәре, журналист әм әҙип Риза Фәхретдиновтың (1859 – 1936) да ҙур өлөшө бар унда. Үҙенең әҫәрҙәре менән ул әҙәбиәттә, бигерәк тә әҙәп әм әхлаҡ, белем әм тәрбиә мәсьәләләренең актуалләшеүенә, мәғрифәтсел ҡараштарҙың таралыуына әм нығыныуына булышлыҡ итте. Милли прозабыҙҙың ысын мәғәнә ендә әҙәби төр булараҡ формалашыуын әм повесть жанрының барлыҡҡа килеүе күренештәрен дә унын ижадынан тыш күҙ алдына килтереүе ҡыйын.

1899 йылда Ҡазанда Р.Фәхретдиновтың "Сәлимә, йәки Ғиффәт" ("Сәлимә, йәки Сафлыҡ") әм 1903 йылда "Әсмә, йәки Ғәмәл вә яза" исемле ҙур күләмле сәсмә әҫәрҙәре нәшер ителгән. Әҙиптең шундай уҡ киң полотнолы "Таң йондоҙо" тигән әҫәр яҙғанлығы ла мәғлүм. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, батша цензура ы, ике тапҡыр ҡарап, уны баҫып сығарырға рөхсәт итмәгән. Ҡулъяҙма хәлендә ҡалып, әҫәр юғалған әм әлегә тиклем табылғаны юҡ. Шуны ы бер аҙ йыуаныс бирә: беҙҙең көндәргәсә аҡланып ҡалған ҡулъяҙмалары ара ында бер нисә ярым әҙәби, ярым публицистик әҫәре бар.

Баштан уҡ шуны әйтергә кәрәк: "Сәлимә" әм "Әсмә" (исемдәрен ҡыҫҡартып алғанбыҙ) әҫәрҙәрен автор үҙ исеме менән түгел, ә Ғафил бине Ғабдулла тигән псевдоним менән сығарған. ис тә юҡтан түгелдер, моғайын. Ни ти ән дә, ике әҫәрҙә лә заманы өсөн бик актуаль әм ҡыйыу мәсьәләләр күтәрелә, йәмғиәт тәртиптәре, илдәге тәрбиә әм уҡыу-уҡытыу система ы ҡаты тәнҡит утына тотола.

"Сәлимә" повесы – әйткәнебеҙсә, Р.Фәхретдиновтың тәүге баҫма әҫәре. Ул инештән, төп өлөштән әм йомғаҡтан (автор әйтмешләй, "нәтижәнән") тора. Төп өлөшө төрлө күләмле 17 бүлеккә бүленгән, әр бере енең үҙ атама ы, үҙенә генә хас идея йөкмәтке е бар. Төп геройҙар әм төп сюжет ыҙығы тирә ендә ойошоп, улар тартмалы композицияны хасил иткәндәр. Был йә эттән "Сәлимә" повесы урта бы-

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 133



уаттар көнсығыш әҙәбиәтендә популяр булған "Бәхтиәрнамә", "Тутыйнамә" кеүек әҫәрҙәрҙе хәтерләтеп тора. Повестың инеше менән йомғағы ла үҙенсәлекле. Инештә автор, уҡыусыға мөрәжәғәт итеп, әҫәренең ҡыҫҡаса йөкмәтке е әм яҙылыу сәбәптәре менән таныштырып үтә. Йомғаҡта и ә төп геройҙарының өйләнешеү ваҡиға ын бәйән итә әм ғиффәтлек-сафлыҡ хаҡындағы уйланыуҙары менән әҫәрен тамамлап ҡуя. Әлбиттә, инеште "пролог" тип әйтергә яра а ла, йомғаҡты "эпилог" тип атау нигеҙле булмаҫ был осраҡта.

Әҫәр бик ябай ғына сюжетҡа ҡоролған: Өфө эргә ендәге Ҡуян ауылында тыуып үҫкән йәш егет, Ҡазан мәҙрәсәләренең бере ендә 10 йыл "ғүмер уҙҙырғандан уң", яңғыҙ башын алып (унының ата ы ла, әсә е лә вафат булғандар) донъя гиҙеп ҡайтырға ҡарар итә. Юл ыңғайында тыуған ауылына инеп, ата-әсә е ҡәберҙәрен "зыярат итергә" була. Ләкин пароходта уйламағанда-көтмәгәндә Сәлимә исемле Иран ҡыҙын күреп, ғашиҡ була әм унының үтенесе буйынса Баҡы ҡала ына тиклем оҙата бара. Ахырҙа ике ғашиҡ өйләнешеп тә ҡуя...

Хикәйәләү башлыса беренсе заттан — төп геройҙарҙың бере е булған йәш егет исеменән (унының исем-шәрифен автор күр әтмәй) алып барыла. Тормош күренештәренә, хәл-ваҡиғаларға прозаик ошо егет күҙе менән баға, ул булып хисләнә, уйлана, ба алар бирә. Шул уҡ ваҡытта урыны-урыны менән үҙе лә үҙгә ҡушылып китә, публицистик әм лирик сигенеүҙәр я ай. Бындай осраҡтарҙа Р.Фәхретдиновтың йыш ҡына әҙиплегенән бигерәк ғалимлығы өҫтөнлөк алып китә: ул уҡыусыға өгөт-нәсихәт уҡый, тарих, йәмғиәт тормошо, иҡтисад, мәғариф буйынса мәғлүмәттәр бирә башлай. Әҫәрҙә башҡорт, татар, ҡаҙаҡ, яҡут әм башҡа төрки халыҡтарҙың килеп сығышына, уларҙың тарихи уҙғанына, көнкүрешенә, ғөрөф-ғәҙәттәренә, социаль-иҡтисади хәленә ҡағылышлы байтаҡ ҡыҙыҡлы фактттар бирелгән әм былар бары ы ла тиерлек Европа әм Азия ҡитғаларындағы ҡай ы бер алға киткән халыҡтар тормошо менән сағыштырып тасуирлана.

Уҡыусыға мәғлүмәт, абаҡ биреүҙә Р.Фәхретдинов төп геройҙарҙың үҙ-ара әңгәмәләрен, монолог әм диалогтарҙы ла уңышлы файҙалана. Мәҫәлән, сәфәр барышындағы бер осрашыуҙарында Сәлимә туташ егеттән Рәсәйҙә йәшәгән төрки халыҡтар тура ында өйләүен үтенә. Әммә "Ҡазан мәҙрәсә ендә беренсе шәкерт булғаны хәлдә" лә бик аҙ нәмә белгәне арҡа ында егет бер ни ҙә әйтә алмай. Ахыры сиктә ҡыҙ был хаҡта бер "французса китаптан" табып, үҙе уҡып ишеттерә.

Шулай итеп, ябай әм бер ни тиклем примитив сюжетлы бул а ла, әҫәр ғәйәт бай йөкмәткеле. Уны, жанр тәбиғәте буйынса повесҡа ҡарай, тип бик хаҡлы яҙа Ғ.Ҡунафин[1]. Ысынлап та, сюжеты йә әтенән "Сәлимә" оҙон хикәйәне (автор "хикәйәт" тип атаған) хәтерләт ә лә, идея-тематика ы, проблематика ы әм композиция ы йә әтенән ул асылда повесть булып тора.

Әҫәр баштан-аяҡ мәғрифәтселек рухы менән уғарылған. Унда үткәрелгән төп идея — фәҡәт төплө белем, өнәрҙәр үҙләштергәндә әм тейешле тәрбиә алғанда ғына кеше бәхетле була ала, халыҡтың тормош кимәле юғары бул ын, киләсәге яҡты бул ын өсөн тәү сиратта йәштәрҙе уҡытыу, төрлө өнәрҙәргә өйрәтеү фарыз. Ошо идеяны асыу өсөн автор төп герой — йәш егет образын оҫта файҙалана.

Егет бөтөнләй үк наҙан әм булдыҡ ыҙ кеше түгел. Ауылда башланғыс белем алғандан уң, Ҡазандағы ҙур мәҙрәсәлә уҡыған. Ләкин ун йыл абаҡ алып, "белгән нәмәләре сик еҙ, күтәргән китаптары хисап ыҙ" күрен ә лә, тормошҡа әҙерлек еҙяраҡ ыҙ булып сыҡҡан ул. Быны Сәлимә менән беренсе осрашыуҙарынан уҡ тоя әм тамам ҡаушап ҡала. Сөнки ҡыҙҙан телдәр белеү буйынса ғына түгел, сәнғәт, фән, иҡтисад хаҡында фекер йөрөтөү буйынса ла күпкә ҡалыша. Сәлимәнең күңелен күтәреүҙә унының бар белгәне — Хужа Насретдин мәҙәктәре. Ошо кәмселектәренән аҙмы-күпме арыныу өсөн ул, Баҡы ҡала ына килеп еткәс, көндәр буйына китапхананан, уҡыу йортонан сыҡмай ята, театрҙарға йөрөй.

Сәлимә и ә — Мысырҙа университет тамамлап, күп телдәр өйрәнгән, донъя

---

[1] *Ҡара:Башҡорт әҙәбиәте тарихы, 6 томда. 2-се том. XIX-XX быуат башы әҙәбиәте. — Өфө. 1990. — 285-се бит.*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 134



халыҡтары тарихынан әм мәҙәниәтенән бай мәғлүмәт туплаған бик инсафлы, киң күңелле әм әҙәпле ҡыҙ. Ул фән әм әҙәбиәтте генә түгел, иҡтисад әм сауҙа эштәрен дә яҡшы белә, хатта ата ы вафат булғандан уң ҡалған "хисап ыҙ милектәр әм сауҙаханалар менән идара итеүҙе" лә үҙ өҫтөнә алған. Ғөмүмән, Сәлимә киләсәктә абруйлы ил әсә е булырҙай идеаль ҡыҙ булып күҙ алдына баҫа. Повеста авторҙың, туранан-тура әйтмә ә лә, башҡорт әм татар ҡыҙҙарын ошо "сафлыҡ әм күркәм холоҡ эйә е" булған героинянан үрнәк алып йәшәргә саҡырыуы асыҡ той-ола.

Йәштәребеҙ Сәлимә кеүек шәхестәр кимәленә күтәрел ен өсөн мәғариф система ына реформа үткәрергә, уҡытыу әм тәрбиә эштәрен мотлаҡ йәҙит ысулында ойошторорға кәрәк, ти Р.Фәхретдинов. Унын ошондай фекерҙәре лирик геройҙың, йәғни егеттең, Хәсән ағай менән әңгәмә ендә әм Сәлимәнең ҡымыҙ атыусы башҡорт ҡыҙы Фәхриә менән диалогында айырата асыҡ сағылған. Тырыш әм уңған ҡыҙ булыуына ҡарамаҫтан, Фәхриә бөтөнләй тиерлек наҙан. Дүрт ҡыш абаҡка йөрөп тә уҡырға ла, яҙырға ла өйрәнә алмаған, сөнки иҫке ысул менән уҡытҡандар уны. Зәйнәп исемле еңле е и ә, "яңы тәртип илә" уҡығанлыҡтан, хәрефте лә таный, апа ы белмәгән күп нәмәләрҙе лә белә.

Әҫәрҙә милләттең киләсәге булыр йәштәр өсөн сит телдәрҙе, бигерәк тә рус телен өйрәнеү, донъя халыҡтарының мәҙәни ҡаҙаныштарын үҙләштереү кәрәклегенә лә баҫым я ала. Ошо маҡсатта автор егеттең монологтарын, Сәлимә менән тәүге осрашыуҙарынан уң булған уйланыуҙарын урынлы файҙалана. Төп геройҙарға бәйле хәл-күренештәрҙе үрәтләп, Р.Фәхретдинов шулай уҡ ҡатын-ҡыҙ азатлығы, тиң хоҡуҡлылыҡ, ирекле мөхәббәт әм никах кеүек мәсьәләләрҙе күтәрә әм уларҙың кисектерге еҙ ыңғай хәл ителергә тейешлегенә ишаралай.

Хәйер, ошо уҡ мәсьәләләр яҙыусының "Әсмә" повесының да үҙәгенә ҡуйылған. Бында Р.Фәхретдинов, беренсе повесындағы төп фекерҙәрен дауам иттереп, үҙенең мәғрифәтселек ҡараштарын тағы ла киңерәк асып алған.

"Әсмә" әҫәре тәүге повеҫка үҙенең идея-тематика ы буйынса ғына түгел, композицион ҡоролошо буйынса ла яҡын тора. Ул да инеш бүлек менән асыла, әм унда автор үрәтләнәсәк хәл-ваҡиғаларҙың башҡорт сәхрәләрендә әм башҡорттар йәшәгән ауыл-ҡалаларҙа барғанлығын иҫкәртә, башҡорт халҡының күп быуатлыҡ үткәненә, теленә, ғөрөф-ғәҙәттәренә әм биләгән территория ына ҡағылышлы ҡыҫҡаса мәғлүмәттәр биреп үтә. Был мәғлүмәттәр унын туған халҡының тарихы менән тәрән ҡыҙыҡ ынғанлығын әм ярай ы уҡ яҡшы белгәнлеген таныта.

Повестың төп өлөшө, "Сәлимә" әҫәрендәге кеүек үк, айырым-айырым бүлектәргә бүленгән әм әр бүлек үҙе бер үҙ аллы әҫәрҙе хәтерләтеп тора. Әммә бында сюжет бер ыҙыҡлы ғына үҫмәй, әр бүлектең үҙ тема ы, сюжеты, геройҙары бар. Шул уҡ ваҡытта улар төп героиня Әсмәнең яҙмышына теге йәки был йә эттән мөнәсәбәтле булып, үҙ-ара мәғәнәүи бәйләнештә торалар. "Сәлим бабай" бүлеге генә айырымланыбыраҡ ҡалған. Ил аҡ аҡалы кимәлендәге бай әм колоритлы образ итеп бирелгән бул а ла, Әсмәнең ҡартата ының яҡын дуҫы булған Сәлим бабай ваҡиғалар үҫешендә бөтөнләй ҡатнашлыҡ итмәй. Ҡыҙыҡлы әм йәнле итеп таныштырыуын таныштыра ла, автор уны тамам "онота". Шунлыҡтан был бүлек әҫәр композиция ында артыҡ бер деталь ымағыраҡ булып ҡала.

Дөйөм алғанда, повестағы геройҙар әм персонаждар үҙҙәренең холоҡ-ҡылыҡтары буйынса ҡапма-ҡаршы ике төркөмгә бүленгән. Бер яҡта – намыҫлы әм саф күңелле Ғәббәс мулла, Ғәйшә абыстай, Әсмә, Йософ бабай әм унын әбейе, Ғәли хәлфә, Сәлих бай кеүек кешеләр, икенсе яҡта – яуыз әм аҫтыртын Хикмәт хажи, Муса мөрид, Хәмиҙә ҡарсыҡ, Зәйнүш абыстай ише әҙәмдәр. Әҫәрҙең сюжеты башлыса ошо ике төркөм ара ындағы ҡаршылыҡтар-бәрелештәр нигеҙендә үҫтерелә. Мәғлүм булыуынса, геройҙарҙы халыҡ әкиәттәрендәгесә тик ыңғай йәки тик кире итеп тасуирлау мәғрифәтселек проза ы өсөн характерлы күренеш булған. Уны Мәжит Ғафури, Закир аҙи, Афзал Та иров, Зыя Өммәти әм башҡа ҡай ы бер яҙыусылар ижадында ла осратырға мөмкин.

Төп героиня Әсмә образына килгәндә, ул күп йә эттән Сәлимәгә оҡшаған.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 135



Белемле, итәғәтле, уңған ҡыҙ. Уны ла автор йәштәргә өлгө кимәленә күтәреп  үрәтләй, әммә, Сәлимәнән айырмалы рәүештә, сама ыҙ идеаллаштырмай. Әсмәнең тормош баҫҡыстары ла ҡатлаулы  әм ҡатмарлы, ғүмер юлында әленән-әле кәртәләр, упҡындар осрап тора. Ләкин ата-әсә енән мираҫ итеп алған гүзәл холоҡ-ғәҙәт  әм белем уға бөтә ауырлыҡтарҙы ла еңеп сығырға  әм тормошта үҙенә лайыҡлы урын табып, бәхет-сәғәҙәткә ирешергә ярҙам итә.

Әлбиттә, уның яҙмышында бәхетле осраҡлыҡтар ҙа ҙур роль уйнай: үлемесле тиф ауырыуынан, фәхешхананан ҡотолоп ҡалыуҙары, аяғын  ындырып хәстәханала ятҡандан  уң, бер мәрхәмәтле ҡатындың уны үҙ бала ы итеп алып ҡайтыуы, аҙаҡ изгелекле Сәлих бай тәрбиәхана ына юлығып, абруйлы мөғәллимә булып танылыуы, шунда уҡ үҙенең күптән үлгән тип  аналған ата ын осратыуы, йәшлектә ғашиҡ булған йәрен ҡабат күреп ҡауышыуы  .б. Әйткәндәй, герой яҙмышын бәхетле осраҡ аша хәл итеү Р.Фәхретдиновтың замандаш-ҡәләмдәше булған З.  аҙиҙың "Бәхетле ҡыҙ"  әм "Йыанша хәҙрәт", А.Та ировтың " атылған ҡыҙҙар" әҫәрҙәрендә лә күҙәтелә. Башҡорт әҙәбиәтенең мәғрифәтселек осорон тәүгеләрҙән булып өйрәнгән Вафа Әхмәҙиев ошо хаҡта: "Был осраҡлыҡтың тамыры, бер яҡлап, халыҡ ижады традицияларына, әкиәттәргә барып тоташ а, икенсе яҡтан, ул мәғрифәтселек әҙәбиәтенең идея-эстетик үҙенсәлеге менән бәйләнгән дөйөм типологик күренеш"[2],— тип яҙҙы.

Осраҡлыҡтар повестағы ваҡиғаларҙың тәбиғи ағышын көтөлмәгәнсә бороп, үҙгәртеп ебәрәләр  әм шул арҡала әҫәрҙә урыны-урыны менән новелла жанрына хас  ыҙаттар айырым-асыҡ төҫ ала башлайҙар. Өҫтәүенә, Р.Фәхретдинов геройҙарының тормошон үтә мажаралы, хикмәтле итеп  үрәтләргә ынтыла, хатта ҡай ыларының исемдәрен алмаштырып, яҙмыштарын бутап бөтә. Ғалимдарҙың билдәләүенсә, былар бары ы ла халыҡ әкиәттәренең  әм урта быуат көнсығыш яҙма әҙәбиәтенең (атап әйткәндә, дастан, хикәйәт, хикмәттәрҙең) йоғонто онан килә.

Шуны ы ла диҡҡәтте тарта: әҫәрҙә геройҙар "ыңғай"ға  әм "кире"гә бүленеп бирел ә лә, улар ара ындағы ҡаршылыҡ, көрәш аҙағына тиклем еткерелеп хәл ителмәй. Хатта ул юҡ дәрәжә ендә. Әйтәйек, беренсе бүлектәрҙә Ғәббәс мулла менән Хикмәт хажи ара ында ҡаршылыҡтар тыуғандай була. Хикмәт Ғәббәскә аҫтыртын рәүештә яуызлыҡтар ҡыла, ялған яла яға. Ләкин, ошо мәкер  әм нахаҡҡа ҡаршы көрәшә е урынға, Ғәббәс мулла хаж сәфәренә сығып китә,  өҙөмтәлә тәбиғи төйөнләнгән конфликт сиселмәй ҡала. Бала сағында үҙенә күп михнәт күр әткән Хәмиҙә менән Зәйнүште осратып, Әсмә лә яуап ыҙ ҡала, хатта "хәлдәренә мәрхәмәт итеп, йәштәрен ағыҙып", уларҙы ҡыҙғанып ҡуя.

Бында Р.Фәхретдиновтың "яуызлыҡҡа көс менән ҡаршы тормау" принцибын яҡлағанлығы асыҡ сағылыш тапҡан. Ни сәс әң — шуны урыр ың, изгелек эшлә әң, ул  иңә изгелек булып кире ҡайта, ә яуызлыҡ ҡылыусылар ҡасан да бул а яза ын алмай ҡалмай, тигән идея уҙғарып, автор бары ын да яҙмыш хөкөмөнә тапшыра. Был йә әттән ул атаҡлы рус әҙибе Лев Толстой ҡараштарына яҡын тора.

"Сәлимә" әҫәренән айырмалы рәүештә, был повеста реалистик  үрәтләү ярай ы уҡ ҙур урын тота. Геройҙар  әм персонаждар хыял-кисерештәр, уй-теләктәр донъя ында ғына йәшәмәй, үҙҙәрен уратып алған ысынбарлыҡ, ижтимағи мөхит менән тығыҙ бәйләнештә хәрәкәт итә. Ғөмүмән, бында тормош сағыштырмаса киңерәк  әм анығыраҡ  ынланыш алған. Шулай ҙа "Әсмә" әҫәрендә лә автор герой-персонаждарҙың әхлаҡи йөҙөн, характерын тулыраҡ асыу маҡсатында йыш ҡына, объектив хикәйәләүҙе өҙөп, лирик  әм публицистик сигенеүҙәргә бирелеп китә, уҡыусыға нимәнелер аңлата, төшөндөрә,  ығымталар я ай, өгөт-нәсихәт бирә.

Хикәйәләү стилендәге бындай күренештәрҙең әҙәбиәткә беренсе сиратта тәрбиә сара ы итеп ҡарауҙан хасил булғанлығы шик тыуҙырмай. Объектив хикәйәләү менән автор  үҙҙәренең йыш аралашып килеүе  әм  уңғыларында уҡыусыға өгөт-нәсихәт өҫтөнлөк итеүе XX быуат башында ижад ителгән күпселек

---

[2] *Әхмәҙиев В. Башҡорт мәғрифәтселек реализмы проза ының стиль үҙенсәлектәре //Башҡорт әҙәбиәтендә метод  әм стиль мәсьәләләре. – Өфө, 1982. – 53-сө бит.*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 136



хикәйәгә әм повесҡа хас.

Хикәйәләү стиле хаҡында үҙ ҡуҙғатҡас, тағы шуны ла билдәләп үтке килә: диалогтарҙы биргәндә Р.Фәхретдинов йыш ҡына драма әҫәрҙәренә тәғәйен алымды ҡуллана. Йәғни әр телмәрҙе унын эйә енең исем-шәрифе әм ике нөктә менән аса. Ул ғына ла түгел, урыны-урыны менән пьесаларҙағыса ремаркалар ҙа ҡуллана. Сәлих бай менән Әсмәнең әҫәр аҙағындағы үҙ-ара әңгәмә е – шундайҙарҙан. Тәү ҡарамаҡҡа сәйер тойол а ла, художестволы проза менән драматургиянын, синкретиклыҡ дәүерен үткәреп, айырым-айырым әҙәби төрҙәр булып формалаша башлаған осоро өсөн тәбиғи күренеш ул.

Р.Фәхретдиновтың был ике повесы ла үҙ осоро әҙәбиәтенә, бигерәк тә прозаға, ҙур йоғонто я ап, байтаҡ башланғыстарға нигеҙ алды. Уларҙың йоғонто о идея-тематика өлкә ендә лә, йөкмәткелә лә, образдар система ында ла асыҡ күҙәтелә. Быны хаҡлы рәүештә үҙенең мәҡәлә ендә Вафа Әхмәҙиев та билдәләп үтә. Икенсе повесындағы "ғәмәл вә яза" концепция ы, мәҫәлән Р.Фәхретдиновтан А.Та ировҡа күсә, тип яҙа ул. А. Та ировтың " атылған ҡыҙҙар"ында ла, "Мазлумалар" повесында ла яуыздар үҙ яза ын үҙҙәре табалар. Мәғлүм булыуынса, етем ҡыҙҙарҙы, ҡалалағы туғандарығыҙға алып барабыҙ, тип алдатып алып китеүҙәр, ҡалаға барғас, аҙғын ҡарсыҡтар ярҙамында фәхешханаға оҙатыу кеүек дөйөм урындар уңыраҡ А. Та ировтың шул уҡ " атылған ҡыҙҙар", М. Ғафуриҙың "Аслыҡ йыл, йәки атлыҡ ҡыҙ" әҫәрҙәрендә осрай.

Яҙыусының тәүге повесындағы Сәлимә образы аҙаҡ Ғ.Рафиҡиҙың "Рауза" хикәйә ендәге төп героиняла ҙур оҡшашлыҡ тап а, икенсе повесындағы Ғәли хәлфә менән Бикбулат хәҙрәт образдары үҙ сираттарында бөтә холоҡ-ҡылыҡтары менән тиерлек З. аҙиҙың "Йы анша хәҙрәт" повесындағы Хәсән мулла менән Йы анша хәҙрәт образдарына күскән. Бындай күсәгилешлек хатта геройҙарҙың исемдәрендә лә сағыла. Мәҫәлән, "Әсмә" әҫәрендәге Ғәббәс менән Ғәйшә образдары есемдәре менән генә түгел, исемдәре менән дә З. аҙиҙың "Бәхетле ҡыҙ" хикәйә ендә урын алғандар. Улар ҙа, повестағы геройҙар кеүек үк, әҙәп-әхлаҡ йә әтенән юғары торған өлгәлә ир менән ҡатын рәүешендә үрәтләнәләр. Повестың төп героиня ы Әсмәнең Зәйнәп исемендә ҡыйыр ытылып-кәм етелеп йөрөгән хәлдәре теге йәки был кимәлдә А.Та ировтың "Мазлумалар", М. Ғафуриҙың "Үгәй балалар" менән "Зәйнәп сабыр иткәйне..." тигән әҫәрҙәрендә ҡабатлана. Өҫтәүенә, уларҙағы ҡыйыр ытылған ҡыҙҙар ҙа Зәйнәп исемле.

Күренеүенсә, "Әсмә" повесы Р.Фәхретдиновтан уң әҙәбиәт майҙанына сыҡҡан яҙыусыларға төрлөсә тәьҫир иткән. Берәүҙәре үҙ ижадында ундағы бер башланғысты үҫтер ә, икенселәре икенсе башланғысты дауам иткән.

Әйтергә кәрәк, прозаиктың "Сәлимә" повесы ла заманында тәрән ҡыҙыҡ ыныу уятып, Ҡазан, Ырымбур, Өфө тарафтарында ҙур яңғыраш алған. Күпселек уҡыусы, айырата йәштәр, уны шатланып-хушланып ҡабул ит ә, иҫкелек яҡлы хәлфәләр, мөҙәристәр әм дин ә елдәре нәфрәтләнеп кире ҡаҡҡан әм тәнҡитләгән. Хатта ки ваҡыты-ваҡыты менән яр ыулы бәхәстәр ҙә булып уҙған. Р.Фәхретдиновтың әлеге көндә Рәсәй Фәндәр академия ы Өфө фәнни үҙәге архивында аҡланған "Ҡазан шә әрендә зияфат мәжлесе" тигән бәләкәй генә яҙма ы шулар тәьҫирендә донъяға килгән булырға тейеш.

ис ниндәй аңлатма-иҫкәрмә еҙ ҡағыҙға теркәлгән был яҙмала Ҡазанда ойошторолған бер аш мәжлесе әм ундағы әңгәмә тасуир ителә. Ҡөрьән-Кәримдән бер аят уҡып, алдарына йәп ҡуйылған ризыҡтан ауыҙ итә башлағас та, үҙҙәрен ҡаланың иң абруйлы вә мөғтәбәр заттарынан анаған Нәзир бай, Сәйәр әфәнде әм Сөләймән, Яҡуп, Вәлит, Билал, Мостафа, Нух исемле хәҙрәттәр, бере ен-бере е уҙҙырып, яңы ғына баҫылып сыҡҡан "Сәлимә" китабын әм унын авторын үгергә тотоналар. Йәнә е, ул китап – ямандарҙың да яманы, ә авторы – күрәләтә ялғанлаусы бер ахмаҡ. Әҫәр баштан-аяҡ буш үҙҙәрҙән туҡылған. Уны яҙған "бәдбәхет" ислам ҡанундарын, сөнни мосолмандарҙың йолаларын, йә үҙенең наҙанлығынан белмәй, йә, белгән хәлдә лә, оят ыҙ рәүештә инҡар итә. Артабан бындай зарарлы китап нәшер ителергә тейеш түгел, кисектермәҫтән берәй сара ын күрергә кәрәк.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 137



"Хөрмәтле ғалимдар"ҙың ошондай "хәсрәтле-хәстәрле" әңгәмә е ҡулъяҙмала бик етди әм тыныс тонда бәйән ителә. Әйтер ең дә, үҙ Р.Фәхретдиновтың үҙ китабы әм үҙе тура ында бармай. Ләкин зирәк уҡыусыға авторҙың тел төбөн аңлауы ҡыйын түгел. Бында әр яңылыҡҡа ҡаршы төшөп, халыҡтың аңын томаларға, мәҙәни үсешен тотҡарларға ынтылған айырым байҙарға әм муллаларға әсе ирония ята. Үҙҙәренең үк телмәрҙәре аша яҙыусы уларҙың асылын күр әтә, социаль йөҙөн фаш итә.

Әҫәрҙең төҙөлөшө әм жанр тәбиғәте лә үҙенсәлекле. Ул бер шаршаулы бәләкәй пьеса рәүешендә яҙылған әм ниндәйҙер кимәлдә скетч әм интермедияларҙы хәтерләтеп тора. Башта автор картина бирә, йәғни әңгәмә барасаҡ урынды әм ҡайы бер шарттарҙы үрәтләй. Артабан геройҙарының әр бере енә үҙ биреп, урыныурыны менән ремаркалар ҙа ҡулланып ебәрә.

Р.Фәхретдиновтың архивтағы үрҙә аталған икенсе бер ҡулъяҙма ы и ә тотошлайы менән тиерлек монологҡа ҡоролған. "Ҡа арман ҡатын" тип исемләнгән был әҫәрҙә индостандың көнсығышындағы Серендиб (Сиядан) тигән утрауҙа яңғыҙ ҡатындар ойошторған йыйын хаҡында хәбәр ителә әм бер ҡатындың унда өйләгән "нотоғо" бирелә. Ул, ире вафат булғас, ике улын яңғыҙ тәрбиәләп үҫтереп, сит илдәрҙәге данлыҡлы университеттарға ебәреп уҡытыуы әм туған халҡы, ватаны өсөн йәнен фиҙа ҡылырҙай шәхестәр дәрәжә енә еткереүе тура ында өйләй. Улдары Шәүкәтғәли менән Мөхәмәтғәли индостандың бойондороҡ оҙлоғо хаҡына ут- ыуҙар үтергә, бөтә ауырлыҡтарға түҙергә әҙерҙәр, уларҙың был эшендә әсәләре төп терәк әм таяныс булып тора. Инглиз хөкүмәте күпме генә эҙәрлеклә ә лә, зиндандарға яп а ла, егеттәрҙең рухын ындыра алмай, сөнки улар айлаған юлдарының изге әм берҙән-бер дөрөҫ юл икәнлегенә ныҡлы ышаналар. Улдарына бәйле ошо хәл-ваҡиғалар менән таныштырып, ҡа арман йөрәкле ҡатын барлыҡ әсәләрҙе лә ғибрәт алырға әм, донъялыҡта үҙҙәренең ролен яҡшы аңлап, балаларына тейешле тәрбиә бирергә саҡыра.

Бүтән әҫәрҙәрендәге кеүек үк, Р.Фәхретдиновтың был ҡулъяҙма ында ла хәлваҡиғаларҙың мәле, ваҡыты конкрет даталар аша күр әтелә бара. Ундағы иң унғы дата – 1912 йыл. Ошоно иҫәпкә алып, әҫәр 1913-1914 йылдарҙа яҙылған булырға тейеш, тигән ығымта я арға мөмкин. Билдәле булыуынса, был йылдарҙа индостанда милли-азатлыҡ хәрәкәте бик киҫкен төҫ ала, илдең төрлө төбәктәрендә колонизаторҙарға ҡаршы ҡанлы сығыштар булып үтә. "Ҡа арман ҡатын" әҫәренең яҙылыу сәбәбе лә, ихтимал, шул ваҡиғаларға бәйлелер. Үҙаллылыҡ өсөн көрәшкә күтәрелгән индостан халыҡтарына теләктәшлеген яҙыусы ошо рәүешле кинәйәләп еткерергә теләгәндер.

Ҡулъяҙманы әҙиптең тәрбиә хаҡында элгәрерәк яҙған хеҙмәттәренең дауамы, үҫтерелеше итеп тә ҡарарға була. Бында әсәлектең тормоштағы миссия ына, ә әмиәтенә баҫым я ала, йәш быуынды тәрбиәләүҙә әсәләрҙең хәл иткес роле күр әтелә. Алыҫ индостан ваҡиғаларына арналған бул а ла, әҫәрҙең барлыҡ әсәләргә, шул иҫәптән башҡорт әм татар ҡатын-ҡыҙҙарына, ҡағылышлы икәнлеген тоймау мөмкин түгел.

Үрҙә ҡарап үтелгән "Ҡазан шә әрендә зияфат мәжлесе", "Ҡа арман ҡатын" исемле ҡулъяҙмалар авторҙың эҙләнеүсән ижадсы икәнлеген танытала әм унының мәғрифәтселек ҡараштарын тағы ла тәрәнерәк аңларға ярҙам итәләр.

Шулай итеп, Р.Фәхретдинов, күп яҡлы фәнни, педагогик, журналистлыҡ әм дини эштәренән тыш, әҙәби ижад өлкә ендә лә ярай ы уҡ уңышлы эшләп, осор проза ының йөҙөн билдәләрҙәй ҡыҙыҡлы әҫәрҙәр яҙып ҡалдырҙы. Уның ижады башҡорт яҙыусылары өсөн үҙе бер оло мәктәп булды әм милли үҙ сәнғәтенең үҫешенә иҙелерлек йоғонто я аны.

**Миңлеғәли НӘҘЕРҒОЛОВ,**
**филология фәндәре кандидаты.**

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 138

# САҢҠЫНЫ БӨРКӨТ БУЛЫП...

*(Әмир Чаныштың тыуыуына 100 йыл)*

Әмир Чаныш (Әмир Иҙрис улы Чанышев) 1909 йылдың 15 ғинуарында Силәбе өлкә е Бредин районы Павловск ауылында шахтер ғаилә ендә тыуған. Сабый сағынан уҡ етем ҡала, Орск ҡала ында балалар йортонда тәрбиәләнә, унғараҡ Өфөлә В.И.Ленин исемендәге башҡорт интернат-мәктәбендә уҡый. 1928 —1932 йылдарҙа Башҡорт дәүләт педагогия институтының филология факультетында белем ала. 1932– 1935 йылдарҙа Милли культура ғилми-тикшеренеү институтында ғилми хеҙмәткәр, директор урынбаҫары булып эшләй. 1935—1939 йылдарҙа Мәскәүҙә СССР Фәндәр академия ының Тел ғилеме институтында аспирантурала уҡый, педагогия институтында кафедра мөдире вазифа ын башҡара. 1942 йылда фронтҡа китә, артиллерияла рядовой алдат буларaҡ яу юлдары үтә. Курск өсөн ҡаты уғыштарҙа, Польшаны, Чехословакияны, Венгрияны, Германияны азат итеүҙә ҡатнаша. II дәрәжә Ватан уғышы ордены, хәрби миҙалдар менән наградлана. 1945—1954 йылдарҙа Башҡорт дәүләт педагогия институтында филология факультеты деканы, кафедра мөдире, Бөрө педагогия институтында доцент булып эшләй. 1948 йылда филология фәндәре буйынса кандидатлыҡ диссертация ын уңышлы яҡлай. 1955—1957 йылдарҙа Төркмәнстандың Чарджоу педагогия институтында рус теле әм дөйөм тел ғилеме кафедра ы мөдире була.



1957 йылдан алып оҙаҡ йылдар, хаҡлы ялға киткәнсе, Башҡорт дәүләт университетының башҡорт әҙәбиәте кафедра ында доцент булып эшләй. Был йылдарҙа ла ул фән менән актив шөғөлләнә. “Башкирско-русские литературно-фольклорные взаимосвязи” тигән ҙур темаға докторлыҡ диссертация ы яҙып йөрөй, айырым бүлектәрен ғилми йыйынтыҡтарҙа баҫтырып сығара. Вузда “Әҙәбиәт ғилеменә инеш” курсынан лекциялар уҡый. Тәү башлап “СССР халыҡтары әҙәбиәттәре тарихы” курсын башлап ебәрә.

Әмир Чаныш башҡорт әҙәбиәте буйынса урта мәктәп, юғары уҡыу йорттары өсөн байтаҡ дәреслектәр яҙыуға ла күп көс ала.

Әмир Чаныш ижад эшенә утыҙынсы йылдарҙа килә. Йәш әҙиптең тәүге әҫәрҙәренә фольклор мотивтарына киң таяныу, күтәренке романтик стиль ыҙаттары хас. Күләмлерәк әҫәрҙәренең бере е булған “Тау хикәйәләре” циклы Кавказ халыҡтарының ғөрөф-ғәҙәттәрен, ундағы гүзәл тәбиғәт картиналарын бик сағыу үрәтләй. Яҙыусының был яҡтарҙы үҙе күреп белеүе, тау халҡы менән аралашыуы, ғөрөф-ғәҙәттәре менән яҡындан танышыуы күп йә әттән ижади уңыштың нигеҙен билдәләшә. Циклға ҡараусы “Тауҙар әм уйҙар”, “Шағир йәшлеге”, “Мецвери”, “Ҡарт чабан хикәйә е”, “Мәргән”, “Онотолмаҫ осрашыу” әҫәрҙәре легендаларға нигеҙләнгән. Тарихи-революцион темаға арналған “Икәүҙең тарихы” әҫәре хикәйәткә тартым. Был әҫәрҙәрҙе бергә туплаусы булып тау халыҡтарына хас ыҙаттарҙы үҙендә берләштергән йөҙйәшәр ҡарт Мецвери тора. Ул бөтә легендаларҙың тере ша иты булып сығыш я ай, был тарихтарҙы ул таулыларға юғары патетик телмәр менән, ҡанатлы романтикаға сорнап хикәйәләп бирә. Ысынбарлыҡ әм хыял, реаль тормош әм фантазия был хикәйәләрҙә үрелеп-аралашып килә. Хикәйәткә тартымлыҡ, романтик стиль, героик рух, пафос-

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 139



лылыҡ “Тау хикәйәләре” циклын оригиналь яңғырашлы итә, Әмир Чанышты бик үҙенсәлекле хикәйәсе итеп таныта. Был йылдарҙа әҙиптең “Юлда” (1930), “Әптүк” (1935), “Кавказ хикәйәләре” (1940) исемле китаптары бер-бер артлы донъя күрә тора.

Утыҙынсы йылдарҙа Әмир Чаныш әҙәби тәнҡит мәҡәләләре менән дә матбуғатта йыш сығыш я ай. Ижад методына ҡағылышлы ҡыҙыу бәхәстәрҙә ҡатнашҡан йәш әҙип “Октябрь” журналында (1933 йыл, №1) “Социалистик реализм әм әҙәби тәнҡит” мәҡәлә ен баҫтыра. Ш.Шә әр, Ә.Аблай (Ә.Вәли) менән берлектә “Әҙәбиәтте өйрәнеү мәсьәләләре” (1933) тигән йыйынтыҡ төҙөп сығара. Унда Ф.Энгельстың, В.И. Лениндың әҙәбиәткә әм сәнғәткә ҡарата булған нигеҙ принциптары пропагандалана. “Плеханов эстетика ы меньшевиклығы тура ында” (1933) брошюра ында әҙәбиәт әм сәнғәттең философик нигеҙҙәрен, эстетик асылын асыу маҡсаты ҡуйыла, Плехановтың эстетик ҡараштарындағы ҡай ы бер урындар Ә.Чаныш тарафынан тәнҡит ителә. Мәскәүҙә “Литературный критик” журналында баҫылған (1935 йыл, №7) “Башҡоростан шағирҙары” мәҡәлә ендә Ә.Чаныш Бөтә Союз уҡыусы ын башҡорт әҙәбиәтенең поэтик жанрҙары менән таныштырыуҙы маҡсат итеп ҡуя. “Беҙҙә боролош бармы?” (“Октябрь”, 1930 йыл, №3) мәҡәлә е шиғри жанрҙар үҫеше менән бәйле мө им идея-эстетик проблемалар күтәреүе менән ә әмиәтле була.

уғыш осоронда ижад иткән хикәйәләрендә Әмир Чаныш утыҙынсы йылдарҙа үҙенә уңыш килтергән романтик стиль алымдарын киң ҡуллана, легендаларға хас хикәйәләүҙе үҙ итә. “Сынбулатовтар” (1943) хикәйә ендә Ҡыҙрас Сынбулатов оло ҡа арманлыҡ күр әтеп әләк булған улы Саматтың яҡты иҫтәлеген мәңгеләштерергә, ейәндәренә унан өлгө алып йәшәргә өндәй, арҙаҡлы нәҫелдең арҙаҡлы улын әр саҡ ғорурланып иҫкә алырға, онотмаҫҡа васыят итә. Әҫәрҙә Саматтың батырлығы хаҡындағы хат та, Ҡыҙрас ҡарттың балаларына булған васыят-телмәре лә патетик тонда, пафослы яңғырашлы, романтик юғары рух менән уғарып бирелгән: “Ошо бул ын мәңге йәшәр батырға Сынбулатовтар тоҡомо ҡуйған әйкәл, әм ер йөҙөндә батырлыҡ, ир-егетлек йәшәгәнсә, беҙҙең тоҡомда иң унғы кеше ҡалғансы ултыр ын ул әйкәл”.

“Дала йыры” (1943) хикәйә ендә иҫ киткес ҡаты алышта ауыр яраланған башҡорт егете Абдуллиндың тыуған халҡының йырын тетрәндергес итеп көйләүе, яҡты донъя менән хушлашыуы, үлем алдынан тыуған ере, иле, ғәзиздәре менән шул моң арҡылы бәхилләшеүе ҡуйы эмоциональ-экспрессив буяуҙарҙа үрәтләнә, яугирҙың көслө рухы ынландырыла. Ошо фонда бер үҙе генә иҫән ҡалған артиллерист Нетчевоның бер орудие менән фашистарҙың ябырылып килгән тиҫтәләгән танкыларына ҡаршы сая көрәшеүе, тиң еҙ батырлығы тасуирлана. “Мөхәббәт” (1943) хикәйә ендә Шакир менән Мәрйәмдең ғәрәсәтле ҡан ҡойош, үлем, ут-ялҡын эсендә яралған мөхәббәттәренең үлемдән дә көслө булыуы раҫлана. Ғүмере инде бына-бына өҙөлдө тигәндә, өйгән ҡыҙын ҡурҡыу белмәҫ Шакир ут аҫтынан алып сығып өлгөрә. Яу ялҡынында яралған оло өйөү хисенең бөйөк көсө “Фиалка” (1945) хикәйә ендә лә раҫлана. Ҡайнар мөхәббәте хаҡына алдат шинеле кейеп, дә шәтле яу юлдарын кисеүсе батыр ҡыҙҙың күңел матурлығы, тойғолар гүзәллеге, өйгәненә тоғролоғо яралы алдаттар өсөн шифа, дауа ымаҡ. Был ҡыҙҙы бары ы ла яратып, үҙ күреп, сәскә исеме менән Фиалка тип йөртә.

Ә. Чаныштың уғыш осоронда ижад иткән күп кенә хикәйәләрендә тыуған ергә өйөү Ватанға бирелгәнлек тема ы менән тығыҙ бәйләнештә яҡтыртылды. Тыуған ерҙең күңелдәрҙе арбар гүзәллеге, байлығы, күркәм тәбиғәте лә, уғышсыларға көс-ҡеүәт, дәрт-дарман биреүсе, уларҙы аҡлаусы, айбарлы рух биреүсе, батырлыҡтарға әйҙәүсе лә булыуы, тыуған тупраҡтың үлемдән ҡурсалаусы ла икәнлеге “Тыуған тупраҡ”, “Ала ҡарға” хикәйәләрендә бик сағыу үрәтләнә. алдаттарҙың тыуған ергә бирелгәнлектәре, тыуған тупраҡҡа булған ғәзиз тойғолары үлемесле өжүм картиналарында, ғәрәсәтле яу эпизодтарында асып алына. әр алыштан уң яралылар, әләк булыусылар урынын яңы яугирҙар ала, командирҙар алмашына. Әммә уларҙың бөтә ен дә бер изге тойғо берләштерә, яугирҙарҙың бары ының да “ҡан тамырҙарында тыуған тупраҡ тибеше” ишетелә.

уғыштан унғы йылдарҙа ла Ә. Чаныш ижад эшен вуздағы уҡытыу-тәрбиә, ғилми-тикшеренеү эштәре менән бергә алып барырға тырыша. Айырыуса 70—80-се йылдарҙа

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 140



яҙыусының ижади эшмәкәрлеге емешле була. 1971 йылда “Тауҙар, үҙәндәр”, 1978 йылда “Әрем сәскә е”, 1983 йылда “Күңел түрендә”, 1986 йылда “Бер йотом ыу” тигән хикәйәләр, повестар йыйынтыҡтары донъя күрә. Бөйөк Ватан уғышы тема ына арналған, совет яугирҙарының батырлыҡтарын хикәйәләгән “Күк күкрәтеп, ер тетрәтеп” (1982) китабына ингән повестары әм хикәйәләре, “Саңҡ-саңҡ итә Ирәндек бөркөтө” (1978) романы авторға ҙур уңыш килтерә.

Ә. Чаныш “Саңҡ-саңҡ итә Ирәндек бөркөтө” романында ла ижадының башланғыс осоронда уҡ яратып ҡулланған фольклор материалдарына киң таяна. Хәрби операцияларҙа, хәл иткес өжүмдәрҙә уңыш ҡаҙаныу, еңеүгә өлгәшеү бер генә кешенең героизмынан тормай, ә бик күп кешеләрҙең бөтөн физик әм аҡыл көсөн эшкә егеү, рухи-әхлаҡи сыҙамлыҡ, көсөргәнешле эшмәкәрлектәрен бер маҡсатҡа йүнәлтеү өҙөмтә ендә тыуа, тигән ҡараштa торған яҙыусы романда халыҡты төп герой итеп күр әтергә ынтыла. Был халыҡтың ауыҙ-тел ижады өлгөләрен әҫәр туҡыма ына күпләп индереүҙә лә күренә. Халыҡтың тиң еҙ батырлыҡтарға барыуының, совет кеше енең патриотизмының, Ватанына булған өйөү көсөнөң бөтмәҫ-төкәнмәҫлегенең унын тыуған тупрағына ереккәнлегенән, тыуған ил алдында үҙенең оло бурысын аңлауынан килеүен автор ыҙыҡ өҫтөнә ала.

Романдың документаль нигеҙен Салауат Юлаев исемендәге артиллерия полкының ҡа арман яу юлы тәшкил итә. Был полкта яҙыусының үҙенең дә хеҙмәт итеүе әҫәрҙәге хәл-көнкүрештәрҙең, факттарҙың ысынбарлыҡтағыса реаль кәүҙәләнешен тәьмин иткән. Үҙәккә Ҡыҙрас Ирғәлин ғаилә енең уғыш йылдарындағы яҙмышын сағылдырыу ҡуйыла.

Үҙ ғүмерен ҡорбан итеү хаҡына Ҡыҙрас Ирғәлин үҙе хеҙмәт иткән отделениены ҡотҡара. Унын улы Мота ар Ирғәлин үҙ индәрендә иҫ киткес ауыр ынауҙарҙы күтәрә, тиң еҙ батырлыҡтар ҡыла. уғыштың иң фажиғәле тәүге көндәрендә фашистарға ҡаршы айбарлы алышҡан, ушын юғалтып әсирлеккә эләккәс тә рухын ындырмаған, ныҡышмал көрәшкән, әсирлек хурлығын партизан отрядында батыр уғышып йыуған чехословактар менән иңгә-иң терәп дошманға ҡаршы өжүмдәргә барғанда дуҫлыҡ, туғанлыҡ хистәренең көсөн-ҡеүәтен татыған, дөрләп янған танк эсенән шыуышып сығырға үҙендә көс тапҡан бә леүән ул. Мота ар Ирғәлин боронғо эпос батырҙарына хас мө абәт ыҙаттарҙа, легендаларҙа данланған ҡа армандарға тиңләштереп үрәтләнә. Тотош кәүҙә ен ут-ялҡын сорнаған батырҙың йәне тере ҡал а ла, ул аҡылынан яҙа. уғыштың тантаналы еңеү мәлдәре менән бергә трагик яҡтарын да, бини ая юғалтыуҙарға дусар итеүен дә, ҡырыҫ, мәрхәмәт еҙ ысынбарлыҡ булыуын да асып ала яҙыусы был ҡа арман яугир яҙмышында.

Ирғәлиндарҙың йәшерәк быуын вәкиле булған тағы ла бере е — романдың төп геройы Азаматҡа поляк ауылы Лопата эргә ендә уғыш йылдарының иң фажиғәле сәғәттәрен кисерергә тура килә. Яҙыусы был ҡот оҫҡос дә шәтле алыш мәлендә геройының әр ҡылығын, эш-хәрәкәтен, уй-кисерешен тәфсирле үрәтләй бара, шартлар сиккә еткән физик әм рухи көсөргәнешлектең динамика ын тәрән психологик картина рәүешендә күҙ алдына баҫтыра. Азамат Ирғәлинға был уғыш мәлендә күр әткән ҡаармanлығы өсөн Советар Союзы Геройы тигән маҡтаулы исем бирелә.

Әҫәрҙә шулай уҡ замполит Мигуновтың, яугирҙар Айсыуаҡ әм Айбулаттың .б. көслө рухлы, батыр уғышсылар булыуы, тыуған ил азатлығы өсөн үлемдәргә барыуҙары сағыу картиналарҙа яҡтыртыла. Ғөмүмән, роман факттарға, персонаждарға, ваҡиғаларға ифрат бай, документаль нигеҙ бик көслө.

Биш тиҫтә йыл дауамындағы актив ижади әм ғилми эшмәкәрлеге менән оло әҙип, әҙәбиәт белгесе, ғалим, юғары белемле уҡытыусылар, филологтар әҙерләүсе вуз уҡытыусы ы, ауыр уғыш юлдары үткән яугир Әмир Иҙрис улы Чанышев башҡорт әҙәбиәте әм мәҙәниәте, фәне, мәғарифы тарихында иҙелерлек эҙ ҡалдырҙы.

**Гөлфирә ГӘРӘЕВА,**
**БДУ доценты.**

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 141



# ӘҪӘРҘӘРЕ – ТЕРЕ ШИШМӘЛӘР

*(Баязит Бикбайҙың тыуыуына 100 йыл)*



Баязит Бикбай – башҡорт әҙәбиәтен, опера сәнғәтен талантлы шиғри, прозаик, драматургик әҫәрҙәре менән байытҡан күренекле яҙыусыларыбыҙҙың бере е. Үҙе оҡланып, яратып яҙған Ерек шишмә е кеүек әҫәрҙәре лә – төрлө быуын уҡыусыларының рухын байытҡан, матур әҫәрҙәргә ыу ағанда ыу ынын ҡандырған тере шишмәләр ул.

Баязит Бикбай (Баязит Ғаяз улы Бикбаев) 1909 йылдың 10 ғинуарында хәҙерге Көйөргәҙе районы Ҡалта ауылында тыуған. Яҙыусы белемле, уҡыу-яҙыуға бары ы ла оҫта булған, күңелдәрендә халыҡтың бай рухи хазиналарын йөрөткән ғаилә мөхитендә тәрбиәләнә. Баязит Бикбай "Тере шишмәләр" автобиографик повесында ата ы Ғаяз Бикбаев хаҡында "Атайым волость писары әм бер үк ваҡытта ауыл йәштәренән бер нисә кешене русса уҡытыу менән дә шөғөлләнә ине" тип яҙа. Әсә е Хәбибъямал да русса әм башҡортса уҡыу-яҙыуға ма ир була. Баязит, ата ы Империалистик уғышҡа киткәс, олата ы әм өләсә е ҡулында тәрбиәләнә. Олата ы уға алты йәшендә рус әлифба ын өйрәтә башлай. "Телгә бай, төрлө әкиәттәрҙе, халыҡ мәҡәлдәрен бик күп белгән, әр әйткән мәҡәлен, аңлашыл ын йәки хәтерҙә ныҡ ҡал ын типтер инде, берәй ваҡиға менән бәйләп ҡуя торған"олата ы Шәрәфи әм өләсә е ылыуҡай, халыҡ йырҙарын башҡарыуға, әкиәттәр өйләүгә, тапҡыр үҙҙәргә оҫта әсә е Баязиттың "хыялын байытыуға ҙур ярҙам иткәндер", әҙәби зауыҡ тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнағандыр.

Ун йәшендә Баязит Яңы Мораптал мәктәбенә уҡырға йөрөй башлай. Ташлы профессиональ мәктәбендә уҡый, комсомол сафына алына. 1923 йылда Ырымбурҙа Башҡорт халыҡ мәғариф институтында уҡый.

1928 йылда Ырымбурҙан Өфөгә күсә, педтехникум тамамлай. Тап ошо йылдар – уның әҙәбиәткә килеү осоро. Өфөлә Б.Бикбай "Белем" (хәҙерге "Башҡортостан уҡытыусы ы"), "Сәсән" журналдары, "Совет Башҡортостаны" гәзите редакцияларында эшләй.

Утыҙынсы йылдарҙа башҡорт ауылдарында барған күмәк хужалыҡтар ойоштороу ваҡиғаларында яҙыусылар туранан-тура ҡатнаша. А.Карнай, Ғ.Сәләм .б. бик күп әҙиптәр ымаҡ уҡ, Б.Бикбай ҙа 1930-1931 йылдарҙа Туймазы яҡтарында "Ленин юлы" гәзитендә эшләй, колхоздар ойоштороуҙа ҡатнашып йөрөй.

уғыш осоронда Р.Ниғмәти, С.Агиш кеүек яҙыусылар менән бергә тылда ижад итә. Яҙыусылар союзын етәкләй. Әҙәбиәттәге ҡаҙаныштары Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ әм "Почет Билдә е" ордендары менән билдәләнә. Яҙыусыға "Башҡорт АССР-ның атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре" тигән исем бирелә.

1968 йылдың 2 сентябрендә Б.Бикбайҙың йөрәге тибеүҙән туҡтай.

Б.Бикбайға утыҙынсы йылдар ижады танылыу алып килә.

Күренекле “Урман артында”, “Ер” поэмалары, “Ҡояшлы көн” повесы, “Ҡарлуғас” драма ы авторҙың талант ҡеүә ен, яҙыусы булараҡ формалашып өлгөрөүен билдәләй.

Баязит Бикбайҙың шиғриәтенә байҡау я ап, шундай ығымталарға килергә мөмкин: автор үҙенең ижад ҡәләмен төрлө жанрҙарҙа ынап ҡарай әм уңышлы атҡарып сыға. Унығ шиғриәтендә ҡыҫҡа дүрт юллыҡтарҙы, публицистик, саф лирик, фәлсәфәүи, сатирик шиғырҙарҙы ла, шиғри мөрәжәғәт, ода, йыр, баллада, элегия, поэмаларҙың төрлө типтарын осратырға мөмкин.

Башланғыс ижадындағы шиғырҙары заман пафосы менән ауаздаш агитацион-риторик характерҙа. “Үлтерелгән комсомолка”, “Мәстүрәгә йыр”, “Вон сходтан”, “Шулай, мулла” шиғырҙарынын исемдәренән үк күренеүенсә, авторҙың был осор шиғырҙары лозунгылыҡ, ҡәтғилек ыҙаттары менән айырылып тора.

Утыҙынсы йылдарҙа яҙылған “Бик яҡшы”, “Ҡайын” шиғырҙарында уҡ автор образлылыҡҡа ҙур иғтибар бирә. Ике шиғырҙа ла ҡайын ағасына ҙур мәғәнә алып, художестволы образ кимәленә күтәрә. Тәүге шиғырҙа ҡарт ҡайын иҫке тормош менән ассоциациялана, ҡайын ҡартайғандай, иҫке тормош та артҡа сигенә, автор шиғырға колхозсыларҙың етеш йәшәүе менән бергә мәҙәниәткә ынтылыу кәрәклеге идея ын ала. Икенсе шиғырҙа “ҡайын-ҡайғы” традицион мотивы поэтик яңғыраш ала. 1936-1937 йылдарҙа яҙылған “Беҙ иркә үҫмәнек”, “Күл”, “Сирень”, “Оҙатыу”, “Кәкүк” шиғырҙары менән унығ ижадына патриотик мотивтар килеп инә.

Б.Бикбай был осорҙа “Урман артында” (1933), “Гармунсы” (1934), “Йәшә, тормош!” (1936), “Ер” (1936) поэмаларын ижад итте. “Урман артында” поэма ы был осор әҙәбиәте өсөн тематик әм поэтик табыш булды. Социалистик ҡоролош ал да гөл итеп үрәтләнергә тейеш, тип талап ителгән, вульгар социологизм идеялары хакимлыҡ иткән бер мәлдә, Б.Бикбай колхоз мөлкәтен ҡарауылларға китеп барған комсомолец Йомағолдоң кулактар ҡулынан трагик үлтерелеүендә яңы тормош төҙөүҙең еңел генә аҙымдар менән бармауын, тормоштоң күпкә ҡатмарлы булыуын ынландырҙы. Образлылыҡ тыуҙырыу йә әтенән дә автор ҡыҫҡалыҡта тәрән мәғәнәлелек алымы менән эш итә. Йәш Йомағолға ташланған кулактарҙы төнгө ай яҡты ында күренеп ҡалған шәүләләр аша биреү шомлолоҡто тағы ла тәрәнәйтә. Шулай итеп, поэмала шағир яңы тормош төҙөүҙең трагик яҡтарын бирҙе.

“Гармунсы” поэма ында автор хеҙмәттең кеше тәрбиәләүҙәге ролен яҡтырта. Ялҡау Ғәлекәев бик оҙаҡ хата юлда йөрөй, ҡалаға агрономлыҡҡа уҡырға ебәргән ерҙән ҡасып ҡайта, ситкә сығып китеп эшләп ҡарай, әммә ялҡаулығын еңә алмай. Шул арҡала өйгәне Суфияны юғалта яҙа, уңынан тура юлға баҫа – ударник, алдынғы колхозсы булып китә.

“Ер” поэма ында шағир башҡорт халҡының быуаттар буйына килгән үҙәк проблема ын – ер мәсьәлә ен сағылдырҙы. Әҫәр – жанры яғынан героик поэма. Үҙәктә башҡорт халҡының ер өсөн, үҙ бойондороҡ оҙлоғо өсөн героик көрәшен үрәтләү тора. Башҡорт халҡының үткән быуаттарҙан килгән ер өсөн көрәшенең совет осоронда ла яңынан ҡабыныуын күр әтә автор. Был көрәш юлы – халыҡтың аянысла, фажиғәле яҙмышы ла, героик образын асыусы ла. Автор поэманың тәүге бүлектәрендә батшаның күп йылдарға уҙылған колониаль сәйәсәтен, халыҡтың Салауат Юлаев етәкселегендә үҙ милли азатлығы өсөн, ере өсөн көрәшен сағылдыра. Поэманың уңғы өлөштәрендә совет төҙөлөшө, халыҡтың шат тормошо, колхоздарға ойошоу мәлендә лә уртала торған проблема – ер мәсьәлә е булыуын үрәтләй. Халыҡтың бәхетле тормошона ергә ябай крәҫтиәнден хужа булыуына оҡланыу, шатланыу тойғолары сағыла.

Утыҙынсы йылдар аҙағында бик күп яҙыусылар баллада жанрына мөрәжәғәт итте. Ғ.Сәләм, Б.Бикбай ижады аша әҙәбиәтебеҙҙә был жанр тамам нығынды.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 143



Ғ.Сәләм “Ҡыҙыл букет”, “Самурай әм уның хужа ы”, “Сеньор әм балалы ҡатын”, Б.Бикбай “ Пограничник әм уның әсә е” .б. балладаларын яҙҙылар. Баллада жанры менән әҙәбиәтебеҙҙә патриотик тема ла нығынды. Б.Бикбай баллада жанрында эшләүен уғыш осоронда ла дауам итә. “Тура ҡараусы кеше” баллада ы совет кешеләренең патриотик ыҙаттарын, ынмаҫ рухын ынландырҙы. Илде аҡлау тема ы Б.Бикбайҙың уғыш осоронда яҙылған күпселек лирик, сатирик шиғырҙарында үҫтерелде.

“Тыуған илем өсөн!”, “Эшкә!”, “Үлем фашизмға!”, “Ҡоралға, иптәштәр!” әҫәрҙәре уғыш осорондағы шиғри өлгөләрҙең күптәренә хас булғанса шиғри мөрәжәғәт бул а, “Башҡорт атлылары”, “Йыр” әҫәрҙәре йыр поэтика ын үҙ итте, “ Дан иңә, Мәскәү, дан!”, “Урал” шиғырҙарының ода ыҙаттары был осор күтәренке рух атмосфера ын тыуҙырыуға булышлыҡ итте. “Фрицтың кресы”, “Ҡара ҡоҙғон” сатирик шиғырҙарында халыҡтың тыныс тормошон боҙоп баҫып ингән фашистарҙың сатирик образы бирелде, улар ҡара ҡоҙғон менән сағыштырылды. Совет ерҙәрен баҫып алып, түшенә тәре ҡаҙарға хыялланған фрицтың үле кәүҙә е өҫтөнә ҡуйыласаҡ тәре ҡылған ҡылыҡтарына сатира булып яңғырай.

Б.Бикбайҙың уғыштан уңғы шиғриәтенә заманының үҙәк мәсьәләләре хас булды. Яуҙан еңеп ҡайтҡан алдат образы уғыш тамамланғандағы тәүге мәлдәрҙәге шиғриәтенең үҙәк геройы булараҡ үрәтләнде. Ул алдат ҡул ҡаушырып өйҙә ултырырға яратмай, тыныс хеҙмәтте ағынған. “Баҫыуҙа”, “ алдат ҡайтҡанда” шиғырҙарында иген сәсеп, бесән сабырға ашҡынып ҡайтып килгән, ҡайтыу менән трактор рычагы артына ултырған алдаттар образы бирелә.

уғыштан уң ижад ителгән бер шәлкем шиғырҙары “Юшатыр буйында” исеме менән циклға берләште. Циклға ингән шиғырҙарҙа үҙәк темалар — тыуған йорт, ил, дуҫлыҡ, тыныс хеҙмәт. “Дуҫлыҡ әйкәле”, “Рус теле” шиғырҙарында рус әм башҡорт халыҡтары ара ындағы татыулыҡҡа, фронтта тыуған дуҫлыҡтың ныҡлығына дан йырлана. Циклды асып ебәргән инеш шиғырҙа бер Юшатыр буйы матурлығы аша Тыуған ил образы бирел ә, “Туй” шиғырында шул оло йорттоң хеҙмәт кешеләре, уларҙың дәртле тормоштары сағылыш тапҡан.

Б.Бикбайҙың уғыштан уңғы йылдар лирика ына фәлсәфәлек хас. “ андуғастан бәхетле ҡош юҡтыр”, “ Туған тел”, “Яңы осрашыуҙар”, “Табын йыры”, “Минең яҙым”, “Ҙур көн”, “Ғорур кеше йыры” шиғырҙарында тыуған ергә, телгә мөхәббәт тема ы фәлсәфәүи планда асыла. Шағирҙың саф мөхәббәт тойғолары ғына йырланған лирик шиғырҙары ла тормош, кешенең ерҙә йәшәүенең мәғәнә е киңәк уйланыуҙарға барып тоташа. “Яҙам да яҙам”, “Тағы ҡаты сирләгәндә”, “Аңлау ҡыйын инде иңә мине”, “Бер ваҡытта ла уң түгел” шиғырҙары шундайҙарҙан.

Б.Бикбайҙың драматургия ы ла жанр төрлөлөгө менән айырылып тора: “Ҡарлуғас”(1936) киңәк тормош-көнкүреш характерындағы ы, “Салауат” (1940), “Ҡаым түрә” (1957), киңәк героик драмалар, “Ҡоҙаса” музыкаль комедия ы, “Шәүрә” киңәк трагедия, “Бер ата балалары”, “Ватан саҡыра” киңәк социаль-әхлаҡи характерҙағылары ла бар.

“Ҡарлуғас” драма ының конфликт нигеҙенә Салауат восстание ы алдынан булған тарихи-ижтимағи шарттар алынған. Әҫәрҙең башында уҡ автор уҡыусыны шул социаль-ижтимағи атмосфераға алып инә. Мәҫәлән, аҡланда йырлай-йырлай еләк йыйып йөрөгән ҡыҙҙар хаҡында лирик тасуирҙар көтмәгәндә социаль яңғыраш ала. Ошо ерҙәр рус баярҙарына атылғанлыҡтан, ҡыҙҙарҙы аҡландан ҡыуып ебәреп, халыҡты был тау-урмандарға йөрөүҙе тыйып ҡуялар. Урындағы Яҡуп старшина киңәктәрҙең Садовский баярға ер атыуҙарына, тау-урмандар таланыуына, социаль иҙеүгә ҡаршы халыҡта риза ыҙлыҡ тыуа башлауын, халыҡтың бунтарлыҡ хәрәкәтенә күтәрелергә әҙер булыуын сағылдыра автор. Көн ылыу, Ҡормой, Шатморат, Ҡарлуғас киңәк геройҙарҙа актив көрәшкә сыҡҡан халыҡ образы

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 144



дөйөмләштерелә. Социаль-ижтимағи көрәш көнкүреш планында ла тулыландырыла. Ҡарлуғастың Яҡуп старшинаға кейәүгә биреләү күренешендә ҡатын-ҡыҙҙарҙың элекке хоҡуҡ ыҙ яҙмышы ла, үҙенең бойондороҡ оҙлоғо өсөн героик көрәше лә үрәтләнә. Йомғаҡлап әйкәндә, Б.Бикбайҙың "Ҡарлуғас" драма ы утыҙынсы йылдарҙа милли драматургияны яңы баҫҡысҡа күтәргән юғары художестволы әҫәр булды.

Б.Бикбайҙың "Салауат" әҫәрендәге ваҡиғаларҙы "Ҡарлуғас" драма ында башланған күренештәрҙең дауамы тип әйтергә мөмкин. "Ҡарлуғас" әҫәре халыҡ араында "Салауат яуы башланған" тигән үҙҙәр таралыуы менән тамамлана. Бында Шатморат етәкселегендә күтәрелгән халыҡтың Салауат яуына ҡушылып китеүенә шик юҡ. Шулай итеп, "Салауат" драма ында ла автор азатлыҡ тема ын дауам итте. Үҙәктә легендар герой Салауат образы тор а ла, драманы уның биография ы хаҡында әҫәр тип түгел, ә халыҡ драма ы итеп ҡарарға кәрәк. Драманың үҙәгендә Сураман, Моталлап, Сәлимә, Наза, Тимербикә, Мөғлифә, Зарифа, Архип, баш күтәргән казактар, каторжандар, завод крәҫтиәндәре, халыҡтың актив көрәш юлы, бунтарь характеры үрәтләнә. Автор Салауаттың ҡурҡыу белмәҫ, тәүәккәл, дошмандарына нәфрәтле булыуын әм шул уҡ ваҡытта үҙенең егеттәрен көрәшкә йыр, оран менән дәртләндереүсе шағир-импровизатор ыҙаттарын асып бирә. Халыҡтың Салауат етәкселегендә көс булып ойошоп, Ҡолой Балтасов, Солтан әм Бохайыр, Твердышев кеүек башҡорт әм рус феодалдарына ҡаршы героик көрәше сағылыш таба. Юлай старшина Аҙналин образына ла автор ҙур ғына урын бирә. Әбей батшаның ми ырбанлығына тәүҙә ышанып йөрөгән Юлай уңынан улының дөрөҫ юлда йөрөүен аңлай, үҙе лә Салауатҡа ярҙам итә. Драма ихтилалдың еңелеүе менән тамамлана, ләкин халыҡтың еңеүгә ышанысы, оптимистик рухы үнмәүе, Салауат кеүек батырҙарын онотмауы сағыла.

1957 йылда яҙылған "Ҡа ым түрә" драма ының нигеҙендә лә тарихта ҙур эҙ ҡалдырған документаль факттар ята. Әҫәрҙә 1812 йылғы Ватан уғышы үрәтләнә. Был драма ын автор башҡорт егеттәренең Ватанды аҡлауҙағы ҡыйыулығын, батырлығын, Ҡа ым түрә кеүек сардарҙарҙың аҡыллы етәкселеген күр әтеүгә арнаған. Төп ваҡиғаларҙа ҡатнашҡан Ҡа ымдың, Байыҡ сәсәндең, Аҡъегеттең, Аҫылбикәнең аҫыл сифаттары Ҡолтүбә, Ша и кеүектәрҙең вәхшилегенә, ҡара эслелегенә ҡаршы ҡуйылған. Яҙыусы Байыҡ сәсән образына ла ҙур ғына урын биргән, шуға күрә уның характеры ярай ы уҡ асыҡ күҙ алдына баҫа. Ул Ҡа ымдың яҡын кәңәшсе е, ярҙамсы ы, Ҡа ым урынына алдаттарҙы көрәшкә етәкләүсе ҡурайы, моңо менән яуға әйҙәүсе лә, уның ҡурайы иң яуаплы мәлдәрҙә көрәшкә рухландырыусы ла, алдаттар тыуған яҡтарын ағынғанда моңдары менән күңелдәрен дауалаусы ла булараҡ үрәтләнә.

Авторҙың ваҡиғаларҙың социаль ә әмиәтен биреү менән бергә әхлаҡи яҡтарын да үрәтләүе – әҫәрҙең уңышлы яғы. Ҡолтүбәнең көнсөллөк, мәкерлелек кеүек психологик ыҙаттары тулы ғына асыла.

Шулай итеп, "Ҡа ым түрә" драма ы шулай уҡ башҡорт халҡының героик образын асып бирҙе, героик яҙмышының тағы ла бер эпизоды булды.

"Салауат" әм "Ҡа ым түрә" драмалары заманында идеологик кәртәләргә лә осраны. Башҡортостан яҙыусыларының 1946 йылдың 26 октябрендә үткәрелгән киңәйтелгән ултырышы Б.Бикбайҙың алда әйтеп үтелгән драмаларын, М.Бурангуловтың "Иҙеүкәй менән Мораҙым", "Башҡорт туйы", "Ашҡаҙар" әҫәрҙәрен тарихи факттарҙы боҙоуҙа, милләтселектә ғәйепләп сыға. Авторҙар был әҫәрҙәрен бер нисә тапҡыр ҡабаттан эшләргә мәжбүр була.

Б.Бикбай уғыш осоронда заман проблемаларын яҡтыртҡан сәхнә әҫәрҙәре лә ижад итте. "Ватан саҡыра" (1941), "Бер ата балалары" (1944) халыҡтың социаль-

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 145



əхлаҡи йөҙөн асыуға арналды.

уғыштан унғы драматургия ы ла жанрҙар төрлөлөгө, опера сəхнə е өсөн əҫəрҙəре менəн билдəлəнə. 1959 йылда яҙылған “Ҡоҙаса” музыкаль комедия ында алтмыш йəшлек ҡарт Яппарҙың элекке йолалар буйынса йəш комсомолка Назаға – ҡоҙаса ына өйлəнергə уйлап көлкөгə ҡалыуында иҫкелекте кире ҡағыу, яңы тормоштоң тантана итеүе күр əтелə.

Б.Бикбай “Шəүрə” əҫəрендə тарихи темаға ҡабат əйлəнеп ҡайта. Пугачев яуы баҫтырылғандан унғы ваҡиғаларҙы үрəтлəй.

Б.Бикбайҙың сəхнə əҫəрҙəренə бик күп композиторҙар мөрəжəғəт итə. “Шəүрə”, “Салауат”, “Ҡоҙаса” əҫəрҙəрен З.Исмəғилев менəн берлектə ижад итə. Р.Мортазиндың “Азат”, Х.Əхмəтовтың “Замандаштар” операларына либретто яҙа.

Б.Бикбайҙың уҡыусылар яратып уҡыған “Аҡсəскə”(1961), “Тере шишмəлəр”(1965) повестары, “Аҡселəн ташҡанда” романы, очерктары, хикəйəлəре бар. Прозала ла ул туҡтау ыҙ эҙлəнеүсе, төрлө жанрҙарҙа эшлəргə ынтылыусы яҙыусы булараҡ билдəле. Сəсмə əҫəрҙəр яҙыуға ла Б.Бикбай утыҙынсы йылдарҙа килə. Унын 1933 йылда яҙылған “Ҡояшлы көн” повесында башҡорт халҡы яҙмышында ҙур ə əмиəтле əм ҡатмарлы булған коллективлаштырыу ваҡиғалары асыла.

Б.Бикбай үҙенең очерктарында яу əм хеҙмəт батырҙарының фиҙакəрлеген данланы. “Самолет алған Хəбирйəн”, “Өс геройҙы тəрбиəлəгəн колхоз” əҫəрҙəрендə автор совет халҡына хас героик ыҙаттарҙы, кешелəрҙең үҙҙəренең шəхси мəнфəғəттəренəн дөйөм мəнфəғəттəрҙе өҫтөн ҡуйыуҙарын үрəтлəй. “ ауала асылған ҡыйыулыҡ” (1943) очеркы күп тапҡырҙар ауаға күтəрелеп, дошман самолеттарын ҡыйратҡан, күкрəгенə өс орден биҙəгəн Бөйөк Ватан уғышы батыры, летчик, өлкəн лейтенант Фидаи Чурмантаев хаҡында. “Ике дуҫ”та (1947) автор ауыр фронт юлын үтеп, ҡаты яралар алып, тыуған яҡтарына əйлəнеп ҡайтҡан Көйөргəҙе районы Яҡут ауылының данлыҡлы комбайнерҙары Рамазан Юлбарисов əм Карам Рахманҡолов хаҡында айырым бер йылылыҡ, оҡланыу менəн бəйəн итə.

Б.Бикбай хикəйəлəре тематик йə əттəн күп төрлө. Хикəйəлəренең төп геройҙары – хеҙмəтте яратҡан ауыл кешелəре, йəштəр, комсомолецтар. 1929 йылда яҙылған “Кемгə булыр?” хикəйə ендə яҙыусы ижтимағи маҡсаттарын шəхси яҙмышынан өҫтөн ҡуйған Ғəрихə образы аша заманы өсөн актуаль булған ҡатын-ҡыҙ яҙмышы тема ын аса. “Энтузиаст” (1935) əҫəрендə алдынғы ат ҡараусы Вəғиз, “Мал өйөүселəр”ҙə (1934) үҙ эштəренə яуаплы ҡараған мал ҡараусылар Батыр менəн Рафаил хаҡында үҙ бара. “Дуҫым өйөндə”, “Яй ыҙ Ямалиҙың ҡаты ҡайғы ы” хикəйəлəрендə Б.Бикбай ялҡаулыҡты, наҙанлыҡты тəнҡитлəне.

уғыш тамамланғас, Б.Бикбай үҙен ҙурыраҡ жанрҙарҙа ынап ҡарай. “Аҡселəн ташҡанда” шул осорҙарҙа ижад ителгəн, көн тема ына арналған романдар ара ында үҙ урынын тапты. Романда ваҡиғалар ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендə бара – көҙ башланып, яҙ тамамлана. Автор ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыт арауығында Аҡселəн йылға ы буйында урынлашҡан Ҡайынлы ауылының, “Көрəш” колхозы халҡының рухи үҫеүен, активлашыуын, шул осор ауылдарҙың йөҙө үҙгəреүен күр əтə.

Роман күп планлы. Колхоздарҙа барған көрəш ҡатмарлылығын киң яҡтыртырға ынтыла автор. Əҫəрҙең төп геройы Тимер Ян аров ауылына ҡайтып килə. Август айы, ҡыҙыу ураҡ мəле булыуға ҡарамаҫтан, баҫыуҙа халыҡ күренмəй, төш яҡынлашып килə, колхозсылар эшкə сығырға ашыҡмайҙар, урылған ашлыҡтың аламы өйөлмəгəн, йөҙ гектарға яҡын ашлыҡ урылмай ята. Романдың конфликты Тимер Ян аров, Ғариф Иртөбəков, Яҡуп Мырҙағолов кеүек активистар əм колхоз дилбегə ен үҙ ҡулдарында тотоп, хакимлыҡтарын бирергə телəмəгəн Гəрəй Шаҡманов, Саҡай Солтановтар ара ындағы көрəшкə нигеҙлəнə. Тимергə халыҡты инертлыҡтан арындырырға, эргə енəн яҡшы атҡа ултырып, йылға аша сыҡҡанда

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 146



ыу сәсрәтеп үтеп киткән Гәрәй Шаҡмановтар хакимлығын бөтөрөргә, колхозды яңынан уятырға кәрәк.

Булат Өмөтбаев, Фәхри образдарында урта хәлле крәҫтиәндәр мәсьәлә е күтәрелә. Булат әм Фәхри кеүектәргә әле Гәрәй Шаҡмановтарҙың йоғонто о ҙурыраҡ, автор улар психология ындағы икеләнеүҙе колхоз файҙа ына ындырыуҙың еңел түгеллеген үрәтләй. Булат Өмөтбаев колхозға эшкә сығыуға ҡарағанда Гәрәй Шаҡмановта өмәлә йөрөүҙе хуп күрә, Фәхри байҙарға ярам аҡланып, ялағайланып, уларға яҡын булырға тырыша.

Шулай итеп, роман көн тема ына арналған уңышлы эпик полотно булды, утыҙынсы йылдарҙа ижад ителгән романдар менән сағыштырғанда, яҙыусы әҫәрҙә бер планлылыҡтан киң үрәтләүгә ирешә.

Б.Бикбай 1961 йылда “Аҡсәскә” исемле повесын яҙа. Быға тиклем тормошто күберәген синфи күҙлектән сығып үрәтләгән әҫәрҙәрҙән айырмалы, повесть заман проблемаларын әхлаҡи-философик планда биреүе менән уңыш ҡаҙана. Повеста Нәғимә, Ғәлиә йөҙөндә асылған кешенең рухи-әхлаҡи юғарылығына Әхмүш, Мәймүнәләр эш-ҡылығындағы түбәнлек ҡаршы ҡуйыла. Автор “халыҡ дошманы” ҡыҙы тип нарыҡланған Нәғимәнең дә әм ауыр минуттарҙа ғаилә ен ташлап киткән, Нәғимә менән Аҡсәскәнән баш тартҡан Әхмүштең дә шәхес культы ҡорбандары булыуын үрәтләй. Ошо ауыр ынау осоро уларҙың ике ен ике юлдан алып киткән. Нәғимә, эшенән бушатылыуына, төрлө кәртәләргә осрауына ҡарамаҫтан, кешелек юғарылығын, рухи көсөн аҡлап ҡала алған. Аҡсәскәне матур күңелле, намыҫлы итеп тәрбиәләгән. Хәҙер Аҡсәскә – юғары белемле инженер. Ә Әхмүш үҙ йүнен ҡайғыртып, Нәғимә менән бергә йәшәүҙән баш тарт а ла, тормошта үҙен кеше булараҡ раҫлауға көс өҙ, тормош төпкөлөнә тәгәрәгән.

Шулай итеп, Б.Бикбай “Аҡсәскә” повесында тарихтың фажиғәле биттәрен асып ала.

Авторҙың “Тере шишмәләр” повесы унның ижадына бер йомғаҡ кеүек. Әҫәр автобиографик характерҙа. Унда автор үҙе ғүмере буйы оҡланған кешеләрҙең образдарынан, бала саҡ, йәшлек хәтирәләренән колоритлы картина яҙа. Унның был повесында олата ы Шәрәфи, Баҙлый бабай, Ҡолоҡас ҡарт кеүек оҡланғыс кешеләр образдары күп. Улар хаҡында йә шаяртып, йә хикәйәт форма ында бәйән итеү әҫәр телен халыҡтың үҙ өйләү стиленә яҡынайта. Кешеләр ара ында тәрәнәйгән татыулыҡ, дуҫлыҡ кеүек ыҙаттар йырлана әҫәрҙә.

Б.Бикбай тәнҡит мәҡәләләре, рецензиялар менән дә матбуғатта сығыш я ай. Уларҙа яҙыусы башҡорт, татар, рус, төрөк әҙәбиәте, ҡәләмдәштәре, башҡорт музыка сәнғәте хаҡында фекерҙәре менән уртаҡлаша.

Балалар өсөн хикәйәләрендә, әкиәттәрендә яҙыусы (“Алтын тамсы”, “Серле төйөнсөк”, “Бәлә”, “Әсә рәхмәте” .б.) хеҙмәтте яратыу, изгелек әм яуызлыҡ көрәше, батырлыҡ әм ҡурҡаҡлыҡ .б. мәсьәләләрҙе яҡтыртты, туранан-тура өгөтнәсихәткә бирелмәйенсә, әкиәт жанры аша балаларҙа матур сифаттарҙы тәрбиәләү юлдарын өйләнә.

Шулай итеп, Б.Бикбайҙың дүрт тиҫтәгә яҡын йыл эсендәге ижад мираҫы башҡорт әҙәбиәтенең ҙур ҡаҙаныштары булды.

**Рәмзиә МОСТАФИНА,**
**БДУ доценты.**

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 147



# БАШҠОРТ, ҠУРАЙ ӘМ ЙОГА

Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим үҙенең «Сәғәт ярым ғүмер» исемле хәтирәһендә («Башҡортостан» гәзите, №241, 2005 йыл) 1965 йылда Төркиәләге сәйәхәте ваҡытында Зәки Вәлиди Туған менән осрашыуын һүрәтләй. Был ҡыҫҡа ғына аралашыуҙың ахырында халҡыбыҙҙың бөйөк улы шағирға: «Ҡурай моңо яҙылған граммофон пластинкаһы ебәрә алмаҫһығыҙмы?» – тигән үтенесен еткерә.

Сит-ят тарафтарҙа ярты быуатҡа яҡын ғүмер йәшәргә мәжбүр ителгән кешенең Тыуған илен һағыныу хистәрен баҫыу өсөн ниндәй кимәлдә ҡурай моңона зар-интизар булыуын фараз итергә генә ҡала беҙгә... Ләкин ошо миҫалдан һәм уға оҡшаш бихисап хәл-ваҡиғаларҙан шуны беләбеҙ: «Урал», «башҡорт», «ҡурай» төшөнсәләре бер-береһенән айырылғыһыҙ. Ҡурай – ысын мәғәнәһендә башҡорт өсөн тыуған ер, тәбиғәт бүләге, Урал тауҙарын йәнтөйәк иткән ата-бабаларыбыҙҙың рухи мираҫы. Ҡурай үләненең тик ошо ерҙе генә үҙ итеүе – үҙе бер мөғжизә булһа, көҙгө һалҡындарҙан һулыған үләндәр араһында ғорур баҫып торған ҡыу һабаҡты ҡырҡып алып, көпшәһе аша тын өрөп, тәбиғәттең үҙе кеүек мәңгелек моң яралтыу – икенсе мөғжизә. Өсөнсө мөғжизә – сал тарихыбыҙ дауамында бер ниндәй ҙә Ваҡыт һәм Ара һынауҙарының айыра алмауы башҡортомдо ҡурайынан!

Был тәбиғи үҫемлектең ҡабатланмаҫ тажында саталары күпме, шунынса асылмаған серҙәрен, мөмкинлектәрен һаҡлай әле. Ҡурай үләненең тейешлеһен һайлап, ҡырҡып алыу, тишектәрен дөрөҫ итеп уя белеү, улар аша моң ҡойоу алымдарын оҫталар өйрәнсектәренә быуындан-быуынға тапшыра килгән. Уның тураһында әкиәттәр, риүәйәттәр телдән-телгә күсеп, беҙҙең көндәргә килеп еткән. Йырсылар һәм сәсәндәр ҡурайҙы данлап йырҙар, ҡобайырҙар ижад иткән. Ғалимдар уны ботаника, этнография, тарих, сәнғәт күҙлегенән тәрән өйрәнеп, ғилми хеҙмәттәр, уҡыу әсбаптары яҙған. Ваҡытлы матбуғат биттәрендә лә ҡурай тураһында әленән-әле ҡыҙыҡлы һәм фәһемле мәғлүмәттәр баҫылып тороуы халыҡтың рухи мираҫыбыҙға ихтирамының һәм иғтибарының кәмемәүен күрһәтә. Борон-борондан һабан- туйҙарында, төрлө йыйындарҙа ал бирмәгән иң оҫта ҡурайсылар нисек итеп дан яулаһа, бөгөнгө көндә лә ошо йола тергеҙелеп, республика кимәлендә йылдан-йыл үткәрелә килеүе, яңы исемдәр асылыуы – шатлыҡлы күренеш. Ул ғына ла түгел, ҡурай моңо бөгөн бөтөн Ер шарын урап сығып килә. Урай, сөнки уның моңо бер ниндәй ҙә ҡалыптарға һыймай, бер күңелдән икенсе енә тотҡарлыҡһыҙ үтеп инә.

Шулай итеп, ҡурай – башҡорт халҡының иң боронғо дәүерҙәрҙән килеп еткән моң ҡоралы ғына түгел, ә уны «Урал батыр» эпосы менән бер кимәлдә донъя мәҙәниәтенә танытҡан рухи юлдашы ла. Беҙ ҙә ошо хеҙмәтебеҙ менән был актуаль темаға үҙебеҙҙең өлөшөбөҙҙө кертергә булдыҡ, йәғни «ҡурай» һүҙенең үҙенә туҡталып, һүҙ яһалышын тикшереү, тамырҙаш һүҙҙәре менән бергә уның лексик мәғәнәһенә төшөнөү маҡсатын ҡуйҙыҡ алдыбыҙға.

XX быуаттың 90-сы йылдар аҙағында башҡорт теленә дәүләт статусы бирелгәс, беҙҙең алдыбыҙға уның ҡулланыу даирәһен киңәйтеү бурысы килеп баҫты. «Әле үҙебеҙҙең туған телебеҙҙе тулыһынса белеп файҙаланмайбыҙ, уның сикһеҙ бай һүҙлек запасы һандыҡ төбөндә ятҡан хазинаны хәтерләтә. Алтын-көмөш йәки

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 148



аҫылташ һандыҡ төбөндә быуаттар буйы ятһа ла, тутыҡмай ҙа, иҫкермәй ҙә. Ҡулланылмаған тел байлығы иһә, ҡиммәтле булыуы менән хазинаға оҡшаһа ла, икенсе бер үҙенсәлеге менән унан ныҡ айырыла. андыҡта ятҡан алтын-көмөш оҙаҡ йылдар буйына үҙенең төп сифаттарын юғалтмаһа, ҡиммәтен һаҡлаһа, ижтимағи тормошта, көндәлек һөйләштә киң ҡулланыу тапмаған тел үҫешә, камиллаша һәм байый алмай, киреһенсә, ярлылана, ҡатып ҡала, уның ҡулланылыш даирәһе тарая. Быңдай телдең, әгәр уға артабан үҫеү, байытыу өсөн шарттар булдырылмаһа һәм дәүләт яҡлауына алынмаһа, аҡрынлап бөтөүгә табан юл алыуы, үҙенең төп ролен — кешеләрҙең аңлашыу ҡоралы булыу ролен юғалтыуы ихтимал», — тип яҙып сыҡты был турала БР Хөкүмәте ҡарамағындағы Терминология комиссияһы ағзаһы Абдулла Исмәғилев («Башҡортостан» гәзите, №171, 2006 йыл).

унғы йылдарҙа республикабыҙҙың төрлө райондарында алып барылған археологик эҙләнеүҙәр нигеҙендә Көньяҡ Уралда бик боронғо дәүерҙәрҙә һинд-герман телдәр ғаиләһенә ҡараған иран-арий ҡәбиләләре йәшәүе иҫбат ителде. Был ҡәбиләләрҙең йәшәү рәүеше, йолалары һәм ғөрөф-ғәҙәттәренең үтәлеше, боронғо индостанда дини-фәлсәфәүи ихтыяждарға хеҙмәт итеүсе әҙәби тел — санскрит теленең башҡорт теле менән уртаҡлыҡтары булыуы тураһында фәнни мәғлүмәттәр көн битенә сыҡты. Бигерәк тә үҙенең ғилми хеҙмәттәре менән тарихсы-ғалим Салауат Ғәлләмов ошо өлкәгә кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр менән асыҡлыҡ индерҙе. Уның китаптары йәмғиәттең төрлө ҡатламдары араһында ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра һәм өйрәнелә.

Донъя мәҙәниәте, диндәр тарихынан билдәле булыуынса, индостанға Ҡуру тип йөрөтөлгән төньяҡ континенттан күскән арийҙар үҙҙәренең **йога** тигән тәғлимәтен дә алып килгән. Ҡояшҡа, утҡа табыныусы был ҡәбиләләр араһынан **саҡтар ырыуы** ла унда юғары мәҙәниәтле үҙ дәүләтен булдыра. Ошо ырыуҙың халҡын бик яратып хәстәрләгән һәм үҫтергән, улар тарафынан үҙе лә ҙур ихтирам яулаған Шуддходана батшаның ғаиләһендә тыумыштан иҫ китмәле һәләттәргә эйә булған Сиддхартха Гаутама үҫә. Ул арий ата-бабаларының дине — юғары кимәлдә ҡатмарлы булған **йога тәғлимәтен** урындағы ҡәбиләләр, күп ҡатлам кешеләренә аңлайышлы булһын өсөн пали теленә тәржемә итә. Атаһының сикһеҙ күп матди байлыҡтарынан, батшалыҡ итеүҙән, фани донъяның башҡа шатлыҡтарынан баш тартып, рухи байлыҡҡа өлгәшеүҙе генә маҡсат итеп ҡуя ул. Ошоноң менән Сиддхартха Гаутама яңы донъяуи дин — буддизмға нигеҙ һала. Ә арийҙарҙың теле, индостан ярымутрауының үҙендәге ҡәбиләләр тарафынан Саҡтар дәүләте ҡыйратылыу сәбәпле, яйлап был тарафтарҙа онотола, латин менән бергә үле телдәр иҫәбенә керә.

Әгәр Уралдан күсеп китеүсе веды арийҙарының буддизм диненә нигеҙ һалырлыҡ йога тәғлимәте кеүек белемдәре булған икән, уның ярсыҡтары әле бында, уларҙың ҡан туғандары башҡорттарҙа, һаҡланмаған микән ни? Улай булғас, һандыҡта ятҡан алтын-көмөш, оҙаҡ йылдар буйына үҙенең төп сифаттарын юғалтмай, ҡиммәтен һаҡлаған кеүек, тел төбөндә ниҙәр ятҡанын тикшереп ҡарайыҡ.

Башҡорт теленең һүҙлегендә ошондай аңлатма бирелә: **йога** (рус/ санскрит) — үҙ-үҙеңде рухи, психик һәм физик яҡтан тота белеү ысулдары, юлдары тураһында боронғо һиндтарҙа таралған дини-философик тәғлимәт. Билдәле булыуынса, йогтарҙың төп маҡсаты — йәшәү нигеҙе, шарты булған йән, энергия ҡеүәтен уятып, бер нөктәгә туплап, ҡоймостан (копчик) алып (ете рухи үҙәк — чакраларҙы таҙартыу юлы аша) баш түбәһенә — мейегә тиклем күтәреү һәм йыһан энергияһына тоташтырып байытыу, шул энергия иҫәбенә рухыңды күтәренке тотоу. Беҙҙең телебеҙҙә «йоғоу», «йоғонто», «йоғонос» кеүек тамырҙаш һүҙҙәрҙең бер мәғәнәһе лә ошоға тап килеп тора: «аңға һеңеү», «күңелгә ятыу», «файҙалы булып, үҙләшеү», «тәьҫирле булыу» һ.б.

Йоганың төп маҡсаты — кешенең рухи кимәлен, аңын үҫтереү булһа, йөкмәткеһе — бөтә ҡылған эштәрең өсөн Йыһан алдында **карма законы** буйынса яуап тотоп, хөкөм ителеүеңде белергә өйрәтеү. Ябайлаштырып әйткәндә: «Ниндәй сәбәп ҡылғанһың, шуның һөҙөмтәһен күрерһең». Тереклек донъяһында көн күреүселәрҙән бер генә йән эйәһе лә был ҡанундан азат түгел. Башҡорт халҡының

ауыҙ-тел ижадынан бик күп әйтемдәр һәм мәҡәлдәрҙең мәғәнәүи яҡтан ошо ҡанунға тап килеүе иғтибарға лайыҡ: «Ни сәсһәң — шуны урырһың», «Алтылағы — алтмышта», «Арпа сәсеп, бойҙай үҫмәҫ», «Орлоғона күрә — емеше», «Ел иҫмәй, япраҡ һелкенмәй», «Утһыҙ төтөн булмай», «Ишәк маҡтанып, толпар булмаҫ», «Дуғаңа ҡарап ҡыңғырау таҡ», «Далаһына күрә — ҡуйы, заманына күрә — туйы», «Баҡырҙы күпме ағартһаң да, көмөш булмаҫ», «Ҡанға һеңгәнде йыуып та, юнып та бөтөрөп булмай», «Кешегә соҡор ҡаҙыма — үҙең төшөрһөң» һ.б.

Үҙ телебеҙҙәге «ҡармаҡ», «ҡармау» һүҙҙәренең дә кемдеңдер билдәле бер сәбәптән, уҫал ниәттән ҡылған ҡылығы өсөн кире ысҡынмаҫлыҡ булып эләгеп, язаға тарыу осрағы менән бәйле: мәҫәлән, балыҡ, аҙыҡҡа ымһынып, ҡармаҡҡа эләгә. Шулай булғас, ошо ябай миҫалдар аша ата-бабаларыбыҙҙың исламғаса дини-фәлсәфәүи белемдәре, этик нормалары тураһында күҙаллауы бер ҙә ҡатмарлылыҡ тыуҙырмай: ул — йога тәғлимәте булып сыға!

Тимәк, башҡорт әҙәби теленең ҡулланыу даирәһен киңәйтеү, уны сәхнә теле, матбуғат, көнкүреш һөйләше генә булып ҡалыуҙан һаҡлап алып ҡалып, уға йән өрөү, тулы ҡеүәтенә эшкә ҡушыу зарураты тыуғанда, төрлө сәбәптәр арҡаһында ҡулланылыштан сыҡҡан һүҙҙәрҙең тәү мәғәнәләрен киренән тергеҙеү — отошло алым. Был өлкәлә Салауат Ғәлләмов башлаған санскрит-башҡорт һүҙлеген төҙөү — тарих һандығының төбөндә һаҡланған ынйы-мәрйендәребеҙҙе, йәғни һүҙ байлығыбыҙҙы ҡулланылышҡа сығарып, телебеҙҙе байытыу сараһы ул.

Көньяҡ Уралдан 3-4 мең йылдар элгәре күсеп киткән һинд-иран телле арийҙарҙың ырыу башында тәүбабалары Ҡурыу батша торған. ( **Kuru**: 1)древний царь, основоположник рода Куру — героев «Махабхараты»; 2) род Куру, потомки Куру, кауравы). Салауат Ғәлләмов үҙенең хеҙмәттәрендә Ҡурыу арийҙарының күсеп киткән бер өлөшөнөң боронғо Месопотамия ерҙәрендә Ҡурдистан илен барлыҡҡа килтергән, ә бөгөнгө көндәрҙә Төркиә, Сирия, Иран, Ираҡта бүленеп ҡалған ҡурдтар икәнлеген дә раҫлай. Уларҙың тәүтөйәге Уралда ҡалып, әлегәсә шул ерҙә көн иткән төркөмөн **баш ҡурт** (т — күплек ялғауы) тип атау — **башҡорт** этнонимының килеп сығышын аңлатыуҙа дөрөҫлөккә тап килә. Ә улары иһә көнсығыштан, Урта Азия, Алтай тарафтарынан күсеп килгән төрки ҡәбиләләр ҡыҫымында ҡалып, боронғо туған иран-арий теленән алыҫлашҡан. Бына ҡайҙан килә ул «Айырылғанды — айыу ашар, бүленгәнде — бүре быуыр» тигән мәҡәл!

Әммә ләкин, йога тәғлимәте өйрәткәнсә, донъяла бер нәмә лә эҙһеҙ юғалмай. Туған телебеҙҙә **«ҡур»** тамырлы һүҙҙәрҙең бик күп һаҡланыуы — ошоға миҫал:

Башҡорт теленең һүҙлегендә **«ҡур»** һүҙе түбәндәгесә аңлатыла: 1) Ҡымыҙ, бал, ҡатыҡ, ҡамыр әсеткеһе; 2) Башланғыс, нигеҙ булған мал-мөлкәт, мая // Ҡур аҡса. Ҡур мал.

Тимәк, был осраҡта **«ҡур»** — «башлап ебәреүсе», «тоҡом башлаусы», «нигеҙ һалыусы», «барлыҡҡа килтереүсе», «күбәйеүгә, таралыуға сәбәп булдырыусы» тигән мәғәнәлә ҡулланыла. Был һүҙҙең мәғәнәһе йога тәғлимәтендәге **сәбәп — эҙемтә** бәйләнешенә ишаралай (**Санскрит: karya** — работа, обязанность, намерение, цель, результат; **karya-karana —** особая причина**,** причина-следствие**; karu** — поэт, певец, ремесленник, мастер, профессионал**; ҡar** — 1) делать, совершить, изготавливать, обработать, применять; башҡортса «эшләп ҡарау», «тәмләп ҡарау» һ.б. ошондай һүҙбәйләнештәрҙә күренә; 2) сыпать, высыпать, бросать; сағыштыр: башҡортса «ҡар» (снег) һүҙенең мәғәнәһенә тап килә; **kratu** — сила, мощь, способность, разум, желание, стремление. Беҙҙең телдә **«ҡарыуы ҡайтҡан», «ҡарыу китеү»**, **«кәре китеү»** кеүек төшөнсәләр бар. Тимәк, кәр — ҡар — ҡур — бер һүҙҙең төрлө формалары).

**Ҡураҙ** /фарсы/ — 1. Әтәс. 2.Ирҙәрҙең енси ағзаһы**. Ҡураҡ —** ҡурға ҡалдырылған тоҡом айғыры. (Миҫал: «Беҙҙең аймаҡты ғына алайыҡ: өйәрембикәләр бер ҡураҡтарына терәлеп ҡалды, Яҡшыбикә менән Мәрғүбәнең атлыҡсалары буш». М. Ямалетдин, «Ҡуласа».)

**Ҡурлы** — мал-мөлкәтле, бай; бәрәкәтле, үрсемле. Был тамырҙаш һүҙҙәр ҙә ошо уҡ мәғәнәгә эйә.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 150



Ә хәҙер **«ҡур»** һүҙенең икенсе аңлатмаһына туҡталайыҡ: **Ҡур** – ниндәйҙер эш-хәлдән ҡалған эҙемтә; шауҡым. (“Ҡыйшыҡ уҡ атҡан менән тура китмәҫ, күңелдән яман һүҙҙең ҡуры китмәҫ”. Аҡмулла.)

**Ҡурған** – бейек итеп өйөлгән боронғо ҡәбер. Кешенең ғүмере аҙағына еткәс, уның физик тәне йәненән айырылып, ер менән ҡатыша. Боронғо арийҙар кешене был тормош өсөн кәрәк булған бөтә матди байлығы менән бергә күмеүгә лә ҙур әһәмиәт биргән: тән – ваҡытлыса, йән – мәңгелек. Йогала бер сәбәптең ниндәй эҙемтәгә илтеүе – киләһе хәл-ваҡиғаға икенсе сәбәп тыуҙыра, һәм был өҙөлмәҫ сылбыр Сансара тигән матди донъя ҡуласаһын барлыҡҡа килтерә. Беҙҙең халыҡта был турала: «Донъя – ҡуласа, әйләнә лә бер баҫа» тигән әйтем бар.

**Ҡурпы –** сабылған ерҙә яңынан үҫкән йомшаҡ үлән йәки йәш иген.

**Ҡурсаҡ –** үҫеш осороноң бер мәлендә ашамай, ҡуҙғалмай көпкә төрөнөп ятҡан бөжәк, йәғни үҫештең яралыу этабы, башы. (**Санскрит: kurca –** связка, пучок, охапка, вязанка; **kurcaka –** щётка, кисть.) Балаға бәләкәй кеше ҡиәфәтендәге уйынсыҡ ҡурсаҡты бер тотам йүкә һалабашын төйөнгә бәйләп, суҡлап эшләп биргәндәр бит.

Был миҫалдарҙан күреүебеҙсә, **«ҡур»** – күҙгә күренмәгән, ләкин уның барлығына нескә кимәлдәге эске тойомлау аша ышанырлыҡ ниндәйҙер бер **тәүэлемент** тип атап була. Уның булыу-булмауын иҫәпкә алып, артабанғы тамырҙаш һүҙҙәрҙе мәғәнәһе буйынса ҡапма-ҡаршы ике төркөмгә бүлеп була:

I. **Ҡурсалау, ҡурсыу** – хәстәрлек тойғоһо менән тел-тештән, хәүеф-хәтәрҙән ҡәртәләү, аяу, яҡлау. **Ҡурғау –** яуҙан, бәлә-ҡазанан һаҡлау. **Ҡурғауыл –** яуға, һөжүмгә ҡаршы ҡуйылған һаҡ, нығытма. Был һүҙҙәрҙең мәғәнәһенән аңлашылыуынса, **«ҡур»** – ыңғай сифатҡа эйә булған **«ҡот»** төшөнсәһенә тап килә.

II. **Ҡурҡыу –** йән өсөн шомға төшөү, шөрләү тойғоһо кисереү; билдәле бер шартҡа түҙмәй бирешеү, сигенеү. **Ҡурҡыныс –** күңелгә шом, ҡурҡыу хисе һалған; кешене ауыр кисерештәргә, ҡыйын, хәүефле шартҡа ҡуйған хәүеф-хәтәр. Сағыштырайыҡ: (**санскрит: kurupa –** плохого вида, некрасивый.) был осраҡта **«ҡурһыҙ»** булыу – ҡотһоҙ, яҡлауһыҙ ҡалыуға тиң.

Был миҫалдарҙан аңлашылыуынса, **«ҡур»** – йәндең тереклек итеүенә булышлыҡ итеүсе һәм тик нескә кимәлдә тойолоусы бер көс, тәнде йәшәү сығанағы булған **йылылыҡ** менән тәьмин итеүсе **кеүәт** тип аңлап була. Ошо күҙлектән сығып ҡараһаң, **«ҡур»** һүҙенең иҫкесә **«ҡуҙ»** йәки **«ҡыҙыу, утлы күмер»** мәғәнәһен киләһе һүҙҙәрҙә күрергә мөмкин:

**Ҡурау** – ҡояшта үтә ныҡ кибеү, ҡороу;

**Ҡурылыу** – кибеп ҡорошоу;

**Ҡурыу** – ҡорола йәки майға ҡыҙҙырыу;

Бөрйән районындағы **Ҡурыуҙы** тауының атамаһы легенда буйынса түбәндәгесә аңлатыла: дошманы Ҡараҡөләмбәт тарафынан үлтерелгән Ҡыпсаҡ ырыуы батыры Бабсаҡ бейҙең ҡатыны ауырындағы балаһы менән уның ҡулында ҡала. Ошо бала тыуып, үҫеп, буй еткергәндән һуң дөрөҫлөктө белгәс, атаһы тип йөрөгән дошманы Ҡараҡөләмбәттән үс алыуҙы тау башына мендереп, тереләй утта **ҡурыу** аша башҡара.

**Ҡурҙаҡ** – утта ҡурылған ит;

**Ҡурғы** – бойҙай, борсаҡ һ.б. шуның һымаҡ нәмәне ҡыҙҙыра торған йәйпәк ҡаҙан;

Сығышы менән Бөрйән районының Брәтәк ауылынан Бикмәтова Гөлсирәнән яҙып алынған халыҡ йырында ошоға оҡшаш тамырлы һауыт-һаба исемен атаған һүҙ ҙә иғтибарҙы үҙенә тарта:

*Самауырҙар ҡайнап, сәйҙәр бешә*
*Аҡ курнисәләрҙең эсендә.*
*Ғүмерҙәрем үтә, йөрәгем яна*
*Тар күкрәккәйҙәрем эсендә.*

**Ҡурмас** – бөтәүләй ашау өсөн ҡыҙҙырылған бойҙай. Боронғо дин йолаһы буйынса, 21 мартта, көн менән төн тигеҙләшкән ваҡытта, Науруз байрамында әҙерләнә

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 151



торған төп ризыҡ. «Бойҙай уңһа – аш булыр, уңмаһа – таш аш булыр», – тип теләктәр теләгән утҡа һәм ҡояшҡа табыныусы ата-бабаларыбыҙ. Был йола **орлоҡ культы** менән бәйле, сөнки бойҙай (ҡурмас) – буласаҡ уңыштың башы. Халҡыбыҙҙың боронғо замандарҙа уҡ иген үҫтереү менән шөғөлләнеүен түбәндәге һүҙҙәрҙең оҡшашлығынан да күреп була: **«sasya»** (санскрит) – **посев**, всход, урожай зерна, злаков; башҡортса шулай уҡ һаҡланған: **«сәсеү»**.

**Ҡурғаш** – утта тиҙ ирееүсән, еңел сүкелә торған металл. Тарихтан билдәле булыуынса, арийҙар – металл эшләү серҙәрен тәүгеләрҙән аҫҡан халыҡ.

**Ҡурай –** сатыр сәскәле үләндең кибеп, ҡороған һабағынан, көпшәһенән эшләнгән уйын ҡоралы.

Үрҙә һанап үткән «ҡур» тамырлы һүҙҙәрҙең барыһының да ҡояшҡа, утҡа ҡағылышлы нәмәләрҙең атамаһы булыуы – уларҙың башҡорттарҙың боронғо диненә бәйле терминдар икәнлегенә дәлил. Шулай итеп, арийҙарҙың тәүбабаһы **Ҡурыу батшанан** таралған **ҡурыу** ҡәбиләләренең Көньяҡ Уралда, баш йортта, йән төйәгендә ҡалып, бөгөнгәсә шунда йәшәгән өлөшө – **баш ҡурт**, йәғни **башҡорт** булып сыға. Шул уҡ ваҡытта башҡорттоң милли музыка ҡоралы, Башҡортостан Республикаһының дәүләт символдары булған Гербында һәм Флагында сағылыш тапҡан ҡурайыбыҙҙың исеме лә – халыҡтың үҙатамаһы менән тамырҙаш һәм мәғәнәләш булып сыға!

Ҡурай тураһында риүәйәттән белеүебеҙсә, был үҫемлектең **ҡыуарған** йәки **ҡояшта ҡураған** көпшәһендә ел өрөүҙән барлыҡҡа килгән моңға яҡын наҙлы тауышын оҡшатып, беренсе башлап ишеткән егет ҡырҡып ала. Тәү башлап ҡолаҡҡа яғымлы был тәбиғи ауаз ата-әсәһен, тыуған ерен һағыныу хистәренән тулышҡан күңелде бушатыу хеҙмәтен үтәй. Ул моң күңелдә ярала, тының менән буш көпшәләге һауаның көсө менән яңғырап, тирә-йүнгә тарала. Беренсе ҡарашҡа был илаһи моң яралыу шул тиклем ябай тойола – тәбиғи үлән көпшәһен ҡырҡып ал да уйна! Ләкин бөйөклөк – ябайлыҡтың үҙендә, тиҙәр. Ҡурай – күңелдәге моңдо көсәйтеп, тышҡа сығарыуҙа ярҙамсы ҡорал ғынамы әллә? Ҡурай тауышы – эске моңдоң тышҡы ауазы, эҙемтәһе бит. Юҡ, әлбиттә! Былай бүлеп ҡарау – илаһи моңдоң бөтөнлөгөн бүлгеләүгә тиң булыр ине, уларҙы бер-береһенән былай айырыу мөмкин түгел. Тап йогалағы кеүек: Юғары Андың, Йыһан энергияһының медитация ваҡытында Кеше аңына тоташыуы. Медитация – фани донъя тәьҫиренән билдәле бер ваҡытҡа ваз кисеп, онотолоп, эске күңел донъяһына иғтибарыңды йүнәлтеү. Был хәлгә күҙҙәрҙе йомоп, аяҡтарҙы салып, кәүҙәне туры тотоп ултырған килеш керәләр. Боронғо ҡурайсыларҙы ла бит тәьҫирләнеп, ошо рәүештә ултырып уйнаусы итеп һүрәтләйҙәр. Тәьҫирләнеү, онотолоу, тышҡы донъяның ығы-зығыларынан күпмелер ваҡытҡа арындыра алыу маҡсатына тап килгәнгә күрә, ҡурай уйнау йә булмаһа уның моңон тыңлау – үҙе медитация бит ул. Шуға күрә ҡурай моңо милләт, йәш айырмаһына ҡарамай, бөтә кешеләргә лә берҙәй тәьҫир итә. Ә ул моңдо ҡурай аша тыуҙыра алыу әләте тик башҡортҡа ғына хас булыуы аңлашыла ки: тәбиғи үләндән моң ҡоралы я ауҙы Алла ы Тәғәлә тик уға тәғәйен иткән. Йога өйрәткәнсә, кем ниндәй сәбәп ҡылған – өҙөмтә ен тик үҙе кисерер.

Шулай итеп, ошо рәүешле беҙ, «башҡорт» этнонимы менән уның тоғро юлдашы, милли ғорурлығы – ҡурайҙың атамаһы бер тамырҙан икәнен иҫбатланыҡ, тип әйтә алабыҙ. Уралды йәнтөйәк иткән башҡорт барҙа – ҡурай булыр, ҡурай булһа – башҡорт йәшәр! Бар дәүерҙәр дауамында Йыһан моңо, Йыһан аңы менән рухиәтебеҙҙе тоташтырып, көйләп тороусы Ҡурайыбыҙға һәм ҡурайсыларыбыҙға дан!

Хәҙер Көньяҡ Уралды төйәк иткән арий телле куру ҡәбиләенең рухи мираҫы – йога тәғлимәте нигеҙендә барлыҡҡа килгән буддизм диненең нигеҙендә ятыусы тәрән мәғәнәле концепция – **кармаға** ентекләберәк туҡталайыҡ. Шул уҡ ваҡытта йога һәм буддизмдың терминдарын башҡорт теленең һүҙ байлығынан эҙләүҙе дауам итәйек.

Карма түбәндәге ҡанундарҙы үҙ эсенә ала:

1. Йән **сансарала** (алты өлөштән торған матди донъя тәгәрмәсе) күп тапҡырҙар, бер туҡтауһыҙ яңынан-яңы рәүештә тыуа килә (реинкарнация); был тыуымдарҙың тәртибе карма аша хәл ителә;

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 152



2. Ниндәй генә эш-хәл ҡылһаң да, һөҙөмтәһе тик үҙеңә кире әйләнеп ҡайта;
3. Карманды юҡҡа сығарыуға, унан ирекле булыуға тик изге ғәмәлдәр ҡылыу нигеҙендәге эволюция юлы менән килергә мөмкин. Был осраҡта йән Юғары Аң тыуҙырған донъяла Камил, Ысын, тулы Азатлыҡ, Бәхет һәм Шатлыҡҡа өлгәшә.

Шулай итеп, карма законынан азат булыуҙы үҙмаҡсат итеп ҡуйған йога тәғлимәте һәм уның нигеҙендә барлыҡҡа килгән буддизм йәнде фани донъяның 6 ҡаттан торған ҡуласаһынан, йәғни **сансаранан** ысҡынырға әҙерләй. Санскрит телендә **sancara** – 1) странствующий, 2) движение. (Иғтибар итегеҙ: һүҙҙең беренсе өлөшө **«сан»** – башҡорт телендә **«ысын»** һүҙе менән тамырҙаш, ә **«сар»** – әйләндереп балта, бысаҡ үткерләй торған түңәрәк ҡайраҡташ. «Сарлау» – ҡаты, тупаҫ әйберҙәрҙе үткерләү, ҡырлау, шымартыу, ялтыратыу, таҙартыу.) Үҙ гонаһтары, ҡылған хаталары өсөн ысынбарлыҡта йәки сансарала ҡат-ҡат тыуып, уның ғазаптары, михнәттәре аша үтеп тәүбәгә килгән йән таҙарына, тормош тәжрибәһенән арынып, үҙенең тәүбулмышына – азатлыҡҡа, бөйөклөккә ынтыла.

Түңәрәктең үҙ радиусы ярҙамында алты өлөшкә бүленеүе, һыу парҙарының туңған саҡта алты саталы ҡар бөртөктәренә әйләнеүе, бал ҡортоноң төҙөк алты мөйөшлө ояларҙан торған кәрәҙ ҡойоуы – ысынбарлыҡтың, йәғни сансараның моделе түгелме ул? Ни өсөн башҡорт халҡының ете һанын изгеләштереүен тойомларға була был миҫалдарҙан: «Донъя – ҡуласа, әйләнә лә бер баҫа» тәртибенә буйһонған фани донъяның сынйырлы ирекһеҙлегенән, йәғни алты ҡатлы сансаранан ысҡынып, Күктең етенсе ҡатына, Яҡтылыҡ, Азатлыҡ, Камиллыҡ донъяһы – Юғары Аңға тоташыуҙы күҙ уңында тотоу был. Аҫалы балаҫтарҙа, таҫтамалдарҙа, шаршауҙарҙа ҡулланылған алты мөйөшлө төҙөк биҙәктәр ҙә – фани донъяның моделе ул. Шуға күрә лә улар быуындан-быуынға үҙгәртеүһеҙ күсерелә, тапшырыла килгән.

Ә хәҙер йога тәғлимәтенең төп асылы булған чакраларҙың санскрит атамаларын башҡорт теленең һүҙ ҡаҙнаһынан юллап ҡарайыҡ:

1. **Муладхара – (санскрит: mula** – корень, основание, происхождение, наследственное имущество; башҡорт телендә «байлыҡ-муллыҡ» төшөнсәһенә тап килә; **hari** – жёлтый; башҡорт телендә «һары» – төҫ; **hara** – берущий, лишающий, уничтожающий, разрушающий; башҡорт телендә «һарыу ҡайнау» мәғәнәһенә тап килә) – йән эйәләренең һөйәктәрен, ит-мускулдарын, кимерсәк, тарамыштарын барлыҡҡа килтереүсе, арҡа һөлдәһенең төбө – ҡоймоста урынлашҡан көс-ҡеүәт үҙәге. Тәбиғәтте барлыҡҡа килтереүҙә ҡатнашҡан 5 тәүэлементтың беренсеһе – Ер элементына тап килә. Йән эйәләре үлгәс, тәндең ошо өлөштәре киренән тупраҡҡа (прах), балсыҡҡа әүерелә. Был чакра физик тәндең үҫеше, сәләмәтлеге өсөн яуаплы. Еҫ һиҙеү һәләте лә уның менән бәйле. Кешенең аңы ошо чакрала ғына туплан-һа, ул физик яҡтан көслө, баһадир ҡиәфәткә эйә була. Дошманын ботарлап ташлау – уға бер ни түгел. «Асыуҙан һарыуы ҡайнай» тигән төшөнсә улар.

Аңы муладхара кимәлендә булғандарҙың унан өҫтәге чакралары ябыҡ була, һәм, әлбиттә, өҫтәгеләрҙең тормошо, уларҙың һәләтенә хас хәл-торош был кимәл кешеһе өсөн түгел.

2. **Свадистана – (санскрит**: **svadisthana –** вкусный, сладкий, милый; **sva** – «һыу», **vadi –** «вода», **sthan –** тупланыу урыны, урынлашыу ере: гөлостан, Башҡортостан һ.б., **syanda –** течение, стекание, капание, сок; **asyandista –** течь, **stan (һинд-иран) –** аҫтан, аҫ яҡ.) Икенсе тәүэлемент – һыу элементы менән бәйле: һейҙек ҡыуығы, бөйөрҙәр, түллек ағзаларының эшмәкәрлегендә, ҡан, шайыҡ, төкөрөк, сперма, лайла кеүек шыйыҡсаларҙы барлыҡҡа килтереүҙә ҡатнашыусы ҡеүәт үҙәге. Тәм тойоу һәләтен дә ул тәьмин итә. Енси яҡтан өлгөрөү осоронда аң ошо чакрала туплана, ҡапма-ҡаршы енескә тартылыу, ҡыҙыҡһыныу тойғоһо уның менән бәйле. Араҡы, һыра кеүек эсемлектәрҙе ҡулланыу был тойғоларҙы ҡуҙғыта, енси теләктәрҙе көсәйтә. Был кимәлдә мауығыу көс-хәленде түбән маҡсаттарҙа сарыф итеүгә килтерә, шәхси яҡтан үҫеүҙе туҡтата. Йәшәү рәүешендә үҙгәртеү, интеллект кимәленде күтәреү өсөн свадистана тәьҫиренән арынып, сексуаль энергиянды киләһе чакраға – манипураға йүнәлтеүгә ирешергә кәрәк.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 153



3. **Манипура – (санскрит: man –** знать, думать, считать, полагать, рассматривать; **manas** – дух, душа, ум, разум, замысел, желание, намерение; **manu –** мудрый, родоначальник рода человеческого, человек; **manu ja –** потомок Ману**,** человек; **bahu mana** – высокое мнение, глубокое уважение к кому-либо. Сағыштыр: Бaһуман – башҡорттарҙа киң таралған исем; **pura –** крепость, башҡортса: **бура** – бүрәнә ҡоролма, ҡәлғә.)

Башҡорт телендә **ман-мән** ялғаулы һүҙҙәрҙең мәғәнәһе кешенең ниндәйҙер сифатҡа эйә булыуын күрһәтә: ҡаһарман, уҙаман, эҙәрмән, үҫәрмән, көйәрмән, төркмән, сәйәсмән, шаман, басурман, алабарман, байман. Сит телдән килеп кергән «супермен» һүҙе лә ошондай уҡ һүҙ яһалыш тәртибенә буйһонған.

Был ялғау топонимдарҙа ла йыш осрай: Нуриман, Сытырман, Ҡарлыман.

Аңды манипура кимәленә тиклем күтәрә алыу һәләте йән эйәләре араһында тик кешегә генә бирелгән.

Манипура – тәндең йылылығын тәьмин итеүсе **ут** элементы менән бәйле. Ҡабул ителгән аҙыҡты эшкәртеүсе **ут** ҡыуығы, ашҡаҙан, эсәктәр эшмәкәрлеген көйләүсе, матдәләр алмашыныу процесын яйлаусы ҡеүәт үҙәге ул. Көс-ҡеүәте, аңы манипура кимәлендә тупланыуға өлгәшкәндәр – фән-ғилем өлкәләрендә уңыш яулаусылар. Төҫтәрҙе айырыу, таныу ҙа – манипураның ҡатнашлығында. Күҙлек кейеүселәр кемдәр араһында күберәк? Күреү һәләтенең кәмеүе – был чакраның зарарланыуы, артыҡ көсөргәнеш кисереүҙән көйһөҙләнеүенән. Был кимәлдә тик ашау-эсеү, матди байлыҡ туплау кеүек фани донъяның алдатҡыс мәшәҡәттәре менән артыҡ мауығып китеп, манипураның кире йоғонтоһо аҫтында ҡалыусылар – рухи яҡтан артабан үҫеүҙән туҡталыусылар.

4. **Анахата (санскрит: an –** дышать, **ana** – дыхание, **hatta –** рынок, базар; «хата» (рус) – йорт, ихата; **anah** – привязывать; «Ана күңеле – балала, баланыҡы – далала», «Ана һөтө менән кермәһә, тана һөтө менән кермәҫ» тигән мәҡәлдәрҙән «ана» – баланы фани донъяға тыуҙырыусы, «кендеген ергә бәйләүсе» «әсә» мәғәнәһендә уның боронғораҡ варианты булып килеп сыға.) – **haya, ел** элементынан тороусы ҡеүәт үҙәге. Күкрәк тәңгәлендә урынлашҡанлыҡтан, һулыш ағзалары (үпкә, йөрәк, ҡан тамырҙары) өсөн яуаплы. Бармаҡ остары менән ҡағылыу, тире аша һиҙеү һәләте анахата ярҙамында бирелә. Һауа, тын – еңел элемент, «еңеллек» һүҙенең синонимы «анһат» һүҙе бына ҡайҙан килеп сыҡҡан! Аңы, энергияһы анахата кимәлендәгеләр кисергән мөхәббәт, яратыу, һөйөү хисенә юғарылыҡ, бөйөклөк, изгелек хас. Дөйөм кешелек, Тәбиғәт, Йыһан алдында яуаплылыҡ тойғоһо үҫешкән уларҙа. Тик кемгәләр йә нимәгәләр ҡарата мөнәсәбәттә үтә эҫенеү, ниндәйҙер идеяға үтә бәйләнеү – был кимәлдән өҫкө чакраларға юлды яба, сөнки көс-кәр ошо маҡсаттарға ярашлы түгелә. Йән теге донъяға киткәндә ошо чакра аша сыҡһа, ҡайтанан кеше булып тыуыу мөмкинселегенә эйә була, тиҙәр.

5.**Вишудда –** бишенсе элемент: «бушлыҡ». (**Санскрит: vish** –пространство, башҡортса **«буш, бушлыҡ»; vicuddhi** – полное очищение (рел.)**,** чистота, святость, совершенное знание, удаление сомнений; **vasu –** 1) добрый, благосклонный, 2) добро, клад, богатство; **vasuda** – ниспосылающий богатства; **vasu-dha –** 1) содержащий сокровища, щедрый, 2) земля, страна, государство; **vasu-dhara** – держащий землю, царь – **«батша»(!)**; **yacoda** – приносящий славу, прославленность, известность.)

Физик тәндең буш, ҡыуыш ағзалары (ауыҙ, танау, ҡолаҡ ҡыуышлыҡтары) ярҙамында тауыш-өн сығарыу, һөйләү, ишетеү һәләттәре вишудда менән бәйле. Уның ҡеүәте ярҙамында власть яулауға («батша» булыу!) йә булмаһа тыумыштан матур тауышың ярҙамында киң танылған йырсы, тәбиғәттән бирелгән ишетеү һәләтең нигеҙендә бөйөк композитор, телмәр оҫталығың ярҙамында абруйлы сәйәсмән булыуға өлгәшергә мөмкин. Ләкин «бөйөклөктөң», «донъяға хужа булыуҙың» тәмен тойоп, уны тик кире сифатта үҙ маҡсатында ғына файҙаланыу – кешене шәхес булараҡ емерелеүгә, кирегә тәгәрәүгә килтерә. «Түрә булһаң, сабатаңды түргә элмә»,

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 154



– тиҙәр был осраҡта. Тимәк, был һәләттәр кешелеккә, халыҡҡа юғары маҡсаттан сығып хеҙмәт итеүгә, уның рухи кимәлен күтәреүгә булышлыҡ итеү өсөн бирелә.

6. **Аджня** – (**санскрит**: **ajапа** – 1) одинокий, 2) безлюдный; **ajапапа –**понимание, осознание; башҡорт телендә «**аң**» һүҙенә тура килә.) Был чакраның урынлашҡан урыны – ике ҡаш араһы, гипофиз өлкәһе. Аңын, көс-ҡеүәтен был тәңгәлгә күтәреп, туплай алғандар өлөшөнә сикһеҙ мөмкинлектәр асыла; ғәҙәттән тыш һәләттәре менән башҡаларҙы хайран итер әүлиәләр – ошо кимәл шәхестәре. Улар кешенең уйын ара йыраҡлығына ҡарамай уҡый, «өсөнсө күҙ» ярҙамында бөтә йәнле һәм йәнһеҙ нәмәләрҙе, кешеләрҙе үтәнән-үтә күрә, үткәнде һәм киләсәкте асыҡтан-асыҡ күҙаллай. Дауалау һәләтенә эйә булалар. Ғүмерҙәренең оҙонлоғон үҙ теләктәре менән үҙҙәре хәл итәләр.Был чакраға тап килгән тәбиғи элемент юҡ. Шуға күрә фәҡәт ошо кимәлдә аң ысын азатлыҡҡа өлгәшә, йәғни сансара ҡуласаһынан, карма законынан ирекле ундай бөйөк кешеләр. Юғары Аң менән тоташып, күктең етенсе ҡатына һәм унан да юғарыраҡ донъяларға күтәрелеү лайыҡ бындай йәндәргә.

7.**Сахасрара – (санскрит: sahasra –** 1) тысяча, 2) большое количество; **sahasraka** – тысячеголовый; **sahasrakara** – солнце, тысячелучистый**; saha –** сильный**; «соха-тый»** (рус.) – 1) имеющий развилину, раздвоение; 2) рогатый, с ветвистыми рогами; 3) лось; башҡорт телендә **«сата» –** бер төптән сыҡҡан йәки барыһы бер тиң булған тармаҡ; **«сатыр»** – 1) сәскәһе һабаҡ осонан нур һымаҡ төрлө яҡҡа таралып үҫкән ойошма сәскәле үҫемлектәр ғаиләһе атамаһы; 2) ағастың ҡояштан ышыҡ яһап торған ботаҡ, япраҡтары; сатҡы – осҡон, ут, яҡтылыҡ, нур; **sata** (санскрит) – коса, грива, множество, стая, рой; башҡорт телендә «сәс саталаныу», «сәсте сата-лы итеп үреү» тигән һүҙбәйләнештәр бар; **sattva** (санскрит) – свет, луч; башҡортса «ут, утын **сат**ырҙап яна» тип әйтәбеҙ бит).

Был чакра баш түбәһендә урынлашҡан. Йога тәғлимәте өйрәткәнсә, аңын, көс-ҡеүәтен ошонда туплауға өлгәшкәндәр – пәйғәмбәрҙәр кимәлендәге ер кешеләре – кешелекте иманһыҙлыҡтың иң түбән дәрәжәһенә етеп, юҡҡа сығыу кимәленә еткән осраҡтарҙа ҡотҡарыу, тәүбәгә килтереү өсөн был донъяға үҙ теләктәре менән тыуалар. Улар ярҙамында донъяуи диндәр барлыҡҡа килгән. Сахасрара аша кеше аңы Юғары Аңға тоташа: был – йоганың иң бейек баҫҡысы. Йәнен ошо чакра аша сығара алыусылар Нирванаға өлгәшә. (Санскрит: **nirvапа** – 1.1) исчезнувший; 2) умерший; 3) прекратившийся; 2.1) исчезновение; 2) конец, прекращение; 3) нирвана (спасение от перерождений); 4) удовлетворение, ублаготворение; 5) блаженство, вечный покой.) Йога тәғлимәте һәм буддизм дине буйынса, **нирвана** – тик яҡтылыҡ, нурҙан ғына яралған бушлыҡ, Юғары мәғлүмәт донъяһы. Шулай итеп, бында ла ике ят һүҙ тамырҙаш килеп сыға.

Ә хәҙер сахасрара чакраһының символын башҡорт халҡының борондан табынған культ әйберҙәрендә, ғөрөф-ғәҙәттәрендә эҙләп ҡарайыҡ. Шуларҙың береһе – **ҡурай культы.** Тәбиғи ҡурай сәскәһенең сатыр сәскәлеләр ғаиләһенә ҡарауы һәр кемебеҙгә мәғлүм. Яҡтылыҡ нурҙарын бар ғаләмгә һипкән میң саталы ҡояштың үҙе менән оҡшаш был үҫемлектең сәскәһе. Ҡояш яҡтылығын, йылылығын тойоп, яҙ башында ерҙән шытып сығып, буй еткереп, орлоҡтарын ҡойоуҙан һуң ҡураған көпшәһе аша моң ҡойорлоҡ булып өлгөрөп етә. Ҡырҡып ал да уйна! Башҡорт халҡында **ҡурай культы болан культы** менән бик боронғо замандарҙан килеүенең сәбәбе төҫмөрләнә бирә кеүек. Йога тәғлимәтенә табыныусылар уның иң юғары кимәле – сахасрара чакраһына иғтибарын йүнәлтеп, шунда туплар өсөн ҡулланған шартлы билдә – баш түбәһе өҫтөндә ике ҡулдың бармаҡтарын тарбайтып, болан мөгөҙөнә оҡшаш мудра ҡулланыуы менән сағыштырып аңлатып була быны. «Урал батыр» эпосында йыландар батшаһы Ҡәһҡәһәнең улы Зәрҡум, иң сибәр, иң ҡыйыу кешегә әүерелер өсөн, болан йотоп маташа. «Ни өсөн кеше булырға теләгән йыланға фәҡәт боланды йоторға кәрәк булған? Күрәһең, әүәл халыҡта, кеше ҡиәфәтенә инә алған болан был һәләтен башҡа хайуандарға ла тапшыра ала, тигән

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 155



хөрәфәт йәшәгән», – тип яҙҙы был турала И.Илембәтова («Йәшлек», № 35, 2006 йыл). Умыртҡа бағанаһы эсендәге аҡ йылан рәүешендәге арҡа мейеһе буйлап түбәләге баш мейеһенә, сахасрараға, тиклем энергиянды күтәреү аша аң кимәлендә үҫтереү, йәндең юғарыраҡ донъяларға артылырға тырышыуына барәбәр был миҫал. Сөнки юғарылыҡҡа өлгәшеү мөмкинлеге тик ошо юл аша башҡарыла – был йога тәғлимәте! **Сатыр** сәскәле ҡурайҙы һәм **саталы** мөгөҙлө боланды изгеләштереү – йогалағы сахасрара культы ул. Сатҡыға, йәғни яҡтылыҡҡа, утҡа, нур донъяһы – нирванаға табыныуҙың сағылышы.

Ҡурайҙың көпшәле уйын ҡоралы булыуы ла осраҡлы түгел. Көпшә – ҡоймостағы йоҡо хәлендәге **кундалини** энергияһын уятып, умыртҡа бағанаһы буйлап күтәрелеүен, йәғни түбән кимәл энергияны унын юғары, нескә формаһына әүерелеүен сағылдырған модель. Ҡурай көпшәһе эсендә энергия (ҡеүәт) тауыш формаһында өргән тын аша моң яралта.

Хәҙер ҡурайҙа тауыш сығарыу барышына күҙәтеү яһайыҡ. Иң аҫҡы тишектән, иң түбән тауышты сығарғанда унан өҫтәге башҡа тишек уйымдарының барыһы ла бармаҡтар ярҙамында ябыулы хәлдә була. Ә сираттағы юғарыраҡ тауышты сығарғанда, ҡурай көпшәһенә өргән тын шул уйымдан сыҡһын өсөн, унан өҫкөләре ҡапланһа ла, түбәнерәк урынлашҡан тишектәрҙе ҡаплауҙың кәрәге юҡ. Шулай итеп, иң юғары тауышты сығарғанда көпшәләге бөтә тишектәр ҙә асыҡ була, ә ауыҙҙан өргән һауа тик өҫкө тишек аша тауыш сығара. Йогалағы чакралар теорияһының ап-асыҡ ҡабатланышы! Аңлатып үтәйек: уй-теләктәре муладхарала тупланған аңы менән бәйле ихтыяждарын үтәүгә ҡоролған кеше өсөн бүтән чакралар кимәлендәге талаптарҙы үтәү мөмкин түгел. Шулай уҡ аң кимәле күтәрелгән һайын, түбән инстинкттар кимәлендәге теләктәр һүрелә, уларҙы ҡәнәғәтләндереү мохтажлығы кәмеүҙән, хатта юҡҡа сығыуҙан, энергия сарыф ителеүҙән туҡтай һәм юғарыраҡ маҡсаттарға ярашлы чакраларға йүнәлтелә. Был юл – кешенең үҫешен, эволюцияһын тәьмин итеүсе берҙән-бер юл! Шулай итеп, ҡурайҙың төҙөлөшө, моң сығарыу тәртибе – башҡорттоң иң боронғо рухи ихтияждарын үтәүгә хеҙмәт иткән уйын ҡоралы ул. Шуға күрә меңйыллыҡтар дауамында ҡурайҙа уйнау оҫталығына, көйҙәр башҡарыу тәртибенә талаптар көслө. Ябайлығы менән бөйөк ҡурайыбыҙ – бер үҙгәреш кисермәйсә, боронғолоғобоҙҙо иҫбатлаусы, бөгөнгөбөҙгә ялғаусы рухи мираҫыбыҙ, ғорурлығыбыҙ.

**Рәшиҙә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА,**
**юғары категориялы уҡытыусы,**
**Башҡортостандың мәғариф алдынғыһы .**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

**Ҡулланылған әҙәбиәт:**

*1. Аҡманов И.Ғ. Башҡортостан тарихы. Борондарҙан XIX быуат аҙағына тиклем. 8-се синыф өсөн дәреслек.– Өфө: Китап, 2003.– 240 бит.*

*2. Биишев А.Г., Ишмөхәмәтов З.К. һ.б. Башҡорт теленең һүҙлеге.– 2 томлыҡ.–М., Русский язык, 1993. 1-се том. – 861 бит.*

*3. Галлямов С.А. Санскритско-русский словарь.– М. СПб., 2003. – 308 с.*

*4. Кочергина В.А. Санскритско-русский словарь.– М: 1996. – 895 с.*

*5. Новиков М.П. Атеистический словарь. – М: Политиздат, 1985. – 512 с.*

*6. Шәкүр Р. Сыңрау торналар иле. Өфө: Китап,1996. – 416 бит.*

Редакциянан: Р. Х. Ғиззәтуллинаның был мәҡәлә е гипотеза, фараз форма ында баҫыла. Сөнки халыҡтың алдағы мәҙәниәте тура ында әҙерләнеүҙәр тик башланып ҡына тора. Был тәңгәлдә фараздарҙы тағы ла тулыраҡ иҫбатлаусы дәлилдәр булыр, тип ышанабыҙ.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 156



# КӨРӘШКӘ ҠОРОЛҒАН ТОРМОШ

*(Күренекле педагог Ильяс Вәлиевҡа 60 йәш)*



Шундай бер көнсығыш риүәйәте бар. Солтан төш күрә: имеш, уның тештәре бер-бер артлы ҡойолоп бөткән. Уянғас, ул төш юраусыны саҡыртып ала ла төшөн өйләп бирә. Тыңлап бөткәс, төш юраусы ҙур борсолоу менән былай ти:

– Эй-й, ханым-солтаным, мин инә ҡайғылы хәбәр еткерергә тейешмен: ин үҙенден иң яҡын туғандарынды бер-бер артлы юғалтасаҡ ың.

Асыуы килгән солтан төш юраусыны зинданға ябырға бойора ла икенсе төш юраусыны саҡырта:

– Ханым-солтаным, – ти теге е, солтандың төшөн тыңлап бөткәс, – ин бөтә туған-тыумасаларындан да оҙағыраҡ йәшәр ең.

Солтан шатлана, төш юраусыны йомарт бүләкләй. арай хеҙмәтселәре аптырай:

– ин солтанға зинданға ташланған төш юраусының үҙҙәрен генә ҡабатланың бит. Ни өсөн солтан уны төрмәгә алды, ә ине бүләкләне?

Төш юраусы хәйләкәр йылмая:

– Бөтә е лә күрәҙәлекте әйтә белеүҙән.

Халҡыбыҙҙың бөйөк улы, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим ижады хаҡында ла байтаҡ үҙҙәр әйтелде, мәҡәлә, ғилми трактат, монографиялар яҙылды, диссертациялар яҡланды. Тик уның шәхси тормошо, эске донъя ы, уй-кисерештәре, фекер-хыялдары, шатлыҡ-ҡайғылары, ғөмүмән, “Кем ул Мостай Кәрим?” тигән орауға аныҡ әм тулы яуап эҙләүселәр табылманы тиерлек.

әм ҡапыл педагогия фәндәре докторы, Халыҡ-ара педагогия, Рәсәй Педагогия әм социаль фәндәр академия ының тулы хоҡуҡлы ағза ы, профессор Ильяс Вәлиев, күптәрҙе аптыратып, хатта көнләштереп, 2002–2008 йылдарҙа бер-бер артлы “Башкирская этнопедагогическая культура и Мустай Карим”, “Педагогика Мустая Карима”, “Мустай Карим: воин, поэт, гражданин”, “Мустай Карим – явление мировой культуры”(I,II том) “Религия в мировозрении и творчестве Мустая Карима”, “Нравственные уроки Мустая Карима” тигән китаптарын баҫтырып сығыра. Алты йылда әр бере е 10-дан 60 баҫма табаҡҡа тиклем игеҙ китап!

– Әлегә тиклем, – тигәйне шул уңайҙан Мостай Кәрим Ильяс Иштуған улы менән бер ултырып өйләшкәнендә, – әҫәрҙәрем тура ында ғына яҙып килделәр, күккә сөйөп маҡтанылар, ололанылар. Тик үҙем, шәхси тормошом, ошо әҫәрҙәрҙең нисек тыуыуы, уй-хыялдарым тура ында яҙыусы ғына булманы. ин – беренсе. Минең Салауат ҡала ының педколледжында уҡытҡан еңлем Сәлисә лә “Башкирская этнопедагогическая культура и Мустай Карим” тигән китабына ҡарата: “Был инең турала яҙылған иң яҡшы әҫәр”, – тигәйне. Педагог бит – уға нисек ышанмай ың?”

Ильяс Вәлиевтың “Нравственные уроки Мустая Карима” тигән китабының ҡулъяҙма ын уҡығас, Мостай Кәрим уйынлы-ысынлы былай тигәйне: “Был ки-

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 157





*Ҡатыны Светлана Георгиевна менән.*

тап баҫылып сыҡ а, әҫәрҙәремде уҡымаҫтар инде, сөнки бөтә Мостай Кәрим ошонда. Бигерәк төпсөнә ең, ныҡыш ың, әр еҙ ең”.

Халыҡ шағирының Ильяс тура ында афоризмға торошло тағы ла бер үҙенә иғтибар итәйек. “Ильяс! – тип яҙғайны ул 2004 йылдың 14 ноябрендә бүләк иткән “Оҙон юл” тигән шиғырҙар йыйынтығында. – ин минең тоғро юлдашым, мин уҙған оҙон юлды ин дә байҡап үттең. Аҙашманың, алдашманың. Афарин!”

Эйе, Мостай Кәрим – үҙе бер киң, серле әм төп өҙ донъя, ижады ла тулы ыулы ташҡын дарья. Уның хаҡында күпме яҙ аң да аҙ ымаҡ. Уның тауҙарҙан да бейек бөйөклөгө алдында күптәр кинәйә еҙ үҙ әйтә алмай туҡталып, баҙап ҡала. Тик педагог Ильяс Вәлиев ҡына ошо сикте үтеп сыҡты әм заманыбыҙҙың, халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улының шәхесенә тәүләп тулы анализ я аны. Таланттар тура ында тик таланттар ғына ошолай яҙа алалыр ул. Профессор Ильяс Вәлиев –нәҡ ошондай талант эйә е, ти әм, ис тә яңылышмам кеүек. Уның Мостай Кәримгә арналған монографиялары, мәҡәләләре әм китаптары – бының кире ҡаҡҡы ыҙ дәлилдәре.

Башҡортостан Яҙыусылар берлеге идара ы рәйесе, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев И. Вәлиевтың “Мостай Кәрим педагогика ы” китабына яҙған “Мостай Кәрим мәктәбе” тигән баш үҙендә бына нимә ти: “Мостай Кәримдең әҫәрҙәре энә енән ебенә тиклем ентекле өйрәнелгән. Уның ижады тура ында Өфөлә лә, Мәскәүҙә лә, башҡа ҡалаларҙа ла йөҙҙәрсә мәҡәләләр яҙылған, китаптар сығарылған, уның исеме донъя энциклопедияларына индерелгән. Ләкин был тәрән йөкмәткеле бөйөк ижад донъя ының да әлегә тиклем өйрәнелмәгән ҡиммәтле бер яғы бар. Ул – Мостай Кәрим мәктәбе. Уның педагогика ы. Уның ижадын тикшереүселәр ниңәлер ошо яҡҡа тейешле иғтибар бирмәгән. Ни айәт, мө им мәсьәләгә арналған махсус хеҙмәт барлыҡҡа килде. еҙҙең алда Ильяс Вәлиевтың “Мостай Кәрим педагогика ы” – оло абруйлы халыҡ шағирының ижад донъя ы хаҡындағы хеҙмәт. Шуға ла ул ғүмергә онотолмаҫ сәйәхәткә әйләнә. Ошо сәйәхәттән ин аҡылға байығып, рухың менән яҡтырып, гүзәл тәьҫораттар менән ҡайта ың”.

Вәлиевтарҙың Свердлов урамындағы фатиры түрендә Мостай Кәримдең ике фото үрәте тора. Уның бере е артына шағир үҙ ҡулдары менән: “Ильясу Валееву – великому труженику”, – тип яҙған. Ғалимдың хеҙмәттәре Мостай Кәрим менән генә сикләнмәй. Уларға “Религия: страницы истории”, “Национальное и общечеловеческое: историко-педагогический аспект”, “Природа. Общество. Человек”, “Воспитание на символах”, “Великие и знаменитые: парадоксы детства”, “Российская деревня XX столетия”, “Алкоголь в России: история и современность”, “Народный поэт из Кугарчи (О творчестве Александра Филиппова)”, “Духовная власть земли” китаптарын да ҡуш аң, барлығы 18-гә тула. Ә бөтә хеҙмәттәре 1990 йылда нәшер ителгән “Воспитать патриота” китабынан бөгөнгәсә иллегә яҡын ғилми китаптары, монографиялары, уҡыу әсбаптары, методик күр әтмәләре әм программалары донъя күрә.

Тағы ла бер авторҙың яҙмаларына иғитибар итәйек. Ул – үткән быуаттың 80–90-сы йылдарында “Советская Россия” гәзитенең Башҡортостан буйынса үҙ хәбәрсе е Мәргән Мырҙабәков. Бына нимә тип яҙа ул 2008 йылда Зәйнәб Биишева исемендәге “Китап” нәшриәтендә донъя күргән “Башҡортостан буйынса үҙ хәбәрсе” тигән китабында:

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 158



“Бында шуны билдәләү мө им: Мостай Кәримдең өйләү оҫталығы унының яҙыусылыҡ талантына бәйләнгән. Ул телмәрендә лә, әҙәби ижадында ла Уҡытыусы, Тәрбиәсе булды. Телә ә ҡай ы мәктәптә, студенттар аудитория ында халыҡ шағирының тын ғына, аҡрын, уйланыусан телмәренең әр үҙен йотоп ултырҙылар. Ул йәштәрҙе аҡыллы кәңәшсе булараҡ әсир итте. Шуға күрә ижад оҫта ының ошо яҡтарын өйрәнеүгә Өфөнән педагогия фәндәре докторы И. Вәлиевтың бер нисә хеҙмәт арнауы ис тә осраҡлы түгел. Ул Мостай Кәрим педагогика ы, унының әҫәрҙәрендә тәрбиәгә ҡағылышлы башҡорт халыҡ милли традициялары тура ында бер нисә монография баҫтырып сығарҙы”.

Әле Ильяс “Гуманизм Мустая Карима” тигән әҫәре өҫтөндә эшләй. 18 йыл эсендә Ильяс Вәлиевтың Мәскәү, Ханты-Мансийск, Кострома, Чебоксар, Майкоп, Сургут, Умань, Ровно (Украина) ҡалаларында әм, әлбиттә, Өфөлә донъя күргән йөҙҙәрсә мәкәләләрен дә иҫкә ал аҡ, был кеше әллә тәүлегенә 24 сәғәт эшләйме икән, тип ҡуя ың. Беҙгә Александр Пушкин, Оноре де Бальзак, Ги де Мопассандарҙың ижади әләте яҡшы таныш. Улар тиҫтәләрсә томдарҙан торған әҫәрҙәр ижад иткән, сөнки улар әҙәби хеҙмәттән башҡа бер ҡайҙа ла эшләмәгән. Пушкин менән Лев Толстой, бай ҡатламдан булараҡ, кейем, ашау-эсеүҙә мохтажлыҡ кисермәгән. Ильяс Вәлиев и ә бала сағынан уҡ нужа күреп йәшәгән. Әлеге бейеклеккә күтәрелеүҙә уға бер кем дә ярҙам итмәгән, власть даирәләрендә дуҫише, туған-тыумаса ы, ҡоҙа-ҡоҙағыйы булмаған. Әле лә юҡ. Бөтә ен дә үҙ елкә ендә күтәргән, бөтә ен дә үҙенең хәләл көсө, аҡылы, таланты менән тапҡан.

Ә бит тормош ҡояшы гел генә нур ибеп, йылмайып торманы Ильясҡа. 1949 йылдың 25 ғинуарында Мәсетле районының Тайыш ауылында донъяға килеп, ул бала сағын Оло Ыйыҡ йылға ы буйында үткәрә. Ата ы Иштуған – ябай колхозсы, әсә е Вәсилә 21 йәшендә генә, Ильяс тыуғас уҡ, гүр эйә е була. Үгәй әсә ҡулында аслы-туҡлы көн күр ә лә, Ильяс бик шуҡ, теремек әм телә ә кемгә баш бирмәҫ малай булып үҫә, ауыл малайҙарының атаманына әйләнә. Колхоз баҡса ына төшөп ҡыяр урла ындармы, кишер, шалҡан йолҡ ондармы – уларҙы ҡуш. Ҡыштарын и ә текә генә Ҡарағолтауға менә лә, тиҫтерҙәре ауыҙ асып ҡурҡып торған арала, Ильяс ике туған Фәрит аға ы әтмәләп биргән ҡайын саңғыла, таяҡтарын ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, түбәнгә елдерә. Биткә ҡар бураны бәр ә лә, күслө ел күҙҙәрҙе астырма а ла, ҡуйынға эре-эре ҡар киҫәктәре тул а ла, ул түҙә, тештәрен ҡыҫып осоуын ғына белә. Йығылып, көрт эсенә сумған, саңғыларын шартлатып ындырған саҡтары ла була малайҙың, ләкин ул яңыларын кейеп ала ла йәнә тауға менеп китә. Кем белә, бәлки, уңынан тормош ҡаршылыҡтары менән көрәшкәндә ана шул Ҡарағолтауы юлындағы эреле-ваҡлы кәртәләрҙе емереү булышлыҡ иткәндер.

Бер ваҡыт Ильяс аға ының бәләкәй калибрлы винтовка ын, бер ҡап патрондарын сәлдерә лә малайҙарҙы Ыйыҡ арьяғына алып сыға. Тәүҙә ағас төп ә е өҫтөнә ҡуйылған шешәгә атышалар. Ул ялҡытҡас, йылға ярында усаҡ яғалар ҙа ҡалған патрондарҙы утҡа ташлап, үҙҙәре усаҡ аша икерешә башлайҙар. Ут еңел гильзаларҙы ситкә осора, ә ауырыраҡ ҡурғаш пуля ут эсендә ҡала. Ильяс быны яҡшы белә әм усаҡ аша тәүләп үҙе икереп сыға. Унының артынан – башҡалар. Ҡурҡыныс уйын, әлбиттә. Ни әйт әң дә, пуля бит, унының ҡай ы яҡтан килеп ҡаҙалырын да белмәй ҡалыр ың.

Икенсе көндө Ильясты мәктәп директоры саҡыртып ала, ҡаты шелтә сәпәп сығара.

– Бындай тәртип менән мәктәптә лә, ауылда ла көн күр әтмәйәсәктәр хәҙер, – ти уға әсә е яғынан ике туған аға ы, КПСС-тың Мәсетле район комитетында инструктор булып эшләгән Сәғит Ба ауетдинов. – Яҙғы имтихандарыңды тапшыр ҙа, 1-се интернат-мәктәпкә алып китәм.

Өфө ҡала ының 1-се интернат-мәктәбендә уҡыған йылдар емешле була. Буласаҡ ғалимдың ниндәйҙер ыҙаттары, бәлки, шунда ла формалаша башлағандыр. 7-8-се кластарҙа уҡығанда ул гәзиттәрҙән эҙләп табып, дәүләттәр әм хөкүмәттәр башлыҡтарының исемдәрен махсус дәфтәргә яҙып ала, ятлай әм

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 159



тәрбиәсе е Ф. Ғирфанова ярҙамында викториналар ойоштора.

Ильяс Вәлиевтың тағы ла бер шөғөлө тура ында. Ул СССР халыҡ артистка ы Гөлли Мөбәрәкова етәкселек иткән драма түңәрәгенә йөрөй. Башҡортостан телевидение ы аша тура эфирҙа тапшырылған ике спектаклдә ҡатнашыу Ильяс өсөн онотолмаҫлыҡ булып хәтерҙә ҡала.

Өс йыл Красноусольскийҙа ҡара эштә тир түгә Ильяс. Тәүҙә – коммуналь предприятиелар комбинатында йөксө, уңынан мебель цехында – ултырғыс, өҫтәлдәр йыйыусы. Беләктәренә көс ҡуна башлай, Сәғит аға ы әйтмешләй, "аҡылға ла ултыра". Үҙең тапҡан мал тәмлерәк тә, ҡәҙерлерәк тә икән. "Ильястың ҡулдары оҫта ул, тип өйләйҙәр мебелселәр йәш эшсе тура ында", – тип яҙҙы райондың "Йондоҙ" гәзите унын тура ында. Тәүҙәрәк еңел булманы. Иптәштәренән өйрәнеп, үҙе лә шымарып алды әм хәҙер сменаға 30 ултырғыс урынына 150 –170-те йыя. Күптән түгел партия йыйылышында бер тауыштан КПСС ағзалығына кандидат итеп алынды. 1968 йыл әм тулы биш йыллыҡ пландарын ваҡытынан алда үтәү өсөн ярышта йәш коммунист әр саҡ алда килә".

Уҡыуын да онотмай Ильяс, өс йылда киске эшсе йәштәр мәктәбен тамамлай. Ә йәшлек романтика ы уны яңы юлдарға, билдә еҙ яҡтарға саҡыра. Күп уйлап тормай ул, тота ла Ҡаҙағстан далаларына сығып китә. Әйткәндәй, Каспий диңгеҙе ярындағы Шевченко ҡала ында Марат аға ы инженер-нефтсе булып эшләй. Шуға күҙ төртөп бара Ильяс, әм уны Манғышлаҡ энергетика заводына слесарь итеп эшкә алалар.

– Атай-әсәйҙән бер үҙем тороп ҡал ам да, ике туған ағайҙарымдың йылы ҡарашын, таяныслы терәк булыуын тойоп йәшәнем, – тип хәтерләй Ильяс Иштуған улы. – Улар булма а, бәлки, юлдан яҙып та ҡуйылыр ине. Ҡаҙағстанда, Марат ағайымдың ике бүлмәле фатирында биш кеше йәшәнек. Күңелең киң бул а, өйөң дә ҙурая икән ул. Кеше ара ында йөрөрлөк кейемем дә юҡлығын күреп, Марат ағайым менән Роза еңгәм аҡлыҡ касса ындағы унғы аҡсаларына плащ алып бирҙеләр. Түбәм күккә тейә яҙҙы, уларҙың изгелеген әле лә онотмайым. Үкенескә ҡаршы, ике ағайым да яҡты донъяла юҡ инде. Ауыр тупраҡтары еңел бул ын.

Бер йылдан Ильяс Гурьев ҡала ында педагогия институтының тарих факультетына имтихан тотоп, студент булып китә. Тынғы белмәҫ, зирәк егетте бер йылдан институттың комсомол комитеты секретары урынбаҫары итеп айлайҙар. Йәйге хеҙмәт семестры осоронда егет институттың "Энтузиаст-71" төҙөлөш отрядын етәкләй. Бер аҙҙан ул ситтән тороп уҡыу бүлегенә күсә лә Гурьевтан йөҙ саҡрымдағы Доссор ҡаласығындағы мәктәпкә тарих уҡытыусы ы булып китә. Институтты ул ваҡытынан алда "ҡыҙыл диплом"ға тамамлай. Йылдар үткән айын "тынғы ыҙ йөрәк" тынысланғандай ҙа ымаҡ. Ләкин тура үҙлелеге, ҡырыҫлығы, тормош ғәҙел еҙлектәренә, ике йөҙлөлөккә, мәкергә ҡаршы аяу ыҙ көрәше Өфөгә ҡайтҡас ҡалҡып сығасаҡ әле.

Ә әлегә ул бер эштән икенсе енә күсә. Гурьев өлкә е Маҡат районының "Белем" йәмғиәтендә яуаплы секретарь, КПСС район комитеты инструкторы, сәйәси-ағартыу кабинеты мөдире вазифаларын башҡара. Ильястың матбуғат менән аралаша, гәзиттәргә яҙыша башлауы ла нәҡ шул йылдарға тура килә. "Студенттар бурыс билдәләне" тигән тәүге ус ая ындай ғына мәҡәлә е 1971 йылдың 15 майында Гурьев өлкә енең "Прикаспийская коммуна" гәзитендә баҫылып сыға. Маҡат районының "Мунайшы" ("Нефтсе") гәзитенә лә йыш яҙышып тора Ильяс. Бер саҡ уны ""Прикаспийская коммуна" гәзите редакция ына саҡыралар ҙа гәзиттең штаттан тыш үҙ хәбәрсе е танытма ын тотторалар. Кем белә, бәлки, яҙышыу, аналитик фекерләү, оперативлыҡ ҡеүә е лә шул саҡта асылып, уны ғүмер буйы оҙата килгәндер.

– Бөгөн дә, – ти ул, йәшлек йылдарын хәтеренә төшөрөп, – көнөнә ун-ун биш бит яҙа алма ам, ҡәнәғәтлек тоймайым.

"Сит ерҙә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул" ти халыҡ мәҡәле. Ильяс тептеүәл ун йыл ят ерҙәрҙә йөрөп еләгәйне инде. Башҡарған вазифалары абруйлы,

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 160



эш хаҡы арыу ғына булыуға ҡарамаҫтан, егет Башҡортостанға ҡайтты ла китте. Тәүҙә Сәғит аға ы янына, Өфө ҡала Советы башҡарма комитетына, уғылды. Аға ы арҡылы 41-се урта мәктәптә директорҙың уҡыу-тәрбиә эше буйынса урынбаҫары булып урынлашты.

Ярты йылда Ильяс үҙен әүҙем, тырыш әм ныҡыш итеп күр әтергә өлгөрә. Шуға ла 1979—1980 уҡыу йылында уны урта мәктәп директоры вазифа ына үрләтәләр. Хәйер, мәктәптең әлегә


*Мостай Кәрим менән.*

исеме генә бар, төҙөлөп ята. Әммә яңы директорҙың хәстәрлеге арҡа ында уны ярты йылда алып бөтәләр әм уны тәүләп тамамлаусыларҙың иңбашына “5-се урта мәктәпте тамамлаусы – 1980” тип яҙылған ал таҫма тағыла. Был башланғыс Өфө әм республика мәктәптәрендә киң яҡлау таба, ил буйынса тарала. Өс йыл да үтмәй, Ильяс Вәлиевты КПСС өлкә комитетының фән әм уҡыу йорттары бүлегенә инструктор итеп алалар. Партия эшенә күңеле ятмай Ильястың, ике йылдан бүлек мөдире Ә. Аҙнабаевҡа мөрәжәғәт итә.

– Әхмәр Мөхәмәтдинович, – ти ул туранан-тура. – Оҡшамай миңә был эш. Үҙеңә етмәгән аҡылды кешегә өйрәтеп йөрөгәнсе, төптән егелеп үҙемә эшләргә ине. Мәктәпкә ебәрегеҙ.

Быға тиклем Башҡорт дәүләт университетының башҡорт әм дөйөм тел ғилеме кафедра ы мөдире булып эшләгән ғалим Ильястың хәлен аңлай.

– Эш табырбыҙ, – ти ул, бер аҙ уйланып ултырғас. – Килә е аҙнала өйләшербеҙ.

Бер аҙнанан уны мөдир йылмайып ҡаршы алды.

– Эш табылды бит, малай, – ти ул, ҡулдарын ыуғылап. – Тик үҙенсәлекле, баш бирмәҫ, ауалы коллектив йыйылған унда. Өфөлә генә түгел, Башҡортостанда өлгөлө мәктәп, элита тип анайҙар үҙҙәрен. Тәүге көндән үк власть күр әтмә әң, артыҡ иҫәпләшеп тормаҫтар, елкәңә менеп ултырырҙар.

– Мәктәптең исемен әйтеп өйләшәйек, Әхмәр Мөхәмәтдинович. – Ильяс түҙмәй, йылмая биреп, мөдирҙең үҙен бүлдерә.

– Уны ын әйтмәнемме ни? ине Өфөләге 1-се интернат-мәктәпкә директор итеп тәғәйенләргә уй бар, – ти бүлек мөдире. – Мәғариф министрлығы ҡаршы түгел. Өҫтә лә, – ул кабинетының түшәменә төртөп күр әтә, – ризалар.

“Шулай итеп, 1984 йылдың башында мине 1-се башҡорт интернат-мәктәбе директоры итеп ҡуйҙылар, – тип яҙасаҡ уңынан Ильяс Вәлиев “Записки на полях” (Өфө, “Башҡортостан” нәшриәте, 1994) тигән китабында. – Ул мәктәптә мин 1963 – 1965 йылдарҙа уҡып киткәйнем инде, ә унан алдараҡ ике туған ағайым Марат Ба ауетдинов тамамлап сыҡҡайны”.

Был уҡыу йорто Бөйөк Ватан уғышы йылдарында башлыса фронтовик әм уғыш инвалидтарының балаларын йә етем балаларҙы уҡытыу әм тәрбиәләү маҡсатында ойоштороп а ла, уңынан аҡрынлап ябай интернат-мәктәп кимәленә төшә. Уға ғаилә тәрбиә е күрмәгән, юлдан яҙа башлаған балалар ҙа килеп тула. Мәктәптең элекке абруйы, даны йылдан-йыл кәмей, етмә ә уҡытыусылар бер-бере е йәки директор өҫтөнән яҙыуҙан бушамай, балалар тәртип боҙа, дәрес ҡалдыра, өлгәшмәүселәр исемлеге арта.

1984 йылдың 5 ғинуарында яңы директор коллектив менән таныша, уҡыу корпусын, дөйөм ятаҡты, ашхананы ҡарап сыға. Күренеш ҡот осҡос: ватыҡ тәҙрәләр, яланғас әм бысраҡ стеналар, ҡыйшайған парта, өҫтәл, ултырғыстар, аҫыҡ туа-

леттар, ераҡ ыҙ йылылыҡ әм ыу үткәргес система ы. “Был нигеҙ еҙ раҫлау түгел, – ти Ильяс Вәлиев уңынан “Штрихи на полях” китабында, – был – факт”.

Республика етәкселәре күҙ терәп торған, әр ҙур әм бәләкәй кәңәшмәләрҙә ауыҙ тултырып маҡталған “өлгөлө” мәктәп бына ниндәй көнгә төшкән! Ҡалала түгел, ауыл ерҙәрендә лә бындай мәктәптәр бармаҡ менән генә анарлыҡ. Нишләргә? Әллә бөтә енә лә ҡул елтәп, ысҡынырғамы? Күп бул а бер шелтә сәпәрҙәр. Уның ҡарауы, күңел тыныс, намыҫ саф булыр. Намыҫ саф булыр?! Туҡта! Юҡ, намыҫ саф булмаҫ шул, Ильяс! Булдыҡ ыҙ, йүн еҙ, бешмәгән, ялҡау тип күҙеңә ҡарап әйтәсәктәр.

Бер аҙна буйы Вәлиев мәктәптәге эш режимын өйрәнә, уҡытыусылар, тәрбиәселәр менән таныша, каникулдан ҡайтҡан уҡыусылар менән аралаша. Әлеге уҡыу-уҡытыу әм тәрбиә эшен тамырынан үҙгәртмәйенсә, белем еҙ белем биреүселәрҙән ҡотолмайынса, бер-бере енең өҫтөнән юғары ойошмаларға ошаҡ ташыусыларҙы ҡыумайынса мәктәпте көрсөктән сығарыу мөмкин түгел, тигән ығымта я ай ул. Тәүге педсовет ултырышында уҡ яңы директор уҡыусыларҙың бере е исеменә килгән аҡсаны үҙләштергән янъялсы ике тәрбиәсене, таҡтаға яҙған миҫалдарын 5-се класс уҡыусылары ла төҙәтеп ултырған рус теле уҡытыусы ын эштән сығарыу мәсьәлә ен ҡабырға ы менән ҡуйғас, күптәр иҫәңгерәп ҡала.

– Миңә, минән бигерәк республикаға өлгө булырҙай мәктәпкә бур, ғауғасы тәрбиәселәр, наҙан уҡытыусылар кәрәкмәй! – ти Ильяс Вәлиев, педсоветтағы әр уҡытыусыға тура ҡарап. – Әгәр бындай хәлдәргә күртә ҡуйма аҡ, ундайҙарҙың елкәбеҙгә менеп ултырғанын иҙмәй ҙә ҡалырбыҙ.

– Артыҡ бөгә егеҙ түгелме, Ильяс Иштуғанович? – ти өлкән уҡытыусыларҙан берәү. – ыныуы бар. Өҫтөгөҙҙән ялыуҙар китәсәк.

– Минең ул турала шигем юҡ, – ти Ильяс. – Килер алдынан Киров райкомында: “Унда барған бөтә директорҙарҙың да баштарын ашанылар”, – тип киҫәткәйнеләр.Мин бары ына ла түҙермен, намыҫым таҙа, уйҙарым пак икән – миңә бысраҡ йоҡмаҫ. Бөйөк шағирыбыҙ Аҡмулла әйткән бит әле:

*Яҡшыны үккән илә аты китмәҫ,*
*Яман үҙҙең күңелдән даты китмәҫ.*
*Саф алтынды нәжескә (бысраҡҡа) буяу илә,*
*Нәжес китәр, алтындың заты китмәҫ.*

Көндәлек ығы-зығы, мәктәп мәшәҡәттәре менән Ильяс өс уҡыу йылының артта ҡалыуын иҙмәне лә. Тәүлегенә 10–12 сәғәт эшләү, мәктәпте өр-яңынан ремонтлау, уҡыу корпусы, спорт комплексы, теплица, республикала тәүгеләрҙән булып уҡытыусылар өсөн торлаҡ алдырыу менән шөғөлләнде. Бер үк ваҡытта уҡыу-уҡытыу процесын камиллаштырыу, уҡыу предметтарын тәрән өйрәнеү өсөн “Информатика әм иҫәп-хисап техника ы” предметы индерҙе, мәктәптең үҙ иҫәп-хисап үҙәген асты. Башҡорт дәүләт университеты, авиация, педагогия, медицина, нефть институттары, СССР Фәндәр академия ының Башҡортостан филиалы менән тығыҙ бәйләнеш урынлаштырҙы. Уларҙағы уҡытыусылар әм ғалимдар мәктәпкә килеп үҙ тармаҡтары буйынса тәрән белем бирә, лекциялар уҡый, ғәмәли дәрестәр үткәрә башланы. Былар бөтә е лә әкиәттәге “суртан әмере” буйынса башҡарылмай, әлбиттә, әм директорҙан бик күп тырышлыҡ талап итә. Уға хуш күңеллелек, битарафлыҡ, төркөмләнеп ҡаршы тороу кеүек насар күренештәрҙе, иҫкереп бөткән методик алымдарҙы киҫкен рәүештә емерергә кәрәк була.

Коллектив тәҡдиме менән Рәми Ғарипов, Рәшит Ниғмәти, мәктәп тарихы, Башҡортостан этнография ы музейҙары, Мостай Кәрим кабинеты ишектәрен аса әм уға халыҡ шағиры снаряд ярсығы тишкән комсомол билетын бүләк итә, башҡорт рәссамдары ижадының галерея ы булдырыла. Нәҡ Ильяс Иштуған улының тырышлығы, ныҡышмалылығы арҡа ында бөтә мебель алмаштырыла, уҡыу кабинеттарын йы азлау өсөн стеналарға я алған шкафтар (стенка) алына, улар зауыҡ менән йы азландырыла. Йылылыҡ, ыу менән тәьмин итеү система ы,

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 162



сантехника ҡорамалдары, мәктәп ҡойма ы ла яңыртыла, хужалыҡ корпусына ни-геҙ алына, география буйынса класс-майҙансығы, хәрби әм ДАИ ҡаласығы төҙөлә. Ашаған белмәй, тураған белә тигәндәй, йоҡо оҙ төндәр, тынғы ыҙ көндәр үткәрергә, предприятие, учреждение, ойошмаларҙың туп а ын тапарға, оранырға, хатта инәлергә тура килә.

Ҡаты ҡуллы директорға ялыуҙар, шикәйәттәр менән генә тештәре үтмәгәс, ошаҡсылар ярҙамға ваҡытлы матбуғатты саҡыра.

Хәйерсегә ел ҡаршы тигәндәй, тиҙҙән “сәбәп” тә килеп сыға. 1990 йылдың 12 февралендә ошо мәктәпте 50-се йылдарҙа тамамлап сыҡҡан шағир Рәми Ғариповҡа музей асылып, унда Башҡортостан халыҡ мәғарифы министры Рифғәт Гарданов та сығыш я ай. Ул интернат-мәктәптең Бөтә Союз социалистик ярышында еңеп сығыуы әм Еңеүсе дипломы, аҡсалата премия менән бүләкләнеүе тура ында хәбәр итә.

Күп тә үтмәй, мәктәптә киҫкен хәл була. Башҡорт дәүләт университетынан бер нисә тапҡыр ҡыуылған “мәңгелек студент”, мәктәптең комсомол комитеты секретары Ришат Зарипов, бер кемдән орап тормайынса, өс класс уҡыусыларын кинотеатрға ике сериялы киске кинофильмға алып китә. Улар интернатҡа төнгө 12-лә генә әйләнеп ҡайта. Зариповтың элек тә хеҙмәт тәртибен тупаҫ боҙоуын иҫәпкә алып, директор уға үҙ теләге менән эштән китеү тура ында ғариза яҙырға ҡуша. Ялыусылар төркөмө, әйтер ең, шуны ғына көткән, юғары ойошмаларға директор өҫтөнән ялыу артынан ялыу осора, ә йөкмәтке е “Йәшлек” әм “Ленинец” гәзиттәрендә донъя күрә. Ташҡа баҫылған, тимәк, дөрөҫ, халыҡ уға ышана. Республика йәмәғәтселеге лә ялған хәбәргә, сабый бала ымаҡ ышанып, ҡотҡо агитация ына ҡушыла.

Ярты йылға уҙылған эҙәрлекләү арҡа ында Ильяс Вәлиев дауаханаға эләгә, унын урынбаҫары Фәндиҙә За ироваға БР Мәғариф министрлығынан шелтә бирелә. Янъялсылар, ғауғасылар алдында хатта мәғариф министры Рифғәт Гарданов та ҡаушап ҡала. Ул Ильяс Вәлиев өҫтөнән ниндәй ялыу килә ә лә хуплай, ниндәй ҡарар сығарыл а, шуға ҡул ҡуя. Ҡаршы кил ә, йыуан таяҡтың бер башы үҙенә лә төшәсәген яҡшы аңлай.

Тик “Башҡортостан пионеры” гәзите хәбәрсе е Диана Килдина ғына ғәҙел сығыш я ай. “Әлбиттә,– тип яҙа ул “Нисек йәшәй ең, интернат?” тигән мәҡәлә-ендә,– Ильяс Иштуғановичты ыңғай яҡтан ғына ба алап булмайҙыр. Әммә унын тынғы ыҙлығы, мәктәп эштәренә битараф булмауы миңә генә түгел, башҡаларға ла оҡшай. Ысынлап та, эшләргә теләге, энергия ы ике-өс директорға етерлек”. Шул уҡ ваҡытта 9 майҙа республика матбуғатында 16 мәҡәлә баҫылып сыҡҡан. (Беҙҙең мәғлүмәт буйынса тик 1990 йылда ғына 25 мәҡәлә баҫылған. Башҡортостан телевидение ында – 10, Башҡортостан радио ында өс тапшырыу ойошторолған. – **Р.Х.**) Нимә был: интернат тормошона таяҡ тығыумы, әллә, ысынлап та, эштәр хөртмө? Дөрөҫөн әйткәндә, күптәрҙең ҡыҫылышы иҙелә.

өҙөмтәлә И. Вәлиев 1991 йылдың 18 февралендә ғариза яҙып мәктәптән китә әм 124-се урта мәктәпкә директор итеп тәғәйенләнә.

“Директорҙы әм 1-се интернат-мәктәптең белгестәрен “тар-мар” иткәндән уң хәҙер унда “демократия” хөкөм өрә, – тип әсе көләү менән яҙҙы 1973 йылда ошо мәктәпте тамамлаған журналист Зәйтүнә Ханова “Йәшлек” гәзитендә донъя күргән “Ә юлды бергәләп табырбыҙ” тигән мәҡәлә ендә. – Эшкә ваҡытында килеп, директор үҙенән сыҡмаған белгестәр бармаҡ менән генә анарлыҡ хәҙер.

Әгәр тәрбиәселәрҙең бере е юғары класс уҡыусылары менән йоҡлап йөрөгәне өсөн эштән ҡыуылыуын, дәрестәрҙе быға тиклем уҡытыусы өнәренең нимә икәнен дә белмәгән кешеләр алып барғанын иҫкә ал аҡ, мәктәптең бөгөнгө кимәлен күҙ алдына килтереүе ауыр түгел. Ошо гимназиянан (И. Вәлиев киткәс мәктәпкә “гимназия” исеме бирелә. – **Р.Х.**) беҙҙе уҡытҡан оло абруйлы Рәзинә Хәсәнова, Дамира Баймиева, Әлмирә Гәрәевалар ҙа китергә мәжбүр булды, әм улар бөгөн урыҫ мәктәптәрендә уңышлы уҡытып йөрөй. Ошондай көслө белгестәрҙән дә ҡо-

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 163



лаҡ ҡаҡҡас, үҙебеҙ ултырған ботаҡҡа балта сапмайбыҙмы, тип аптырап та ҡуя ың. Ҡасан беҙ үҙ-ара көрәшеүҙән, низағлашыуҙан туҡтарбыҙ икән?”

Әммә Ильяс Вәлиев юғалып ҡала, бәлтерәп төшә торғандарҙан түгел. Өҫтөнә күпме генә бысраҡ өймә ендәр, ғәйбәттәр, эҙәрлекләүҙәр уға сәм, рухи көс кенә өҫтәй. Хәҙер ҡатып ҡалған методик алымдар менән эшләүсе, әр яңылыҡтан Антон Чеховтың Беликовы ымаҡ ҡурҡҡан әм иҫкелек ҡалдыҡтарына теше-тырнағы менән йәбешеп ятҡан уҡытыусыларҙың әм улар ҡурайына бейегән ҡай ы бер журналистарҙың “албаҫтыларға унар ойоштороуҙарына” ҡарамаҫтан, 1-се башҡорт республика урта интернат-мәктәбендә 1984—1991 йылдарҙа бына нимәләр эшләнә:

— СССР-ҙа беренселәрҙән булып математиканы 7-се кластан алып тәрән өйрәнеү башлана;

— сығарылыш әм юғары уҡыу йорттарына инеү имтихандары берләштерелә;

— Башҡорт дәүләт университетына ҡабул ителгән уҡыусыларға стипендия түләнә;

— 4 — 8-се класс уҡыусылары өсөн математика буйынса ситтән тороп уҡыу республика мәктәбе асыла;

— республикала беренсе булып зачет тәртибе булдырылып, РСФСР Мәғариф министрлығында хуплана;

— электрон иҫәп-хисап техника ын үҙләштереү буйынса информатика дәресе индерелә;

— Рәми Ғарипов исемендәге премия булдырыла;

— Эстонияның Палдиски ҡала ында Салауат Юлаевҡа әйкәл (бюст) ҡуйыла;

— мәҙәни-спорт комплексы асыла;

— телевизион үҙәк эшләй башлай;

— Рәшит Ниғмәти, Рәми Ғарипов, мәктәп тарихы, Башҡортостан этнографияы музейҙары асыла.

Мостай Кәрим кабинеты тура ында алда әйткәйнек инде. Ошондай уңыштары өсөн интернат-мәктәп Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумы, СССР Мәғариф министрлығы, ВЛКСМ Үҙәк Комитетының Маҡтау грамоталары, Бөйөк Октябрҙең 70 йыллығына арналған Бөтә Союз ярышында хәрби-патриотик смотр-конкурста еңеп сыҡҡаны өсөн Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советының Ҡыҙыл байрағы, дөйөм белем биреү мәктәптәренең Бөтә Союз ярышында еңеп сыҡҡаны өсөн СССР Мәғариф министрлығының I дәрәжә дипломы менән бүләкләнә. 1988 әм 1989 йылдарҙа СССР Халыҡ хужалығы ҡаҙаныштары күргәҙмә ендә ҡатнашып, мәктәп көмөш әм бронза миҙалдар яулай.

Көрәштә сыныҡҡан, рухи яҡтан байып, тормош тәжрибә е туплаған Ильяс Иштуған улы 124-се мәктәпкә килеүенең тәүге көндәренән үк унған әм егәрле педагогик коллектив туплай, 1-се интернат-мәктәптең уҡытыусыларының ҡай ы берҙәре лә килеп ыйына уға. Бында ла үҙен ҡәтғи әм талапсан, шул уҡ ваҡытта хәстәрлекле етәксе итеп таныта, төркөмсөлөккә юл ҡуймай.

“Уҡыусылар өсөн мәктәп директоры — оҡланғыс өлгө,— тип яҙҙы Ғ.Мөғәллимова “Башҡортостан уҡытыусы ы” журналында сыҡҡан “Абруйлы педагог-ғалим” тигән мәҡәлә ендә. — Иртәнге сәғәт игеҙҙән Ильяс Иштуған улы әр баланы ишек төбөнән үк асыҡ йөҙ менән ҡаршылай. Уның күтәренке кәйефе уҡыусы, уҡытыусыларға ла күсә. Мәктәптә уҡыусыларҙың үҙидара ы эшләп килә, кластар ара ында ярыш ойошторолған. Еңеүселәр туристик путевкалар менән бүләкләнә, “Йәшел сауҡалыҡ” санаторийында ял итә. Мәктәп етенсе йыл ғына эшләүенә ҡарамаҫтан, бөтә кластар зауыҡ менән йы азландырылған, күргәҙмә материалдар менән байытылған. Реконструкциянан уң йәнә дүрт уҡыу класы, тегеү цехы, спорт залы асылды, әм бөтә был башланғыстарҙың башында директор үҙе бара. Үҙ мәктәбендә генә түгел, районда әм ҡалала, хатта республика мәктәптәрендә киң билдәле педагог Ильяс Иштуған улы бер үк ваҡытта ғилми эш менән дә

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 164



шөғөлләнә. Ул – педагогия фәндәре кандидаты, 180-дән ашыу фәнни китаптар, монографиялар, мәҡәләләр авторы. Уның “Воспитать патриота”, “Зигзаги советской школы”, “Воспитание памятью” тигән хеҙмәттәре ҙур ихтыяж менән файҙалана”.

“Ул быға тиклем бер кем дә үтмәгән уҡмаҡты айлай: яфа сигеп, ҡаланың бер осонан икенсе енә йөрөп уҡырға мәжбүр булған Өфө шоссе ы урамында йәшәүсе балалар өсөн мәктәп асырға ниәтләнә, – тип яҙа Миңзифа Илтенбаева “Башҡортостан” гәзитенең 1999 йылдың 27 апрелендә сыҡҡан “Директорыбыҙ шәп” тигән мәҡәлә ендә. – Яңы уҡыу йорто асыу еңел түгел, арыу-талыу, ал-ял белмәй тир түккәндәр генә булдыра ала уны. Ә Ильяс Иштуған улы тәүге кәртә осрау менән бөгөлөп төшә торғандарҙан түгел. Башта ҡала хакимиәте етәксе е Михаил Зайцев ярҙамы менән буласаҡ мәктәп бина ын юллап ала, шунан ең ыҙғанып коллектив туплауға тотона. Бәхеткә күрә, үҙенә теләктәшлек күр әткән интернат мөғәллимдәре лә яңы урынға килергә теләк белдерә. Ярай ы уҡ тәжрибә туплаған юғары белемле уҡытыусылар йыйыла, психолог, социаль педагог, логопед кеүек ирәк осрай торған белгестәрҙе табыуға ла өлгәшелә. Бөгөн 340 балаға иҫәпләнгән, математиканы тәрән өйрәнеүгә йүнәлеш алған 124-се мәктәптә 700 бала уҡый. Кластар тыңҡыслап тултырылған, шарттары ла самалы ти егеҙме? ис тә улай түгел. Кластарҙа уртаса 25-әр уҡыусы, әр кластың лаборатория ы, видеозалы, сәй эсеп ял итеү бүлмә е бар. Яңы мәктәптә уҡытыу кимәленең юғары булыуы, тәртип мәсьәлә енең яҡшы ҡуйылыуы тура ында ишетеп, ата-әсәләр балаларын шунда уҡырға бирергә тырыша, хатта Черниковканан, Сипайловонан да ағылалар...

...Етеҙ хәрәкәтле, алсаҡ йөҙлө, ихлас күңелле, сал сәсле директор әле, ик еҙсик еҙ мәшәҡәттәренән тыш, докторлыҡ диссертация ы яҡларға әҙерләнә. Оло педагогик талант эйә е Ильяс Вәлиев тағы әллә күпме яңылыҡтары, эҙләнеүҙәре, асыштары менән шаҡ ҡатырыр әле беҙҙе!”

Мәктәп директоры – фән докторы! Бындай күренеш әлегә тиклем Башҡортостанда бөтөнләй юҡ ине, ә СССР-ҙа дүртәү генә. Кандидатлыҡ дипломын алыуҙың икенсе йылында уҡ ул Рәсәй Педагогика әм социаль фәндәр академия ының тулы хоҡуҡлы ағза ы итеп айлана. Дуҫтары ла, дошмандары ла аптырай: нисек инде ул кандидат ҡына башы менән академик дәрәжә енә барып еткән? Берәй “йөнтәҫ” ҡулы барҙыр Мәскәүҙә йә академия халҡын ныҡ ҡына “ ыйлағандыр”.

Эйе, бар ине шул, тик “йөнтәҫ” түгел, ә Ильяс Вәлиевтың үҙ ҡулдары ине, үҙ аҡылы, үҙ тырышлығы әм, үрҙә ҡабатланыуынса, үҙ ныҡышмалылығы, тик үҙенең генә хәләл көсө. Ҡаҙағстанда йәшәгәндә үк Ильястың район әм өлкә гәзиттәре менән хеҙмәттәшлек итеүе тура ында әйткәйнек. Кем белә, бәлки, артабанғы тормош юлын журналистика менән дә бәйләп ебәрер ине, әммә Башҡортостанға ҡайтҡас был шөғөлөнән дүрт йылға туҡталып тора. Тик 1982 йылда ғына матбуғат менән бәйләнеш булдыра, ләкин яҙғандарының тематика ы үҙгәрә: педагогика әм тарих, йәш быуынды патриотик рухта тәрбиәләү. Кандидатлыҡ диссертация ының тема ы ла – педагогика: “Самоуправление учащихся как средство эффективности патриотического воспитания”. 1999 йылда Мәскәүҙә яҡланған “Этнопедагогические основы патриотического воспитания школьников” докторлыҡ диссертация ы ла ошо рухта. “Ҡуйылған проблеманың актуаллеге,– тип яҙа унда Вәлиев бөгөнгө социаль-иҡтисади шарттарҙан сығып,– уҡыусыларҙа патриотик тәрбиәне фәнни яҡтан тәьмин итеү йәмғиәт ихтыяждарынан сығып билдәләнә. Сөнки уңғы йылдарҙағы патриотизм төшөнкөлө, ҡурҡыныс күренешкә әйләнде. Илдең үткәненә кире ҡараште тәрбиәләнгән тулы бер быуын үҫеп сыҡты. Улар өсөн “патриот” үҙе реакционлыҡ әм иҫкелек төшөнсәләренә әйләнде. Патриотизм мәсәлә е бөгөн бик киҫкен тора, шуға ла уның теоретик әм ғәмәли ҡуйылышы педагогия фәне өсөн ҙур ә әмиәткә эйә. Был мәсьәләнең педагогик, тарихи-философик планда әлегә тиклем киң яҡтыртылыуына ҡарамаҫтан, уҡыусыларға патриотик тәрбиә биреү мәсьәлә е бөгөн дә көн үҙәгенән төшмәгән.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 165



Патриотизм төшөнсә е юғала, кире күренештәр көсәйә барған заманда был айырыуса мө им.

Йәш быуынға патриотик тәрбиә биреү өлкә енән иң ҙур мәҙәни ҡатлам — халыҡ тормошо, ғөрөф-ғәҙәттәре төшөп ҡалды. Үҙ халҡындың мәҙәни ҡомартҡыларын хөрмәт итеү — кешенең эске мәҙәнилегенең бер генә сағылышы ул, әм патриотизм халыҡтың юғары әхлаҡи ҡиммәттәренә тоғролоғонда үҙен иҙҙерә лә инде. Ул быуаттар төпкөлөндәге милли аң сығанаҡтарына барып тоташа. Беҙҙең маҡсат — этнопедагогика ҡағиҙәләре нигеҙендә патриотик тәрбиәнең өҙөмтәле юлдарын табыу.

Илебеҙҙәге уңғы үҙгәрештәр мәктәптә тарих фәнен өйрәнеүгә кире йоғонто я -амай ҡалманы, әлбиттә, әм етди проблемалар тыуҙырҙы. Улар ара ынан тарихи ваҡиғаларҙы әм күренештәрҙе аңлатыуҙа объектив ҡараштарҙың әм йүнәлештәрҙең юғалып ҡалыуы, мәктәптә тарихты өйрәнеүҙең маҡсаттарын әм бурыстарын аңламау, курс йөкмәтке енең тотороҡ оҙлоғо, дәреслектәрҙең түбән йөкмәткелелеге, уңғы йылдарҙағы яңы күренештәрҙең аңлайыш ыҙлығы ла патриотик тәрбиәнең насарайыуын асыҡ күр әтте. Шуға ла мәктәптәрҙә тарих фәнен уҡытыу маҡтанырлыҡ түгел, уҡыусылар тарихи ваҡиғаларға ышанмай. Нәфис әҙәбиәт менән ҡыҙыҡ ыныусылар ҙа кәмегәндән-кәмей. Уның урынын мажаралы, енси өйөү йүнәлешендәге китаптар алмаштыра.

Был көрсөктән сығыу юлдары бармы әм улар ниндәй йүнәлештә барырға тейеш? Беренсенән, йәштәрҙе патриотик тәрбиәләүҙең дәүләт программа ын эшләргә кәрәк. Ул барлыҡ звеноларҙы — ғаилә, мәктәп, юғары уҡыу йорто, хеҙмәт коллективтарын үҙ эсенә алырға, йәштәрҙә Рәсәй Конституция ына, закондарға хөрмәт уятырға, дәүләтте аҡлау тойғо он үҫтерергә, хәрби хеҙмәткә ыңғай ҡараш булдырырға, уҡыусыларҙы илдең мәҙәни иммәттәренә, тарихына, армияға хөрмәт менән ҡарарға өйрәтеүҙе үҙ эсенә алырға тейеш. Тик шул саҡта ғына балаларыбыҙ Ватанына, тыуған еренә, уның яҙмышына вайым ыҙ манҡорт булып түгел, ә ысын патриот булып үҫәсәк”.

Ильяс Вәлиевтың биография ынан юлдар: “1991 — 2000 йылдарҙа Өфөләге 124-се урта мәктәп директоры, 2000 — 2004 йылдарҙа Башҡортостан дәүләт аграр университетының әҙерлек бүлеге проректоры — юғары уҡыу йортона инеүгә әҙерлек буйынса лицей директоры, 2005 йылдан Өфө дәүләт иҡтисад әм сервис институтының (хәҙер академия) педагогика әм психология кафедра ы мөдире булып эшләй”.

Был миҙалдың бер яғы ғына. Уның эске яғына Ильяс педагог та, әҙәбиәтсе лә, журналист та, тарихсы ла, философ та, эколог та, геральдика, ауыл хужалығы, мәҙәниәт белгесе, ойоштороусы-тәжрибәсе лә булып баҫа.

“Ни өсөн ауыл мәктәптәрен тамамлаусылар юғары уҡыу йорттарына ирәк инә? Уларҙы ла ҡала мәктәптәренән айырылмаған программа буйынса уҡыталар бит. — Был ораү Ильясты тәүге йыл ғына борсомай, тынғылыҡ бирмәй. — Бәлки, уҡытыу насарҙыр? Йә и ә мәҙәни әм белем үҙәктәренән алыҫ ауыл йәштәре ҡала мөхитендә юғалып ҡалалыр әм мәктәп биргән белемдәрен дә күр әтә алмайҙыр? Ә бит төптәнерәк уйлағанда, республиканың бөгөнгө етәкселәренән алып яҙыусылар, сәнғәт эшмәкәрҙәре, сәнәғәт, төҙөлөш тармаҡтарының күбе ендә етәксе урындарҙа шул уҡ ауыл егеттәре әм ҡыҙҙары ултыра. уңғы йылдарҙа ғына улар бер аҙ кәмей төштө. Ни өсөн? Әллә юғары власть даирәләренең ауыл хужалығына иғтибары кәмеүе шауҡымымы? Өрлөктәй ауыл егеттәре Себергә эш эҙләп китә, шунда төпләнеп, бала-саға ын манҡорт итеп үҫтерә...”

Ҡапыл Ильястың башына ҡыйыу фекер килде. Әгәр берәй юғары уҡыу йорто менән өйләшеп, унда 9-сы класты тамамлаған ауыл балаларын, юғары уҡыу йортона инергә әҙерләү өсөн тәжрибә рәүешендә махсус мәктәп йәки лицейҙы асҡанда? Башҡортостан дәүләт аграр университеты бының иң ҡулайлы ы булыр. Тәжрибә үҙен аҡла а, уны башҡа юғары уҡыу йорттарына ла таратырға мөмкин.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 166



Ошо уйҙарын ул университет ректоры Владимир Недорезков менән уртаҡлашты. Ректор ҙа ауыл улы бит, ҡарышманы, әм 2002 йылдың 21 мартында университет эргә ендә лицей ойошторолдо. Уға тәүге 23 уҡыусы имтихан тапшырыу юлы менән ҡабул ителде.

Башланғыс "яза ыҙ" ҡалмай, тигән мәғәнәле әйтем бар. Лицей директоры, бер үк ваҡытта университеттың әҙерлек бүлеге проректоры итеп Ильяс Вәлиев тәғәйенләнә. Көн уҙ ын, сабата туҙ ын, тип эшләмәй Ильяс, 23 уҡыусы ының 22-е аграр университеттың төрлө факультеттарына уҡырға инә. Лицейҙың абруйы, уҡыусылар аны арта. Тик Ильяс Вәлиевтың Өфө дәүләт иҡтисад әм сервис академия ына эшкә килеүе менән лицейҙағы уҡыу ҡапыл туҡталып ҡала. Сөнки Ильяс Иштуған улы ымаҡ инициативалы, эш өсөн янып-көйөп йөрөгән ҡыйыу әм булдыҡлы ғалим-тәжрибәселәрҙе бөгөн көндөҙ сыра яндырып эҙлә әң дә табып булмай.

Киң билдәле урыҫ сатиригы Козьма Прутков: "Сиге булмағанды ҡоса алмаҫ ың",– ти ә лә, беҙ Ильяс Вәлиевтың хеҙмәт юлына, бөтә китаптарына туҡталып тормай, тик икәү енә генә күҙ йүгертмәксебеҙ. Академик И.Вәлиевтың киң ҡарашлы ғалим, аҡыл эйә е, ҡыйыу тәжрибәсе икәнлеген раҫлау өсөн генә. Китаптарҙың тәүге е "Символдар менән тәрбиәләү" 2004 йылда, икенсе е "XX йөҙ йыллыҡта Рәсәй ауылы" 2006 йылда донъя күргән. Тәү ҡарашҡа был ике китаптың педагогикаға бер ниндәй ҡатнашлығы юҡ ымаҡ, әм үҙе белмәгән өлкәгә Ильяс нисек барып керҙе икән, тип уйлап та ҡуя ың. Бар икән шул. Әле боронғо ҡытай философы Конфуций: "Донъя менән үҙ әм закон түгел, ә билдәләр әм символдар идара итә",– тип әйтеп ҡалдырған. Уға таянып, И. Вәлиев та тәүҙән үк символдарҙың ижтимағи тормошта әм йәмғиәттә мө им роль уйнауын ыҙыҡ өҫтөнә ала.

Артабан шул фекерен үҫтерә барып, уларҙың ыңғай әм кире яҡтарын аныҡ миҫалдар менән нығыта. Ә символ үҙе нимәне аңлата уң? Боронғо грек теленән алынған был үҙ "бергәләп ташларға" мәғәнә ен бирә. Тәүҙә ул предметтың бер өлөшөн генә аңлатҡан. Әйтәйек, уртаға киҫелгән балдаҡтың ярты ы – бер кешегә, икенсе е икенсе енә бирелә. Байтаҡ ваҡыт үткәс, улар осраша әм үҙҙәренең кемлектәрен белдереү өсөн ошо балдаҡтың өлөштәрен күр әтә. Тимәк, ин дошман түгел, үҙ кеше. Әйтер ең, гректар менән беҙҙең ата-бабалар өйләшеп ҡуйған. Юлда ике башҡорт осраш а:

– -а-ай, уҙаман, ағасың нимә? – тип орар булғандар.
– Тирәк.
– Ҡошоң?
– Ҡыйғыр.
– Ораның?
– андал.
– Тамғаң?
– Ярым ай.
– Тимәк, ин Әйле башҡорто?
– Нәҡ үҙе, яҡташ.
– Әйҙә, үт, юлың уң бул ын!

уңынан был тамғаларҙы мал-тыуарға ла өтөп баҫҡандар, солоҡ ағастарына уйғандар, сабынлыҡ, көтөүлектәрҙе, хатта зыяраттағы нәҫел урындарын билдәләгәндәр. Шулай итеп, ырыу ҡоролошондағы тамғалар үҙенең сығышы, билдәләүсе әм берләштереүсе көсө менән бөгөнгө дәүләт гербтарын хәтерләтә, символдарҙың ата-бабалары ролен үтәй.

Ильяс Вәлиев символдарҙың ниндәйҙер үрәт, абстракт төшөнсә түгеллеген раҫлай. Символдар рухи мәҙәниәттә лә, сәйәсәттә лә, ижтимағи мөнәсәбәттәрҙә лә ҙур мәғәнәгә эйә. Идеологик көрәштә уның тәьҫире айырыуса ҙур. Ярты быуаттан ашыу инде АҠШ иммәттәренең башҡа илдәргә, донъя халыҡтары мәҙәниәтенә

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 167



көслө баҫымы бара. Көнбайыштың рухи имməттәре Рәсәйгә лә килеп керҙе əм ул йылдан-йыл киңәйә, көсәйә. Ете ят символдар, традициялар, идеялар көсләп тағыла, быуаттар буйы аҡланып килгән ғөрөф-ғәҙәттәрҙең нигеҙҙәрен емерә. Нәҡ символдар, билдәләр əм эмблемалар көндәлек тормошобоҙға, теләк əм ҡылыҡтарыбыҙға, ихтыяждарыбыҙға нығ тәьҫир я ай, улар халыҡ хәтеренең дә, айырым шәхестең дә мө им өлөшөн тәшкил итә. Күнегелгән ыңғай символдар кешелә өмөт, көс, ышаныс тыуҙыра, киреләре и ә рухты ындыра, ышанысты юғалта. Уларға ҡаршы, ти И. Вәлиев, беҙ үҙебеҙҙең дәүләт, этник, дини, мәҙәни символдарҙы ҡуйырға тейешбеҙ.

Китапта үҙ өс төрлө флаг-триколорҙың барлыҡҡа килеүе əм Рәсәйҙең дәүләт флагы итеп ҡабул ителеүе хаҡында ла бара. Хәҙерге Рәсәй хакимдарының белдеге менән генә дәүләт символына әүерелгән аҡ-зәңгәр-ҡыҙыл байраҡты Петр I заманында сауҙа флоты әләме итеп файҙаланғандар. Уны хатта батша Николай II Рәсәйҙең дәүләт флагы итеп раҫламаған. Рәсәй дәүләтенең рәсми флагы итеп Романовтар нәҫеленең ҡара- ары-аҡ төҫтәге триколоры алына. Сауҙа флоты әләменең дәүләт флагы итеп раҫланыуы ис тә аңлашылмай, ул кире тойғолар ғына уята. Сөнки, И. Вәлиев раҫлауынса, аҡ-зәңгәр-ҡыҙыл әләм аҫтында Рәсәй дәүләтенә йыш ҡына дошмандар баҫып инер булған. Әйткәндәй, аҡ-зәңгәр-ҡыҙыл флаг Власов армия ының да байрағы итеп алынған. Боронғо урыҫ кенәздәренең флагтары əм вымпелдары, кире енсә, ҡыҙыл төҫтә була. Ҡыҙыл төҫ урыҫта матурлыҡты, батырлыҡты, сәләмәтлекте аңлатҡан. Ул – йәшәү, дошмандарға ҡаршы көрәш билдә е. “Урыҫ халҡының дәүләтселек символы булып борон-борондан ҡыҙыл флаг иҫәпләнгән,– ти артабан автор. – Ҡыҙыл әләм аҫтында ул үҙ дәүләтселеген төҙөгән, киңәйткән, нығытҡан, аҡлаған. Халыҡ та, сиркәү ҙә, дәүләт үҙе лә ҡыҙыл флаг менән берләштерелгән... Бөйөк Еңеүебеҙҙең байрағы ла – ҡыҙыл флаг”. Еңеү флагын еңелеү, тар-мар ителеү əм, шуны ы ғәжәп, илебеҙҙең, халҡыбыҙҙың хас дошманы, фашистар ялсы ы Власовтың флагына алмаштырыу үҙе үк рухи ҡиммәттәребеҙҙең аяҡ аҫтына алып тапалыуын аңлатмаймы икән!?

Ильяс Вәлиев герб, гимн, әйкәлдәр, дәүләт наградалары, айырым шәхес-символдар, күренештәр, дин, дата символдары тура ында ла мауыҡтырғыс əм ышаныслы итеп өйләй. Сөнки улар бөтә е лә – символдар əм йәш быуынды патриотик тәрбиәләүҙә мө им урын тота.

Хәҙер Ильяс Вәлиевтың, ауыл хужалығы белгесе сүрәтендә, “XX йөҙ йыллыҡта Рәсәй ауылы” тигән китабына иғтибар итәйек. Ғәжәп бит, ауыл хужалығына ҡағылышлы бер ниндәй ҙә белеме булмаған педагог ҡапыл ауыл хужалығы белгесе булып кит ен әле. Автор үткән 100 йылда Рәсәй ауыл хужалығының үҫешен бәйән итә, уның ыңғай əм кире күренештәренә туҡтала.

Беренсе урыҫ инҡилабы ер мәсьәлә ен көн үҙәгенә ҡуя. Унда эшселәр менән бер ҡатарҙан ер еҙ крәҫтиәндәр ҙә әүҙем ҡатнаша əм алпауыт имениеларын ҡыйрата, яндыра. Был илдә аграр реформа үткәреү мәсьәлә ен күтәрә. 1906 йылдың 8 майында Дәүләт дума ы аграр мәсьәләне тәүләп көн тәртибенә индерә, əм ер буйынса ҡыҙыу бәхәстәргә юл асыла. Ултырыштарҙың бере ендә Министрҙар Советы рәйесе Петр Столыпин да үҙ ала əм ерҙе дәүләт ҡарамағына алыуға ҡырҡа ҡаршы сыға. Унынса, ерҙе алпауыттарҙан тартып алып, крәҫтиәндәргә таратып биреү – ҙур хата буласаҡ. Хөкүмәт быға юл ҡуймаясаҡ. Тиҙҙән бөтә Рәсәйҙе дар ағастары – “Столыпин галстуктары” ялмап ала. Автор кире ҡаҡҡы ыҙ миҫалдар менән Столыпин реформа ының халыҡ өсөн зарарлы икәнлеген раҫлай.

Рәсәй ауыл хужалығының артабан нисек үҙгәреүен И.Вәлиев “Совет власының тәүге йылдарында аграр сәйәсәт”, “И.В. Сталин дәүерендә совет ауылы”, “Н.С. Хрущев ваҡытында совет дәүләтенең аграр сәйәсәте”, “Л.И. Брежнев осоронда совет ауылы”, “Б.Н. Ельцин əм В.В. Путин ваҡытында дәүләттең аграр сәйәсәте” тигән бүлектәрҙә сағыу əм аныҡ миҫалдар менән үрәтләй. Китап ундағы мәсьәләләрҙе төрлө яҡтан төплө дәлилләүе менән иғтибарҙы үҙенә тарта. Ул ауыл

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 168



хужалығын социалистик үҙгәртеп ҡороуҙы кире ба алауҙарға ҡаршы сыға.

Бөгөнгө ауыл хужалығының көрсөккә терәлеүен автор Столыпин аграр реформа ының ҡабатланыуы тип атай әм “беҙҙең көндәрҙә капиталистик нигеҙҙә яңы алпауыт барлыҡҡа килә башлауын” иҫкәртә.

“Рәсәйҙә, тип йомғаҡлай ул үҙен, аграр реформалар кәрәк, ләкин улар емереү түгел, ә ижади үҫтереү рәүешендә булырға, ауыр иҡтисади хәлгә төшкән икенсе илдәр халҡын талап байырға ятраҡан сит ил байҙары файҙа ына түгел, ә үҙ йәмғиәтебеҙ мәнфәғәтенә хеҙмәт итергә бурыслы”.

Рәсәй ауыл хужалығының 100 йыллыҡ икәлтәле юлына ғәҙел байҡау я ап, Ильяс Вәлиев ауыл хужалығы тарихын артабан үҫтереүгә ҙур өлөш индерҙе. Уның был хеҙмәте атаҡлы селекционер Терентий Мальцев миҙалы менән ба аланыуы ис тә ғәжәп түгел.

Оҙайлы әм ҡатмарлы ижад юлында Ильяс Вәлиев наградаларҙы байтаҡ ала. Тәүге е — ГДР-ҙың “Халыҡ мәғарифы өлкә ендәге уңыштары өсөн” билдә е уға 1984 йылда уҡ тапшырыла. Артабан ул бер-бер артлы РСФСР-ҙың халыҡ мәғарифы отличнигы, СССР-ҙың мәғариф отличнигы, Рәсәй Федерация ының дөйөм белем биреүҙең почетлы хеҙмәткәре билдәләре, ВЛКСМ Үҙәк Комитетының Маҡтау грамота ы, К.Д. Ушинский, Муса Йәлил, Т.С. Мальцев миҙалдары, “Мостай Кәрим — сәйәси-мәҙәни донъя тура ында”ғы Рәсәй гуманитар-ғилми фонды гранты менән бүләкләнә. Уға Степан Злобин исемендәге, академик Г.Н. Волков исемендәге тармаҡ премиялары, “Башҡортостан Республика ының атҡаҙанған уҡытыусы ы” исеме бирелә.

Миңә ҡал а, Ильяс Вәлиев Мостай Кәрим ижадына арналған хеҙмәттәре өсөн Салауат Юлаев исемендәге премияға ла күптән лайыҡ. Халыҡ-ара педагогия, Рәсәй Педагогия әм социаль Фәндәр академия ының тулы хоҡуҡлы ағза ына ни өсөн Башҡортостан фәндәр академия ында урын табылманы икән?

Ильяс Вәлиев — ҡатмарлы, ҡаршылыҡлы шәхес. Берәүҙәр уның хеҙмәттәренә ыңғай ба а бир ә, икенселәр уҫал, артыҡ ҡәтғи, ма айыусан кеше тип атауҙан да тартынмай. Ысынлап та кем уң ул Ильяс Вәлиев?

— Директор ҡәтғи, аныҡ, талапсан булырға тейеш, — тигәйне ул бер саҡ, туранан-тура ошо ораuҙы биргәс. — Әммә бәғзе берәүҙәргә минең ошондай холҡом уҡ булып ҡаҙала. әр үҙемдән хата, кәмселек эҙләйҙәр, арттан йоҙроҡ төйнәп ҡалалар. Дошмандар кәрәк ул. Улар булма а, эшең дә бармаҫ ине. Кемдең эше юҡ, шуның дошманы ла юҡ. Ләкин миңә асыҡ дошмандар мәкерлеләренә ҡарағанда яҡыныраҡ. Рыя дуҫтан тура үҙле дошман артыҡ. Асыҡтан-асыҡ көрәш әң, ин үҙең дә кемлегеңде аңлай башлай ың. Дошмандар, әлбиттә, аулығыңды ла ҡаҡшата, ләкин тормош көрәшкә ҡоролған бит, унан ҡотолоу мөмкин түгел.

Мәскәү өлкә енең Н. Крупская исемендәге Дәүләт педагогия институтының кафедра мөдире, педагогия фәндәре докторы, профессор, Рәсәй Мәғариф академия ының тулы хоҡуҡлы ағза ы Василий Журавлев 1990 йылда уҡ Ильясҡа бүләк иткән “Педагогика в системе наук о человеке” тигән китабына “Башкирскому Макаренко Ильясу Иштугановичу на память” тип яҙғайны. Тормоштоң әсе енсөсө өн үҙ елкә ендә татып үҫкән, Башҡортостанда мәктәп реформа ын тәүгеләрҙән булып башлаған, Мостай Кәрим ижадын бөтөнләй икенсе яҡтан тикшереп, төплө анализ я аған Ильяс Иштуған улы ысынлап та быңдай сағыштырыуға лайыҡ бит!

**Ризван ХАЖИЕВ**.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 169



# ЙЫЛДАР АША ТАПТЫ РУХЫ ТЫНҒЫЛЫҠ

*Йәш сағым, алтын сағым,*
*Ялҡын сағым бул ын фиҙа*
*Халҡым алдында минең*
*Биргән таҙа антым өсөн...*

Башҡорт әм татар шиғриәтендә фажиғәле яҙмышлы исемдәр аҙ түгел, әммә бере ен дә Шәйехзада Бабич яҙмышы менән сағыштырып булмай. Тыуыуына йөҙ ҙә ун өс йыл үткән. Шағир ғүмеренең әр миҙгеле хәсрәт-көйөнөс әм ағыштарҙан ғына туҡылғандай тойола. Тойола, сөнки бөтә ижады, кире енсә, романтика, яҡтылыҡҡа ынтылыу, ғәҙеллек тантана итәсәгенә ышаныу менән уғарылған.

Шағирҙы бик оҙаҡ, интектереп, тынғы белмәҫ есеменең әр күҙәнәгенән ҡанын тамсылап тигәндәй ағыҙып яҙалағандар, ахыры ы. Был үлем ифрат ауыр булғандыр, әмәлгә ҡалғандай, ижадына ҡарата ла шундай уҡ рәхим еҙлек күр әтелгән. Төрлө дәүерҙәрҙә өс тапҡыр аҡланған исеменә өс тапҡыр ҡара яғылып, онотоуға дусар ителгән тағын берәй шағир бармы икән?

Риүәйәттәрҙәге Феникстай, йәнә әм йәнә яралған, шағир, йәмәғәт әм дәүләт эшмәкәре, журналист, алдынғы идеялар йөрөтөүсе әм күренекле шәхес Әхмәтзәки Вәлидиҙең көрәштәше булараҡ йәнә үҙе тура ында өйләргә мәжбүр иткән.

*“Шәйехзада Бабичты халыҡ бик яратты. Ул татар әм башҡорт телдәрендә бик матур шиғырҙар яҙҙы. Уның әҫәрҙәрендә 1917 йылда башланған инҡилап осоро әм беҙҙең азатлыҡ хәрәкәте асыҡ сағылыш тапты. Бабичтың башланып та, яҙылып бөтмәгән әҫәрҙәре бар ине...*

**Зәки Вәлиди Туған”.**

2007 йылдың көҙөнән бирле Йылайырҙа Шәйехзада Бабич кәүҙә енең ҡалдыҡтары табылыу тура ында имеш-мимеш хәбәрҙәр ишетелә башланы. Райондың “Йылайыр уттары” гәзитендә эшләгән ҡәләмдәштәремә шылтыратырға ашыҡтым. Тапҡандар, әммә был — бәхәсле мәсьәлә әм асыҡ ҡына бер ни ҙә әйтеү мөмкин түгел. Табылған өйәктәрҙе тикшереү өсөн ваҡыт кәрәк.

Декабрь аҙаҡтарында Дүртөйлө районы Әсән ауыл Советы муниципаль биләмә е башлығы Тимерхан Нәбиев раҫланы: табылған өйәктәрҙең ысынлап та бөйөк яҡташыбыҙҙыҡы булыуы тура ында хәбәр алынған.

Шағир тура ында биографик очерктан:

*“Шәйехзада Мөхәмәтзакир улы Бабич Өфө губерна ының Бөрө өйәҙе (хәҙерге Дүртөйлө районы —* ***Х.Н.****) Әсән ауылында 1895 йылдың 2 ғинуарында мулла ғаилә ендә тыуған. Башланғыс белемде тыуған ауылындағы мәҙрәсәлә, ата ында, алған. Бик әләтле булған, бала саҡтан уҡ матур әҙәбиәт менән мауыҡҡан. Ғ.Туҡай әм М.Ғафури шиғырҙарын уҡыған”.*

Тыуған ауылында бик аҙ йәшәй Шәйехзада. Ун биш йәшенән ҡаҙаҡ далаларын гиҙеп, кешеләргә мәғрифәт нуры өләшә. Шул рәүешле икенсе бер башҡорт мәғрифәтсе е Аҡмулланың батырлығын ҡабатлай. Балаларҙы уҡырға-яҙырға өйрәтеү менән бер рәттән, үҙе лә ҡаҙаҡ аҡындарынан күп нәмәгә өйрәнә, туғандаш халыҡ-

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 170



тың мәҙәниәте менән таныша. Бәлки, нәҡ бына шул йылдарҙа халҡына тоғро булырға ант иткәндер ҙә. Мәңгелеккә.

*Ап-аҡ алтын йырҙарымды*
*Йырламайым данлыҡ өсөн:*
*Йырлайым алтын илем өсөн,*
*Үҙ туған халҡым өсөн.*

Ул быуын иртә олоғая, йәшлектәре ҡыҫҡалығын өлгөрөш осоро аҡлай. Яр ыулы дәүер, ялҡынлы ғүмер. Ихтимал, көндәре йылдарға торғандыр. Бабичтың ғүмере – гүйә, пуля осошо, ҡылыс сыңы. Әсән Прометейы күңелендә яралған шиғырҙар беҙ белмәгән тарихҡаса дәүер ағастарының ыҫмалаларылай ҡатып ҡалған. Ҡатып ҡалған әм йылдар ҡатламына арылған. Кеше ҡулдары тыуҙырған ел-дауылдар уларҙы халыҡ хәтере утрауҙарына килтереп сығарған, әммә оҙаҡҡа түгел, сөнки тағы ла юҡҡа сығарған. Йәнә хәтерҙәрҙе ҡалҡытҡан, тик был юлы элеккенән шаҡтай аҙ кешеләрҙең хәтерендә. әм ана шулай ҡабатланып торған.

Әсән мулла ы Мөхәмәтзакир ихата ында үҙенең донъяға килеүе тура ында хәбәр иткән сабый ауазы, бәлки, ваҡыт ыҙ булғандыр? Кем белә, бәлки, ул тарих ынылышындағы хәл-ваҡиғалар илсе е – оран алыусы булғандыр. Хәйер, хәҙер фараз итеп тора ы бармы ни? Шағирҙың тынғы белмәҫ күңеле тыныслыҡта ғына ижад итә алды микән әле? Ел-дауылдар өсөн тыуған йән бит ул? Тынғы ыҙлығы менән башҡаларҙы ла үҙенә әсир иткән кешеләр була. Бына ҡайҙа ул ут-ялҡын өйөрмә е, фекерҙәр тулҡыны, идеялар фонтаны!

Бәлки, ут эсенә инергә кәрәкмәгәндер? Тыныс ҡына көтөргә лә, ҡай ы берәүҙәр кеүек, унан ғына тауыш бирергә кәрәк булғандыр? Ә беҙҙең милли әҙәбиәт (киңерәк итеп алғанда, барлыҡ мәҙәниәт) ис отолмаҫ, кире енсә, Урал гәү әрҙәренең яңы төҫтәре менән тулыланыр ине. Был йә әттән меңләгән ораuҙар бирергә була, ләкин яуабы ғына бер, уны беҙҙең классигыбыҙ –дәүеребеҙ намыҫы әйтте:

*“Бабич кеүек шағирҙар бер ҡасан да көрәштән ситләшмәне әм башҡалар арҡа ына ышыҡланманы. Ғүмер, ижад, үлем – бере е икенсе енән айырылғы ыҙ. Ысын шағирҙы шулай ҡабул итәбеҙ.*

**Мостай Кәрим”.**

Шәйехзада Бабич – үҙ дәүеренең күренеше әм асылы. Ул шунда, үҙ осоронда, тулы ынса әм бар булмышы менән!

Шағир тура ында биографик очерктан:

*“1911 йылдың көҙөндә, Өфөгә ҡайтҡас, Бабич “Ғәлиә” мәҙрәсә енә уҡырға инә. Ошонда уҡығанда әҙәбиәт менән мауыға, әҙәбиәт әм музыка түңәрәктәрендә шөғөлләнә, яҙғандары “Парлак” әҙәби ҡулъяҙма журналда донъя күрә.*

*1916 йылда “Ғәлиә” мәҙрәсә ен тамамлағас, Бабич Троицкиҙа мөғәллимлек итә. “Аҡмулла” журналында үҙенең беренсе сатирик әм юмористик шиғырҙарын баҫтыра”.*

Тормош тәжрибә е туплай яҡташыбыҙ, ҡәләмен шымарта әм танылыу ҙа яулай, күрә ең. Әҙәби даирәләрҙә уның менән иҫәпләшә башлайҙар. Ата ы мәҙрәсә-ендәге беренсе мөғәллиме Хаммат Ғайсин дәрестәренең ярҙамы тейә. Күстәнәйҙән йыраҡ түгел Дүсәнбай ауылынан ҡаҙаҡ Мортаза йортонда аҡындар менән аралашыуҙар ҙа эҙ еҙ генә үтмәгәндер.

Үҙенән өлкәнерәк Мәжит Ғафури әм Ғәлимйән Ибра имов, йәштәше Сәйфи Ҡудаш менән осраша. Бабичтың ҡыйыулығы етерлек була. Ғабдулла Туҡай иҫән саҡта уҡ бөйөк татар шағирына бағышлап шиғыр яҙа, үҙенең остазының ижадына ба а бирә:

*ис тә уфтанма, күңел еҙ*
*Булды, тип, ғүмерем башы,*
*Алда ғүмереңдең мөзәййән,*
*Аллы-гөллө ахыры бар.*

Күңел түрҙәрен нурландырырлыҡ шиғыр юлдарын ашҡынып, ис көсәнмәйенсә, уйнап тигәндәй яҙа ул. Ана шулай уға танылыу килә, ҡәләмдәш дуҫтар таба.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 171



Сәйфи Ҡудаш менән бик дуҫлаша. Шуны ы асыҡ билдәле: 1917 йылдың июнендә ул ваҡытта Өфө губерна ы Өфө кантонының Келәш ауылында ҡунаҡта була. Ике халыҡ шағиры: Сәйфи Ҡудаш әм Мостай Кәримде, халыҡ артистка ы Фәриҙә Ҡудашеваны биргән ауыл ул. Данлыҡлы яҡташыбыҙҙың ғүмере ҡыҫҡа булма а, был дуҫлыҡ артабан да дауам итер ине. Шағирҙың еңле е Фәсәхәт апай ҙа ана шул хаҡта өйләнә.

Бабичтың ижади мираҫын, тормош юлын өйрәнеүгә ҙур өлөш индергән тарихсылар, яҙыусылар, йәмәғәт эшмәкәрҙәре, тыуған яҡты өйрәнеүселәр, ғөмүмән, шул утлы йылдарҙың ша иттарынан тиҫтәләрсә исемдәрҙе телгә алырға мөмкин. Улар тарихи ғәҙеллекте тергеҙеү өсөн Ш.Бабич хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе бөртөкләп йыйған. Ана шулай шағир образын күҙ алдына баҫтырғандар, унын шәхси тормошонан айырым факттарҙы тергеҙеүгә ирешкәндәр.

Мәғлүмәттәрҙе йыйыусыларҙың бары ы ла хөрмәткә лайыҡ бул а ла, бере е айырыуса ололап телгә алырлыҡ. Был – Фәсәхәт Мөхәмәтзакир ҡыҙы Бабичева. Ул ағаының исемен мәңгеләштереп кенә ҡалманы, бәлки, унын биография ындағы “аҡ тап”тарҙы ла асыҡланы. Иҫбатланы, документтар әм ша иттар эҙләне, тапты, етәкселәрҙең ишеген аҙ ҡаҡманы, байтаҡ кешеләрҙе юллап таба алды. Бына шулай үҙ үҙендә ныҡ тороусанлыҡ, тәүәккәллек уға, бәлки, аға ынан күскәндер ҙә.

Фәсәхәт Бабичеваның тормошо еңел булмай. Туғыҙ йәшендә үк еҙ етем ҡала. Әсәндән Мишкә районына күскән ата ы менән әсә е 1922 йылда бер-бер артлы аслыҡтан вафат булғас, әле бер, әле икенсе кешелә ыйыныр урын эҙләй. Аға ының яҡты исемен ҡайтарыуҙы бик йәшләй тормошоноң маҡсаты итеп ҡуя. 20-се йылдарҙа Бабичтың көрәштәштәрен әм туғандарын эҙәрлекләүҙең сираттағы тулҡыны башланғас, Фәсәхәт Урта Азияға сығып китергә мәжбүр була, Пермь өлкә ендә йәшәй. Урындағы тыуған яҡты өйрәнеүселәр уны эҙләп табалар, ә 1982 йылда Әсәнгә шағирҙың мемориаль таҡта ын асыу тантана ына саҡыралар. Ә ике йылдан ул КПСС райкомының беренсе секретары Рәзил Мусин үтенесе буйынса тыуған ауылына бөтөнләйгә күсеп ҡайта.

Йыш ҡына редакцияға килеп, оло сабырлыҡ менән оҙаҡ итеп өйләшеп ултырыр ине. Вафатына ҡәҙәр бер нисә аҙна элек өс сәғәтләп мөхәррир бүлмә ендә ултырып китте. Хәтере бик яҡшы ине, бөйөк Бабич тура ында өйләне лә өйләне. Хәтирәләр яҙылған зәңгәр тышлы дәфтәр алып килгәнен, бергәләп шуны ҡарағаныбыҙ иҫтә. Яҙмаларын баҫтырыу тура ындағы тәҡдимде апай шатланып ҡабул итте, әммә дәфтәрен ҡалдырманы, еренә еткерә ем бар әле, тип аңлатты. Унын вафатынан уң дәфтәр, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, юҡҡа сыҡты. Ул көндәлек алып бара ине, уларҙың бер өлөшө генә тыуған яҡты өйрәнеүсе Фә им Иҙрисовта аҡлана.

Шул көндәрҙә редакцияға гәзит уҡыусыбыҙ шылтыратты әм үҙендә Фәсәхәт Мөхәмәтзакир ҡыҙының ҡулъяҙмалары барлығын әйтте, уларҙы беҙҙең хәбәрсегә күр әтергә вәғәҙә итте.

*“ еҙ, дүртөйләләр, бәхетле халыҡ: Шәйехзада Бабичығыҙ бар...*

**Мостай Кәрим”.**

1995 йылда Әсән ауылында Шәйехзада Бабичтың йөҙ йыллығы уңайынан әйкәл асылды. Әйткәндәй, был – ҙур булмаған ғәҙәти генә ын. Скульптор Мәүлетбай Хәлилов аҡланып ҡалған бер нисә рәсем буйынса яҡташыбыҙҙың образын ынландырҙы. уңыраҡ Ш.Бабич әм Н.Нәжми иҫтәлеген мәңгеләштереүгә индергән өлөшө өсөн ул Назар Нәжми исемендәге район премия ына лайыҡ булды. Шул осорҙа шағирҙың йорт-музейы төҙөлөп, унда байтаҡ материал тупланды. Шағирҙың китаптары, замандаштарының иҫтәлектәре, шул йылдарҙағы көнкүреш кәрәк-яраҡтары урын алды.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, шағирҙың үҙ әйберҙәре аҡланмаған тиерлек. Бабичтарҙың өйө торған урынды көтмәгәндә юлын үҙгәрткән буй онмаҫ Кеүәш тулҡындары юйҙырған. Идеологиялағы киҫкен ынылыштар ғына түгел, хатта тәбиғәт тә бөйөк яҡташыбыҙҙы йәберләгән кеүек тойола.

Нәҡ 1995 йылдан Әсән ауылында Бабич уҡыуҙары ла тергеҙелде. Шағирҙар, яҙыусылар әм публицистар, Мәккәләй күреп, Шәйехзаданың тыуған ауылына

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 172



килә. Легендаға әүерелгән кешенең ғүмер сәхифәләрен барлайҙар, уның шиғырҙары, замандаштарыбыҙ әҫәрҙәре яңғырай. “Тергеҙелде” тип ис тә яңылыш әйтмәнем. Бындай уҡыуҙар 20-се йылдарҙа уҡ үткәрелгән булған (был хаҡта миңә күренекле шағир, публицист Ғәзим Шафиҡов өйләгәйне). Улары властар күр әтмә е буйынса бөтөрөлгән.

Ә инде Бабичтың тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы шағир кәүҙә ен үҙ ҡуйынына алған Йылайыр ерендә әйкәл асылды. Был 13 ғинуарҙа булды. Тантаналы ла, шул уҡ ваҡытта хәсрәтле лә митингыла Республика Хөкүмәте ағзалары, күренекле әҙиптәр, журналистар, шағирҙың яҡташтары, туғандары ҡатнашты.

Йылайыр районы хакимиәте башлығы Юнер Вәлиев әлеге ғинуар көнөндә түбәндәгеләрҙе бәйән итте:

– әйкәл баҫыла, Пиза башня ылай янтая башланы. Шуға ла уҙған көҙҙә нигеҙен нығытырға булдыҡ. Әммә экскаватор сүмесенең ҡәберлеккә тура килеүе хаҡында хәбәр иттеләр. Эште туҡтатып, Өфө белгестәренә хәбәр иттем. Улар ҡәберлекте тикшереүгә ең ыҙғанып тотондо. өйәктәрҙең бер нисә кешенеке булыуын әйттеләр. Ә бере енең баш өйәге, аяҡ-ҡул өйәктәренең башҡа өлдәләрҙән бик ныҡ айырылыуы асыҡланды.

Ҡабат ерләү алдынан (2008 йылдың ғинуарында) беҙ Юнер Вәлиев, Дүртөйлө районы хакимиәте башлығы Рауил Дәүләтов менән бергәләп антрополог, медицина фәндәре кандидаты Ринат Йосопов менән өйләштек.

– Был эште ювелир йәки саперҙыҡы менән генә сағыштырырға мөмкин, – тине ул. – аҡланып ҡалған тештәре буйынса йәшен билдәләнек. Улар 24-25 йәштәге кешенеке булыуы ихтимал. Ә бына был урында (ғалим баш өйәген ҡулына алды–**Х.Н.**) өйәк үтәләй тишелгән. Пулянан йә и ә осло әйбер менән уғыуҙан. Тағын шундай бер урын бар – быны ы ҡаты әйбер менән бәрелгән эҙ (ихтимал, наган йәки ҡылыс абы менәндер). Ә бына бында (баш өйәгенең ул яғындағы йөйҙәрҙе күр әтә– **Х.Н.**) ҡылыс эҙҙәре. Башҡа өйәктәре лә ынған. Мәрхүмде нисек ғазаплауҙарын күҙалларға була. Бер үҙ менән әйткәндә, вәхшиҙәр...

Дөрөҫ, был билдәләр буйынса ғына, табылған өйәктәр шағирҙыҡы, тип раҫлап булманы. Ҡулға төшкән материалды әр яҡлап ентекле өйрәндек. Биохимик анализдар үткәрелде. Эш бының менән генә лә бөтмәне әле...

өйәктәрҙе Мәскәүгә, бөтә донъяға билдәле Герасимов исемендәге лабораторияға, ебәрҙек. Баш мейе өйәктәрен билдәле технология буйынса эшкәрткәндән уң иҫ китмәле өҙөмтә алынды: йәш Бабич портретына бик оҡшаш! Ул ғынамы әле: Мәскәү ғалимдары, был өйәктәр... ижади интеллигенция вәкиленеке булыуы ихтимал, тип тә фараз итте. Быны ына тамам таң ҡалдыҡ. Ә бит уларҙың бере е лә кемдең өйәктәрен ебәреүебеҙҙе белмәне. Улары Бабич тура ында ишеткәндәре лә юҡ... Бына бит ул фән! Үлтерелгән батша ғаилә е өйәктәренең ошонда тикшерелеүе ис тә осраҡлы түгел.

*Үләм... ташам... Тормайым, ашам күккә...*
*Үкенмәйем инде үл әм дә.*

Бабичты бик оҙаҡ, йылдар дауамында үлтерҙеләр. Халыҡ хәтеренән дә юйып ташларға маташтылар. Барып сыҡманы! Яҙмыш ихтыяры менән халыҡ намыҫына әүерелә е шәхескә кемдең ҡулы күтәрелде?

Беренсе тапҡыр шағир хаҡында синыфташым, Әсән егете Эдуард Хәмзиндан ишеттем. Уны бик йыш телгә ала торғайны. Әҙәбиәт түңәрәгендә уҡытыусылар менән бергәләп Бабич ижадын өйрәнеүҙәре, уның аҡ гвардиясылар ҡулынан әләк булыуы тура ында өйләй ине. Ихтимал, ул йылдарҙа башҡаса өйләргә ярамағандыр. Ерҙә туғанлыҡ әм тигеҙлек урынлаштырыусы кешеләр башҡа берәүҙең ғүмеренә ҡул уҙа аламы уң?

Әнғәм Атнабаевтың “Шонҡар” драма ында ла шул уҡ версияны күрәбеҙ. Төп герой – шағирҙы аҡтар яуыздарса үлтерә, артабан ат ҡойроғона тағып, өйрәтеп йөрөтә. Пьесала Шәйехзада телгә алынмай бит, тиер егеҙ. Әммә образдың уның үрнәгенән “күсерелеүе”нә ис бер шик юҡ. Ана шул рәүешле хәҡиҡәттән йыраҡ

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 173



торған ҡараш барлыҡҡа килде, сөнки дәүерҙең идеологик ҡанундарына яраҡлашырға кәрәк ине.

Шағирҙың ауылдаштарына рәхмәт — яҡташтарына булған ышанысына хыянат итмәнеләр. Башҡорт дәүләт педагогия университетының кафедра мөдире Ганс Хәкимов шағирҙың тормош юлы тура ындағы мәғлүмәттәрҙе уҡыусыларына даими еткереп торҙо. СССР Журналистар берлеге ағза ы Фәнүз Фатихов мәктәп музейы өсөн материалдарҙы бөртөкләп тигәндәй йыйҙы. Шәйехзада тура ында сәғәттәр буйына өйләй ала ине ул. Нәҡ бына Фәнүз Хәниф улы, шағирҙы ҡыҙылармеецтар вәхшиҙәрсә үлтергән, тип асыҡтан-асыҡ белдерҙе. Әллә төшөнөп бөтмәйенсә, әллә билгеле булмаған башҡа сәбәптәр арҡа ында.

Бабич тура ында бары ы ла бышылдап ҡына өйләгән йылдарҙа ижады буйынса кандидатлыҡ диссертация ы яҡларға баҙнат иткән Ғәлимйән Ғилмановты телгә алмау гона булыр. Ул ғына түгел, шул осорҙа Татарстан Яҙыусылар берлеге рәйесе урынбаҫары, әлеге Татарстан Хөкүмәтендә шаҡтай юғары вазифа биләүсе яҡташыбыҙ Шәйехзада Бабичтың шиғырҙар йыйынтығын ҙур тираж (8700 дана) менән баҫтырып сығарҙы. Әйткәндәй, Бабич әҫәрҙәренең ин унғы баҫма ын.

Юҡ, Бабич яңғыҙ булманы, уны тыуған төйәгендә онотманылар. Йылайырҙа ла иҫтән сығарманылар. Журналист Ильяс Таҡалов бер нисә тапҡыр Әсәндә булып, бай тәьҫораттар туплап китте. Артабан уй-фекерҙәре гәзит биттәрендә донъя күрҙе. Уның сығыштары ҡыйыу ҙа, ҡай ы саҡ бәхәсле лә булды. унғы осрашыуыбыҙҙа Ильяс архивында байтаҡ материал тупланыуы, уларҙы Әсәндәге Бабич музейына тапшырырға теләүе тура ында әйтте. Хәҙергә уларҙы тәртипкә алыу менән мәшғүл.

*“Ғүмеренең унғы көндәрен Бабич беҙҙең яҡтарҙа үткәрә әм, 1919 йылдың шул болғансыҡ көндәре ҡорбанына әүерелеп, ошонда ҡала*, — тип яҙҙы Мотал Рәмов 1990 йылда Йылайырҙың “Коммунизм өсөн” гәзитендә. *— 30-сы йылдарға ҡәҙәр Ш.Бабич әм башҡа күптәр ерләнгән урын бары ына ла яҡшы билдәле. Методик курстар тыңлаусылары ҡәберлекте тәртипкә килтереп, рәшәткәләп ҡуйған. 1924 йылғы фоторәсем дә ана шул хаҡта хәбәр итә.*

*Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡәберлек аҡрынлап онотола әм артабан юҡҡа сыға. Бабичтың исеме тулы ынса аҡланғанға ҡәҙәр уның тура ындағы мәғлүмәттәрҙә “аҡ тап”тарҙың күплеге лә, өҫтәүенә, ҡай ы бер иптәштәрҙең, төрлө имеш-мимештәргә нигеҙләнеп, Бабич иҫтәлеген тергеҙеүгә ҡаршы тороуы ла шуға булышлыҡ иткәндер”.*

Автор аҡлыҡ күр әтә. “Урындағы ҡай ы бер иптәштәр” тиеүе — кемде күҙ алдында тота? иҙелеп тора: ул кемдең ҡаршы булыуын белә, әммә әйтергә ашыҡмай. Тимәк, “урындағы ҡай ы бер иптәштәр” — власть эйәләре. Йәмәғәтселек фекере тыуҙырыуға ҡыҫылырлыҡ, ул ғына ла түгел, хатта сәйәси әм социаль процестарға йоғонто я арлыҡ власҡа эйә булған кешеләр. “Төрлө имеш-мимештәр” тип нимә күҙ уңында тотола? Ғөмүмән, әйтеп еткерелмәгән нәмәләр күп.

*Буйға еткәс тә юғалттым мин*
*Ҡояшымды кинәт,*
*Тик был көндәрҙә түбәмдә тапҡа сумған ай йөрөй.*
*Ә хәҙер күңелем минең боҙҙай туңып, таштай ҡата,*
*Сөнки йөрөгән ерҙәрем тик ҡап-ҡара Турғай ере.*

Бабичҡа ҡара яғыу өсөн ниндәй генә хөсөт уйлап табылмаған. Аҡ гвардиясы, диненән ваз кисеүсе, хыянатсы, йәш Совет дәүләтен бүлгеләүсе Әхмәтзәки Вәлидиҙең көрәштәше, ғорур, буй онмаусан, ижады менән баш-баштаҡлыҡҡа өндәүсе әм, ни әйәт... көсләүсе. Урыҫ ҡыҙын көсләүсе. Әйткәндәй, быны ы сағыштырмаса унғырағы. Уны Шәйехзада бына-бына республикабыҙ әм әҙәбиәтебеҙ тарихында үҙенең законлы әм лайыҡлы урынына ҡайтыр ымаҡ тойолғанда таҡтылар. Бер генә осор, әм ул үтеү менән, Бабич үҙенең бөйөклөгөнә күтәрелер, артабан инде бер кем дә уның исеменә ҡара яға алмаҫ, тип торғанда.

90-сы йылдар башында яҙмыш мине Мәскәүҙә күренекле шағир әм публицист

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 174



Ғәзим Шафиҡов менән осраштырҙы. Ул ваҡытта әҙип, Башҡортостанда йәшәгән бер шағир әҙиә Дәүләтшинаның романын урлаған, тип иҫбатлау идея ы менән яна ине. Әйткәндәй, ул быны иҫбатланы ла. Факт әхлаҡи төшөнсәләрҙән сығып әм яҡтарҙың үҙ-ара килешеүе арҡа ында ғына был хаҡта халыҡҡа мәғлүм ителмәй ҡалды. Эш судта ла бер нисә тапҡыр ҡаралды, уға тиклем яҙыусыларҙың стилистика ын, композиция ын, тел- үрәтләү сараларын өйрәнгән төрлө комиссия ултырыштарында тикшерелде.

Шул ваҡытта уҡ Ғәзим Шафиҡов, Бабичтың бер ҡасан да бер кемде лә көсләмәгәнлеген иҫбатлаясаҡмын, тип ҡат-ҡат ҡабатлауҙан ис туҡтаманы.

Ул үҙендә торҙо. Дәүләт именлеге комитеты архивтарында быйдай хәлдең булыу-булмауы документтарҙа күр әтелергә тейеш, тине. Ике йылдан Ғәзим Шафиҡов ул документтарҙы донъяға сығарҙы. Уйҙырмаларҙың нисек барлыҡҡа килеүенә үҙебеҙ күреп ышандыҡ. 1919 йылда был урыҫ ҡыҙына ни бары... өс йәш, ә әсә енең ҡыҙына бер кемдең дә ҡағылмауы тура ында әйткәне асыҡланды.

1993 йылдың июлендә Ғәзим Шафиҡов режиссер, Рәсәй Федерация ының атҡаҙанған артисы Олег Ханов әм Йәш тамашасы театры артистары менән берлектә Әсән ауылы мәҙәниәт йорто сәхнә ендә “Заклание” пьеса ын күр әтте. Был әҫәрҙә үҙ аллегория рәүешендә беҙҙең Бабич тура ында бара. Сценарист әм ҡуйыусы ике е лә ул ваҡытта бер тауыштан тиерлек: “Беҙ еҙгә үҙегеҙҙең Бабичты алып килдек...”– тип белдергәйне.

Ғ.Шафиҡов, Шәйехзада шиғыр яҙыуҙа тиңе булмаған оҫта, ирәк осрай торған йәмәғәт эшмәкәре, Әхмәтзәки Вәлидиҙең тоғро көрәштәше генә түгел, тип өйләне. Бабич – унан да мәртәбәлерәк. әр нәмәлә лә әләтле булған ул. Спектаклдәрҙә ҡатнашҡан, мандолинала татар әм башҡорт көйҙәрен ҙур оҫталыҡ менән башҡарған. Ышана ығыҙмы, хатта мандолина ҡылдарын ... аяҡ бармаҡтары менән дә сиртә торған булған.

– Оҙаҡ йылдар, Шәйехзада Бабичты ат ҡойроғона тағып, юл буйлап өйрәткәндәр, тигән хәбәр йөрөнө, – тине Ғәзим ағай. – Әммә мин быны раҫлаусы бер генә ша итты ла тапманым.

Ҡай ы берәүҙәр, Шәйехзада Бабич әм уның иптәштәре аҡ гвардиясылар кейемендә булып, был ҡыҙылдарҙың асыуын ҡабартҡан, тип өйләне. Әммә факттар уларҙың ҡышҡы пальтола булыуы хаҡында өйләй.

*Ишеткәндәй булам әллә ҡайҙан*
*Ырыҫ, бәхет, өмөт йырҙарын;*
*Өмөт ҡайнап, ташып күкрәгемдән,*
*Көтәм тиҙҙән аҡ көн тыуғанын.*

Дүртөйлө халҡына легендар яҡташыбыҙ тормошоноң ҡай ы бер яҡтары бөтөнләй билдәле түгел. Йылайырҙа и ә шаҡтай күп материал тупланған. Ильяс Таҡалов минә түбәндәгеләрҙе өйләне:

– Туҡ анынсы йылда үҙебеҙҙә “Бабич ҡәбере ҡайҙа?” тигән мәҡәлә баҫтырып сығарҙыҡ. Ул халыҡта ҙур ҡыҙыҡ ыныу уятты. Редакцияға хаттар килә башланы. Шағирҙы белгән, уның менән аралашҡан кешеләрҙең адрестарын бирҙеләр, ерләгән урынын хәтерләүселәр ҙә табылды.

Әңгәмәсебеҙҙе бүлдереп, ҡыҫҡаса өҫтәмә бирәйек. Был урынды “ҡәберлек” тип әйтерлек тә түгел, әллә соҡор, әллә йырын булған. Имгәтелеп, тамам ҡыҙғаныс хәлгә килтерелгән кәүҙәләрҙе шунда ташлап, арлы-бирле күмгәндәр.

– Берәүҙәр, ҡәберлек Юлдыбай–Йылайыр юлының уң яғында урынлашҡан, тип раҫла а, икенселәре бөтөнләй ҡапма-ҡаршы яҡты күр әтә, – тип өйләне коллегам. – Ярай әле, 1924 йылғы фоторәсем аҡланған. Ша иттарҙың күпселеге лә фотоаппарат объективына эләккән урынды күр әтте.

Ша иттарҙың бере е Р.Ишкилдин хәтирәләренән:

*“1919 йылдың яҙы ине. Мин әм Зәйнулла Батыров Йылайыр дауахана ында ятабыҙ. Бер көндө хәрби кейемдәге кешеләр килде лә беҙҙе ревком штабына алып китте. Унда ике йөҙгә яҡын кешене ҙур аҙбарға яптылар. Шәйехзаданы йәнә шунда осрат-*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 175



*тым. “Ниндәйҙер аңлашылмаусанлыҡ арҡа ында ғына беҙҙе бында тоталар. Бик борсолма, хәлде асыҡларҙар ҙа тиҙҙән ебәрерҙәр,” – тине ул миңә.*

*27 мартта бер нисә кешене Ырымбурға оҙаттылар. Унан ай ярым үткәс кенә ҡайттым. Бабичты әм башҡа бик күптәрҙе беҙ киткәндең икенсе көнөндә үлтереүҙәре тура ында ишеттем. Ҡәберҙә алтмышлап кеше ерләнгән...*

*Ҡәберлекте яҡшы хәтерләйем. Ул байтаҡ ваҡыттар кәртәләп алынған килеш торҙо. Элек ауыл ситендә ине. Төҙөлөш алып барылғанлыҡтан, хәҙер ҡәбер уртала ҡалды. Курган бик ҙур ине...”*

С.Таҡтаев: *“12 йәштә инем. 1919 йылдың март аҙаҡтарында беҙҙең Исҡужаға өс кеше килде. Улар беҙҙә туҡталды әм ике-өс сәғәтләп тороп, сәй эсеп китте. Бере е ҡара куртка кейгән, ә ике е хәрби формала ине. уңынан ғына белдек: гражданский кейемдәге е Шәйехзада Бабич булған. Ул беҙҙә ниндәйҙер шиғырҙар ҙа ҡалдырҙы...”*

К.Рәхмәтуллина: *“Ирем Мөҡим Рәхмәтуллин Шәйехзада Бабичты яҡшы белә ине. Улар бер ни ҡәҙәр ваҡыт Темәстә бергә эшләгән. Ә Бабич үлтерелгәс, Мөҡим шағирҙы иҫкә алып, йыш ҡына ҡәберенә бара торғайны...”*

*“Мөҡим ағай Юлдыбай балалар йортоноң директоры булып эшләгәндә мин уның шоферы инем,* – тип хәтерләй Рамаҙан Сабанчин. – *Йылайырға килгән айын ул ошо курган янында туҡталырға куша ине. Яҡын ғына барып баҫа ла бер нисә минут тын тора. Ә уңынан, был – күренекле шағир Шәйехзада Бабичтың ҡәбере, тип өйләне. “Улар унда күптәр, ҡустым да, инең ҡәрҙәшең дә, башҡа бик күптәр ҙә шунда ята. Рамаҙан, бер ҡасан да ошонда туҡталмай уҙма. Уларҙы иҫкә алыу өсөн бер нисә минут ваҡытыңды ҡыҙғанма,” –ти ине. Шуға ла был урын мәңгегә хәтергә еңеп ҡалды”.*

*..Уҡытыусылар ҡәберлеккә ҡойма тотҡайны,* – тип хәтерләй шул ваҡиғаларҙың ша иты булған берәү. – *Әммә бер нисә көндән ҡойма юҡҡа сыҡты, ә ҡәберлек өҫтөнә кемдер тиреҫ килтереп түкте...”*

*Дәртле, ҡайнар йырҙарымды*
*Йырламайым дәртем өсөн;*
*Йырлайым тик мәңге шат,*
*Дәртле, көләс халҡым өсөн...*

Граждандар уғышы. Идея өсөн генә уғыш булыуы икеле. Наҙан халыҡ үҙ дәүеренең хәл-ваҡиғаларын аңлап бөтөрә алмаған, әлбиттә. Туған – туғанға, улы ата ына ҡаршы күтәрелгән. Шәхси сәбәптәр, тар ҡарашлыларға ғына хас эскерлелек, үсләшеү кеүек күренештәр ҙә үҙ йоғонто он алғандыр. Башҡа төрлө сәбәптәр ҙә булыуы ихтимал.

Урындағы Йылайыр гәзите лә заманында был турала яҙып сыҡҡан. Мәҫәлән, күн заводында эшләгән Ибра им Иҫәкәев түбәндәгеләрҙе бәйән иткән:

*“...1919 йылдың мартында Йылайырҙа хәл киҫкенләште... золом көсәйҙе. алдаттарҙың ситтән килгән эшеләрҙе эҙләүе, тотолғандарҙың күбе ен атыуҙары тура ында хәбәр таралды. Иртән беҙҙең заводҡа бер төркөм алдаттар килде. “Арағыҙҙа башҡа милләт кешеләре бармы?” – тип оранылар. Минең башҡорт икәнлегемде бел әләр ҙә, эшселәр бер тауыштан: “Беҙҙә ундайҙар юҡ”, – тип яуап бирҙе. Әммә икенсе көндө тағын бер алдат пәйҙә булды. Бары ы менән дә ҡыҙыҡ ынды: әр кемдең исемен әм фамилия ын орап сыҡты. Иптәштәремдең кәңәше буйынса үҙемде, Яков Исаковмын, тинем. Заводта күптән эшләгәнлектән, урыҫса таҙа өйләшә инем. Өҫтәүенә, төҫ-ҡиәфәтем дә урыҫмы, башҡортмо икәнлекте айырырлыҡ түгел. алдат ышанғандырмы, юҡмы, әммә ҡабат саҡыртманы. Кистән иптәштәрем мине Мамыкин байҙың йортонда йәшерҙеләр. Икенсе көндө иртән байҙың улы: “Кисә ауылға килеүсе юл сатында шағир Бабичты, ҡылыс менән сапҡылап, ат ҡойроғона таҡҡан килеш урамдан өйрәтеп уҙғандар,” – тип өйләне. уңынан, башҡалар менән бергә Бабич та ауыл ситендә ерләнгән, тип ишеттем”.*

Ерле халыҡ аҡтарҙан да, ҡыҙылдарҙан да ҡурҡҡан. 1917 йылдың көҙөндә Бабичты Башҡорт өлкә шура ының секретары итеп ҡуялар. Бихисап өндәүҙәрҙе ижад итеүсе авторҙарҙың бере е була ул.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 176



Тәүге өндәүҙә: “Беҙ аҡтар ҙа, ҡыҙылдар ҙа түгел, беҙ — башҡорттар!” — тип әйтелә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хәрәкәттең ике ағымға бүленеүе үҙ дәүләтселегe өсөн берсә аҡтар, берсә ҡыҙылдар яғында көрәшергә мәжбүр булған башҡорт халҡының фажиғә ен кәүҙәләндерә.

Милли автономия тура ында ҡыҙылдар менән килешеүгә өлгәшкәндән уң Вәлиди ғәскәрҙәре улар яғына күсә, Бабичҡа бер төркөм алдаттар менән хөкүмәттең архивын Темәстән Ҡыҙыл Мәсеткә (хәҙерге Мораҡ ауылы — **Х.Н.**) күсереү бурысы йөкмәтелә. Ана шул күсенгәндә фажиғәгә тарый ҙа инде Бабич менән иптәштәре...

Беҙ бөгөн илебеҙҙең тарихы тура ында дөрөҫөн өйләргә тейешбеҙ. Ыңғай әм кире яҡтары менән. Аҡтар хәрәкәтендәге етәкселәр әм хәрби эшмәкәрҙәрҙең өйәктәрен Рәсәйгә ҡайтарыу — нормаль күренеш. Бөгөн Шәйехзада Бабич иҫтәлеген хөрмәтләү ҙә шул уҡ.

*Иламайым мин көндәрем*
*ырғаҡ, ыуыҡ, алҡын өсөн:*
*Илайым тик ярлы, меҫкен,*
*Ҡыҙғаныс халҡым өсөн.*

1911 йылда уҡ Бабич, “Ғәлиә” мәҙрәсә ендә белем алыусы шәкерт булараҡ, бик күп әҙиптәр менән аралаша. Мәжит Ғафури, Ғәлимйән Ибра имов, Хәбибулла Ғәбитов, Сәйфи Ҡудаш, Зыя Өммәти әм Ғизетдин Иҫәнбирҙин — милләтебеҙҙең йөҙөк ҡашы әм ғорурлығына әүерелгән яҙыусылар әм шағирҙар. Улар бергәләп ҡулъяҙма журналдар сығарған, әҙәби кисәләр ойошторған. Ихтимал, Башҡорт иленең киләсәге тура ында ҡыҙып-ҡыҙып бәхәсләшкәндәрҙер ҙә. Суверенлыҡ әм ысын дәүләтселек алыу идея ы шул ваҡытта уҡ тыуғандыр, сөнки шәкерттәр араындағы хөр фекерлелекте инҡар итеп булмай. “Ғәлиә” мәҙрәсә ен Царское Село лицейына тиңләргә мөмкин. Фәҡәт татар-башҡорттоҡона.

Ғизетдин Иҫәнбирҙинға айырыуса туҡталғы килә. Ул хәҙерге Кушаренко, Дүртөйлө, Борай әм Бөрө райондары ауылдарында мәғрифәтселек менән шөғөлләнгән, татар теле әм әҙәбиәтенән белем биргән. XX быуат баштарында башҡорт әм татар шиғриәтендә билдәле эҙ ҡалдырған. Унан тыш, А.Пушкин әм А.Кольцов әҫәрҙәрен тәржемә итеүсе булараҡ та тарихҡа ингән.

— Йортта Бабич иҫкә алынмаған көн дә булмағандыр, моғайын, — тип хәтерләй Ғизетдиндең ейәне Рәмил хәҙрәт Иҫәнбирҙин. — “Бабич”ты ул саҡта фамилия тип уйламаным да, рус революционерылыр, тигән фекерҙә инем. “Бабич” “Ильич” кеүек яңғырай бит. “Егеттәрҙең аҫылы ине ул Шәйехзада Бабич!” — тип оҡланып өйләй торғайны олатайым. Был үҙҙәр хәтеремә ныҡлы еңеп ҡалған...

Шағир, мәғрифәтсе Ғизетдин Иҫәнбирҙинды халыҡта “Аҡмулла” тип йөрөткәндәр. Ул “Почет Билдә е” ордены менән бүләкләнгән, директор булып эшләгән, абруйлы әм хөрмәтле кешеләрҙән булған. Пенсияға сыҡҡас, Шәйехзада Бабич әм Мәжит Ғафури тура ында хәтирәләр яҙырға ниәтләп, Өфөлә материалдар йыйған. Беҙ был хаҡта Вафа Әхмәҙиев әм Рәйеф Әмировтың бынан ҡырҡ йыл сама ы элек яҙған очерогынан уҡып белдек. Ғ.Иҫәнбирҙин нигеҙ еҙ онотолған, тип иҫәпләй улар. Шиғырҙары, тәржемә әҫәрҙәре баҫылмай тиерлек. Ә бит бер нисә быуын уларҙы уҡып үҫкән. Ғ.Иҫәнбирҙин — татарса яҙған киң билдәле башҡорт шағирҙарының бере е. Шуны ы ҡыуаныслы: Рәмил хәҙрәт тә шиғырҙар яҙа. Улар район гәзитендә бер нисә тапҡыр донъя күрҙе.

Ғизетдиндең кусты ы Әхкәм дә — әҙәбиәтебеҙҙә эҙ ҡалдырған кеше. Уҡытыусы булып эшләгән ул. Үҙе иҫән саҡта ике хикәйәләр йыйынтығы донъя күргән. Яҙыусы Әкрәм Вәли уны үҙенең остазы тип иҫәпләгән. Ә.Иҫәнбирҙин золом тирмәненә эләккән, төрмәлә ултырған. Көс-егәрлелеге ташып торған мәлендә донъя ҡуйған. Бабич менән дә юлдары киҫешкән булыуы ихтимал, сөнки Әхкәм дә “Ғәлиә” мәҙрәсә ендә яҡынса шул йылдарҙа уҡыған.

*Сәскә төҫлө йырҙарымды*
*Йырламайым зауҡым өсөн;*

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 177



*Йырлайым тик сәскәләй*
*Ҡыҙҙарға бай халҡым өсөн.*

Шәйехзаданың ата ы Мөхәмәтзакирҙың ғаилә е менән хәҙерге Мишкә районы Ҡыйғаҙытамаҡ ауылына нисек барып сығыуы бик оҙаҡ серле йомғаҡ булды. Ҡартайған көнөндә алыҫ ерҙәргә күсеп китергә нисек тәүәккәлләне икән? Мулла ғаилә е Әсәндә лә етеш тормошта йәшәгән бит. Даны бөгөнгә көндәргә ҡәҙәр килеп еткән баҡса, ундырышлы ер, оҫта хужалыҡ итеү – былар бик үк мул тормошта булма а ла, яҡшы йәшәргә форсат биргән.

Ҡай ы берәүҙәр и ә бары ын да илде сорнап алған дин еҙлеккә яп ара. Руханиҙарҙы эҙәрлекләүҙәр ысынлап та булған. Мәҫәлән, Көйәҙбаш ауылының бик итәғәтле мулла ы Хәбибйән Йомаевтың, әле ҡасан ғына үҙенә илтифат, хөрмәт күр әткән ауылдаштарының тупаҫлығын әм мәсхәрәле көлөүҙәрен күтәрә алмайынса, ураҡтан ҡайтышлай урағы менән үҙен үҙе уйыуы ла билдәле. Был урынды әле лә "Хәбиб соҡоро" тип йөрөтәләр. Быны ы уңыраҡ булған хәл әле ул. Ә 1921 йылда и ә дин көслө, диндән ваз кисеүселәр булмаған тиерлек. Халыҡ Аллаға хеҙмәт итеүселәргә хөрмәт күр әткән, уларға хужалыҡ эштәрендә ярҙамлашҡан. Әгәр ҙә шул осорҙа дин тотоуҙы аҡлап ҡалған бул алар, йәмғиәттең әхлаҡи ҡанундары ла ҡаҡшамаҫ ине.

Ә серҙе Фәсәхәт апай асты. Ул ғаиләнең шул осорҙағы тормошо тура ында бер нисә яҙма ҡалдырған. Музейҙың ул ваҡыттағы директоры Фәнүз Фатиховҡа тапшырылған дәфтәрҙәренең бере ендә Шәйхзаданың ата ы, әсә е әм еңлеләренең михнәттәре тәфсилләп бәйән ителгән. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ниндәйҙер сәбәптәр арҡа ында дәфтәр музейҙа юҡ.

Был яҙмалар Иванай ауылында йәшәгән Фатихаға, БАССР-ҙың 50 йыллығы исемендәге колхоз рәйесе, исеме билдәле Хәниф Вәлиевтың әсә енә, мөрәжәғәт хаты итеп яҙылған. Уларҙы заманында Башҡортостан Яҙыусылар берлеге ағза ы, редакциябыҙҙың сәнғәт бүлеге мөдире Илдус Тимерханов матбуғатҡа әҙерләп баҫтырғайны. Ғөмүмән, Фәсәхәт Бабичеваның яҙмалары бик күп факттар, исемдәр әм ваҡиғаларҙы үҙ эсенә алыуы менән иғтибарҙы үҙенә йәлеп итә. Был унын элекке мемуар яҙмаларына айырыуса хас.

*"Фатиха апай!* – тип мөрәжәғәт итә автор. – *иңә быларҙың бары ы тура ында ла яҙыу кәрәктерме, юҡтырмы – белмәйем. Шулай ҙа яҙам, сөнки ин Шәйехзаданы әйбәт белә ең".* Тимәк, тағы ла бер кеше шағир менән таныш булып сыға. Бәлки, ул да хәтирәләрен ҡалдырғандыр?

...1921 йылғы аслыҡ. Әсәнгә Мөхәмәтзакирҙың улы Мөхәмәткәрим килә. Ул ата ын Әсәндән Ҡыйғаҙытамаҡ ауылына күсеп китергә өгөтләй. Тәүәккәл, әйткән үҙендә тора торған эшлекле ир йортто, хужалыҡ кәрәк-яраҡтарын алыусыны ла бик тиҙ таба. Ата ының ғаилә е тура ында хәстәрлек күрергә вәғәҙә бирә. Ауылдаштары, хатта күрше ауылдарҙан аҙ ғына таныш булыусылар ҙа Мөхәмәтзакирҙы күсенмәҫкә өгөтләй. Әммә 74 йәшлек мулла улының үҙенә күнә. Шәйехзаданың үлеменән уң ата ы бик бирешә, тормоштан йәм тапмай, ихтыяр көсө лә ҡалмай, хәйерселектә көн күрә. Улы баштараҡ бер аҙ ярҙам да күр әтә, әммә күп тә үтмәй, ашаҡан икмәге менән битәрләй, ата ын яҙмыш ҡосағына ташлай.

Мөхәмәтзакир, Шәйехзада иҫән бул а, быңдай хурлыҡҡа ис кенә лә юл ҡуймаҫ ине, тип уйлана. Яҙ ет ә, Әсәнемә ҡайтыр инем, тип хыял йөрөтә. Әммә ниәте тормошҡа ашмай, тәүҙә – ҡатыны, бер нисә көн үтеүгә Мөхәмәтзакир үҙе донъя ҡуя. Унын ҡәбере асыҡланған, рәшәткәләп алынған, ҡараулы, тиҙәр. Ҡыйғаҙытамаҡта ла Шәйехзада Бабичтың әм унын ата-әсә енең яҡты иҫтәлеге алдында хөрмәт менән баш эйәләр...

*Йәш сағым, алтын сағым,*
*Ялҡын сағым бул ын фиҙа*
*Халҡым алдында минең*
*Биргән таҙа антым өсөн.*

Шағирҙы кемдәр язалауы билдә еҙ. Тарих уларҙы үҙ хәтеренә уйып ҡалдырма-

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 178



ған. Ҡылыс күтәрергә баҙнат иткән аяу ыҙ палачты ла иҫендә ҡалдырмаған ул. Хатта уны ни өсөн үлтереүҙәрен белмәйбеҙ. Ни өсөн йәнен ҡыйғандар уң унын?

Әммә Шәйехзада Бабич үҙе тура ында иҫкә төшөрөп тора, шиғырҙарында йәшәй. Фәсәхәт апай хәтерләүҙәренән шуны беләбеҙ: эскәмйәлә ултырып бышылдап ҡына нимәлер тырышып-тырышып ҡабатлаған малай янынан үтеп барғанда:

*Башҡортостан — гөлбостан,*
*Былбылстан, нурбостан,*
*Шунда тыуған, шунда үҫкән*
*Башҡорт тигән арыҫлан, —*

тигән йөрәгенә үтә лә яҡын үҙҙәр ишетә.

— Нимә уҡый ың, сабыйым? — тип тулҡынланып орай Фәсәхәт апай.

— Шиғыр ятлайым. Бабич шиғырын. Уҡытыусы ҡушты. Мәктәптә әҙәби кисә буласаҡ. Шуға әҙерләнәм...

Эйе, шағирҙы хәтерҙәрҙән юйҙыра алманылар.

“Башҡортостан — гөлбостан” тип көйләне, доға уҡығандай, өләсәйҙәребеҙ, хатта был юлдарҙың кем тарафынан яҙылыуын да белмәйенсә. Халыҡ үҙенә әүерелде улар.

Дүртөйлө әм Әсән урамдарына унын исеме бирелде, Әсәндә ыны ҡуйылды, урта мәктәп тә Шәйехзада Бабич исемен йөрөтә. Музейы асылды.

Шағирҙы Йылайыр ерендә лә онотмайҙар. Яңы әйкәл асыу — унын дәлиле. Унын авторы — күренекле скульптор Хәйҙәр Ғарипов. Мандолина ын аҫҡан, язаланғандан телгеләнгән шағир кәүҙә е, йылдар аша үтеп, юғарыға ынтыла. Ысын шағирҙарға ғына хас булғанса, йөҙөндә — ғорурлыҡ, яҡтылыҡ, үнмәҫ ихтыяр көсө, буй онмаҫ рух, күҙҙәрендә — ялҡын сатҡылары. Ә ирендәре, гүйә:

*Башҡортостан — йәмбостан,*
*Ил амстан, шағирстан,*
*Шунда тыуған, шунда үҫкән*
*Башҡорт намлы арыҫлан!*

— тип бышылдай.

1995 йылда башҡорт халҡынын данлыҡлы улы, мәғрифәтсе шағир Шәйехзада Бабичтың тыуыуына 100 йыл тулыу хөрмәтенә Хөкүмәт тарафынан әҙәбиәт, сәнғәт әм архитектура өлкә ендә Шәйехзада Бабич исемендәге республика дәүләт премиялары булдырылды. Шунан бирле әләтле ижади йәштәрҙең ҡырҡтан күберәк вәкиле унын лауреаттарына әүерелде. Яҙыусылар Фәрзәнә Аҡбулатова, Рәйес Түләк, опера йырсы ы Зө рә Байбурина беренселәрҙән булып ошо хөрмәткә лайыҡ булды. Лауреаттар ар ында Вәхит Хызыров әм Земфира Рамазанова, рәссам Сулпан Билалова (әйткәндәй, заманында ул Дүртөйлөнөң 5-се мәктәбендә эшләгән) әм үҙенең ижады менән Бабич нигеҙ алған традицияларҙы дауам итеүсе башҡа бик күптәрҙең исемдәре бар.

Ҡыҫҡа ы, күңелдәрҙә Бабич тура ында иҫтәлек йәшәй икән, тимәк, ул үҙе лә йәшәй.

**Хәмит НӘБИЕВ,**
**журналист.**
**Дүртөйлө районы.**

Agidel 1:Agidel 1.qxd  13.04.2009  23:10  Page 179



# ТАРИХ БИРГӘН АБАҠ

*(Башҡортостан Китап палата ы ойошторолоуға 80 йыл)*

Рәсәйҙе тетрәткән киҫкен бороломштар осоронда – 1917 йылдың 27 апрелендә (хәҙергесә 10 майында) Эске эштәр министрлығына ҡараған Матбуғат буйынса баш идаралыҡты бөтөрөү буйынса Ваҡытлы хөкүмәттең ҡарары ҡабул ителә. Ҡарарҙың 3-сө бүлегендә Китап палата ы булдырыу тура ында үҙ бара. Уға Рәсәйҙә рус телендә сыҡҡан барлыҡ матбуғат баҫмаларын фәнни рәүештә өҙлөк өҙ теркәү эше йөкмәтелә. Дәүләт учреждениеларын, шулай уҡ дәүләт китап аҡлағыстарын илдә донъя күргән баҫма әҫәрҙәр менән тәьмин итеү бурысы ла Палатаның елкә енә төшә. Рәсәй Китап палата ының яҙмышы ошо тарихи ҡарарға бәйле.



*Башҡортостан Китап палата ы хеҙмәткәрҙәре.*

Башҡортостанда Китап палата ы ойоштороу мәсьәлә е 1928 йылдың 19 декабрендә БАССР Халыҡ Комиссариаты коллегия ында ҡарала. Шунда уҡ уның тура ында положение ла раҫлана. Директор итеп Мөбәрәкйән Вәсфи улы Әмиров тәғәйенләнә. Йәш етәксенең мәҡәлә е "Яңылыҡ" журналының 1929 йылғы 3-4-се андарында баҫыла. "Бынан ике генә тиҫтә йыл элек жандарм, доносчик түрәләр дә шәте аҫтында ҡан ҡалтырап торған башҡорт иленә бөйөк Октябрҙең сик еҙ күп иректәр, хоҡуҡтар өҫтөнә өҫтәп биргән бүләктәренең бере е, ис шик еҙ, Башҡортостан үҙәгендәге Башҡорт дәүләт китапхана-палата ы аналырға тейеш. ... Бөйөк Октябрь революция ы миллион башҡорт халҡының үткән тарих биттәрен күҙ алдарына бер юлы асып алғас, тарихтың ысынлап та ауыр фажиғәле икәне күренде. Шуның өсөн Башҡортостанда йәшәгән башҡорт әм татарҙар алдына Октябрь ҡуйған оло ижтимағи бурыстарҙы атҡарыр өсөн шул фажиғәле тарихтарҙы өйрәнергә, сәбәптәрен аңларға; бай әҙәбиәттәр урынында ятҡан ҙур бушлыҡтарҙың хикмәттәрен тикшерергә әм шул үндерелгән әҙәбиәттәрҙе бергә мең өлөш итеп терелтергә, киңәйтергә тейешле булып сыҡты.

Бына шул халыҡтың әҙәбиәттәрен барлау, шуларҙы өйрәнеү кәрәклеге мәсьәлә е Башҡортостан үҙәгендә оло бер әҙәбиәт хазина ы барлыҡҡа килтерергә те-

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 180



йешле итте. Был оло әм академический мәсьәлә, аслыҡ, эске уғыш кеүек бөлгөнлөктәр менән бер ваҡытта килеп сыҡ а ла, сыҙамлы күңел, ҡырҡа ниәт менән башланған бер нәмә фәҡәт алға барыу әм киңәйеүендә дауам итте. Бөгөн инде дәүләт китапхана ы үҙенең биш йыллыҡ эш ғүмерен уҙҙырып, алтынсы йылға сыҡҡанда, китап, гәзит, журнал биреп эш итә торған китапхана ғына түгел, бәлки, бөтә башҡорт әм шәреҡ әҙәбиәтен эсенә алып, шулар өҫтөндә ғилми тикшеренеүҙәр алып бара торған китап палата ы булып етеште", – тип яҙа ул (17-се бит).

Ул осорҙан уң күпме ыуҙар аҡты, күпме елдәр иҫте, илебеҙ күпме үҙгәрештәр кисерҙе. Әммә Китап палата ы үҙенең бурыстарына тоғро ҡалды. Уға үҙ ғүмерендә бер нисә йыл Республика үҙәк китапхана ына ҡушылып, бүлек кенә булып йәшәп алырға ла тура килде. Шул мәлдәрҙә лә Палатаның баҫма әҫәрҙәрҙән торған айырым фонды булды, ул библиографик үҙәк булараҡ та үҙенең ә әмиәтен юғалтманы. 1934 йылдан Китап палата ына үҙаллылыҡ әйләнеп ҡайтты.

Бөйөк Ватан уғышы йылдарында ике кешелек кенә штаты булған Китап палата ы БАССР-ға эвакуацияланған учреждениелар әм предприятиеларҙы, шул иҫәптән УССР Фәндәр академия ын, Маркс, Энгельс, Ленин институтын, фәнни-тикшеренеү институттарын библиографик әм баҫма материалдар менән тәьмин итеүҙе дауам итте. Украина Китап палата ын ҡунаҡсыл Палатабыҙ үҙ бина ына индереп, үҙе Республика китапхана ының бәләкәй генә бүлмә енә күсенде. Төлкөгә йортон биреп отолған әкиәттәге ҡуян ымаҡ, Башҡортостан Китап палата ына уғыштан уң үҙ бина ына кире ҡайтырға насип булманы. Телә ә ҡайҙа күсенеп йөрөп, ҡиммәтле фондтың байтағы юҡҡа сыҡты. Ҡасандыр Палата хеҙмәткәрҙәре саналарҙа өйрәп, күтәреп йә арбаға тейәп мир буйлап йыйып алған, күҙ ҡара ындай аҡланған китаптар, журналдар, гәзиттәр башҡа мәҙәниәт учреждениеларына таратып бирелде...

Әлеге ваҡытта Китап палата ының үҙенең иркен, матур ике ҡатлы бина ы бар. 2008 йылдың 1 ғинуарына уның баҫма фонды 1 900 439 дана иҫәпләнде, шуларҙың 72 277 дана ын китап әм брошюралар тәшкил итә. 2007 йылда бында 28 293 баҫма документ теркәлгән әм аҡлауға тапшырылған. Матбуғат архивы фондтарында рус, башҡорт, татар, сыуаш, мари, удмурт, төрөк телдәрендәге баҫмалар аҡлана. Былдағы ноталы әҫәрҙәр, үрәтле баҫмалар, афишалар, лозунгылар, айлау кампаниялары материалдары, саҡырыу билеттары ла тарихыбыҙҙы сағылдырыуы менән ҡыҙыҡлы әм ә әмиәтле.

Китап палата ы Башҡортостан Республика ында сыҡҡан матбуғат тура ында иҫәп алып барған берҙән-бер статистик үҙәк булып тора. Архив-белешмә секторы тарафынан әҙерләнгән белешмәләргә ҡарағанда, 2007 йылда, алдағы йыл менән сағыштырғанда, баҫмаларҙың исемдәре, тираждары, күләмдәре байтаҡҡа кәмегән. Былтыр ижтимағи фәндәр буйынса 509, медицина, техника фәндәре буйынса 365 китап донъя күргән. Нәфис әҙәбиәт әм әҙәбиәт ғилеме буйынса китаптар – 209 бөртөк. Балалар әҙәбиәтенә иғтибар көсәйеүе беленә. Улар күпләп баҫыла әм тираждары ла артҡандан-арта бара.

"Китап", "Башҡортостан", "Башҡортостан энциклопедия ы", Өфө полиграфкомбинаты, "Ғилем", "Слово" нәшриәттәре баҫтырған китаптарҙың күбе е зауыҡ менән биҙәлгән: матур, төҫлө тышлыҡта. Брошюралар, авторефераттар, ғилми хеҙмәттәр .б., ғәҙәттә, фәнни учреждениеларҙа, БР Фәндәр академия ында, вуздарҙа бәләкәй тираж менән, кесерәк күләмдә сыға.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 181



Үткән йылда республика гәзиттәренең йыллыҡ тиражы 14,0 процентҡа, район гәзиттәренең 5,5 процентҡа түбәнәйгән. Ә реклама-мәғлүмәткә ҡоролған ҡала әм ведомство гәзиттәренең аны ла, тиражы ла юғары. Журналдарҙың тиражы ла тауарҙарҙы маҡтаған аллы-гөллө яңы реклама баҫмалары иҫәбенә күбәйеп киткән.

Аныҡ, теүәл статистик иҫәп алып барыу өсөн Рәсәй Федерация ының әм Башҡортостан Республика ының "Документтарҙың мотлаҡ экземплярҙары" Законы ярҙам итә. Нәшриәттәр, редакциялар тарафынан мө им закондың тейешенсә үтәлеше Китап палата ының архив фондын тулыландырыу өсөн дә кәрәк. Сектор мөдире З. Ғ. Сафиуллина, баш белгес С.А. Ғәлиева әм 1-се категориялы белгес К.З. Хәмитова был өлкәлә оҙаҡ йылдар намыҫлы хеҙмәт итә, улар ҡатмарлы эштең нескәлектәренә күптән төшөнгән.

Ҡабул ителгән документтарҙы дәүләт библиографик эшкәртеү өҙөмтә е булып квартал айын сығарылған "Башҡортостан Республика ының матбуғат йылъяҙма ы" тора. Уны ғилми-библиография әм нәшер секторы әҙерләй. Был яуаплы эштәрҙе сектор мөдире Г.Ә. Шакирова, баш белгестәр Р.Ф. Абдуллина, Ф.Д. Шәйхелисламова, әйҙәүсе белгес А.М. Рәхмәтуллина күңел биреп башҡара. Китап палата ы директоры А.А. Ураҡаева әйтеүенсә, үҙ эшенә мөкиббән киткән юғары квалификациялы коллектив нәшриәттәргә, редакцияларға даими рәүештә консультация бирә, төрлө китапхана әм библиография хеҙмәттәренә методик ярҙам күр әтә. Палата йылына сама менән 300 кешене хеҙмәтләндерә, телдән әм яҙма белешмә бирә.

"Традицияларҙы емермәйенсә, шуларға нигеҙләнеп яңылыҡҡа ла ынтылабыҙ. Китап палата ын ҡасандыр күп михнәттәр менән аяҡҡа баҫтырған хеҙмәттәштәребеҙ алдында яуаплылыҡ тоябыҙ.

Беҙҙең төп бурысыбыҙ – дәүләт библиография ын артабан да үҫтереү, Башҡортостан Республика ының, уның төрлө милләтле халыҡтарының тарихын сағылдырған ҡиммәтле фондтарҙы аҡлау, бының өсөн Палатаның материаль-техник база ын нығытыу.

уңғы ваҡытта беҙ Рәсәй Китап палата ы ярҙамында китап баҫмаларын электрон теркәү буйынса программалы-технологик комплексты үҙләштерәбеҙ. Ул нәшер ителгән баҫмаларҙың мәжбүри экземплярҙарын эшкәртеү әм дәүләт библиография ының библиография банкын булдырыу өсөн кәрәк.

Беҙҙең алда торған икенсе мәсьәлә – БР халыҡтары телдәрен аҡлау, өйрәнеү әм үҫтереү буйынса Дәүләт программа ына ярашлы, башҡорт телендәге художестволы әм ижтимағи-сәйәси баҫмаларҙан электрон китапхана булдырып, Интернет селтәренә урынлаштырыу.

Замананан артта ҡалып булмай, әр дәүерҙең үҙ талаптары. Шуға күрә әлеге мәлдә Электрон архив ойошторолдо. Унда республика матбуғат баҫмаларының электрон варианттары аҡлана. Тимәк республика баҫмаларын киләсәктә компьютер аша ла уҡый аласаҡтар",– ти Айгөл Ураҡаева.

Палаталағы баҫмалар каталог әм картотекаларҙа сағылыш таба. Алфавит буйынса, хронологик тәртиптә (1917 йылдан) әм системаға алынған (1925 йылдан) каталог әм картотекалар буйынса Башҡортостан әм Салауат Юлаев тура ындағы әҙәбиәтте, XIX – XX быуатта сыҡҡан ирәк осрай торған китаптарҙы табырға була. "Филоненко фонды", "Ҡулъяҙма фонды", "Ғәрәп хәрефтәре менән 1907–1931 йылдарҙа башҡорт әм татар телдәрендә сыҡҡан ирәк осрай торған китаптар фонды" – былар бары ы ла илебеҙҙең мәҙәниәтен, фәнен, тарихын өйрәнергә ярҙам итә.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 182



Матбуғат архивында 1912–1928 йылдарҙа донъя күргән "Шура", "Сәсән", " абан" журналдарының тулы комплекты  аҡланған. Китап палата ы эше тура ында материал әҙерләгән саҡта миңә матбуғатыбыҙ тарихы менән яҡындан танышыу бәхете эләкте. Бигерәк тә әлеге мәлдә яратып уҡыған "Ағиҙел" журналының юл башы – уны йылғаға әүерелдергән шишмәләр ҡыҙыҡ ындырҙы.

Быуаттар буйына йәшәп килгән башҡорт әҙәбиәтенең тәүге баҫма ы булып 1923 йылдың март айынан ғәрәп хәрефтәре менән сыға башлаған "Яңы юл" журналы тора. "Берләшегеҙ, бөтөн донъя эшселәре!" девизы аҫтында баҫылған тәүге сәйәси-ғилми, әҙәби-ижтимағи айлыҡ журнал үҙенең алдына ҙур бурыстар ҡуя.

Тәүге  ан Х. Ғәбиттең "Ярҙы башҡортҡа" исемле "башҡорттарҙың боронғо ҡобайырына тәҡлид" менән асыла.

*Ярҙы башҡорт, ҡуҙғалсы,*
*Ғилемгә бер күҙ  алсы.*
*Наҙандыҡтан ҡотолоп,*
*Белем "тыу"ын ҡулға алсы.*
*Ҡулға алсы, ау, ҡулға алсы.*

*... Байҡап ҡара ер йөҙөн,*
*Аңда тормоштоң юлын.*
*"Уҡы, халҡым!.. Күҙеңде ас!.."*
*Минең әйткән бай үҙем.*
*Бай үҙем, ау, бай үҙем.*

Әҙәби тел формалашып өлгөрмәү сәбәплелер инде, журналдың тәүге  андарында  татар телендә яҙылған материалдар өҫтөнлөк итә. Ауыл хужалығы, сәнғәт, мәҙәниәт үҫешенә ҡағылышлы мәсьәләләр күп ҡуҙғатыла.

Журнал дүрт бүлектән тора: Ғөмүми бүлек. Тарихи бүлек. Ғилми  әм фәнни бүлек. Әҙәбиәт бүлеге.  уңғы бүлектә "халыҡ әҙәбиәтенән ҡыҫҡаса үрнәктәр"гә лә урын бирелә.

Шул уҡ йылдағы "Яңы юл"дың  4-се  аны атаҡлы халыҡ шағиры  Мәжит Ғафуриҙың "әҙәбиәт юлындағы егерме йыллыҡ хеҙмәтенә арналған юбилейына бағышлана". Дауыт Юлтый шағирҙы үҙенең шиғырында "Урал  андуғасы" тип атай.

Мәжит ағаның (уны шулай ололағандар) әҫәрҙәренә баҫмала урын мул эләккән. Унан тыш Ғәйнан Хәйриҙең шиғыры, Б. Кәримовтың "Ҡышҡы ас буранда" исемле аяныслы аслыҡ йылын хәтергә төшөргән әҫәре баҫылған.  Сәйфи Ҡудаш та  әүҙем яҙышҡан. Фольклор үрнәктәре был  анда ла ҙур урын алған. Оҙон йыр, ҡыҫҡа йыр, таҡмаҡ, таҡмаза,  амаҡҡа миҫалдар бирелгән.

Булат Ишемғол мөхәррирлеге менән сыҡҡан "Яңылыҡ" тың 1928 йылғы  андарында әүҙем рәүештә яңы башҡорт әлифба ына күсергә өндәйҙәр. Журналда латин  әм ғәрәп хәрефтәре яраш ҡуйылып өйрәтелә. Баҫмала рәсемдәр, фотолар күбәйә. Дауыт Юлтый, Сәйфи Ҡудаш, Төхфәт Йәнәби, И. Сәфәр, Хәбибулла Ғәбитов, Батыр Вәлидов, Ғәйнан Хәйри, Ғ. Амантай, М. Тажи, С. Агиш шиғырҙары, Али Карнай хикәйәләре  йыш осрай.

3-сө  анда ҡунаҡҡа йөрөүҙең зарары тура ында иҫкәртелә. "Иҫкенән ҡалған ҡунаҡҡа йөрөү йола ы ике төрлө: бере е – ҙур туйҙарҙа ҡатышыу, эске әҙерләү. Эсер өсөн расхуттар тотола, эсеү арҡа ында  уғыш  әм үлешеүҙәр була...

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 183



Журналдың 5-6-сы андарында, 11-се биттә "Көндәр көҙгө ө" рубрика ында беҙҙең Китап палата ы тура ында үҙ бара. "Күптән түгел Башҡортостан китапхана ының биш йыллыҡ хөрмәтенә байрам үткәрелде. Бынан уң дәүләт китапхана ы библиография мәркәзе әм китап палата ына әйләндереләсәк. Дәүләт китапхана ы ошо көндәрҙә икенсе йортҡа күсеү алдында тора, унда күсеү менән айырым кабинеттар ойошторолорға уйлана. Дәүләт китапхана ы үҙенең эшенә бик күп ғилми байлыҡтар тупла а ла, библиография тәртибенә алынмау, айырым кабинеттар булмау арҡа ында ундағы материалдарҙан кәрәкле рәүештә файҙаланып булмай ине. уңғы үҙгәрештәр был материалдарҙан файҙаланыуға киң юл асасаҡ",– тиелә унда.

1929 йылда журналда Ғайса Йосопов, Баязит Бикбай, Янрус, Зәйни Баян, Ш. Гәрәйшина, Рәшит Ниғмәти, Б. Фәйзи, Ф. Татлыбай, С. Әхмүш, Ва ап Әхмәҙи шиғырҙары күренештерә. Шул йылдарҙа эсперанто теле менән мауығыу күҙгә салына.

..."Сәсән" журналы битләрен эшсе әм крәҫтиән йәшләренең, уҡыусыларҙың, нәфис әҙәбиәткә әүәҫкәрҙең ҡәләмдәренә киң итеп асып, ҡулынан килгән хәтлем уларға үҫергә ярҙам итәсәк. "Сәсән" үҙенә яҙырға саҡырған иптәштәргә генә түгел, саҡырылмаған, бигерәк тә урындарҙан яҙыусы иптәштәргә лә киң мөмкинлектәр бирәсәк", – тип асыла яңы журналдың 1927 йылда донъя күргән тәүге аны. Башҡортостан Мәғариф комиссариаты нәшере аналған был баҫма айына бер тапҡыр сыҡҡан әҙәби-художество журналы була. Бүлектәрҙә, әҙәби әҫәрҙәрҙән тыш, "иҫке памятниктар әм археология", фән әм техника яңылыҡтары, театр-музыка, әҙәби әҫәрҙәргә тәнҡит әм библиография мәсьәләләре лә яҡтыртыла. Башватҡыстар бирелә. Башҡорт әҙәби яҙма ына, әҙәби теленә нигеҙ алған, башҡорт нәфис әҙәбиәтен көслө пропагандалаған был мө им баҫманы әлеге "Ағиҙел" журналының юлбашсы ы тип атарға ла мөмкин булыр ине. "Яңы юл", "Яңылыҡ" журналдарының да көслө “Ағиҙел”де хасил иткән шишмә булып иҫәпләнергә хаҡы барҙыр.

"Сәсән"дә лә "Яңылыҡ"тағы авторҙар ҡабатлана. Фотолар, иллюстрациялар бик күп. К. Иҙелғужаның хикәйә е бирелә, Хәбир Әбдрәшитовтың "Салауат" әҫәре "Ищериковтан үҙенсәләп алынды" тип билдәләнә. Имай Насыриҙың "Тереләй ҡәберҙә" хикәйә е 2-се анда баҫыла.

7-8-се андарҙа Китап палата ының тәүге директоры М. Әмировтың "Әҙәбиәт ҡаҙна ы" исемле мәкәлә е донъя күрә. Йәш етәксе барлыҡ китапханалар өсөн дә уртаҡ булған проблемаларҙы күтәреп сыға. "... Уҡыуҙың иң көслө айҙары булған ноябрь, декабрь, ғинуар, февраль айҙарында уҡыусы китапханаға кереп ун минут та ултыра алмау сәбәпле, китапхананың бөтөнләй уҡыусы ыҙ ҡалыуы мөмкин. Китапханалар етерлек булмә, урын, йылыға эйә булған ваҡытта китап уҡыусы менән китапхана ара ында йәнле бәйләнеш күренер ине",– ти ул. Халыҡтың рухи үҫеше өсөн борсолоп, яңы шәхес тәрбиәләүҙә китапханаларҙың роле ҙур икәнлеген иҫбат итергә тырышҡан автор башҡорт баҫмаларында бынан ары ла йыш ҡына сығыш я ай.

1928 йылдың 1-2-се андарында Дауыт Юлтый "Сәсән"дең бер йыллығы" тигән мәкәлә ендә йыллыҡ эшкә йомғаҡ я ай. "Башҡорт нәфис әҙәбиәте яңы тыуа. Шуға ҡарамаҫтан, уның үҫешендә ғәжәп бер йылдам темп күрәбеҙ... Журналдың 12 номерында барлығы 54 кеше ҡатнашҡан. Шуларҙың эсенән ҡарт яҙыусылар – 26, йәш яҙыусылар – 28... 54 яҙыусының татарҙың ҡарт әм йәш яҙыусыларынан 24 кешенең мәкәлә, хикәйә әм шиғырҙары баҫылған. Башҡорт

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 184





Фонд йәштәрҙә айырыуса ҡыҙыҡ ыныу тыуҙыра.

әм татар халыҡтары үҙҙәренең тормош образы әм телдәренең яҡынлығы менән элек-электән бер-бере енең культура ы үсеүенә ярҙам итеш әләр, әле лә был ыҙат бар әм киләсәктә лә булырға тейеш" тигән фекерен дә уҡыусыға еткерә.

Журналдың 1929 йылдағы 5-6-сы андары Ш. Бабичтың "Кем өсөн?" шиғыры менән асыла.

*Күктә алла, ерҙә иблис, мин – малай!*
*Бере е "дин" тип, бере е "мин" тип тарткылай,*
*Белмәйем,*
*Әллә алла, әллә иблис алдалай?!*

Шул осор тура ында асыҡ, аңлайышлы итеп әйтеп биргән бит бөйөк шағир! Уны баҫып сығарырға редакцияның нисек йөрәге еткәндер? Имай Насыри "Шәйехзада Бабич" исемле мәкәлә ендә: "Бабичты Байрон, Физулилар рәтенә ҡуялар. Быға беҙ ҡаршы түгел, ләкин, улар менән сағыштырғанда, уны үҙенең камиллығы менән түгел, ә шуларға табан үсә торған итеп тиңләштерергә кәрәк. Бабич – ул каса ының төбөнә хәтлем эскән шағир түгел, ә ауыҙ итеп кенә ҡалған шағир. Бабичҡа ана шундай хаҡ ҡуйырға, шул ҡуйылыштан сығып уны тикшерергә кәрәк, юғи ә ул хата буласаҡ.

Бабич ҙур токтар менән ҡоралланған энергия, әҙәбиәтебеҙҙә оҡшашы булмаған сатирик, тел шымартыусы мастер ине. Ләкин уға үҙендә булған байлыкты тейешле хәтлем файҙаланырға имкан булманы. Уларҙың күбе ен ул үҙе менән бергә алып китте", – ти. Әсенеү ҡатыш үкенес менән яҙылған мәкәләлә Бабичтың милләте хаҡында ла үҙ ҡуҙғатыла. "... уның татар телендә яҙыуын алалар ҙа шуға ҡарап уның милләтен дә билдәләйҙәр. Был, әлбиттә, бөтөнләй үк дөрөҫ булып бөтмәйәсәк. Башҡортостанда торған башҡорттарҙың ярты ы татарса өйләшәләр ҙә бит, уның менән уларҙы башҡортлоҡтан ыҙып ташлап булмай. Улар бөтә тормошонда башҡорт халҡы менән бәйләнгәндәр. Территория, хужалыҡ формалары бер. Бабичтың да тыуған ғаилә е башҡорт, йырлаған халҡы башҡорт, йәшәгән ере Урал-Иҙел булыуы, яҙғандарының күбе е шул халыҡ тормошон шәүләләндереүе, уның теленә ҡарап "татар" тиергә бер ҙә урын ҡалдырмай. Унан уң, уның уңғы яҙғандары бөтөнләй башҡорт телендә әм башҡорт милләтенең көрәш көндәренән алып яҙылған.

Бабич, башҡорт ғаилә енән сығып, башҡорттар ара ында үсеп, башҡорт халҡының моң-зарын йырлаған әм шул милләттең хәрәкәтенә ҡатнашып, шул илдә үлгән башҡорт шағиры ине, тибеҙ ( 3-4-се биттәр) ".

1930 йылда "Сәсән" менән "Яңылыҡ" берләшеп, "Октябрь" исеме аҫтында сыға башлай. Уның яуаплы мөхәррире итеп Дауыт Юлтый тәғәйенләнә. Был журналда сәйәси мәсьәләләр өҫтөнлөк итә. "Кешеләрҙе өр-яңынан эшләү биш-

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 185



йыллығы – культура революция ының ана шул нигеҙҙәрҙә көндән-көн еңеүгә барыуы беҙҙән сәнғәт, әҙәбиәт фронтындағы идеология сереклектәрен, аумаҡайланыуҙарҙы, яңы буржуасылыҡ, милләтселек идеяларын, улға бөгөлөүҙе йөм үриәт областарының территория сиктәренә ҡарамайынса марксизм тәнҡите крепосынан тотоуҙы, ошо матур әҙәбиәттә пролетариат идеология ы өсөн көрәштә яҙыусы пролетар, коммунист көстәрҙе йыйыуҙы, йәш пролетариат кадры үҫтереүҙе талап итә" тип билдәләй яңы баҫма үҙенең бурыстарын.

Был баҫмала ла Бабичтың ижад юлын өйрәнеүселәргә ҙур урын бирелә. Шағирҙың үлеүенә 11 йыл тулыу уңайы менән Бабич кисә ендә Сәйфи Ҡудаш тарафынан я алған доклад баҫыла (№3, 69–77-се, №4, 64–74-се биттәр ).

Ҡыҙыҡ өсөн 1937–1939 йылдарҙағы баҫмаларға күҙ алам. 1937 йылғы "Октябрь" журналында Ғ.Дәүләтшин тәржемә ендә Степан Злобиндың "Салауат Юлай улы" тигән романынан "ун алтынсы бүлкәт" баҫыла. Т.Йәнәби, .Дәүләтшина, С.Ҡудаш, Ғ.Ғүмәр, Х.Кәрим, Й.Гәрәй, С.Кулибай, М. Хәй .б. бик әүҙемләшә. Яҙыусылар армия ының нығыныуы, оҫтарыуы, камиллаша барыуы тойола.

1938 йылда журналдың беренсе аны партияны данлауға ҡорола. Урыҫ әҙиптәренең тәржемәләре күп урын ала. Йософ Гәрәй менән Ҡаҙағстан халыҡ шағиры Джамбул НКВД-ның егерме йыллығына ҡарата нарком Н. И. Ежовҡа ҡайнар хистәрен еткерә.

*Нәфрәт тота белмәй икән кеше –*
*өйә белмәй, тине ҙур шағир.*
*Троцкистарҙан таҙарғанға донъя*
*Ҡайнар өйөлә гүзәл тыуған ил,*

– ти Й. Гәрәй (45-се бит).

Мин был мәҡәләмдә, бәлки, темамдан ситләшеберәк тә киткәнмендер. Ләкин тарих беҙгә абаҡ бирә икән, уға ҡолаҡ алырға кәрәк, тип уйлайым. Донъялар ил, тыныс бул ын. Талантлы яҙыусыларыбыҙ ҡара эсле, көнсөл кешеләрҙең ҡорбаны булып, Ш.Бабичыбыҙ кеүек, йылдар үткәс кенә әйләнеп ҡайтма ын. Тереләрҙең ҡәҙерен беләйек. Китап палата ында ғибрәтле, фә емле китап-журналдар юҡҡа ғына аҡланмай. Улар исем өсөн генә теркәлмәй. Улар менән беҙ ваҡыты-ваҡыты менән танышып, тормош өсөн абаҡ, ғибрәт алырға тейешбеҙ. Матбуғат архивының төп бурысы ла, бәлки, шулдыр.

**Тәнзилә ДӘҮЛӘТБИРҘИНА,**
**директор урынбаҫары.**

# ЕЛӘК ЙЫЙҒАНДА

*(Булат Рафиҡов тура ында иҫтәлек)*

Беҙ Булат менән Башҡорт дәүләт университетына бер үк йылды уҡырға индек, бер факультетта белем алдыҡ, тик төркөмдәр генә айырым ине. Уның менән беренсе курста уҡ яҡындан танышып, аралашып китеүҙең сәбәбе стена гәзите булды. Икебеҙ ҙә курстың редколлегия ына айланғанбыҙ. Ул заманда факультетта башҡортса-татарса берлектә сыҡҡан берҙән-бер милли гәзит ине ул. Булат минән ике йәшкә олораҡ, педагогия училище ын тамамлап килгән, тормош тәжрибә е лә күберәк. Мин инде төпкөл ауылдан урта мәктәпте яңы ғына бөтөрөп килгәйнем, шуға ла уның менән аралашыу минең өсөн файҙалы булды. Булат шул саҡта уҡ шиғыр яҙа ине, беренсе курста уҡ уның яҙмалары республика гәзит-журналдарында баҫыла башланы. Ә инде үҙебеҙҙең стена гәзитендә ул әйҙәүсе, лидер булып китте.

Университеттың унғы курсында уҡығанда Булат минең менән бер төркөмдә уҡыған ауылдашым Лена Хәйруллинаға өйләнеп, беҙҙең ауыл кейәүе булып китте. Ул ҡатынының тыуған ауылы Иҡтисадты, уның тәбиғәтен ярата ине, унда йыш ҡайтып йөрөнө. “Ленинсы” гәзитендә хәбәрсе, шулай уҡ “Ағиҙел” журналының баш мөхәррире булып эшләгән саҡтарында ошо ауыл кешеләре, тирә-яҡ тәбиғәте тура ында шиғырҙар, очерктар яҙҙы. Миәссәрә апай тура ындағы шиғыры, “Дим” колхозының йәшелсә-емеш баҡса ына нигеҙ алған Рафаэль Хәйруллин хаҡындағы очерегы әле лә хәтеремдә.

Был ябай булмаған атамаға, бәләкәй генә ауылдың тарихына ла туҡталып үтәйем. Иҡтисад ауылына 1929 йылда күрше Миәкә районының ҙур Мәнәүезтамаҡ ауылынан бер төркөм энтузиастар айырылып сыға ла, кооператив ойоштороп, төп ауылдан дүрт саҡрымда, бик матур тәбиғәт мөйөшөндә, ана шул Иҡтисад ауылына нигеҙ ала. Был яңы тормош төҙөргә ынтылған крәҫтиәндәр ара ында Ленаның ата ы Әксән дә була. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Әксән ағай Бөйөк Ватан уғышында үлеп ҡала.

... ик әненсе йылдар. Йәйҙең бик матур бер көнөндә, ауылға Лена менән Булаттың отпускыға ҡайтыуы тура ында ишетеп, улар янына ашыҡтым. Кистән оҙаҡ ҡына әңгәмәләшеп ултырҙыҡ, ә иртәгә иртән eләк йыйырға барырға килештек. Иртән иртүк ҡояш бер аҙ күтәрелеүгә, ауылдан ике-өс саҡрым ғына булған еләклеккә киттек. Ул йәйҙе еләк бик уңғайны. Үҙебеҙ еләк йыябыҙ, үҙебеҙ бер туҡтау ыҙ әңгәмәләшәбеҙ. үҙ күберәк тарих, әҙәбиәт, тәбиғәт тура ында. Шуны ын да әйтәйем: Булат бик оҫта әңгәмәсе, уның менән төрлө темаларға бик оҙаҡ өйләшергә мөмкин ине. Бәхәсләшкән саҡтар ҙа булды.

Был көндө үҙ күберәк тәбиғәт атамалары тура ында барҙы. Булатты был тирәләге топонимика ҡыҙыҡ ындырҙы. Ни ғәжәп: нилектән бында бер үк исем менән дүрт тәбиғәт объекты атала икән: Сүршәм йылға ы, Сүршәм күле, Сүршәм

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 187



әрәмә е әм Сүршәм туғайы. Атаманың башы, моғайын, йылғалалыр. Ул Әлшәй, Бишбүләк әм Миәкә райондары сиге тирә ендә ер ҡуйынынан сыға ла, сылтыр-сылтыр ағып, Димгә ашыға. Тик унда барып етмәй, бер күлгә ҡоя. Шуғалыр инде күлгә лә Сүршәм исеме бирелгән. Уның тирә ендәге емеш ҡыуаҡтарына бик бай әрәмә лә шул исемде йөрөтә. Күл менән әрәмә тирә ендәге шаҡтай ҙур туғай ҙа шул уҡ исемдә.

Рус әҙәбиәте классигы С.Т.Аксаковтың балыҡ тотоу, унарсылыҡ тура ындағы яҙмаларынан сығып фараз ит әк, ул тәбиғәт йырсы ы ғына булғандыр, тигән фекергә килдек. Уның Надеждино ауылындағы утары бынан әллә ни йыраҡ түгел. Был яҡтарҙа тағы ла бер билдәле рус яҙыусы ы А.П.Чехов та булған. XX быуат башында, ул ҡымыҙ менән дауаланып ял иткән Андреевка санаторийы бынан ун-ун ике саҡрымда ғына. Уның был яҡ тәбиғәтенә оҡланып яҙған хаттары ошо тирәләргә ҡағыла, буғай, тигән дөйөм фекер тыуҙы.

Булатта тағы ла бер тәбиғәт ҡомартҡы ы ҡыҙыҡ ыныу уятты. Бынан йыраҡ түгел урында бер бик ҙур таш ята. Шул тирәне лә ошо таш исеме менән йөрөтәләр: “Ун тәңкәлек таш янындағы урманда”, “Ун тәңкәлек таш янында туҡтап, ял иттек”. Мин үҙем белгәндәрҙе өйләп бирҙем. Элекке заманда Мәнәүезтамаҡтың бер байы ошо ташты үҙенә алып ҡайтырға кешеләр яллап, ун тәңкә түләргә вәғәҙә иткән. Ун тәңкә ул заманда ҙур аҡса булған: был хаҡҡа ат йәки ыйыр атып алып булған. Ләкин ялланған кешеләр нисек кенә тырыш а ла, был ташты алып ҡайта алмаған. Ул юлда ауған урында ятып ҡал а ла, исеме мәңгеләштерелгән.

Шулай өйләшә- өйләшә еләк йыйып, төш ауғанын да иҙмәй ҡалғанбыҙ. Әммә шаҡтай оло силәктәребеҙ хуш еҫле, ҡып-ҡыҙыл еләк менән тулғайны. Беҙ икебеҙ ҙә еләк йыйырға әүәҫ икәнбеҙ, етеҙерәк ҡуллы ҡатындарҙан әллә ни ҡалышманыҡ. Булат үҙенең бәләкәйҙән үк еләк йыйырға яратыуын әйтте, төрлө ҡыҙыҡ хәлдәр тура ында өйләп көлдөрөргә лә өлгөрҙө. Ғөмүмән, ул бик аралашыусан кеше ине. Инде күренекле яҙыусы, әҙәби журнал мөхәррире, абруйлы премиялар лауреаты бул а ла, үҙен башҡалар менән бик ябай тотто. Минеңсә, ул ҡартайғанда ла тәбиғәте менән шул элекке ауыл малайы булып ҡалды.

Булат Рафиҡовтың вафатына ла байтаҡ ваҡыт үтеп бара. Әммә ул китаптары, кешеләргә ҡалдырған яҡты хәтирәләре менән аман да йәшәй кеүек. Миңә ҡал а, ана шул бергәләп еләк йыйған көндө бер ҙә онотмайым.

**Хажи ӘХМӘТЙӘНОВ,**
**Рәсәй әм Башҡортостан Журналистар союзы ағза ы.**

# "ТӘМӘКЕСЕ БЕР ҠАСАН ДА "ҠАРТАЙМАЙ..."

Был хәл 1947 йылдың 15 октябрь тирәләрендә булды. Ай ярым инде республикабыҙҙың данлыҡлы 9-сы мәктәп-интернатының игеҙенсе класында уҡып йөрөйөм. Урыҫ теле, математика фәндәренә теш үтмәй, бик ауыр бирелә. Ашау яғы ла наҡыҫ, асыҡтыра: көнөнә 500 грамм сейле-бешле икмәк, өт өҙ шәкәрле сәй бирелә. Ҡара сукно гимнастерканы яҫы брезент ҡайыш менән ҡыҫып быуабыҙ ҙа төркөм-төркөм булып, Зенцов урамындағы 49-сы йортҡа уҡырға йөрөйбөҙ.

Бер көн беҙ йәшәгән интернатта (Социалистик урамы, 7-се йорт), "беҙгә яҙыусылар килә икән", тигән хәбәр таралды. Минең быға тиклем тере яҙыусыларҙы

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 188



күргәнем юҡ ине. Улар өсәү килде: Ғариф Ғүмәр, Ҡадир Даян әм Сәғит Агиш. Тәүге икәү енең сығышы иҫемдә юҡ. Ә бына С. Агиштың фә емле, ғибрәтле, сағыу үҙҙәрен яҡшы хәтерләйем.

Ҡыҫҡа буйлы, ҡара сәсле, ҡара ҡашлы әм ҡара костюм кейгән 40 йәштәрҙәге ағай ине ул. Кисәне алып барыусы әҙәбиәт уҡытыусы ы Мәрйәм апай Ғималовна уға үҙ биргәс, яҙыусы трибуна артына сығып баҫты ла беҙгә оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо. Күҙҙәренән йылылыҡ, бөтә төҫ-ҡиәфәтенән ғорурлыҡ бөркөй.

— Бөтә Өфөлә берҙән-бер башҡорт мәктәбендә белем ала ығыҙ — еҙ бәхетле. Киләсәк еҙҙең ҡулда. еҙ тырышып уҡырға, төплө белем алырға бурыслы. уғышта миллионлап кеше ҡырылды, республикала милли кадрҙар етешмәй. Өмөт еҙҙә, иң мө име: үҙегеҙҙе тәртипле тотоғоҙ. Тәртип — уңыштың нигеҙе. Бына еҙҙең урамға ингәс, уң яҡ ситтәге акациялар ара ында таҡтанан эшләнгән бәҙрәфегеҙ бар икән. Ҡадир менән оҙаҡ ҡына ҡарап торҙоҡ, түбә енән төтөн сыға. Хафаға ҡалдыҡ: янғын-фәлән сыға мәллә, тибеҙ. Бәҙрәф эсендә малайҙар тәмәке көйрәтә, имеш.

Тәмәке тартыуҙың файҙа ы ла бар уның, еҙҙең күбегеҙ был хаҡта белмәйҙер ҙә әле, — тип дауам итте яҙыусы. — Бына нимә, ҡустылар! Кем дә кем оҙаҡ йылдар тәмәке тарта, ул бер ҡасан да ҡартаймай, әр саҡ йәш була. Уны бер ҡасан да эт тешләмәй, тәмәкесенең өйөнә бур ҙа төшмәй. Бына нисек, ҡустылар!

Бына иңә, мә-ә! Әсәйем дә, уҡытыусылар ҙа әр ваҡыт тәмәкенең зарары тура ында өйләй. Быға тиклем тәмәкенең файҙа ын белмәй инем. Бер-беребеҙгә ҡарашабыҙ. Ә ул оҙаҡ ҡына беҙҙе күҙәтте лә:

— Ни өсөн ҡартаймай, сөнки ул йәшләй үлә. Ни өсөн уны эт тешләмәй, сөнки уның ҡулында әр саҡ таяҡ була. Эт таяҡтан ҡурҡа. Ни өсөн уның өйөнә бур төшмәй, сөнки ул төн буйы йоҡламай, йүткереп сыға. Бурҙар, был өйҙә йоҡламайҙар икән, тип кире китә.

Бына ошондай абаҡ бирҙе юморист әм сатирик яҙыусы Сәғит ағай Агиш. Алтмыш йылдан ашыу ваҡыт үткән, ә ул — аман иҫемдә.

уңынан ул аҙый Таҡташтың "Моҡамай" әҫәрен тасуири уҡып (ятлап алған) күр әтте. Артистар ҙа улай уҡый алмай: күпме хис-тойғо, урынлы логик баҫым, ауыҙ асып тыңланыҡ. Сәғит ағай әҫәрҙәренең яҙылыу тарихын өйләп торманы, ләкин беҙ уның бөтә әҫәрҙәрен дә уҡып сыҡтыҡ.

уңғы йылдарҙа социологик күҙәтеүҙәр шуны күр әтә: мәктәптә уҡыған малайҙарҙың ярты ы, ә ҡыҙҙарҙың өстән бер өлөшө сама ы тәмәке тарта, имеш. Мәктәп уҡыусыларының 40 проценты тәмәке тартыу менән мауыға булып сыға. Уларға уҡытыусыларҙы ла ҡуш аң?

40-сы йылдар аҙағында класта бер-ике малай тәмәке тарта торғайны, ә хәҙер... наркомандарҙы әм мәктәпкә ҡыҙмаса булып килгән хеҙмәткәрҙәрҙе (хатта уҡыусыларҙы) ҡуш аҡ, хайран ҡалырлыҡ күренеш күҙ алдына баҫа. Мәктәптәргә ҡырҡа реформа үткәрергә ваҡыт еткән: тәүге урынға тәрбиә, ә икенсе енә белем биреү сығырға тейеш, тип уйлайым.

**Мөхәммәт РӘШИТОВ,**
**пенсионер-уҡытыусы.**
**Архангель районы.**

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 189



**Халыҡ-ара Аҡмулла көндәре**

Республикала Мифтахетдин Аҡмулла көндәренә арналған күркәм саралар үтте. 2006 йылда Башҡорт дәүләт педагогия университетына Мифтахетдин Аҡмулла исеме бирелде, шул уҡ йылда унының мәғрифәтселек эшмәкәрлегенә арналған Аҡмулла уҡыуҙары үткәрелде. 2007 йылдан башлап БР Президенты М. Рәхимов указы менән Башҡортостанда халыҡ-ара М. Аҡмулла көндәре иғлан ителгәйне.

***

“Мәҙәниәттә әм белем биреүҙә мәғрифәтселәрҙең гуманистик мираҫы” халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференцияла БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт әм милли сәйәсәт министры Илдус Илешев, БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай Рәйесе урынбаҫары Рафаил Зиннуров, республика мәғариф министры Зиннәт Аллаяров әм башҡалар ҡатнашты.

Уҡыуҙа ҙур уңыштарға өлгәшкән студенттарҙан бер төркөм Хөкүмәт Премьер-министры урынбаҫары ҡулынан М. Аҡмулла стипендиаты танытма ы алды.

Пленар, секция ултырыштарында Башҡортостан, Рәсәй төбәктәре, индостан, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Тажикстан, Әзербайжан ғалимдары әм педагогтары докладтар менән сығыш я аны.

***

Аҡмулланың йәнтөйәге – Туҡ анбай ауылында М. Аҡмулла исемендәге премияны яҙыусы, йәмәғәт эшмәкәре Түләк Ғирфановҡа Миәкә районы хакимиәте башлығы Зәйнулла Насиров тапшырҙы. Иҫтәлекле сараларҙа БР мәҙәниәт әм милли сәйәсәт министры урынбаҫары Камила Дәүләтова, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ ректоры, БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты Раил Әсәҙуллин, ошо университеттың профессоры Әхмәт Сөләймәнов, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары Илнур Әйүпов, БР Әҙәбиәт музейы директоры Гөлдәр Моратова, Республика Халыҡ ижады үҙәге директоры Байрас Ишбирҙин, Аҡмулла премия ы лауреаттары – Башҡортостандың халыҡ артисы Йәмил Әбделмәнов, сәсәниә әм ғалимә Розалия Солтангәрәева, журналист, драматург Сәрүәр Сурина, думбыраһы Гүзәл Үмәрғәлина, шағирәләр Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, Зө рә Ҡотлогилдина ҡатнашты.

***

Мәжит Ғафуриҙың Өфөләге мемориаль йорт-музейында “Башҡорт әм ҡаҙаҡ әҙәбиәттәрендә бөйөк шағир образы” тигән темаға “түңәрәк өҫтәл” ойошторолдо.Унда Ҡаҙағстандың С.Баишев исемендәге Актүбә университетынан профессор Назия Жанпейесова, доцент Динә Кинитаева, дизайнер-уҡытыусы Ҡайрат Ногаев; Башҡортостандан академик Ғайса Хөсәйенов, профессорҙар Рәшит Шәкүр, Әхмәт Дәүләтҡолов, Зәйтүнә Шәрипова; фән кандидаттары Әхәт Вилданов, Розалия Баязитова, Гөлнур Нәбиуллина, Гөлназ Ҡотоева, Миңлеғәли Нәҙерғолов, яҙыусылар Ринат Камал, Фәнис Янышев, Магнитогорск дәүләт университетынан профессор Лариса Недосекина, Мордва дәүләт университеты профессоры Александр Бупнаев әм башҡалар ҡатнашты.

Яҙыусылар, ғалимдар милли әҙәбиәткә, башҡорт лингвистика ына нигеҙ алыусы бөйөк шағир-мәғрифәтсе тормошона әм ижадына байҡау я аны, төрки телле халыҡтар әҙәбиәтендәге ролен билдәләне, унының образын сағылдырған әҫәрҙәр тура ында фекер алышты. Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге республика дәүләт премия ын булдырыу әм Аҡмулла энциклопедия ын сығарыу мәсьәләләрен күтәреп сыҡты.

Осрашыуҙа ҡатнашыусыларҙа үҙенсәлекле күргәҙмә ҡыҙыҡ ыныу уятты.

– Бында ҡуйылған экспонаттар бөйөк шағирҙың тормош әм ижад юлына икенсе юҫыҡта ҡарарға ярҙам итә, ни өсөн

тигәндә, бында бығаса билдәле булмаған байтаҡ яңы материалдар ҡуйылған,– тине музей хеҙмәткәре Светлана Низаметдинова. – Бөйөк шағирға бағышланған «Мәңгелек шиғриәт» күргәҙмә е апрель айына тиклем эшләйәсәк.

***

Әбйәлил районында күренекле сәсән Шафиҡ Әминев-Тамъяниҙың тыуыуына 150 йыл тулыу киң билдәләнде. Район хакимиәте ҡабул иткән ҡарарға ярашлы, башҡорт халҡының сәсәнлек традицияларын үҫтергән Шафиҡ Әминев-Тамъяниҙың шәжәрә ен төҙөү, уның ижади мираҫынан китап баҫтырып сығарыу, Яңауыл ауылындағы зыяратын кәртәләү, Асҡар әм Әбделғәзе ауылдарындағы берәй урамға уның исемен биреү, мәктәптәрҙә сәсән ижадына, биография ына арналған иншаларға конкурс үткәреү әм сәсәндең ижадына арнап фәнни-ғәмәли конференция уҙғарыу – сараларҙың бары ы ла тормошҡа ашырылды.

Әбйәлил районының Амангилде ауылында үткән фәнни-ғәмәли конференцияла Башҡортостандың халыҡ шағиры, БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты Рауил Бикбаев, Башҡортостандың халыҡ яҙыусы ы, академик Ғайса Хөсәйенов, филология фәндәре докторы Әхмәт Сөләймәнов, билдәле шағир Әсхәл Әхмәт-Хужа, "Ағиҙел" журналының яуаплы сәркәтибе, филология фәндәре кандидаты Гөлназ Ҡотоева ҡатнашты. Амангилде, Үтәгән, Әбделғәзе ауылдары ҡатынҡыҙҙарының ҡул эштәренән күҙҙең яуын алырҙай күргәҙмә ойошторолғайны, милли кейемдәге апайҙар аш- ыуҙарынан ауыҙ иттерҙе, ҡымыҙ-буҙалары менән ыйланы.

Конференцияла оло ғалимыбыҙ Ғайса Хөсәйенов сәсән ижадын халыҡҡа ҡайтарыуҙа үҙенең дә өлөшө ҙур булыуы тура ында өйләне. 1974 йылда яҙыусы Әхтәм Ихсан ғалимға Шафиҡ сәсәндең ғәрәп хәрефтәре менән яҙылған бер күсермә дәфтәрен бирә. Ғ. Хөсәйенов 1998 йылда "Ватандаш" журналында сәсән тура ында мәҡәлә баҫтыра. Әхмәт Сөләймәнов Шафиҡ мулла шиғырҙарындағы ер мәсьәлә енең, халҡын мәғрифәткә эйә булырға саҡырыуының бөгөн дә актуаль булыуын билдәләне.

Шафиҡ Тамъяниҙың ейәндәре, бүләләре өсөн был сара тотош шәжәрә байрамы төҫөн алды. Уның икенсе ҡатынынан тыуған ҡыҙы Нәфисәнең сығышы әр кемде тулҡынландырҙы. Ата ы вафат булып киткәндә уға ни бары өс кенә йәш була. Шафиҡ Әминевтың ейәне Шамил Әминев йыйылыусыларҙы олата ының шәжәрә е менән таныштырҙы. Иң оло әм иң кесе Әминевты билдәләп, уларға иҫтәлекле бүләктәр тапшырҙылар. Шафиҡ мулланың бүлә е Салауат Әминев олата ына арнап яҙған шиғырын уҡыны. Шафиҡ Әминев-Тамъяниҙың "Оҫҡон" нәшриәт-комплексында баҫылып, ошо иҫтәлекле көндө ырыуҙаштарына таратылған шиғырҙар тупланма ын әҙерләүгә лә ул тос өлөш индергән. Был китапта сәсәндең барлығы 41 шиғыры урын алған.

***

Халыҡ яҙыусы ы Зәйнәб Биишеваның тыуыуына 101 йыл тулыуға арнап ҙур әҙәби кисә уҙғарылды. Унда профессор Роберт Байымов инеш үҙ әйтте, саҡырылған ҡунаҡтар: З.Биишева исемендәге “Китап” нәшриәте директоры Зөфәр Тимербулатов, БР Яҙыусылар союзы идара ы рәйесе урынбаҫары, шағир Риф Тойғонов, С.Юлаев исемендәге дәүләт премия ы лауреаттары Ҡәҙим Аралбай менән Ирек Кинйәбулатов сығыш я аны.

***

Актер, режиссер, драматург, СССР-ҙың әм БАССР-ҙың халыҡ артисы Арыҫлан Мөбәрәковтың тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған хәтер кисә е М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрында ағышлы әм тантаналы уҙҙы.

Ленинды башҡортса өйләштергән, Салауатты ғорур ынландырған, Шекспирҙың Отелло ын, Пушкиндың Борис Годуновын иҫ китмәле уйнаған бөйөк шәхестең вариҫтары юбилей кисә ендә, гүйә, театр биография ын, ил яҙмышын сағылдырҙы, уйландырҙы әм оҡландырҙы. Сценарий авторы – С. Сурина, алып барыусылар – Х. Үтәшев менән Ә. Абдрахманов.

***

Стәрлетамаҡ ҡала ында «Туған тел, яҙма әҙәбиәт әм мәҙәниәт көнө» сиктәрендә республика форумы үтте. Башҡортостандың төрлө район-ҡалаларынан килгән уҡыусылар әм уҡытыусылар тел әм мәҙәниәт менән бәйле мәсьәләләрҙе ыңғай хәл итеү юлдарын барланы. Ете секция эшләне: төрлө проблемаларға арналыуына ҡарамаҫтан, маҡсаттары бер ине – туған телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе аҡлау, артабан үҫтереү .б. Йыйын

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 191



тәжрибә, фекер уртаҡлашыу, аралашыу йә әтенән дә ә әмиәтле булды.

***

Үткән йылдың 20—22 декабрендә Төркиәнең Анкара ҡала ында төрки телле әҙәбиәт журналдарының II конгресы үтте. Евразия яҙыусылар берлеге менән "Ҡәрҙәш ҡәләмдәр" журналы туплаған был мәртәбәле йыйында "Ағиҙел" журналының яуаплы сәркәтибе Гөлназ Ҡотоева ҡатнашып, конгресты асыу тантана ында тәбрикләү үҙе менән, пленар ултырышта башҡорт баҫма ы тура ында төрөк телендә сығыш я аны.

Былтыр үткәрелгән конгреста иғлан ителгән бәйге өҙөмтәле булды: башҡорт телле яҙыусылар ара ында үткәрелгән конкурста Гөлсирә Ғайсарова-Ғиззәтуллина еңеүсе тип танылғайны, уның хикәйә е төрөк теленә тәржемә ителде әм икенсе этапта IV урын менән билдәләнде. "Ҡәрҙәш ҡәләмдәр" журналында үткән йылда Мәүлит Ямалетдиндың шиғри шәлкеме, Ай ылыу Йәғәфәрованың хикәйә е баҫылып сығыуы ла ижади бәйләнештәрҙең өҙөмтәле булыуы тура ында өйләй.

***

Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия ы лауреаты Рәшит Солтангәрәевтың арабыҙҙан китеүенә — туғыҙынсы йыл... Мәш үр әҙиптең иҫтәлеген мәңгеләштереү, хикәйә жанрында яңы исемдәр асыу маҡсатында “Йәшлек” гәзите БР Яҙыусылар союзы әм Көйөргәҙе районы хакимиәте менән берлектә Рәшит Солтангәрәев исемендәге әҙәби конкурс иғлан иткәйне. Ике йыл дауамында барған ижад бәйге ендә йөҙҙәрсә авторҙарҙың — бығаса баҫылмаған әҫәрҙәре ҡабул ителде. Ошо ваҡыт эсендә барлығы 53 хикәйә донъя күрҙе, уларға тема төрлөлөгө, телстиль баҙыҡлығы хас.

Хаят Йосопова (“Зөлҡәғиҙә юлы”), Азамат Юлдашбаев (“Зек Зәкирйән”), Илдар Исламов (“Бүре хәҡиҡәте”), Кәрим Ҡара (“Ҡыҙҙар кейә ҡыҙыл күлдәк”), Рузидә Үтәшева (“Мүклек”), Рәмилә Торомтаева (“Өмөт саткы ы”), Иҙрис Ноғоманов (“Аҡыллы аҡыл ыҙҙар”) Рәшит Солтангәрәев исемендәге конкурс лауреаттары тип табылды — әммә енә лә шө рәтнамә бирелде. Бынан тыш, Рузидә Үтәшева “Ағиҙел” журналының махсус призына лайыҡ булды. 3-сө урынды Мөнир Ҡунафин (“Ҡартайған ҡояш аҫтында”) менән Хәйҙәр Тапаҡов (“Мө өр”) бүлеште. 2-се урынды алыусы әм ноутбук хужа ы тип Мәҙинә Йәғәфәрова (“Зилә-Зиләйлүк”) табылды. Хикәйә конкурсының 1-се дәрәжә дипломын и ә Мөҙәрис Багаев (“Ете төш”) алды, уға мең доллар премияны “Йәшлек”тең баш мөхәррире А. Дәүләтбәков тапшырҙы.

***

«Бельские просторы» журналы үҙенең ун йыллыҡ юбилейын билдәләне. Йылъяҙма ының йәшлегенә ҡарамаҫтан, баҫманың киң йәмәғәтселек, күп милләт уҡыусылары ара ында абруйы үҫә. Башҡортостан Президентының мәғлүмәт сәйәсәте буйынса дәүләт советнигы Гөлдәр Камалова, Башҡортостан Хөкүмәтенең мәғлүмәт сәйәсәте әм киң мәғлүмәт саралары менән эш буйынса бүлек мөдире Азамат Ғәлин, Башҡортостан Хөкүмәте ҡарамағындағы Матбуғат, нәшриәт әм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ начальнигы урынбаҫары Артур Иҙелбаев, Мәҙәниәт әм милли сәйәсәт министрлығының бүлек етәксе е Шәфҡәт Тутаев редакция хеҙмәткәрҙәренә Президентыбыҙ Мортаза Рәхимовтың тәбрик үҙен уҡып ишеттерҙе, Маҡтау ҡағыҙҙары тапшырҙы, байрамдары менән ҡотланы.

***

Уҙған йылдың декабрендә “Ағиҙел” журналының баш мөхәррире Әмир Әминев, хеҙмәткәрҙәр Сабир Шәрипов әм Харис Сәғитов Хәйбулла районына сәфәр ҡылды. Әҙиптәрҙе район хакимиәтендә, Аҡъяр өнәрселек училище ында, Мәмбәт, Байғусҡар мәҙәниәт йорттарында, Иләҫ мәктәбендә йылы ҡаршыланылар. Ҡайҙа ла әҙәбиәт, матбуғат мәсьәләләре уртаға алынды, кисәләр барышына урындағы үҙешмәкәр әм башлап яҙыусылар ҡушылды.

... Журналға “Альтернатив подписка-2009” кампания ын ойоштороу буйынса “Ағиҙел” редакция ынан Рәмил Йәнбәк менән Сабир Шәрипов Балаҡатай, Ҡыйғы, Мәсетле, Дыуан, Салауат райондарына барҙы. Бер нисә мәҙәниәт әм уҡыу йортонда әҙәби-музыкаль осрашыуҙар уҙғарылды, шиғырҙар әм хикәйәләр уҡылды, иң мө име, байтаҡ кеше “Ағиҙел” журналына яҙылды.

Agidel 1:Agidel 1.qxd 13.04.2009 23:10 Page 192

# 2009 йылғы юбилярҙар

## ҒИНУАР

| | | |
|---|---|---|
| **Марсель Сәлимов** | 3 ғинуар | 60 йәш |
| **Кәүсәриә Шафиҡова** | 3 ғинуар | 60 йәш |
| **Ризаитдин Фәхретдинов** | 4 ғинуар | 150 йыл |
| **Әмир Чаныш** | 15 ғинуар | 100 йыл |
| **Ғәли Ибра имов** | 16 ғинуар | 90 йыл |
| **Баязит Бикбай** | 19 ғинуар | 100 йыл |

## ФЕВРАЛЬ

| | | |
|---|---|---|
| **Зөфәр Вәлит** | 1 февраль | 60 йәш |
| **Муса Сиражи** | 1 февраль | 70 йәш |
| **Рәшит Ниғмәти** | 9 февраль | 100 йыл |
| **Камил Фазлый** | 15 февраль | 60 йәш |
| **Нурислам Шәйхулов** | 16 февраль | 80 йыл |

## МАРТ

| | | |
|---|---|---|
| **Әлфиә Әсәҙуллина** | 2 март | 50 йәш |
| **Салауат Галин** | 3 март | 75 йәш |
| **Мөхәммәт Илбаев** | 13 март | 70 йәш |
| **Әхмәт Сөләймәнов** | 15 март | 70 йәш |
| **Василий Перчаткин** | 28 март | 90 йәш |

## АПРЕЛЬ

| | | |
|---|---|---|
| **Вил Ғүмәров** | 2 апрель | 60 йыл |
| **Ғәлим Хисамов** | 25 апрель | 60 йәш |

## МАЙ

| | | |
|---|---|---|
| **Мөслим Марат** | 10 май | 100 йыл |
| **Георгий Кацерик** | 12 май | 75 йәш |
| **Рәмзилә Хисаметдинова** | 28 май | 60 йыл |

## ИЮНЬ

| | | |
|---|---|---|
| **Фәрит Хәсәнов** | 7 июнь | 50 йәш |

## АВГУСТ

| | | |
|---|---|---|
| **Булат Рафиҡов** | 4 август | 75 йыл |
| **Марис Нәзиров** | 4 август | 60 йәш |
| **Әхиәр Хәким** | 23 август | 80 йыл |
| **Леонид Лушников** | 26 август | 80 йәш |

## СЕНТЯБРЬ

| | | |
|---|---|---|
| **Рәшит За иҙуллин** | 3 сентябрь | 70 йәш |
| **Риф Мифтахов** | 17 сентябрь | 70 йәш |
| **Ризван Хажиев** | 30 сентябрь | 70 йәш |

## ОКТЯБРЬ

| | | |
|---|---|---|
| **Ғәзим Шафиҡов** | 1 октябрь | 70 йәш |
| **Рәйес Түләк** | 14 октябрь | 50 йыл |
| **Хәкимйән Зарипов** | 18 октябрь | 80 йәш |
| **Фәрит Суфияров** | 20 октябрь | 70 йәш |
| **Мостай Кәрим** | 20 октябрь | 90 йыл |
| **Самат Ғәбиҙуллин** | 30 октябрь | 70 йыл |

## ДЕКАБРЬ

| | | |
|---|---|---|
| **Фәнил Әсәнов** | 30 декабрь | 80 йыл |

***

| | | |
|---|---|---|
| **Сабир Кинйәкәй** | | 90 йыл |
| **Бәҙрүш Моҡамай** | | 100 йыл |
| **Баязит Дим** | | 100 йыл |